Сочинения

том
4

КИТАП
УФА • 2013

Әҫәрҙәр

4
ТОМ

КИТАП
ӨФӨ • 2013

УДК 821.512.141-1
ББК 84 (Рос=Баш)-5
К 97

Мөхәрририәт:

И. М. Кәримов, М. Х. Нәзерголов,
Ф. Х. Хисамитдинова, Г. Б. Хөсәйенов,
З. Ш. Ҡарабаева

Төҙөүселәре:

И. М. Кәримов, Ф. С. Фазылова

Кәрим Мостай

К 97 Әҫәрҙәр. IV том: драмалар, повестар, хикәйәләр, әкиәттәр / Мостай Кәрим. — Өфө: Китап, 2013. — 456 бит.

ISBN 978-5-295-05885-1 (т. 4)
ISBN 978-5-295-04902-6

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Әҫәрҙәр»енең IV томына авторҙың «Диктаторға ат бирегеҙ!», «Йәйәүле Мәхмүт», «Киске табын» пьесалары, балалар һәм олкәндәр өсөн ижад ителгән әҫәрҙәре тупланды.

УДК 821.512.141-1
ББК 84 (Рос=Баш)-5

ТП-112/13

ISBN 978-5-295-05885-1 (т. 4)
ISBN 978-5-295-04902-6

© Кәримов И. М., Кәримова Ә. М., 2013
© Кәримов И. М., Фазылова Ф. С., төҙөү, 2013
© БР-зың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, 2013



Драмалар
1980-1992

ДИКТАТОРҒА АТ БИРЕГЕҘ!

Политик памфлет, ике бүлектә

ҠАТНАШАЛАР:

Диктатор үҙе
Уның портреты
Би-маза — матурлыҡ һәм әҙәп министры
Мөртәт-ша — илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры
Художник — бөйөк түгел, бойоҡ
Ризыҡсы
Урам һепереүсе
Ту-тыя — попугай өйрәтеүсе
Һыңар күҙ йолҡош
Ҡарт йолҡош
Йәш йолҡош
Тән һаҡсыһы
Убырлы ҡарсыҡ
Хужа попугай
Еҙ томшоҡ } йырсы попугайҙар
Алтын тәпәй }

ИНЕШ

Сәхнәгә Диктатор сыға. Ул йыуантыҡ, тәпәш, башында суҡлы фәс. Тар салбарлы. Ике ботинкаһында ла — ҙур шпорҙар.

Диктатор. Был утрауҙа мин һәм башҡалар йәшәй. Мин — хаким. Диктатор. Башҡалар — теләһә кемдәр. Мин тыуғанда ҡып-ҡыҙыл булып тыуҙым. Тыуғас, ҡыҙыл һүҙҙәр һөйләнем. Бынынһын, хурлыҡҡа ҡаршы, үҙем дә хәтерләйем. Донъяны бутап үҙгәртә торғас, төҫөм үҙгәрҙе. Хәҙер мин ҡыҙыл да түгел, аҡ та түгел, ҡара ла түгел. Хәҙер мин бөтә төҫтәрҙән дә өҫтөнмөн. Хәҙер мин —

(һуҡ бармағын һауаға сөйә) Диктатор. Моратыма ирештем. Утрауға менеп атландым. Хәҙер атҡа атланып, һәйкәл булаһым ғына ҡалды. Тик аттың йыуашын һайларға тура килер — мәңге тик торорлоғон. Был утрауҙа мин һәм башҡалар йәшәй. *(Фәсен һалып, таҡыр башын һыйпап ала.)* Һы! Сығып торам хәҙергә. Йәйәүләп кенә... «Һәм башҡалар»ға һүҙ бирергә кәрәк. Демократия! *(Юғала.)*

Икенсе яҡтан Би-маза сыға. Башына ҡыҙыл яулыҡ бәйләгән, аҡ кофта, киң балаҡлы салбар кейгән. Аяғында — ағас ҡата. Үҙе менән йыйылмалы ҡоролмалы трибуна йөрөтә. Кәрәк саҡта ҡороп ебәрә.

Би-маза. Мин — матурлыҡ һәм әҙәп министры Бимаза. Үҙем хаҡында һөйләргә яратмайым. Яратмаһам да — һөйләйем. *(Трибунаһын ҡороп ала.)* Һөйләйем! Сөнки ил талап итә, халҡым һорай, әҙәп ҡуша. Яратмаһам да — һөйләйем, сөнки һеҙ яратаһығыҙ, ил ярата, халҡым ярата, үҙем яратам, бигерәк тә үҙем яратам. Һеҙҙең нимәгеҙ бар, меҫкендәр, бисаралар, бахырҙар?! Минең халҡым бар! Мин үҙем бар! Берәүҙәр үҙ дәрәжәләренә түбәндән, әйтәйек һаҫыҡ һалдат казармаһынан, үрмәләп менә. *(Бик матур итеп Диктатор яғына ҡул ишараһы яһай.)* Икенселәр — юғарынан төшә. Бына мин үҙем... Кем инем мин? Сибәр туташтар йортоноң аҫыл сәскәһе инем. Их! *(Бармаҡ шартлата.)* Ни көнгә ҡалдым?! Матурлыҡ һәм әҙәп министры, имеш! Бынау ҡыҫыр тинтәктең *(матур ишара яһай)* ҡыҫыр һүҙҙәренә ышанып, үҙ аяғым менән ожмахтан сығып киттем. Ожмах-тан!.. Бөтә утрауҙың һөйөклө ҡатыны инем, бер йүнһеҙҙең һөйәркәһенә тороп ҡалдым. *(Оҙаҡ патетик пауза. Трибунаға һуға.)* Етте, Бимаза! Бер сыҡҡанды ожмахҡа кире индермәйҙәр. Үҙеңдең меҫкен вазифаңды һин бөйөк итеп башҡарырға тейешһең хәҙер. Йәшәһен матурлыҡ һәм әҙәп! *(Юҡ була.)*

Арттан, аҡһай-туҡһай, илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры Мөртәт-ша килеп сыға. Ул арыҡ, оҙон буйлы, Диктаторға оҡшатыбыраҡ кейенгән, ләкин фәсе суҡһыҙ, шпоры — бер генә ботинкаһында. Салбары тағы ла тарыраҡ. Ҡулында — ике йәпле таяҡ.

Мөртәт-ша. Мин — илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры Мөртәт-ша. Отоп ҡалығыҙ: Мөртәт-ша! Тыумышым менән мин бүтән утрауҙыҡымын. Үҙ утрауымдың яманатын һатып, мөртәтлек ҡылған өсөн, мине илдән

һөрҙөләр. Границала үҙ исемемде тартып алып, Мөртәтша тигән ҡушамат тағып ебәрҙеләр. Шунан бирле, договор буйынса ялланып, бында илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры булып эшләйем. Был утрауҙың иң боронғо, иң затлы, иң ғилемле, иң... иң... иң... икәнен иҫбат итеп, Диктаторҙы шаҡ ҡатырҙым, башын әйләндерҙем, һушын алдым. «Әле, — тинем, — кешелек донъяһы тәгәрмәс уйлап сығармаҫ борон уҡ, һеҙҙең боронғо бабаларығыҙ, бөтәһен дә алдан күреп, тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайната башлағандар, — тинем. — Ниндәй зиһен, ниндәй зирәклек! — тинем. — Һеҙҙең бөйөк аҡылығыҙ бына ҡайҙан башлана ул», — тинем. Уның өҫтәүенә — таяҡ! Диктаторҙың сапанындағы бөрсәле туҙанды ҡаға торған ике йәпле ошо тал таяҡтың төп сығышын, ысын тамырын эҙләп таптым. Баҡһаң, ул бынан өс мең өс йөҙ утыҙ өс йыл әүәл донъяның ҡотон алып торған Фу-фу династияһының ханы Фин-фуҙың аҫыл сапанындағы алтын туҙанды ҡаҡҡан таяҡ икән. Шуны иҫбат иттем. «Хәҙер һеҙҙең туҙанығыҙҙы ҡаға, — тинем, — һеҙҙең ҡеүәтегеҙ, ҡөҙрәтегеҙ, дәрәжәгеҙ ана ҡай замандан, ана ниндәй заттан килә!» — тинем. Диктаторҙың ауыҙы ҡолаҡ артына етте: «Һаҡлағыҙ таяҡты!» — тине ул. «Һаҡларбыҙ!» — тинем мин. Миңә текләп ҡарап торҙо ла: «Һин кем?» — тине. «Ватанһыҙ пәйғәмбәр», — тинем. «Бынан ары һинең Ватаның — мин булырмын... Мин йәнәптәренең илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры һин булырһың, — тине. — Юғиһә, берәүгә лә ышаныс ҡалманы: ил тулы нигилист, тирә-яҡта вузиянистар мыжғып тора», — тине лә илап ебәрҙе. Мин башынан һыйпағас ҡына тынысланды. «Йә, нисек итәбеҙ, минең утрауҙа гражданлыҡ ҡабул ҡылаһыңмы, әллә договор буйынса ялланаһыңмы?» — ти. Миңә ни, граждан булыуға ҡарағанда, ялсы булыу мең артыҡ. Ашау — байҙан, үлем — Хоҙайҙан. «Ялланам!» — тинем. Ялландым. Бөтә маҡсаттарыма ирештем. Тик берәү генә ҡалды. Попугайҙар дуэты ойоштороп, «Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ уяна...»ны йырлатыу — иң ҙур хыялым минең. Моратыма ирешәм йә һәләк булам. Боронғо, ләкин, беҙгә ҡарағанда, имсәк балаһы ғына булған римляндар әйтмешләй, «тудуторо моторо» — өсөнсө юл юҡ. *(Моңһоуланып.)* Еңһәм, Диктатор, бәлки, миңә әҙәмсә исем бирер ине...

Төрлө яктан төрлө кешеләр сығып, үҙҙәре хаҡында нимәлер әйтмәксе була.

Ризыҡсы ҡатын. Мин — ризыҡсы, туҡландырыусы... Мин...

Мөртәт-ша ҡул һелтәй, Ризыҡсы юҡ була. Һепертке тотоп, Урам һепереүсе инә.

Урам һепереүсе. Мин — донъяны сүптән таҙартыусы. Мин...

Мөртәт-ша ҡул һелтәй. Теге юҡ була. Попугайҙар өйрәтеүсе Ту-тыя әйләнә-тулғана килеп сыға. Ул тутыйғоштан да былай биҙәкле кейенгән. Ҡулында — ситлек. Ситлектә — ике попугай.

Ту-тыя *(«Тореадор» көйөн көйләп)*. Әллә-лә, трәл-лә-лә, трәллә-лә, әллә-лә... Мин — тутыйғош өйрәтеүсе Ту-тыя. Саҡырттығыҙмы?

Мөртәт-ша. Саҡыртасаҡмын.

Ҡул һелтәй. Ту-тыя юҡ була. Оҙон танаулы, оҙон сәсле арыҡ Художник сыға.

Художник. Мин — азат художник... Телемә нимә килә, шуны әйтә алам. Мин! Мин!..

Мөртәт-ша. Алдашма, лығырлыҡ! Художник азат булмай ул.

Ҡул һелтәй. Художник юҡ була. Нимәлер әйтергә теләп, тағы бер нисә кеше сығырға ынтыла, өндәшеп өлгөрмәйҙәр, Мөртәт-ша ҡул һелтәй, тегеләр юҡ була.

Мөртәт-ша. Демократия уйыны ошоноң менән тамам... Саҡырғанда ғына килегеҙ, һорағанда ғына яуап ҡайтарығыҙ...

Һепертке тотоп, Убырлы ҡарсыҡ инә. Мөртәт-ша, ҡурҡып, һелтәнә.

Убырлы ҡарсыҡ. Һин кемгә шулай ҡул күтәрмәксе итәһең? Убырлы ҡарсыҡҡамы? Мөртәт-ша-ша-ша!!

Мөртәт-ша артҡа сигенеп сығып китә.
Ут һүнә.

БЕРЕНСЕ БУЛЕК

Диңгеҙ утрауы. Диктаторҙың ҡунаҡ бүлмәһе. Бер стенаһы — инжир япраҡтары, икенсеһе ҡамыш менән көпләнгән. Тап уртала түшәмгә ҙур ситлек аҫылған. Ситлектә — попугай. Мөйөштә — кескәй генә телевизор. Телевизорға ҡапланып уҡ тиерлек, түмәр өҫтөндә Диктатор ултыра. Диңгеҙ яғына ҡараған тәҙрә эргәһендә Би-маза баҫып тора. Ул үҙе нимәлер бәйләй, үҙе тәмәке тарта.

Диктатор. Һы... Төп башына ултыртты Убырлы ҡарсыҡ *(үҙе ултырған түмәрен һәрмәп ҡарай)*. Мин уға утрауыбыҙҙағы бөтә демагогия-демократияны һеперә ташлаған бынамын тигән һепертке бирҙем... Төтәтмә әле шул тиклем!

Би-маза *(әйләнеп ҡарамай ғына)*. Еҫкәмә.

Диктатор. Ана ҡарағыҙ *(ишара яһай)*, бер генә ағыулы сәс... сәс... сәскә лә ҡалманы утрауыбыҙҙа. Иншалла, тап-таҡыр. *(Фәсен һалып, тап-таҡыр башын һыйпай.)* Ә ул миңә нимә һондо? Әрйә. Йәнең ни теләй, шуны күрһәтә, имеш. Күрһәтә... Йәнем үҙемде күрергә теләй, бер үҙемде генә...

Би-маза. Ә мине?

Диктатор. Һинеме? Һине башҡа ерҙә... ҡараңғыла, күҙ күрмәгәндә генә... Һы...

Би-маза *(борҡолдатып төтөн сығара)*. Әшәке.

Диктатор *(иғтибар менән)*. Шәүлә лә шәүлә. Әйтерһең, мин шәүлә күрмәгән. Былай ҙа тирә-яғым туптулы шәүлә.

Би-маза. Мин дәме?

Диктатор. Юҡ. Һин быяла кеүекһең. Тәмәкенән ыҫланып бөтмәһәң, үтә күренер инең.

Би-маза. Тинтәк.

Диктатор *(иғтибар итмәй)*. Ә һепертке шәп ине. Бер нисә һелтәүҙә йүнһеҙ закондарҙы, хоҡуҡтарҙы, уставтарҙы, хатта конституцияның үҙен һеперә осорҙо. Оҫта ҡулда саҡта. Хәҙер утрау — минең кеҫәлә.

Би-маза *(әйләнеп ҡарамай)*. Кеҫәң тар.

Диктатор *(һикереп тороп, кеҫәләрен ҡапшай)*. Һы! Бынығына тағы бер утрау һыйырлыҡ әле. *(Уйға ҡала.)* Ысынлап та, ниңә минең был кеҫә буш йөрөргә тейеш әле? Ниңә? *(Стеналағы картаға килеп төбәлә. Ҡарай. Ҡулы менән картаны уртаға ярыу ишараһы яһай, ярғанын алып кеҫәһенә һала.)* Идея! Орлоҡ шытты. Хәрби сер! Серҙе асыусыға — үлем язаһы!

Мөртәт-ша инә.

Мөртәт-ша. Оҙон танаулы бер әҙәм аҡтығы, Диктатор йәнәптәре...

Диктатор. Танауы — танау, ә үҙе кем?

Мөртәт-ша. Бөйөк художникмын, ти.

Диктатор. Тереме?

Мөртәт-ша. Әлегә тере, буғай.

Диктатор. Чепуха-ха-ха! Художниктың тереһе бөйөк булмай. Ғөмүмән, тереләр бөйөк булмай, минән башҡа... Ҡолағыңа киртеп ҡуй шуны.

Мөртәт-ша *(ҡолағын семтеп ала)*. Кирттем.

Диктатор. Ниндәй художник тиһең?

Мөртәт-ша *(төшөнөп ала)*. Бойоҡ художник. Бойоҡ. Бойоҡ, йәғни... Йәғни... Бына былдай... *(Өмөтһөҙ, бойоҡ киәфәткә инеп күрһәтә.)*

Диктатор. Дөрөҫ. Уның, бөйөклөгөнә ҡарағанда, бойоҡлоғо беҙгә нығыраҡ оҡшай. Ниңә килгән?

Мөртәт-ша. Һеҙ Диктатор хәҙрәттәренең иң затлы мундирын төшөрөп килтергән.

Диктатор. Мундир? Натурмутмы ни?

Би-маза. Наҙан! Натурмут түгел, натюрморт.

Диктатор. Һы! Ҡоро мундир тиһең икән.

Мөртәт-ша. Ҡоро мундир ғына түгел, мундир эсендә — Диктатор йәнәптәре, һеҙ үҙегеҙ ҙә бар.

Диктатор. Улайһа, инһен.

Попугай ҡабатлай. Инһен! Инһен!..

Инеш картинала күренгән Художник инә. Ул рамға ҡуйылған ҙур портрет күтәргән. Портретҡа сепрәк көпләнгән. Һөйәп ҡуя.

Диктатор *(текләп ҡарап тора)*. Был тиклем оҙон танау ниңә кәрәк һиңә?

Художник. Элек кәрәкмәй ине лә, хәҙер кәрәк.

Диктатор *(ысынлығын белеү өсөн, танауҙы услап һелкетеп ҡарай)*. Нығ ултыртылған. Үҙеңдеке икән. Юғиһә, бында ҡайһыһы ҙур аҡыллы, ҡайһыһы ҙур йөрәкле күренеп, мине алдарға маташып ята. Аҡылды ҡапшап тикшереп булмай. Һинең танау, исмаһам, ҡулға эләгә. *(Тағы тотоп һелкетә.)* Шулай ҙа был саҡлы танауҙың ни хәжәте бар?

Художник. Ике ҡулым өлгөрмәгәндә, ул миңә яһаша. Төҫтәрҙе бик һәйбәт төҫмөрләй.

Диктатор. Һы... Әммә... Әй, матурлыҡ һәм әҙәп министры! Беҙҙең утрауҙағы сибәрлек нормаһына һыя-

мы был танау? *(Үҙе борғаланып ҡала, йәнәһе, ул матурлыҡ идеалы.)*

Би-маза *(Художникка мауығып ҡарай)*. Һыя. Танау өсөн әлегә норма ҡуйыш өлгөрмәгәнбеҙ. Һыя. Был танау иң юғары өлгө, эталон буласаҡ.

Диктатор. Бәхетең. Юғиһә, ҡыҫҡартырға тура килер ине.

Художник *(ҡыйыуланып)*. О, бөйөктәрҙән-бөйөк Диктатор йәнәптәре! Һеҙҙең өсөн танауым да, башым да йәл түгел, тик башһыҙ ҡалһам, һеҙҙәрҙең бөйөк һындарығыҙ сағылған гүзәл әҫәрҙәремде генә ижад итә алмам. Шуныһы ғына аяныс буласаҡ...

Диктатор *(күңеле тула)*. Ниндәй тоғролоҡ, ниндәй ихласлыҡ... Ишетәһегеҙме?

Мөртәт-ша. Ишетәбеҙ ҙә, күрәбеҙ ҙә, Диктатор йәнәптәре, һеҙ өйрәткәнсә, беҙҙең тәрбиә, илһөйәрлек тәрбиәһе.

Би-маза. Ялағай.

Мөртәт-ша. Эйе, мин — ялағай. Танмайым: ялағай мин. Тик ике зат алдында ялағаймын: Диктаторыбыҙ алдында, йәнә Хоҙай алдында. Ошо ялағайлығым менән маҡтанам мин, ғорурланам мин. *(Башын артҡа сөйә.)*

Диктатор *(саҡ иламай)*. Рәхмәт, тоғро хеҙмәтсем. Һиндәй таянысыбыҙ бар саҡта, беҙ мәңге ғәҙел хакимлыҡ итәсәкбеҙ.

Художник. Мәңгенән дә мәңгерәк. *(Портретты төргән сепрәкте асып ырғыта. Портретта иҫ киткес һылыу, аҡыллы ҡарашлы йөҙ. Суҡлы фәс менән шпорҙары ғына – Диктаторҙыҡы.)* Бына, Диктатор йәнәптәре, һеҙҙең үлемһеҙ һынығыҙ.

Диктатор яҡын килеп ҡарап тора. Башта риза ла кеүек түгел. Һәрмәп сыға. Ҡулы фәс суғына тейә, шпорҙарына барып етә.

Диктатор *(үҙенә)*. Минең фәс. Шпорҙар ҙа минеке... *(Ҡапыл.)* Ә һүрәттең мәңгелек икәнен нимә менән иҫбат итә алаһың?

Художник. Уны иҫбат итеп тораһы ла юҡ. Ана күрәһегеҙме, мундирығыҙға ниндәй төймә тағылған? Бынан өс мең өс йөҙ утыҙ өс йыл әүәл донъя тетрәтеп торған Фин-фу хандың сапан төймәһе бит. Әгәр ул төймә әлегә тиклем өс мең өс йөҙ утыҙ өс йыл йәшәгән икән, бынан

ары ла йәшәйәсәк. Һеҙҙең мундирҙа мәңгелек төймә. Һеҙ — мәңгелек!

Диктатор *(Мөртәт-шаға)*. Фәстермәйме? Төймә ысынлап та хандыҡымы?

Мөртәт-ша. Хандыҡы! Фин-фу хан тәү тапҡыр тәхеткә менгәндә, сапанында тап ошо төймәләр булған.

Диктатор *(Художникка)*. Төймәне ныҡ таҡтыңмы?

Художник. Бик ныҡ таҡтым.

Диктатор. Улайһа, мәслихәт.

Художник. Күҙ тултырып ҡарағыҙ мәңгелек һүрәтегеҙгә. Ҡарағыҙ! Ниндәй гүзәллек! Ниндәй камиллыҡ! Ниндәй көс!

Мөртәт-ша. Маңлайығыҙ — философ маңлайы, ҡарашығыҙ — пәйғәмбәр ҡарашы, танауығыҙ — полководец танауы. Ҡылған бөтә батырлыҡтарығыҙ йөҙөгөҙгә яҙылған. Күпме ғаҡыл, күпме зирәклек, күпме ғәйрәт унда!

Художник. Сәстәрегеҙ һуң, сәстәрегеҙ! Мөхәббәт уҡтары атыусы Амур бөҙрәләре бит. Алтын бөҙрәләр! Ирендәрегеҙҙе, ҡолаҡтарығыҙҙы, бармаҡтарығыҙҙы тасуирларға телем ғәрип — һүҙҙәр таба алмай.

Мөртәт-ша. Юҡ ундай һүҙҙәр. Сөнки донъяла бүтәнсә ундай ирендәр ҙә, ундай ҡолаҡтар ҙа, ундай бармаҡтар ҙа юҡ!

Портрет, рамканан ысҡынып, башын алға һона.

Портрет. Уф! Рәхәтлектәренә сыҙап булмай. Хатта буяуым ирей башланы.

Художник уның башын кире рам эсенә тығып ҡуя. Теге тағы башын сығара. Художник тегенең башына төртә.

Художник. Шашма!

Портрет. Ниңә төрткөләшәһең? Кемгә ҡул яҡҡаныңды онотма, буяусы! Һеҙ минең алда бейеп торорға тейешһегеҙ, йыйын әтрәғәләм, суп-сар, бисара!

Диктатор. Кем суп-сар?

Портрет *(берәм-берәм ымлап күрһәтә)*. Һин дә, һин дә, һин дә, анау бисә лә! Әй лә — ханым да! *(Би-мазаға әйләнеп баш эйә, йылмая.)*

Диктатор. Тимәк, мин дә?!

Портрет. Иң тәүҙә — һин! Күҙеңде асыбыраҡ ҡара: һин кем дә мин кем?!

Диктатор. Мин кем?

Портрет. Һин — әҙәм аҡтығы, бисара, өтөк! Ярты ғүмерең казармала һалдат әбрәкәйе таҙартып үтте. Унан һуң, урамға сығып, боғаҙ ярып, ҡыҙыл һүҙҙәр ҡысҡырҙың. Таш тамаҡ! Ҡырҡ төҫкә керҙең. Алданың, һаттың, һатып алдың, һуйҙың, тәрилкә тоттоң... «Ҡыҙыл ҡояш!..»

Диктатор. Мин ниндәй булһам да — үҙем, ә һин — минең күләгәм, шәүләм. Һин — уйҙырма. Һин — ялған! Һин—самозванец! Һине тиҙәктән хәлүә итеп яһағандар.

Портрет. Тиҙәк кем һуң? Кем тиҙәге? Тиҙәге — һин. Мине бит һинән яһағандар.

Диктатор. Һы! *(Фәсен һалып, башын һыйпай.)* Уныһы шулай... Рас... *(Ҡапыл.)* Рас түгел! Мин — Диктатор! Ар-рес-с-то...

Попугай. Ар-р-ресто-овать!

Портрет *(аяҡ тибә, шпорҙары зыңлап китә)*. Молчать, йолҡош! Һин минең мундирымдағы бөрсәгә лә тормайһың, таш баш! Маңлайым минең — философ маңлайы, ҡарашым — пәйғәмбәр ҡарашы, танауым — полководец танауы, йөҙөмә — ҡылған бөтә батырлыҡтарым яҙылған. Ә һинең йөҙөңә бары ахмаҡлығың, наҙанлығың, ҡурҡаҡлығың ғына яҙылған. Фәсең аҫтында бөртөк сәсең юҡ бит, ҡырсын, таҙ!

Диктатор *(шашып ҡала)*. Аҫырға! Юҡ, аҫмаҫҡа! Киҫергә! Тыйырға! Яндырырға!

Портрет. Мин һиңә ҡуҡыш күрһәтер инем дә, ҡулды ғына ысҡындырып булмай.

Мөртәт-ша менән Художниктың ҡоттары оса. Улар нимә эшләргә белмәй.

Художник. Әфәнделәр, йәнәптәр! Былай йәм китәрешмәгеҙ инде. Ил ағалары. Әфәнделәр! Диктатор йәнәптәре! Йыр йырлайыммы, юғиһә: «Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ уяна...»

Би-маза. Үҙҙәре талашҡан, үҙҙәре килешер әле.

Диктатор *(үпкәләп)*. Килешә буламмы, Аллам һаҡлаһын! Беренсе усаҡта уҡ янасаҡ ул. Шуның көлөнә төкөрмәһәм, төкөрөгөм ҡороһон.

Портрет. Ә мин һинең үҙеңә төкөрәм, таҙ башыңа төкөрәм — тфү, тфү, тфү! Ха-ха-ха!

Тамам башы әйләнгән Художник, әрйәһенән бумала алып, Портреттың ауыҙына буяу һөртә. Теге шымып ҡала.

Диктатор. Ха-ха-ха! Ха-ха-ха!

Художник, иҫ итмәҫтән, Диктаторҙың да ауыҙын буяп ҡуя. Ул да шыма.

Мөртәт-ша. Бөттө баш! Нимә эшләнең һин, мазила?!

Художник уның да ауыҙын буяй. Бөтөнләй ҡото осоп, ҡаушап ҡала. Ҡасып китергә уйлай, кире борола.

Би-маза *(аяҡ үрә баҫа, кире ултыра, бәйләүен дауам итә)*. Донъя бөйөк тынлыҡ минутын кисерә, хатта баштағы фекер ҡыштырлауы ишетелә. *(Маңлайын тотоп ҡарай.)* Ишетелә.

Художник. Ҡалай ҡурҡыныс.

Би-маза. Нимә?

Художник. Хакимдарҙың шымып ҡалыуы ла, фекер ҡыштырлауы ла.

Попугай. Чепуха-ха-ха!

Художник Би-мазаның башындағы ҡыҙыл яулығын һыҙырып ала ла Портреттың ауыҙына килтерә.

Художник *(балаларға әйткән кеүек)*. Диктатор йәнәптәре алдында хатаңды танып, ғәфү үтенһәң, икмәк тотоп ант итһәң, битең менән ер һеперергә әҙер булһаң, телеңде ҡайтарам.

Портрет баш ҡаға. Художник уның ауыҙын һөртә.

Портрет. О, бөйөктәрҙән бөйөк Диктатор йәнәптәре! Һеҙҙең маңлайығыҙ — философ маңлайы, ҡарашығыҙ — пәйғәмбәр ҡарашы, танауығыҙ — полководец танауы, йөҙөгөҙгә ҡылған һәм ҡыласаҡ бөтә изгелектәрегеҙ яҙылған. Ярлыҡағыҙ мин бисараны, мин йүнһеҙҙе, мин сүп-сарҙы, мин ҡандаланы...

Художник *(Диктаторға)*. Ярлыҡар булһағыҙ, һеҙҙең дә телегеҙҙе ҡайтарам.

Диктатор баш ҡаға. Художник уның ауыҙын һөртә.

Портрет. Мин хәшәрәтте... Мин дыуамалды...

Диктатор. Үҙеңде бик үк бөтөрөп тә ташлама әле... Ни тиһәң дә, һин — минең портретым бит.

Портрет. Һеҙҙе түгел, үҙемде бөтөрәм, үҙемде кәмһетәм, үҙемде язалайым. О, хаким!

Диктатор. Һы! Тәүбә иткән гонаһ эйәһенән дә сафыраҡ, гүзәлерәк, ышаныслыраҡ нәмә бармы икән был мәңгелек фани донъяла?! Ике күҙем тулы йәш минең. Әммә был ҡыҙғаныу йәштәре лә, әрнеү йәштәре лә түгел. Был — һоҡланыу һәм ғорурланыу йәштәре. Һоҡланам мин һиңә, ғорурланам мин һинең менән, минең сибәр һүрәтем, тәрән аҡыллы гүзәл һыным! Ниндәй ғәҙел, ғибрәтле заманда йәшәйбеҙ беҙ. Бер тәүбә меңәр гонаһтан, меңәр енәйәттән ҡотҡара. Аҫ, киҫ, урла, алда, тала, һат, ләкин үҙ ваҡытында тәүбә килтер, ант ит. Бөтә ғәйептәр шылтырап ҡойолоп төшә, һин яңынан гонаһһыҙ, абруйлы, ғәйрәтле. Бының бөйөк өлгөһөн әле генә минең даһи портретым күрһәтте. Ҡана, үҙеңде мәрхәмәтле, изге күкрәгемә ҡыҫып бер үбәйем. *(Портретты килеп ҡосаҡлай, һыҡтап илай.)*

Мөртәт-ша, ауыҙы йәбешкән көйө, Художник тирәһендә урала. Теге быны шәйләмәй. Би-маза атылып тора.

Би-маза *(бәйләй торған нәмәһен атып бәрә)*. Долой донъя сүбе! *(Трубкаһын ҡора.)* О, бөйөк мәл! Мин үҙ хаҡымда һөйләргә яратмайым. Яратмаһам да — һөйләйем, сөнки һөйләмәй мөмкин түгел. Мин ошо минутта — иң күркәм күренештең шаһитымын. Минең шаһит булыуым арҡаһында, ул күренештең дәрәжәһе, ул ваҡиғаның мәғәнәһе бығаса ирешелмәгән бейеклеккә күтәрелә. Бына ҡарағыҙ, күрегеҙ, ишетегеҙ: мин шаһитмын — минең алдымда политика менән сәнғәт ҡауышты, ысынбарлыҡ менән хыял ҡушылды. Беҙҙең Диктаторыбыҙ, үҙ портретын ҡосаҡлап, ихлас күңелдән илай. Ила! Ила!.. Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр.

Мөртәт-ша сәпәкәй итә. Попугай ҡысҡыра: «Бравис-с-си-имо!» Художник Мөртәт-шаның да ауыҙын һөртөп ала.

Мөртәт-ша *(Попугайға ҡушылып ҡысҡыра)*. Брависсимо! Хакимыбыҙҙың татлы күҙ йәштәре ергә тамып, ерҙе бәхетле итте. Илһөйәрлек тарихының мәңге онотол-

маçлыҡ яңы бите был. *(Ишеккә ҡысҡыра.)* Әй, сәркәтип, яҙып ҡуй! Юғиһә, онотола ул.

Диктатор *(Художник эргәһенә килә, танауын тота)*. Танауың талантлы икән. Һаҡла. Әй, кем! Илһөйәрлек министры! Киçәтеп ҡуй, хунбәндәләр урамда киçеп ырғытмаһындар үҙен: бынан ары Художниктың танауы дәүләт һағына алына.

Мөртәт-ша. Киçәтермен, Диктатор йәнәптәре.

Диктатор. Йә, Бойоҡ Художник *(тегенең танауын һыйпай)*, ниндәй ижади пландарың бар?

Художник. О, Диктатор йән... йәнәптәре, пландан күп нәмә юҡ. Бар мөлкәтем — ошо үҙем дә бөйөк пландарым. *(Үҙен әйләнеп күрһәтә. Рухланып китә.)* Иң тәүҙә мин һеҙҙең портреттар галереяһын ижад итәсәкмен: мең портрет! Ун мең! Йөҙ мең! Төрлө урын, төрлө ҡиәфәт, төрлө заман. Ә һеҙ — шул уҡ. Беҙҙең берҙән-беребеҙ. Бына бында һеҙ уйланаһығыҙ, тегендә көләһегеҙ, бүтәндәрендә йоҡлайһығыҙ, илайһығыҙ, атаһығыҙ, ашайһығыҙ, ғәфү итегеҙ, Фин-фу хан йәйәү йөрөй торған ергә китеп бараһығыҙ, унан ҡайтып киләһегеҙ... Һеҙ асыулы, һеҙ рәхимле, һеҙ иçерек, һеҙ айныҡ, һеҙ һыбайлы, һеҙ йәйәүле, һеҙ мундирлы, һеҙ мундирһыҙ, ғәфү итегеҙ, һеҙ бөтөнләй инәнән тыумаһығыҙ...

Художник һөйләгәндә, Диктатор ул әйткән төрлө ҡиәфәткә керә.

Диктатор. Булһын, төрлөһө булһын. Халҡымдан йәшергән нәмәм юҡ минең.

Мөртәт-ша *(тура ҡатып)*. Так точно! Юҡ!

Диктатор *(Художниктың танауына үрелә, ләкин ҡағылмай)*. Фатиха! Эшкә! Министрҙар! Художниктан һис нәмәне ҡыҙғанмағыҙ, буяуҙы һорағанса, һыуҙы теләгәнсә бирегеҙ. Йомартлыҡ күрһәтеп, тәүлегенә өс ус, юҡ, ике ус дөгө... Министрҙар нормаһы күпме әле беҙҙең?

Мөртәт-ша. Министрына ҡарап... Ус ярымдан ике усҡа тиклем.

Диктатор. Сикһеҙ йомартлыҡ күрһәтеп, Художникка тәүлегенә бер ус тултырып *(баçым яһап әйтә)* дөгө бирегеҙ. Шунан артығы ашҡаҙанына көс килтерә ул. Арыҡ тәндә — арымаç йән, тим мин. Йәнең арымаһын!

Художник. Минең йәнем бөгөн яңынан мең төрлө сәскә атты, Диктатор йәнәптәре. Хәҙер мин бөтә ер

йөҙөн һеҙҙең бөйөк һынығыҙ менән тултырып ташлаясаҡмын. *(Бәйләүен дауам иткән Би-мазаға килә.)* Йәнә, ханым, һеҙҙең сибәр йөҙөгөҙҙө, һылыу кәүҙәгеҙҙе, матур аяҡтарығыҙҙы, дәрт уйнап торған күҙҙәрегеҙҙе йөҙ тапҡыр, мең тапҡыр төшөрәсәкмен.

Би-маза. Минең аяҡтарым кәкре.

Художник. Кәкрене беҙ төҙәйтеп төшөрәбеҙ уны. Һуҡырҙы — күҙле, ахмаҡты — аҡыллы, ҡурҡаҡты — батыр, яуызды изге итәбеҙ. Бөтәһе лә — беҙҙең ҡулда!

Мөртәт-ша алғараҡ сыға. Тамаҡ та ҡырып ҡарай, уға иғтибар итмәйҙәр.

Художник. Икеләнмәгеҙ, шикләнмәгеҙ, ханым. Ҡойоп ҡуясаҡмын. Йәнә, ханым, һеҙҙең туптай тупылдашып, күгәрсендәй гөрләшеп торған эреле-ваҡлы балаларығыҙҙы яһармын.

Би-маза. Минең балаларым юҡ.

Художник. Булмаһа — булыр әле, булғас яһармын. Һеҙ шундай йәш, түлле...

Би-маза. Кемдән булһын? Бынау ҡап ҡорһаҡтанмы? Әллә бынау еп сираҡтанмы? Әллә бынау ата попугайҙанмы? Кемдән?

Художник яурындарын уйнатып ала: йәнәһе, ул...

Попугай. Юҡ! Юҡ! Мин уйнашсы түгел! Мин — балалар атаһы. Аҙҙырмағыҙ мине. Илемә ҡайтарығыҙ!

Диктатор *(маһайып)*. Минең балаларым — бөтә халыҡ. Мин — утрау атаһы. Ниндәйҙер маңҡа танау ыбырсыбырҙың атаһы булыу минең бөйөк дәрәжәмде генә төшөрөр ине.

Мөртәт-ша. Раҫ — төшөрөр ине. Ҡатындарҙы ҡыҫыр ҡалдырыу — илһөйәрлектең яңы сағылышы, яңы... яңы... яңы өлгөһө ул. Ошо өлгөнө тәү башлап Диктатор йәнәптәре үҙе күрһәтә. Былай ҙа әҙәм заты серәкәй урынына үрсей.

Диктатор *(төҙәтә)*. Себен урынына.

Мөртәт-ша. Эйе, себен урынына...

Диктатор *(шпорын сылтыратып, аяҡ тибә)*. Әҙәм үрсетеүҙе туҡтатырға!

Мөртәт-ша *(яңылыш шпорһыҙ аяғын тибә, шунан шпорлыһын тибә)*. Туҡтатырға!

Би-маза ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап эске бүлмәгә уҙа. Әйләнеп ҡарай.

Би-маза. А-ла-ша-лар!

Сыға. Уның артынан, ҡулын ыуа-ыуа, Художник эйәрмәксе итә.

Диктатор. Ҡа-а-йҙа?
Художник. Эшкә!

Диктатор уға тышҡы ишекте күрһәтә. Художник борола.

Диктатор *(асыуһыҙ ғына)*. Марш! Министрҙар! Художникка буяуҙы һорағанса, һыуҙы теләгәнсә бирегеҙ. Йәнә, сикһеҙ йомартлыҡ күрһәтеп, көн һайын алдына ярты ус дөгө һибегеҙ. Ярты ус!

Мөртәт-ша. Башҡарырбыҙ!

Диктатор. Ә быны *(портретҡа ымлай)* ыҫмала менән йәбештер, бүтәнсә ысҡыныр булмаһын. Ҡалған йөҙ мең портретыбыҙҙы ла ыҫмалаға ултырт. Ауыҙҙарын да башта уҡ буяп ҡуй. Эшең ырамлы булһын, Бөйөк Художник. Танауыңды һаҡла. Һы!

Художник. Һеҙҙеңсә, тик һеҙҙеңсә генә булыр.

Художник портретты күтәреп сығып китә. Мөртәт-ша икенсе яҡҡа үтә. Диктатор телевизор ҡарарға ултыра.

Диктатор. Утрауҙа тулы тәртип. Тормош ырғыпырғып алға бара. Донъя тап-таҡыр. *(Фәсен һалып, башын һыйпай.)* Һепереләһе һеперелгән, ҡырҡылаһы ҡырҡылған. Хәҙер серем итеп алырға ла ярай.

Йоҡлап китә. Сәхнә аша, яурынына ҙур ҡылыс һалып, Диктаторҙың тән һаҡсыһы уҙа. Убырлы ҡарсыҡ инә. Ул Бимазаны ла хәтерләтә. Өтөлөп бөткән һепертке һөйрәгән.

Убырлы ҡарсыҡ. Етлекмәй тыуған нәмә! Кемде алдамаҡсы булдың һин? Кемде! Тыумыштан уҡ мең йәшлек булып тыуған убырлы ҡарсыҡтымы? Тылсымлы һепертке, имеш, ырғый-ырғый йөрөй, талпына-талпына оса, имеш! Оса бысағымды. Уға атланғансы, лутсы мин йәйәү йөрөйөм. Әбрәкәй һепереүҙән башҡа ғәмәлгә ярарлығы бармы?! Мә, һепер! *(Һепертҡене мөйөшкә килтереп һөйәй, телевизорҙы ала.)* Пенсияға сыҡҡас, үҙем рәхәтләнеп ҡарап ултырырмын. *(Сыға.)*

Һепертке бынан ары гел шунда һөйәлеп тора. Ут һүнеп туҡана. Мөртәт-ша яғы. Ул — ҙур көҙгө алдында.

Мөртәт-ша. Әгәр ҙә мин йәмһеҙ булмаһам, матур булыуым ихтимал ине... Ләкин минең зирәк аҡылым бөтәһен дә алмаштыра. *(Уйланып тора.)* Үҙемдең аҡыллы, тәрән уйҙарыма батып китһәм, ҡалҡып сыға алмай яфаланам...

Ағас ҡатаһы менән туҡ-туҡ баҫып, Ризыҡсы ҡатын инә. Мөртәт-ша әйләнеп ҡарай, өндәшмәй.

Ризыҡсы. Доға уҡый инең, ахырыһы, әйҙә, уҡы... Уҡып бөтөр...

Мөртәт-ша. Беҙ әҙер доға уҡымайбыҙ, үҙебеҙ сығарабыҙ. Диктатор менән икәү көн һайын берәр доға сығармаһаҡ, эсебеҙ боша башлай.

Ризыҡсы. Мин доғаны түгел, таяҡты әйтәйем тигәйнем.

Мөртәт-ша. Таяҡты? Уның нимәһен әйтеп тораһың? Иртүк бит тимер һандыҡтан алып үҙ ҡулыңа тотторҙом.

Ризыҡсы. Тотторҙоң.

Мөртәт-ша. Тотторғас, тот.

Ризыҡсы. Тотҡайным да...

Мөртәт-ша. Һуң?

Ризыҡсы. Үҙең әйттең бит: «Бынан ары, — тинең, — ни... йәнәптәренең сапанын...»

Мөртәт-ша. Күпме тылҡыным мин һиңә: Диктатор йәнәптәренең... Диктатор, Диктатор!..

Ризыҡсы. «Биктатыр йәнәптәренең сапанын, тинең, иң юғары манараға менеп ҡаҡ, тинең, уның затлы шифалы туҙаны бөтә илгә таралһын, тинең...»

Мөртәт-ша *(асыуы килә башлай)*. Тинем, тинем!

Ризыҡсы. Тинең шул. Мин сапанды иләп кенә төрҙөм дә, таяҡты бына ошо ҡулыма тотоп, һарайҙың анау мөйөшөндәге йәшел манараға яйлап ҡына *(һуҙып)* баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, — бик бейек бит ул, — баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа...

Мөртәт-ша *(сабырлығы бөтә)*. Тиҙерәк үрмәлә! Тиҙерәк!!!

Р и з ы ҡ с ы *(тиҙ-тиҙ һөйләй)*. Мин сапанды иләп кенә төрҙөм дә, таяҡты ошо ҡулыма тотоп, һарайҙың анау мөйөшөндәге йәшел манараға яйлап ҡына... юҡ, тиҙ-тиҙ генә *(тағы ла йышыраҡ һөйләй)*, баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, — ифрат бейек бит ул! — баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан баҫҡысҡа, баҫҡыстан...

М ө р т ә т - ш а. Һикереп...

Р и з ы ҡ с ы. Эйе, баҫҡыстан баҫҡысҡа һикереп менеп еттем. *(Тағы яй һөйләй башлай.)* Арҡыры ағасҡа сапанды һәйбәтләп кенә элдем дә таяҡ менән гөп тә гөп, гөп тә гөп ҡағырға керештем. Әй ҡағам, әй ҡағам! Үҙем ҡағам, үҙем уйлайым: сапан эсендә ни... йәнәптәре...

М ө р т ә т - ш а. Диктатор, Диктатор!

Р и з ы ҡ с ы. Биктатыр йәнәптәре үҙе булһа, нимә эшләр ине икән, тим.

М ө р т ә т - ш а. Аңра!

Р и з ы ҡ с ы. Уныһы һиңә мәғлүмерәк инде. Ә мин һаман ҡағам да ҡағам. Башта борҡолдап ҡара туҙан, көрән туҙан, һары туҙан сыҡты, унан йәшел туҙан, зәңгәр туҙан, ҡыҙыл туҙан сыҡты. Ҡыҙылы иң төптә ятҡан икән...

М ө р т ә т - ш а. Һәйбәт, һәйбәт! Тимәк, шифалы, рәхмәтле туҙан илгә тигеҙ, ғәҙел таралды.

Р и з ы ҡ с ы. Ғәҙеллеген әйтә алмайым, иллә тигеҙ таралды.

М ө р т ә т - ш а. Шәп!

Р и з ы ҡ с ы. Шәп түгел шул, таяҡ ғәйеп булды.

М ө р т ә т - ш а *(лып итеп иҙәнгә ултыра)*. «Ғәйеп булды?» Шулай тиергә нисек телең бара?

Р и з ы ҡ с ы. Бармай сараһы юҡ. Таяҡ осто. Һуңғы тапҡыр һелтәүем булды, ҡулымдан ысҡынып, осоп китеүе булды.

М ө р т ә т - ш а *(тынысланып)*. Осһа, Вузияға барып төшмәгәндер әле. Эҙлә!

Р и з ы ҡ с ы. Иртәнән бирле эҙләнем. Урам һепереүсе, һыу ташыусы, сусҡа көтөүсе... күмәкләп эҙләнек. Табып булмай.

М ө р т ә т - ш а *(ҡапыл шашып)*. Һәләкәт! Катастрофа! Ил тамырына балта сабылды! *(Тыныс.)* Диктатор һине аҫып ҡуясаҡ!

Р и з ы ҡ с ы. Мин — ризыҡсы, туйындырыусы. Мине аҫһа, ул астан үләсәк, һин дә... Анау тәмәжник тә...

Мөртәт-ша. Беҙҙең Диктатор йәнәптәре аслыҡтан ҡурҡмай, киреһенсә, туҡлыҡтан ҡурҡа. Белергә ваҡыт. Наҙан!

Ризыҡсы. Туҡлыҡтан ҡурҡһа ла, сусҡа ботон бөтөн көйө тотоп кимерә, мышнай-мышнай.

Мөртәт-ша. Кимерһен! Мышнаһын! Уның мышнауы ла йыр кеүек, ахмаҡ.

Ризыҡсы. Наҙанлығыбыҙ, ахмаҡлығыбыҙ ҙур инде.

Мөртәт-ша *(һикереп тора)*. Ни йөҙөм менән Диктатор ҡаршыһына барып баҫайым мин! Ни тип әйтәйем?

Ризыҡсы. Әйт, яңы таяҡ яһатһын.

Мөртәт-ша. Яңы таяҡ! Яңы таяҡ! Һепертекенең яңыһы, таяҡтың иҫкеһе яҡшы булыуын белергә ваҡыт һиңә, ҡортҡа!

Ризыҡсы. Ваҡыт, ваҡыт...

Мөртәт-ша. Донъяла булмаған Фу-фу менән әллә ниндәй Фин-фу уйлап сығарған мин тағы! Зирәк аҡылымдың осошон тыя алмайым шул. «Аҡыллылыҡ бәләһе» тип, моғайын, минең хаҡта яҙғандарҙыр. Ләкин! Нимә «ләкин»? *(Ризыҡсыға.)* Бар, муйыныңды йыу, ожмахҡа инергә әҙерлән. *(Муйынына элмәк һалыу ишараһын яһай.)* Эйгән башты ҡылыс сапмай. Барып, баш эйәйем.

Башын эйеп сығып китә. Ризыҡсы муйынын һыйпап ҡала. Ут һүнеп тоҡана. Диктатор элек телевизор торған мөйөшкә ҡарап ултыра. Һепертекене күрә. Артта, башын эйеп, Мөртәт-ша баҫып тора.

Диктатор *(һепертекегә)*. Ҡайтҡанһың икән. Мәслихәт. Бынан ары, илдең именлеген һаҡлап, ошонда ғына баҫып тор. *(Һыйпап, һөйөп ҡуя.)* Һин бар саҡта, мин тыныс.

Һепертке ҡуҙғалып, нимәлер әйтмәксе була.

Диктатор. Кәрәкмәй, әйтмә. Мин һине һүҙһеҙ ҙә аңлайым. Беҙ бит һинең менән рухи туғандарбыҙ. Мин һине әллә һатҡайным, әллә юғалтҡайным, хәтерләмәйем инде. Ҡайтҡанһың, молодец, тоғролоғоңдо баһалайым. Мин һине бүләкләйәсәкмен. Бынау йүкә бау урынына, алтын сүҡлы ебәк таҫма менән ҡыҫып бәйләттерәсәкмен. Ике урындан!

Попугай. Брависсимо! Браво!

Диктатор *(Попугайға)*. Шельма. Ялағай! Һин дә миҙал өмөт итәһеңме? Башта тырышлыҡ күрһәт әле. Һы!

Попугай. Че-пуха-ха!

Мөртәт-ша *(башын тағы нығырак эйә. Тамаҡ ҡыра)*. Хан!

Диктатор. Әү.

Мөртәт-ша. Был хәбәрҙе килтереүгә ҡарағанда, хакимыбыҙ, үҙ әжәлем тураһында хәбәр килтереү, һеҙҙе үҙ йыназама саҡырыу миңә еңелерәк булыр ине. Ҡылысығыҙ менән сабығыҙ башымды! *(Башын ергә эйә.)*

Диктатор. Кем йыназаһы? Аңлатып һөйлә. Баш сабырға өлгөрөрбөҙ.

Мөртәт-ша. Йыназа ғына түгел шул. Унан да яманыраҡ. Сабығыҙ башымды!

Диктатор. Сап та сап, тиһең, үҙең башыңды һаман түбән эйәһең. Эйгән башты ҡылыс сабамы ни? Уның өсөн балта кәрәк. Балта бармы?

Мөртәт-ша. Юҡ шул. Бөттө. Берәү ҙә ҡалманы.

Диктатор. Ни эшләп бөттө?

Мөртәт-ша. Үҙегеҙ бит утрауҙағы бөтә балталарҙы иретеп, миллион беҙ яһарға ҡуштығыҙ.

Диктатор. Беҙ? Ниңә шулай иттем икән?

Мөртәт-ша. Турғай күҙен төртөп тишергә. Һеҙ бит ул саҡ оран ташланығыҙ: «Дөгөнө күрмәһен өсөн, бөтә турғайҙың күҙен төртөп тишергә!» — тинегеҙ.

Диктатор. Ә... Хәтерләгән һымаҡмын. Хәҙер миллион беҙҙе иретеп балта эшләт. Ҙу-у-р балта эшләт.

Был диалог барғанда, сәхнә аша баяғы Тән һаҡсыһы уҙа. Уны беҙ генә күрәбеҙ.

Мөртәт-ша. Эшләтермен. Эшләтермен! Ләкин, ғәли йәнәптәре, мин үтенер инем, мин теҙләнеп үтенер инем... *(Теҙләнә, башын ергә һала.)*

Диктатор. Үтен.

Мөртәт-ша. Һеҙгә тоғро ошо ҡәҙерле ғорур башымды йөрөткән муйынымды балта түгел, һеҙҙең алмас ҡылысығыҙ сабып өҙһөн ине. Шул бәхеткә ирешһәм ине...

Диктатор. Ирешерһең. Минең маҡсатым — ҡул аҫтындағыларҙы бәхетле итеү. Ҡасан теләйһең?

Мөртәт-ша. Бөгөн үк, хәҙер үк! Был хәбәрҙе килтереүгә ҡарағанда, ҡояшыбыҙ, һеҙҙең әжәлегеҙ тураһында һеҙгә хәбәр килтереп, үҙ йыназағыҙға үҙегеҙҙе

саҡырыуы миңә миллион тапҡыр еңелерәк булыр ине. Сабығыҙ башымды!

Диктатор. Тор, тоғро таянысым. Мин иҫән. Мин иҫән икән, тимәк, донъя бөтөн. *(Фәсен һалып, башын һыйпай.)* Тимәк, донъяла ботаҡ та, сатаҡ та юҡ. Сәбәләнмә!

Мөртәт-ша *(бөтә тәүәккәллеген йыйып)*. Хаким, мәрхәмәтегеҙгә өмөтөм юҡ. Мәмләкәтебеҙгә ҙур юғалтыу килде. Фин-фу хандан ҡалған ике йәпле таяҡ бөгөн ете сәғәттә, утыҙ алты минутта, илле ете секундта...

Диктатор *(тетрәп)*. Вафат булды???

Мөртәт-ша. Юғалды.

Диктатор. Нисек юғалды?

Мөртәт-ша. Йәшел манара башында һеҙҙең сапанығыҙҙың алтын туҙанын ҡаҡҡанда, Ризыҡсы ҡатын ҡулынан төшөрөп ебәргән. Шул ғәйептән — ғәйеп. Эҙләнек. Таба алманыҡ. Эҙләүҙәр дауам итә.

Диктатор *(башын тота)*. Ах, таяҡ! Ҡәҙерле таяҡ! Бахыр таяҡ! *(Пауза. Шым ғына илай.)* Атайым мәрхүм үлгәндән һуң был иң ҙур юғалтыуым. Ләкин мин был ҡайғыны юғары рух менән батырҙарса сабыр кисерәм. О, мин ниндәй көслө! Шуға күрә мәрхәмәтле. Ғәйепленәрҙе лә яҙаламай торам... Хәҙергә. Минең ҡул аҫтындағы бәндәләр, күрәһегеҙме, фажиғәле был сәғәттә мин бына ниндәй ныҡмын, аҡыллымын. Өйрәнегеҙ минән! Өлгө алығыҙ!

Мөртәт-ша. Өйрәнәбеҙ! Өлгө алабыҙ...

Диктатор. Ҙур ҡайғыны ҙур итеп хөрмәтләй белергә кәрәк.

Мөртәт-ша. О, фирғәүенебеҙ!

Диктатор *(дауам итә)*. Өс көнлөк траур иғлан итегеҙ. Ошо өс көн эсендә сит мәмләкәт илселәрен ҡабул итмәҫкә, сит дәүләт караптарын порттарға индермәҫкә, мәйет күмеүҙе тыйырға, бала тыуҙырыуҙы туҡтатып торорға! Аңлашылдымы?

Мөртәт-ша. Аңлашылды.

Диктатор. Аңлашылһа, башҡар. Был әмерҙе үтәмәүселәргә — үлем яҙаһы!

Мөртәт-ша. Ниндәй еңел, ниндәй мәрхәмәтле яҙа!

Диктатор. Хәҙер, мөһөр һуғып, фарман сығарам. Яҙа бар!

Мөртәт-ша *(ҡысҡыра)*. Сәркәтип! Яҙа бар! Юғиһә, онотола ул.

Диктатор. Утыҙ туғыҙ мең дә утыҙ туғыҙынсы фарман. (Ул *тәкәббер ҡиәфәткә инә.)* Беренсе параграф. Һөйөклө халҡым! Ил өҫтөнә оло ҡайғы ауҙы: Фу-фу династияһынан мираҫ булып ҡалған ике йәпле, йылтырап торған баҡыр башлы *(фәсен һалып, башын һыйпай)* тарихи таяҡ юғалды. Икенсе параграф. Бөтә йән эйәһенә бойорам: көндөҙ сыра яндырып эҙләргә һәм табырға шул таяҡты. Өсөнсө параграф. Табып килтергән бәндәгә — һөйөнсөгә ярты утрауҙы...

Мөртәт-ша. Ярты утрауҙы?!

Диктатор. Сирек утрауҙы...

Мөртәт-ша *(бот саба)*. Сирек утрауҙы?!

Диктатор. Һаран, һыҡмыр, ҡомһоҙ! *(Тантаналы.)* Әсмуха утрауҙы...

Мөртәт-ша. Диктатор йәнәптәре! Нимәнең әсмухаһы икәнен асыҡлап тормағыҙ. Аҙаҡтан үҙегеҙҙең үткер күҙегеҙ күрер әле.

Диктатор. Дөрөҫ. *(Дауам итә.)* Өсөнсө параграф. Табып килтергән бәндәгә һөйөнсөгә әс-му-ха... бүләк итәсәкмен.

Мөртәт-ша. «Бүләктең дөйәһе лә, төймәһе лә бер уның», — тигән Хужа Насретдин, хандың ала дөйәһенә атланып алғас.

Диктатор. Һы! Ә минең үҙ ғүмеремдә ишәккә лә атланғаным юҡ. *(Тып баҫып ҡуя, шпоры сыңлап китә.)*

Мөртәт-ша *(шулай уҡ итә)*. Минең дә...

Диктатор. Шулай ҙа бер атланып ҡарарға ине.

Мөртәт-ша. Дөйәгәме?

Диктатор *(башын сөйә)*. Һы! Дөйә үркәсендә эйәр тормаҫ бит.

Мөртәт-ша. Раҫ. Һеҙҙең өсөн ишәк ҡулайлыраҡ булыр.

Диктатор. Минең дәрәжәгә тура киләме һуң ул?

Мөртәт-ша. Нимә, Диктатор йәнәптәре?

Диктатор. Ишәк...

Мөртәт-ша. Һеҙгә бөтәһе лә тура килә. Унан бит, һеҙ ишәк дәрәжәһенә төшмәйһегеҙ, ишәк һеҙҙең дәрәжәгә күтәрелә.

Диктатор. Шулай тиһеңме?

Мөртәт-ша. Шулай тим. Фу-фу династияһының йөҙөк ҡашы булған Фин-фу хан гел ишәккә генә атланып йөрөгән... Ике йәпле, баҡыр башлы таяҡ менән әйҙәй-әйҙәй...

Диктатор. Фин-фу хан... *(Хәтерләргә тырышып.)* Нимәлә туҡталғайныҡ әле?

Мөртәт-ша. Өсөнсө параграфта.

Диктатор. Нимәнең параграфында?

Мөртәт-ша. Фармандың өсөнсө параграфында: «Әсму-ха... бүләк итәсәкмен...»

Диктатор *(тамам хәтерләп)*. Эйе. Әсмуха еткән. Ҡара халыҡтың аңын күтәреү өсөн, дүртенсе параграфты ла яҙ.

Мөртәт-ша. Сәркәтип! Яҙа бар!

Диктатор *(тыныс, ягымлы тауыш менән)*. Дүртенсе параграф. Әгәр өс көн эсендә тайаҡ табылмаһа, утрау халҡының яртыһын асырға, яртыһын киҫергә... Вәғәҙәм — иман!

Диктаторҙың Тән һаҡсыһы бер яурынына — ҡылыс, икенсеһенә арҡан һалып сәхнә аша уҙып китә.

Мөртәт-ша. Тайаҡ ысынлап та табылмаһа.

Диктатор. Быға тиклем әле минең үтәлмәй ҡалған фарманым юҡ. Йә былай, йә тегеләй үтәлә... Нимә тигән әле һинең теге боронғо һеләгәй гректарың?..

Мөртәт-ша. Римляндар.

Диктатор. Барыбер.

Мөртәт-ша. «Тудуторо моторо» — өсөнсө юл юҡ.

Диктатор *(ҡапыл тоҡанып)*. Ҙур мөһөр һуҡ та, күҙ йомоп, күҙ асҡансы фарманды илгә тарат. Күҙ йомдом. *(Ут һүнә.)* Күҙ астым. *(Ут тоҡана.)*

Мөртәт-ша. Таратылды.

Сәсрәп-илереп, Би-маза инә. Ҡулында — ҡағыҙ киҫәге.

Би-маза. Был нимә?

Диктатор. Фарман.

Би-маза. Ни өсөн? Ни өсөн ошондай бөйөк ваҡиғалар минең башым аша эшләнә? Мин кем? Матурлыҡ һәм әҙәп министрымы, әллә түшәк-ястыҡмы? Мин кем?

Мөртәт-ша. Матурлыҡ менән әҙәп ни ул — түшәктең күрке инде.

Би-маза. Тығылма, еп сираҡ! Бөтә ил белгәнде бер мин белмәйем. Хурлығынан йығылып үлерһең. Йортлоҡло ҡуштан ҡатын булып, мин уға тәмәке янсығы сигеп ултырам.

Диктатор. Мин тәмәке тартмайым.

Би-маза. Харап икән — донъя кендеге! Һин тартмаһаң, тартыусыһы табылыр. Ана Художник...

Диктатор. Һы! *(Мөртәт-шаға.)* Күпме дөгө бирәһегеҙ әле уға?

Мөртәт-ша. Ярты ус.

Диктатор. Майына сыҙаша алмай булыр. Сирек ус хаттин ашҡан.

Би-маза. Тинтәк! Ул хис кешеһе. Бөртөк дөгө ҡапмай, хискә бирелеп кенә лә ул бер йыл йәшәй ала.

Диктатор. Йәшәүен йәшәр ҙә...

Би-маза *(ҡапыл трибунаһын ҡора)*. Бөтһөн ваҡ ыҙғыш! Бөтһөн ваҡ мәшәҡәттәр! Фажиғәле бөйөк был сәғәттәрҙә беҙ берләшергә, уҡмашырға тейешбеҙ. Бер йоҙроҡҡа, бер суҡмарға әйләнергә тейешбеҙ! Бөтә хунбәндәләрҙе ҡоторторға, тилертергә, һөсләтергә! Бөтә шымсыларҙы, күҙәтеүселәрҙе, ошаҡсыларҙы борсаҡ урынына утрауға сәсергә! Бер-береһе артынан күҙәтһендәр, еҫкәнһендәр, ошаҡлашһындар! Ҡоторторға, тилертергә, һөсләтергә! *(Ҡапыл пауза.)* Мин үҙем хаҡында һөйләргә яратмайым. Яратмаһам да — һөйләйем. Сөнки һөйләмәү мөмкин түгел. Тәжрибә, тәжрибә, мең тапҡыр тәжрибә! Сибәр ҡыҙҙар йортонда, йәғни бардакта, беҙ һәр бәләгә ҡаршы берҙәм көрәшә инек һәм еңеп сыға инек *(көрһөнә)*. Бына ҡайҙа тәртип ине ул, исмаһам...

Диктатор *(тоҡанып, ике ҡулын күккә һуҙып янай)*. Саң ҡағып, бөтә утрауҙы аяҡҡа баҫтырырға. Ғәҙәттән тыш хәрби хәл индерергә! *(Тынып.)* Аҡыллы ун министрың булғансы, килделе-киттеле бер һөйәр... бер һөйәр...

Мөртәт-ша. Бер бисәң...

Диктатор. Бер бисәң булһа икән. *(Мөртәт-шаның аяғына ҡарап.)* Һиңә икенсе ҡатаңа ла шпор тағырға рөхсәт итәм, хатта бойорам! *(Би-мазаға.)* Һин дә.

Би-маза. Нимә «мин дә»?

Диктатор. Башмаҡтарыңа шпор таҡ! Берҙәм баҫырға кәрәк! Утрауҙа хәрби хәл!

Попугай. Че-пу-ха-ха!

Саң ҡағалар. Ут һүнә. Тоҡана. Суплек башында ике йолҡош ҡарт һуғып ултыра (Ҡарт йолҡош—һыңар ҡуллы).

Ҡарт йолҡош. Ниңә харамлашмайһың? Ниңә алдашмайһың? Былай булғас, һинән ниндәй жулик, ниндәй шулер сыҡһын?

Йәш йолҡош. Харамлашам да инде.

Ҡарт йолҡош *(ябылған кәртте асып ҡарай)*. Ошомо харамлашыу? Ошомо күҙ буяу? Жуликлығың ҡороғоро! *(Башына һуға.)* Шулер түгел, себеш һин!

Йәш йолҡош *(шапылдатып кәрт һуға)*. Тырышам да инде. Алдашырға талант юҡ минең.

Ҡарт йолҡош. Талант! Талант, имеш! Талант юҡ нәмә ул! Өлгөрлөк, йылғырлыҡ, сослоҡ ҡына бар. Талант юҡ!.. Күңел биреп алдашмайһың һин. Йәш кенә көйөңә формалистһың.

Йәш йолҡош *(хәтере ҡалып)*. Һин дә тыуғанда уҡ шулер булып тыумағанһыңдыр әле, улай тигәс тә.

Ҡарт йолҡош. Мине бүтәндәр кеше итте, мин һине кеше итергә тырышам... *(Кәртте асып ҡарай.)* Тағы дөрөҫ йөрөнөң, башһыҙ... оятһыҙ!..

Йәш йолҡош. Ну, иҙәһең. Әйтерһең, Тымыҡ океанды отоп алыу кәрәк миңә.

Ҡарт йолҡош. Шуны ла ота алмағас... *(Кәртенә шапылдатып һуға.)* Их, бөйөк жуликтар була ла! Шундайҙарҙың береһе менән мин байтаҡ ара һалдат казармаһында йәшәнем. Уның ҡулындағы ябай алтышка козырь тузды суҡындырып ҡаплай ҙа ҡуя ине. Козырь туз ыһ та итә алмай ине. Үҙенең: «Һы!» — ти торған ғәҙәте бар ине. Күпме харамлашты, ә күҙ-башы, аяҡ-ҡулы бөтөн ҡалды. Минекен ҡайырҙылар...

Йәш йолҡош *(бармағын күккә һона)*. Кемгә ымлайһың?

Ҡарт йолҡош. Күпте белһәң, кәрттә ҡот китә ул.

Йәш йолҡош. Һин күпте беләһең, ә ҡотоң бар, отаһың да отаһың. Фудзияма тауын оттоңмо? Оттоң. Диктаторҙың ананас баҫыуын оттоңмо? Оттоң. Африкалағы иң ҙур фил көтөүен оттоңмо? Оттоң. Отмаған нәмәң ҡалманы. Өҫтөбөҙгә байлыҡ ишелеп килә. *(Бойоғоп.)* Тик үҙебеҙҙең генә өс көн буйы бөртөк дөгө ҡапҡаныбыҙ юҡ. Ауыҙҙы асһаҡ, үпкә күренә. *(Ауыҙын аса.)* Күренәме?

Ҡарт йолҡош. Күренә шул.

Йәш йолҡош. Ашаһаҡ, һәйбәт булыр ине.

Ҡарт йолҡош. Тамаҡ туйып ҡалыр ине. Әйҙә, кәрткә бер һыныҡ икмәк һалабыҙ. (*Юҡ икмәкте ҡулында әйләндереп күрһәтеп ала.*) Ошоно.

Йәш йолҡош. Кем отһа ла, уртаҡ түлке.

Ҡарт йолҡош. Харамлашып ҡына таратып ебәр... Бына шулай.

Һыңар күҙле өсөнсө йолҡош инә. Уның ҡулында — ҡағыҙ.

Йәш йолҡош. О-һо! Өсөнсөбөҙ ҙә килде.

Һыңар күҙ. Һеҙ һаман кәрт һуғаһығыҙ, донъяла — бөйөк фажиғәләр. Фарман тыңлағыҙ, Диктатор фарманы, әфәнделәр!

Ҡарт йолҡош. Ха-ха! Беҙме ни «әфәнделәр»?

Һыңар күҙ. Беҙ — йәмғиәттең сәскәләребеҙ. Беҙ — заманыбыҙҙың затлы ирҙәре. Беҙ — әфәнделәр. Тимәк, һеҙ — беҙҙе тыңлағыҙ!

Ҡарт йолҡош. Ҡана, ҡағыҙы ниндәй! (*Ала, кире бирә.*) Бармай.

Йәш йолҡош. Ниңә Диктатор үҙ фармандарын шулай иң ҡалын ҡағыҙға яҙҙыра икән?

Ҡарт йолҡош. Тәмәкегә йыртмаһындар өсөн. Хәйләкәр нәмә. Уҡы!

Һыңар күҙ (*ҙур ғына өйөм сүп өҫтөнә менеп баҫа, тәкәббер ҡиәфәт ала*). «Утыҙ туғыҙ мең дә утыҙ туғыҙынсы фарман. Беренсе параграф. Һөйөклө халҡым! Ил өҫтөнә оло ҡайғы ауҙы — Фу-фу династияһынан мираҫ булып ҡалған ике йәпле, йылтырап торған баҡыр башлы таяҡ юғалды. Икенсе параграф. Бөтә йән эйәһенә бойорам: көндөҙ сыра яндырып эҙләргә һәм табырға шул таяҡты! Өсөнсө параграф. Табып килтергән кешегә әсмуха... әс-му-ха... (*бында бер һүҙе төшөп ҡалған*) әсмуха... бүләк итәм. Дүртенсе параграф. Әгәр өс көн эсендә таяҡ табылмаһа, утрау халҡының яртыһын аҫырға, яртыһын киҫергә. Вәғәҙәм — иман!» Имза. (*Диктатор ҡиәфәтенә инеп, ҡатып ҡала. Пауза.*)

Ҡарт йолҡош. Тыңлайым да, шаҡ ҡатып торам әй. Һыңар күҙең менән һин ҡалай шәп уҡыйһың. Ике күҙле булһаң, нисегерәк уҡыр инең икән, һай-һай-һай! Тыңлап өлгөрөп булмаҫ ине.

Бынан ары ике аралағы һөйләшеү үтә кеселекле тонда бара.

Һыңар күҙ. Комплиментың өсөн, әлбиттә, рәхмәт, дуҫ кеше. Шулай ҙа һин — мәғәнәһеҙ.

Ҡарт йолҡош. Ни өсөн мин мәғәнәһеҙ, әфәндем?

Һыңар күҙ. Диктатор фарманын ишәк аҙан тыңлаған кеүек тыңланың. Уның тәрән эстәлеген һай күңелеңә һеңдермәнең.

Ҡарт йолҡош. О, әфәндем, һин хаҡлыһың. Әммә, әфәндем, әйләндереп-әйләндереп төкөрәм мин һинең... уның фарманына. Бүтән ғәмәлгә ярар ере юҡ уның — ҡағыҙы ҡаты.

Һыңар күҙ. Ниндәй тупаҫлыҡ! Әгәр һин төкөрһәң, мин төкөрһәм, бынау маңҡа төкөрһә...

Ҡарт йолҡош. Асыуыма тейһәң, мин һиңә лә төкөрәм.

Һыңар күҙ *(һикереп төшә)*. Миңә, һыңар күҙле сал бөркөткә, төкөрәһеңме?

Ҡарт йолҡош *(төкөрә)*. Һиңә! Һиңә! Һинең аҡтыҡ күҙеңә төкөрәм!

Һыңар күҙ. Ә мин һинең аҡтыҡҡы ҡулыңды йолҡоп алырмын.

Ҡарт йолҡош *(һыңар ҡулы менән һуға)*. Мә, ал! Мә, ал!

Һыңар күҙ. Мин! Мин! Мин үҙемә тел тейҙертмәм. Минең затым затлы. Мин! Мин!.. Бөркөт һуҡҡан ҡыр тауығы урынына йөнөңдө тетермен. Мин!

Ҡарт йолҡош. Эйе, һин! Һин! Һин! *(Туҡмай. Һыңар күҙ яуап та ҡайтара алмай. Ул һуғышырға булдыҡһыҙ. Йәш йолҡош былар араһына керә.)*

Йәш йолҡош. Ағайҙар! Жуликтар, шулерҙар, ыҙғышмағыҙ инде. Таяҡ табылмаһа, беҙҙе лә аҫырҙар, киҫерҙәр, атырҙар. Фарман шулай тигән бит!

Ҡарт йолҡош. Ниндәй фарман!

Һыңар күҙ *(күрһәтә)*. Бына ошо. *(Сүп өйөмөнә баҫа, ҡуҡырая, уҡый.)* «Өсөнсө параграф. Табыш килтергән кешегә әс-му-ха... бүләк итәм. Дүртенсе параграф. Яртыһын аҫырға *(Ҡарт йолҡошҡа ымлай)*, яртыһын киҫергә *(Йәш йолҡошҡа ымлай)*. Вәғәҙәм — иман!..»

Йәш йолҡош. Беҙ ҙә ошо утрауҙа йәшәйбеҙсе.

Ҡарт йолҡош. Ниңә башта уҡ уны еренә еткереп уҡыманың?

Һыңар күҙ. Эф... әфәндем? Һеҙ тағы ла йән йотаһығыҙ...

Йәш йолҡош. Әйҙәгеҙ, татыу ғына һөйләшәйек, ағайҙар. Әрләшмәйсә генә. Был кәрт уйыны түгел, баш уйыны ла баһа.

Ҡарт йолҡош *(тынысланып)*. Бөтә тормош — кәрт уйыны ул, себеш. Тик ота белергә кәрәк.

Йәш йолҡош. Ә таяҡ табылмаһа?

Ҡарт йолҡош. Табылмаһа — табырға!

Һыңар күҙ. Әмерҙе беҙ, илдең иң затлы ирҙәре, беҙ үтәргә тейеш. Һәм әсмуха— беҙҙеке!

Йәш йолҡош. Нимәнең әсмухаһы икән? Йә бер әсмуха сәйҙер әле...

Һыңар күҙ. Пессимист һин, өҫтәүенә, нигилист — йәш кенә башың менән.

Ҡарт йолҡош. Диктатор тиклем Диктатор булып, әсмуха сәй менән ваҡланмаҫ. Юҡ, ваҡланмаҫ.

Һыңар күҙ. Кәм тигәндә, Ер шарының әсмухаһы булыр. Кәм тигәндә!

Йәш йолҡош. Ер шарының әсмухаһы әләкһә, рәхәтләнеп ултырып бүҫелгәнсе бер ашар инек.

Ут һүнә. Тоҡана. Мөртәт-ша яғы.

Мөртәт-ша. Тарихи сәғәт һуҡты. Ҡот осҡос бөйөк мәл килде. *(Шпорҙарын зыңлатып, бер урында тапанып тора.)* Илдә — хәрби по-ло-же-ние. «Уҡтарҙы осларға, йәйәләрҙе кирергә, ҡылыстарҙы ҡайрарға!» — тине Диктатор. Уның түңәрәк башына бер-бер уй, тәрән күңеленә бер-бер ғәм инде булыр. Ошо донъя боларған заманда Диктаторҙы шаҡ ҡатырырлыҡ берәй хикмәт сығарырға кәрәк. «Уҡтар һыҙғырғанда, мимозалар шымып тора», — тип кем әйткән? Берәү ҙә әйтмәгән. Киреһенсә, мин әйтәм! Нисегерәк әйтәм әле! *(Башын ыуып тора.)* Былай тип әйтәм: «Уҡтар ҙа һыҙғырһын, Попугайҙар ҙа һайраһын!» Был тиклем аҡыллы фекерҙәр минең башыма ҡайҙан килә икән? *(Диктаторға окшатып.)* Һы!

Борғолана-һырғалана, Ту-тыя инә. Ул аллы-йәшелле-һарылы күлдәк кейгән: Ҡулында—ситлек. Ситлектә—ике Попугай.

Ту-тыя. Әллә-лә, трәллә-лә, трәллә-лә, әллә-лә-лә. Саҡырттығыҙмы?

Мөртәт-ша. Саҡырттым.

Т у - т ы я *(бүлмәне күҙе менән байҡап сыға)*. Бүлмәң ҡотһоҙ икән.

Ту-тыя түрҙәге ҙур бәрхәт креслоға барып ултыра. Мөртәт-ша уға ишек төбөндәге кескәй генә ағас эскәмйәгә күрһәтә.

М ө р т ә т - ш а. Күсеп ултыр, уңайлыраҡ булыр.

Т у - т ы я. Борсолмағыҙ, бында ла ипле. *(Һелкенеп ҡуя.)* Ултырған ерҙәрем рәхәтләнеп китте.

М ө р т ә т - ш а. Рәхәт күп булмай ул. Күс! Йә баҫып ҡына тор.

Т у - т ы я *(эскәмйәгә күсеп ултыра)*. Харап икән! Ашалыр шул.

М ө р т ә т - ш а. Унда ултырырға һинең чин тура килмәй. Номенклатураға инмәгәнһең.

Т у - т ы я. Инмәҫ! Минең инмәгән ерем юҡ. Мин инеп сыҡҡан ерҙәргә һин инһәң, аҙ ғына ышҡылған булыр инең. Минең ҡулға эләкһәң, мин һине өйрәтер инем...

М ө р т ә т - ш а. Ана, Попугайҙарыңды өйрәт.

Т у - т ы я. Өйрәтәм, өй-рә-тәм!

М ө р т ә т - ш а. Нимәгә өйрәтәһең?

Т у - т ы я. Улар әүәл туйҙарҙа йырлай торғайны. Туй яһау вузиянистар йолаһы тип фаш ителгәс, яңы баштан аңдарын тәрбиәләйем, баштарынан алып ҡойроҡтарына тиклем илһөйәрлек рухы менән һуғарам.

М ө р т ә т - ш а. Һуғар, һуғар.

Т у - т ы я. Һуғарам! Хоҙайға шөкөр, үҙебеҙҙең илһөйәрлек вазифабыҙҙы беләбеҙ, аңлайбыҙ, аңлатабыҙ... йәғни Диктаторҙың һүҙҙәрен яттан ҡабатлайбыҙ.

М ө р т ә т - ш а *(рухланып)*. Ҡабатлағыҙ! Ҡабатлағыҙ! Икмәк һорамағыҙ, кейем һорамағыҙ, төйәк һорамағыҙ, тик уның һүҙҙәрен ҡабатлағыҙ. Уның һүҙҙәре туйҙыра ла, йылыта ла, оят ерҙе лә ҡаплата. *(Ҡапыл уйланып.)* Ә һеҙ ҡайһы һүҙҙәрен ҡабатлайһығыҙ?

Т у - т ы я *(Попугайға)*. Ҡабатла, Алтын тәпәй!

А л т ы н т ә п ә й. Аҫырға! Киҫергә! Вәғәҙәм – иман!

Т у - т ы я. Хәҙер һин, Еҙ томшоҡ!

Е ҙ т о м ш о ҡ. Киҫергә! Аҫырға! Вәғәҙәм – иман!

М ө р т ә т - ш а. Бынлаһы һәйбәт. Бынлаһы бик һәйбәт. Был – беҙҙең ныҡлы рухыбыҙҙы һәр саҡ күтәреп тора торған иң бөйөк, иң өмөтлө һүҙҙәре уның. Әммә, тағы ла уятыу өсөн, йыр кәрәк. Йыр! Беләһең бит... Юҡ, һин

белмәйһең, үҙем генә беләм: йыр ишетһә, Диктаторҙың ике күҙенән йәштәр—дошманға ҡарата нәфрәт йәштәре сылтырап аға башлай. О ул йәштәр! Бер бөрсөгө бына минең эйәгемә тамып, миң яһаны, мәңгелек изге мөһөр һуҡты.

Ту-тыя. Эйәгеңде эт тешләгәнгә оҡшай ҙа баһа...

Мөртәт-ша. Эт ул, ауыҙындағы һөйәкте тартып алған өсөн, малай саҡта уҡ тешләгәйне. Ә Диктатор йәнәптәренең күҙ йәше һуңынан тамды...

Ту-тыя. Уның да ауыҙындағы һөйәген тартып алғайныңмы ни?

Мөртәт-ша. Мәғәнәһеҙ һин! Йыр тыңлағас, бына ошо еремә *(яурынын күрһәтә)* башын һалып иланы ла, бер тамсыһы сәсрәп тамды. Йыр кәрәк! Йыр! Ҡара-ҡаршы йырларға өйрәт Попугайҙарыңды. Ул дуэт тип атала.

Ту-тыя. Була ул. Ниндәй йыр өйрәтергә?

Мөртәт-ша *(ҡыҙып)*. Ниндәй йыр? Ниндәй йыр? Башың бармы һинең, Попугай баш! Минең белеүемсә, Диктатор белеүенсә, беҙҙең утрауҙа бер генә бөйөк йыр бар.

Ту-тыя. Ә-ә-ә... Аңланым!

Мөртәт-ша. «Ә-ә-ә» шул. Өс көн срок. Ошо ваҡыт эсендә дуэт әҙер булһын. Әҙер булһа, күмәрләтеп бүләк алырһың, әҙер булмаһа... әҙер булмаһа... Боронғо, ләкин, беҙгә ҡарағанда, имсәк балаһы ғына булған боронғо римляндар әйтмешләй, «тудуторо моторо».

Алтын тәпәй. Асырға! Киҫергә! Вәғәҙәм — иман!

Еҙ томшоҡ. Киҫергә! Асырға! Вәғәҙәм — иман!

Мөртәт-ша. Эйе. Вәғәҙәбеҙ — иман, асыл ҡоштар!

Ут һүнә.

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Диктатор биленә оҙон ҡылыс таҡҡан. Йөрөнә. Ҡылысына гел абына. Би-маза нимәлер бәйләй. Уның бер ҡатаһында — шпор. Мөртәт-ша тура ҡатып тора.

Диктатор. Һы! Яңылыҡтар юҡ, тиһең икән.

Мөртәт-ша. Юҡ. Бөтә утрауҙы, һеҙ әйткәнсә, көндөҙ сыра яндырып, ҡыҙырып, тентеп сыҡтыҡ. Һәммә

ғәскәр, һәммә хунбәндәләр, һәммә әтрәфәләм аяҡҡа баҫтырылды. Шымсылар, күҙәтеүселәр, ошаҡсылар аяҡтан яҙҙы. Бер мин генә, күрәһегеҙ, ныҡ баҫып торам. *(Башын сөйөп ебәрә, сөйләгән китә.)*

Би-маза *(үҙ алдына)*. Аҡһаҡ! Ниңә шул аҡһаҡтар гел маҡтансыҡ була икән?

Ҡайҙалыр өс тапҡыр сәғәт һуға.

Диктатор. Ун биш минуттан өс тәүлек тула! Һы! Тимәк, язалауҙы башларға тура киләсәк. Вәғәҙәм — иман! Әммә мәрхәмәтле булығыҙ. Халыҡтың ундан берен генә аҫырға *(ун бармағының береһен бөкләй)*, биштән берен генә киҫергә *(биш бармаҡтың береһен бөкләй, әҙһенеп ҡарап тора)*. Бер юлы ҡырып ташларға — беҙ ҡырағайҙар түгел. Тере ҡалғандары бәхетле булыр.

Мөртәт-ша. Бәхеткә сумыр.

Диктатор *(бөкләнмәгән туғыҙ бармағына, йәнә дүрт бармағына ҡарай)*. Бына күпме әҙәмде үлемдән ҡотҡарҙым. *(Инде бөкләнгән бармаҡты турайта, күңеле тулып китә.)* И балаларым, балаларым! Ҡайһы ғына бармаҡты тешләһәк тә ауырта... Тик нимә ҡылайым? Көрәш ҡорбан талап итә...

Сәхнә аша баяғы Тән һаҡсыһы уҙып китә. Тынлыҡ. Ниндәйҙер йырға оҡшаған нәмә ишетелә.

Йолҡоштар тауышы.

Йылы йәйҙән меҙ ҡат артыҡ
Беҙҙең өсөн һалҡын ҡыштар.
Туҡлыҡ яман. Аслыҡ рәхәт.
Беҙ — йолҡоштар, беҙ — йолҡоштар.
Эш кәрәкмәй, аш кәрәкмәй,
Геүләп торһон тик алҡыштар.
Ил тераүе — өс бағана —
Беҙ йолҡоштар, беҙ йолҡоштар.
...Көнсығыш аллана,
Ҡояшыбыҙ уяна...

Тышта аҙ ғына ығы-зығы ишетелә. Һыңар күҙ тауышы: «Индерегеҙ беҙҙе! Беҙ ҡояшыбыҙҙың үҙен күрергә теләйбеҙ!»

Диктатор. Кем унда?

Ситтән тауыш. Йолҡоштар.

Диктатор. Индерегеҙ! Минең һарайға теләһә кем инә ала: демократия! Тик теләһә кем кире сыға ғына алмай. Индерегеҙ.

Ғәскәри аҙым менән йыр көйөнә баҫып, теҙелешеп, өс йолҡош инә.

Йолҡоштар.

Эш кәрәкмәй, аш кәрәкмәй,
Геүләп торһон тик алҡыштар.
Ил терәүе — өс бағана —
Беҙ йолҡоштар, беҙ йолҡоштар.
...Көнсығыш аллана,
Ҡояшыбыҙ уяна...

Һыңар күҙ. Стоп! Смирно! Диктатор йәнәптәре...

Диктатор *(ҡул күтәрә)*. Ниндәй ғәйрәт! Ниндәй тәртип! Ниндәй дәрт! Һоҡланам мин һеҙгә, балаларым! Бына кемдән өлгө алырға тейеш сусҡа баш нигилистар, ә улар икмәк һорай. Нахалдар. Тағы ла бер тапҡыр йырлағыҙ әле, йөрәк илереп, күңел тулып китте тамам.

Йолҡоштар баштан уҡ ҡабатлап сыға. Диктатор таҫтамал ҙурлығы ҡулъяулыҡ алып, күҙҙәрен, фәсен һалып, башын һөртә. Сәғәт һигеҙҙе һуға.

Мөртәт-ша. Һигеҙ. Бер секундҡа һуңланыҡ.

Диктатор. Яҙаға керешегеҙ! Тик онотмағыҙ: берәүһе генә шәһит китә — дүртәүе бәхеткә ирешә *(бер бармағын ҡырҡыу ишараһы яһай)*, тик берәүһе ҡорбан була — туғыҙы бәхеткә сума *(уңдан бер бармағын аҫыу ишараһы яһай.)* Вәғәҙәм — иман! *(Йолҡоштарға күрһәтә.)* Ошоларҙан башлағыҙ — урындары ожмахта булыр.

Бөтәһенә лә күренеп, Тән һаҡсыһы уҙа.
Йолҡоштар ҡойолоп төшә.

Һыңар күҙ *(теҙләнеп)*. Ҡояшыбыҙ, айыбыҙ, йондоҙобоҙ!

Диктатор. Ҡояшыбыҙ, тиһәң, шул еткән.

Һыңар күҙ. Ҡояшыбыҙ! Һөйөнсө!

Йәш йолҡош. Һөйөнсө! Һөйөнсө!

Ҡарт йолҡош. Таяҡ! Бына ул! *(Кейем аҫтынан килтереп сығара.)*

Һыңар күҙ. Фарманығыҙ үтәлде.

Диктатор *(яза туктальщға риза түгел)*. Ниндәй таяҡ?

Йәш йолҡош. Ике йәпле, баҡыр башлы таяҡ.

Диктатор. Һы! Былай булғас, язалауҙы кисектереп торорға тура килер.

Мөртәт-ша *(таяҡты алып болғай)*. Еңеү беҙҙең яҡта! Һеҙгә дан, Диктатор йәнәптәре!

Попугай. Ур-ра!

Һыңар күҙ. Вәғәҙә иткән әсмуха... әсмуха... *(кейем йыртығынан алып, фарманды уҡый.)* Бында бер һүҙе төшөп ҡалған. Әйткән бүләгегеҙҙе бирегеҙ ҙә китәйек инде. Беҙ эш кешеләре...

Диктатор *(Мөртәт-шаға)*. Телдән генә әсмуха рәхмәт белдер үҙҙәренә.

Һыңар күҙ. Рәхмәтегеҙ өсөн рәхмәт тә... Рәхмәт тамаҡ туйҙырамы һуң ул?

Диктатор. Минең рәхмәт күңелде күтәрә. Туҡ ҡорһаҡҡа ҡарағанда, күтәренке күңел мең артыҡ. Теге йырығыҙҙа нисек әйтелә әле?

Йолҡоштар *(теҙелеп баҫып йырлап ебәрә)*.

> Эш кәрәкмәй, аш кәрәкмәй,
> Геүләп торһон тик алҡыштар,
> Туҡлыҡ яман, аслыҡ рәхәт.
> Беҙ — йолҡоштар, беҙ — йолҡоштар!
> ...Көнсығыш аллана,
> Ҡояшыбыҙ уяна...

Һыңар күҙ. Ошомо?

Диктатор *(ҡул саба, уға Мөртәт-ша ҡушыла)*. Ошо, ошо. Ай, маладис, ай, афарин! Бына бит минең әсмуха рәхмәтем генә лә кешеләрҙе нисек рухландыра. Бындай әҙәмдәр менән донъя яуларға мөмкин! *(Ҡылысын ҡапшап ҡарай, уны ҡынынан алмай ғына күтәреп төшөрә.)*

Би-маза *(үҙ алдына)*. Бәйләй торам, күҙе китә тора. Сволочь! Ойоҡ бәйләүгә ҡарағанда, хәйләкәр политикаауҙарын бәйләү еңелерәк.

Би-маза менән Попугай репликаларына берәү ҙә иғтибар итмәй.

Диктатор. Таяҡ табылыуға мин, ниһайәт, ризамын. *(Таяҡты ала.)* Һин дә ҡайттыңмы, бырамат? *(Мөйөштәге һепертҡегә бармаҡ янай.)* Быраматтар! *(Әйләндереп-әйләндереп ҡарай.)* Башы ла баҡыр... йәбе лә ике...

Әммә... Әммә йөҙөндә тарихи бөйөклөк сағылмай төҫлө... Миңә хас бөйөклөк сағылмай.

Мөртәт-ша. Сағыла бит. Сағылып тора.

Һыңар күҙ. Сағыла, сағыла! Шул сағылған өсөн, һеҙгә оҡшатып, таптыҡ та беҙ уны. Ана башы һеҙҙең башығыҙ төҫлө тап-таҡыр.

Йәш юлҡош. Йәптәре һеҙҙең аяҡтарығыҙ төҫлө ҡып-ҡыҫҡа, кәп-кәкре...

Ҡарт юлҡош. Кәүҙәһе лә ҡойған да ҡуйған — һеҙҙеке.

Диктатор. Мин икеләнәм, шикләнәм.

Һыңар күҙ. Ике йәп араһында ана бәләкәс кенә үҫентеһе лә бар.

Диктатор. Ана шуныһы шикләндерә лә мине. Әй, Ризыҡсыны саҡырығыҙ! Ул таныһа, шигемде кире алам.

Юлҡоштар ҙа, Мөртәт-ша ла аптырап ҡатып ҡала. Би-маза, һис нәмәгә иғтибар итмәй, тәмәкеһен тарта-тарта, бәйләүен дауам итә. Диктатор ҡылысына абына-һөрөнә йөрөнә.

Би-маза. Художник миңә әйтә: «Һинең кәүҙәң зифалыҡтың сиге, — ти. Унан камилыраҡ хыял ғына була», — ти. Художник күреп, белеп әйтә инде ул.

Попугай. Эс боша...

Ризыҡсы инеп баҫа. Диктатор уға таяҡты һона.

Диктатор. Һорағанға ғына яуап бир: беҙҙекеме?

Ризыҡсы *(ентекләп ҡарай)*. Бының иманы бар. Беҙҙеке иманһыҙ ине.

Диктатор. Һы!

Һыңар күҙ *(теҙләнә)*. Хата! Кисерегеҙ, йәнәптәре! Бутағанбыҙ. Ысыны бына минең ҡуйында тороп ҡалған. Тегеһен беҙ юл ыңғайында яңылыш ҡына тапҡайныҡ.

Диктатор таяҡты алып, Ризыҡсыға һона.

Диктатор. Беҙҙекеме?

Ризыҡсы (оҙаҡ *ҡарай)*. Юҡ. Был инсафлы, беҙҙеке оятһыҙ ине.

Диктатор. Һы!

Һыңар күҙ. Ярлыҡағыҙ, гүзәлдәрҙән-гүзәл Диктаторыбыҙ! Беҙ бына бынауҙарҙың *(Мөртәт-ша менән Ризыҡсыға ымлай)* зирәклеген һынау өсөн, башта юрамал

ялған таяҡтар һондоҡ. Уйнап, шаярып ҡына, һеҙҙе бер көлдөрөү өсөн генә...

Диктатор. Һай, муттар! Һинең бер күҙең ҡайҙа булды?

Һыңар күҙ. Отош уйнағанда, кеше кәртенә ҡараған өсөн, төртөп тишкәйнеләр. Һә-ә! Һеҙҙең ике күҙегеҙ иҫән саҡта, миңә берәүһе лә еткән.

Диктатор. Хаттин ашҡан. Мин дә әүәл заман, казармала саҡта, берәүҙекен бармаҡ менән төртөп тишкәйнем. Бар ине шаян саҡтар...

Һыңар күҙ. Былай булғас, тимәк, һеҙ... Һин хәтерләйһең, таныйһың мине, Диктатор йәнәптәре? Һай, хәтер ҙә һуң үҙеңдә? Ҡана бер... *(Ҡосаҡларға ынтыла, туҡтай.)*

Диктатор *(ҡырыҫ)*. Һы! Хәтерләмәйем. Мин күҙен тишкәндәрҙең бөтәһен дә хәтерләй-таный китһәң, сәсең ҡойолор. *(Фәсен һалып, башын һыйпай.)*

Ҡарт йолҡош *(үҙ алдына)*. Алаптай ауыҙың ябылдымы, маҡтансыҡ.

Һыңар күҙ. Ярар, ярар! Мин — мин түгел! Мин ысын түгел. Ә был таяҡ *(өсөнсө таяҡты сығара)* Фин-фу хандың сапан төймәһен үбеп ант итәм, ысын!

Диктатор *(таяҡты ала, ҡарай)*. Һы! Ысынға ла оҡшап ҡуя. *(Ризыҡсыға бирә.)* Беҙҙекеме?

Ризыҡсы *(тағы ла оҙағыраҡ ҡарай)*. Түгел. Был аҡыллы, сабыр, беҙҙеке дыуамал ине. Быларҙың өсөһөн дә яҡшы күңелле оҫта яһаған.

Диктатор. Ниндәй оҫта?

Ризыҡсы. Изге ниәтле.

Диктатор *(тешен ҡыҫып)*. Кем яһаны? Ҡайһығыҙ изге күңелле? *(Йәш йолҡошҡа.)* Һинме?

Йәш йолҡош. Юҡ, хәҙрәт, мин өйрәнсек жулик, шулер, алдаҡсы.

Диктатор *(Ҡарт йолҡошҡа)*. Һин изге ниәтлеме?

Ҡарт йолҡош. Аллам һаҡлаһын! Мин һуғыш суҡмары, әҙәм үлтереүсе, кеше талаусы! Бына, ышанмаһағыҙ, ҡарағыҙ, урлашҡан өсөн, әле һеҙ тәхеткә ултырғансы уҡ, ҡулымды ҡайырҙылар. Бына мин кем!

Диктатор. Тимәк, һин изге?!

Һыңар күҙ. Хоҙайҙан ҡурҡығыҙ, Диктатор йәнәптәре! Мин шымсы, ошаҡсы, кеше араһын боҙоусы, уйнашсыларҙы ҡауыштырыусы, аферист. Мин хәсис, хә-

шәрәт бер нәмәмен! Минең эсем тулы яуызлыҡ. Хатта мин үҙемдән үҙем ерәнәм.

Диктатор. Һы! *(Таяҡтарҙы кире ала.)* Ә быларҙы Фин-фу хан үҙе яһағанмы ни?

Ҡарт йолҡош. Уның нимәһен борғалап маташырға инде. Беҙ һораныҡ. Дарман оҫта яһап бирҙе.

Диктатор. Оҫта түгел ул, ялғансы, диверсант!

Йәш йолҡош. Дарман ялғансы түгел, беҙ үҙебеҙ уны алданыҡ. Хатта хаҡын да түләмәнек.

Диктатор. Ялғансы! Бөтәгеҙ ҙә ялғансылар, ҡаҙна талаусылар!

Попугай. Дөр-рөҫ, дөр-рөҫ!

Диктатор *(Мөртәт-шаға)*. Ялған таяҡ яһаусыға, уны таратыусыға ғәҙел хөкөм ниндәй яза билдәләй?

Мөртәт-ша. Ғәҙел хөкөм кодексының туғыҙ мең дә ете йөҙ ҙә өсөнсө статьяһы *(уйланған була)*... Эйе, ете йөҙ ҙә өсөнсө статьяһы ул енәйәтте ялған аҡса һуғыуға тиңләй.

Диктатор. Тиңләгәс, нимә эшләтә?

Мөртәт-ша. Йәғни: ике ҡулын бергә шаҡарып бәйләп, аҫып ҡуйырға ҡуша.

Ҡарт йолҡош. Тағы ла оттом! Закон миңә ҡағылмай. Минең ҡулым берәү генә!

Мөртәт-ша. Һыңар ҡуллылар өсөн язаны ике аяғынан аҫыу менән алмаштырырға, тиелгән законда.

Һыңар күҙ. Афарин, закон!

Диктатор. Минең хөкөмөмдө иң ғәҙел, иң шәфҡәтле фарман менән беркетергә!

Йолҡоштар ҡаушап, бөгөлөп, һығылып төшә.

Мөртәт-ша *(сәркәтипкә ҡысҡыра)*. Яҙа бар! Юғиһә, онотола ул.

Диктатор. Беренсе параграф. Ялған таяҡ яһаусы Дарманды, ике ҡулынан шаҡарып, бер аҙна буйы... юҡ, өс көн дә еткән, өс көн буйы ҡала майҙанында аҫып тоторға.

Мөртәт-ша. Ниндәй мәрхәмәтлелек: ни бары өс кенә көн!

Диктатор. Икенсе параграф. Ялған таяҡ тараҡан өс йолҡошто, ҡаты енәйәттәре өсөн, өс сәғәткә муйындарынан аҫып ҡуйырға!

Мөртәт-ша. Ниндәй матур әжәл!

Йолкоштар һушһыҙ йығыла.

Диктатор. Әммә, йолкоштарҙың шәхси сифаттарын иҫкә алып, уларҙы ярлыҡарға һәм һарайыбыҙ штатына алырға. Вәғәҙәм — иман! *(Йомшаҡ.)* Былары беҙҙең үҙ кешеләребеҙ — ышаныслы, тоғро, төплө кешеләр. Былар менән ат урларға, юҡ... Ер шарын урларға мөмкин. Тороғоҙ, йырлағыҙ!

Йолкоштар *(һикереп тора)*.

Эш кәрәкмәй, аш кәрәкмәй,
Геүләп торһон тик алҡыштар.
Ил терәүе — өс бағана —
Беҙ йолкоштар, беҙ йолкоштар...
...Көнсығыш аллана,
Ҡояшыбыҙ уяна...

Мөртәт-ша. Айт-два, айт-два! *(Сығалар.)*

Диктатор. Фу, онота яҙғанмын! Таяҡ бит табылманы. Тимәк, ундан туғыҙҙы, биштән дүртте бәхетле... бәхетле...

Би-маза *(шашып)*. Аҫырға! Киҫергә! *(Бәйләп торған нәмәһен атып бәреп, ырғып тора.)* Туҡта!..

Ут һүнә. Тоҡана. Диктатор һәм Би-маза шул уҡ позала.

Би-маза. Туҡта! Һиңә аҫырға ла киҫергә булһын. Берәр ваҡыт баш тирәләй уйлағаның бармы?

Диктатор. Улар өсөн мин министрҙар аҫрайым.

Би-маза. Улайһа, тыңла! *(Шашып.)* Нимә ул таяҡ? Таяҡ ул — ил намыҫы, ил ҡеүәте, ил терәүе! Ил терәүен кем урлаған тиһең? Вузиянистар урлаған.

Диктатор. Маҡсаттары?

Би-маза. Бүлдермә! Маҡсаттары, тиһеңме? Маҡсаттарымы? Маҡсаттары — һуғыш! Бер заман беҙҙең утрауға ябырылып килерҙәр ҙә, һинең ыштаныңды төшөрөп, ике йәпле, баҡыр башлы таяғың менән арт һабағыңды уҡытырҙар. Бына шулай: шыйып-шыйып, шыйып-шыйып. *(Һелтәп, һуҡҡандай итә, Диктатор, артын тотоп, һикереп-һикереп китә.)* Бына шулай: шыйып-шыйып-шыйып. Үткәрҙеме?

Диктатор. Үткәрҙе генәме? Саҡ-саҡ аҫҡа ебәрмәнем...

Би-маза. Шулай булғас, нимә эшләргә кәрәк?

Диктатор. Ыштанды төшөрмәҫкә кәрәк.

Би-маза. Тинтәк! Таяҡ өсөн башлап үҙебеҙгә һуғыш асырға кәрәк. Бөгөн үк! Хәҙер үк!

Диктатор. Һы! Таяҡ өсөн һуғышмайҙар, таяҡ менән һуғышалар.

Би-маза. Нимә өсөн һуғышалар һуң?

Диктатор. Уныһын илһөйәрлек министры белә. *(Саҡыра.)* Министр!

Мөртәт-ша инә. Би-маза бәйләргә ултыра.

Мөртәт-ша. Дүрт ҡолағым менән тыңлайым, Диктатор йәнәптәре?

Диктатор. Кешелек донъяһы нимә өсөн һуғыша?

Мөртәт-ша. Кешелек донъяһымы? Кешелек донъяһы ни ул... Йә бисә-сәсә өсөн, йә ер өсөн һуғыша. Икеһенең береһе өсөн инде.

Диктатор *(рухланып)*. Мин бисә-сәсәне күптән яулап алғанмын. Тимәк, һуғыш ер өсөн буласаҡ. Килтер әле бында Ер шарын! *(Ялана.)*

Мөртәт-ша *(ҙур глобус сығара. Глобусҡа текләнәләр.)* Донъяның ҡайһы яғын, рәхим итеп кенә...

Диктатор. Үҙебеҙҙең яҡты. Беҙ ҡайҙа?

Мөртәт-ша. Бына. Түтәрәм айға оҡшаған бынау утрау — беҙҙеке.

Диктатор. Ә вузиянистар ҡайҙа?

Мөртәт-ша. Анау өс түтәрәме — уларҙыҡы.

Диктатор. Ниңә уларҙыҡы өс түтәрәм, беҙҙеке берәү генә? Ниңә шулай ул, шайтан алғыры!

Мөртәт-ша. Был хаҡта мин, Диктатор йәнәптәре, бик күп тапҡырҙар тә-ә-рән уйҙарға баттым. Баттым да ҡалҡып сыҡтым.

Диктатор. Һы! Сығып, ни ҡыйраттың?

Мөртәт-ша. Ҡыйраттым, асыш яһаным, иҫбат иттем!.. *(Һалмаҡ.)* Бынан ун ете мең дә алты йөҙ ҙә туҡһан ете йыл элек... *(Уйланып тора.)* Юҡ... туҡһан һигеҙ йыл элек — минең асышыма инде йыл тулды... туҡһан һигеҙ йыл элек вузиянистар утрауҙың дүрттән өс өлөшөн һындырып алып киткәндәр. Ана ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ. Ике утрауҙы бергә килтереп ҡушһаң, ҡып итеп йәбешә лә түп-түңәрәк, бөп-бөтөн була!

Диктатор. Ух, ер ҡараҡтары! Гегемонистар! Вузиянистар! Мин һеҙҙе аҡылға ултыртырмын әле! Хәҙер

үк һуғыш асырға! Дошманды тар-мар итергә! Утрауҙы кире ҡайтарып йәбештерергә!

Мөртәт-ша. Һуғышын һуғыш та, Диктатор йәнәптәре, теге ҡытлыҡ йылда күршеләр беҙгә аҙыҡ биреп үлемдән ҡотҡарғайнылар бит әле.

Диктатор. Ҡотҡармаһындар ине. Ниңә: «Эт һимерһә, эйәһен талай», — тигәнде онотҡандар? Хәҙер үҙҙәренә үпкәләһендәр.

Мөртәт-ша. Анау беҙҙә ут бөткән йылда ут биргәйнеләр...

Диктатор. Бирмәһендәр ине.

Мөртәт-ша. Һораныҡ бит.

Диктатор. Һәр һорағанды бирмәһендәр! Йәнәһе, улар йомарттар, ярҙамсылдар!..

Мөртәт-ша *(ярашып)*. Эйе шул! Бирмәһендәр. Ниңә бирәләр?!

Диктатор *(ҡаты)*. Ҡарарым ныҡ! Һуғыш асырға! Еңергә! Ҡырып бөтөрөргә! Унан өс көнлөк, биш көнлөк, ун көнлөк еңеү тантанаһы иғлан итергә. Һауаға меңүҡ атып, салют бирергә. Мин йөрөгән юлдарға келәм йәйергә, гөл һибергә! Туҡтауһыҙ йыр йырларға: «Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ уяна...»

Мөртәт-ша. Ниндәй татлыһың һин, еңеү тантанаһы! *(Глобусты ҡосаҡлай.)* Ниндәй иҫерткесһең! Йәшәһен Диктатор!

Диктатор *(ике министрына)*. Һиңә лә, һиңә лә бәләкәсерәк ҡылыс тағырға рөхсәт итәм. Хатта бойорам.

Мөртәт-ша *(шпорҙарын сылтыратып тура ҡата)*. Был дәрәжәгә беҙ фәҡирегеҙ, әлбиттә, лайыҡлы түгел. Һеҙ, мәрхәмәтле Диктатор йәнәптәре, ишәгегеҙ һыртына арғымаҡ эйәре — алтын эйәр һалдығыҙ.

Диктатор *(шпорҙарын сыңлатып ҡуя)*. Шулай ҙа йыуашыраҡ берәй алашаға атланып ҡарарға ине.

Мөртәт-ша. Һуғыш бөткәс, еңеү телмәрен һеҙ өҙәңгегә баҫып, толпар ат өҫтөндә һөйләрһегеҙ.

Диктатор. Дулап китмәһә ярай ҙа.

Мөртәт-ша. Теҙгенен үҙем тотоп торормон.

Диктатор *(фәсен һалып, башын һыйпай. Кәйефе һәйбәт)*. Һуғыш асыу өсөн, иң тәүҙә нимә эшләргә кәрәк?

Би-маза ҡул эшен атып бәрә. Һикереп тора.

Би-маза. Китап! Иң тәүҙә китап яндырырға! Шул китапта — кешелектең фекере, хәтере, өмөтө. Фекер — дошман! Хәтер — дошман! Өмөт — дошман! Бөтә яҡшылыҡты, изгелекте, ғәҙеллекте, намыҫты оноторға һәм оноттороррға! Ҡасандыр һиңә шәфҡәт менән һуҙылған ҡулдарҙы ҡырҡып ташларға һәм оноторға! Оноторға! Оноттороррға! Һин асыҡҡан саҡта дуҫың биргән икмәк тәмен оноторға! Оноттороррға! Хәҙер үк урам саттарында, майҙандарҙа, ғибәҙәтханаларҙа усаҡтар яғырға! Шул усаҡтарҙа хәтерҙе — яндырырға! Өмөттө — яндырырға! Фекерҙе — яндырырға! Ялҡын телдәре һауаларҙы ялмаһын! *(Тышта ялҡын шәүләләре күренә. Сәхнә аша Тән һаксыһы үтеп китә.)* Моң ҡоралдарын утҡа ырғытырға, бала уйынсыҡтарын утҡа ырғытырға, ҡурсаҡтарҙы утҡа ырғытырға! *(Тынып тора.)* Шунан һуң ғына һуғыш башларға...

Диктатор. Быныһы раҫ. Тағы нимә кәрәк?

Би-маза. Хәрби марш. Ишетеү менән, дошман ҡоралын ташлап ҡасырлыҡ дәһшәтле марш кәрәк. Бер, ике, өс! Бер, ике, өс!.. *(Ялҡын шәүләһе көсәйә.)* Яна! Яна! Минең хунбәндәләрем ут менән бөйөк тарих яҙа. Мә, ян! *(Шүрлектәге ике-өс китапты утҡа ырғыта.)* Ян! Ян! Ер тетрәткес марш кәрәк! Марш!! Марш!!!

Диктатор. Быныһы ла раҫ. Ул маршты йырлар өсөн кем кәрәк?

Би-маза. Уныһы минең ҡайғым түгел. *(Урынына ултырып, шәп-шәп бәйләй башлай.)*

Диктатор *(тешен ҡыҫып)*. Кем кәрәк, тим?

Мөртәт-ша *(ҡапыл айнып)*. Һалдат кәрәк!

Диктатор. Һалдатҡа нимә кәрәк?

Мөртәт-ша. Бутҡа... тәмәке...

Диктатор *(аяҡ тибә)*. Ахмаҡ! Ҡорал кәрәк.

Мөртәт-ша *(аяҡ тибә)*. Эйе. Ахмаҡ... Ҡорал кәрәк!

Диктатор. Ә ҡоралды кем яһай?

Мөртәт-ша. Дарман оҫта яһай.

Диктатор. Яһаһын. Күп итеп яһаһын! Әмер бир.

Мөртәт-ша. Яһауын яһар ине лә... Ҡулдары буш түгел...

Диктатор. Ҡулдарына ни булған?

Мөртәт-ша. Ул бит өсөнсө көн инде ҡала майҙанында аҫылынып тора. Ҡулдарынан аҫҡайныҡ.

Диктатор. Һы! Бүтән еренән аҫып булмағандыр шул.

Мөртәт-ша. Ә һалдатты ҡайҙан алабыҙ?

Диктатор. Яһаһын!

Мөртәт-ша. Кем?

Диктатор. Кем? *(Үҙенә ҡарай, Мөртәт-шаға, Бимазаға ҡарай.)* Кем, тиһең икән? Бынынһын уйлап ҡарарға кәрәк. *(Фәсен һалып, башын һыйпап уйлана.)*

Ут һүнә. Тоҡана. Мөртәт-ша, шпорҙарын сыңлатып, тапанып тора. Билендә — ҡылыс.

Мөртәт-ша. Һалдат, имеш. Марш, имеш! Ике попугайҙы ҡара-ҡаршы йырлатып ебәрһәң, мең һалдатың ары торһон. Ту-ты-я!

Ситлек күтәреп, әйләнә-тулғана, Ту-тыя инә. Тура креслоға уҙмаҡсы итә. Иҫенә төшөп, туҡталып ҡала.

Ту-тыя. Әллә-лә, трәллә-лә, трәллә-лә, әллә-лә... Күмәртәләп бүләк бирергә саҡырҙыңмы?

Мөртәт-ша. Йыр әҙерме?

Ту-тыя. Бүләк әҙер булһа, йыр әҙер.

Мөртәт-ша. Башта йырлатып күрһәт. Беҙҙең ҡулдан бүләк сығып ҡасмаҫ.

Ту-тыя. Йәгеҙ әле, йән киҫәккәйҙәрем, министр әфәнденең нескә күңел ҡылдарын сиртеп алығыҙ. Йәгеҙ, йә, тартынмағыҙ. *(Попугайҙар өндәшмәй.)* Был ағай беҙгә күмәртәләп бүләк бирер. Йомарт ағай ул. Йәгеҙ, башлағыҙ.

Еҙ томшоҡ. Башлап ебәр, ҡарсыҡ.

Алтын тәпәй. Үҙең башла, ҡарт.

Еҙ томшоҡ. Һинең тауышың моңлораҡ, өләсәһе. Йәштән үк моңло булдың.

Алтын тәпәй. И олатаһы, гел шулай тинең. Таҫма тел!

Еҙ томшоҡ. Инәлтмә инде.

Алтын тәпәй. Әйҙә, улайһа, бергә башлайыҡ.

Еҙ томшоҡ. И раз... башланыҡ!

Бергә *(һуҙып)*.

Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ уяна...
Ҡояшыбыҙ уяна, көнсығыш аллана...
Көнсығыш аллана, ҡо-я-шыбыҙ уя-на...

Мөртәт-ша. Моңло. Һәйбәт. Әммә темп, темп, темп етешмәй! Тимер аҙымлы марш кәрәк! Бер, ике! Бер, ике! Айт-два!

Ту-тыя. Ҡабатларға! *(Дирижерлыҡ итә.)* Башланыҡ! Раз и два!

Попугайҙар *(кыҙып, туктауһыҙ кабатлайҙар)*.
Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ уяна,
Ҡояшыбыҙ уяна, көнсығыш аллана...
Уяна, аллана, аллана, уяна...

Попугай *(ситлектән)*. Тинтәк Попугайҙар. Бер нәмәне туҡтауһыҙ ҡабатлауҙан оялығыҙ саҡ ҡына — ҡарт башығыҙ менән!

Попугайҙар шып туҡтай.

Мөртәт-ша *(риза)*. Күркәм. Камил. Бөйөк тантана көнөнөң иң аҫыл, иң моңло йыры буласаҡ был. Тағы ла камиллаштыр. Әмер көт.

Ту-тыя. Бүләк, тигәйнең... Имен-аман саҡта бәхилләтһәң тигәйнем...

Мөртәт-ша. Бүләк беҙҙән сығып ысҡынмаҫ. Көт. Бүләк көтөү — үҙе бүләк ул. *(Тутыяны әйләнеп ҡарап сыға.)* Баҡһаң, һин үҙең дә арыу ғына бүләк икәнһең. *(Ҡулын ыуа.)* Дәүләт эштәренә бирелеп, Хоҙай эштәре лә онотола башланы, ахырыһы...

Ту-тыя. Оялтаһың да... Мин ифрат инсафлы, ифрат әҙәпле, ифрат оялсан туташмын... ҡатынмын. *(Әйләнәтулғана.)* Әллә-лә... трәллә-лә, трәллә-лә, әллә-лә...

Мөртәт-ша. Уныһы кругом күренеп тора.

Ту-тыя. Күҙе бар кешегә ни... тәңре биргән нәмә күренер инде.

Мөртәт-ша, әтәсләнеп, Ту-тыяға яҡынлаша. Попугайҙар ҡанаттары менән йөҙҙәрен ҡаплай. Ут һүнә. Тоҡана. Диктатор — үҙ бүлмәһендә.

Диктатор. Уйлай торғас, таптым... *(Ырғып тора. Ҡылысына абына-һөрөнә йөрөй.)* Таптым! Ванна эсендә үҙен үҙе тапҡан теге ҡарт ҡарсығына нимә тип ҡысҡырған әле? Ә! *(Тағы абына.)* Эврика! Эврика! Эврика! *(Бөйөк ҡиәфәткә инә.)* Ер шары хәҙер бына ҡайҙа буласаҡ — минең табан аҫтында! *(Шпорын сылтыратып, аяҡ тибә.)* Табан аҫтында! Художник! Художник, тим!!

Сепрәккә төрөлгән портрет күтәреп, Художник йүгереп инә.

Художник. Бына һеҙҙең сираттағы ете йөҙ ҙә етмеш етенсе иң гүзәл һүрәтегеҙ. Йөҙөгөҙҙән нур сәселеп тора.

Диктатор. Нур? Ниңә кәрәк ул нур?

Художник. Донъяны яҡтыртырға.

Диктатор. Һы! Донъя былай ҙа кәрәгенән тыш яҡты. Саманан тыш...

Художник. Тап һеҙҙең нурлы йөҙөгөҙ алдында, Диктатор йәнәптәре, донъя тоноҡланып, ҡараңғыланып ҡаласаҡ та. Әҫәрҙең тәрән идеяһы — ана шунда.

Диктатор. Көслө идея. Ҡана, күрһәт әле.

Художник яйлап ҡына сепрәкте сисә.

Художник. Бына хәҙер һеҙ, беҙҙең һөйөклө фирғәүенебеҙ, үҙегеҙҙең бер бите айға, икенсе бите ҡояшҡа тиң гүзәлдәрҙән-гүзәл, камилдарҙан-камил йөҙөгөҙҙө күрәсәкһегеҙ. Хатта төргән сепрәге аша нур бөркөлөп тора. Бына...

Сепрәкте сисеп бөткәс, Художник ҡаушап ҡала.
Диктатор аптырай.
Оҙаҡ пауза.

Диктатор. Был нимә? Айы — бар... Ҡояшы — бар... Ә минең аҡыллы маңлайым, үткер күҙҙәрем, һиҙгер танауым, зирәк ҡолаҡтарым ҡайҙа? Көслө эйәгем ҡайҙа?

Художник. Был ни... Был... Мин бутағанмын, хаталанғанмын. Был икенсе картина, бөтән картина. Яңылыш алып килгәнмен. Хәҙер мин... *(Картинаны алмаҡсы итә.)*

Диктатор. Туҡта! Кем портреты был?

Художник. Ул портрет та түгел, деталь, бер өлөш кенә.

Диктатор. Кемдең өлөшө? Ниндәй өлөшө?

Художник. Кемдеке тип ни инде, бер кемдеке лә түгел... Былай ғына... Яттан ғына...

Диктатор. Министр! Мөртәт-ша!

Мөртәт-ша инә.

Мөртәт-ша. Диктатор йәнәптәре...

Диктатор *(портретҡа күрһәтә)*. Бында нимә төшөрөлгән? Нимә был?

Мөртәт-ша, бер ары китеп, бер яҡын килеп, оҙаҡ ҡарай.

Мөртәт-ша. Дөрөҫөн генә әйткәндә, был, Диктатор йәнәптәре, был... бында оят булһа ла әйтәйем, Би-маза ханымдың йоп-йомро ғына шәрә осаһы төшөрөлгән.

Художник һуштан яҙып йығыла. Уға иғтибар итмәйҙәр.

Диктатор. Эйе, йөҙ түгеллеген хәҙер мин дә төҫмөрләнем. *(Ҡулбашын йыйыра.)* Ә кемдеке икәнен танырға...

Мөртәт-ша. Би-маза ханымдыҡы, тип торам да...

Диктатор. Дәлил?!

Мөртәт-ша. Бынау еренә, уң битенә ҡарағыҙ әле. Бармаҡ баҫымы тиклем генә нимә ул? Бармаҡ баҫымы тиклем генә ҡара миң. Би-маза ханымдың шундағы миңе...

Диктатор *(һокланып)*. Бына кемдә зиһен, бына кемдә хәтер ул! Ә мин нисәмә йыл буйы шуны шәйләмәгәнмен дә. Бер ҙә юҡҡа ғына мин һине илһөйәрлек һәм ғәҙел хөкөм министры итеп ялламаным шул. Мин кеше таныйым да ул. *(Бошонон.)* Ә бына һүрәтте танып булманы...

Мөртәт-ша. Танынығыҙ ҙа инде...

Диктатор. Һы! *(Тирә-яғына ҡарана.)* Художник ҡайҙа булды?

Художник. Мин бында. Мин хәл эсендә, йәғни әжәл сигендә, ятам.

Диктатор *(Мөртәт-шаға)*. Күпме дөгө бирәһегеҙ уға?

Мөртәт-ша. Үҙегеҙ бойорғанса, йомартлыҡ күрһәтеп, тәүлегенә сирек ус бирелә.

Диктатор. Ә министрҙар нормаһы күпме?

Мөртәт-ша. Хәрби положение индерелгәндән бирле, министрына ҡарап, бер устан ус ярымға тиклем кәметелде.

Диктатор. Әгәр йән биреп өлгөрмәһә, художникка бынан ары хәрби белгестәр паегы... ике ус тәғәйенләргә!

Художник. Мин әлегә йән бирмәй торам.

Диктатор. Бирмәй торғас, тор! Встать!

Художник аяҡ үрә баҫа, сайҡалып тора.

Художник. Мин фәҡирегеҙ шул тиклем баһаға лайыҡ түгелмен, был йомартлығығыҙҙы, Диктатор йәнәптәре, үтес итеп, йәғни аванс итеп ҡабул ҡылам.

Диктатор. Һы! Аванс таратырға мин һиңә Америка абзый түгел, улайһа тейерен генә бирегеҙ — бер ус хаттин ашкан.

Мөртәт-ша. Диктатор йәнәптәренең нурлы йөҙө урынына бисәләрҙең арт һанын төшөрөп ҡуйған буяусыға быныһы ла әле...

Диктатор. Етте! *(Бөйөк ҡиәфәткә инә.)* Был турала һүҙ бөттө! Хәҙер яңы эпоха — һуғыш һәм Еңеү эпохаһы башлана. Художник! Тыңла! Илгә һалдат кәрәк! Бер дивизия, ун дивизия, йөҙ дивизия кәрәк! Баштан-аяҡ ҡоралланған ғәскәр кәрәк! Армада кәрәк! Легион кәрәк!

Художник *(Би-маза булмәһенә ымлай)*. Хәлдән килһә ни...

Диктатор *(аңламай)*. Хәлең кәрәкмәй һинең, ҡулдарың кәрәк, танауың кәрәк, бумалаң кәрәк, ҡатырғаң кәрәк.

Художник. Ә-ә... Улай булдырып була. *(Ҡалҡынып ҡуя.)* Минме... мин илһамланып, ярһып китһәм, йөҙ дивизия ғына түгел, мең дивизия ла эшләй алам. Һәр һалдаттың уң ҡулында — уҡлы йәйә, һул ҡулында — һөңгө, билендә — ҡылыс, муйынында — суҡмар, арҡаһында — туҡмаҡ, ҡатаһында — шпор...

Диктатор *(тыныс ҡына)*. Һалдатҡа шпор рөхсәт ителмәй. *(Шпорын сылтыратып ҡуя.)*

Художник. Ярай, шпорҙарын һөртөп ташлармын. *(Рухланып.)* Баштан-аяҡ ҡоралланған иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ғәскәрҙе яһап бөтөргәс тә, мин ошолай һеҙҙең алдығыҙҙа тура ҡатып *(хәрби аҙым менән Диктатор алдына килә)*, ошолай рапорт бирермен: «Бөйөк полководец! Еңелмәҫ армада һуғышҡа һәм еңеүгә әҙер! Ҡабул итегеҙ!»

Диктатор. Ҡабул итәм. Фарман сығарам. Яҙығыҙ!

Мөртәт-ша *(ҡысҡырып)*. Әй, сәркәтип, яҙа бар! Юғиһә, онотола ул.

Диктатор. Туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан туғыҙынсы хәрби фарман. Беренсе параграф. Көслөләрҙән-көслө, батырҙарҙан-батыр бихисап ғәскәремде бөтә утрауҙы өс тапҡыр әйләндереп, вузиянистарға йөҙ ҡаратып, теҙеп сығырға. Дошмандың ҡотон алырға, паника тыуҙырырға! Икенсе параграф. Вузиянистарға ульти... ульти... ультимат... мат ебәрергә.

Мөртәт-ша. Ультимат түгел, ультиматум тип әйтеү дөрөҫ.

Диктатор. Мин ҡалай әйтһәм, шулай дөрөҫ. Бынан ары мин әйткәнсә төҙәтеп әйтергә! Ульти... ультимат

ебәрергә: ун ете сәғәт эсендә Вузия утрауын кире килтереп беҙгә йәбештерергә! Йәбештермәһәгеҙ, бөтәгеҙҙе лә йә аҫабыҙ, йә киҫәбеҙ! Нимә тигән әле морондары ла кибеп бөтмәгән ғәрәптәр?

Мөртәт-ша. «Тудуторо моторо», йәғни пленға алмаясаҡбыҙ.

Диктатор. Йәшәһен еңеү! Өсөнсө параграф. Еңеү шәрәфенә ете көнлөк... ун ете көнлөк... егерме ете көнлөк тантана иғлан ҡылырға! Байрам осоронда сит мәмләкәт илселәрен ҡабул итмәҫкә, сит ил караптарын портта рға индермәҫкә, бала тыуҙырыуҙы тыйырға, мәйет күмеүҙе туҡтатып торорға. Вәғәҙәм — иман! *(Пауза.)* Хәҙер... минең фармандарымдан башҡа, бөтә ҡағыҙ затын, минең портреттарымдан башҡа, бөтә һүрәт затын утҡа яғырға, яндырырға, көл итергә! Йәшәһен пожар!

Ялҡын шәүләһе көсәйә. Сәхнә аша Тән һаҡсыһы уҙып китә. Уның бер ҡулында — ҡылыс, яурынында — арҡан, икенсе ҡулында — факел. Ут һүнә. Тоҡана. Ризыҡсы һәм Урам һепереүсе. Ризыҡсы ҡулында — таяҡ.

Ризыҡсы. Бына Хоҙайҙың рәхмәте. Яҙған мал булғас ни... Үҙе. Тап үҙебеҙҙеке, иманһыҙ. Ҡайҙан таптың?

Урам һепереүсе. Сүп араһында ята ине. Шундай затлы нәмәме ни?

Ризыҡсы. Әллә тағы. Таяҡтың затлыһы ни ҙә затһыҙы ни... Мәгәр юғалғас, үҙҙәре һаташып сыҡты. *(Бышылдап.)* Хатта шул арҡала һуғыш сығармаҡсы булып бөттөләр.

Урам һепереүсе. Тиктәҫ нәмә түгелдер инде.

Ризыҡсы. Ярай, ни булһа ла, бер мәшәҡәттән ҡотолдоҡ.

Урам һепереүсе. Вәғәҙә иткән бүләген беҙгә мул ғына тамыҙһа, шул еткән. Тамыҙырмы икән?

Ризыҡсы. Әллә тағы, бүләк өсөн тип анау көндә Мөртәт-ша таштан йүкә һуйып ултыра ине.

Урам һепереүсе *(аңламай)*. Йүкә бирһәләр, арҡан ишермен, сабата үрермен, һиңә лә үрермен...

Ризыҡсы. Ишерһең, үрерһең...

Урам һепереүсе. Тиҙ генә ташшырып, хужаларҙы һөйөндөрөп, һөйөнөсөн алып, китә һалырға ине. Юғиһә, урамдарҙы тағы фарман баҫты, һепереп ташларға кәрәк.

Ризыҡсы. Көтәйек әле.

Урам һепереүсе. Бәҡыр башы тиҙәккә буялғайны ла, япраҡ менән һөртөп ҡуйҙым.

Ризыҡсы. Унығын дөрөҫ эшләгәнһең.

Туп тура баҫып Диктатор, Би-маза, Мөртәт-ша инә. Уларҙың баштарында — хәрби каскалар.

Диктатор. Яуға! Яуға! Яуға!

Министрҙар. Яуға! Яуға! Яуға! Еңеүгә! Айт-два! Айт-два!

Ризыҡсы. Зинһар, яу асмағыҙ, сабыр итегеҙ! Таяҡ табылды.

Урам һепереүсе. Һөйөнсө! Бына таяҡ!

Ризыҡсы. Ысын таяҡ... Үҙебеҙҙең таяҡ. Боронғо таяҡ!

Диктатор. Ниндәй боронғо таяҡ ул?

Ризыҡсы. Ошо таяҡ *(ала)*. Юғалған таяҡ, Фин-фу хан таяғы!

Би-маза. Провокация! Диверсия! Ҡоротҡослоҡ! Былар — вузиянистар ебәргән лазутчиктар! Шпиондар былар! Бер ниндәй ҙә таяҡ юҡ!

Ризыҡсы. Бар, бар...

Мөртәт-ша. Юҡ! Уны вузиянистар урланы.

Ризыҡсы. Ипләберәк ҡарағыҙ, ипләберәк... Бына бәҡыр башы, бына ике йәбе... Урам һепереүсе тиҙәк араһынан табып килтерҙе. Бүләк тә уға тейеш.

Диктатор *(каскаһын һыйпап ҡуя. Таяҡты ала, министрҙарға күрһәтә)*. Таныйһыңмы?

Би-маза. Юҡ!

Диктатор. Таныйһыңмы?

Мөртәт-ша. Юҡ!

Диктатор. Шпиондар! Диверсанттар! Ҡотҡо таратыусы вузиянистар! Ниндәй яза тейеш быларға?

Мөртәт-ша. Ҡырҡырға! Ҡотҡо тыңлаған өсөн ҡолаҡтарын, ҡотҡо һөйләгән өсөн телдәрен ҡырҡырға!

Диктатор. Башҡарығыҙ!

Ризыҡсы. Бынан ары, тел менән татып ҡарамайынса, аштың тоҙон мин нисек самалармын һуң?

Диктатор. Һы! Раҫ әйтә. Аштың тоҙо таман булмаһа, тәме китә. Быныһын үҙем һынағаным бар. Нимә ҡылырға?

Мөртәт-ша. Теленә амнистия яһап, ҡолаҡтарын ғына ҡырҡырға ла ярай. Быны беҙҙең ғәҙел төп законыбыҙ һыйҙыра.

Б и - м а з а . Закон! Закон, имеш! *(Ярһый.)* Тораһығыҙ ҙа закон ҡойроғона тотонаһығыҙ, сереп бөткән либералдар, хуш күңелдәр, ебегәндәр. Долой закон! Тоҙһоҙ йыуынты һыу эсермен, бешмәгән картуф ашармын, әммә юғары принциптарымдан сигенмәм. Юҡ ғәйепкә – ун яза, бер ғәйепкә – мең яза! Амнистия – хурлыҡ! Амнистия – позор! Был һүҙҙәр беҙҙең байрағыбыҙға яҙылырға тейешле. *(Тын ала.)* Сибәр туташтар йортонда иркә генә ғүмер иткән нескә күңелле, йомарт тәбиғәтле сибәр ҡыҙ баланы, йәғни мине, күрәш быуа нисек сындырҙы. Ниндәй батыр һәм шәфҡәтһеҙ итте мине күрәш! Мин үҙем хаҡында һөйләргә яратмайым. Яратмаһам да – һөйләйем. Мин күрәш тураһында һөйләйем. Үҙем күрәшкән күрәштең матурлығы һәм әҙәбе тураһында һөйләйем. Амнистия юҡ! Вузиянистарҙан килеп ингән ул һүҙҙе утҡа атырға кәрәк! *(Ырғытҡан ишара яһай. Гөлт итеп ҡала.)* Быуа шулай. «Закон» һүҙен утҡа атырға кәрәк! *(Ата, гөлт итеп ҡала.)* Быуа шулай... Шпион таяҡты утҡа атырға кәрәк! *(Диктатор ҡулынан таяҡты алып ырғыта. Гөлт итеп ҡала.)* Быуа шулай. *(Тағы ла нимәләрҙелер алып ырғыта, гөлт итеп ҡала.)* Быуа шулай, быуа шулай... *(Бәйләй торған нәмәһен алып, ҡыҙып-ҡыҙып бәйләргә тотона.)*

Д и к т а т о р *(тыныс)*. Әҙ генә аш килешмәһә, минең эсем гөбөрләй башлай. Башлай ҙа туҡтамай. Көн буйы, төн буйы гөбөр-гөбөр моңая. Хатта күңел тулып китә. Күңел тулдымы, мин инде Диктатор түгел, сепрәккә төрөлгән ит киҫәге. *(Үҙен ҡарап сыға .)*

М ө р т ә т - ш а . Кисерегеҙ, Диктатор йәнәптәре, киҫәге түгел, өйөмө, ит өйөмө.

Д и к т а т о р . Эйе, ит өйөмө. *(Уйлана.)* Һы! Нимәлә туҡталғайныҡ әле?

М ө р т ә т - ш а . Һеҙҙең эсегеҙ гөбөрләү мәсьәләһендә.

Д и к т а т о р . Минең эсем гөбөрләүгә йәки гөбөрләмәүгә донъя яҙмышы бәйләнгән. Минең эсем гөбөрләгән саҡта, донъя тыныс, ғәмһеҙ йоҡлап китә ала. Кемгә файҙа уның ғәмһеҙ йоҡлауынан? Кемгә? Әлеге вузиянистарға! *(Эсе гөбөрләй.)* Быуа тағы башланды.

М ө р т ә т - ш а *(Ризыҡсы менән Урам һепереүсегә күрһәтә)*. Зарығып, ашҡынып хөкөм көтәләр, Диктатор йәнәптәре.

Д и к т а т о р . Хөкөм? Аштың тоҙо һәр саҡ таман булһын. Ҡалғаны закон ҡарамағында. Законһыҙ эш ҡылыр-

ға ярамай. *(Ризыҡсы менән Урам һепереүсегә.)* Барығыҙ, балаларым, законды тыңлағыҙ. Сыҙам һәм батыр булығыҙ.

Сәхнә аша Тән һаҡсыһы уҙа. Ут һүнә. Тоҡана. Диктатор, Мөртәт-ша.

Диктатор. Художник яһаған ғәскәрҙе утрау уратып теҙҙегеҙме?

Мөртәт-ша. Теҙелде. Өс ҡат килеп сыҡты.

Диктатор. Быныһы һәйбәт, ышаныслы булған. Хәрби телдә өс шалон тип атала ул.

Мөртәт-ша. Эйе, өс эшелон.

Диктатор. Өс шалон!

Мөртәт-ша. Өс шалон!

Диктатор. Вузиянистарға ульти .. ульти... ульти...

Мөртәт-ша. Ультимат...

Диктатор. Ебәрелдеме?

Мөртәт-ша. Ебәрелде.

Диктатор. Нисә сәғәт уҙҙы?

Мөртәт-ша. Алтмыш алты.

Диктатор. Мин уларға күпме ваҡыт биргәйнем?

Мөртәт-ша. Ун ете сәғәт.

Диктатор. Һы!

Мөртәт-ша. «Һы!» шул.

Диктатор. Ҡана, килтер әле алыҫты яҡын итеп күрһәтә торған торбаңды.

Мөртәт-ша *(билендәге торбаны сисеп бирә)*. Тиҫкәре яғынан ҡарайһығыҙ, был яҡтан ҡараһаң, улар мәңге лә килеп етәсәк түгел. Киреһенсә...

Диктатор *(асыуланып)*. Нимә «киреһенсә»? Нимә?

Мөртәт-ша. Киреһенсә, улар алыҫая ғына барасаҡ.

Диктатор *(дөрөҫ ҡарай)*. Был башы һәйбәт. Беҙҙең файҙаға эшләнгән икән. Ана, ана, Вузия утрауы урынынан ҡуҙғалды түгелме? Ҡуҙғалды бит! Ҡуҙғал-ды! *(торбаһы, тирбәлеп тора.)* Əһә, әһә! Былай табан килә. Ҡотоғоҙ остомо, сусҡа баш вузиянистар! *(Мөртәт-шаға.)* Утрау килеп еткәс, бөтә халҡын ошо һепертке менән диңгеҙгә һепереп төшөрөргә! *(Һепертке һелкенеп ҡуя.)* Бөтәһен дә!

Мөртәт-ша. Торбағыҙ һелкенә, Диктатор йәнәптәре, минең арҡаға терәгеҙ. *(Эйелә.)*

Диктатор. Шулай икән шул. Хәҙер һелкенмәй. Вузия утрауы ла урынына ултырҙы. *(Үкенеп.)* Юҡҡа терә-

нем. *(Уйланып.)* Ә Вузия утрауын ошо ерҙә итеп, беҙҙең ярға терәтеп күрһәтә торған торба эшләтеп буламы?

Мөртәт-ша. Былай ғына булмай, әгәр ҙә һеҙ әмер бирһәгеҙ...

Диктатор. Әмер бирәм... Кемгә бирәйем?

Мөртәт-ша. Уның оҫтаһы ҡорал яһаусы Дарман ине лә...

Диктатор. Дарманға әмер! Өс көн эсендә...

Мөртәт-ша. Әмерен әмер ҙә, Диктатор йәнәптәре, мәрхүмдең ҡулдары буш түгел бит әле.

Диктатор. Нимә булған уның ҡулдарына?

Мөртәт-ша. Ҡала майҙанына илтеп, ике ҡулынан аҫып ҡуйғайныҡ та...

Диктатор. Икенсе тапҡыр аҫтығыҙмы ни? Башбаштаҡтар! Закон боҙоусылар! Иманһыҙҙар!

Мөртәт-ша. Шул беренсе тапҡыр аҫылыуынан бушағаны юҡ әле.

Диктатор. Дарманды бушатырға!

Мөртәт-ша. Ул тере түгел шул. Йән биргән, йәғни үлгән.

Диктатор. Ныҡ үлгәнме ни?

Мөртәт-ша. Бик ныҡ шул.

Диктатор. Һы! Шундай торба эшләнһә, Вузия утрауы бына ҡайҙа сумасаҡ. *(Салбар кеҫәһен ҡабартып күрһәтә.)* Эш торбаға килеп төртөлдө. Бөтә хикмәт — торбала! Торба! Торба!

Хәүефле торба тауышы ишетелә. Диктатор, аптырап, ҡулындағы торбаның ике башынан да тыңлап ҡарай. Баш сайҡай.

Диктатор. Ҡайҙан сыға ул торба тауышы?

Мөртәт-ша. Моғайын, торбанан сығалыр.

Тәүҙә Һыңар күҙ йүгереп инә. Арҡаһында — уҡ-һаҙаҡ. Торба ҡысҡырта.

Һыңар күҙ. Боевая тревога! Боевая тревога! Мин үҙемдең ҡарсыға күҙем менән күрҙем, алыҫтан күрҙем...

Диктатор. Нимә күрҙең?

Һыңар күҙ. Ана тегенән — һауанан, юғарынан, болоттар аҫтынан, вузиянистар яғынан — вузиянистар болото ажғырып килә.

Диктатор. Ниндәй болот?

Һыңар күҙ. Ҙур болот! Ҡара болот!
Диктатор. Дәлил?!
Һыңар күҙ. Сусҡа башына оҡшаған. Вузиянистар...

Көслө күкрәү.
Мөртәт-ша, Диктатор, ҡурҡып, ергә йығыла. Һикереп торалар.

Диктатор. Сабырлыҡ! Һалҡын ҡанлылыҡ! Бөтә уҡсыларҙы ла аяҡҡа баҫтырырға! Бөтә уҡтарҙы ла тоҫҡарға! Яуға! Яуға! Яуға!

Мөртәт-ша. Йәшәһен еңеү!

Диктатор *(торбанан ҡарай)*. Ҡаса! Ҡасып китеп бара! Дошман паникала! Дошман сигенә! Ҡыуып етергә һәм юҡ итергә.

Мөртәт-ша. Торбағыҙҙың тиҫкәре яғынан ҡарайһығыҙ, Диктатор йәнәптәре!

Диктатор. Ҡайһы яғынан кәрәк, шул яғынан ҡарайым. Өйрәтмә! Уҡсылар, һөңгөсөләр, суҡмарсылар, ҡылыссылар! Минең командамды тыңлағыҙ!

Йәш йолҡош арҡаһына катушка аҫып, Ҡарт йолҡош телефон аппараты күтәреп йүгереп инә. Ҡарт йолҡош Диктаторға телефон трубкаһын һона.

Ҡарт йолҡош. Мә, ошо трубкаға ҡысҡыр. *(Сығып йүгерәләр.)*

Диктаторҙың бер ҡулында — күҙәтеү торбаһы, икенсеһендә — телефон трубкаһы. Ул полководец ҡиәфәтендә бер аҙға ҡатып ҡала.

Мөртәт-ша. Был бөйөк сәғәттә минең урыным яу ҡырында, ут эсендәлер тип уйлайым. Бөйөк Диктатор! Ебәрегеҙ мине! Мин китәйем! Ебәрегеҙ мине! Һеҙҙең өсөн ҡанға батайым! Рөхсәт итегеҙ!

Диктатор. Рөхсәт итәм. Бат!

Мөртәт-ша *(аптырап, ҡаушап)*. Төптән уйлап рөхсәт иттегеҙме, бөйөк...

Диктатор. Иң төптән.

Мөртәт-ша. Һәләк булһам, үкенеп иламағыҙ.

Диктатор. Иламам.

Мөртәт-ша. Рәхмәт. Мең рәхмәттәр. *(Сығып йүгерә.)*

Диктатор. Уҡсылар, һөңгөсөләр, суҡмарсылар, ҡылыссылар, күҫәкселәр! Тыңлағыҙ минең команданы! Ҡа-

сып барған дошманды эҙәрләргә, ҡыуып етергә, юҡ итергә, пыран-заран килтерергә!

Артҡы планда Художник ҡатырғанан яһаған ҡоралды һалдаттар — уҡсылар, күҫәкселәр, суҡмарсылар, ҡылыссылар өҙлөкһөҙ уҙа.

Диктатор *(торбаһынан ҡарай)*. Уҡсылар! Уңға атығыҙ! Һулға атығыҙ! Өҫкә атығыҙ! Аҫҡа... Аҫҡа атығыҙ! Суҡмарсылар! Суҡмарсылар, һеҙгә әйтәм: артҡа һелтәмәгеҙ! Алға, тик алға ғына һелтәгеҙ. Һөңгөсөләр! Ҡылыссылар! Һай, маладис! Ике шалон менән, өс шалон, дүрт шалон менән барығыҙ! Ана шулай! Икенсе шалон! Ныҕыраҡ һелтә! Йыға һелтә! Ҡойроғона атығыҙ, уҡсылар! Ҡойроғона! Ур-ра! Дошман ҡаса!

Попугай. Брр-ра-во, Диктатор!

Ҡул эшен тотоп, Би-маза килеп сыға. Атып бәрә.

Би-маза. Тимәк, һуғыш! Тимәк, еңеү! Тимәк, тантана! Митинг! Грандиоз митинг йыйырға! Бөтә ғаләмде, аҡһағын-туҡһағын, һуҡырын-ғәрибен митингыға ҡыуырға! Яу ҡырынан туп-тура майҙанға ҡыуырға бөтәһен дә! Митингыға! Митингыға! *(Ярһып сығып китә.)*

Аҡһай-туҡһай, Мөртәт-ша йүгереп инә.

Мөртәт-ша. Тарихи еңеү! Тарихи еңеү! Арт һабаҡтарын уҡыттыҡ. Һеҙҙең даһи командағыҙ аҫтында, Диктатор йәнәптәре, вузиянист болотоноң йөнөн теттек, сусҡа муйынын һындырҙыҡ! Пыран-заран килтерҙек!

Диктатор. Дауам ит, генерал, дауам ит.

Мөртәт-ша. Итәм, итәм... Рәхмәт! Полный генералдыр бит?..

Диктатор. Ярты. Яртыһы ла хаттин ашҡан. Погонды бер яурынына ғына тағырһың.

Мөртәт-ша. Рәхмәт. Дауам итәм, итәм. Генералдың исеме нисек? Исеме кем? Әй, сәркәтип, яҙып ҡуй. Исемен яҙ!

Диктатор. Исеме юҡ. Дауам ит.

Мөртәт-ша. Итәм, итәм: тетмәһен теттек!

Диктатор. Бәреп төшөрҙөгөҙмө?

Мөртәт-ша. Үҙен төшөрә алманыҡ, әммә ҡуләгәһенең иҙмәһен иҙҙек. Ергә йығып, имгәткәнсе тапаныҡ та диңгеҙгә ырғыттыҡ.

Диктатор. Маладис! Бөтә ғәскәремә рәхмәт белдерәм. Художникка рәхмәт белдерәм! *(Ҡапыл ҡысҡырып ебәрә.)* Ур-ра! *(Уға Мөртәтша ҡушыла.)*

Попугай. Диктаторға дан!

Тышта «ура» тауыштары. Халыҡ гөж килә. «Йәшәһен Диктатор!», «Диктаторға дан!» тигән ауаздар яңғырай.

Диктатор. Ниндәй тауыш унда?

Йәш йолҡош йүгереп инә.

Йәш йолҡош. Майҙанда – халыҡ! Митинг һине... Һеҙҙе, беҙҙе... Һөйөклө Диктаторҙы, көтә һеҙҙең, беҙҙең... Һөйөклө халҡығыҙ. *(Кәпәсен күккә сөйә.)* Йәшәһен еңеү! Йәшәһен Диктатор!

Диктатор. Балаларым!.. Бар, улым, әйт уларға: хәҙер барам, көтөгөҙ мине, балаларым! *(Китергә ынтыла, ҡылысына абынып йығыла. Мөртәт-ша менән Һыңар күҙ уны торғоҙа.)* Һы! Быуна хәҙер ул йыуашыраҡ берәй атҡа атланып ҡарарға ине.

Мөртәт-ша *(ҡысҡыра)*. Өҙәңгегә баҫып, еңеү телмәре һөйләр өсөн Диктаторға арғымаҡ килтерегеҙ!

Һыңар күҙ *(алыҫтан)*. Ат бирегеҙ Диктаторға!

Попугай. Диктаторға ат бирегеҙ!

Диктатор. Ат килтерегеҙ миңә! Ат бирегеҙ! *(Ынтыла, тағы ла ҡылысына абынып, һөрлөгөп китә.)*

Ут һүнә. Тоҡана.

Диктатор кабинеты. Залға ҡарап, нәҡ уртала Диктатор ултыра. Уның бер аяғы – гипста. Теге саҡта аттан ҡолап имгәткән. Диктатор эргәһендә – Портрет. Унан алыҫ түгел Би-маза ҡул эше эшләп ултыра. Бер эскәмйәлә – өс йолҡош. Уларҙың ауыҙҙарында – ҙур-ҙур сигаралар, күкрәктәрендә – ҙур-ҙур ҡалай миҙалдар. Мөйөштә, һепертке эргәһендә, Тән һаҡсыһы һәм Убырлы ҡарсыҡ баҫҡан. Художник уларҙың күмәк портретын төшөрә.

Художник. Уларҙың тарихи еңеүе шәрәфенә. *(Диктаторға ымлай.)* Заманыбыҙҙың иң бөйөк картинаһы ярала, әфәнделәр! *(Йолҡоштар эре генә баш ҡаға.)* «Диктатор һәм уның көрәштәштәре» тип аталасаҡ ул.

Мөртәт-ша. Минеңсә, «Һөйөклө Диктатор һәм уның ярандары» тип атау рәсыраҡ төҫлө.

Би-маза. «...ярамһаҡтары» тиһәң, тағы ла дөрөҫөрәк булыр.

Диктатор. Һы! Булмаҫ. Үҙ исемен картина үҙе ҡысҡырып тора: «Һөйөклө вә хөрмәтле Диктатор һәм башҡалар!»

Художник. О! Яҡты ғаҡыл эйәбеҙ, һеҙ хаҡ әйтәһегеҙ. Эйе, эйе. «Һөйөклө вә хөрмәтле Диктаторыбыҙ һәм башҡалар» тип аталасаҡ ул даһи картина. *(Шашып эшкә тотона.)* Һәм башҡаларҙың ҡайһыһы баҫып, ҡайһылары ултырып, ҡайһылары сүгәләп тороп.

Диктатор. Сүгәләп торһондар! *(Йолҡоштарға ымлай, улар сүгәләй.)*

Художник. Сүгәләп һәм теҙләнеп тороп... Ә һеҙҙе, Диктатор йәнәптәре, бына ошонда, киндерҙең нәҡ уртаһында, а-а-а-аҡ атҡа атландырып төшөрәм.

Диктатор. Һы! Халыҡтан өркөп, быныһы ла мине ҡолатмаҫмы һуң! Икенсе аяҡтан да яҙыуың бар. *(Гипсҡа һуға.)* Һынмаҫ борон һәйбәт ине был аяҡ. Шпоры сылтырап тора ине...

Мөртәт-ша. Был юлы теҙгенен тағы ла нығыраҡ тотормон.

Диктатор. Тотмаҫһың! Диктаторҙы етәкләп йөрөргә кем рөхсәт итте һиңә? *(Иҫән аяғын тибеп ҡуя.)*

Мөртәт-ша. Итмәне. Итергә хаҡы ла юҡ! Йәшәһен Диктатор!

Диктатор. Ә ул ат өркөп китһә...

Художник. Китмәҫ. Мин уны ыҫмалалы буяу менән киндергә нык итеп йәбештерермен. Ҡымшана ла алмаҫ.

Диктатор. Шулай ғына итмәһәң... Юғиһә, теге саҡ бынау иҫәр портрет киндерҙе ярып килде лә сыҡты бит...

Художник. Ул саҡ минең тәжрибәм аҙ ине.

Диктатор. Портрет та йәшерәк, дыуамалыраҡ ине шул.

Портрет. Өс көнлөк бер һеләгәй инем.

Художник *(эшләй)*. Йолҡоштар, тырнанмағыҙ! Тырнанмағыҙ, тим бит! Ул һеперткегә ниңә төкөрәһең, Убырлы ҡарсыҡ? Төкөрмә! Ҡаҡырынма! Ана ҡояшыбыҙ *(Диктаторға ымлай)*, таш түмәр шикелле, нисек тыныс ултыра. Өлгө алығыҙ, наҙандар!

Бөтәһе лә тынып ҡала. Художник Диктатор эргәһенә барып сүгәләй, унан мольберт янына барып мазок яһай, тағы Диктатор эргәһенә килә, тағы мольбертҡа бара.

Диктатор. Ниңә сәбәләнәһең?

Художник. Мин, Диктатор йәнәптәре, үҙемде лә төшөрәйем тигәйнем...

Диктатор. Урыныңда ғына баҫып тор! *(Мольбертҡа күҙ һалып.)* Бөйөк булғас, төшөрөрһөң... Йәғни тегендә менгәс... *(Күкте күрһәтә.)*

Художник. Миңә бында ла ярай. *(Мольберт янына барып баҫа.)*

Художник эшләй. Бер аҙға шымып торалар. Би-маза сыҙамай, ҡул эшен ырғытып бәрә.

Би-маза. Сәнселеп киткере! Быcағыма ҡаҙалғыры! Еңдек, имеш! Еңеүҙең был тиклем дә йоҡо килтергес тыныс, яманһыу булырын белһәм, еңеү өсөн, валлаһи тип әйтәм... биллаһи тип әйтәм... ҡылымды ла ҡыймылдатмаҫ инем! Еңеү түгел, йыназа был! Гүр был! Их, сибәр туташтар йортонда булһа ине был тантана. Ер һелкенеп торор ине. *(Көрһөнә.)* Бер сыҡҡан кешегә ожмах юлдары ябыҡ шул... *(Ултыра, бәйләргә тотона.)*

Попугай. Эс боша!..

Диктатор. Был тынлыҡ — ике дауыл араһындағы антракт ҡына. Ошо аяғым ғына төҙәлеп алһын...

Мөртәт-ша. Ә беҙгә күңелле! Беҙгә рәхәт! Еңеү беҙҙе яңынан-яңы батырлыҡтарға рухландыра! Шулаймы, йолҡоштар?! *(Йолҡоштар, сүгәләгән көйө, сөйләгә-сөйләгә баш эйә.)* Ана, күрәһегеҙме, Диктатор йәнәптәре, халыҡ нисек ихлас ҡыуана!

Диктатор *(әйләнмәй генә)*. Күрәм. Рәхмәт, халҡым.

Мөртәт-ша. Диктатор йәнәптәре! Һеҙҙең батыр көрәшегеҙ, бөйөк еңеүегеҙ, изге йәрәхәттәрегеҙ, ҡаты ғазаптарығыҙ тантанаһының тажы итеп, йөҙөк ҡашы итеп, сәнғәтебеҙҙең иң гүзәл ҡаҙанышын — бөйөк мөғжизә тәҡдим итәм... Һеҙгә арналған йырҙы ике попугай ҡара-ҡаршы баҫып йырлаясаҡ.

Диктатор. Натурмутмы ни?

Мөртәт-ша. Дуэт. *(Хәтерләп.)* Эйе. Натурмут. Рөхсәтме?

Диктатор. Йырлаһын. Күп йырлаһын. Беҙҙең ҡолағыбыҙ тонғансы, йырлаһын.

Художник үҙ эшен дауам итә. Мөртәт-ша ҡулға ҡул һуға.

Мөртәт-ша. Ту-ты-я!

Ситлек күтәреп, Ту-тыя инә. Ингәндә әлеге моңон көйләй.

Ту-тыя. Трәллә-лә-лә, ләл-лә-лә... ләл-лә-лә, трәл-лә-лә...

Мөртәт-ша *(Ту-тыяға)*. Ошо тирәнән уҙма.

Диктатор. Ҡайһылары Попугай һуң быларҙың? Ситлектәгеләреме, әллә бынауһымы? *(Ту-тыяға ымлай.)*

Мөртәт-ша. Бөтәһе лә... Башла, Ту-тыя!

Ту-тыя. Йә, аҫылҡайҙарым, аҡыллыларым, Диктаторчик йәнәптәренең йырын моңло итеп, күңелдәр тулырлыҡ итеп йырлап ебәрегеҙ әле.

Бөтәһе лә ауыҙ асып көтә.

Мөртәт-ша. Ту-ты-я! Йәһәтерәк!!

Ту-тыя. Йәгеҙ, йән киҫәккәйҙәрем, йәгеҙ...

Мөртәт-ша *(Попугайҙарға)*. Йырлағыҙ, күмәртәләп бүләк алырһығыҙ.

Ту-тыя. Йырлағыҙ. Моңло итеп йырлағыҙ, бәпестәрем!

Попугайҙар өндәшмәй.

Художник *(Попугайҙар эргәһенә килә)*. Ну, коллегалар... Профессия өсөн ғорурлығығыҙ ҡайҙа һеҙҙең?

Попугайҙар өндәшмәй.

Мөртәт-ша *(асыулана башлай)*. Диктатор алдында ялындырып торорға һеҙ кем ул тиклем, йолҡоштар? Йырлағыҙ!

Диктатор. Йырларға! Мин, Диктатор, үҙем бойорам: йырларға!

Попугайҙар өндәшмәй.

Ту-тыя. Харап итәһегеҙ бит мине, харап ҡына итәһегеҙ... *(Илай.)*

Диктатор *(асыуланып)*. Фарман сығарам!

Мөртәт-ша *(аяҡ тибә)*. Фарман!

Диктатор. Беренсе параграф. Ике попугайға... Исемдәре нисек?

Ту-тыя. Алтын тәпәй менән Еҙ томшоҡ.

Диктатор. Алтын тәпәй менән Еҙ томшоҡҡа йырларға әмер бирәм. Икенсе параграф. Ҡарышһалар, Алтын тәпәйҙе асырға. Еҙ томшоҡто киҫергә. Вәғәҙә — иман! *(Йомшаҡ.)* Йә, мин көтәм.

Попугайҙар өндәшмәй.

Ту-тыя. И, илаһым! Ниндәй генә зәхмәттәр ҡағылды икән һеҙгә? Эстәрегеҙ тулы моң ине бит...

Мөртәт-ша. Йырларға! Хәҙер үк йырларға!

Би-маза *(трибунаһын ҡора башлай)*. Йырлағыҙ, сволочтар!

Ҡарт йолҡош *(йоҙроҡ күрһәтә)*. Йырлағыҙ, хәшәрәттәр! Юғиһә, быуып ырғытам!

Һыңар күҙ менән Йәш йолҡош *(бергә)*. Йырлағыҙ, бына шулай, бына шулай: ләлә-ләлә-лә...

Художник. Улайһа, бергәләп йырлайыҡ, коллегалар: «Көнсығыш аллана, ҡояшыбыҙ...» *(Бүтәндәрҙең усал ҡарашын күреп туҡтап ҡала. Попугайҙарға.)* Яҡшы түгел, коллегалар...

Попугайҙар өндәшмәй.
Бөтәһе лә, хатта рамканан башын һонған Портрет та, төрлө тауышҡа — йә янап, йә ялбарып, йә шомланып, йә асыуланып — Попугайҙарға өндәшә: «Йырлағыҙ! Йырлағыҙ! Йырлағыҙ!» Хатта тыштан да: «Йырлағыҙ! Йырлағыҙ!» — тигән ауаз килә. Ҡапыл тынлыҡ.

Еҙ томшоҡ. Тотондолар бер һүҙҙе Попугай урынына ҡабатларға. Үҙегеҙҙең ахмаҡ йырығыҙҙы үҙегеҙ йырлағыҙ, таш баштар!

Диктатор. Ә! Ә!.. Фарман!! Ишеттегеҙме?!

Еҙ томшоҡ. Төкөрҙөк һинең фарманыңа!

Мөртәт-ша. Әй, сәркәтип! Онотолмаҫ борон...

Диктатор. Онотолмаҫ! *(Иҙәнгә ятып, йоҙроғо менән иҙәнде туҡмай.)* Былар — вузиянистар! Аҫырға! Киҫергә! Эстәрен ботарларға!

Мөртәт-ша *(шпорҙарын сыңлатып тапана)*. Вузиянистарҙы киҫергә! Аҫырға! Ботарларға!

Бөтәһе лә шашып, Попугайҙарҙы ҡамап ала, хатта Портрет менән Һепертке лә ҡоштарға ташлана. Тик Убырлы ҡарсыҡ ҡына ҡапыл юҡ була. Тән һаҡсыһы шул урынында баҫып тора. Тамам тилергән төркөм эсенән ситлек ватыҡтарын ырғыталар, унан һуң ҡош йөнө, ҡауырһындар оса башлай.

Еҙ томшоҡ тауышы. Бәхил бул, ҡарсығым!
Алтын тәпәй. Бәхил бул, ҡартым!

Яза тамам. Таралышалар. Һәр кем аҫтыртын ғына бүтәндәрҙе күҙәтә. Художник, буяу һөрткән һымаҡ, ҡулындағы ҡанды сепрәк менән һөртә. Йәш йолҡош, ҡото осоп, үҙенең ҡулдарына ҡарай, Һыңар күҙ ҡулдарын артҡа йәшергән, Ҡарт йолҡош ҡулын түшенә һөртә. Мөртәт-ша, күҙен төрлө яҡҡа тәгәрәтеп, ҡанлы бармаҡтарын еҫкәй. Ту-тыя, ауыҙ асҡан көйө, илай алмай, сәнсә бармағына ҡарап тора. Би-маза услап-услап үҙ башына ҡош йөнө өйә. Портрет рамкаға инеп ултыра. Һепертке мөйөшкә барып һөйәлә. Диктатор иҙәндән торматсы итә. Тора алмай. Уны берәү ҙә шәйләмәй.

Попугай. Диктаторға ат бирегеҙ! Ат бирегеҙ Диктаторға!!

Диктатор. Ат бирегеҙ миңә. Ат! Ат!! Ат!!! *(Иҙәнде тыҡмай.)*

Шаршау

1980

ЙӘЙӘҮЛЕ МӘХМҮТ

Моңһоу комедия, ике бүлектә

ҠАТНАШАЛАР:

Мәхмүт Юлбирҙин — йәйәүле кеше
Инсаф Мисбахов — «эйе шул»
Мәҙинә — һылыу ҡатын
Зәмзәгөл — театр уйнай
Шәрифә — секретарь
Тауыш — тыштан ишетелә
Баш — тәҙрәнән тығыла
Егет — ишектән инә

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

КӨМӨШ ТУЙҒА ЕГЕРМЕ БИШ ЙЫЛ ҠАЛҒАС

Бүлмә. Бер мөйөштә кейем ҡалыбы тора. Йыһаз-фәлән бик самалы. Бүлмә уртаһында ир менән ҡатын ҡапма-ҡаршы баҫҡандар. Уларға 23—25 тирәһе. Араларында — ҙур сумаҙан һәм кескәй баҙар сумкаһы. Ваҡиғалар бөтә урында ла өйҙөң беренсе ҡатында бара. Күршелә гел туй. Әле лә шулай. Мәжлес байтаҡтан бара булырға тейеш. Шау-шыу ныҡ ҡыҙған. Берәү килбәтһеҙ тауыш менән йырлай:

Беҙҙең б(ы)рат Хәбиморат
Хан ҡыҙына өйләнгән.
Аяҡ тибеп типтерәбеҙ:
Капиталы түләнгән.

Тауыш. Аҡырма шул саҡлы!

Йырлаусы. Хаҡым бар! Имею право. Иң ҡиммәтле бүләк кемдеке? Минеке! Тыйма мине!

Тауыш. Һөмһөҙ!

Йырлаусы. Һөмһөҙ усында алтын ялтырай, һөмләнөкөндә баҡыр ҡалтырай. *(Кеткелдәп көлә. Тағы йырлай.)*

Наша б(ы)рат Хәбиморат
Хур ҡыҙына өйләнгән...

Сылтырап тегендә һауыт-һаба ватыла. Тауыштар.

— Әсе! Әсе!
— Горько!
— Үбешһендәр!
— Үбешһендәр!

Шапылдатып ел тәҙрәне яба. Тауыштар тына.

Мәхмүт. Рәхмәт һиңә, ел. Тәҙрәне ваҡытлы яптың.

Мәҙинә. Йөрәкте лә бына шулай шапылдатып ябып булһа икән ул...

Мәхмүт. Ниңә ябырға уны?

Мәҙинә. Анау ише һөмһөҙлөк бәреп инмәһен өсөн. Ә ул инә.

Мәхмүт. Инер ҙә, ҡот күрмәй, сығып китер.

Мәҙинә. Сыҡһа ярай ҙа...

Оҙаҡ пауза.

Мәхмүт. Бәлки, китмәҫһең, Мәҙинә. Китмә, ә!

Мәҙинә. Китәм.

Мәхмүт. Сәбәбен дә әйтмәҫ булдың. Шулай бер сәбәпһеҙ ир ташлайҙармы ни? Өс йыл буйы татыу ғүмер ит тә...

Мәҙинә. Үҙ-үҙем менән татыу була алманым мин, Мәхмүт.

Мәхмүт. Шулай бер сәбәпһеҙме?

Мәҙинә. Сәбәбе — һинең менән мин. Мин һиңә иш түгел, һин миңә ҡуш түгел.

Мәхмүт. Күрәһең... моғайын... Мин насар ир булып сыҡҡанмындыр.

Мәҙинә. Насар түгел һин, һин бүтән кеше. Хыялһыҙ һин.

Мәхмүт. Хыялһыҙ?! Мин хыялһыҙмы? Беләһең дә инде, ике йылдан институт бөтөрөргә хыялланам, һинең менән Мәскәүҙә Ҙур театрҙа «Аҡҡоштар күле» балетын

ҡарарға хыялланам, Венгрияға барып, атайымдың ҡәберен күрергә хыялланам, йәнә итәк тулы бала үҫтерергә хыялланам, һин табып бирһәң, әлбиттә...

Мәҙинә. Тағы?

Мәхмүт. Тағымы? Тағы хыял өҫтөнә хыял инде ул.

Мәҙинә. Ә мөлкәт ишәйтеү йәки мәртәбәгә менеү тураһында берәй тапҡыр хыялланғаның булдымы? Исмаһам, берәй тапҡыр?

Мәхмүт. Ул турала ниңә хыялланып торорға? Бына бер о-оло сумаҙан мөлкәтебеҙ бар. Һыймағаны ана тороп та ҡалды әле *(ялангасланып ҡалган булмәгә күрһәтә)*. Мәртәбәгә иһә мин күптән менеп баҫҡанмын.

Мәҙинә. Һин? Мәртәбәгә? Мин күрмәгән ниндәй мәртәбәләргә менде икән был?

Мәхмүт *(күкрәгенә төртә)*. Былмы? Минме? Мин, Мәҙинә, егерме дүрт йәштә генә көйө тегенсе-оҫтамын... Минән кейем тектерер өсөн кешеләр айырым сиратҡа баҫа.

Мәҙинә *(көрһөнә)*. Ҡалабыҙҙа тағы бер сират өҫтәлгән икән, былай булғас...

Мәхмүт *(мыҫҡыллауҙы аңламай)*. Өлкән оҫталар алдында миңә хатта уңайһыҙ.

Мәҙинә. Бахырҡайым минең, бахырҡайым! Энәгә таянып берәүҙең дә дәрәжә түбәһенә менгәне юҡ әле. *(Ҡапыл ярһып.)* Унда менеү өсөн теш кәрәк! Тырнаҡ кәрәк!

Мәхмүт *(үҙенекен һөйләй)*. Бәлки, мине берәй заман, Гофман ағай шикелле, «Алтын энә» тип тә атарҙар әле.

Мәҙинә. Атанылар ҙа ти... Шунан?

Мәхмүт. Шунанмы? Шунан һәйбәт була.

Мәҙинә. Йә, хуш, Йәйәүле Мәхмүт! Һин бер ваҡытта ла арғымаҡҡа атлана алмаясаҡһың. Үлсәүең дә бер ҡоластан артмаясаҡ: иңе-буйы... буйы-иңе... Кил, ҡосаҡлайым үҙеңде.

Сумаҙан аша үрелеп, Мәхмүтте муйынынан ҡосаҡлай. Шул көйө байтаҡ торалар.

Мәхмүт. Китмә, Мәҙинә. Бәлки, үҙгәреп тә ҡуйырһың.

Мәҙинә. Һин үҙгәрмәйәсәкһең. Шунан ҡурҡам да.

Мәхмүт. Ҡурҡаһың? Минәнме?

Мәҙинә. Мин үҙем дә аңлап еткермәйем, бары һиҙенәм генә: башым өҫтөндә ниндәйҙер өнһөҙ битәр —

һинең намыҫың — гел аҫылынып тора һымаҡ. Выжданымды болғата.

Мәхмүт. Бәлки, минең мөхәббәтем шулай...

Мәҙинә. Юҡ, Мәхмүт. Мөхәббәттән ҡурҡмайҙар... Йә, йола үтәйек.

Мәҙинә — сумаҙанына, Мәхмүт, лап итеп, иҙәнгә ултыра. Күҙ йәштәрен тыймай Мәхмүт илай.

Мәхмүт. Өйҙән сығып китһәң дә, күңелдән сығып китмәйһең, Мәҙинә. *(Йөрәген тота.)* Яна-яна бына ошонда ҡалаһың... Донъяла ышыҡ тапмай, өшөһәң дә, йонсоһаң да, кире әйләнеп ҡайт. Мин усаҡты һүндермәм. Гел өйҙә булырмын. Таң атҡанда ҡайтһаң, бигерәк тә һәйбәт. Яңы көндө бергәләп башларбыҙ...

Мәҙинә. Мәхмүт! Ҡыҙған мине! *(Ҡапыл тора.)*

Мәхмүт. Эйе... Ҡыҙғанам. Ана ҡояш та батып килә. *(Аҡрын ғына тора.)*

Мәҙинә *(бүлмәгә күҙ йөрөтөп сыға, башын сайҡай, ҡулъяулығын ала)*. Ҡайҙа аяҡ атлағанымды белһәм икән... Хушығыҙ, өс йыл бергә ғүмер иткән нәмәләр!

Мәҙинә сумканы ала, Мәхмүт сумаҙан күтәрә.

Мәхмүт *(ишек төбөндә туҡтала)*. Ҡал, Мәҙинә, мин һине яратам бит.

Мәҙинә. Яратаһың да, ти... Яратыуыңдан ни файҙа?

Мәхмүт. Яратыуҙанмы? Файҙамы? Был хаҡта уйлағаным юҡ ине. Моғайын, файҙа юҡтыр яратыуҙан...

Сығалар. Ул ишек асып япҡанда, тағы тәҙрә асыла, туй шаушыуы бәреп инә. Баяғы йыр ҡабатлана.

Беҙҙең б(ы)рат Хәбиморат
Фәрештәгә өйләнгән,
Ни ҡыланһаҡ та килешә:
Капиталы түләнгән...

Асыҡ тәҙрәнән Баш күренә. Бая йырсыны тыйған кеше булырға тейеш.

Баш. Күршеләр! Эй, күршеләр, тим! Туйҙың самай ҡыҙып ҡына еткән сағы. Әйҙәгеҙ... Бәй, былар ҡайҙа булған? Ишек-тәҙрәләре асыҡ, уттары янып тора, үҙҙәре

тю-тю, *(Һыҙғыра)* хыт... хыт... хыт талап сыҡ. *(Буш бүлмәне байҡай.)* Күр-ше-ләр! Күр-шеләр! Һеҙ ҡайҙа?

Тышта тауыштар.

— Әсе!

— Әсе! Үбешһендәр!

Б а ш. Үбешһендәр ҙә үбешһендәр! Бер юлы үбешеп бөткәс, алдағы көнгә нимә тороп ҡалыр һуң?

Баш юғала. Ут һүнә.

МАТЕРИАЛ ҺАЙЛАУ

Иртәнсәк. Кейем тегеү ательеһы «Тумыртҡа». Әле берәү ҙә юҡ. Тирә-яҡта — төрлө-төрлө кейем ҡалыптары. Бер аҙҙан заказдар ҡабул итеүсе З ә м з ә г ө л инә. Киң ситле һалам эшләпәһен һалып, рыцарҙарса теҙ сүгеп, сәләм бирә. Кейем ҡалыптарын Зәмзәгөл төрлө спектаклдәрҙәге персонаждарға оҡшатып кейендергән.

З ә м з ә г ө л. Хәйерле иртә, кейем ҡалыптары, йәғни ханымдар һәм әфәнделәр! Нисек төн сыҡтығыҙ? Фу! Һауаһына үтек аҫып ҡуйырлыҡ.

Барып тәҙрәне аса. Кейем ҡалыптарына берәм-берәм мөрәжәғәт итеп, барлап сыға.

...Һин, бисара Чио-Чио-сан, һаман көтәһең дә көтәһең. Капитаның бөгөн дә килмәнеме? Диңгеҙ бик дауыллы шул... Минең кеүек сабыр бул. *(Һөйөп ала.)* Леди Макбет! Оятһыҙ нәмә, түшеңде ҡапла аҙыраҡ! *(Тегенең түшен яба.)* Ирсәк! Хатта ана Дон Жуанды оялтҡанһың, башын ситкә борған! *(Дон Жуанды баштан-аяҡ ҡарап сыға.)* Был нимә тағы? Тубығына тиклем йәнә батҡаҡҡа батып ҡайтҡан. Ҡайҙа аҙып йөрөнөң шулай төн оҙон? Төҙәлергә нисә быуат инде вәғәҙә бирәһең, күпме тәүбә итәһең. Бер тәүбәңде унар, юҡ... йөҙәр ҡат боҙаһың. Сыҙамлыҡ бөттө, кавалер! Мин һине товарищеский судҡа бирәсәкмен. Һинең ишеләр арҡаһында ана күпме Чио-Чио-сандар ҡанлы йәш түгә. Бөтә «Тумыртҡа» ательеһын мәсхәрәгә ҡалдыраһың. Позоришь! Йән кисәккәйем Наташа Ростова! Исмаһам, һин аҙыраҡ күҙ-колаҡ булыр инең шул Дон Жуанға. *(Ары үтә.)* Әжмәғол ағай! Һин

ҡасан әле бында классик образдар араһына килеп индең? Моғайын, милли кейемдәр ҙә тегә башлаясаҡбыҙҙыр. Моғайын, шулайҙыр. Уҙған аҙнала ана Ҡуян Ғәләүиҙе лә килтереп баҫтырғайнылар. Улай тартыныш, юғалып ҡалманы. Үҙен батыр тота. Оҫта итеп төштәр күрә. Йә әле, Ҡуян Ғәләүи ағай, бөгөн ниндәй төштәр күрҙең?

Артабан Зәмзәгөл Ҡуян Ғәләүи менән Ғиззәтулланың һөйләшеүен уйнап күрһәтә.

— Ғиззәтулла ағаҡайым! Бөгөн үҙекәйеңде үтә йәмле, үтә тәмле итеп төшөмдә күрҙем. Дан төш! Һабан туйы, имеш. Һин ошо итексән, кәзәкейсән көйө бағанаға менеп киттең, имеш. Эй менәһең, эй менәһең, имеш. Артыңдан күҙ ҙә эйәрмәй, имеш. Осона уҡ менеп еттең дә миңә ҡул болғаның. Болғаның да аҡ болотҡа аштың...

— Болотҡа ашыуҙы нимәгә юрайһың? Хоҙайға яҡынайтып, һин мине яҡты донъянан...

— Юҡ, юҡ, Ғиззәтулла ағаҡайым, Алла һаҡлаһын! Моғайын, Ғиззәтулла ағаҡайым, үҙекәйеңде район каланчаһына үрләтерҙәр, һинең менән мине лә...

— Һине үрләтмәйәсәктәр.

— Ни гонаһтарым өсөн?

— Кеше тураһында төш күреүҙең, ҡустым, файҙаһы юҡ уның. Район масштабына үрләйһең килгәс, төшөңдә бағанаға үҙең үрмәлә.

— Үҙекәйеңдән уҙыпмы, Ғиззәтулла ағаҡайым?..

— Уҙма.

— Мин һинең турала төш күреүем менән дә... Ни инде...

— Бәхетлеһең, бәхетлеһең...

— Бәхетлемен...

— Бағанаһы нығ инеме һуң? Һығылманымы?

— Һинең кәүҙәкәйҙәреңә сыҙағас, нығ инде...

Зәмзәгөл. Тик шул ялағайлығын ғына һаман ташлай алмай Ҡуян Ғәләүи ағаҡайыбыҙ. Тәрбиә эшен көсәйтергә кәрәк булыр.

Бүтән ҡалыштарға мөрәжәғәт итә.

Сәләм һеҙгә, исемһеҙ геройҙар! Сәләм һиңә, бөйөк масса!

Өҫтәле артына килеп ултыра.

Ҡылый Байтүрә әгәр был юлы ла йүнле роль бирмәһә, тотам да ошолар менән *(манекендарға күрһәтә)* бер үҙем театр ҡуям. Үҙем режиссер, үҙем артист, үҙем художник, үҙем – Зәмзәгөл Гөлзаманова! Ишетәһеңме, ҡылый Байтүрә? *(Манекендарға.)* Һеҙ өндәшмәйһегеҙ. Булдырып булмаҫ тиһегеҙме? *(Бошоноп.)* Булмаҫ шул... *(Пауза. Инәлеп.)* Байтүрә! Байтүрә ағай!! Байтүрә Түрәкәевичкай! Бер генә роль бир инде. Бәләкәйҙе генә булһа ла... Үҙем өсөн түгел, Әбделхаҡ алдында маҡтанған һүҙем өсөн кәрәк, Байтүрәкәй Түрәкәевичкай, тим...

Инсаф инә. Ул 55 йәштәр тирәһендә, ҙур кәүҙәле, һүлпән хәрәкәтле кеше.

Инсаф. Шулай инде ул, ҡыҙым, берәүҙе саҡыраһың, икенсе килеп инә. Мин Инсаф Мисбахович... Мисбахов. *(Ҡарана.)* Кейем ҡалыптары күбәйгән икән бында. Элек улай түгел ине.

Зәмзәгөл. Байыйбыҙ.

Инсаф *(ҡулын һуҙа)*. Инсаф Мисбахович Мисбахов. Һаумыһығыҙ!

Зәмзәгөл. Һаумыһығыҙ! *(Ҡарап тора.)* Әллә һеҙ немецмы, ағай?

Инсаф. Ниңә немец, ниңә грек түгел?

Зәмзәгөл. Немецтың Бах тигән бөйөк композиторы булған. Ана шул Бах һеҙҙең фамилияғыҙҙың нәҡ уртаһына кереп ултырған.

Инсаф *(үҙ алдына)*. Мисбахов. Шулай икән шул. Бөйөк булған, тиһеңме? *(Көлә.)* Үҙе ике ижек араһына һыйған. Бах...

Зәмзәгөл. Бахыр...

Инсаф. Кем?

Зәмзәгөл. Бах. Бүтән урын тапмаған икән.

Инсаф. Эйе шул... Әммә һәр кемдең эсендә үҙенең Бахы ултырыуы ихтимал...

Зәмзәгөл. Танылмаған талант тигән һүҙ ул *(үҙенә күрһәтә)*.

Инсаф. Бахты ҡуйып торайыҡ. Уның үҙ музыкаһы, минең үҙ музыкам... Музыка тип инде...

Зәмзәгөл. Улайһа, ултырып уйнағыҙ.

Инсаф *(ултыра)*. Бынан тап егерме биш йыл әүәл ошо ательела йәш кенә бер тегенсе миңә туй костюмы теккәйне. Ҡара костюм. Бармы икән әле?

Зәмзәгөл. Костюммы?

Инсаф. Юҡ, теге йәш тегенсе... Ҡул арты еңел булды. Бәхетле йәшәнек. Хәҙер бына көмөш туйыбыҙ етә. Яңы костюм кәрәк.

Зәмзәгөл. Исеме нисек һуң?

Инсаф. Онотҡанмын шул. Буйсан ғына, ҡаҡса ғына егет ине буғай.

Зәмзәгөл. Ул саҡта мин бында эшләмәй инем шул, Инсаф ағай.

Инсаф. Ҡайҙа эшләй инегеҙ?.. Хәйер, һеҙ бала ғына бит әле. Нисә йәштә?

Зәмзәгөл. Ун һигеҙем тулды.

Инсаф. Эйе шул... Ҡулы ҡотло булды уның. Яңы кейем кешене йә бәхетле, йә бәхетһеҙ итә. Беҙҙе бәхетле итте. *(Зәмзәгөлгә.)* Бәхеттең нимә икәнен беләһеңме?

Зәмзәгөл. Беләм!

Инсаф. Һин бәхеттең нимә икәнен беләһең? Һин? Бәхеттең?

Зәмзәгөл. Беләм шул! Мөхәббәт! «Любовь, свободно век кочуя...» «Кармен»!

Инсаф. Күсеп йөрөй торған нәмә мөхәббәт түгел, ел була ул. Ел!

Зәмзәгөл. «Иҫәм, елдәр иҫкәндә, үҫәм, гөлдәр үҫкәндә...» Халыҡ йыры.

Инсаф. Үҫергә насип булһын. *(Хәтерләй.)* Бер аяғын — уңынмы, һулынмы — һөйрәтеберәк атлай ине.

Зәмзәгөл. Кем? Карменмы?

Инсаф. Тегенсе... Уңын шикелле...

Зәмзәгөл. Һеҙ өҙөп кенә әйтегеҙ — уңынмы әллә һулынмы?

Инсаф. Һулын буғай.

Зәмзәгөл *(йылмая)*. Ярай, барыбер аҡһаҡ инде.

Инсаф. Ниңә йылмаяһығыҙ?

Зәмзәгөл *(йылмая)*. Былай ғына.

Инсаф. Былай ғына ахмаҡ та йылмаймай. Һеҙ аҡыллы, мөләйем...

Зәмзәгөл *(йылмая)*. Рәхмәт!

Инсаф. Нимәгә рәхмәт?

Зәмзәгөл. Былай ғына, тоҡ-томалға.

Инсаф. Тоҡ-томалға рәхмәт әйтмәйҙәр, тоҡ-томалға бер нәмә лә эшләмәйҙәр.

Зәмзәгөл. И-и, ағай! Тоҡ-томалға әллә нәмәләр эшләйҙәр. Хатта... Хатта алдашалар. Ана ҡылый Байтүрә.

Инсаф. Эйе шул...

Зәмзәгөл. Ул Байтүрәне һеҙ ҙә беләһегеҙме ни?

Инсаф. Юҡ. Мин тегенсене әйтәм... Керпектәре ифрат оҙон ине. Мин керпеге оҙон кешеләрҙе ҡыҙғанам. Ғүмерһеҙ була улар. Һине лә ҡыҙғанам...

Зәмзәгөл. Минең керпектәрем йәбештерелгән ул. Мин шундай роль уйнаясаҡмын.

Инсаф. Ҡайҙа?

Зәмзәгөл. Халыҡ театрында.

Инсаф. Эйе шул. Бөтәбеҙ ҙә уйнайбыҙ.

Зәмзәгөл. Тимәк, һеҙ ҙә артист.

Инсаф. Түгел. Мин туй уйнаясаҡмын. Көмөш туй. Теге тегенсенең ҡулы ҡотло булғайны. Бәхетле йәшәнек... Яңы кейем кешене йә бәхетле...

Зәмзәгөл. Йә бәхетһеҙ итә.

Инсаф. Дөрөҫ. Һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

Зәмзәгөл *(хәйләкәр)*. Тәжрибәнән сығып...

Инсаф. Сәсе бөҙрә буғай...

Зәмзәгөл *(пырхылдап көлөп ебәрә)*. Әйтте тағы...

Инсаф. Һин көлмәй-йылмаймай ғына һөйләш әле минең менән. Кемдән һорашып, тәғәйен генә беләйек икән?

Зәмзәгөл. Минән! Минән!

Инсаф. Тимәк, ул бар?

Зәмзәгөл. Бар! Ундай тегенсе бар, тик бөҙрә сәс урынында *(көрһөнә)* иҫтәлектәр генә тороп ҡалған...

Инсаф. Ошонда эшләйме?

Зәмзәгөл. Эшләй ҙә, эшләмәй ҙә...

Инсаф. Әллә нисек, аңлап еткермәйем. Эшләйме әллә эшләмәйме?

Зәмзәгөл. Көнләксе ул бында. Аҙнаһына бер тапҡыр — йә шәмбе, йә йәкшәмбе килә.

Инсаф. Сәйер икән. Күрәһең, тикәй көндәрҙә төшөмлөрәк бүтән кәсептә йөрөйҙөр. Көн итергә кәрәк шул һәр кемгә.

Зәмзәгөл *(йылмая)*. Әллә тағы, төшөмө нисектер, кәсебе бар.

Инсаф. Улай икән. Әммә нисегерәк итеп...

Зәмзәгөл. Инсаф Мисбахович ағай! Һеҙ миңә оҡшаныҡыҙ. Һеҙ йыуашһығыҙ. Матур итеп «эйе шул» тиһегеҙ. Етмәһә, икебеҙ ҙә уйынсы. Мин һеҙҙе Юлбирҙин ағайҙың ҡулына үҙем тапшырырмын. Мине тыңлай ул. Фәлән көндә, фәлән сәғәттә ошонда булығыҙ.

Инсаф. Бына рәхмәт, ҡыҙым! *(Сыға.)*

Сағыу звонок оҙаҡ итеп сылтырай.

Зәмзәгөл. Эш көнө башланды. Тик эшләүселәре генә күренмәй.

Ут һүнә.

ҮЛСӘҮ АЛЫУ

Шул уҡ бина. Бүлмә икегә бүленгән. Теге яҡта — беҙ күргән кейем ҡалыптары, был яҡта — тегеү мастерскойының бер өлөшө. Төн. Мөйөштәге креслола Мәхмүт ултыра. Егерме биш йыл ғүмер уҙған. Сәсе сикәләрендә генә ҡалған. Әммә төҫ ташламаған. Ул жилетсән генә. Муйынына үлсәү таҫмаһы һалған. Ишекте һаҡ ҡына асып, Инсаф инә. Ул Мәхмүтте әле күрмәй.

Инсаф. Рөхсәттер бит?

Мәхмүт *(яй ғына башын күтәрә)*. Рөхсәт. *(Сәғәт һуға.)* Сәғәт туғыҙ. Моғайын, был һеҙҙер...

Инсаф. Эйе, мин. Инсаф Мисбах...

Мәхмүт. Беләм. *(Үҙенең тегенсе генә икәнен хәтерләтеп, һикереп тора.)* Зәмзәгөл әйткәйне. Суҡынған ҡыҙ. Тәки үҙенекен итте.

Инсаф. Белһәгеҙ ҙә әйтеп бөтөрәйем: Инсаф Мисбахович Мисбахов... Һеҙ ҙә үҙегеҙме, тимәксемен? Йәғни...

Мәхмүт. Мин дә үҙем. Йәғни Мәхмүт Юлбирҙин.

Инсаф. Быны хәҙер фамилияғыҙ хәтергә төштө. Һаумыһығыҙ, ғүмерегеҙ оҙон булғыры...

Мәхмүт *(ҡаршы килеп күрешергә ҡул һуҙа. Инсаф уның һул аяғын һөйрәтеп алыуын шәйләп ҡала)*. Һаумыһығыҙ.

Инсаф. Эйе был һеҙ. Нәҡ үҙегеҙ... Теүәл егерме биш йыл әүәл һеҙ миңә туй костюмы теккәйнегеҙ. Ҡулығыҙ ҡотло булды. Бик бәхетле донъя көттөк... Яңы кейем ул кешене йә бәхетле, йә...

Мәхмүт *(хәйләкәр йылмайып)*. Йә бәхетһеҙ итә.

Инсаф. Эйе шул. Тәжрибә быны ныҡ раҫлай.

Мәхмүт. Зәмзәгөл миңә төшөндөргәйне...

Инсаф. Төшөндөрһә лә, үҙем әйтеп уҙайым әле. Көҙгө байлыҡта көмөш туйыбыҙҙы үткәрергә ниәтләйбеҙ, донъялар имен торһа... Дөрөҫ, теге костюмым да бөп-бөтөн әле. Әйберҙәр оҙаҡ йәшәй икән. Шулай ҙа, йәмәғәтем менән кәңәшеп, яңыны бөтәйтергә булдыҡ.

Мәхмүт *(көләмһөрәп)*. Мин дә шулайыраҡ аңланым.

Инсаф *(ихлас)*. Зирәк кеше һеҙ.

Мәхмүт *(шаярып)*. Һөнәрем шундай. *(Ҡапыл.)* Ярай, рәхим итеп, эшкә күсәйек. Ниндәйерәк материал һайлайбыҙ?

Инсаф. Уныһын беҙ теге алсаҡ ҡыҙ менән һайлап, тәғәйенләп ҡуйғайныҡ инде.

Мәхмүт. Хуп! Улайһа, мәрхүм Гофман оҫта әйтмешләй, кәүҙәгеҙҙе иңләп-буйлап сығайыҡ. Ниндәйерәк фасон һайлайһығыҙ?

Инсаф пинжәген һала. Мәхмүт үлсәү ала. Ҡағыҙға яҙа.

Инсаф. Миңә ни фасоны үткәнерәк фасон булһа ла яраған.

Мәхмүт. Ихтыярығыҙҙа.

Инсаф. Эйе шул. Һәр әҙәмдең үҙ ихтыяры бар. Һеҙ ҙә төнгө эшкә күскәнһегеҙ икән ана.

Мәхмүт. Төрлөсә тура килә. Көндөҙ бүтән мәшәҡәттәр була...

Инсаф. Эйе шул. Донъя көтөргә һәр кем үҙенсә ҡыштырлап ята.

Мәхмүт. Килмәгән ерегеҙ юҡ. Кәүҙәгеҙ торғаны менән кейем ҡалыбы.

Инсаф. Һеҙгә мәғлүмерәк.

Мәхмүт. Дөрөҫ. Тегенсе ул әҙәмдең иңен-буйын ғына түгел, хатта уй-хыялын да үлсәй. Валлаһи! Көндөҙ кейем үлсәүе алған кеше тураһында мин төндә уйлап ятам. Тегенең ниндәй кеше булыуын билдәләргә тырышам.

Инсаф. Барып сығамы һуң?

Мәхмүт. Сыға. Йыш ҡына дөрөҫ төҫмөрләнә.

Инсаф. Кешеләр бик күп уйнайҙар бит, Мәхмүт Юлбирҙин иптәш, нимәһе ысын, нимәһе уйын икәнен дә белерлек түгел.

Мәхмүт *(үлсәүен дауам итә)*. Ы-һы! Һеҙҙең уң ҡулығыҙ оҙонораҡ икән дә баһа. Ҡайһы ҡулығыҙ менән яҙаһығыҙ?

Инсаф. Уңы менән...

Мәхмүт *(үлсәй)*. Эйе, оҙонораҡ.

Инсаф *(аптырай)*. Тәү тапҡыр ишетәм. Бәлки, һулы ҡыҫҡараҡтыр.

Мәхмүт. Юҡ. Уңы оҙонораҡ килеп сыға. Ниндәй хеҙмәттәһегеҙ?

Инсаф *(һиҫкәнеп китә)*. Мин һеҙҙең кинәйәгеҙҙе аңламайым, Мәхмүт иптәш.

Мәхмүт *(көлә)*. Бер төрлө лә кинәйә-минәйә юҡ. Былай ғына һораным.

Инсаф. Былай ғына булһа, мәслихәт. Иҫәп-хисап эшендәмен.

Мәхмүт. Тимәк, ил милкенең тоғро һаҡсыһы булып сығаһығыҙ.

Инсаф. Юғары баһағыҙ өсөн рәхмәт!

Мәхмүт. Балаҡ осон күпмерәк итәйек?

Инсаф. Уртаса. Тар ҙа булмаһын, киң дә булмаһын.

Мәхмүт *(үлсәп яҙа)*. Ярай, һеҙ әйткәнсә итермен.

Инсаф. Теккән оҫтаға алдан ымлап ҡуйығыҙ, тырыша күрһен, буш итмәм.

Мәхмүт. Мин бит боронғоларса—үҙем бесәм, үҙем тегәм.

Инсаф. Улайһа, бигерәк тә мәслихәт.

Мәхмүт. Шулай итеп, икенсе тапҡыр гөрләтеп туй уйнарға йыйынаһығыҙ икән. Бик һәйбәт.

Инсаф. Өсөнсө тапҡыр. Мине тәүге бисәм ташлап киткәйне. «Үтә иҫәпселһең», — тине, иш күрмәне.

Мәхмүт. Мине лә тәүгеһе ташлап китте. «Иҫәпләй белмәйһең», — тине, ҡуш күрмәне. Илашып айырылыштыҡ. Барыбер китте. Трамвай эргәһенән йүгереп тә ҡараным. Киткән мөхәббәтте ҡыуып тотоп буламы ни уны? Рельсҡа йығылып, бер аяҡты ғына имгәттем. Бына сатан булып ҡалдым *(йөрөп күрһәтә)*.

Инсаф. Ярай әле, бөтөнләй өҙөп китмәгән.

Мәхмүт. Хәйер, мин теге саҡта ла сатан булғанмындыр.

Инсаф. Эйе, сатан инегеҙ шул... Ә икенсе йәмәғәтегеҙ һуң?..

Мәхмүт *(еңел ирония менән)*. Ыҫмаланан былай йәбеште миңә. Ете йыл ҡарт буйҙаҡ булып йөрөгәнемдән һуң ҡауышҡайныҡ. Ике малай, өс ҡыҙ табып бирҙе. Тыймаһаң, туҡтарға иҫәбе юҡ ине әле.

Инсаф. Улай икән...

Мәхмүт. Туй шәп нәмә ул. Бигерәк тә үҙ туйың! Мин һеҙгә костюмды ҡойоп ҡуяса҇кмын! Күҙ алдыма килтерәм: өҫтәл тирәләй һеҙҙең балаларығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ, туған-тыумасағыҙ, дуҫ-иштәрегеҙ теҙелешеп ултырған. Өҫтәл башында ике тәхет! Береһендә — ҡара

бөркөт — һеҙ, икенсеһендә — аҡ күгәрсен — хужабикә! Бокалдарға шампанскийҙар ҡойола. Беренсе тост яңғырай.

Тәҙрә асылып китә. Күршелә туй бара. Музыка. Шау-шыу. Тауыштар.

— Әсе!
— Әсе!
— Горько!
— Үбешһендәр!

Мәхмүт тәҙрәне яба.

Һеҙгә лә шулай ҡысҡырырҙар. Һеҙ үбешерһегеҙ. Балаларығыҙ, уңайһыҙланған булып, ситкә боролор.

Инсаф. Балаларыбыҙ ишле түгел.

Мәхмүт. Шулай ҙа нисәү?

Инсаф. Берәү генә... Беҙ теге саҡ никахлашҡас та Урта Азияға сығып киттек. Йәмәғәтем шулай теләне. Улыбыҙ силтә тыуҙы...

Мәхмүт. Тыуғас, барҙыр бит.

Инсаф. Бар. Шунда уҡ йәшәй. Геолог. Алтын эҙләй.

Мәхмүт. Улайһа, һеҙ беҙҙең ҡалала ҡунаҡ, йәғни миһман, булып сығаһығыҙ.

Инсаф. Юҡ. Бер йыл әүәл беҙ бөтөнләйгә әйләнеп ҡайттыҡ.

Мәхмүт. Тимәк, тупраҡ тартты?

Инсаф. Тегеһе этәрҙе, быныһы тартты. Йәмәғәтем дә шулай теләне.

Мәхмүт. Һеҙ бик ҡатын йәнле кеше икәнһегеҙ. Ҡатынығыҙ һеҙҙән бихисап уңғандыр, моғайын.

Инсаф. Зарланмай көүек улай.

Мәхмүт *(яҙыуҙарын йыйыштыра)*. Бөгөнгә тамам. Примерканы ҡасанға тәғәйенләйек?

Инсаф *(пинжәген кейә)*. Үҙ яйығыҙға ҡарап тәғәйенләгеҙ, мин һеҙгә ҡулайлашырмын.

Мәхмүт. Улайһа, ике аҙна аша нәҡ ошо сәғәттә рәхим итегеҙ.

Инсаф. Рәхмәт. Мин китәйемме инде?

Мәхмүт. Иркегеҙҙә.

Инсаф. Эйе шул. Рәхмәт. Һау булығыҙ.

Мәхмүт. Һау булығыҙ.

Инсаф китә башлай. Ишек төбөндә туҡтала.

Инсаф. Шулай ҙа, Мәхмүт Юлбирҙин иптәш, примерка ваҡытында ҡулдарҙың оҙонлоғон тағы бер ҡат үлсәмәй булмаç. Хаталанмайыҡ, тим...

Мәхмүт. Үлсәрбеҙ.

Инсаф. Рәхмәт. Хуш булып тороғоҙ. *(Китә. Боролоп инә.)* Примеркаға йәмәғәтем менән бергә килһәк, ғәйеп итмәçһегеҙҙер бит...

Мәхмүт. Рәхим итһен.

Инсаф. Рәхмәт. Һау булығыҙ. *(Сыға.)*

Мәхмүт. Был әҙәмде донъя байтаҡ өркөткән булыр. Һалам һынғанда ла тертләп китә. «Мин ҡулайлашырмын», ти.

Мәхмүт аҡрын ғына артҡа үтә. Алғы яҡта ут тоҡана. Йүгереп Зәмзәгөл килеп инә.

Зәмзәгөл *(кейем ҡалыптарына)*. Ҡотлағыҙ мине, бөйөк классик образдар! Мин бөгөн беренсе ролемде башҡарҙым! Театр! *(Кейем ҡалыптарына.)* Уның нимә икәнен һеҙ аңлайһығыҙмы ни? *(Ҡапыл төшөнөп.)* Әлбиттә, аңлайһығыҙ. Һеҙ аңламай, тағы кем аңлаһын уны?! Сихырсылар! Телһеҙ хыялдар!

Аралағы ишекте аса. Башын тығып бышылдай.

Мәхмүт ағай... Мәхмүт ағай... *(Ҡысҡырыбыраҡ.)* Йәйәүле Мәхмүт ағай!

Мәхмүт *(алыçтан)*. Кем унда?

Зәмзәгөл. Мин. Зәмзәгөл! Һөйөнсө, һөйөнсө, Мәхмүт ағай! Мин бөгөн сәхнәлә беренсе ролемде башҡарҙым.

Мәхмүт *(сыға)*. Улай булғас, бөгөн бөйөк көн икән! Ҡотлайым, Зәмзәгөл!

Зәмзәгөл. Төн! Өçтөмә йондоҙҙар яуған бөйөк төн, Мәхмүт ағаҡайым!

Мәхмүт. Уңышлы сыҡҡандыр, тип ышанам.

Зәмзәгөл. Ышанығыҙ, нығытып ышанығыҙ! Ифрат уңышлы булды. Урам яҡтан башымды тығып, бер йүнһеҙ малайға: «Мин һине яратам! Мин һине үлеп яратам!» — тип ҡысҡырырға тейеш инем. Мин уға ҡысҡырманым, сәхнә алдына килеп баçтым да, беренсе рәттә ултырған

Әбделхаҡтың сылт-сылт йомолған күҙҙәренә тура ҡарап ҡысҡырҙым: «Мин һине яратам!» — тинем. Һәйбәт килеп сыҡты. Сәпәкәй иттеләр.

Мәхмүт. Ул һуң нимә тине?

Зәмзәгөл. Кем?

Мәхмүт. Әбделхаҡ.

Зәмзәгөл. «Мин дә... мин дә... мин дә...» — тип бышылдай, битһеҙ.

Мәхмүт. Уңышлы сыҡҡан икән шул.

Зәмзәгөл. Ифрат уңышлы. Тик беҙҙең режиссер ҡылый Байтүрә генә әйткән була: «Уйының дөрөҫ булманы, тауышың ғына ихлас яңғыраны», — тигән була.

Мәхмүт. Нимә аңлай ул ҡылый Байтүрә? Һин дөрөҫ эшләгәнһең, һөйгән кешеңдең күҙенә туп-тура ҡарап: «Яратам!» — тип ҡысҡырырға кәрәк.

Зәмзәгөл. Ой! Һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

Мәхмүт. Бына шулай, кешенән ишетеп...

Зәмзәгөл. Ә мин... мин үҙем татып беләм! *(Ҡапыл хәтерләп.)* Эй, Мәхмүт ағаҡайым! Мин бит бында бер ғәйебемде иҫкә төшөрөп йүгерҙем. Ярай әле сәхнәлә саҡта онотолоп торған. Юғиһә, уйыным уйын булмаҫ ине...

Мәхмүт *(уйынға күсә. Уҫал ҡиәфәткә инә)*. Ғәйебеңде таныш, энәһенән-ебенә тиклем бәйнә-бәйнә һөйләп бирһәң, о, гонаһ эйәһе, язамды бер аршынға кәметермен! *(Метр һуҙып күрһәтә.)*

Зәмзәгөл *(ҡапыл теҙләнә)*. Һөйләйем, о, бөйөк хакимым, бөтәһен дә һөйләйем. Мин, аңра ҡолоғоҙ, көндөҙ театрға ашығып, Мисбахов һайлаған тауарҙы һеҙҙең өҫтәлгә ҡуйып китергә онотҡанмын. *(Тора. Күрше бүлмәнән отрез сығарып, тағы теҙләнә.)* Бына ул! Йә мине, йә уны киҫегеҙ!

Мәхмүт *(өҫтәлдән ҙур ҡайсы ала)*. Асыуымдың — сиге, аяуһыҙлығымдың самаһы юҡ. Мин уны, фәҡәт уны ғына, иңгә-буйға бесәсәкмен. Ә һин, гонаһһыҙ йән эйәһе, тор, иркен донъяла күбәләк кеүек осоп уйна...

Зәмзәгөл *(ҡулдарын күккә һона)*. Мәрхәмәтегеҙ өсөн рәхмәт, хакимым!

Мәхмүт. Рәхмәтеңде ҡабул ҡылам.

Зәмзәгөл *(өҫтәлгә менеп ултыра)*. Әйҙә әле, Мәхмүт ағай, егеттәрсә бер ултырып һөйләшәйек. Сер һаҡлау яғынан мин — ҡойо, мин — упҡын.

Мәхмүт. Мин дә.

Зәмзәгөл. Минең һеҙгә әллә-ә-ә күпме һорауым бар.

Мәхмүт. О-һо! Яуапты аяҡ үрә баҫып ҡайтарырғамы?

Зәмзәгөл *(етди)*. Мине процедура ҡыҙыҡһындырмай. Ултырығыҙ.

Мәхмүт *(ултыра)*. Беренсенән...

Зәмзәгөл. Беренсенән, һеҙ кем — һармаҡмы әллә пәйғәмбәрме?

Мәхмүт. Үҙем.

Зәмзәгөл. Яуабығыҙ ҡәнәғәтләндермәне.

Мәхмүт. Артабан яуапты тырышыбыраҡ бирермен.

Зәмзәгөл. Тырышығыҙ шул. Һеҙҙең турала уйлай, уйлай, уйлай минең баштарым ҡатып бөттө.

Мәхмүт. Ә һин башыңа ял биргелә.

Зәмзәгөл. Әйтте тағы! Шундай ҙур урында ултырған кеше, ҡасып-боҫоп тигәндәй, төндәрен кейем тегеп ултырһын да, һин башыңа ял бир, имеш. Ниңә ул әле булһа, энә күҙләй-күҙләй, күҙ нурҙарын түгә, типсей-типсей, бармаҡтарын талдыра? *(Көрһөнә.)* Мохтажлыҡтан шулай итәлер инде. Ҙур урындарҙа аҡсаны аҙ түләйҙәр икән, тиеүҙәре хаҡтыр, күрәһең.

Мәхмүт. Дөрөҫ. Аҡсаһы самалы.

Зәмзәгөл. Бала-сағағыҙ ҙа ишле тиҙәр.

Мәхмүт. Бер юлы ете ҡашыҡ күтәрәбеҙ.

Зәмзәгөл. Ишле бала тамаҡҡа ла таҙа була ул.

Мәхмүт. Умырып ҡына баралар. Әммә, Зәмзәгөл, минең был төнгө һөнәрем мохтажлыҡтан түгел, хәжәттән, йән хәжәтенән...

Зәмзәгөл. Мохтажлыҡ булмағас ни... Анауындай ҙур урында ултырып...

Мәхмүт. Эйе, тегенеһе — «урын», быныһы — «һөнәр». Һөнәр! Һөнәр ул, Зәмзәгөл, яҙмышҡа тиң нәмә. Һөнәрҙе онотоу тамырыңды, намыҫыңды онотоу менән бер ул.

Зәмзәгөл. Ярай, онотманығыҙ ҙа, ти. Ә уның һеҙгә ни кәрәге бар хәҙер?

Мәхмүт. Кәрәк. Миңә бик кәрәк ул. Яҙмыш менән аяҡ тибеп һөйләшер өсөн, сайҡалып киткәндә, таянып өсөн кәрәк. Хәҡиҡәтте аумаҡайлыҡҡа, ҡулайлашыуға алмаштырмау өсөн кәрәк. Әле һин әйткән «урынымда», алды-артты уйламай, ныҡ ултырыу өсөн кәрәк. Тегенән *(күрһәтә)* бында әйләнеп ҡайтыуҙан ҡурҡмау өсөн кәрәк. Бында бит мине һайлап ҡуйҙылар. Ә бер саҡ

һайламай ҡуйыуҙары ла мөмкин... Төрөктәр әйтмешләй, аңлата белдемме?

Зәмзәгөл. Һеҙ белдегеҙ. Тик мин генә аңлап еткермәнем...

Мәхмүт. Йәнә бер хыялым да бар, Зәмзәгөл, серле хыялым. Үҙеңә генә әйтәм.

Зәмзәгөл. Беләм.

Мәхмүт. Нимәне?

Зәмзәгөл. Хыялығыҙҙы.

Мәхмүт. Һин хатта минең хыялымды беләһең?

Зәмзәгөл. Шуны ла белмәгәс... Бөтә ҡарттар ҙа үҙ кәсептәрен...

Мәхмүт. Кәсеп түгел, һөнәр, профессия...

Зәмзәгөл. Үҙ һөнәрҙәрен балаларына йәки балаларының балаларына тапшырырға хыялланалар. Наставничество!

Мәхмүт. Һин күрәҙә, Зәмзәгөл. Һинән артистка сығасаҡ...

Зәмзәгөл. Минән артистка сығыр ҙа ул, быны һеҙҙең хыялығыҙҙан рәт сыҡмаясаҡ. Быныһы точно!

Мәхмүт *(ихлас бошоноп)*. Һин улай бер юлы үк йыртып ташлама әле. Хыял бит ул, Зәмзәгөл, нескә материал. Хыялды һаҡларға, иркәләргә кәрәк.

Зәмзәгөл. Иркәләнең дә ти... Ә бына ҡайһы балағыҙҙың энә тоторға, уймаҡ кейергә бармағы ҡысытып тора?

Мәхмүт. Бәлки, ейәндәремдә дәрт уяныр.

Зәмзәгөл. И-и, Йәйәүле Мәхмүт ағай, дәртте уны тылсымлы бөйөк ижад ҡына дөрләтә ала. Быны мин тәжрибәнән сығып әйтәм.

Мәхмүт. Тәжрибә менән бәхәсләшеү ҡыйын, әлбиттә.

Зәмзәгөл. Бәхәсләшмәгеҙ ҙә... Тегенсе — энә менән ҡойо ҡаҙыусы, үтек менән ер һөрөүсе ул. Эс бошорғос бер кәсеп.

Мәхмүт. Һөнәр.

Зәмзәгөл. Һөнәр ҙә булһын... Бына һеҙ әйтегеҙ әле: бөтә донъяның бөтә кешелегенең бөтә тарихында хыт берәй, хыт берҙән-бер бөйөк, даһи тегенсе булғанмы? Әгәр ҙә ки булған икән — кем ул! Исеме, фамилияһы, атаһының исеме нисек? Тыуған ере, тыуған йылы, милләте һәм башҡалар, һәм башҡалар...

Мәхмүт *(ҡапыл)*. Бар! Исемен-атын, милләтен-затын асыҡ ҡына әйтә алмайым. Әммә ул бар. Ундай даһи тегенсе бар!.. Беҙҙең һөнәребеҙҙең беренсе бөйөк оҫтаһы бер мәл йәнлек тиреһен таш бысаҡ менән ҡырҡып алған да, алъяпҡыс һымағыраҡ итеп, алдын ҡаплаған. Бығаса хайуан иҫәбендә йөрөгән нәмә шунан һуң кешегә әйләнгән. Бүтәндәр ҙә был даһиға эйәргәндәр. Әҙәми зат шулай итеп мәңгелек оятһыҙлыҡтан, мәсхәрәнән ҡотолған. Беҙ — тегенселәр йөҙәр мең йыл буйы ана шул даһиҙың эшен алға һөрәбеҙ. Фасондар алмашына, асылы ҡала. Беҙ булмаһа-аҡ...

Зәмзәгөл. Ҡалай ҡыҙыҡ әңгәмә һөйләп ташланығыҙ, Мәхмүт ағай. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, моғайын, дөрөҫтөр ҙә әле ул.

Мәхмүт. Ә һин төптәнерәк уйла.

Зәмзәгөл. И, Мәхмүт ағаҡайым, өҫтән-өҫтән генә уйлаһам да, баштарым сатнарға тора. Шулай ҙа һеҙ боро-он замандағы тегенсе бабай тураһында әҙәм аптыратырлыҡ нәмә һөйләп ҡуйҙығыҙ. Раҫҡа сығыуы ла ихтимал бит быны... Шул бабайҙың башы эшләмәһә, әҙәмдәр һаман да тегеләй... шулай... ни көйө... йөрөр инеме икән? *(Уңайһыҙлана.)*

Мәхмүт. Шулай йөрөр ине.

Зәмзәгөл. Абау, әҙәпһеҙҙәр!

Мәхмүт. Ана ниндәй мәңгелек һөнәр кешеләренә тап булдың һин, Зәмзәгөл. Ҡәҙерен бел.

Зәмзәгөл. Ҡәҙерен белһәм дә, күңелем ятмаҫтыр, ахыры. Минең оям — бүтән урманда.

Мәхмүт. Улайһа, ниңә үҙ урманыңа китмәйһең?

Зәмзәгөл. Кейем ҡалыптарын ҡыҙғанам шул... Мин улар менән һөйләшәм, спектаклдәр уйнайым. Һәр ҡайһыһы үҙенә бер оригинал...

Мәхмүт *(көлә)*. Кейем ҡалыбынан да оригиналыраҡ нәмә юҡ инде — аңлаған кешегә.

Зәмзәгөл *(иронияны аңлай)*. Мин дә әйттем тағы. Уларҙы теләһә кем итеп кейендерергә була, тигәнем инде.

Мәхмүт. Ә бына кешене тик үҙе итеп кенә кейендерергә кәрәк. «Һәр ағастың үҙ япрағы, һәр әҙәмдең үҙ сепрәге», — тиер ине мәрхүм Гофман.

Зәмзәгөл. Ниңә шулай ул, Мәхмүт ағай, мәрхүмдәр гел аҡыллы, һәйбәт һүҙ генә һөйләгәндәр?

Мәхмүт *(аптырап ҡала)*. Ниңә тиһеңме?

Зәмзәгөл. Ниңә, тим, тереләр алдашалар, һүгенәләр, яуыз һүҙҙәр һөйләйҙәр.

Мәхмүт. Быға мин дә аптырайым, Зәмзәгөл.

Зәмзәгөл. Төптәнерәк уйларға кәрәк булыр был хаҡта.

Шымып ҡалалар. Тәҙрә асылып китә. Былар, урамдағы хәлдәрҙән ваз кисеп, уйға батҡандар. Асыҡ тәҙрәнән тауыштар, әлеге йыр бәреп инә.

— Горько! Горько! Горько!

— Ә-се! Ә-се! Әсе-ее!

— Үбешһендәр! Өҫтәлгә баҫып үбешһендәр!

Берәү һыҙғырып ебәрә. Беҙгә таныш тауыш йыр башлай.

Наша б(ы)рат Солтанморат
Бай кәләшкә өйләнгән.
Бирнәһенә бейеп торған
«Запорожец» түләнгән.

Баш. Ахмаҡ! «Запорожец» бейей тиме икән?

Тауыш. Бейетә белһәң, бейей ул. Беҙме? Беҙ теләһәк, «Запорожец»ты ғына түгел, «Жигули»ҙы, «Волга»ны, хатта... «КамАЗ»-ды ла бейетә алабыҙ. Беҙме?.. Беҙ донъяны бейетәбеҙ. Йондоҙҙары тупылдап ҡойолорлоҡ итеп бейетәбеҙ. Капиталы түләнгән.

Наша б(ы)рат Солтанморат
Ашайҙыр виноград...

Баш. Етер, тим, таш тамаҡ! Ана өй эсендәге кешеләргә уйларға, фекер тупларға ирек бир.

Тауыш. Уйларға? Уйларға ирек бирмәйем. Ҡуҡыш бына уларға! *(Кеткелдәп көлә.)*

Баш. Мөрәүәтһеҙ һин! Надоел инде. Егерме биш йыл бер йырҙы йырлайһың. Сирек быуат ҡабатлайһың.

Тауыш. Йыры шул булһа ла, һүҙҙәре бүтән. Масштаб башҡа! Ҡолас башҡа... Тик «Наша б(ы)рат» ҡына бер.

Наша б(ы)рат Солтанморат...

Баш. Ошонда туҡта! Юғиһә...

Тауыш. «Юғиһә», нимә эшләтәһең?

Баш. Юғиһәме? Юғиһәме? Юғиһә... юғиһә... Өйөңә ут төртәм, дачаңды һыуға ағыҙам.

Тауыш ҡапыл тына. Баш тәҙрәнән тығыла.

Ғәфү итә күрегеҙ инде — маҙағыҙҙы алдыҡ. Хамствоны тотоп ҡына тыйып буламы ни уны? Теләһә ниндәй ярыҡтан килеп инә бит ул. Ғәфү итегеҙ. Мин уға брат та, сват та түгел, табындаш ҡына, бары табындаш ҡына. Ризыҡ бүлешәбеҙ. Дөрөҫөрәге, ул миңә өлөш сығара. Мин үҙем ифрат тәрбиәле, воспитанный кешемен. Ут төртөү ҡайҙа инде ул?.. Ғәфү итегеҙ. Хәйерле төн һеҙгә...

Тәҙрәне яба.

Зәмзәгөл. Мин һеҙҙе ҡыҙғанам, Мәхмүт ағай.

Мәхмүт. Ҡыҙыҡ. Ни өсөн?

Зәмзәгөл. Яҡшы кешеләрҙе мин гел ҡыҙғанам. Яман заттар уларҙы бына-бына һәләк итеп ташлар һымаҡ...

Мәхмүт. Ҡурҡма. Мин ундай уҡ яҡшы түгелмен.

Зәмзәгөл. Һеҙ бойоҡ. Бойоҡ булғанығыҙ өсөн дә, аҡһаҡ булғанығыҙ өсөн дә, пеләш булғанығыҙ өсөн дә ҡыҙғанам. Сәс ул бер ҙә юҡтан ғына ҡойолмай инде. Уй-хәсрәттән ҡойола ул *(илай)*. Инде килеп, бер диуана шикелле, ҡасып-боҫоп кейем тегәһегеҙ. Бүтәндәр һеҙҙең был ҡылығығыҙҙан һармаҡлыҡ тип көлә, ә минең илағым килә. Тапҡан һөнәр. Харап икән!

Мәхмүт *(киҫкен)*. Зәмзәгөл! Самалап!

Зәмзәгөл. Һин үҙең сама белмәйһең!

Мәхмүт. Мин — тегенсе — сама белмәйемме? Минең бөтә эшем саманан тора.

Зәмзәгөл. Белмәйһегеҙ! Ҡара машинаһына ҡуҡырайып ултырып алып, һауаланып, һәммәһенә өҫтән генә ҡарап, ары-бире сабыр урынға, аҙ ғына форсаты булһа, авторитетын төшөрөп, аҡһай-туҡһай ошонда йүгерә. Кит инде! Үҙ ҡәҙерегеҙҙе үҙегеҙ белмәйһегеҙ, йәйәүле Мәхмүт ағай!

Мәхмүт. Өҫтән генә ҡараусылар минән башҡа ла табылыр.

Зәмзәгөл. Табылһа тағы!

Мәхмүт. Әгәр мин, ана шулай, һин әйткәнсә, юғарынан ҡарап... ҡуҡырайып... һауаланып ултырып алһам, минең ҡәҙеремде белер инеңме?

Зәмзәгөл. Минме?

Мәхмүт. Мине йәлләп балауыҙ һығыр инеңме?

Зәмзәгөл. Минме-е?

Мәхмүт. Минең менән бына шулай егеттәрсә һөйләшеп ултырыр инеңме?

Зәмзәгөл. Минме?

Мәхмүт. Һин!

Зәмзәгөл. Мин ултырыр инем дә ул, һеҙ ултырмаҫ инегеҙ...

Мәхмүт. Шулай булғас...

Зәмзәгөл. Фу! Килделе-киттеле һөйләп тик торам. Төптән уйлай белмәйем шул. Ә бит төптән уйлағанда...

Мәхмүт. Йә-йә...

Зәмзәгөл. Төптән уйлағандамы?.. Аҡһай биреп, һеҙ ошонда килеп керһәгеҙ, көн булһа — көн, төн булһа төн яҡтырып китә. Ниндәйҙер бер моңһоу йәм килеп инә. Ана бөтә әҙәм шулай ти. *(Кейем ҡалыптарына күрһәтә.)* Һеҙ юҡта күңелһеҙ, хыт ултыр ҙа ила.

Мәхмүт. Ни эшләп булмаһын.

Зәмзәгөл. Юҡ шул. Бәхетле кеше ғәмһеҙ була, ә һеҙ гел һағышлы.

Мәхмүт. Нимә һуң ул бәхет?

Зәмзәгөл. Беләм дә, әйтмәйем. Йә көлөрһөгөҙ.

Мәхмүт. Көлмәм.

Зәмзәгөл. Көлмәһәгеҙ ҙә әйтмәйем.

Мәхмүт. Үҙе, егеттәрсә һөйләшәйек, тигән була.

Зәмзәгөл. Әйтмәйем, Мәхмүт ағай, өркөтөүҙән ҡурҡам...

Мәхмүт *(аңлай)*. Әйтмә, улайһа. Бер өркөп ҡасһа, йә кире килмәҫ булыр. Күреп кенә ҡалырһың да ғүмер буйы һағынырһың... Бәхетте бөтөнләй күрмәгән кеше түгел, бәхетенән айырылған кеше бойоҡ була.

Зәмзәгөл. Быныһы точно! Юҡты юғалтып ҡайғырмайҙар.

Тупаҫ ишек ҡағалар.

Ой! Моғайын, Әбделхаҡтыр. Бисара!

Рөхсәт көтмәй, 20-ләр тирәһендәге таҙа ғына бер Егет ишекте һөҙөп инеп баҫа. Ул ныҡ ҡыҙмаса.

Егет. Папаша! Мамзель! Привет!

Мәхмүт *(һуҙып)*. Привет... Кем тип беләйек?

Егет. Белергә кәрәкмәй, күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың, папаша.

Мәхмүт *(асыулы, әммә тыныс)*. Улайһа, ни хөрмәт күрһәтәйек?

Егет. Күрһәтмә. Стакан бир. Бер стакан. Бер... *(Бармағын күрһәтә.)*

Зәмзәгөл. Бер стакан һыумы?

Егет. Буш стакан, аңра! Тупаҫлығым өсөн кисер, папаша.

Зәмзәгөл. Һы!

Егет. Йәһәтерәк, мамзель! *(Ымлай.)* Тегендә көтәләр. Ундай аҫыл ирҙәрҙе көттөрөү яҡшы түгел. *(Киҫкен.)* Кемгә әйтәм мин, мамзель? Әйҙә, папаша, дүртенсе булырһың.

Зәмзәгөл, ҡаушап, стакан килтереп һуҙа, Мәхмүт тә яҡынлаша. Теге стаканды алдым тигәндә, Мәхмүт уның ҡулынан һуғып төшөрә.

(Тыныс.) Нахал!.. Вәт, на-а-хал... Һинеңсә беҙ, ҡырағайҙар шикелле, шешәнең горлоһынан һемерергә тейеш булып сығабыҙ инде, ә? Быныһы наҙанлыҡ... мужиклыҡ... Үткән этап! Ниңә шулай күҙең терәнең миңә? Һиңә нимә кәрәк?

Мәхмүт. В-он, хәшәрәт!

Егет *(тешен ҡыҫып)*. Хәҙер үк, папаша, минең күҙ алдымда ошо стакан ярсыҡтарын берәмләп, бөртөкләп йыйып бөтмәһәң, үтеңде һытам. Бына шулай. *(Ике йоҙроғон ҡыҫып күрһәтә.)* Ҡыҫам да һытам.

Зәмзәгөл. Хәҙер үҙем йыйып алам. Хәҙер... *(Сүпләй башлай.)*

Мәхмүт. Зәмзәгөл! Ҡағылма!

Егет. Йә, папаша, тиҙерәк бул. Мин ашығам. Мине унда көтәләр.

Мәхмүт. Эйелә алмайым. Билем ҡатҡан.

Егет. Улайһа, теҙлән! Имгәклә! Түшеңдә шыу!

Мәхмүт. Теҙем бөгөлмәй.

Егет. Ә мин билеңде лә, теҙеңде лә, үҙеңде лә бөгөрмөн. Бына шулай!

Мәхмүттең боғаҙынан алмаҡсы итә. Мәхмүт тегене бик ҡаты һуғып йыға.

Зәмзәгөл. Ох, здорово! Ох, молодец, Йәйәүле Мәхмүт ағай!

Егет *(тормаҡсы итә)*. Ағай... Иптәш...

Мәхмүт. Торма! Ошо стакан ватыҡтарын хәҙер үк берәмләп, бөртөкләп йыйып бөтөр.

Егет. Үҙе интеллигентный ғына кешегә оҡшаған. Үҙе...

Мәхмүт. Тиҙ бул! Беҙ ашығабыҙ.

Егет, теҙләнеп, быяла валсыҡтарын йыя.

Егет. Бына һин әҙәмгә ышан... Ҡунаҡ хаҡы тип тә тормай, төн уртаһы тип тә тормай... Кешеләрҙең күңелдәре ҡатты. *(Тубыҡланып тора.)* Ошо тиклем ярсыҡты ҡасан йыйып бөтмәк кәрәк? *(Иларҙай булып.)* Ә унда мине көтәләр...

Ут һүнә.

ПРИМЕРКА

Шул уҡ урын. Нәҡ ике аҙна ваҡыт үткән. Кейем ҡалыптарына яңы персонаж өҫтәлгән. Ул — боронғо тегенсенең образы. Һаҡаллы, ҙур сәсле, алдына ҙур тире киҫәге ябылған. Зәмзәгөл, мауығып, яҙыу буйынса роль ятлай. Мәхмүт — икенсе яҡта. Моғайын, ул эшләйҙер.

Зәмзәгөл *(Әжмәғол ҡаршыһына баҫып)*. О, йәнемдең бөйөк хакимы! Күңелемде ғүмерлеккә әсир иткән бәһлеүәнем! Ишетәһеңме? Көндөҙөн мин һинең тыңсыл, бахыр ҡолоң, ә төндәрен сая, ярһыу... Нисек инде «Сая, ярһыу?» Шулай «Сая... Ярһыу...» Сая, ярһыу йәрең булайым... Һинең атҡан алтын уғың йөрәгемә тейҙе. Мин яралы! Көндөҙ зарлы, төнөн йәрле булайым... Фу! «Мин һине үлеп яратам», тип дүрт һүҙ әйтәһе урында, күпме һүҙ бутҡаһы. Ну, ошо ҡылый Байтүрәне! Әллә нимәләр соҡоп сығара. *(Ролгә күсә.)* О, ҡояштан яралған нурлы баһадирым минең! Ете төн урталарында күктән төш тә ҡосағыма һарыл!..

Ишек асыла. Инсаф менән Мәҙинә инә. Зәмзәгөл уларҙы күрмәй. Тегеләр ҙә шәйләмәй ҙә, ишетмәй ҙә.

(Дауам итә.) Ҡосағыма һарыл, һөйгән йәрем!

Инсаф *(манекендарға күрһәтеп)*. Өй тулы халыҡ, ә кеше юҡ.

Мәҙинә. Инсафчик, бөгөн һинең телең кәрәкмәй, костюм үлсәргә кәүҙәң генә кәрәк. Ҡалғанына үҙем бар.

Инсаф. Эйе шул.

Мәҙинә *(һиҫкәнеп)*. Ниндәйҙер таныш нәмә бар кеүек бында. Нимәлер бар кеүек...

Инсаф. Кейем ҡалыптарылыр. Уларҙың һәр ҡайһыһы ана театр артисына оҡшаған.

Мәҙинә *(үҙ алдына)*. Я рабби, нимә был?!

Бая манекендар артына инеп киткән Зәмзәгөл быларҙы күрә.

Зәмзәгөл. Инсаф Мисбахович?! Юлбарыҫ шикелле, тауышһыҙ баҫып йөрөйһөгөҙ икән! Ишетмәнем дә, һаумыһығыҙ!

Инсаф. Йәмәғәтем... Мәҙинә ханым.

Зәмзәгөл. Мәҙинә ханым... *(Баш эйә.)* Мин — приемщица Зәмзәгөл.

Мәҙинә. Беләм. Ағайыңды бөйөк композитор иткәнеңде һөйләп көлдөрҙө инде.

Инсаф. Эйе шул.

Зәмзәгөл. Шуға ла көлгәс, моғайын, һеҙ шат кешеләр...

Мәҙинә. Шатлыҡ булғанда...

Зәмзәгөл. Саҡ ҡына ултырып тороғоҙ. Оҫта хәҙер сығыр.

Ултыралар.

Мәҙинә *(манекендарҙы күреп)*. Бында классик театр икән дә баһа.

Зәмзәгөл. Анау Әжмәғол ағай менән Ҡуян Ғәләүиҙән башҡаһы — классика. Улары милли кейем ҡаплау өсөн кәрәк. Милли йән иҫәбенә керетеп, отчетҡа ла яҙабыҙ үҙҙәрен.

Мәҙинә *(ҡырағай кеше манекенын күрһәтеп)*. Ә быныһы кем? Робинзон Крузомы ни?

Зәмзәгөл. Ю-юҡ! Был кешелек донъяһындағы иң беренсе бөйөк тегенсенең, шул уҡ ваҡытта иң талымһыҙ, иң ипле тәүге бөйөк клиенттың гүзәл образы!

Мәҙинә *(борсолоп)*. Әйтерһең, был ерҙә мин тәү тапҡыр әллә ҡасан, бынау ҡырағай әҙәм иҫән ваҡытта уҡ, булып киткәнмен.

Зәмзәгөл. Ундай хәлдәр булғылай ул. Мин үҙем дә борон заманда Мадридта, хатта Токиола булған төҫләмөн...

Сәғәт һуға.

Мәҙинә. Ниндәй шомло бынау сәғәттең тауышы.

Күрше яҡтан, үлсәргә тигән пинжәкте беләгенә һалып, Мәхмүт сыға. Уның аҡһап килгәнен Мәҙинә күрә. Әлегә танымай.

Мәхмүт. Ваҡытты һанға һуҡҡан кешеләрҙе яратам да... Хәйерле кис, Инсаф Мисбах-о-вич, ханым...

Тауышын ишеткәс тә, Мәҙинә тертләп китә. Урынынан тора. Мәхмүт тә, уны танып, ҡаушап ҡала. Беләгендәге пинжәк, аҡрын ғына шыуып, иҙәнгә төшә.

Һаумыһығыҙ...

Мәҙинә *(ҡапыл ынтыла)*. Мәхмүт! *(Туҡтала.)* Күңелем нимәлер һиҙгәйне шул... һинме был?

Мәхмүт. Мин дә, түгел дә...

Мәҙинә. Мәх-мүт...

Мәхмүт *(үҙен ҡулға алып)*. Әйҙә күрешәйек әле.

Мәҙинә *(ынтыла, туҡтала, аҡрын ғына ҡул һуҙа)*. Күрешәйек.

Мәхмүт. Һаумы, Мәҙинә!

Мәҙинә *(яҡын килә)*. Һаумы, Мәхмүт. Һаман шулай, көн тимәй, төн тимәй, энә менән тау өйәһең икән.

Мәхмүт, эйелеп, костюмды алмаҡсы итә, алмай, кире турая.

Мәхмүт. Өйәһең инде, һөнәрең шул булғас...

Мәҙинә *(ҡыҙғаныр)*. Бисараҡай... Бөҙрә сәстәре башына һыймай ине...

Мәхмүт *(ҡушылып)*. Аяғы ла аҡһаҡ түгел ине...

Мәҙинә. Хәҙер аҡһаҡ...

Зәмзәгөл иларға итә.

Зәмзәгөл. Кеше башы, кеше аяғы тикшерә торған ер түгел был, апай!

Мәхмүт. Зәмзәгөл!

Зәмзәгөл. Ярай инде...

Мәҙинә. Донъя шулай аҡһата шул.

Мәхмүт. Донъяның ғәйебе юҡ бында. Үҙем.

Мәҙинә. Һин шундай инде... Бөтә нәмә өсөн тик үҙең генә ғәйепле.

Мәхмүт. Үҙем шул. Бер заман трамвай менән уҙышҡайным. Бик ғәзиз кешемде алып киткәйне ул. Шунда йығылып, имгәнеп ҡалдым.

Мәҙинә тағы тертләп китә.

Инсаф. Ярай әле, бөтөнләй ҡырҡып китмәгән.

Мәҙинә. Инсаф Мисбахович...

Инсаф. Эйе шул... Әллә таныштар булып сыҡтығыҙ инде?

Мәҙинә. Инсаф Мисбахович... Шул костюмды эйәләп алыр инең, тим...

Инсаф костюмды алып ҡаҡҡылай. Унан Зәмзәгөл ала.

Зәмзәгөл. Бирегеҙ.

Мәҙинә. Ә бына күҙҙәреңдең зәңгәрлегенә туҙан бөртөгө лә ҡунмаған.

Мәхмүт *(көлә)*. Туҙан сыҡҡанда, мин күҙҙәремде йомам.

Зәмзәгөл. Әйтте тағы! Туҙанға бик күҙ йома торған әҙәм икән. Харап!

Мәҙинә. Ғүмерең, тимәк, ошонда үтте инде. Теге саҡ трамвайҙа киткән кеше, бәлки, үҙенсә хаҡлы булып сыҡҡандыр.

Мәхмүт. Бәлки, шулайҙыр.

Инсаф. Һынап торам да, былар әллә таныш булып сыҡты инде, тим...

Мәҙинә. Зирәкһең һин, Инсаф Мисбахович.

Мәхмүт. Ярай, төшө төш урынында ҡалһын, эше эш урынында булһын. Примерканы башлайыҡ.

Инсаф пинжәген һала, Зәмзәгөл уға типселгән яңыһын кейҙерә.

Зәмзәгөл. «Бисмилла!» тип әйтә яҙҙым.

Мәхмүт пинжәкте төрлө яҡлап ҡарап сыға, тартҡылай, төҙәтеп, энәләр ҡаҙай...

Мәхмүт *(үҙ алдына)*. Шулай... Бынан саҡ ҡына күтәрәйек. Быныһын ебәрә төшәйек... Хуп, йә, ханым, ниндәй замечание булыр?

Мәҙинә *(ҡарамай)*. Юҡ.

Инсаф. Ҡулдарҙың оҙонлоғон тағы бер тапҡыр самаламаҡсы инегеҙ түгелме?

Мәхмүт *(ҡулдарҙы үлсәй)*. Уңы оҙонораҡ.

Инсаф. Ғәжәп. Бәлки, һулы ҡыҫҡараҡтыр?

Мәхмүт. Уңы оҙонораҡ.

Мәҙинә. Ҡулдары ниндәй булһа ла, еңдәрен тигеҙ яһа.

Мәхмүт. Ең ул ҡулға ҡарап яһала инде. *(Инсафҡа.)* Бүтән йәһәттән һеҙҙең кәүҙәгеҙ — тегенсе хыялы.

Мәҙинә *(ирҙәрҙең ҡайһыһыналыр төрттөрөп)*. Башҡа хыялың булмағанда ни...

Был арала Инсаф иҫке пинжәген кейә.

Мәхмүт *(шаян тонға күсә)*. Тағы бер тапҡыр кейәү менән кәләш булып алырға ниәтләгәнһегеҙ икән. Никах яңыртыу һәйбәт нәмә ул. Һоҡланам мин дәртле кешеләргә!

Инсаф. Дәрт тип ни инде... Йола бит.

Мәҙинә. Дәртһеҙ йола булмай, Инсаф Мисбахович.

Инсаф. Эйе шул.

Мәхмүт. Ҡасанға өлгөртһәк һуң булмаҫ? Юғиһә, беҙҙең тегенсе халҡында — аҙнаһына биш йома.

Инсаф. Беҙ һеҙгә ҡулайлашырбыҙ.

Мәҙинә. Юҡ инде, ҡулайлашмабыҙ. Былай ҙа ҡулайлаша-ҡулайлаша тәҡәт ҡалманы. Ун көндән әҙер булһын!

Мәхмүт *(тыныс, ихлас)*. Әҙер булыр. Клиенттың теләге — беҙҙең өсөн закон.

Инсаф. «Закон» тип ул тиклем ҙур һүҙ әйтмәһәгеҙ ҙә инде...

Мәхмүт. Тимәк, ун көндән һуң йәнә осрашабыҙ. Ашыҡтырһағыҙ, бәлки, иртәрәк тә...

Мәҙинә. Иртәрәк кәрәкмәй, ваҡытында кәрәк...

Ут һүнә. Мәҙинәнең тауышы ишетелә: «Ваҡытында кәрәк... Ваҡытында...»

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

ҺУҢҒЫ ПРИМЕРКА

Ҙур ҡалалағы райисполком рәйесенең эш урыны. Сәхнә, ателье шикелле үк, икегә бүленгән. Ярты яғы — эш бүлмәһе, ярты яғы — приемная. Приемнаяла урта йәштәрҙәге аҡ сәсле ҡатын — Шәрифә ултыра. Телефон шылтырай. Шәрифә трубканы ала.

Шәрифә *(сәғәткә ҡарай)*. Ун биш минуттан килеп етергә тейеш. Әлеме? Районыбыҙҙың иң өлкән һуғыш ветераны сырхап китте. Шуның хәлен белеп сығам, тине. Үтә ашығыс булһа, телефонын бирәм. Улайһа, ярай...

Трубканы һала. Телефон йәнә шылтырай.

...Әлегә юҡ. Телефонығыҙҙы бирегеҙ. Үҙебеҙ шылтыратырбыҙ. Нимәһе уңайһыҙ булһын ти? Кирәкһенсә, уңайлы булыр... Ихтыярығыҙҙа...

Тағы шылтырай.

Эйе, эйе... Райисполком. Приемная. Йомошоғоҙ ашығыс булһа, һәр көн...

Тағы шылтырай.

...Тыңлайым. Дүрткә. Горкомға. Кемгә? Аңланым. *(Яҙа.)*

Нәҡ ательелағы һымаҡ моңһоу итеп сәғәт һуға.

Шәрифә *(башта – сәғәткә, унан ишеккә ҡарай)*. Туғыҙ.

Ишек асыла. Мәхмүт инә. Ул борсоулы. Һәйбәт кейенгән. Шуның арҡаһындамылыр, ныҡ олпат күренә. Күкрәгендә — депутат значогы. Кепкаһын һалып, шкафҡа ҡуя.

Мәхмүт. Һаумы, Шәрифә!
Шәрифә. Хәйерле иртә, Мәхмүт ағай!
Мәхмүт. Ниндәй хәбәрҙәр бар?
Шәрифә. Төнгө икелә трамвай паркында пожар...
Мәхмүт. Беләм. Булдым.
Шәрифә. Сәғәт дүрттә горкомда...

Мәхмүт. Беләм. Тағы?

Шәрифә. Хәзергә бүтән әллә ни юҡ. Мөхәмәтйәровтың хәле нисек, Мәхмүт ағай?

Мәхмүт. Бик ауыр. Китеп бармағайы...

Шәрифә. Сир берәүҙе лә аямай шул — батырҙы ла, бахырҙы ла...

Мәхмүт. Шәрифә, һин миңә ярты сәғәт ваҡыт бир. Ашығыс ҡарайһы документ бар.

Шәрифә. Ярар.

Мәхмүт *(үҙ яғына уҙа башлай, борола)*. Архитекторҙарға шылтыратып әйт, бишкә түгел, алтыға көтәм. Мәктәп директоры Буранщинды — етегә.

Шәрифә. Әйтермен.

Мәхмүт үҙ яғына үтә. Унда туҡталмай, эске бүлмәгә уҙа. Һаҡ ҡына ишек ҡағалар. Ярым асыҡ ишектә Мисбахов күренә.

Инсаф. Рөхсәттер бит?

Шәрифә. Рәхим итегеҙ.

Инсаф. Рәхмәт. Беҙ икәү.

Шәрифә. Икегеҙ ҙә рәхим итегеҙ.

Инсаф менән Мәҙинә инә. Сәғәт яртыны һуға. Мәҙинә тертләп китә.

Мәҙинә. Шул уҡ сәғәт тауышы... *(Аптырап та, ҡаушап та ҡарана.)*

Инсаф. Беҙ дөрөҫ килеп юлыҡтыҡмы икән, тим?

Шәрифә. Ҡайҙа юл тотҡайнығыҙ һуң?

Инсаф. Һаумыһығыҙ. Мәхмүт Ильясович Юлбирҙин иптәшкә тигәйнек.

Шәрифә. Ишектәге яҙыуҙы шәйләмәнегеҙме ни?

Инсаф. Күтәрелеп ҡараманыҡ шул. Башты бәлә баҫты.

Шәрифә. Шатлыҡ уртаҡлашырға бында һирәк инәләр шул... Ултырығыҙ. Көтөргә тура килер.

Мәҙинә. Көтөүҙәр бушҡа сыҡмаһа... беҙҙең хәл көтөүҙән инде.

Шәрифә. Үтенесегеҙ ғәҙел, эшегеҙ хаҡ булһа, бушҡа сыҡмаҫ.

Мәҙинә. Иғтибарлы, ипле тип ишетеп килдек инде.

Инсаф. Үтенес ни ул, ханым, үтенес инде. Уның татлыһы булмай.

Мәҙинә *(үҙенә)*. Сәйер... Хатта «Ильясович»ы тура килә. *(Ҡысҡырып.)* Бер Мәхмүт Юлбирҙин ғүмер буйы

энә күҙләй, икенсе Юлбирҙин яҙмыштарҙы хәл итә. *(Шәрифәгә.)* Беҙҙең шул исемле таныш тегенсебеҙ бар.

Шәрифә *(йылмая биреп)*. Бар тиҙәр ундай тегенсе...

Инсаф. Бик һәйбәт оҫта. Егерме биш йыл әүәл ул миңә туй костюмы теккәйне. Ҡул арты ифрат еңел булды. Бәхетле йәшәнек. Яңы кейем кешене йә бәхетле...

Мәҙинә *(ирония менән)*. Йә бәхетһеҙ итә...

Инсаф. Эйе шул. Көмөш туйыбыҙға ла ул тегә башланы.

Шәрифә *(һағая)*. Ҡайҙа тегә башланы?..

Инсаф. «Тумыртҡа» тигән ательела...

Шәрифә *(үҙ алдына)*. Нишләп ул? Нишләп улай? *(Инсафҡа.)* Ниңә, улайһа, ательеға барманығыҙ?

Инсаф. Барҙыҡ. Ике тапҡыр барҙыҡ. Оҙаҡламай өлгөрә инде.

Мәҙинә. Инсаф Мисбахович! Тегенсене ҡалдырып тор. Уның үҙ урыны бар.

Инсаф. Эйе шул.

Телефон шылтырай. Шәрифә ала.

Шәрифә *(сәғәткә ҡарай)*. Рәхим итеп, ун биш минуттан шылтыратығыҙ. Әйтермен! Икәү бар...

Мәҙинә. Күптән эшләйме?

Шәрифә. Кем? Тегенсеме? Белмәйем.

Мәҙинә. Юлбирҙин. *(«Председатель» тип яҙылған ишеккә күрһәтә.)* Ул.

Шәрифә. Рәйес булып ете йыл. Уға тиклем ике йыл урынбаҫар ине. *(Ҡаршы ишеккә күрһәтә.)* Ошо ишектәрҙән туғыҙ йыл инеп-сығып йөрөй. Ниңә, һеҙ был районда тормайһығыҙмы ни?

Инсаф. Беҙ ситтә йәшәнек. Ҡайтыуыбыҙға бары йыл ғына тулды.

Мәҙинә. Нужа төшмәгәндә, начальство кәрәгеп тә бармай инде.

Шәрифә ситуацияны аңлап ала. Быларҙы Мәхмүт менән осраштырмаҫҡа кәрәклекте төшөнә.

Шәрифә. Уның урынбаҫары ла ғәҙел, иғтибарлы кеше. Бөгөн генә ялдан ҡайтты, яҡшы кәйеф менән иртәгә эшкә тотонасаҡ.

Инсаф. Ял ни ул кешегә көс өҫтәй инде.

Шәрифә. Бәлки, һеҙҙең йомошто урынбаҫар йомошлар. Беренсе булыш һеҙҙе ҡабул итер иртәгә иртүк...

Мәҙинә. Рәхмәт, ханым. Әммә беҙ үҙенә тип килгәйнек. Зинһар, беҙҙе кире бора күрмәгеҙ.

Инсаф. Эйе шул. Беҙҙең йомошобоҙ бик ҙур, уны Ҙур кеше генә йомошлай алаҫаҡ. Йомош тигәнебеҙ ҙә йомош ҡына түгел шул...

Шәрифә. Кәңәшме ни?

Мәҙинә. И, ханым! Ҡоро кәңәш һорап, кеше борсой торған заманамы ни хәҙер?

Шәрифә. Аңлап еткермәйем.

Мәҙинә. Ҡоро кәңәште уны мәлйерәп бөткән пенсионер ҡарт та бушлай бирә... Беҙгә кәңәш түгел, яҡлау кәрәк... Беҙ бәләгә ҡалдыҡ. Нисәмә йылдар ел-ямғыр күрмәй йәшәп... *(Ҡулъяулығын сығара.)*

Инсаф. Эйе шул.

Кабинетта — звонок. Шәрифә инеп китә.

Мәҙинә *(ишеккә күрһәтә)*. Тегендә ингәс, «Эйе шул»ыңды шышылдама, «юҡ»ты күп әйт.

Инсаф. Эйе... ярар...

Мәҙинә. Күңелем һис кенә лә урынында түгел.

Инсаф. Нисәмә төн йоҡо күргәнең юҡ...

Шәрифә урап сыға.

Шәрифә. Инегеҙ. Көтә.

Инәләр. Мәхмүт өҫтәле эргәһендә баҫып тора.

Мәҙинә. Һаумыһығыҙ, Мәхмүт Ильяс... Ильясович... Мәхмүт Ильясович!

Мәхмүт. Һаумыһығыҙ.

Мәҙинә ҡул һуҙа. Мәхмүт уның ҡулын тота. Мәҙинә ҡатып ҡала. Мәхмүт уны креслоға ултырта.

(Ҡаушап.) Кисерегеҙ. Мин һеҙҙе бында көтмәгәйнем. Кисерегеҙ... Шәрифә нимәлер ымлап та ҡарағайны, аңламаным. Һеҙ тип уйламаным, хатта бына ҡаушап киттем.

Инсаф *(ике ҡулы менән Мәҙинәгә күрһәтеп)*. Беҙ ҙә ҡаушаныҡ. Ана бит, ҡалай яйһыҙ килеп сыҡты. Теге саҡ Зәмзәгөл һеҙҙең нindәйҙер икенсе кәсебегеҙ тураһында

әйтә биреп ҡуйғайны шул. Баҡһаң... *(Кабинетҡа күҙ йөрөтөп сыга.)* Кем уйлаған... *(Мәҙинәгә ҡарһатә.)* Бигерәк тә нескә күңелле шул.

Мәҙинә *(башын күтәрә)*. Кәмит... Ниңә шулай кәмит уйнайһың, Мәхмүт?

Мәхмүт. Мин уйнамайым. Мин йәшәйем.

Мәҙинә. Кем булып, ҡайһығыҙ булып йәшәйһең?

Мәхмүт. Үҙем булып...

Мәҙинә. Юҡ, Мәхмүт, үҙең теккән кейемдең дә ике яғы ла уң булмай. Бер яғы тиҫкәре була. Ҡайһы яғың уң һинең?

Мәхмүт. Мин бит кейем түгел, кеше.

Инсаф. Абруйлы кеше...

Мәҙинә. Кем һин — район башлығымы әллә тегенсеме?

Мәхмүт. Үҙем. Икеһе лә үҙем.

Мәҙинә. Ҡайһығыҙ ысын?

Мәхмүт. Үҙем ысын.

Мәҙинә. Улай булмай. Булмай улай! Беҙ был донъяны байтаҡ беләбеҙ. Һин йә йүләрлектән, йә яуызлыҡтан шулай ҡыланаһың.

Мәхмүт. Ни өсөн яуызлыҡтан?

Мәҙинә. Үҙең ишеләрҙе эстән ғәйепләр, битәрләр өсөн: йәнәһе, мин ниндәй ҙә, һеҙ ниндәй. Мин халыҡ-сан, ябай, имеш.

Инсаф. Бәхәс дәрәжәләре тиң кешегә килешә, Мәҙинә ханым.

Мәҙинә. Кемгә кәрәк һинең ябайлығың? Белгән кешеләр, моғайын, ситкә боролоп, пырх-пырх көләләрҙер әле.

Мәхмүт *(ихлас)*. Көләләр. Берәүҙәр «йәйәүле Мәхмүт» тип рәхәтләнеп көләләр, икенселәр көлөп рәхәтләнәләр.

Мәҙинә *(ҡапыл борсолоп)*. Әллә, тим?.. Һорарға хатта телем әйләнмәй.

Мәхмүт. Уйлағас, һора.

Мәҙинә. Кәсеп ташламауыңа әллә, тим, мохтажлыҡ сәбәпсеме?

Мәхмүт *(ихлас)*. Уныһы ла бар. Бер юлы ете ҡашыҡ күтәрәбеҙ. Ни тиһәң дә, иш янына ҡуш була.

Мәҙинә. Ысын булһа, быныһы ла диуаналыҡ. Район башында ултырып, тамаҡ аҫрарға, әйтерһең, бүтән сара... бүтән юл юҡ?

Мәхмүт *(киҫкен)*. Ниндәй сара? Ниндәй юл?

Мәҙинә. Бөткәнме ни?

Мәхмүт. Бөткән! Район башында ултырһам да, минең бихисап биләмәләрем, крепостной крәҫтиәндәрем юҡ бит! Дөрөҫөрәге, мин район башында түгел, район минең башта *(түбәһенә һуға)* ултыра. Ул — минең хужам.

Мәҙинә. Ундай һүҙҙәрҙе беҙ ҙә беләбеҙ.

Мәхмүт. Белмәйһегеҙ! Белһәгеҙ, минең төп һөнәремде, намыҫлы эшемде, ихлас инаныуымды юҡҡа сығарып ташламаҫ инегеҙ. Ниңә һеҙ, күпте белеүселәр, түрәләр түрҙә генә ултырғанда «халыҡтан айырылды», «эреләнде», «маһайҙы» тип мығырлайһығыҙ, түренән төшөп, йәйәү йөрөштөргөләй башлаһа, «ваҡлана», «халыҡсан булып ҡылана» тип хихылдайһығыҙ, ниндәйҙер мәкер, хәйлә эҙләйһегеҙ. Иң яманы әле был түгел. Иң яманы: уның йәйәү йөрөүен, халыҡ араһында күренеүен мәртәбәгә күтәрәһегеҙ, ғәжәпләнәһәгеҙ, шаҡ ҡатаһығыҙ, был ҡылығы өсөн уны пәйғәмбәргә әйләндерәһегеҙ. Ә әҙәм балаһының әҙәм генә икәнен башығыҙға ла һыйҙыра алмайһығыҙ. Күпте белеүсе хөкөм эйәләре...

Инсаф. Эйе шул. Хөкөм сығарыуҙары еңел.

Мәхмүт. Кемгә еңел, кемгә ауыр. Йәнә хөкөмөнә ҡарап...

«Хөкөм» һүҙенән һуң Мисбах менән Мәҙинә борсолоп ҡарашып ала.

Инсаф. Эйе шул... Юҡ...

Пауза. Мәҙинә Мәхмүттең кабинетын әйләнеп сыға, өҫтәлен, урындыҡтарын һыйпап, бер ситтәге өҫтәл өҫтөндәге яңы төҙөлөш районының макетын һыйпай.

Мәҙинә. Ғәфү ит, Мәхмүт, мин, моғайын, башҡаса аңларға теләмәйемдер... Һинең ошондай оло дәрәжәң, ошондай кабинетың, ошондай өҫтәлең, ошондай ултырғыстарың, ошондай диванд арың, ошондай төрлө-төрлө телефондарың, ошондай йыһазың — минең хыялым ине. Ә һин, иҫке һөнәреңде ташламай, шуларҙы һанға һуҡмайһың, кәмһетәһең кеүек, йылы бүреккә һалған бүре балаһылай, һаман үҙ урманыңа ҡарайһың кеүек... Быға минең хатта хәтерем ҡала...

Инсаф. Бүре балаһы ла тиктәҫкә генә ҡарамайҙыр инде. Йәне иреккә тарталыр.

Мәхмүт. Эйе, яраткан эшеңдән дә татлырак ирек юк.

Мәҙинә. Быныһы ла татлы һүҙ генә...

Мәхмүт *(капыл йомшарып)*. Ысынлап та, бер юлы күпме әскелтем-сескөлтөм һүҙ һөйләп ташланык. Ғәйепләштән булмаһын.

Инсаф. Аңлашыуҙан зарар юк.

Мәхмүт *(йәнләнеп)*. Рәхим итегеҙ! Был юлы кейем үлсәтергә түгелдер, моғайын.

Инсаф. Юк, юк...

Мәҙинә. Беҙ, Мәхмүт, һиңә тип түгел, райсовет председателенә тип килгәйнек.

Инсаф. Итәғәтле, ғәҙел кеше, тигәйнеләр...

Мәҙинә. Һин икәнен белһәк, бәлки, кыймаған да булыр инек. Оялыр инек, бәлки...

Инсаф. Улай тимә әле, Мәҙинә ханым. Нужа ояттан көслөрәк ул.

Мәхмүт. Был районда хәҙергә минән башка председатель юк. Рәхим итеп, ултырышайык. Беҙҙең урында боронғолар тәүҙә ултырышып доға кылыр ине, унан хәл-әхүәл һорашыр ине. Ә беҙ?.. Егерме биш йыл эсендә, әйтерһең, һорашыр нәмә юк.

Ултырышалар. Тәҙрә асылып китә. Әлеге туй шау-шыуы бәреп инә. Уны Мәҙинә менән Мәхмүт кенә ишетә. Инсаф битараф ултыра. Тегеләр ҙә, быны бары хәтерләү генә тип уйлап, бер-береһенә һиҙҙермәйҙәр.

— Әсе! Әсе!
— Горько!
— Үбешһендәр!

Һауыт-һаба ватыла.

Тауыш. Наша бырат Хажиморат
«Жигули»ға өйләнгән.
Һүҙебеҙ көмөш, йырыбыҙ алтын,
Үҙебеҙ алмас тигәндәй...
Их-ма!

Тәҙрәнән Баш күренә.

Баш. Мецемсе кат ғәфү һорайым. *(Йырлаусыға.)* Өнөң тығылғыры! Шартлағыры! Хам! Нахал! Оятһыҙ! Егерме биш йыл буйы көрәшәм, еңеп булмай үҙен.

Хәсис! Мин уға брат та, сват та түгел, бары табындаш, ризыҡташ ҡына. Үҙен ташлап та китер инем, табынын ташлап китә алмайым, ҡәһәр һуҡҡырының. Был юлы тәҙрәгеҙҙе ныҡ итеп ябам. Ел дә, ен дә аса алмаясаҡ. Минең дә беренсе ғәфүемде һорайым. Минең инсафлығымды баһаларһығыҙ, тип ышанып китәм...

Тәҙрәне яба. Пауза.

Мәҙинә. Был бүлмәгә беҙҙе бәлә алып килде. Кисер, Мәхмүт, көтөлмәгән күрешеү зиһенемде алды. Ысҡынып киттем. Ни һөйләгәнемде лә белмәҫ булдым.

Мәхмүт. Мин дә артыҡ ҙур ҡунаҡсыллыҡ, хуш күңеллелек күрһәтә алманым, буғай...

Инсаф. Ҡабул итеүегеҙ — беҙҙең өсөн үҙе ҡунаҡсыллыҡ инде, Юлбирҙин иптәш.

Мәҙинә. Яҡлау һәм миһырбанлыҡ өмөт итеп килдек беҙ бында.

Инсаф. Яҙмышыбыҙ һеҙҙең ҡулда.

Мәхмүт. Яуызлыҡтан яҡларға мин әҙер. Ләкин яҙмышығыҙҙы еңел генә миңә тапшырырға ашыҡмағыҙ.

Инсаф. Шулай әйтеп күнегелгән инде.

Мәхмүт. Мин һеҙҙе иғтибар менән тыңлаясаҡмын, Мәҙинә Даяновна... Инсаф Мисбахович...

Мәҙинә. Атайымды онотмағанһың икән.

Мәхмүт. Атайыңды ла онотманым. *(Инсафҡа боролоп.)* Тыңлайым.

Инсаф. Бәлә — минеке.

Мәхмүт. Тимәк, һүҙ ҙә һеҙҙеке.

Инсаф. Минеке. Бәләкәс кенә сигенеүҙән башлаһам инде...

Мәхмүт. Теләһә ҡайҙан башлағыҙ.

Инсаф. Рәхмәт. Мәҙинә ханым менән ситтән ҡайтҡас та, мин иптәш Ялаев заводында баш бухгалтер булып эшләй башланым...

Мәхмүт *(һағайып)*. Ялаев заводы... Шундай заводсик бармы ни?

Инсаф. Халыҡ шулай тип йөрөтә... Квартал аҙағы килеп етте шулай. Ялаев мине саҡырып ала ла отчет ҡағыҙына бармағын төртә: «Бына ошо ергә... ошо ергә бәләкәс кенә ике цифр өҫтәргә кәрәк», — ти.

Мәҙинә. Һин «эйе шул» тинең инде.

Инсаф. «Юҡ!» — тинем. Башта өҙөп әйттем. Шунан: «Нимә-ә?» — тип екерҙе теге, ике күҙе тәгәрәп төшә тип торам. «Нимә һин, — ти, — счет төймәһен быға тиклем Хоҙай тәғәлә контораһында тартып ултырҙыңмы ни? Фәрештәләр үбешкәнен иҫәпләп, дебет-кредит сығарҙыңмы ни? — ти. — Квартал аҙағында йыл йомғағында ошондай цифрҙарға ҡойроҡ та таҡманың, ял да өҫтәмәнеңме ни?» — ти. Мин дөрөҫөн әйт тә һал: «Элекке эшемдә булғыланы, әлбиттә, — тим, — әммә тыуған тупраҡҡа ҡайтҡас, ант иттем, тәүбә килтерҙем», — тим. Теге ҡапыл өгөткә күсте: «Мин һинең антың менән тәүбәңде, премия итеп, халыҡҡа өләшә алмайым бит, хөрмәтле Инсаф Кемович... Мисбахович, — ти. — Һеҙ шундай уҡ ҡаты бәғерле, шәфҡәтһеҙ әҙәмме ни? Һеҙ бит меңәрләгән кешене, премиянан мәхрүм итеп, хеҙмәт халҡының эшсән ҡулына һуғаһығыҙ, ауыҙынан ризығын тартып алаһығыҙ, — ти. — Хәйер, һеҙ килмешәккә заводтың абруйы, эшсе синыфының мәнфәғәте бар ни ҙә, юҡ ни...», — ти. Миңә яман итеп ҡараны ла ҡул һелтәне. Мин таралып төштөм. Ул әйткән ике цифрҙы шунда уҡ өҫтәп яҙҙым. Кварталдан һуң — ярты йыл, унан йыл аҙағы килеп терәлде. Ул күпме ҡушһа, мин шулай өҫтәй барҙым... Начальство алдында мин гел ҡаушайым. Хатта йыйылыштарҙа алға, трибунаға сығып, начальствоға артым менән торорға тартынам. Ҡабырғам менән тороп һөйләйем. Залдан ҡысҡыралар: «Залға ҡарап һөйлә!» — тиҙәр. Зал ҡысҡыра ла шыма ул...

Мәҙинә. Трибунала һинең нисек тороуың, Инсаф Мисбахович, бында кәрәкме икән?

Инсаф. Эйе шул.

Мәхмүт. Тағы «эйе шул».

Инсаф. Эйе шул.

Мәхмүт *(ҡапыл тоҡана)*. «Эйе шул», «Эйе шул», «Эйе шул». Ниндәй бөтмәҫ-төкәнмәҫ «эйе шул»? «Эйе шул» булып тыуҙығыҙмы, Инсаф Мисбахович, әллә шулай үҫтегеҙме һеҙ?

Инсаф. Минме?

Мәхмүт. Һеҙ.

Инсаф. Ниндәй булып тыуғанымды белмәйем, Юлбирҙин иптәш, әммә мин үҙ һүҙле теремек малай булып, ҡаты башлы малай булып үҫеп килгәнемде яҡшы хәтерләйем. Иҫемә төшһә, күңелдәрем тулып китә.

М ә ҙ и н ә. Быныһы инде хәтерләүҙәр... Борон-борон замандар...

И н с а ф. Юҡ, Мәҙинә ханым. Мин бит һорауға яуап ҡына бирәм.

М ә ҙ и н ә. Беҙ яуап бирергә тейеш башҡа һорауҙар ҙа хәтһеҙ...

И н с а ф. Булһын! Тәүҙә биргән һорауға яуап ҡайтарылырға тейеш.

М ә ҙ и н ә. Инсаф Мисбахович, мин ғәжәпләнәм һиңә...

И н с а ф. Һорауығыҙ өсөн рәхмәт, Юлбирҙин иптәш. Ҡоролмаған мылтыҡ та ғүмерҙә бер тапҡыр атырға тейеш, тиҙәр. Һөйләйем.

М ә ҙ и н ә. Инсаф!

И н с а ф. Бер бөгөлөп торайыр саҡта, мин шартлап һындым. Күрәһең, ҡаты заттан булғанмындыр. Һындым, Юлбирҙин иптәш! «Эйе шул»ға әйләндем.

М ә х м ү т. Кем һындырҙы? Ҡасан?

И н с а ф. Һорауығыҙға оҙон итеп яуап ҡайтарам.

М ә ҙ и н ә. Инсаф! *(Мәхмүткә ымлай.)* Ваҡыт бит бер беҙҙеке генә түгел.

М ә х м ү т. Ваҡыт — һеҙҙеке. Һөйләһен.

И н с а ф. Бишенсе класта уҡый инем... Беҙҙе тимер юл районы алдынғыларының слетын ҡотларға әҙерләй башланылар. Мин бары дүрт кенә һүҙ әйтергә: «Беҙ атайҙар юлынан барасаҡбыҙ!» — тип залға ҡарап ҡысҡырырға тейеш инем. «Бармайым да, әйтмәйем дә», — тип мин ҡырт киҫтем. Мәктәптә өйөрмә ҡупты. Вожатый — класс етәксеһенә, класс етәксеһе — завучҡа, завуч директорға йүгерҙе. Һәр береһе мине алдан байтаҡ ҡайыҙлап, директор ҡаршыһына килтереп баҫтырҙылар. Өгөтләп тә, янап та, ҡурҡытып та ҡараны директор. Нығ торҙом: «Юҡ, бармайым!», «Юҡ, әйтмәйем!» — тип ҡарыштым. «Улайһа, хәҙер үк атайыңды саҡыртабыҙ», — тине директор. Кинәт тыным ҡыҫылды, башым әйләнеп китте. «Барам, әйтәм», — тип бышылданым. «Бына шулай тыңлаусан, күндәм бул», — тип директор арҡамдан ҡаҡты. Ҡулы тос, ҡаты ине. Слет көндө, сәхнә алдына баҫып: «Беҙ атайҙар юлынан барасаҡбыҙ!» — тип өҙөп-өҙөп асыҡ итеп ҡысҡырҙым. Ҡысҡырҙым да, сәхнә артына сығып, тәгәрәй-тәгәрәй иланым... Был ваҡыт минең атайым хөкүмәт милкен урлағаны өсөн дүрт йылға төрмәгә ябылғайны... Шунан алып әҙер һүҙҙе һөйләргә, «эйе шул»

тиергә күнектем. Хатта йыйылыштарҙа ла мин һүҙемде минән алда һөйләүсенең мәғәнәһеҙ һүҙҙәрен йөпләүҙән башлайым. Бына шундай кеше мин... Аңлата алдыммы икән?

Пауза. Был арала Мәҙинә бер нисә тапҡыр сумкаһын асып яба. Нимәлер ҡарай.

Мәхмүт. Аңлата алдығыҙ. Әгәр мин дөрөҫ аңлаған булһам...

Инсаф. Зинһар, дөрөҫ аңлай күрегеҙ.

Мәхмүт. Дөрөҫ аңлаған булһам, һеҙ бында үҙ ғәйебегеҙҙе таныш, боронғолар әйтмешләй, иман килтереп, выждан ғазабынан ҡотолор өсөн килгәнһегеҙҙер, моғайын.

Инсаф. Улай ғына түгел шул. Выждан ҡайғылары ла китеп тора.

Мәхмүт. Ә нисек?

Инсаф. Беҙгә ғәйепте таныттылар, йәғни беҙҙе фашланылар инде. Хөкөм көтәбеҙ.

Мәхмүт. Кем башланы?

Инсаф. Комиссия. Махсус комиссия.

Мәҙинә. Бәлки, әле һуң түгелдер?

Мәхмүт. Һуң. Ул комиссияны заводҡа мин ебәргәйнем. Жалобалар булды.

Ҡаушау. Пауза.

Мәҙинә. Тағы һин. Бөтә ерҙә һин! Осо-ҡырыйы булмаған ниндәй шайтан дүңгәләге был? Киләбеҙ ҙә һиңә төртөләбеҙ. Юҡ, юҡ! Шайтандыҡы булмаҫ! Яҙмыш юлы был. Ул беҙҙе һиңә — яҡлаусыбыҙға, ҡотҡарыусыбыҙға үҙе алып килде. Яҡла, ҡотҡар, Мәхмүт! Бөтәһе лә үҙ ҡулыңда. Ярлыҡа, ҡотҡар бәләнән!

Мәхмүт. Был — бәлә түгел, енәйәт, Мәҙинә.

Мәҙинә. Барыбер ҡотҡар! Үҙ ҡулыңда бит!

Мәхмүт. Улай ялбарма, Мәҙинә. Һин мине беләһең. Мин үҙгәрмәнем.

Мәҙинә. Үҙгәрмәһәң дә, ялбарам!

Мәхмүт. Ғәфү итегеҙ, үтә ябай дөрөҫлөктө әйтәм: Мисбаховты ҡанат аҫтына алыу намыҫһыҙлыҡ һәм

ғәҙелһеҙлек булыр ине. Ғәҙелһеҙлек һәм намыҫһыҙлыҡ. Уның яҙмышы минең ҡулда түгел, закон ҡулында.

Мәҙинә. Ғәҙеллек... намыҫ... закон... Ниңә һеҙ, үтә ғәҙелдәр, үтә намыҫлылар, намыҫ тигән шул аяуһыҙ ҡоралығыҙ менән бөтә ерҙә бөтә ғаләмде өркөтөп, дер һелкетеп, ҡурҡыу аҫтында тотаһығыҙ? Ниңә шулай шәфҡәтһеҙ хөкөм итәһегеҙ? Һеҙҙең ҡоралығыҙ юлбаҫар хәнйәренән дә яманыраҡ: янайһығыҙ... янайһығыҙ... янайһығыҙ... Ә беҙ кем һуң? Әҙәм талайбыҙмы, кеше өлөшөнә керәбеҙме? Эшләмәй ашайбыҙмы? Беҙ — йәмғәтселек. Беҙ заман талабына, мохтажлыҡ бойороғона, ихтыяж әмеренә буйһоноп йәшәйбеҙ. Беҙ — күпселек! Һеҙ шул күпселек өҫтөнән хакимлыҡ итергә теләйһегеҙ... Приписка, имеш! Ул үҙенә алтын тауҙар приписать итмәгән дә! Анттарын онотоп, тәүбәләрен боҙоп, халыҡ өсөн тырышҡан. Завод өсөн! Коллектив өсөн!

Мәхмүт. Үтә ялҡынлы һөйләп ташланың, Мәҙинә.

Мәҙинә. Булһын! Һеҙ генә түгел, беҙ ҙә лозунгылар ҡысҡыра беләбеҙ.

Инсаф. Зерәгә ҡысҡыраһың, тамаҡ ҡарлығыуы ла ихтимал.

Мәҙинә. Зерәгә түгел. Лозунгылар ҡысҡырып, тамаҡ аҫраусылар ҙа бар әле.

Инсаф. Сәйәсәткә инмәйек, Мәҙинә ханым, уныһына беҙҙең аҡыл етмәй.

Мәхмүт. Тыңлап ултырам да, Мәҙинә, ғәйепле кеше бында мин булып сығам түгелме?

Мәҙинә. Һин дә ғәйепле! Һинең ҡул аҫтында бит улар *(Инсафҡа ымлай)*. Ялаев та һинең ҡул аҫтында.

Мәхмүт. Гонаһтарын шулай ҙа өҫтөмә ала алмайым. Ә яҙаһын уртаҡлашырға тура киләсәк.

Мәҙинә. Нисек уртаҡлашаһың? Моральномы? Иҫкәртеү... шелтә алыпмы? Миңә теләһә йөҙҙө бирһендәр.

Мәхмүт. Миңә берәүһе лә ауыр. Минең биш балам бар, Мәҙинә. Улар күҙенә тура ҡарарға кәрәк миңә — көн һайын, сәғәт һайын...

Мәҙинә *(хәйләкәр)*. Балаң бишәү генәме ни?

Мәхмүт. Беҙҙең заман өсөн аҙ түгелдер, тим.

Мәҙинә. Берәүгә кәмерәк һананың, Мәхмүт.

Мәхмүт *(аптырап)*. Нисек?

Мәҙинә. Шулай. Бирәүгә кәм.. Әгәр алтынсыһы һинең күҙеңә тура ҡарап ялбарһа...

Дөйөм борсолоу.

Инсаф *(тыйып)*. Мәҙинә ханым!

Мәҙинә. Тик тор!.. Һин бер нәмә лә белмәйһең.

Инсаф. Беләм шул. Мин теге саҡта уҡ төшөнгәйнем.

Мәҙинә. Белһәң дә тик тор!

Инсаф *(ҡырҡа)*. Мәҙинә!

Мәҙинә *(үҙенекен дауам итә)*. Әгәр ул талап итһә...

Мәхмүт. Кем? Нимә талап итһә?

Мәҙинә. Алтынсы балаң ярлыҡау, йолоу, яҡлау талап итһә...

Мәхмүт. Һин ни һөйләйһең, Мәҙинә?

Мәҙинә. Ана анау мөйөштә *(Инсафҡа күрһәтә)* йыуаш ҡына, сабыр ғына, күндәм генә бер кеше ултыра. Инсаф Мисбахович Мисбахов ул. Шул кеше минең ҡарынымдағы һинең улыңа ата булды. «Кемдән?» — тип һорамаңы, үҙенеке итте. Ятатып тәрбиәләне, үҫтерҙе, кеше итте.

Мәхмүт. Ҡайҙа ул?

Мәҙинә. Үҙе — алыҫта. Рәсеме — бына.

Сумкаһынан ике фото сығара.

Береһе — һинең йәш сағың, икенсеһе — еткән улың. Үҙең шикелле *(моңһоу йылмая)* бөҙрә сәсле, саф зәңгәр күҙле. Сибәр, хатта аҡыллы. Йә, ҡайһығыҙ кем — айыраһыңмы? Ҡайһы саҡ ҡапыл ғына үҙем дә айырмайым.

Мәхмүт ике һүрәтте лә ала. Ҡарап хайран ҡала.

Мәхмүт. Ниндәй мөғжизә был?..

Мәҙинә. Диуана ҡатын мин, егерме биш йыл буйы һүрәтеңде янымда йөрөттөм. Инсафтан да ҡурҡманым. Егерме биш йыл буйы ошо күҙҙәрең мине әҙәрләнеләр, ғазапланылар, һаҡланылар. Выжданымды борсоп, маҙамды алдылар... йырт та ырғыт бит инде, йыртманым. Бына хәҙер бөтәһе лә әллә нисек ауыр төштәге кеүек килеп сыҡты. Был рәсемдәрҙе һиңә күрһәтермен тип ғүмер уйламағайным. Һис нәмә уйламағайным...

Мәхмүт. Тимәк, һин минән үҙеңде генә түгел, улымды ла алып киткәнһең.

Мәҙинә. Эйе, алып киттәнмен. Киткәнбеҙ... *(Әсенеп.)* Ә һин, ниңә ебәрҙең һин беҙҙе? Ниңә өгөтләмәнең! Ниңә бойорманың? Ниңә әрләмәнең? Бер ҙә булмаһа, ниңә туҡмап имгәтеп ташламаның? Һин боксер инең бит... Аяҡҡа баҫҡылағансы, бәлки, башыма бүтәнсә уйҙар килер ине. Ниңә ебәрҙең һин беҙҙе?

Мәхмүт. Тыя алманым, тыя белмәнем.

Мәҙинә. Ниңә ебәрҙең? Ниңә трамвай артынан йүгерҙең, трамвайҙы уҙып, ниңә юлына арҡыры ятманың?.. Аҙаҡтан, аҙаҡтан һуң ниңә эҙләмәнең? Ниңә тапманың? Мин бит кәрәк инем һиңә.

Мәхмүт. Мин һиңә кәрәкмәй инем шул...

Мәҙинә. Беҙ, ахмаҡ бисәләр, ҡасан нимә кәрәген белеп бөтөрәбеҙме ни? Минең үҙемдә генә, талашып, өҙөшөп, кәм тигәндә, ун ҡатын йәшәй. Бел һин уларҙың ҡайһыһына нимә кәрәген. Икегеҙҙең берегеҙ ана шул унауҙы ҡаты усҡа ҡыҫып *(ҡыҫып күрһәтә)*, бер тән, бер йән итә алманығыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙы тәбиғәт еп итеп яралта, ир-ат уны йомғаҡ итеп сырмай. Һинән китеүемә, Мәхмүт, үкенмәнем. Үкенмәнем, ғазапландым. Бары ғазапландым ғына. Үкенмәнем. Ул саҡта мин китмәһәм, моғайын, һуңыраҡ һин мине үҙең ташлар инең. Күрәм, беҙ икебеҙ ҙә үҙгәрмәгәнбеҙ.

Мәхмүт *(рәсемдән һаман күҙен алмай)*. Мин һине көттөм. Оҙаҡ көттөм... Исеме нисек?

Мәҙинә. Мәҡсүт.

Мәхмүт. Мәҡсүт Мәхмүтович...

Инсаф. Кисерегеҙ, Инсафович... Мәҡсүт Инсафович.

Мәхмүт. Шулайҙыр, моғайын, шулайҙыр.

Мәҙинә. Бына ошо улың хаҡына, Мәҡсүт хаҡына, һин Инсаф Мисбахович Мисбаховты бәләнән ҡотҡарырға тейешһең. Был — беҙҙең һуңғы үтенесебеҙ.

Мәхмүт *(фотонан күҙен ала алмай)*. Минең әле, Мәҡсүт, үҙеңде күргәнем дә юҡ. Хәҙер бына һине ике араға баҫтырып, һатыулаша ла башлаясаҡбыҙ. Әгәр һин, Мәҡсүт Мәхмүтович булһаң, быға нисек ҡарар инең икән?

Инсаф *(урынынан тора)*. Юҡ, Юлбирҙин иптәш, ул, йәғни минең улым Мәҡсүт, бер ҡасан да Мәхмүтович булмаясаҡ. Минең кеше менән уртаҡлашыр улым

юҡ. *(Мәхмүт ҡулындағы карточканы ала.)* Мәҡсүт Инсафович Мисбахов үҙен алыш-биреш ҡорбаны итергә юл ҡуймаҫ ине. *(Ҡысҡырып.)* Мин дә юл ҡуймайым бығa! Балаға ҡағылмайыҡ! Ни эшләп мин оят еремде изге китап менән ҡаплайым, ти, йәмәғәт? Улай, йыуаш тигәс тә, бөтөнләй намыҫын юғалтҡан кешеме әллә мин? Бер килеп кеше үҙенән дә допрос алырға тейештер бит! Бына мин хәҙер үҙемдән допрос алам. Үҙемде яуапҡа тарттырам. Үҙемә хөкөм сығарам...

Мәҙинә. Инсаф Мисбахович! Шуның өсөн килдекме ни бында?

Инсаф. Белмәйем. Әммә мин, үҙемде хөкөм итеп, кешелегемде яҡларға теләйем.

Мәҙинә *(йомшаҡ)*. Туҡта, туҡта, Инсаф.

Инсаф. Туҡтамайым. Мин үҙемде приписка өсөн түгел — уныһы закон эше! — ҡурҡаҡлығым, ебегәнлегем, ярашыусанлығым, «эйе шул»ым өсөн хөкөм итәм! Хурлыҡлы приговор сығарам. *(Тыныс.)* Припискаһы ла ғүмер эсендә байтаҡ эшләнде. Ҡолағыңдағы бер алҡаң, Мәҙинә ханым, хәләл булһа, икенсеһе — приписка, бер бармағыңдағы йөҙөгөң хәләл булһа, икенсеһендәге — приписка. Минең аяғымдағы бер туфлийым хәләл булһа, икенсеһе — приписка. Бер хәләлгә — бер харам. Башҡа — баш килеп сыға.

Мәҙинә. Ирҙең нисек мал табыуында ҡатын-ҡыҙҙың эше юҡ. Ир табырға тейеш.

Инсаф. Таптым. Таптым да бына килеп ҡаптым.

Мәҙинә. Саманды юғалтаһың...

Инсаф *(ҡул һелтәй)*. Ул күптән юғалған инде... Юлбирҙин иптәш!

Мәхмүт *(ҡапыл башын күтәрә)*. Ә?

Инсаф. Һеҙҙең өсөн мин бығa тиклем донъяла юҡ инем. Бынан ары ла шулай булып ҡала күрһен инде. Беҙ һеҙгә килмәнек тә, һис нәмә һорамаығыҡ та, тип иҫәпләгеҙ. Зинһар, шулай итә күрегеҙ. Ялғанлыҡ менән дөрөҫлөк араһында йәшәп арыным мин. Бик арыным. Был йәһәттән һеҙ бәхетле — ике кәсеп менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, ике кәмәнең ҡойроғон тотмайһығыҙ. Ике арала йәшәмәйһегеҙ. Ике ерҙә лә эшегеҙ хаҡ... Улыбыҙ тураһында белдереп, һеҙҙе хафаға һалыуыбыҙ ихтимал... Кисерегеҙ, яйһыҙыраҡ килеп сыҡты.

Мәхмүт. Көтмәгәндәрәк килеп сыҡты шул. Әгәр бик үтенеп һораһам...

Инсаф. Үтенмәһәгеҙ ҙә, аңлайым. Рәхим итегеҙ. *(Мәҡсүттең рәсемен һуҙа.)* Һеҙҙең ҡаныҒыҙҙан, минең йәнемдән яралған берҙән-бер улым. Был донъяла таяныр алтын бағанам...

Мәхмүт. Рәхмәт. (*Үҙ һүрәтен аңғармаҫтан Мәҙинәгә һуҙа.)* Ә быныһы?

Мәҙинә. Быныһы ла һиндә ҡалһын.

Инсаф. Ярай, хушлашайыҡ.

Мәхмүт. Һеҙҙең эште, Инсаф Мисбахович, ентекләп ҡарармын, иғтибар менән...

Инсаф. Бимазаланмағыҙ. Яҙығына күрә язаһы булыр. Кеше, бер килеп, уны күтәрергә тейештер бит инде.

Мәҙинә оҙаҡ хәрәкәтһеҙ тора.

Мәҙинә. Бынан һуң күрешеү ҙә, айырылышыу ҙа булмаясаҡ. Йә, хуш! Бәхилләштән булайыҡ. Йәйәүле Мәхмүт, Йәйәүле — атлы Мәхмүт! Ләкин атыңа һаман да атланмағанһың, теҙгененән генә етәкләп йөрөтәһең икән...

Мәхмүттең иңбашына башын һала. Ҡапыл тура баҫа, боролоп ишеккә атлай. Инсаф Мәхмүт ҡаршыһына килә. Баш эйә.

Инсаф. Беҙ һеҙҙең менән осрашманыҡ, Юлбирҙин иптәш, бары айырылыштыҡ ҡына. Сәләмәт булығыҙ.

Сығалар. Ут һүнә.

ИҪӘП-ХИСАП

«Тумыртҡа» ательеһы. Кис. Креслола Мәхмүт ултыра. Ул әллә ойоп киткән, әллә уйлана. Уның муйынында — ғәҙәттәгесә таҫма метр. Юҡ, ул ойомаған, уйлана икән.

Мәхмүт. Мине хафаға һалыуҙары өсөн Мисбахов ғәфү үтенеп китте. Нисәмә йылдар буйынса өҙләкһеҙ күңелем һыҡраны. Сәбәпһеҙ һағышымдың сәбәбе бына кем икән ул... *(Түш кеҫәһенән улының фотографияһын сығара.)* Бынан ары ул әрнеүҙең ахыры ла, сиге лә

булмаясаҡ. Ә шулай ҙа ошо ер йөҙөндә, тимәк, минең тағы бер кешем бар. Ю-юҡ, мин юғалтманым. Мин таптым. Ул бар бит! Һулыш ала, йәшәй... *(Көрһөнөп.)* Әммә минең барлығымды ул бер ваҡытта ла белмәйәсәк. Белдермәйәсәктәр, белдермәйәсәкбеҙ...

Һаҡ ҡына ишек ҡағалар. Мәхмүт ишетмәй. Әүәлгесә сәғәт һуға. Ишек ҡағыу ҡабатлана.

Инегеҙ!

Беренсе бүлектә күренгән егет инеп баҫа.

Егет. Мөмкинме?

Мәхмүт. Ингәс, мөмкин инде.

Егет. Рәхмәт, ағай.

Мәхмүт. Кем тип беләйек?

Егет. Онотҡан булһағыҙ, әйтергә оят.

Мәхмүт ентекләп ҡарай.

Мәхмүт. Стакан кәрәкме?

Егет. Ю-ю-юҡ, ағай.

Мәхмүт. Нимә кәрәк һуң?

Егет. Бәхиллек кәрәк. Йәнә фатиха...

Мәхмүт. Фатиха өләшеп ултырырға мин бит һеҙгә ишан хәҙрәт түгел.

Егет. Унһын ғына беләм дә... Теге саҡ, үҙемдән дә йүнһеҙерәк кешеләргә эйәреп йөрөгәнемдә, мин һеҙҙе рәнйетеп киттем. Йәнәһе, хәтәр, сая, удалой егет, имеш. «Папаша... мамзель...» — тип кенә ебәрә. Һабағығыҙ өсөн рәхмәт, ағай. Файҙалы булды.

Мәхмүт. Еттеме һуң?

Егет. Етте! Тап-таман булды.

Мәхмүт. Һуң эш нимәлә?

Егет. Тураһын ғына әйткәндә, мин, ағай, бөйөк төҙөлөшкә китәм. Кисә кис килгәйнем, утығыҙ булманы. Ике көндән китәм инде.

Мәхмүт. Кит. Бик һәйбәт булыр.

Егет. Былай ғына китә алмайым шул. Мин бит унда мал йыйырға түгел, әҙәм булырға барам.

Мәхмүт. Быныһы ла һәйбәт.

Егет. Һәйбәтен-һәйбәт тә... Бик һәйбәт тә түгел. Һеҙҙең бәхиллегегеҙ кәрәк. Үҙем йәбер күрһәткән кешеләрҙе берәм-берәм йөрөп сыҡтым инде. Алтыһы ғәфү итте, береһе ҡыуып сығарҙы, береһе командировкала. Бына хәҙер һеҙгә килдем... Шундай ҙур юлға кругом ғәйепле баш менән сығып булмай бит инде. Ғәфү итегеҙ мине, ағай, ә? Фатиха бирегеҙ.

Мәхмүт. Һин, ҡустым, был һүҙҙәреңде аңлап һөйләйһеңме, әллә алдап һөйләйһеңме?

Егет. Аңлап һөйләйем, ағай. Бик аңлап һөйләйем. Яңы юлға миңә хәлдән килгәнсә таҙарынып сығырға кәрәк. Теге йәшел йыландың да муйынынан бороп ырғыттым. Валлаһи, ағай!

Мәхмүт *(йылмая)*. Былдай изге ниәтле кешегә фатиха бирмәй булмаҫ.

Егет. Һеҙ көлмәй генә бирегеҙ, ағай. Ысын итеп, ихлас итеп...

Мәхмүт. Исемегеҙ нисек?

Егет. Робеспьер.

Мәхмүт. Робеспьер?..

Егет. Атайым француз партизандарында булған. Бергә һуғышып йөрөгән. Йөрәк тамырына оскологы тығылып, етмеш бишенсе йылда үлеп ҡалды.

Мәхмүт. Минең атайым Венгрияла ятып ҡалған. Алтмыш беренсе йылда барып, ҡәберен зыярат ҡылып ҡайттым. Балатон күленең текә яр башында күмелгән. Ҡәберен бик ҡарайҙар икән. Гел сәскә араһында.

Егет. Ярай инде, азат итеүсенең ҡәҙерен белгәс шулай...

Мәхмүт. Былай булғас, беҙ икебеҙ ҙә һалдат улдары булып сығабыҙ түгелме?

Егет *(маһая биреп)*. Һалдат улдары, ағай!

Мәхмүт. Улайһа, бына нимә: беҙ ғәфүҙәр, фатихалар менән маташып тормайыҡ. Әйткән һүҙҙе, биргән антты һалдаттарса ныҡ тоторға, атайҙарыбыҙса үтәп сығырға вәғәҙә ҡуйышайыҡ. Үҙең бая «валлаһи» тип тә ысҡындырҙың.

Егет. Дөрөҫ, ысҡындырҙым.

Мәхмүт *(ҡул бирә)*. Вәғәҙәме?

Егет. Вәғәҙә, ағай! Валлаһи, вәғәҙә!

Мәхмүт. Ярай, юлың имен булһын.

Е г е т . Рәхмәт, ағай! Вәғәҙә!
М ә х м ү т . Хуш.

Егет ишек төбөндә туҡтала. Кеҫәһенән нимәлер сығарып маташа.

Е г е т . Онотоп китә яҙғанмын. Мәгеҙ, ағай.
М ә х м ү т . Нимә тағы?
Е г е т . Стакан. Анау саҡ минең арҡала эшләнгән материаль зыянды ҡаплайым. Ихлас!
М ә х м ү т . Быныһы ла шәп! Тимәк, һин ысынлап та һәйбәт юлға сыҡҡанһың, Робеспьер! Робеспьер...
Е г е т . Робеспьер Туҡтамышев.

Боролоп сығып китә.

М ә х м ү т . Кем генә юҡ был донъяла... Хатта Робеспьер Туҡтамышев та бар. Ә бит насар яңғырамай — Робеспьер Туҡтамышев...

Ут һүнә. Шул уҡ урын. Мәхмүт икенсе яҡҡа сыҡҡан. З ә м з ә г ө л инә.

З ә м з ә г ө л . Уф! Ғәрлегемдән үләм! Ошо көндәргә төшөрмөн тип кем уйлаған! Кемдәр генә уйлаған? Сәнғәттең бейек алтын манараһына инде менеп еттем тигәндә генә ҡолап төштөм. Һынды талант ҡанатҡайҙарым. Ике ҡанатым бер юлы һынды. *(Манекендарға.)* Һеҙгә ҡарап хыялландым, һеҙгә ҡарап тилерҙем бит мин. Ниңә алданығыҙ мине? Мине ниңә алданығыҙ?.. Әллә һеҙ ҙә илаһи бөйөк заттан булып ҡыланаһығыҙ ғынамы? Мөғжизә донъяһына ашҡан булып, үҙегеҙҙе үҙегеҙ алдайһығыҙ ғынамы? Әллә һеҙ ҙә юрамал ғына йәшәйһегеҙме?.. Бисараҡайҙарым!.. Ҡайһығыҙ бәхетле һуң һеҙҙең? Йә, ҡайһығыҙ? Чио-Чио-сан, һинме? Һинме, Кармен? Һинме, Дездемона? Һинең бәхетеңде лә әйтер инем инде, Дон Жуан! Әжмәғол ағай, һин дә башыңды этлеккә һалып ҡына йәм табаһың... Ҡырағай олатайыбыҙ! Бәлки, һин бәхетле булғанһыңдыр, ә?! Хыял һүнде, өмөт өҙөлдө! Ҡылыс һынды! *(Манекендарҙың кейемдәрен берәм-берәм һыҙырып ала.)* Уйын бөттө! Эш башлана! Эш! Иртәгәнән алып мин һеҙҙе әҙәмсә кейендерәсәкмен! Һине

лә! Һине лә! Һине лә! Һине лә! *(Бороню олатайыбыҙ алдында туҡтала.)* Һиңә теймәйем. Кешеләргә битәр булып, шул көйө тор. Һин берәүҙе лә алдамағанһың. Сөнки һин уйнамағанһың...

Мәхмүт сыға. Аптырап ҡарап тора.

Мәхмүт. Ниндәй төнгө стриптиз был?

Зәмзәгөл. Нимә тиһең, ағай?

Мәхмүт. Быларҙы ниңә сисендерҙең, тим?

Зәмзәгөл *(Мәхмүттең күкрәгенә башын һалып илай)*. Бөттөм, Мәхмүт ағаҡайым! Уйын бөттө. Хыялдарым һүнде. Сәнғәттең бейеклектәрҙән-бейек, изгеләрҙән-изге манараһынан ҡолап төштөм мин бөгөн!

Мәхмүт. Бик бейеккә менгәйнеңме ни?

Зәмзәгөл. Бейеккә шул.

Мәхмүт. Башың әйләндеме ни?

Зәмзәгөл. Әйләнмәне. Ҡылый Байтүрә ҡыуып ҡайтарҙы: «Бынан ары театрға аяҡ баҫаһы булма, — тине, — һин автор яҙғанды уйнамайһың, тиҫкәреләнеп, үҙеңдекен уйнайһың, — тине, — надоел инде, — тине. — Бик шәпле булғас улай, үҙең ултыр ҙа пьеса яҙ, — тине... Аҙаҡтан өҫтәп ҡуйҙы: — Лучше тегеүеңде тек», — тине.

Мәхмүт. Ә һин артистка буласаҡһың. Ысын артистка...

Зәмзәгөл. Беләм инде, йыуатыр өсөн генә шулай тиһегеҙ һеҙ...

Мәхмүт. Мин белеп әйтәм.

Зәмзәгөл. Ҡайҙан беләһегеҙ?

Мәхмүт. Һин шауҡымлы, енле. Һиңә артислыҡ ене ҡағылған. Төкөрәйек шул ҡылый Байтүрәгә.

Зәмзәгөл. Уға төкөрөргә ярамай, ағай, ул бит — ре-жис-сер!

Мәхмүт. Улайһа, Байтүрәгә төкөрмәй генә, мин һине сәнғәт институтына Зәһир Исмәғилевкә үҙем етәкләп илтәм.

Зәмзәгөл. Ой, Мәхмүт ағаҡайым! Минең бит инде талант ҡанатҡайҙарым шартлап һынды. Мин иртәгәнән үк тегенселеккә өйрәнә башларға хәл иттем...

Мәхмүт. Һынған ҡанат төҙәлер.

Зәмзәгөл. Ысынмы, ағай?

Мәхмүт. Төҙәлер. Ә һинән барыбер рәтле тегенсе сыҡмаясаҡ. Тегенсе ул артист түгел — художник!

Зәмзәгөл. Уф, Аллаҡайым. Режиссер, һин тегенсе бул, ти, тегенсе, һин артист бул, ти. Ҡайҙа ғына барып һуғылайым икән? Миңә ун һигеҙ йәш бит инде. Хатта ун туғыҙға сыҡтым!

Мәхмүт. Минең ҙур улыма хәҙер егерме дүрт инде. Геолог. Ситтә. Алтын эҙләй.

Зәмзәгөл. Табамы һуң?

Мәхмүт. Эҙләгәс, таба инде. Бына һүрәте.

Зәмзәгөл *(ала)*. Абау, сибәрлеге! Әбделхаҡ шикелле...

Мәхмүт. Үҙемә оҡшаған, бөҙрә сәсле.

Зәмзәгөл *(пырхылдап көлә)*. Әйтте тағы! Харап бөҙрә икән берәүҙәр...

Мәхмүт *(коро ғына)*. Мин йәш сағымды әйтәм.

Зәмзәгөл. Ә-ә, йәш сағығыҙҙы?.. Анау мәл Мисбахов ағай ҙа минән бөҙрә сәсле тегенсе таптырып йонсотто. Баҡһаң, ул һеҙҙең йәш сағығыҙҙы таптыра икән.

Мәхмүт *(ҡапыл тертләп)*. Ә-ә... Мисбахов? *(Сәғәткә ҡарай.)* Ваҡыт. Ахыры, бөгөнгә килмәҫ булды... Костюмын да әллә ҡайҙа элгәнмен. Таба алманым.

Зәмзәгөл. Ул башҡаса килмәйәсәк.

Мәхмүт. Ниңә? Ә костюм?

Зәмзәгөл. Костюмды кисә көндөҙ үк алып киттеләр.

Мәхмүт. Тегеп бөтмәҫ боронмо?

Зәмзәгөл. Шул көйө. Ҡапыл ғына алыҫҡа күсеп китәләр икән.

Мәхмүт. Кем килеп алды?

Зәмзәгөл. Бисәһе. Әллә ниндәй үтә яманһыу ине. Тоҡ-томалға илай яҙҙы.

Мәхмүт. Берәй нимә әйтмәнеме?

Зәмзәгөл. Әйтмәне. *(Өҫтәл тартмаһынан конверт ала.)* Бына алтмыш һум аҡса ҡалдырҙы. Эй, әйтте икән: ҡырҡ бише эше өсөн, ун бише сәйгәме, мәйгәме, әллә нимәгә тине инде шунда. Өҫтәмә материал өсөндөр, моғайын.

Мәхмүт ҡатып ҡала.

Мәгеҙ. Мәхмүт ағай, тим... Мәгеҙ!

Мәхмүт. Хәҙергә урынына кире һалып ҡуй, Зәмзәгөл. Бер байрамда беҙ ул аҡсаға бөткәнсе шампанский һатып алырбыҙ ҙа, бөтә «Тумырҙа» ательеһын дер һелкетеп, күмәкләп кәйеф-сафа ҡорорбоҙ. Донъя шаулатып бер типтерербеҙ!

Зәмзәгөл. Байрам тигән була. Үҙенең ике күҙе тулы һағыш... Байрамдарға әле оҙаҡ шул.

Мәхмүт. Эс бошоуға, йөрәк әрнеүгә түҙә алмаһаҡ, Зәмзәгөл, байрамды беҙ үҙебеҙ уйлап сығарырбыҙ, үҙебеҙ яһарбыҙ. Байрамһыҙ йәшәү ярамай. Ярамай, Зәмзәгөл!

Зәмзәгөл. Ҡалай һәйбәт буласаҡ. Уйнарбыҙ ҙамы?

Мәхмүт. Уйнарбыҙ ҙа!

Зәмзәгөл. Йырларбыҙ ҙамы?

Мәхмүт. Йырларбыҙ ҙа!

Зәмзәгөл. Бейербеҙ ҙәме?

Мәхмүт. Бейербеҙ ҙә!.. Шатлыҡҡа сыҙай алмай, бына шулай бейербеҙ. Бына шулай!

Музыка уйнай. Былар башта тыныс, һуңыраҡ дәртләнеп бейей башлай.

Зәмзәгөл. Бына шулай!

Мәхмүт. Бына шулай!

Зәмзәгөл. Бына шулай! Шулай!! Шулай!!!

Күҙ йәше аша икеһе лә көләләр. Бәлки, бейеүгә манекендар ҙа ҡушылып китер. Тәҙрәнән Баш менән Тауыш хужаһы күренә. Улар һис нәмә әйтә алмай, таш булып ҡатып торалар.

Ут һүнә.

1980

КИСКЕ ТАБЫН

ҠАТНАШАЛАР:

Артыҡов Әхмәтша Бадамшич. Алтмыштан өҫтә. Ил өйрәнеүсе.
Артыҡова Йәннәт (Жаннет). Уның ҡатыны. Врач. Бер ҡараһаң — 40-та, бер ҡараһаң — 50-лә
Алпамыша (Алпамышчик). Уларҙың улы. 23-тә
Зарзария (Зарка). Алпамыштың кәләше. Йөклө. 19-ҙа
Мотаһар. Алпамыштың дуҫы. 25-тәрҙә
Ҡәнзәфәр. Ауылдан килгән. Әхмәтшаның ҡорҙашы. Үҙ алдына уҡып, күпте белә. Урман ҡараусы. 65-тә
Ҡорбанбикә. Ҡәнзәфәрҙең ҡатыны. Алтмыш тирәһендә
Беренсе музыкант Шәрәй
Икенсе музыкант Мәрәй
Кәтмулла дворник. Иллегә етмәгән
Зарканың һыңары

ВАҠИҒА 1989 ЙЫЛДА БАРА

Артыҡовтар квартираһы. Уның ике бүлмәһе — зал һәм хужаның кабинеты күренә. Ике аралағы стена берсә юғалып тора, берсә урынына ҡайта. Әхмәтшаның кабинетында күҙгә салыныр нәмәләр шулар: келәм урынына стенаға ҙур иҫке септә тартылған. Септәгә уҡһыҙ йәйә, һапһыҙ айбалта, һаплы шөшлө, төпһөҙ иләк, иҙелгән еҙ ҡурай эленгән. Таҡта кәштәгә китек ағас табаҡтар, ватыҡ көршәктәр, йәнселгән ҡомғандар теҙелгән. Комод өҫтөндә эт ҙурлығы таш бесәй — копилка тора. Әхмәтша, башын ике усына һалып, өҫтәл артында ултыра. Бер аҙҙан дворник Кәтмулла инә. Ҡулында өс бөртөк сәскә.

Кәтмулла. Һүҙеңде бүлдереп, сәләм бирәйемме, Әхмәтша ғалим абзый?

Әхмәтша. Күреп тораһың. Һүҙем юҡ та.

Кәтмулла. Улайһа, уйыңды бүлдереп әйтәм: әссәләмәғәләйкүм!

Әхмәтша. Уйым да юҡ.

Кәтмулла. Шаяртаһың, Әхмәтша ғалим абзый, һинең ише ғаҡыл эйәһе лә уйланмаһаҫ, кем уйланһын бөгөнгөһө былай көндә? Мин — дворник Кәтмулламы, әллә анау һоро бесәйме баш ватһын? *(Комодҡа күрһәтә.)*

Әхмәтша. Аҡса йотоусы таш бесәй ул. Баш ватмай.

Кәтмулла. Баш ватмай, ә йота. Вәт, әй! *(Баш сайҡай.)*

Әхмәтша. Аллы-гөллө сәскәләр тотоп, ҡайҙалыр китеп барыуың, ахырыһы, Кәтмулла?

Кәтмулла. Китеүем түгел, килеүем. Үҙем һыуҙар һибеп үҫтергән өс түңәрәк түтәлдән иң сибәр, иң хуш еҫле өс сәскәне өҙөп килеүем.

Әхмәтша *(үҙ байрамын онотҡан)*. Сәбәбе ни?

Кәтмулла. Атаҡ, ғалим абзый! Гел фән уйлап, гел ил өйрәнеп, үҙ көнөңдө лә оноттоңмо әллә?

Әхмәтша. Ниндәй көн һуң әле бөгөн?

Кәтмулла. Лифтер Шәрғиә әйтә: Артыҡовтарҙың бөгөн көмөш туйы, ти, бар, ҡотлап сыҡ, яртылаш мари булһаң да, һин мосолман йәнле, ти, сауап булыр, ти.

Әхмәтша. Бәй... Шулай икән шул. Бына хәтер. Сауапҡа килгәндә, эш беҙҙән ҡалмаҫ. *(Үңәсен һыйпап ала.)*

Кәтмулла. Тәүҙә былай итәйек. *(Әхмәтшаның ҡаршыһына килеп баҫа.)* Беҙҙең туғыҙ ҡатлы йортобоҙҙоң һәм уның саң ҡунмаҫ дворының күрке булған атаҡлы ғалим, фән арыҫланы Артыҡов Әхмәтша абзый, һине тарихи юбилейың менән тантаналы рәүештә ҡотлап, күкрәгеңә ошо сәскәне ҡаҙайым. Йәннәт ҡошо ише талпынып осоп йөрөүсе Жаннет... *(Башын сайҡай.)* Юҡ, «апай» тип әйтергә телем бармай — үтә сибәр шул...

Әхмәтша. Ул өйҙә юҡ.

Кәтмулла. Өйҙә булмаһа ла, сибәр инде... Мә, мин киткәс, ошо сәскәне ул баш ҡуйып ятҡан аҡ мендәргә һал. Ә быныһы, шельма Алпамыша, һиңә тәғәйен. *(Таш бесәй һыртындағы ярыҡҡа илтеп ҡаҙай.)*

Әхмәтша. Ҡотлауың өсөн рәхмәт, Кәтмулла ҡустым. Хәҙер саҡ ҡына сабыр ит. *(Кухняға сыға.)*

Кәтмулла. Беҙҙә ни сабырлыҡ ул хаттин ашҡан. Кешегә лә биреп торорлоҡ. *(Септә ҡаршыһына килә.)* Анау саҡтан бирле спанаттары әллә өҫтәлмәгән дә инде. Спанат табыуҙары еңел түгелдер шул. Әле беҙ, кәрәк

саҡта, бер шешә араҡы таба алмай ҡыйналабыҙ. Теге юлы Әхмәтша ғалим абзый былай тигәйне. *(Уға оҡшатырға тырышып һөйләй.)* Бына һин, Кәтмулла ҡустым, уҙған быуаттың икенсе яртыһында һуғылған септә эргәһенә килеп баҫтың, бынау һапһыҙ айбалта менән уҡһыҙ йәйәгә ҡарап, дәһшәтле дошман яуҙарын ҡайтарған батыр атай-олатайҙарыбыҙҙы хәтерләп, маһай. Бынау шөшлөнө күреп, әүәл заманда сабата туҡып, дан тотҡан маһир ирҙәрҙе иҫкә ал...

Батмусҡа тулы булмаған шешә, ике рюмка, закуска ҡуйып, Әхмәтша сыға.

Әхмәтша. Оҡшаймы?

Кәтмулла. Икеһе лә оҡшай.

Әхмәтша. Нимәнең икеһе лә?

Кәтмулла. Спанат та, был да. *(Септәгә лә, батмусҡа ла ымлай.)*

Әхмәтша батмусты комодҡа ҡуя.

Әхмәтша. Ошонда ярармы?

Кәтмулла. Бик ярар. Йүнле кешеләр — унда төрлө артистар, сит ил ҡунаҡтары — табындарҙа аяҡ үрә генә ашап эсәләр. Телевизорҙа шулай күрһәттеләр. Дөрөҫ эшләйҙәр, оҙон-оҙаҡ йәйелеп ултырырға нису.

Әхмәтша *(рюмкаларға коя)*. Афарин, ҡустым, беренсе булып һин тәбрикләнең. Әйҙә, етеш. *(Үҙе рюмканы ала ла кире ҡуя.)* Етеш, етеш.

Кәтмулла. Юҡ инде, ғалим абзый, был йәһәттән мин юлды яңғыҙ башлай алмайым. Унан һуң китеүен китә ул... Көмөштәй сылтырап йәшәгеҙ! *(Эсәләр.)*

Әхмәтша. Ризығына үрел.

Кәтмулла. Дворник ҡына булһам да, мин үҙем ифрат хис кешеһемен. *(Ҡапмай, Әхмәтшаның түшендәге сәскәне алып еҫкәй ҙә кире ҡуя.)* Бына шулай итәм дә хушланам.

Әхмәтша. Булғас, йоп булһын инде. *(Ҡоя.)* Әммә мине ҡыҫтама.

Кәтмулла. Ҡыҫтарға ни, һин ҡунаҡ түгел дә. Һин үҙең генә ҡыҫтай алаһың. Хаҡың бар. Алтындай сыңлап йәшәгеҙ! *(Эсә. Әлеге сәскәне алып, еҫкәп ҡуя.)*

Әхмәтша *(башына китә)*. Бергә-бергә...

Оҙаҡ пауза.

Кәтмулла. Бына һин тынып ҡалдың. Ә бит аҡыл эйәһе менән һөйләшмәй шым ғына йәнәшә баҫып тороу ҙа бер мәртәбә ул. Мин рәхәттәр сигеп торам. Эсемдә һөйөнөс. Эсемә байрам! Ә һинең эсеңдә бөгөнгөһө бынау көндө байрам бармы?

Әхмәтша. Байрам көндө булмай булмаҫ инде. Барҙыр.

Кәтмулла. Илереп ҡыуаныу кәрәк бындай саҡта. Шатлыҡтан эсең, сиркәү ҡыңғырауы кеүек, геүләп торһон.

Әхмәтша. Һин шулай ҙа ул, Кәтмулла. Нисә осрама, алсаҡһың, шатһың, ауыҙ эсеңдән йырлап йөрөйһөң.

Кәтмулла. Шат булмай, шатмын шул. Бөтә әҙәм донъяны сүпләп йөрөгәндә, мин уны таҙартырға тырышам. Ҡой әле, ғалим абзый, яртыны ғына. Бынының шалун Алпамыша һаулығына. *(Таш бесәйгә ҡыҫтырылған сәскәне үрелеп еҫкәй, тынып тора.)* И, абзый, һин мине алсаҡ тиһең дә, Ғабдулла Туҡай теге шиғырын бит минең турала яҙған: «Туҙанға батып бөттөм үҙем, әммә ләкин донъяны таҙарта алманым...» Таҙартып та булыр ине уны, Туҡай абзый, шаҡшылар күп, шулар хут бирмәй.

Әхмәтша. Эсеп тә бөтөрмәгәнһең.

Кәтмулла. Етте. Булды. Ғәйепләп ҡалма. Амин тоторға өйрәнеп өлгөрмәнем. Былай ғына хуш. Киттем. Байрамығыҙ гөрләп торһон. *(Шым ғына йырлай.)*

Алтын микән, көмөш микән
Был ыҙбаның түпһаһы.
Был ыҙбаның түпһаһынан
Бәхет инеп туҡтаһын.

(Ишеккә еткәс, кире борола.) Онота яҙғанмын. Бая почтальон телеграмма ҡалдырып киткәйне.

Әхмәтша. Ҡайҙа? Ниндәй телеграмма?

Кәтмулла. Уҡыманым. Моғайын, ҡотлауҙыр. Бөгөнгөһө ошондай көндө сәскәле ҡағыҙға һуҡһа ни булған. Һаран... Бына ул.

Әхмәтша *(ала, борсола)*. Бынының өсөн дә рәхмәт.

Кәтмулла. Сауаплы ла булдым. *(Ирендәрен ялай.)* Рәхмәт тә алдым.

Алтын микән, көмөш микән...

Китә.

Әхмәтша, күҙлеген оҙаҡ эҙләп, уны түш кеҫәһенән таба. Телеграмманы уҡый ҙа әйләндереп-әйләндереп ҡарай. Тағы уҡый.

Әхмәтша. Адресы беҙҙеке. «Артыковым» тигәне лә беҙгә. Ә быныһын нисек аңларға? «Горячо не поздравляю, совсем наоборот». Имзаһы ла юҡ. Телеграфта бутағандар, ахырыһы. «Не поздравляю горячо». «Поздравляю не горячо». Нисек тә килеп сыҡмай. Юҡ, бында бер-бер сер, тәрән мәғәнә ята булыр. Әллә берәүһе, этләшеп, дуҫтарса шаяртамы? Мотлаҡ шулайҙыр. Һуңыраҡ аңлатмаһы килер әле. Төшөнөрбөҙ. Әммә йыйыбыраҡ ҡуйырға кәрәк булыр. Күрһә, Йәннәттең кәйефе ҡырылыуы бар... Әлбиттә, бер шаяндың мәрәкәләүе был. *(Әйләндереп ҡарай.)* Өфөнән һуғылған. «Горячо не поздравляю...» Ыһым. Тапкан уйын. *(Борсолоп йөрөй. Батмустағы шешәнән ҡойоп эсә. Батмусты сығарып ҡуя, кире инә.)* Шулай ҙа сәйер. Күңелгә шом һалды бит әле был нәмә... *(Ҡағыҙҙы таш бесәй аҫтына тыға.)*

Жаннет инә. Ул шат.

Жаннет. Бына — беҙ! Аҙ ғына һуңланым, Ахматшачик. Кисер. *(Иренең пеләшенән үбә.)* Врач бит ул, беләһең, ауырыуҙарҙың ҡоло. Закир Шәрифулловичтың бисәһе ҡапыл сирләп киткән. Беренсе тапҡыр өйҙәренә саҡыртты. Үҙе шундай ҙур, авторитетлы түрә, йорттарында шаром покати.

Әхмәтша. Урлашмайҙыр.

Жаннет. Причем бында урлашыу? Йүн итә белмәйҙәр.

Әхмәтша. Көнө-төнө хеҙмәттә...

Жаннет. Причем бында хеҙмәт?

Әхмәтша. Хәле нисек һуң?

Жаннет. Кемдең?

Әхмәтша. Ҡатынының.

Жаннет. Өйәнәге ебәрҙе. *(Лап итеп диванға ултыра.)* Кис бөгөн шундай тын, аяҙ. Беҙҙең көн. Ерҙә атлап түгел, күбәләк шикелле, осоп ҡына йөрөр кеүекһең!

Әхмәтша *(йәнләнеп)*. 1964 йылдың 25 август төнө лә шундай йылы, яҡты ине. Тәҙрә аша төшкән ай икебеҙҙең арабыҙға никах түшәгенә килеп ятты. Мин оялып та, шомланып та ҡалдым. Хатта...

Жаннет *(бармағын ирененә ҡуя)*. Тс-сс... Ҡысҡырып әйтмә. Ул — беҙҙең серебеҙ.

Әхмәтша *(батырланып)*. Нимәһе сер булһын инде хәҙер. Һин торғаны менән һырты эйәр күрмәгән байтал инең, ә мин һине ҡороҡланым, йәғни ҡосағыма алдым.

Жаннет. Шунан нимә тинең?

Әхмәтша. «Жаннетым – Йәннәтем», тинем. Уҙған егерме биш йылдың йәннәт булған көндәрен генә хәтергә алайыҡ бөгөн. Тап төшкәндәрен «булманы» тип иҫәпләйек. Мин шулай теләйем.

Жаннет. Мин дә. *(Ҡапыл иҫенә төшөп.)* Йәмилә апайым табынды хәстәрләнеме?

Әхмәтша. Бөтәһе лә әҙер. Ҡулында ут уйната. Ул бит һинең апайың. Үҙе китеп тә барҙы. Ҡыҙының бәпесен ҡарарға йүгерҙе.

Жаннет. Уның шул булыр инде... Алпамыша! Бәпесем! Һин өйҙәме?

Әхмәтша. Нисә әйткәнем бар һиңә, Йәннәт, егерме өс йәшлек егет нишләп бәпес булһын, ти?

Жаннет. Бәпес булғас, бәпес инде.

Әхмәтша. Ярар, бөгөн бөтәһе лә һинеңсә ҡылынһын. Ихлас әйтәм.

Жаннет. Алпамыша! Ҡайҙа боҫтоң?

Әхмәтша. Әле ул ҡайтманы.

Жаннет. Нисек «ҡайтманы»? Бынау көндөмө? Башҡа саҡта китеп-китеп олағыуы бер хәл. Бөгөн оят булыр. Белә бит!

Әхмәтша. Ҡайтыр. Ерле юҡҡа борсолма.

Жаннет. Борсолам шул. Бына-быны ҡунаҡтар килер. Берҙән-бер улыбыҙ өйҙә юҡ. Неприлично!

Әхмәтша. Борсолорға сәбәп юҡ. Бала түгел, аҙашмаҫ.

Жаннет. Бала сағында аҙашыуынан ҡурҡмай инем, хәҙер ҡурҡам. *(Сәғәт һуға.)* Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете. Ете. Ой! Килә лә башларҙар инде. Табынға күҙ һалайым. *(Сыға.)*

Әхмәтша *(таш бесәй аҫтынан теге телеграмманы ала)*. «Горячо не поздравляю. Все наоборот». «Наоборот»ы ниңә кәрәк булды икән? Былай ҙа аңлашыла бит инде. Һаташҡан әҙәмдер был. Боронғо яҙыуҙарҙы танып аңлай алам. Ошо пустяктың мәғәнәһенә төшөнөп булмай.

Телефон шылтырай. Жаннет йүгереп сыға, Әхмәтша алып өлгөрә.

Жаннет. Кем?

Әхмәтша. Эйе, мин, Әхмәтша Бадамшич. Таныманың. Нишләп тауышым тоноҡ булһын, ти. Тоноҡ түгел, ифрат көр, дәртле. Әсем тулы байрам шатлығы геүләп тора... Геүләп, тим... Сиркәү ҡаҡкан шикелле. Табын әҙер. Һеҙҙе көтәбеҙ. Нимә, нимә? Ҡасан? Улай икән. Ярар, ярар. Рәхмәт. Бик күркәм, ҡунаҡлы булыу, тим. Табындар түңәрәк булһын. Хуш! Рәхмәт! Рәхмәт! Тапшырырмын. Сыңлатырбыҙ. Йәнә бер тапҡыр рәхмәт!

Жаннет. Кем ул?

Әхмәтша. Шәриф Шәймарданович.

Жаннет. Теүәлдәрҙән-теүәл Түләкәевтәр нишләп һуңлайҙар?

Әхмәтша. Һуңламайҙар. Бөтөнләй килә алмайҙар икән.

Жаннет. Нисек «килә алмайҙар»?

Әхмәтша. Үҙҙәренә Ташкент яғынан бала-сағалы ҡунаҡтар килеп төшкән икән.

Жаннет. Причем бында бала-сағалы ҡунаҡтар? Саҡырылған икән, килергә тейеш. Ә һин, эйелеп-бөгөлөп, ни өсөн рәхмәттәр уҡының?

Әхмәтша. Татлы һүҙҙәр теҙә-теҙә көмөш туйыбыҙ менән ҡотланы. Һинең сибәрлегеңде, минең аҡылымды маҡтаны. Алтын туйыбыҙға килергә вәғәҙә бирҙе.

Жаннет. Хәжәттәре бар ине, ти, алтын туйҙа! Шуға тиклем үк «дефицит» тигән нәмә һаҡланыр тиме икән? Ғәрләнеп үләм, валлаһи! Ғәрләнеүен ғәрләнәм дә... Әлеге заманда уларһыҙ ҙа йәшәп булмай. Шылтырат үҙенә: бала-сағалы ҡунағын тейәһен дә килһен.

Әхмәтша. Шылтыратмайым. Бик кәрәккәс, үҙең шылтырат.

Жаннет *(трубканы ала, кире ҡуя)*. Бер ниндәй ҙә ҡунағы юҡ ул муттың. Өңдәренән сығырға ҡурҡып ултыралар, көрәп йыйған малдарын ҡарауыллап.

Әхмәтша. Килмәгән ҡунаҡты орошма, Йәннәт. Кешегә көсләп тағылырға ярамай.

Жаннет. Ярамауын ярамай ҙа. Ярамайға ҡарап йәшәһәң, ямаулыҡ та таба алмаҫһың.

Әхмәтша. Ғүмергә бер килгән ошо көндә донья мәшәҡәтен ҡуйып торайыҡ әле, Йәннәт. Бөгөн һинең менән минең көн.

Жаннет. Дөрөҫ әйтәһең, арыҫланым. Сыҡыныш китһен ығы-зығыһы. Мәңге йәшәмәйбеҙ! Һөймәгәнгә һөйкәлмәйбеҙ. Һөйгәндәре килһә, шул еткән.

Сәғәт һуға.

Әхмәтша. Әллә алғараҡ китте инде был сәғәт.

Телефон шылтырай. Жаннет ала.

Жаннет. Һаумы, аҡҡошом Сәриә! Һәйбәт, байрамса. Һеҙҙе көтөп ултырабыҙ... Аңламайым. Һис ни аңламайым! Ужасно! Ҡотлауыңды ҡабул итмәйем. Үҙең килеп әйт. Юҡ! Юҡ! Шулаймы ни?! Ҡасан? Уҙған төндө?! Все это ужасно! Аҡыртып талайҙар! Уф!

Әхмәтша. Әллә бәлә-ҡаза бар инде?

Жаннет. Бар шул. Мәғрифәләр менән икеһенең дә дачаларына инеп, ҡыйратып сыҡҡандар, шунда китәләр.

Әхмәтша. Әллә юҡҡа мәшәҡәтләндек инде, былай булғас...

Жаннет *(дәртләнеп)*. Юҡҡа түгел! Һин бар, мин бар. Алпамыша ҡайтыр, Ғаяз менән Гөлдөри килер. Бишәүләп теттерәбеҙ. Тауыштан яҙғансы йырлайбыҙ. Гөлдөриҙән сиған бейеүен бейетербеҙ. Һин ҡумыҙ уйнарһың. Эстән ҡалтыраһаҡ та, тыштан ялтырап алайыҡ әле, Әхмәтшам минең. Аҡ батшам!

Әхмәтша. Үтә ололаның түгелме?

Жаннет. Батшам булғас.

Ишектә звонок.

Ана Ғаяз Баязовичтар килеп етте. Наконец-то! Ишек асыҡ, рәхим итегеҙ!

Йүгереп барып ишекте киң асып ебәрә. Ҡәнзәфәр, уның артынан Ҡорбанбикә килеп инә. Икеһенең дә күкрәгендә ордендар һәм миҙалдар. Ҡәнзәфәр арҡаһына биштәрләп нимәлер йөкмәп алған, ҡултыҡ аҫтында бер нисә бәйләм ҡайын миндеге. Ҡорбанбикәнең ҡулында ҙур ғына сумка. Хужалар тәүҙә ныҡ аптырап ҡалалар. Дүртеһе лә һүҙһеҙ тора.

Жаннет. Боже мой! Өнөммө был, төшөммө?

Ҡәнзәфәр. Әллә ваҡытһыҙ сағығыҙға тура килдек инде?

Жаннет. Кереһенсә! Бик тә ваҡытлы, бик тә кәрәкле саҡта тура килдегеҙ, Ҡәнзәфәр ағай, Ҡорбанбикә еңгә!

Әхмәтша. Былай ғына түгел, маҡтап йөрөйһөгөҙ.

Жаннет. Бөгөн бит...

Ҡорбанбикә. Ҡәнзәфәр шулайыраҡ самаланы ла инде. Уның ҡалын дәфтәренә бөтәһе лә теркәлгән. 1989 йыл 25 август — көмөш туй, тиелгән.

Әхмәтша. Нишләп былай буталышып киттек әле? Әйҙәгеҙ, түрҙән уҙығыҙ.

Ҡәнзәфәр. Түрҙән уҙғансы, күрешәйек әле. *(Күрешәләр.)* Именлекме, һаулыҡмы? Алпамыша башлы-күҙле булманымы әле?

Әхмәтша. Юҡ шул. Һаман буйҙаҡ йөрөй. Тиҙҙән ҡайтыр.

Ҡорбанбикә. Шәп кенә йәшәп ятыумы? Ҡарар күҙгә ал да гөлһөгөҙ. Күҙ теймәһен!

Хужалар ихлас ҡыуаналар. Ҡунаҡтар, йөктәрен ҡуйып, ишек төбөндә аяҡтарын сисәләр.

Жаннет. Никахтары оло тип, «ағай», «еңгә» тиергә өйрәтте лә ошо Әхмәтша. Баҡһаң, улар йылдан-йыл йәшәрә генә баралар. Валлаһи, еңгә, һинең үҙеңә күҙ теймәһен!

Ҡорбанбикә. Әтү.

Ҡәнзәфәр. Быныһы һеҙгә беҙҙең болондоң күстәнәсе. *(Тоғонан бер тәпән бал сығара.)* Былары, Әхмәтша ҡорҙаш, «Ауылыңды онотма, онотма!» тип, һине сыбыҡлар өсөн ҡайын миндектәре. Һин сабынырға әүәҫһең бит!

Әхмәтша. Әүәҫтең дә әүәҫе.

Ҡорбанбикә *(сумкаһынан берәм-берәм нәмәләр сығара)*. Ошонда үҙебеҙҙең һыйыр ҡаймағы, өс тумалаҡ ҡорот, еләк вареньеһы. Былары, Йәннәт, һиңә мәтрүшкә, Алпамышҡа дебет шарф, булыр кәләшенә йомшаҡ ҡына ойоҡбаш.

Жаннет. Һеҙ үҙегеҙ затлы бүләк, үҙегеҙ татлы күстәнәс.

Әхмәтша. Ултырышайыҡ инде. Буталып тик торабыҙ.

Ултыралар.

Жаннет. Мин ваҡ-төйәкте ҡарайым әле. *(Сыға.)*

Ҡәнзәфәр. Һаман да шул ил өйрәнеү өҫтөндәме? *(Сентәгә күрһәтә.)*

Әхмәтша. Эйе, шул шөғөлдәмен. Үҙең ниҙәр ҡыйратаһың?

Ҡәнзәфәр. Ҡыйратмайым. Мин урман ҡарауҙы ташланым. Ағастар иңрәүе, ҡоштар илауы, шишмәләр зары, балыҡтар һыҡтауы тураһында «Ҡыҙыл китап» яҙам.

Әхмәтша. Бик мәслихәт эш.

Ҡорбанбикә. Ултыра инде шунда күҙен талдырып, шәм яндырып. *(Кеҫәһенән сығарып, башлаған ойоғон бәйләргә керешә. Ҡәнзәфәргә йомғағын тоттора.)*

Әхмәтша. Ултырыу һәйбәт. Ултырған тауыҡ ҡына себеш сығара. Ауылда ниҙәр бар? Беҙҙекеләр ни хәлдә?

Ҡәнзәфәр. Апайың иҫән-һау. Ағайың да шәп.

Ҡорбанбикә. Теге гармунсы ҡупшы Килмәмәтте хәтерләйһеңме?

Әхмәтша. Хәтерләмәй ни. Өсәү бергә үҫтек бит. *(Ҡәнзәфәргә ымлай.)*

Ҡорбанбикә. Ана шул Килмәмәтте уҙған аҙнала Силәбенән ҡайтарып, таш зыяраттың түренә һалдылар. Әжәлен һиҙгәс, үҙ ҡулы менән ауыл Советына ғариза яҙып ебәргәйне. Ғаризаһын көйләп яҙған. Башында былай тигән: «Аҡташ ауылының элекке гражданины, киләсәктә мәрхүм буласаҡ Аҡмәмәтов Килмәмәттән ғариза...» Исполком ултырышында ҡысҡырып уҡынылар. Көлдөк тә, иланыҡ та. Былай тигән *(көйләп һөйләй)*:

Ете ятта күп йөрөнөм,
Инде илемә ҡайтайым!
Тупраҡҡайын түшәк итеп,
Рәхәтләнеп ятайым.
Таш зыяраттың түрҙәренә
Ҡәберемде ҡаҙығыҙ.
Ап-аҡ ташҡа ҡара менән
«Килмәмәт» тип яҙығыҙ.

Мәрхүмдең үтенесен кире ҡаҡманыҡ. Иң түрҙән урын бирҙек.

Ҡәнзәфәр. Тупрағы Килмәмәттең түшәк булһын. Әммә күптәрҙең тыуған төйәге әжәл алдынан ғына иҫенә төшә.

Әхмәтша. Фәһемле һүҙ әйттең, ҡорҙаш. Беҙгә лә бер ишара.

Ҡәнзәфәр. Дөрөҫ. Аңы барға ым да етә.

Сәғәт һуға.

Әхмәтша. Нык алға китте булыр был сәғәт. *(Бесәй аҫтындағы телеграмманы ала. Үҙ алдына.)* Аңлатмаһы бының һаман килмәй.

Жаннет сыға. Яңы күлдәк кейгән. Борсоулы. Белдермәҫкә тырыша. Әйләнә-тулғана.

Жаннет. Килешәме миңә был күлдәгем, еңгә? Туйға атап тектерҙем.

Ҡорбанбикә. Һылаған да ҡуйған, зерә килешә. Йәш, сибәр, уйынсыҡ ҡатынға кейем оторо килешә ул.

Жаннет. Һе-һе! Йәш! Бынауы дәһшәтле шаһ Әхмәтшаһ ҡул аҫтында егерме биш йыл йәшә лә, йәш, сибәр булырһың. Харап уҫал ул.

Ҡорбанбикә. Бушты һөйләмә. Ирең ипле, шуға төҫ ташламайһың.

Жаннет. Дәһшәтле! Дәһшәтле!

Ҡорбанбикә. Дәһшәтле ирҙең ниндәй икәнен белмәйһең әле. *(Ҡәнзәфәргә ымлай.)*

Ҡәнзәфәр *(яһалма асыулы)*. Һәр кемгә тәтемәй ул. Һин белгәс тә еткән. *(Иңбашына ҡулын һала.)*

Әхмәтша. Һүҙ менән һыйлашыу күпкәрәккә китте түгелме?

Жаннет. Хәҙер ултырышабыҙ. Саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙҙың ҡайһы берҙәре, үҙ мәшәҡәттәренә тарып, килмәҫ булды. Иң ҡәҙерле, иң танһыҡ бер пар ҡунағыбыҙ бына-бына килеп етер ҙә табынға ултырырбыҙ.

Ҡорбанбикә. Иң танһыҡ тигән ҡунағығыҙ бик ҙур кешеләр инде?

Әхмәтша. Ҙур ҙа түгел, бәләкәй ҙә түгел. Уның урыны айырым...

Жаннет. Һуңлағандары өсөн Гөлдөри менән икеһенең дә ҡолаҡтарын уңға ла, һулға ла бормаһаммы! Бына шулай, бына шулай. *(Ике ҡулы менән дә ҡолаҡ бороп күрһәтә. Ишектә звонок.)* Хәҙер эләгә һеҙгә, тәртип боҙоусылар!

Ишек асылғас, 23—24 йәштәр тирәһендәге ҡатын килеп инә. Бер ҡулында сәскә букеты, икенсеһендә төргәк. Ҡыҫҡа күн юбка, ҡыҫҡа ҡуңыслы итек кейгән, сәсе тұҙғаҡ. Һөйләгәндә ашыҡмаһа ла, тыныш яһамай һөйләй. Шуға күрә уның һүҙен бүлдереп булмай.

Ҡатын. Уф! Артыҡовтар квартираһы ошомо? Эҙләй-эҙләй йәнем сыға яҙҙы. Кит валлаһи! Өй номерын әйтте,

квартираһын хәтерләмәй. «Телефон кенәгәһенән ҡара!» — ти. Унда йорт номеры ғына күрһәтелгән, квартира номеры яҙылмаған. Справочник та сығара белмәйҙәр. Кит валлаһи! Кемдән һорама, баш ҡына сайҡай. Телдәрен йәлләйҙәр. Беҙҙең йортта ла шулай: эт этте таный, күрше күршеһен танымай. Бергә килһәләр, эттәр, бер-береһен иркәләп, айырылыша алмай, кешеләр сәләм дә бирмәй уҙа. Кит валлаһи! Артыҡовтар квартираһымы был? Ниңә яуап бирмәйһегеҙ?

Жаннет. Эйе, ошо.

Ҡатын. Улайһа, һаумыһығыҙ! Мине һеҙгә, перестройкаға ҡарамаҫтан, үҙенең ҡара машинаһына ултыртып, Ғаяз Баязович ебәрҙе. Мин — уның яңы секретары. Буш ҡул менән килмәнем. Көмөш туйығыҙҙы ҡотлап, бына бер ҡосаҡ сәскә ебәрҙе. Сәскәһе һеҙгә, инәй... апай. *(Ҡорбанбикәгә илтеп тоттора.)* Егерме биш йыл кейәүҙә йәшәп, ошондай матур торғанһығыҙ. Иҫ киткес! Браво! *(Ҡорбанбикәнең арҡаһынан ҡағып ала.)* Ирҙә йәшәп, мин өс йыл эсендә эштән сығып бөттөм. Кит валлаһи! *(Ҡәнзәфәр ҡаршыһына килә. Төргәген сисә. Унан ҡосаҡлашып торған ике айыу килеп сыға.)* Быныһы икегеҙгә лә. Тапшырғансы бынау хатты ла уҡырға ҡушты. *(Сумкаһынан эҙләй.)* Ҡайҙа ғына тыҡтым әле? Вот балда! Мин үҙемде шулай әрләйем. Бына икән. Тыңлағыҙ! *(Тантаналы итеп уҡый.)* «Беҙҙең пар күгәрсенкәйҙәребеҙ Әхмәтша Бадамшич һәм һөйкөмлө Жаннет ханым! Һөйкөмлө Жаннет ханым һәм Әхмәтша Бадамшич! Ғүмер эсендә бер генә килә торған был тарихи минутта һеҙҙең көмөш туйығыҙҙа хрусталь бокалдар сыңлап, тантаналы телмәрҙәр яңғырап торалыр. Табынығыҙ беҙҙән башҡа ла тығыҙҙыр, түңәрәктер, мөбәрәктер, нурлылыр, йырлылыр, тип ышанабыҙ. Татыуҙарҙан-татыу күгәрсендәребеҙ! Ошо кинәйәле символик бүләк итеп һеҙгә сәскәләр бәйләме һәм пар айыу ебәрәбеҙ. Аталы-инәле ошо айыуҙар ише, ҡосаҡлашып ҡына, бал ялай-ялай, сәскәләр араһында йәшәгеҙ. Баҫҡан эҙҙәрегеҙҙе үбеп, зарығып ҡалыусылар Гөлдөри менән Ғаяз тип белерһегеҙ». Бөттө. Ә бында өҫтәп яҙғаны ла бар икән. «Килә алмауыбыҙҙың сәбәбен аҙаҡ аңлатырбыҙ». *(Айыуҙарҙы Ҡәнзәфәргә тоттора.)* Мә, олатай... ағай, быныһын һин тот. Бирешмә! *(Арҡаһынан ҡаға.)* Нығ бул! Ир минең үҙемә өс йылға ла сыҙаманы.

Жаннет *(борсолоп)*. Нимә булды икән? Эшендә бәлә-ҡаза юҡтыр бит? Әйтмәнеме?

Ҡатын. Әйтмәне. Әйтмәһә лә, беләм. Ваҡ-төйәк шунда. Мелочь!

Жаннет. Сер булмаһа, әйтеп тынысландыр беҙҙе.

Ҡатын. Нимәһе сер булһын уның? Сер түгел. Кемдәндер көнләшеп бисәһе тилереп йөрөй, ти. Псих! Ну дает! Экологическая катастрофа өҫкә ябырылып килә, экономика аҫҡа тәгәрәй, перестройка буксует, тапҡан борсолор нәмә. Мещанка! Кит валлаһи!

Жаннет. Аңлашылды. Тынысландырҙығыҙ. Хушығыҙ.

Ҡатын. Хушығыҙ. Гуд бай! Чау!

Ҡорбанбикә. Бына бер ғибрәт. «Һау» тип әйтә белмәй. «Чау» ти.

Ауыр тынлыҡ. Ҡәнзәфәр, ишек төбөнә барып, ҙур ағас тәпән күтәреп инә.

Ҡәнзәфәр. Килмәй ҡалған ҡәҙерле ҡунағығыҙ бал ялай-ялай йәшәргә ҡушҡанды белмәҫ әүәл үк беҙ Ҡорбанбикә менән икәү һеҙгә ошо күстәнәстәрҙе килтерҙек. Тормош үттәрҙе ҡоҫторған саҡтарҙа ла ауыҙҙарҙа бал тәме онотолмаһын, Йәннәт... Жаннет, Әхмәтша ҡорҙаш. Хикмәт был донъяла бал ялап йәшәүҙә түгел, бал тәмен һаҡлауҙа. Көмөш түй уҙғарырға ниәтләп, дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. Табын әҙер, буғай. Килен! Кейәү! Түй мәжлесенә рәхим итегеҙ! Алда төн бар! Таң бар!

Ут һүнә.

Жаннет *(ҡараңғыла)*. Ужас!

Зал менән кабинет араһында стена юҡ. Һый тулы өҫтәл артында әлеге дүртәү ултыра. Әхмәтша менән Ҡәнзәфәр байтаҡ ҡыҙмаса. Ҡатындарҙа һиҙелмәй.

Ҡәнзәфәр. Баҫып һөйләйемме, әллә ултырып ҡынамы?

Ҡорбанбикә. Аҡыллы һүҙең булһа, ултырып та ярар. Ишетербеҙ.

Ҡәнзәфәр. Юҡ. Баҫып әйтәм әле. *(Баҫа.)* Мин быйыл бик фәһемле бер китап уҡыным. Әлеге китапта былай тип яҙылған: ҡәҙимге Персияла — хәҙер ул Иран тип атала — шул Персияла илдең аҡһаҡалдары, йыйылы-

шып, бер үк ҡарарҙы ике тапҡыр ҡабул иткәндәр. Тәү тапҡыр ап-айыҡ көйө, икенсе тапҡыр ныҡ ҡыҙмаса баштан. Ике юлыһы бер самаға тура килһә, мөһөр һуғып, ҡарарҙы раҫлағандар. Туйығыҙҙы бая айыҡ баштан ҡотлағайным, хәҙер төшөргән көйө ҡотлап раҫлайым. Байрам яһау — ҙур һөнәр ул! Афарин! Сит йолаға эйәреп, «әсе» тип ҡысҡырмайым. Ҡана, икегеҙҙе лә үҙем әп итәйем. *(Икеһен дә үбә.)* Һөймәгәнгә һөйкәлмәйек, яттарға ялынмайыҡ, үҙебеҙ айырылмайыҡ. Бәй, йыр килеп сыҡты ла баһа.

Ҡорбанбикә. Әллә быныҡ, Персия аҡһаҡалы һымаҡ, башына китте инде.

Ҡәнзәфәр. Эскән нәмә башҡа китмәй, ҡайҙа китһен. Ана, Әхмәтша ла, башын баҫып, бөтөнләй шымып ҡалған.

Әхмәтша. Мин тәрән уйҙарға баттым.

Ҡәнзәфәр. Эскәс, һин үҙеңде фартауай тот. Ниндәй уй булһын ти бынауы көндө?

Әхмәтша. Ниндәй икәнен үҙем дә белмәйем, ҡорҙаш. Әммә баттым...

Жаннет. Һүҙеңдең осо булманы бит, Ҡәнзәфәр ағай. *(Яһалма шуҡлыҡ менән бокалын күтәрә.)* Тағы кемгә оҙон ғүмер, бәхет-шатлыҡ теләйбеҙ, бокалдарҙы сыңлатып?!

Ҡәнзәфәр. Ә-ә... Төшөндөм. Һеҙҙең икегеҙ шәрәфенә бер эстек, унан һәр берегеҙ өсөн айырым-айырым күтәрҙек, унан Ҡорбанбикә менән минең өсөн түңкәрҙек. Хәҙерме? Хәҙер һеҙҙең берҙән-бер улығыҙ, вариҫығыҙ, таянысығыҙ Алпамыша һаулығына башта күтәрәйек, унан төшөрөп ҡуяйыҡ.

Бокалдарҙы күтәрәләр. Эсергә өлгөрмәйҙәр. Ишек тышында шаушыу, гитара тауышы, тимергә тимер һуҡҡан сыңдар, сыйылдауҙар ишетелә. Ишек асыла. Уйындарын туҡтатмай Алпамыша, Зарзария (Зарка), Мотаһар, беренсе музыкант (уның муйынында төрлө миҙал һәм ордендарҙан теҙелгән муйынса), икенсе музыкант, Зарканың һыңары килеп инә. Кабинет яғында туҡталып, әҙәпле генә ҡыланып, моңло ғына йыр йырлайҙар. Тәүге сәхнәлә, ғөмүмән, сама һаҡлайҙар.

Һин — йылға. Мин — һинең
Ҡамышың, ҡамышың.
Миндә тик бер хыял:
Ҡауышыу, ҡауышыу...

Төн китһен. Таң атһын,
Һандуғас һайраһын,
Йырҙарҙың матурын
Тик һиңә һайлаһын.
Һандуғас һайраһын,
Мин — һинең ҡамышың,
Ҡамыштар шаулаһын:
Ҡауышыу, ҡауышыу...
Һандуғас һайраһын,
Таратһын һағышын,
Һин — минең ҡамышым,
Һағышым, һағышым...
Ҡамышым, һағышым...
Һағышым, ҡамышым...

Йыр туҡтай. Музыканттар баш эйә. Өҫтәл артындағылар, бокалдарын тотоп, ҡатып ҡалалар. Нишләптер бөтәһе лә аяҡ үрә баҫҡан. Тәү башлап Жаннет аңына килә.

Жаннет. Нимә, быны музыкаль сәләм, ҡайнар ҡотлау тип аңлайыҡмы, Алпамышчик? Ошо бокалдарҙы һинең өсөн күтәреп тора инек. Бына, күрәһеңме?

Алпамыша *(тыныс)*. Музыкаль ҡотлау түгел, музыкаль протест. Ҡулығыҙҙы төшөрөгөҙ. Ултырығыҙ.

Жаннет. Ҡуй, Алпамышчик, ошондай шаярыу була тиме?

Алпамыша. Шаярмайым. Уйын заманы уҙҙы. Хәҙер ваҡыт һуң инде, әсәй кеше.

Жаннет *(урынынан торма҅ксы итә, тора алмай)*. Ниндәй кошмар был?

Алпамыша *(тыныс)*. Кошмары әле алда. Көтөп тор.

Жаннет. Улым! Ошондай көндө?! Кешенең ысынға алыуы бар.

Алпамыша. Ысынды ялғанға, ялғанды ысынға күп сығарҙыҡ. Ысынды ысынға сығарырға ваҡыт. Бөгөн көнө шул.

Әхмәтша *(өҫтәл һуға)*. Әсәйең менән ҡалай алама һөйләшәһең, йүнһеҙ малай! Хәҙер үк туҡтат!

Мотаһар. Шулай шул. Атай-әсәй менән тупаҫ һөйләшергә ярамай, Алпаш.

Алпамыша. Һин ҡыҫылма, Мотаһар! Ә һин, атай кеше, шаһ Әхмәтшаһ, ярһыма. Ғаҡыл эйәһенә улай ҡы-

ланыу килешмәй. Мин көн буйы уйлағандан һуң, шундай решениеға килдем...

Әхмәтша. Ҡалған тағы һиңә уй... решение...

Алпамыша *(иҫ киткес тыныс)*. Мин ошондай решениеға килдем, атай кеше, әсәй кеше: һеҙ теге, беренсе туйығыҙҙы аҡлай алманығыҙ. Шуға күрә көмөш туйығыҙ отменяется. Уны үткәреү хата, хатта әҙәпһеҙлек булыр ине. Хәҙер әҙәп тураһында вопрос ҡаты ҡуйыла. Атай кеше, әсәй кеше, һеҙ уны не заслужили. Көмөшөгөҙ күгәргән. Ялтырамаясаҡ. Егерме биш йыл эсендә эшегеҙҙә лә, личный тормошоғоҙҙа ла ялғанлыҡҡа батып йәшәнегеҙ, тышта бер дөрөҫлөктө, өйҙә икенсе дөрөҫлөктө һөйләнегеҙ. Минең күңелемде фальш менән ағыулап, йөҙөмә ике йөҙлө битлек ҡапланығыҙ. Мин уны бөгөн ояҫһыҙлыҡ, йәғни битһеҙлек битлегенә алмаштырҙым. Миҫалдарын, йәғни конкрет дәлилдәрен әлегә килтермәйем. Кәрәкһә, бүтән саҡта килтерермен. Минең иҫкәртеү телеграммаһын алғанһығыҙҙыр, тим: «Горячо не поздравляю», — тиелгәйне унда.

Жаннет. Ниндәй телеграмма?

Әхмәтша. Ундай телеграмма килде. Имзаһын ғына ҡуймағайны. Ҡурҡаҡ!

Жаннет. Боже мой! Кеше алдында оят.

Алпамыша. Миңә үҙем алдында ла оят. Хәҙер гласность. Бөтә нәмә, хатта үҙ оятың да бар кешегә билдәле булырға тейеш. Бына шул. Бөгөн көмөш туй отменяется. Уны тимер туй алмаштыра. Һеҙ табынған заграничное барахлоны тимер беләҙек, тимер муйынса, тимер итек, тимер даға менән алмаштырҙыҡ. Вообще, хәҙер тимер эпохаһы әйләнеп ҡайтты. Беҙ — тимерселәр! *(Музыканттар тимергә һуға, гитара сиртә. Алпамыша ҡул ишараһы менән уларҙы туҡтата.)* Атай кеше, әсәй кеше, мин һеҙгә килен, үҙемә кәләш алып ҡайттым. Ана ул. Исеме — Зарзария. Зарзария! Матур яңғыраймы? Яңғырай шул. Ҡыҫҡартып әйткәндә — Зара. Ҡулынан әллә ни эш килмәй, зато холҡо әйбәт. Ун туғыҙҙа. Хәҙер демократия һәм гласность заманы, элекке саҡ булһа, йәшерер инек, хәҙер йәшермәйбеҙ. Зарзарияның алты айлыҡ ауыры бар. Күрһәт ҡорһағыңды, Зарочка!

Ҡорбанбикә. Бына һиңә буйҙаҡ!

Алпамыша. Зарочка, һиңә әйтәм!

Мотаһар. Алпаш! Саманан арттыраһың түгелме?

Алпамыша. Тығылма! Һинең бында ҡыҫылышың юҡ! Күрһәт, Зара!

Зара оялып ҡына уртаға сыға, иңендәге шәлен асып, ҡорһағын күрһәтә.

Ҡорбанбикә. Әстәғәфирулла! Алты ай ғына булмаҫ. Бөгөн таңда йөрөй бит был бала...

Алпамыша. Врач әйткән, апай кеше, точно алты ай, тигән. Беҙгә приписканың кәрәге юҡ. Ул замандар үтте. *(Кәләшенә.)* Хәҙер ҡапла ҡорһағыңды, Зара. *(Зара шәлен ябына.)*

Ҡорбанбикә *(сәмләнеп)*. Минең менән бәхәсләшмә, Алпамыша улым, мин туғыҙ тапҡыр ауыр күтәргән кеше. *(Миҙалдарын һыйпап ҡуя.)* Аҙнаһына, көнөнә хәтле беләбеҙ!

Жаннет *(иренә)*. Эй, йорт хужаһы, һиңә әйтәм, өйөңдә нимә ҡупты?

Әхмәтша. Әлегә башыма һыймайыраҡ тора.

Алпамыша. Һинең башың ҙур, атай кеше. Ана ниндәй! Ҙур башҡа күп нәмә һыйырға тейеш... Мин күрәм, аш-һыу мул, буш урындар күп. Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ. *(Ҡунаҡтарын һуҡ бармағы менән һанап сыға.)* Икәү артып та ҡала. Юҡҡа Ғилми менән Мимиҙе эйәртмәнек.

Мотаһар. Һеләгәйҙәре кибә төшһөн әле. Ошондай абруйлы, күркәм йортҡа аяҡ баҫырға иртәрәк уларға. Иртәрәк. *(Өйгә күҙ йөрөтөп сыға.)* Бында тарих үҙе аңҡып тора, бында боронғолар ауазы яңғырай. Ингән саҡта, бында доға уҡый-уҡый инергә кәрәк. Ә һеҙ?.. *(Тимер һуғыусыға ымлай.)*

Алпамыша. Братва, туташтар! Табынға тартылығыҙ. *(Әкренләп өҫтәлгә яҡынлашалар.)* Атай кеше, әсәй кеше! Ағай кеше, апай кеше! Һеҙ ҙә ҡалығыҙ. Быуындар бәйләнешенә бер миҫал, доказательство булып ултырығыҙ. Һеҙ эстафетаны бирерһегеҙ, беҙ ҡабул итеп алырбыҙ. Тик эстафета таяғы бысраныш бөткән, ҡулға тоторлоҡ та түгел. Бүтәне булмағас, беҙгә шул да яраған.

Ҡәнзәфәр. Ҡулыңды йыуымай тороп, һин беҙҙең эстафета таяғына ҡағылма, Алпамыша! Ҡағылма! Минең тулап китә торған ғәҙәтем дә бар.

Алпамыша. Тулама, ағай кеше. Мин былай ғына әйтәм. Ул таяктың беҙгә бөтөнләй кәрәге юҡ.

Ҡәнзәфәр. Мөртәт һүҙе был! Оятһыҙ кешенең һүҙе.

Алпамыша. Ә миңә барыбер. Кемгә кәрәк ул оят? *(Зараны етәкләп, ата-әсәһенә ҡаршы өҫтәл башына илтеп ултырта.)* Рәхим ит, ханым-әфәндем. Культурный кешеләр, шулай тиҙәр бугай. Прошу. Һинең урының ошо. Кейәү егете Мотаһар, һин минең эргәгә йылыш. Ҡалғандарығыҙ ябырылығыҙ!

Өҫтәлде тиҙ үк һырып алалар. Ҡомһоҙланып ашарға керешәләр. Шартлатып шампанское асалар, ҡоялар, эсәләр, ығы-зығы ҡуба. Өлкәндәр өҫтәлдең арғы башында, нимә эшләргә белмәй, бөршәйешеп ултыралар.

Мотаһар. Мин, кейәү егете булараҡ, табын ҡарау вазифаһын үҙ өҫтөмә алам. Табын башы түгел, аяҡсы. Почетный табын башы итеп Әхмәтша ағай үҙе тәғәйенләнә. Ризамы?

Тауыштар. Ыһы! Ыһы! *(Төрлө-төрлө ымлыҡтар ишетелә. Һүҙ юҡ.)*

Мотаһар. Бокалдар тулымы? Хәҙер туй телмәре һөйләйем.

Ҡәнзәфәр. Туҡтап тор әле, кем, Мотаһар. Беҙҙең ауылда, әүәл заманда Мотаһар исемле бер диуана бар ине. Буй-һыныңды шуға оҡшатып, шаҡ ҡаттым. Һуйған да ҡаплаған.

Мотаһар. Ни ҡыҫылышы бар бында диуананың?

Ҡәнзәфәр. Ул да ифрат ҡабалан ине. Һин ҡабаланма әле. Алпамыша, тим, һинең был ҡылығың раҫ эшме, әллә бер кәмит кенәме? Ошо төҫлө кәләш алалармы ни? Хатта быуаҙ кәләште лә...

Алпамыша. Хаҡ эш. Төрлө формализм менән бюрократизмдан азат эш. Миңә кәләш бөгөн кәрәк. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ. *(Тимер сыңдары, ҡалай өндәре сығып ҡала.)*

Ҡәнзәфәр. Унһы күренеп тора: тимер-ҡалай ҡыҙған. Ә атай-әсәйеңдең фатихаһы бармы һуң?

Алпамыша. Нимә? Благословениемы ни? Бирерҙәр. Һатып ала торған дефицит тауар түгел дә.

Ҡәнзәфәр. Бынһы яҙыҡ һүҙ булды, егет кеше! Хилаф һүҙ!.. Йәнә буласаҡ килендең, ауыҙ асып, һүҙ әйткәнен ишетмәнек, һинең бисәң булырға ризамы һуң ул?

Мотаһар. Нишләп риза булмаһын, ти! Ошондай кейәү, ошондай йорт, ах итеп торған ошондай ҡәйнә-ҡайнатай. Тағы нимә кәрәк уға?!

Ҡәнзәфәр. Үҙе әйтһен.

Алпамыша. Ризамы, Зарочка?

Зара, раҫлап, баш ҡаға.

Алпамыша. Телең менән әйт, Зарочка. Бөтәһе лә ишетһен. Хәҙер гласность.

Зара. Эйе, миңә бында оҡшай, тик анау септә генә килешмәй.

Әхмәтша *(хәтере ҡалып)*. Нисек инде ул «килешмәй»? Уҙған быуаттың уртаһында туҡылған септә ул...

Алпамыша. Аңлашылды, атай кеше. Тора-бара септә лә оҡшар. Оҡшамаһа... Фит!

Мотаһар. Һүҙ күп, хәрәкәт юҡ. Телмәр әйтәм. Минең телмәрем ҡыҫҡа: кисә генә ике киҫәк булып йәшәгән ике әҙәми зат бөгөн ғүмерлеккә ҡауышты. Донъяла иң яҡын, иң ихлас, иң тоғро дуҫым бәхеткә сума. Күтәрәйек әле бокалдарҙы, төбөнәсә түңкәрәйек! Һәм мин оран һалам: «Әсе! Әсе! Әсе!»

Сәкәштерәләр. Ошо мәл Жаннет үкереп илап сығып китә. Уға Әхмәтша эйәрә. Шау-шыу. Ут һүнеп тора. Тоҡана. Ҡорбанбикә менән Ҡәнзәфәр һаман шул мөйөштә ултыра. Йәштәр ныҡ ҡына иҫерешкәндәр. Тауыш тына. Беренсе музыкант урынынан тора. Сайҡала.

Беренсе музыкант. Гарсон! Шампанское! Гарсон! *(Берәү ҙә ҡуҙғалмағас, үҙе үрелеп шешәне ала, этикеткаһына ҡарап тора, һуҡ бармағы менән төртөп һанай.)* Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты. Алты миҙал. Данды ҡаҙанған был. О-һо! Кешеләр алдында хеҙмәте, йәғни заслугаһы ҙур шул. *(Алан-йолан ҡарана, күҙе Ҡорбанбикәнең түшенә төшә.)* Тоже миҙалдар! Бер, ике, өс... Ниңә өсәү генә? Ана, уныҡы алтау, ә һинеке — ни бары өсәү. Ошо йәшкә етеп, шешәнеке хәтле лә хеҙмәтең юҡмы ни ил алдында? *(Үҙ мөйөшөндәге мөйөнсәгә ҡул һырты менән һуғып, сыңлатып ала. Ҡарашы Ҡәнзәфәргә туҡтала, теге аяҡ үрә баҫа.)* Бына ағайым ҡайырған, исмаһам. Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете... Һанап бөтөрөрлөк түгел. Фронтта ла, унан һуң да, туҡтарҙан алып, услап-услап

бушҡа тараҡҡандар, ти бит. Ағайымдыҡы ике ус булыр. Ә хәҙер һатып алырға тура килә. Тулайым ғына һат беҙгә, ағай. Бына анау егеттең бирәү ҙә юҡ. *(Башын өҫтәлгә һалған икенсе музыкантҡа ымлай.)* Һатырға тартынһаң, бүләк ит. Бахырҙың күңеле булыр. Ә егет шәп. Уға миҙалһыҙ килешмәй.

Мотаһар. Эскәнһең икән, буйыңа һеңдер, Шарик, ниндәй өйҙөң түр башында ултырыуыңды онотма, йолҡош. *(Ҡәнзәфәргә.)* Ағай, ә, ағай, һеҙ кисерегеҙ уны, ул шундай енлерәк инде.

Ҡәнзәфәр. Тыйма, һөйләһен! Әле бит һатыулашып килешмәнек тә... Енле тиһеңме? Мин дә енле. Уртаҡ тел табырбыҙ. Сыҡ уртаға! Һатыулашайыҡ.

Беренсе музыкант. Ошонда көйө генә ярамаҫмы?

Ҡәнзәфәр. Ярамаҫ! Сыҡ!

Беренсе музыкант. Сыҡтым, ти. Тейерен генә һора. Бөтәһе өсөн оптом.

Ҡәнзәфәр. Оптом да була, берәм-берәм дә ярай.

Ҡорбанбикә *(әсенеп)*. Әстәғәфирулла! Ни ҡыланыуың был, Ҡәнзәфәр? Хәләл көстө һалып алған бүләк менән шулай шаяралармы ни? Уларға бит ил мөһөрө һуғылған.

Ҡәнзәфәр. Мин шаярмайым. Бына, кәрәк ти бит кеше, миҙалһыҙ килешмәй, ти.

Беренсе музыкант *(айнып төшә)*. Кәрәген кәрәк тә... Бәлки, был саҡлы уҡ кәрәкмәҫ тә... *(Тегенең түшенә ымлай.)*

Ҡәнзәфәр. Ғәйрәтем ҡайтмаҫ борон, алып ҡал.

Ҡорбанбикә. Ҡәнзәфәр, тим, мыйығыңды һыйпап ҡуй, сыуалып китмәһен.

Ҡалғандар битараф тора.

Ҡәнзәфәр. Мыйыҡҡа ҡағылмай тор, ҡатын. Форсаты сыҡҡас, һыйпармын. *(Шарикка.)* Йә, ниңә ҡатып ҡалдың әле? Һора? Күпме кәрәк?! *(Күкрәген калтайтып ала, теге артҡа сигенә.)*

Беренсе музыкант. Күпме, тип ни инде...

Ҡәнзәфәр. Кәрәген һора, тейешен түлә.

Беренсе музыкант. Тейеше, тип ни инде...

Ҡәнзәфәр. Өҙөп әйт! Өҙөп һора!

Беренсе музыкант. Уның ни бишеһе илле һум инде. Бала-саға ҡулынан алғанда, хатта арзанырағҡа ла

төшә. Бөтә күкрәгеңә етмеште *(һанай)*, юҡ, туҡһанды бирәм.

Ҡәнзәфәр Шарикка текләнә. Оҙаҡ тынлыҡ.

Ҡәнзәфәр *(айыу ише үкереп ебәрә)*. У-у-у, хәшәрәт! Иманһыҙ! Үҙ муйынсағың менән үҙеңде быуып үлтерәм хәҙер. Күҙең шартлап сыҡҡыры! Етлекмәй тыуған кәзә тәкәһе! *(Муйынсаһынан быуа.)*

Беренсе музыкант. Үлтерәләр! Ҡотҡарығыҙ! Разбой!

Ҡорбанбикә. Ҡәнзәфәр, тим! Енеңде тый!

Ҡәнзәфәр. Тыймайым! Хөкүмәттең ҡулынан килмәгәс, үҙем бөтөрәм быңдай хәсистәрҙе!

Бүтәндәр быларҙы ҡамағанда, муйынсаҡтың ебе өҙөлөп китә. Миҙалдар сыңлап иҙәнгә сәселә. Ҡатындар сыйылдарға керешә. Алпамыша, һушы китеп, ҡуҙғалмай тик ултыра.

Мотаһар. Татыу ғына, йәмле генә ултырайыҡ әле, ағай-эне, табындың бәҫе китмәһен. Ни тиһәң дә, туй хаҡы бар.

Ҡәнзәфәр *(берәүҙе лә ишетмәй. Беренсе музыканты елкәһенән ала)*. Күтәр үксәңде, замана имгәге! Юғиһә, өсөнсө ҡаттан урамға ырғытам. Үлмәҫһең дә, мал да булмаҫһың.

Беренсе музыкант. Ырғытып ҡара! Мин страховать ителгән. Ун меңгә. Түләргә тура киләсәк. Ебәр!

Ҡәнзәфәр. Ҡәбереңә илтеп түләрмен, емтек!

Беренсе музыкант. Ебәр, тим бит! Үҙем дә китәм. Табын түгел был. Черт знает что. Безобразие.

Ҡәнзәфәр. Атла, сүп әҙәм! *(Елкәһенән төртөп ишектән сығара. Әйләнеп килә, дивандағы гитараны ала, икенсе музыкантҡа һона.)* Мә, уйнай-уйнай оҙата бар әшнәңде. Бер үҙенә күңелһеҙ булыр. *(Икенсе ҡыҙға.)* Ә һин, аллы-гөллө тутыйғош, ҡушылып йырла:

Һин – минең ҡамышым,
Мин – һинең ҡамышың...

Тфү, имгәктәр! Үҙҙәре ни ҙә, йырҙары ни.

Мотаһар *(эйәрмәксе итә)*. Мин дә ҡуҙғалайым. Йәштәрҙе аулаҡта ҡалдырайыҡ.

Ҡәнзәфәр. Һин ҡал әле, кейәү егете. Ипле кешегә оҡшай башланың. Йөрәкте баҫыу өсөн, бәлки, берәрҙе

түңкәреп тә ҡуйырбыҙ. Әхмәтшала фәтүә юҡ. Әллә тәрән уйҙарына батты, әллә берәй мөйөшкә боҫоп, ойоно.

Мотаһар. Унытһын бойороғоҙ ғына. *(Ҡоя.)* Тимәк, туй дауам итә. *(Эсәләр.)*

Алпамыша арғы мөйөштә, үҙе ҡойоп, өндәшмәй эсә.

Ҡәнзәфәр. Шуға аптырайым. Икегеҙ ҙә ап-арыу ғына егеттәр кеүекһегеҙ, нимә эшләп әле анау ябағаһы ла ҡойолмаған ҡорсаңғы тайҙарға эйәреп йөрөйһөгөҙ?

Мотаһар. Беҙ уларҙы белмәйбеҙ ҙә тиерлек. Гитаралары өсөн генә эйәрттек. Мәжлесте күтәрәйек тип...

Ҡәнзәфәр. Күтәрҙеләр ана. Йыйын әтрәгәләм, перестройка бөрсәләре.

Мотаһар. Ифрат дөрөҫ әйттегеҙ, ағай. Именно бөрсәләр. Башта уҡ һынаным: һеҙ ғәҙел кеше, тура кеше, унда-бында ҡойроҡ болғамайһығыҙ. Мин — үҙем дә, ағай, дөрөҫлөк менән ғәҙеллек ҡоломон. Ғәҙеллекте малға ла, данға ла алмаштырмайым. Валлаһи, ағай! *(Ҡоя, күтәрә.)* Ғәҙеллек өсөн! Ғәҙеллек ул...

Ҡәнзәфәр. Зерә күп һөйләйһең, ҡустым. Күп һүҙ йә кәбәкле, йә шәрбәтле була торған.

Мотаһар. Ғәфү! Мең ғәфү, ағай! Йәшлек, самаһыҙлыҡ бәләһе. Ғәҙеллек өсөн!

Ҡәнзәфәр. Ғәҙеллек өсөн тотоп була.

Ҡорбанбикә. Шуны тот та тиҙ үк ысҡындыр инде, Ҡәнзәфәр. Бүтәнсә ынтылма.

Ҡәнзәфәр. Ғүмереңдә ҡабул иттем, ҡарсыҡ. *(Эсәләр. Алпамыша үҙе ҡойоп эсә.)* Вәссәләм! Йәғни амин!

Ҡорбанбикә урынынан сыға. Иҙәнгә һибелгән миҙалдарҙы
берәм-берәм эйелеп ала. Яҙыуҙарын уҡый.

Ҡорбанбикә. Иманһыҙҙар. Тәре таҡһалар ни булған ул мөртәттәргә? «Сталинградты һаҡлау өсөн». *(Яулыҡ осо менән миҙалды һөртә.)* Сталинград... Дүрт балаһын етем итеп, унда беҙҙең атайыбыҙ күмелеп ҡалды. «Берлинды алған өсөн». Бында күпме әҙәм башын һалды. «Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы батыр хеҙмәт өсөн». Ҡайҙан батыр булһын инде. Михнәтле хеҙмәт. Һыйыр егеп, ер һөргән замандар. Бынтһының исеме «Сыҙамлыҡ өсөн» тип атау тейешле. «Сиҙәм күтәргән өсөн»,

«Будапешты алған өсөн». Будапешт урамында, Ҡәнзәфәр, тамсы-тамсы һинең хәләл ҡаның тамған. «Үҙем дә винтовка буйы ғына инем», тип һөйләй торғайның. *(Берәһен оҙаҡ әйләндереп ҡарай.)* Бынһы боронғо. Теге герман һуғышыныҡылыр шәт. Кемдәрҙең генә ҡандары һуғармаған да, кемдәрҙең генә тирҙәре йыумаған был мөҡәддәс ҡомартҡыларҙы?! Ҡала этенең муйынына тағылған тәңкәле муйынсаҡ урынына тағып йөрөтһөндәр әле уларҙы. Йә Рабби! Әҙәм балалары аҙып-туҙып эштән сыҡты бит. *(Тура баҫа.)* Һин уларҙы дөрөҫ елкәләнең, Ҡәнзәфәр. Имгәтеп ташламағайың, тип, тәүҙә ҡурҡҡайным да, аҙаҡтан үҙең менән ғорурланып, һауаланып ултырҙым. Бөтә яҡлап ирҙән ундым, билләһи! Намыҫыңды һаҡлай ҙа, яҡлай ҙа беләһең.

Ҡәнзәфәр *(аптырап)*. Ҡарсы-ыҡ! Һиңә нимә булды? Миңә атап, ғүмер әйтмәгән һүҙҙәр ысҡындырҙың. Хатта айнып киттем. Ана, йәштәр алдында уңайһыҙ — маҡташыу.

Ҡорбанбикә. Тейерен генә үлсәп әйттем. Улар фәһем алһындар.

Мотаһар. Ифрат дөрөҫ әйттегеҙ, апай! Фәһем алһындар... Алырбыҙ.

Алпамыша ултырған көйө шапылдатып өҫтәл һуға.

Алпамыша. Эй, йән эйәләре! Был өйҙә хужа бармы? Кем хужа тим, был өйҙә? Ниңә бында теләһә кем командовать итә?

Ҡорбанбикә. Әстәғәфирулла! Нишләп беҙ һиңә «теләһә кем» булайыҡ та, нишләп командовать итәйек, ти?

Ҡәнзәфәр. Һин ундай ауыр һүҙҙәр әйтмә, Алпамыша улым, һуңынан ҡайтарып алыуы ауыр булыр. Ҡырыныраҡ тейәһәм дә, иҫ-аҡылым дөрөҫ минең.

Ҡорбанбикә. Ызнамы дөрөҫ.

Алпамыша *(йомшарып)*. Минең һеҙгә үпкәм юҡ, Ҡәнзәфәр ағай, Ҡорбанбикә апай. Һеҙ — ҡунаҡтар. Барығыҙ йоҡлағыҙ. Һуң инде. Бәү-бәү итегеҙ. *(Башын ҡаға.)* Бәлли-бәү... Бәлли-бәү...

Ҡәнзәфәр *(ныҡ йомшарғанын һиҙә)*. Раҫ һүҙ әйтә бит был Алпамыша. Әйҙә, бисәкәй, берәй ергә барып, морон төртәйек. Әйҙә, йоҡо яҫтыҡ теләмәҫ.

Ҡорбанбикә. Ниңә теләмәһен, ти? Күпертеп түшәк түшәрмен, мамыҡ мендәр һалырмын. Беҙ үткенсе-

ләр түгел дә. Әхмәтша менән Йәннәттең танһыҡ ҡунаҡтарыбыҙ. *(Сығалар.)*

Алпамыша *(Мотаһар менән Зараға башын күтәреп)*. Һеҙ һуң?

Мотаһар. Беҙ нимә?

Алпамыша. Һеҙ ҙә бәү-бәү.

Мотаһар. Нисек инде улай?

Алпамыша. Шулай. Хәҙер төн. Төнөн кешеләр йоҡларға тейеш. Бай-бай...

Мотаһар. Һушыңа кил, Алпыш. Бөгөн бит мин түгел, һин кәләш алдың. Бына Зарзарияны. Кәләш менән һин бәү-бәү итергә тейеш. Шулай бит, Зара?

Зара *(баш ҡаға)*. Белмәйем. Мин арыным.

Алпамыша. Арыһаң, йоҡла. Бөтәгеҙ ҙә йоҡлағыҙ! Өнөгөҙҙән ҡасығыҙ ҙа төшөгөҙгә инеп сумығыҙ. Мин дә хәҙер... *(Башын ултырғысҡа терәй.)*

Ут һүнә. Тынлыҡ.

Алпамыша *(яңғыҙ)*. Был өйҙә әҙәм заты бармы? *(Ҡысҡыра төшә.)* Йәне ҡайҙа был өйҙөң?

Жаннет тауышы.

Жаннет. Мин бында, улым.

Алпамыша. Һин кем?

Жаннет. Әсәйең. Ошо йорттоң йәне.

Алпамыша. Бында һинең йәнеңдең ярсыҡтары ғына йәшәй, әсәй.

Ут тоҡана. Жаннет сыға.

Жаннет. Бәпесем, Алпамышам, һиңә ни булды? Бөгөн ҡылған ҡылыҡтарың зиһенемде алды. Атайыңдың бауыр өйәнәге ҡуҙғалды. Килтергән кәләшеңде лә өйгә шатлыҡ итеп индермәнең. Беҙҙе рәнйеттең, уны кәмһеттең. Зарзарияны беҙ былай ҙа ҡабул итер инек. Алты ай әүәл ни, алты ай һуң ни. Йөклө көйө килен булып төшөү ҙә донъяла юҡ хәл түгел – был заманда. Төклө аяғы менән керһен.

Алпамыша *(айныйтөшә)*. Зарзарияны ҡалдырып торайыҡ. Йөгө лә, төгө лә ҡасмаҫ. Һин һорайһың – нимә булды, тиһең. Әйтәм, әсәй. Һеҙҙең көмөш туйығыҙ

минең выждан өйәнәгемде ҡуҙғатты. Намыҫымды быума сире тотто. Бына хәҙер ебәрә төштө. Миңә бик ҡыйын, әсәй. Йәллә мине, йыуат.

Жаннет. Сәбәптәрен атап әйтһәң, йыуатыуы ла еңелерәк булыр ине. Нимә ғазаплай һине? Һөйлә, ғазаптарыңды үҙемә алам. *(Яурынына ҡулын һала.)* Боже мой! Һин дер-дер ҡалтырайһың.

Алпамыша. Мин өшөйөм. Тик йылытырға тырышма. Мине йылытып булмай. Мин комод өҫтөндәге анау таш бесәй. Бары ҡыҙған ғына. Йыуат.

Жаннет. Таш бесәйҙе ҡуй, улым. Бына үҙеңде ни тип йыуатайым?

Алпамыша. Белмәйем, әсәй. Алданғанды ни тип йыуаталарҙыр. Белмәйем. Мине бит алданылар. Күп итеп, оҙаҡ итеп алданылар. Ә мин, таш бесәй баҡыр тәңкәләрҙе йотоп торған шикелле, ялғанды эсемә йыя килдем. Бесәйҙе ватмай, тәңкәләрҙе алып булмай. Ялғандан бушаныу өсөн мин үҙемде үҙем нисек итеп ватайым? Ватып булмай. Ват мине, әсәйем.

Жаннет. Боже мой! Ни һөйләйһең һин, Алпамышам?! Һиндә ниндәй ялғанлыҡ булһын, ти? Күҙ алдымда бөрөләнеп, күҙ алдымда өлгөрҙөң. Өҫтөңә ҡунған туҙанды ла «өф» итеп өрөп торҙом.

Алпамыша. Дөрөҫ, әсәй. Өҫтөмә төшкәнде өрөп торҙоң, эсемә ҡунғанды күрҙеңме һуң?

Жаннет. Эскә ҡуныр туҙан ҡайҙан килһен ти ул? Өйҙә һин берәй ваҡыт битәрләшеү, ыҙғыш-талаш, насар һүҙ ишеттеңме? Тыныслыҡ менән татыулыҡтан башҡа ни күрҙең һин бында? Эҙер-томан инмәне. Атайың ҡояш булһа, мин уның тирәһендәге ай булырға тырыштым.

Алпамыша. Шулай ҙа мине алданылар.

Жаннет. Кемдәр алданы?

Алпамыша. Тәүҙә пустяк кенә бер хикәйә һөйләйем. Былай ул. Әүәлерәк заманда мороженое ашап туймаҫ бер малай булған. *(Урынынан тора.)* Эләккәндә, теле туңғансы ашаған. Ҡыҫҡа сыбар ыштанлы, зәңгәр күлдәкле шул малайҙы күҙ алдыма килтерәм. А-а-на ул йүгерәһикерә баҫҡыстан төшөп килә. Усында өс көмөш тәңкә. Ҡыҫып тотҡан, бына ошолай. *(Йоҙроғон төйнәй.)* Әсәһе кухняға инеп киткәс, ҡунаҡ ағай бирҙе уға. Өс көмөш тегенең усын өтөп бара. *(Усын аса.)* Урамға сыҡҡас, сыҙаманы, ырғанлай-ырғанлай, һамаҡларға кереште. Моро-

женое һата торған ергә шулай тиҙерәк барыла, велосипедта елдергән кеүек. *(Йоҙрогон услап, алға һона.)*

Бер үҙемә — өс көмөш.
Өс көмөшкә — өс өлөш.
Тәүҙә берҙе алайым,
Алайым да ялайым,
Тағы берҙе алайым,
Бөтөргәнсе ялайым.

Оҙаҡ ялаңы. Ул малай — мин инем. Ҡояш тиңе атайым был көндө ер шарының арт яғында ил өйрәнеп, ҡомартҡы йыйып йөрөй ине, ахырыһы. Өйҙәлеген хәтерләмәйем.

Ж а н н е т. Эйе, кухняға сығып киткән әсә мин инем. Ул көндө беҙгә тәү тапҡыр Ғаяз Баязович килгәйне. Хәл белергә тип...

А л п а м ы ш а. Ниңә, сирләй инегеҙме ни?

Ж а н н е т. Сәләмәт кешеләр ҙә хәл белешә, Алпамыша.

А л п а м ы ш а. Һуңыраҡ шундай бер зрелище күрҙем. Ябылып бөтмәгән ишек ярығынан күҙәтеп торҙом. Бәләкәй шымсы, етлекмәгән шпион. Иҫкә төшөрөү үҙемә оят... Ә тамаша шул ине: һин ҙур көҙгө ҡаршыһында тораһың. Йөҙөң ап-аҡ. Үҙең шундай һылыуһың. Ә теге кеше һинең алдыңда теҙләнгән. Үҙе инәлә: «Һәләк итмә мине! Яратмаһаң, ҡыҙған, зинһар. Бер осҡон өмөт ҡалдыр!» — ти. Тағы нимәлер һөйләне. Һин өндәшмәнең. Ә мин, һеҙҙе өркөтөр өсөн, ишекте астым да шапылдатып кире яптым. Үҙем, анау ҡараңғы соланға инеп, өнһөҙ генә иларға керештем. Илауымдың сәбәбен үҙем дә белмәйем. Моғайын, һиңә үс итеп илағанмындыр.

Ж а н н е т. Эйе, минең алдымда теҙләнгән кеше Ғаяз Баязович ине. Был уның һуңғы килеүе булды.

А л п а м ы ш а. Бутайһың түгелме? Бөгөн уның беренсе тапҡыр килмәүе булды. Ниңә килмәне? Гел түр башында ине бит.

Ж а н н е т. Бутамайым. Теге көндән һуң ул ике йыл ситтә йөрөнө.

А л п а м ы ш а. Бөтә тарих ошомо?

Ж а н н е т. Юҡ, Алпамыша, быныһы уның башы ғына. Һүҙҙе был хаҡта һин ҡуҙғаттың, хәҙер уны өҙөп булмай.

А л п а м ы ш а. Иркеңдә.

Жаннет. Иркемдән түгел, ирекһеҙҙән һөйләйем. Тыңла. Һин хәҙер ир-егет инде, хөкөмдө үҙең сығарырһың.

Алпамыша. Хөкөм сығарырға... Мин һинән яуап алмайым.

Жаннет. Алмаһаң да, тыңла.

Алпамыша. Тыңлайым.

Жаннет. Тәү килгәндә егерме алты йәшлек Ғаяз исемле буйҙаҡ егет миңә – ирле, балалы ҡатынға ғашиҡ булыуын әйтте. Тыңланым, ләкин һүҙҙәрен ҡабул итмәнем. Күңелемдең бер генә ҡылы ла ҡуҙғалманы. Ул киткәс, йөрәгем саҡ ҡына елкенеп ҡуйҙы. Шул көндө миңә ҡәһәр төштө: ҡапыл тамағың шешеп, төн буйы янып сыҡтың. Өҙгөләнеүемдең сиге булманы. *(Пауза.)* Байтаҡ замандар үткәс, ул тағы килде. Эйе, алдыма теҙләнеп, ҡулымды һораны. Һине улы итергә теләүен әйтте.

Алпамыша. О-һо! Во дает! Сумасшедший.

Жаннет. Ғашиҡтар ғына шулай аҡылдан яҙалар. Мин уны ҡыҙғандым да, асыуландым да. Минең көйләнеп килгән донъяма һөмһөҙ инеп, миңә – ир ҡатынына – шундай дыуамал тәҡдим яһарға баҙнат итеүе намыҫыма тейҙе. Ауыр һүҙҙәр әйтеп, ҡыуып сығарырҙай булдым. Көсөм етмәне. Сәсенән һыйпаным, ҡулын тоттом, ләкин икеләнеүһеҙ әйттем: «Тороғоҙ, китегеҙ. Өмөтөгөҙҙө өҙөгөҙ һәм ялғарға тырышмағыҙ ҙа. Был хыял түгел. Был төш. Уянығыҙ», – тинем. Ишекте ел асып япты. Ул аяҡ үрә баҫты. Йәнде көйҙөрөрлөк моңһоу итеп күҙемә бер ҡараны ла сығып китте. Китте лә олаҡты. Аҙна, ай уҙҙы. Мин сиргә һабыша башланым. Миңә унан һағыш сире йоғоп ҡалды. Сиремдең сиге лә күренмәй. Шул бер исем менән һаташып йәшәйем. Атайың үҙ мәшәҡәттәре менән булды. Халыҡҡа аң-белем таратты, ил өйрәнде, ҡомартҡы йыйҙы. Минең күҙҙәремә күтәрелеп ҡарарға форсат тапманы. Әллә һиҙенеп ҡарарға ҡурҡты. Усағыбыҙ һыуына барҙы. Тыштан имен өйөбөҙҙөң йәне күшекте. Ут тоҡандырам, торлағым яҡтырмай. Көнгә ҡарайым, күңелем асылмай. Быныһы – ялған тормош түгел ине әле. Төҫө-биҙәге уңып, тоноҡланған ысын көнкүрешебеҙ ине. Шул көнкүрештә берҙән-бер йыуаныс булып һин ҡалдың. Шундай яғымлы, һиҙгер бала инең. Усыңды битемә ҡуйһаң, донъяларым онотолоп китә торғайны. Сыҙамлылыҡтың сиктәренән аштым... Ике йылдан һуң ул кире ҡайтты. Шунан бирле мунсала һымаҡ сыуалған тормош китте. Ул тағы килде, тағы ялбарҙы. Кире ҡаҡтым. Аҡы-

лым ризалашманы. Атайыңды йәлләнем. Ә йөрәгем бөтөнләй унытҡы ине.

Алпамыша. Странно. Сәйер... Аҡыл... Йөрәк... Мин белмәйем: аҡыл ҡайҙа ла, йөрәк ҡайҙа? Ниңә уларҙы бүлгеләп эште ҡатмарландырырға?

Жаннет. Бүлгеләргә яҙмаһын да, улым... Мине, ахырҙа, йөрәгем еңде. Мин ҡот осҡос хәтәр ҡарарға килдем. Атайыңдан айырылып, Ғаяз Баязовичҡа тормошҡа сығырға булдым. Атайыңа бөтәһен дә асыҡтан-асыҡ әйттем.

Алпамыша. Шунан ыҙғыш, талаш китте инде. Мал бүлеш. Развод. Ә, мин ҡайҙа инем?

Жаннет. Һин йоҡлай инең. Талаш та, бүлеш тә, развод та булманы.

Әхмәтша сығып ишек яңағына һөйәлә. Быларға күренмәй.

Алпамыша. Ә нимә булды?

Жаннет. Атайың хәл итте. Йортто хужаһыҙ, баланы атаһыҙ итмә, тине. Теләһәң нисек йәшә, тик өйҙән китмә. Бынан ары үҙеңә түгел, күлдәгеңә лә ҡағылмам. Тик китмә. Һинең хаҡта күҙем ғәйепте күрмәҫ, ҡолағым ғәйбәтте ишетмәҫ. Зинһар, китмә, тине. Ҡысҡырып әрләһә, йәберләһә, кәмһетһә, китергә тәүәккәлләр ҙә инем. Кәмһетмәне. Китә алманым. Ышыҡһыҙ йортта ике йөҙлө, ике төрлө тормошта ҡалырға күндем. Ике шәүлә булып биш йыл йәшәнек. Бүтәнде яраттым, атайың менән һине ҡарап көн иттем. Ике арала берҙән-бер йән эйәһе һин инең.

Алпамыша. Эйе, мин — йән эйәһе. Ҡырын эштәрҙе төҙәтеп һөйләп, йән эйәһен алдарға ярамай, әсәй! Ышанмайым! Атайымдың шул тиклем үк ебеп төшөүенә, быҙау булып мөңрәүенә ышанмайым! Ни тиһәң дә, ул ир заты бит әле. Исеме генә ни тора — Әхмәтша! Ә мин Алпамыша Әхмәтшахич. Шахич! Ҡалайыраҡ яңғырайбыҙ икебеҙ ҙә. Беҙҙе алдарға ярамай.

Әхмәтша. Әсәйеңә тел тейҙермә, Алпамыша. Уның әйткәндәре—бөтәһе лә раҫ, ҡылғандары хаҡ. Тикшермә лә. Был һинең эшең түгел.

Алпамыша. Был минең эшем булмаһа, мин һеҙҙең эшегеҙ, һеҙҙең тауарығыҙ. Аңлат, атай.

Әхмәтша. Нимәһе аңлашылмай тағы?

Алпамыша. Һине аңламайым. Ни өсөн һин шулай хурлыҡлы килешеүгә, капитуляцияға барҙың? Әсәйҙе

әйтмәйем. Уны аңлап була. Унда тойғо, хис, йөрәк... Һиндә нимә?

Әхмәтша. Миндә аҡыл, сабырлыҡ, айыҡ иҫәп, йәнә шуға өҫтәп әйтәм: вазифа менән бурыс.

Алпамыша. Бурыс... Бурыс... Кемгә бурыс?

Әхмәтша. Кемгә түгел, кем алдында, тип һорау тейеш. Әйтәм: йәмғиәт алдында, ил алдында. Ҡатын айырыу, ғаилә емереү — шулар ҡаршыһында ярамаған бер эш, хилаф ҡылыҡ ул. Фәнни итеп әйткәндә, һәр ғаилә бөйөк дәүләтебеҙҙең ҡаҡшамаҫ бер ячейкаһы, йәғни бал тулы бер кәрәҙе.

Алпамыша. Был учениены мин дә беләм. Институтта өйрәткәйнеләр.

Әхмәтша. Белһәң дә, әйтеп бөтөрәм. Ошо кәрәҙ, йәғни ячейка емерелдеме, хөкүмәттең бер ере мотлаҡ кителеп төшә. Бөтәһе лә баш тирәләй уйланылды... Барынан да былай, яңғыҙ ҡалһам, бөтөрмөн, һәләк булырмын, тип ҡурҡтым. Һине уйланым. Бер йыуанысым да булды: беҙҙе бит әле әжәл айырманы, ул иҫән, минең менән бер донъяла йәшәй, тинем, яҙмыштың ҡарарын көттөм. Яратыуын биргәс, тәбиғәт әҙәмгә сыҙамлығын да бирә икән.

Алпамыша. Атай! Тимәк, һин дә, әсәйем дә...

Әхмәтша. Әсәйеңә һүҙ әйтмә! Ул—юғары зат.

Алпамыша. Һин дә, әсәйем дә тормош тигән булып, күңелһеҙ, алдаҡ кәмит уйнағанһығыҙ. Ә мин шул кәмиттең һүҙһеҙ персонажы булғанмын. Был хәлемде аңлап еткермәһәм дә, һиҙендем мин ул саҡта. Өйҙәге һәм тыштағы ялғанлыҡ радиацияһы көндән-көн, йылдан-йыл рухымды ағыуланы, һаман да ағыулай килә. Әүәлерәк ялғанлыҡ кешенең эсенә йәшеренһә, хәҙер майҙанға сығып ҡысҡыра: «Мин бында! Мин хужа!» — ти.

Әхмәтша. Ҡысҡырыр-ҡысҡырыр ҙа, тамағы ҡарлыҡҡас, тыныр. Һин тыңлама уны.

Алпамыша. Күрмә лә, ишетмә лә, тыңлама, тип һин, атай, үҙ хәлеңә лә, донъя хәленә лә шулай риза булып, килешеп йәшәнеңме?

Әхмәтша. Йыш ҡына тыштан риза, эстән юҡ. Ил мәшәҡәтенән ҡасып, ил өйрәндем. Көрәшмәнем дә, ҡарышманым да, еңмәнем дә, еңелмәнем дә.

Алпамыша. Их, атай кеше! Һин бит анау иҫке септә артына йәшеренеп, анау төпһөҙ көршәктән шәрбәт эсеп, һапһыҙ ураҡ менән ураҡ урып, керешһеҙ йәйәнән

уҡ атып көн күрергә маташҡанһың. Бисара әҙәм һин. Мин һине ныҡлап йәлләйем. Һин бит минең ғәзиз атайым. Үҙең шундай меҫкенһең, йыуашһың, үҙеңдән үҙең ҡурҡаһың...

Жаннет. Алпамыша! Атайыңды кәмһетергә, рәнйетергә һинең хаҡың юҡ. Быға юл ҡуймам! Егерме биш йыл әүәл уны һин түгел, мин һайланым. Уны һайлап хаталанманым. Йомшаҡ тәбиғәтле, ипле холоҡло тоғро кешегә тап килтерҙе мине яҙмыш. Мин уның бар булмышын беләм. Саялыҡ һәр кемгә лә бирелмәгән. Уның сабырлығы батырлыҡҡа бәрәбәр.

Алпамыша. Былай булғас...

Жаннет. Тороп тор әле. Был ғүмер эсендә ағы ла, ҡараһы ла, сауабы ла, яҙығы ла булды. Бар булғаны — беҙҙеке.

Алпамыша. Былай булғас, йәмәғәт...

Жаннет. Бүлдермә. Тыңлап бөтөр. Хәтереңә ал, Алпамыша. Ваҡ һәм эре битәрҙән, ирмен тигән ирҙәрсә, өҫтөн булды ул. Минең биш йылға һуҙылған фажиғәле бәхетемде, ут йотһа ла, уфтанмай кисерҙе. Көттө. Сабыр итте. Бер көндө мин яңынан шартлап һындым. Тәнем йәшәгән ошо төйәккә йәнем әйләнеп ҡайтты. Атайың быны шунда уҡ һиҙҙе.

Әхмәтша. Һиҙмәй буламы, өйгә эркелеп-эркелеп нур таралғас...

Жаннет. «Үткән эштән төш яҡшы», — тине ул. «Беҙгә был донъяла, тәҡдирҙән тыш, тағы биш йыл йәшәргә тура килер», — тип өҫтәп ҡуйҙы. Һәм был хаҡта бүтәнсә телгә лә алманы.

Алпамыша. Былай булғас, йәмәғәт, һеҙ икегеҙ ҙә күл өҫтөндәге аҡ томбойоҡ төҫлө ап-аҡ икәнһегеҙ. Пар күгәрсендәрһегеҙ: гөр-гөр-гөр... Бер суҡышһалар, биш үбешерҙәр: сут та сут, сут та сут...

Жаннет. Сәманы онотаһың, Алпамыша. Әҙәбең, намыҫың ҡайҙа һинең?

Алпамыша *(тыныс)*. Ысынлап та, әсәй, минең әҙәбем ҡайҙа? Намыҫым ҡайҙа минең, атай? Күрмәнегеҙме шуларҙы? Әйҙәгеҙ, бергәләп эҙләйек.

Әхмәтша. Башыңды йүләргә һалма. Намыҫың юғалһа, һин былай туламаҫ та инең. Намыҫың шулай болара. Әммә бер бола ла изгелеккә килтермәй. Мин быны тарихтан беләм. Мин үҙем дә, выжданым ҡуҙғалып, бәғзе миҙгел шиктәргә батам: нисек әле, килке-килке дөрөҫ-

ләктән ҡурҡыш, ялғанлыҡҡа ышаныш йәшәйем, тип. Шунан килеп, үҙемдең шиктәремдән үҙем шөрләп китәм. Дөрөҫөн әйтәйем, был көмөш туй тигәнебеҙ, ғәфү ит, Йәннәт, тәүҙә үк күңелде елкетмәне.

Жаннет. Үҙең елкетмәгәс, елкенмәҫ инде ул.

Әхмәтша. Юҡ, бында объектив сәбәп бар. Уйлап ҡараһаң, был цифр түңәрәк түгел икән. Биштән бер өлөшө кителеп төшкән. Уны ҡабат йәбештереп булмай. Беҙ уны белмәмешкә, күрмәмешкә һалышҡанбыҙ.

Жаннет. Һалыштың ни ҙә, һалышманың ни. Булғаны йәшәлгән, яҙғаны күрелгән. Уларҙы юйыш та, үҙгәртеп тә булмай.

Әхмәтша. Үткәнде үҙгәртеп булмай. Үкенеслеһенә үкенеү генә мөмкин.

Жаннет. Минең үкенер ерем юҡ, Әхмәтша. Мин йөрәгемде алдаманым, йөрәгем һине алдаманы. Аҙашыуҙарын да, ғазаптарын да, серҙәрен дә һинән йәшермәне. Рәхмәт һиңә! Хәтәр мәлдәремдә һин миңә көнсөл ир булыш түгел, изге күңелле дуҫ булып ҡараның. Ә көмөш туй тигәнебеҙ, бер йыуаныс эҙләү, фетнәле заманға үс итеп, байрам яһау ине. Килеп сыҡманы. Йәмһеҙ бөттө. Яңынан өйҙөң ҡото китте. Хәҙер нимә эшләргә ҡала?

Әхмәтша. Йәшәргә ҡала. Тышта ғәрәсәт, донъяла янъял, күңелдә хәүеф. Ошо оябыҙға һыйынып йәшәргә ҡала. Уҡмашһаҡ, ҡот ҡайтыр. Өсәү инек, хәҙер дүртәү булдыҡ. Насип итһә, бишәү ҙә булырбыҙ. Алдағы тормошто барынса ҡабул ҡылыш, көн итеү кәрәк. *(Туҡталып ҡала, шымып тора.)* Ниңә баш ҡағыш булһа ла минең һүҙемде йөпләмәйһегеҙ? Йәннәт? Алпамыша?

Жаннет. Йөпләмәһәк тә, һүҙҙәрең йөплө.

Әхмәтша. Килендең исеме кем тинең әле?

Алпамыша *(ижекләп)*. Зар-зар-ия. Исеңдә ҡалдыр.

Әхмәтша. Ҡалдырырмын. Бер исемдә ике «зар» икән. Ҡоштай һайрап инмәне лә... зарлы йәшәргә яҙмаһын... Беҙ уны ситләтмәбеҙ. Йәм китәрмәй алыш килһәң, оторо, һөйөнөп ҡаршылар инек.

Алпамыша *(ирония менән)*. Былай һөйөнөүегеҙ ҙә еткән.

Әхмәтша. Үҙең шулай һөйөндөрә белгәс ни...

Жаннет. Алпамыша, балам, үҙ һүҙле, ҡыҙыу ҡанлы булһаң да, яуыз түгелһең бит һин. Хәҙер тынысланыш һорайым: бөгөн ниңә шул тиклем ҡаты йәберләнең беҙҙе?

Алпамыша. Әйттем бит, көмөш туй тураһында һүҙ сыҡҡас, ишек ярығынан күҙәткән шаҡшы малай, көҙгө янында торған һин, һинең ҡаршыңда теҙләнгән Ғаяз Баязович күҙ алдыма килеп баҫты. Шул саҡ эсем тышҡа әйләнде. Һиңә, уға, атайыма, үҙемә асыу итеп ҡылдым был ҡылыҡты.

Жаннет. Ярай әле, Хоҙай һаҡланы, ҡунаҡтар килмәне. Ғүмерлек позор булыр ине.

Алпамыша. Ул позорҙан һеҙҙе мин ҡотҡарҙым.

Жаннет. Һин?

Алпамыша. Эйе, мин. Һеҙ төҙөгән исемлекте күреп, мин уларҙың дүртеһенә лә шылтыратып сыҡтым. Сәбәп табып килмәгеҙ, аҙаҡ төшөнөрһөгөҙ, тинем. Һеҙҙе йәлләнем.

Жаннет. Ниндәй башбаштаҡлыҡ! Боже мой! Ни тип әйтергә лә белмәйем.

Әхмәтша. Әйтмә лә. Бәлки, яманлыҡтан тыуған яҡшылыҡтыр был. Ҡәнзәфәр менән Ҡорбанбикә — ни тиһәң дә, үҙ кешеләр. Уларҙан һүҙ сыҡмаҫ.

Жаннет. Валлаһи! Әллә ниндәй кошмар был. Зиһенем етмәй.

Әхмәтша. Кошмары ла үтер. Быңдайҙарҙы ғына кисермәнек түгел, кисерҙек. Ә килмәгән ҡунаҡтарға берәй төрлө аңлатырбыҙ.

Жаннет. Нимә тип? Алдашыпмы?

Әхмәтша. Алдашмай ҙа була. Аңлатмай ҙа ҡуяһың. *(Йәнләнеп китә.)* Ниңә һуң әле беҙ һәр кем алдында аҡланып, һәр аҙымыбыҙ өсөн хисап биреп йәшәйбеҙ? Ниңә беҙҙе бөтәһе лә хөкөм итергә генә тора? Хатта үҙ улыбыҙ... Мин быға ҡаршы баш күтәрәм. Был — беҙҙең төйәк, беҙҙең мәмерйә, беҙҙең усаҡ. Үҙ мәмерйәләрендә хөкөм һөрһөндәр, үҙ усаҡтарында ҡыҙынһындар, үҙ гонаһтарын белһендәр, үҙ бысраҡтарынан таҙарынһындар.

Жаннет. Ярһыма, Әхмәтша, йөрәгеңде онотма.

Әхмәтша. Онотам. Шул йөрәкте һаҡлай торғас, йөрәкһеҙгә, меҫкенгә әйләнеп бөттөм дә.

Алпамыша. Атай, зинһар...

Әхмәтша. «Зинһар»лашып тормайыҡ. Кәләш килтереп, шәп эшләгәнһең. Бик ваҡытлы. Бында әсәйең, мин, һин — өсәүбеҙ. Бар, Зарзарияны саҡыр. Дүртәүләп бер табынға ултырайыҡ. Беҙҙең ризыҡ — ошонда. Күп тә үтмәҫ, бынау балаҫ өҫтөндә, тып-тып баҫып, тумалаҡ ҡына сабыйыбыҙ йөрөр. Унан тағы, тағы. Һинең менән,

Жаннет, беҙҙең себешебеҙ янғыҙ үҫте. Алпамышаныҡы итәк тулы булыр, малайҙар, ҡыҙҙар... Береһе минең алдыма менеп ултырыр, икенсеһе муйыныма аҫылыныр, өсөнсөһө салғыйыма йәбешер. Үҙҙәре: «Ҡартатай, ҡартатай, ҡартатай», — тип ҡарҡылдашырҙар.

Ж а н н е т. Ҡасан килде был хыял һиңә?

Ә х м ә т ш а. Күптән инде. Ошолай хыялланып, төндәр буйы йоҡоһоҙ сыға торғайным. Шөкөр, был көндө лә күрҙек. Күрәсәкбеҙ. Киленде килтер табынға. Ҡысҡырып фатихамды бирәм... Килен!

Ж а н н е т. Ҡабул итһә ярай ҙа...

Ә х м ә т ш а. Итер. Фатихаһыҙ йәшәп булмай. Тағы ла ышаныслыраҡ булһын өсөн, иртәгә үк ЗАГС-ҡа марш! Ғаилә — ул бер кәрәҙ, ил терәге.

А л п а м ы ш а. Баш әйләнерлек вираждар көнө бөгөн. Бер өҫкә һикерәбеҙ, бер аҫҡа тәгәрәйбеҙ, бер уңға тайпылабыҙ, бер һулға һуғылабыҙ. Тоҡанабыҙ, һүнәбеҙ, ғәйепләйбеҙ, ярлыҡайбыҙ. Бөтәһен дә бер юлы эшләйбеҙ. Шаҡ ҡатырлыҡ. Хатта атайым батырайып китте.

Ә х м ә т ш а. Батыраймай сарам юҡ. Әмерҙе үтә. Киленде саҡыр. Килен!

Ут һүнә. Алыҫ бер мөйөшкә генә яҡтылыҡ төшә. Шул мөйөштә Зарзария менән Мотаһар.

З а р з а р и я. Мин, ауырға ҡалдым, тигәс тә, һин мине срочно Алпамыша менән таныштырҙың. Ниңә шулай иттең, Мотаһарчик? Мине ташлар өсөнмө ни?

М о т а һ а р. Нишләп ташлайым, ти. Ташлаһам, әле эргәңдә булыр инемме ни?

З а р з а р и я. Не честно.

М о т а һ а р. Нимәһе «не честно»?

З а р з а р и я. Бөтәһе лә, бөтәһе лә, бөтәһе лә.

М о т а һ а р. Шаулама. Ул бит үҙе һиңә сат йәбеште.

З а р з а р и я. Йәбешмәне, һин йәбештерҙең уны.

М о т а һ а р. Йәбештерһә, насар егетме ни?

З а р з а р и я. Ул тәүҙә миңә оҡшаны ла. Үҙе сибәр, үҙе ҡайнар ҡанлы.

М о т а һ а р. Һуң, һиңә тағы нимә кәрәк?

З а р з а р и я. Һин кәрәк. Һине бөгөн ҡабаттан ярата башланым.

Мотаһар. Йүләр һүҙ һөйләйһең, Зарочка аҡыллым. Һиңә бит ир кәрәк. Ирең кем булһа ла барыбер түгелме ни? *(Зарзарияның ҡорһағына ымлай.)*

Зарзария. Түгел, түгел, түгел.

Мотаһар. Шаулама.

Зарзария. Яратыр булһаң, шауламайым.

Мотаһар. Яратам.

Зарзария. Яратҡас, мине Алпашҡа атҡарма.

Мотаһар. Кейәүгә сығыу, күҙ буяу ғына ул, Зарочка. Беҙҙең заман өсөн, торғаны бер формальность. Һин барыбер минеке булып ҡалырһың.

Зарзария *(ҡорһағына күрһәтә)*. Ә был? Был кемдеке?

Мотаһар. Һинеке. Уныҡы. Алты ай ғына тип, үҙе хәбәр һалды бит. Йәнәһе, унан башҡаның бында ҡатнашы юҡ. *(Зарзарияның ҡорһағына ымлап.)* Шулай ти бит. «Ҡатнашың юҡ», ти.

Зарзария. Не честно. Һигеҙенсе ай. Анау әбей дөрөҫ әйтте.

Мотаһар. Нимәһе честно, нимәһе не честно икәнен һин бит белеп бөтөрмәйһең, күгәрсенем. Белергә лә кәрәкмәй. Йәшә, рәхәт сик. Ҙур-ҙур өс бүлмә, оло кухня, йыһаз етерлек. Ата-әсәһе аҡса таба. Ирең сәбәпһеҙ эсмәй, тартмай. Һиңә тағы нимә кәрәк?

Зарзария. Һин кәрәк.

Мотаһар. Минең өйөм ҡыҫыҡ, ҡотһоҙ, әсәйем усал, атайым — эскесе, туғандарым тәртипһеҙ, үҙем аҡсаһыҙ.

Зарзария. Аҡсаһыҙ булһаң да, һин кәрәк миңә! Ҡалдырма мине бында. Һин ҡалдырһаң, үҙем ҡасып китәм. Мин һине яратам. Алып кит мине?

Мотаһар. Зарочка, аҡыллым, күгәрсенем, йәнем, һин үҙең риза булып килдең бит.

Зарзария. Риза инем, хәҙер түгел. Алып кит мине, Мотаһарчик.

Мотаһар. Ҡана, үҙеңде һөйәйем, яратайым, үбәйем. Шунан һин яңынан риза булырһың.

Зарзария. Һөй, ярат, үп. Тик бөтөнләйгә ташлама мине.

Мотаһар. Ташламам. Кил.

Зарзария. Валлаһимы? Честное слово?

Мотаһар. Валлаһи. Честное слово.

Зарзария. Ә ул һуң?

Мотаһар. Ул һинең ирең булыр. Кил.

Зарзарияны ҡосағына ала. Бүлмәлә ут тоҡана. Септә эргәһендә Алпамыша баҫып тора.

Зарзария. Алпашчик?! Ҡайҙан килеп сыҡтың һин? Мин ҡапыл ҡурҡып киттем.

Алпамыша *(тыныс)*. Күктән төштөм, Зарочка. Мин бит фәрештә. Ангел. Ошолай ҡанат елпеп төштөм. Һеҙ ҙә — фәрештәләр. Ана, ҡанаттарығыҙ бер-берегеҙгә нисек һарылған.

Мотаһар. Мин Зарочканы йыуаттым. Ҡайтам тип көйһөҙләнә. Һин юҡта, уға күңелһеҙ булып китте.

Алпамыша. Йыуанамы һуң?

Мотаһар. Күңелен күрә белгәс, йыуана инде.

Алпамыша. Күптән күрәһеңме... күңелен?

Мотаһар. Быны әле генә, яңы ғына күрә башлағайным.

Алпамыша. Универсальный кейәү егете һин, әй. Мерси боку. Выручаешь. Ярҙам ҡулыңды һуҙаһың. *(Зарзарияға.)* Ә һин шул арала бойоҡтоң дамы?

Зарзария. Эйе, ҡараңғы ине бит. Ҡараңғыла мин гел бойоғам, Алпашчик.

Алпамыша. Бынан ары бойоҡмаҫһың. Уйнап-көлөп кенә йәшәрһең, ҡош кеүек талпынып ҡына... Йөгөңдө күтәрә алһаң, конечно.

Мотаһар. Әллә нисек ҡырын-мырын һөйләшәһең, Алпаш, әллә көнләштең инде? Йүләр һин. Мин бит уны һеңлем урынына күреп кенә ҡосаҡланым.

Алпамыша. Аллах упаси! Нишләп көнләшәйем, ти. Уҡаһы уңмаған, зоотехниктар әйтмешләй, живой весы кәмемәгән.

Мотаһар. Бына быныһы ир һүҙе. Бөтһөн шунда. Ваҡтөйәкте оҙаҡ сәйнәү беҙҙең кеүек уҙамандарға килешмәй.

Зарзария. Живой вес тип, тупаҫ һүҙ әйттең, Алпаш. Мин үпкәләйем.

Алпамыша. Пардон, пардон...

Мотаһар. Ысынлап та, быныһы тупаҫыраҡ яңғыраны, дуҫым. Ул бит мөгөҙлө мал түгел, һинең кәләшең.

Алпамыша. Уныһы дөрөҫ. Мөгөҙлө мал да ул түгел — мин. Мин — үҙем мөгөҙлө мал. *(Түбәтәйен һыйпай.)* Бына ҡулға һиҙелеп тора.

Мотаһар. Төптө бушты һөйләгән кешегә минең атайым: «Ҡуй, мөгөҙ сығарма», — ти. Атайым минең иҫерек булһа ла, тапҡыр һүҙле.

Алпамыша. Уйын бөттө. Бына нимә, фәрештәләр, мин ғүмеремдә ике тапҡыр шымсылыҡ иттем. Тәүгеһе күптән. Икенсеһе – бына хәҙер. Ерәнгес эш, шаҡшы эш, тфү! Ошо ерҙә тороп, мин һеҙҙең диалогты, ике фәрештәнең сөкөрләшеүен тыңланым. Баштан-аяҡ, һүҙмә-һүҙ. Ҡабатлайыммы?

Зарзария. Улай тыңлау не честно. Ҡабатлама.

Мотаһар. Ә беҙ бер һүҙ ҙә һөйләшмәнек. Һин иҫерек бит. Төшөңдә күргәнһеңдер.

Алпамыша. Өнөммө-төшөммө, һин подлец! Хыянатсы һин!

Мотаһар. Самалабыраҡ ас ауыҙыңды, бешеп етмәгән Алпамыша батыр.

Алпамыша. Һин – Иуда. Иуданың да күҙҙәре ошолай майлы булғандыр, моғайын.

Мотаһар. Мин Иуда булһам, һин – Иисус Христосҡа сығаһың инде. Һөйләп китһәң, Зарзария ла, бәлки, беҙҙең уртаҡ Зарка түгелдер, ел ҡағылыуҙан ауырға ҡалған Мәрйәм-анабыҙҙыр. Изгеләрҙән-изге заттыр. Ҡарынында ул, бәлки, яңы бер пәйғәмбәрҙе йөрөтәлер.

Алпамыша. Хәшәрәт һин. Пошляк һин. Исемеңде әйтеү ерәнгес.

Мотаһар. Һинең ишең, һинең дуҫың мин. Һин ниндәй, мин шундай, икебеҙ ҙә – мөгөҙлө.

Зарзария. Шаулашмағыҙ, юғиһә мин борсолам. Врач миңә борсолмаҫҡа ҡушты.

Мотаһар *(Зарзарияға)*. Борсолорға урын да юҡ. Һин үҙ өйөңдәһең. Эргәңдә – ирең, бәлә-ҡазанан ҡурсалаусың бар. Исеме генә лә ниндәй ғәйрәт сәсеп тора: Ал-па-мы-ша! Тик Хоҙай үҙенә рәтле аҡыл ғына бирмәгән. Бирмәй, бәлки, дөрөҫ эшләгәндер.

Алпамыша. Етер, ҡәбәхәт!

Мотаһар *(тыныс)*. Етер шул. Ярай, мин «кейәү егете» тигән вазифаны үтәнем. Өсөнсөбөҙ артыҡ. Бынан ары арағыҙға кермәм. Бәхеткә сумып йәшәгеҙ. Мине көнләштереп...

Зарзария. Мотаһар...

Алпамыша. Ҡыҫылма, һөйләп бөтөрһөн.

Мотаһар. Төптән уйлағанда, мин көнләшеү генә түгел, ыҙғышырға, талашырға, ҡан ҡойошорға тейешмен. Сөнки бынан алты ай элек һин минең һөйгән йәремде тартып алдың. Һин – уғры. Йәш кенә баланың башын бутаның, күңелен аҙҙырҙың. Мин даулашманым, дуҫлыҡ

хаҡына сыҙаным. Йомартлыҡ күрһәттем. Хәҙер китәм. Мавр, йәғни Мотаһар үҙ эшен башҡарҙы. Мотаһар, йәғни Мавр бынан шыла. Уны перестройка саҡыра.

Алпамыша. Туҡта әле, мөгөҙҙәш бажа. Шылмай тор.

Мотаһар. Нишләмәксе булаһың?

Алпамыша. Белмәйем әле. Минең хәлгә ҡалған әҙәм нишләргә тейеш икән? Борон заманда һинең кеүек подлецты, моғайын, ҡылыс менән тураҡлап ташлағандарҙыр. Һуңыраҡ уйнашсыларҙың икеһен бер мылтыҡтан атҡандарҙыр. Унан да һуңыраҡ минең ише алданған хайуан үҙен үҙе асҡандыр. Бына уйлап торам: өс способтың ҡайһыһын ҡулланырға? Киҫергәме, атырғамы, әллә аҫылынырғамы? Аҫылыныу отменяется. Бер хайуан да үҙ-үҙенә ҡул һалмай. Тимәк, атырға, йә тураҡлап ташларға.

Мотаһар *(септәгә күрһәтә)*. Бында һинең целый ҡорал арсеналы. Ана һапһыҙ ҡылыс, керешһеҙ йәйә, серек арҡан. Бөтәһе лә үҙ ҡулыңда, көҙгө әтәс. Сап, ат, өҫтәүенә, аҫылын.

Зарзария. Атма, Алпашчик, мин ҡурҡам.

Алпамыша. Сапмайым да, атмайым да. Мин... Мин һеҙҙе мыҫҡыллап, һеҙҙе сүпкә сығарып, шарҡылдап көләм. Ха-ха-ха! Ха-ха-ха! Мин һеҙҙән, көлөп, үс алам. Ха-ха-ха! Мавр түгел һин, Мотаһар. Хужа Насретдин һин. Ул да бит ҡыҙын: «Үҙе ҡыҙ, үҙе быуаҙ»,— тип маҡтай-маҡтай димләгән. «Кәләш түгел, хазина!» — тигән. Ха-ха-ха! Һин дә миңә «хазина» һонмаҡсы иткәйнеңме? Бар, хазинаңды алып шыл. Һиңә, Зарзария, нәфрәтләнә лә алмайым. Бары ҡыҙғанам. Бешмәгән ҡамыр булып сыҡтың һин. Кисер, һин алдаһың, мин алдандым... Бәлки, икебеҙгә лә һабаҡ булыр.

Мотаһар. Ниндәй үҙәк өҙгөс наҙлы һүҙҙәр, ниндәй изге теләктәр, ниндәй тәрән үкенеүҙәр. Күңелдәрең тулырлыҡ тамаша. Ултыр ҙа ила.

Зарзария. Юҡ, Мотаһарчик, һин илап тормаҫһың. Һинең йөрәгең туң икән. Бына әле генә һалҡыны килеп бәрелде. Өшөп киттем. *(Шәлен иләп ябына.)*

Алпамыша *(Мотаһарға)*. Юғал күҙемдән, Мавр! Тиреҥ генә аҡ һинең, эсең ҡара ҡором. *(Пауза.)* Во-о-он!

Мотаһар *(ҡапыл ишеккә борола. Тыныс)*. Тимәк, киске табын тамам. Ғәйеп итеп ҡалмағыҙ. Хушығыҙ! Гуд бай! *(Китә.)*

Зарзария. Ә мин?

Алпамыша. Һин дә юлыңда бул.

Зарзария. Мин бит юлдан яҙҙым, Алпамыш. Икәүләп юлдан яҙҙырҙығыҙ. Шулай ҙа мин аңлай башланым. Миңә теләһә ниндәй ир кәрәкмәй. Муйыныңа асылынмам. Тик хушлашҡым ғына килә. Тәүҙә бит мин һине ныҒытып яраттым.

Алпамыша. Ә хәҙер?

Зарзария. Хәҙер барыбер бит, һорашма, кәрәкмәй. Минең дә йәнем бар. Ошо тиклем кәмһетергә ярамай уны. Һин бит бөгөн бында мине атайың менән әсәйеңә ҮС итеп килтергәйнең. Шуны белгәс, мин рәнйенем. Әле лә рәнйейем. Ләкин ҡәһәрләмәйем. Бәхетле бул. Һин миңә бик күп шатлыҡлы минуттар бирҙең. Рәхмәт.

Алпамыша. Аңламайым. Һин шул уҡ Зарзариямы?

Зарзария. Шул да, бүтән дә. Һин бит минең ипле күндәм холоҡомдан башҡа бер нәмәгә лә иғтибар итмәнең. Алты ай буйы бары ҡурсаҡ урынына уйнаттың. Ярай, аҙағы һәйбәт, дөрөҫ бөттө...

Алпамыша. Ошо һәйбәт буламы? Ошо дөрөҫмө?

Зарзария. Бик һәйбәт. Мин ғүмерлек ялғандан ҡотолдом, Алпамыша. Һине лә ҡотҡарҙым. Бынан ары йөгөмдө лә еңелерәк күтәрермен һымаҡ. Әлегәсә бик ауыр ине.

Алпамыша. Был һинме, Зара?!

Зарзария. Мин — Зарзария! Хуш, һау бул!

Китә. Тышта ҡараңғыла тауышы ишетелә.

Зарзария. Әсәй! Мин аҙашҡайным, юлдан яҙғайным. Хәҙер табылдым мин, әсәйем! Мин табылдым!

Алпамыша ишеккә ынтыла. Ҡапыл туҡтала.

Алпамыша. Һин табылдың, ә мин юғалдым. Етмәһә, көлгән булам. Йәнәһе, Зарзарияны көлөп хөкөм итәм. Ха-ха-ха. Үҙемдең эсем тулы әшәкелек, сүп-сар. Тормоштоң тутығып бөткән баҡыр тәңкәләре эсемдә... Егерме өс йыл буйы күпме йыйылған улар. Күкрәк ҡапҡасым ҡыҫыла. Ох! *(Таш бесәйҙе ала, һелкетә.)* Шылтырамай. Һин дә үңәсеңә саҡлы тулғанһың икән. Һиңә нимә? Алып, иҙәнгә бәрҙеңме, селпәрәмә килеп, баҡырҙарың ҡойоласаҡ. Бына шулай! *(Иҙәнгә бәрә, ватылмай.)* О, һин ниндәй ныҡлыһың, сыҙамлыһың, таш бесәй. Молодец! Сопромат! *(Тағы ала, атып бәрә, таш*

бесәй һикереп ҡуя, ватылмай.) Шайтан алғыры! Минең менән алышҡа сыҡтыңмы? Кем — кемдеме? Мә һиңә! *(Тибеп ебәрә, ватылмай. Шүрлектәге нәмәләргә.)* Ә һеҙ ярыҡ көршәк, моронһоҙ ҡомған, төпһөҙ иләк, һапһыҙ айбалта! Ниңә ауыҙ йыраһығыҙ? Бөгөн һеҙгә нимә кәрәк бында? Барығыҙ үҙ заманығыҙға китегеҙ. Барығыҙ! Барығыҙ! *(Берәм-берәм алып ырғыта.)*

Әхмәтша сыға. Һүҙһеҙ баҫып тора.

Алпамыша. «Беҙ ҡиммәтле нәмәләр, беҙҙе йыйып, атайығыҙ ҙур эштәр башҡара!» — тип, мине бала саҡтан алдап килдегеҙ. Ялғансылар һеҙ! Ә-ә, септә?! Атай-олатайҙарҙан ҡалған ҡомартҡы септә! Иҫке септә! Һинең артыңа боҫоп бит атайым, дөрөҫлөктән ҡасып, ялғанлыҡҡа күнеп йәшәне. Ишектән ҡояш килеп ингәндә, ай тәҙрәнән сығып юғалды. Өйҙә бер дөрөҫлөк, урамда — икенсеһе. Ә һин, септә, бәләкәс сағымда мине гел шомда тоттоң. Хатта һинең эргәңдән үтергә ҡурҡа инем. Уғың ҡаҙалыр, ҡылысың сабыр, хәнйәрең сәнсер кеүек ине. Ә бөгөн, уларға ымлап, йәмшек танаулы иблис Мотаһар мине мәсхәрәләне. Предатель! Күпте күргән септә! Күрәсәгеңде күреп бөтөрҙөң. Урыңды бушатырға ваҡыт етте! Долой!

Әхмәтша. Нимә эшләтәһең?

Алпамыша. Һыпырып төшөрәм. Ҡыйратам!

Әхмәтша. Туҡта! Теймә! Үҙем! Үҙем тартып төшөрәм! *(Тарта. Септә ысҡынып төшә. Тимер-томор шалтырай.)* Бына шулай! Күптән тейеш ине. Ҡул бармай торҙо.

Алпамыша. Нишләп былай, ҡапыл ғына, атай?

Әхмәтша. Биҙҙем. Һин дөрөҫ әйтәһең. Үҙемә айырым мәмерйәме, ҡыуышмы ҡороп, йәшәргә маташҡайным. Йәнәһе, минең үҙ донъям, үҙ мөхитем бар. Анау биш йыл эсендә йыуаныс та тапҡандай булдым. Хәҙер биҙҙем. Минең өсөн иҫке-моҫҡо улар. Бөгөн — иман килтереү көнө. Әйтеремде әйтеп бөтөрәйем.

Алпамыша. Ихтыярыңда, атай.

Әхмәтша. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уларға бер ваҡытта ла мөкиббән китмәнем. Күҙ буяп, ғалим-ғөләмәгә оҡшарға тырыштым. Имештер, ҡиммәтле табыштар тапҡанмын, ғилми асыштар яһағанмын. Ниндәй ғалим булайым, ти, мин? Кеше яҙғанды, начальник раҫлағанды

һөйләп йөрөүсе лектор, көрәгендә ҡараны аҡҡа, аҡты ҡараға дүндереүсе тел бисҭәһе. «Ғилем таратыу» йәмғиәтенең өлкән йомошсоһомон, улым. Шуның арҡаһында атҡаҙанған миҙалы, фән эшмәкәре. Бына нисек ялтырай миҙалым. *(Түшенә ымлай.)*

Алпамыша. Ҡалай ярһып, тоҡанып киттең...

Әхмәтша. Бер килеп тоҡаныу ҙа кәрәк. Тоҡанмай, иман килтереп булмай.

Алпамыша. Мин ярһып баҫылдым. Нәҡ ошо минутта мине тыныслыҡ солғап алды. Мин буп-буш. Хатта еңел, рәхәт. Рухымда ялғанлыҡ тулы таш бесәй йәшәй ине. Беҙҙең анау копилка төҫлө. Һинең үкенеү һүҙҙәреңдән һуң, ул селпәрәмә килде, эсендәгеһе сәсрәп таралды. Мин хәҙер буш бесәйгә яңы хазина йыйырға тейешмен.

Әхмәтша. Минең тәүбәмдән генә ватылмаҫ һин әйткән таш бесәй. Ул төптө таш түгел, ҡатырға. Бәләбәй яғында, сыуаш ауылында русса лекция уҡыған өсөн бүләк итеп биргәйнеләр миңә уны. Иҫтәлек ул. Ситкәрәк киттем, буғай. Әйткәнемсә, кеше тәүбәһе генә кешене аҡылға ултыртмай. Моғайын, үҙеңә лә бер-бер төрлө дауыл ҡағылып үткәндер.

Алпамыша. Эйе, үтте, буғай.

Әхмәтша. Һәйбәт. Бәләкәс кенә ел дә, өрөп, япраҡтарҙы саңдан таҙарта. Әҙәм — япраҡ кеүек ул, туҙанланырға ғына тора. Ел-дауылһыҙ, ут-ялҡынһыҙ таҙарынып булмай.

Алпамыша. Атай, һин хәтәр философ икәнһең дә. Прямо Аристотель. Все течет. Все меняется.

Әхмәтша. Атайыңдан көлмә. Уның да үҙгәреүе ихтимал.

Алпамыша. Көлмәйем. Аптырайым. Ғәжәпләнәм. Яңы танышҡан шикелле.

Әхмәтша. Үҙем дә ғәжәпләнәм. Гүйә ки, мине кемдер алмаштырып китте. Һинең бөгөнгө ҡылыҡтарың төрлө-төрлө уйҙарға һалды. Тәүҙә һине генә ғәйепләнем. Тора-бара һынай биреп, үҙемә әйләнеп ҡараным. Төрлө яҡлап. Аҡыл тупланым. Оло төп әрем бәләкәс кенә әрем орлоғонан яралып үҫә. Юҡ, һин үҙең әрем түгел. Әрнеүҙәрең әрем. Шуларҙың орлоғон уйланым.

Асыҡ тәҙрәнән гитара тауышы, баяғы йыр әкренләп инә. Был юлы ул моңло, матур яңғырай. Бүтән кешеләр йырлап үтте булыр.

Һин — йылға. Мин — һинең
Ҡамышың, ҡамышың.
Мин дә тик бер хыял:
Ҡауышыу, ҡауышыу.
Төн китһен, таң атһын.
Һандуғас һайраһын,
Йырҙарҙың матурын
Тик һиңә һайлаһын.

Шымып тыңлайҙар. Һәр ҡайһыһы үҙ уйын уйлай.

Алпамыша. Атай, тураһын ғына әйт әле: әсәйҙе һин яратаһыңмы?

Әхмәтша *(өҙөп-өҙөп әйтә)*. Яраттым. Яратам. Яратасаҡмын.

Алпамыша. Ә теге биш йыл һуң? Оҙон биш йыл нисек үтте, нисек бөттө?

Әхмәтша. Кисерҙем. Түҙҙем. Өмөт иттем. Ҡәҙерле кешемдең йәне-тәне миңә кире ҡайтҡас, бөтәһен дә оноттом. Ғәфүләшеп тә торманыҡ. Беҙ яңынан ҡауыштыҡ. Беҙгә яңы бәхет килде.

Алпамыша. Ниндәйҙер абсурд был. Етмәһә, шул уҡ Ғаяз Баязович — һеҙҙең иң ҡәҙерле ҡунағығыҙ.

Әхмәтша. Ул, өйләнеп, тормош көтә башлағас, Гөлдәр менән икеһе лә беҙгә ылыҡтылар. Дуҫлаштыҡ. Һәйбәт, ягымлы кешеләр. Ғаяз Баязович үҙ тарихын буласаҡ ҡатынына алдан уҡ һөйләп биргән. Тегеһе ҡабул ҡылған.

Алпамыша. Көнләшеү, намыҫ, ғорурлыҡ тигән нәмәләр бөтөнләй юҡмы ни ул?

Әхмәтша. Ниңә булмаһын? Бар. Әммә ныҡ яратҡан кешеңдең үткәнен гел тикшереп, битәрләп тороу ирлек түгел. Өҙөр булғас — ялғама, сисер булғас — төйнәмә. Быны мин түгел, боронғолар әйткән.

Алпамыша. Шулай ҙа...

Әхмәтша. Нимә «шулай ҙа»?

Алпамыша. Шулай ҙа странно. Сәйер. *(Уйланып.)* Бәлки, бик үк сәйер ҙә түгелдер.

Әхмәтша. Ййы сыҡҡас, һорайым әле. Үҙең һуң Зарзарияны яратып алдыңмы?

Алпамыша. Әллә инде. Белмәйем.

Әхмәтша. Һин икеле-микеле һөйләмә. Өҙөп әйт. Ул — һинең ғүмерлек йәмәғәтең.

Алпамыша. Тәүҙә яраттым. Унан һыуындым, Хәҙер тағы яратам. Нык яратам.

Әхмәтша. Хәҙергеһе ҡиммәт. Хәҙергеһе. Бер болғанмай, һыу ҙа тонмай, тип, йырҙа ла йырлайҙар. Тоноуы хәйерле.

Алпамыша. Атай кеше, ни...

Әхмәтша. Хәҙергеһе важно. Йәннәт! Ҡорбанбикә! Ҡәнзәфәр! Сығығыҙ. Ана таң ата. Алтаулап ысын туй табынына ултырырға самай ваҡыт. Килен ҡайҙа?

Алпамыша. Килен китте.

Әхмәтша. Ҡайҙа китте?

Алпамыша. Бөтөнләйгә китте.

Әхмәтша. Хәтерен ҡалдырғанһыңдыр һин, йүнһеҙ, алабарман. Ошондай кәләште ебәрәләр тиме? Буласаҡ ейәнебеҙҙе лә алып киттеме?

Алпамыша *(көлә)*. Бик үтенеп һорағайным да, ҡалдырманы шул.

Әхмәтша. Ебегән! Яратҡан бисәңә сат йәбешергә кәрәк! Ысҡындырырға һис ярамай уны. Тоҡомона — Артыҡовтарға тартмағанһың һин, Алпамыша. Их, һин! Мине алдатып ҡына ҡалдырҙың. Ымһындырҙың мине. Тып-тып баҫып йөрөр ейәндәремдән мәхрүм иттең. Көмөш туйы суҡынып китһен. *(Әсенеп.)* Бынһы үкенесле. Жаннет! Ҡорбанбикә! Ҡәнзәфәр! Йоҡлағыҙ. Кәләш ташлап китеү сәбәпле, туй табыны булмай. Йоҡлағыҙ... Бөгөн хатта зиһенем таралып китте. Бөтәһе лә бер башҡа төшә бит. Ошо башҡа. Былай уҡ та ымһынған юҡ ине. *(Түбәнән тотоп сыға.)*

Алпамыша. Нимә булды әле бөгөн? Нимә ҡыйратып, нимә төҙәттем мин? Эсемдәге таш бесәйҙе емерҙем. Еңеләйеп ҡалдым. *(Иҙәндәге бесәйҙе ала.)* Ә һин бирешмәнең. Сөнки һинең йәнең юҡ, хәйер йыя торған тәләнсе копилка. Ваҡ бизнесмен. Урыныңда ят. *(Иҙәнгә ташлай.)*

Асыҡ тәҙрәнән Зарзарияның тауышы ишетелә.

Зарзария. Алпамыша! Оҙат мине, Алпамыша! Бер яңғыҙым ҡурҡам.

Алпамыша *(һағая)*. Кем саҡыра мине?

Зарзария. Тик оҙатып ҡына ҡуй. Үткәндәр хаҡына.

Алпамыша. Уның тауышы. *(Ишеккә ташлана.)*

Ут һүнә. Яҡтырған. Ҡәнзәфәр пәйҙә була.
Бүлмәгә күҙ йөрөтөп сыға.

Ҡәнзәфәр. Бында арыу ғына ҡыйралыш булған икән. Әхмәтшаның септә һарайы тар-мар ителгән, хазиналары пыран-заран килгән. Алпамыша батыр яуы үткәндер, ахырыһы. *(Ҡомартҡыларҙы берәм-берәм тотоп ҡарай.)* Көршәктәр ярылған, табаҡтар тишелгән, айбалта ҡалтайған, ҡомған йәмшәйгән, ҡылыс тутыҡҡан, еҙ ҡурай иҙелгән. Быларҙың бөтәһен дә ваҡыт вата, емерә, иҙә, ҡалтайта ала. Алпамыша ишеләр тапап та ташлай. Батша һарайҙарының, таш диуарҙарҙың, хатта ғибәҙәтханаларҙың көлөн күккә осоралар. Ә ыуалырға ғына торған ошо ҡыу ҡурайҙы *(итек ҡуңысынан ҡурай ала)* һис кем һындыра ла, иҙә лә, яндыра алмай. Ни өсөн тиһеңме? Сөнки, тим, уның эсендә мәңгелек моң, мәңгелек йән бар. Әхмәтша менән Йәннәттең көмөш туйында, күкрәк киреп, бер тартырмын, тип, ҡыҫтырып алғайным — булманы. Минең кеүек диуаналар туйҙан һуң да дөмбөр ҡағалар. Тәүәккәлләйем. Туйы ла, байрамы ла килер әле. Байрамһыҙ көн итеү килешмәй. Аллаға тапшырҙыҡ...

Иң һағышлы боронғо көйҙәрҙең береһен уйнай башлай. Тәүҙә талғын, унан ярһып, унан һыҡтауға хас моң ағыла. Утҡа ынтылған күбәләктәр шикелле, тәүҙә Ҡорбанбикә сығып баҫа, унан Жаннет сығып стенаға һөйәлә, уның артынан Әхмәтша пәйҙә була. Моң дауам итә. Иң һуңынан, тыштан инеп, Алпамыша менән Зарзария, икеһе ишектең ике яғына һөйәлә. Бер ҡосаҡ сәскә күтәреп Кәтмулла инә.

Кәтмулла. Алтын микән, көмөш микән
Был ыҙбаның тупһаһы...

Әле эшкә килгәс, тәҙрәгеҙҙән нур ҡатыш моң ағылғанын ишеттем дә: бәрәкалла, тим, быларҙың туйы таңғаса барған икән. Һай, афф-а-а-рин! Байрамығыҙ күңелле булған. Шәп булған. Шуның өсөн һәр берегеҙгә шәлкем-шәлкем сәскә тейешле. Быныһы һиңә, быныһы һиңә, быныһы һиңә... *(Бөтәһенә сәскә өләшеп сыға.)*

Ут һүнә.

1992

Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр

ӘТӘСТЕҢ БАШЫНАН ҮТКӘНДӘРЕ

Ҡурсаҡ театрҙары өсөн пьеса-әкиәт

ҠАТНАШАЛАР:

Көсөк
Әтәс
Ҡуңыҙ
Бесәй
Ҡаҙ
Өйрәк
Кәзә
Хужа ҡатын
Ялсы
Ҡаҙ бәпкәләре, тауыҡ себештәре

ПРОЛОГ

Көсөк скрипка уйнай, Әтәс бейей.

Көсөк. Скрипка ҡарағай,
Бер тартырға ярамай.

Әтәс. Ярамаһа ярамаҫ,
Уйын ҡорайыҡ, давай.

Көсөк. Таратығыҙ халыҡҡа –
Музыканттар белһендәр.

Әтәс. Биҙәнеп тә төҙәнеп,
Бейеүселәр килһендәр.
Олатайҙы үлемдән
Аҡылы ҡотҡарғанға

Бик күп йыл тулды бөгөн,
Уйнағыҙ байрам көйөн.

Артта музыка уйнайҙар.

Көсөк *(алға сығып)*.
Ҡарт әтәстең табышын,
Уның моңло тауышын
Беҙ уйнап күрһәтәбеҙ.
Уйын хәҙер башлана,
Ҡул сабыуҙы көтәбеҙ...

Шаршау

Беренсе күренеш

Ситән буйы. Әтәс тибенеп йөрөй, Көсөк уны ҡарап ята. Бесәй ситән башында төрлө яҡҡа ҡарап йырлап ултыра.

Бесәй *(таҡмаҡлай)*.
Турғай, турғай, ос, турғай,
Минең янға төш, турғай,
Эсем бора башланы –
Ашайһым килде буғай. Мияу, мияу.

Әтәс. Тибенеп сығарһам бер ем,
Бөгөн туйыныр инем.

Бесәй. Тибенәһең көн буйы,
Соҡонаһың туҡ та туҡ,
Ныҡлабыраҡ ҡараһам –
Бер ҡабырлыҡ емең юҡ.

Әтәс. Тырнаҡтарым һау әле,
Суҡышым төртһә – таш тишә.

Бесәй. Ә минең эш бик шәп бит:
Бер сысҡан тоттом кисә.
Бөгөн берәй сәпсекте
Ҡаптырыуымды теләә.
Буш итмәмен үҙеңде,
Өлөш бирермен һиңә.

Әтәс. Ҡуй, Бесәй дуҫ, юҡ эште,
Үҙең һоғон табышты.
(Әтәс Ҡуңыҙҙы соҡоп сығара.)

Ҡуңыҙ. Кем уятты йоҡомдан?
Кем емерҙе өйөмдө?
Яуап бирһен шул миңә,
Ҡатырмағыҙ мейемде!

Бесәй *(ситән башынан)*.
Эсем ҡатып көләмен,
Кемдәр бола күтәрә,
Ғәрлегемдән үләмен,
Хи-хи-хи-хи, ха-ха-ха!

Ҡуңыҙ. Ауыҙыңды йырма бик.
(Япраҡ аҫтына инеп юғала.)

Көсөк *(Бесәйгә)*.
Әй ошо ҡара ҡойроҡ
Әрләшеүҙән туҡтамаҫ!

Әтәс. Йә, талашмағыҙ юҡтан.
Бөгөн күңелем һиҙә,
Ҙур табыш булыр, ахыры.

Бесәй. «Әтәс төшөндә ярма», – ти,
Һөйләйһең һин дә, бахыр.

Әтәс *(тибенә)*.
Ҡаты нәмә һиҙелә...

Көсөк. Һөйәк-фәлән түгелме?

Бесәй. Серегән һөйәк өсөн
Аҙҙырма, дуҫ, күңелде.
Ә минең эш бик шәп бит...

Әтәс *(бүлдерә)*.
Был шәп нәмәгә оҡшай,
Үҙе ҙур төҫлө, һәләк!
Суҡышҡа ҡаты һиҙелә,
Бесәй, ҡарасы һәрмәп.

Бесәй. Бындайын бысраҡ эшкә
Минең тоҡом ҡул һалмаҫ,
Аҡтырнаҡтың эше шул,
Улар халҡы сирҡанмаҫ.

Көсөк. Юҡҡа һыртың ҡабартма,
Эсең буш бит, бисара.
Беҙҙең тоҡом тик ятмай,
Ашарға эшләп таба.

(Әтәс янына барып еҫкәп ҡарай.)

Әтәс. Нимә?

Көсөк. Белә алмайым.

Бесәй артҡа ятып көлә.
Йығылып төшә лә илай-илай өйгә инеп китә.

Ҡайҙа һуң Ҡуңыҙ батыр?
Әгәр ул инеп сыҡһа,
Был нәмәне тиҙ таныр.

Әтәс. Ул бит асыулы беҙгә
Емергән өсөн өйөн.

Көсөк. Саҡырып ҡына килтер,
Үҙем табырмын көйөн.

Әтәс. Эй, Ҡуңыҙ дуҫ, Ҡуңыҙ дуҫ,
Ниңә ҡурҡып ятаһың
Бер Бесәйгә ғәрләнеп?

Ҡуңыҙ *(күренә)*.
Кем саҡыра тағы ла?
Кәрәк булдым ни өсөн?
Мин алырмын Әтәстән
Йылы өйөмдөң үсен.

Көсөк. Ысын Ҡуңыҙ өй өсөн
Һис ҡасан да ваҡһынмаҫ,
Дуҫтары эш ҡушҡанда,
Ҡуңыҙ эштән тартынмаҫ.

Ҡуңыҙ. Нимә бар ул, ниндәй эш?

Әтәс. Һин ошо соҡорға төш.

Ҡуңыҙ. Ярай.

Төшөп китә, бер аҙҙан үрмәләп сыға.
Әтәс менән Көсөк эйелеп ҡарап торалар.

Унда яҡшы тирмән бар,
Тик соҡорҙоң ауыҙы тар.

Әтәс. Беҙҙең өсөн ҙур табыш,
Тик сығармағыҙ тауыш.

(Соҡорҙо ҡаҙый башлайҙар.)

Көсөк *(Ҡуңыҙға)*.
Йомош ҡушһа дуҫтары,
Ҡуңыҙ телгә һалынмаҫ,
Арабыҙҙа һинән дә
Тиҙ йөрөүсе табылмаҫ.
Саҡырып кил халыҡты,
Сығарайыҡ байлыҡты.

Ҡуңыҙ. Етеҙ минең ҡанатым,
Ел еткермәҫ аяғым,
Һәм бар үткер мөгөҙөм,
Үтәрмен дуҫтар һүҙен.
(Китә.)

Көсөк менән Әтәс соҡойҙар, ҡаҡшаталар, ҡысҡыралар: «Һай, һай».

Ҡаҙ *(килеп керә)*.
Нимә бар, ни йомош?

Әтәс. Һин беҙгә булыш.

Көсөк. Был соҡорҙа тирмән бар,
Тик соҡорҙоң ауыҙы тар.

Ҡаҙ соҡой башлай, Өйрәк пәйҙә була.

Өйрәк. Һаумыһығыҙ, ҡорҙаштар,
Ниңә ер тырнайһығыҙ,
Унда ниндәй табыш бар?

Көсөк. Был соҡорҙа ҙур байлыҡ,
Күп һөйләшеп тормайыҡ.

Өйрәк килеп ситтән тупраҡтарҙы таратып йөрөй, Ҡуңыҙ менән Кәзә килеп керә.

Кәзә. Ниндәй бәләгә тарының,
Ниңә хәлдән тайҙығыҙ?

Әтәс. Кәзә апай, ҙур шатлыҡ,
Бөтәбеҙ ҙә байының.

Көсөк *(Кәзәгә)*.
Ҡеүәтеңде йәлләмәсе,
Сығарышсы тирмәнде.
Әрәмгә ҡалдырмайыҡсы
Әтәс табып биргәнде.

Бөтәһе лә йыйылалар. Кәзә мөгөҙҙәренә эләктерә, ҡайһылары морондары, ҡайһылары ҡанаттары менән булышалар: «Һап-һап күтәрҙек, күтәрҙек тә сығарҙыҡ», — тип ҡысҡыралар. Тирмәнде сығарып ҡуялар. Әтәс тирмән өҫтөнә осоп менә, тирмән әйләнә башлай.

Әтәс (*ҡанаттарын елпеп*).
Оло байрам яһайыҡ,
Донъяға дан таралһын,
Беҙҙең исем балаларға
Әкиәт булып ҡалһын.

Көсөк (*тирмән өҫтөнә һикереп менә*).
Мул һый әҙерләйек беҙ,
Туйып ҡалһын бар халыҡ,
Уйын ойоштораййыҡ.
Ә һаран хужа ҡатын
Ҡарап торһон таң ҡалып.

Әтәс. Тирмән тартыр ярманы,
Йыйып торорбоҙ уны.

Өйрәк (*тирмән өҫтөнә һикереп менә*).
Көсөк беҙҙең бутҡаға
Тәмле ит табып бирһен,
Кәзә апай һәйбәтләп
Һөтөн һауып килтерһен.

Ҡаҙ (*тирмән өҫтөнә һикереп менә*).
Өйрәк менән беҙ икәү
Килтерербеҙ йомортҡа,
Ҡуңыҙ ҡанаты менән
Бутап бешерер бутҡа.

Бесәй, ҡойроғон бутап, юхаланып сыға.

Бесәй. Дуҫлығыбыҙ ныҡ булһын,
Табыштар уртаҡ булһын.

Көсөк, Әтәс.
Һеҙҙең тоҡом заттары
Беҙҙең менән ваҡһынмаҫ,
Эштән сирҡанған тоҡом
Беҙҙең менән дуҫ булмаҫ.

Бесәй (*асыуланып*).
Эй, йыйын ҡаҡ ҡабырға,

Нисек итеп мин һеҙҙән
Белермен үс алырға.

Һыртын ҡабартып китә, тирмән әйләнә, бөтәһе лә ҡул сабалар, Кәзә һаҡалын һелкетә.

Әтәс. Эй, себештәр, себештәр,
Һыйланырға килегеҙ!

Ҡаҙ. Эй, бәпкәләр, бәпкәләр,
Ҙур табынға инегеҙ!

Ҡаҙ бәпкәләре, тауыҡ себештәре килеп килә, бөтәһе лә тирмән өҫтөнә менеп баҫалар, тирмән әйләнә. Сәсрәп, ҡабаланып Хужа ҡатын, уның артынан Ялсы сыға.

Хужа ҡатын. Ниңә дау күтәрҙегеҙ,
Ниңә йыйын йыйҙығыҙ?
Мин йоҡлаған ваҡытта
Ниңә уйын ҡорҙоғоҙ?

Себештәр, бәпкәләр ҡурҡып ҡасалар.

Әтәс. Ғүмеребеҙҙә бер байрам.
Һыйын таптыҡ үҙебеҙ,
Беҙгә ҡамасауламағыҙ.
Майланмаһын күҙегеҙ!
Ҡурҡмағыҙ, ҡасмағыҙ,
Ҡомһоҙға юл асмағыҙ!

Хужа ҡатын *(асыуланып, ялсыһына)*.
Нимә ҡарап тораһың,
Асыҡ ауыҙ, туң тимер?
Ҡыуып ебәр шуларҙы,
Тирмәнде алып өйгә кер.
Бөтәһен дә сыбыҡла,
Шауламаһындар юҡҡа.

Ялсы, оҙон сыбыҡ алып, бөтәһен дә туҡмай. Әтәс ситән башына ҡуна, Ҡатын һәм уның артынан, тирмәнде алып, Ялсы инеп китә.

Әтәс. Беҙҙе туҡмау ҡурҡытмаҫ,
Татыу дуҫтар таралмаҫ,
Ҡомһоҙ хужа тирмәнде
Мәңге һаҡлап ҡала алмаҫ.

Эй, һаран бай, һаран бай,
Беҙҙең тирмәнде давай.

Хужа ҡатын *(артҡы пландан)*.
Эй уңмаған ялсы һин,
Шул Әтәсте тот та яп
Бер ҡараңғы келәткә,
Ишегенә эл йоҙаҡ.

Ялсы. Тыңлайым, хужабикәм,
Мин уны тонсоҡторам.
(Ялсы Әтәсте тотоп келәткә яба.)

Икенсе күренеш

Иртәнсәк. Көсөк, Ҡаҙ, Өйрәк, Ҡуңыҙ келәтте соҡойҙар.

Бөтәһе *(йыр)*.
Соҡойбоҙ, соҡойбоҙ,
Түгәбеҙ балсығын,
Беҙ тишкән соҡорҙан
Иреккә дуҫ сығыр.

Көсөк. Күп ҡалманы, Әтәс дуҫ,
Төнө буйы соҡоноҡ.

Ҡаҙ. Тиҙҙән көндө күрерһең,
Тышта йырлап йөрөрһөң.

Әтәс. Күҙҙәрем бер ни күрмәй,
Бигерәк тыным ҡыҫыла.

Көсөк. Түҙем кәрәк, түҙемлек, –
Тағы бер аҙға сыҙа.

Әтәс. Һинең янда кемдәр бар?

Ҡаҙ. Тоғро дуҫың Ҡаҙ булыр.

Өйрәк. Хыянатһыҙ Өйрәк был.

Ҡуңыҙ. Эш һөйөүсән Ҡуңыҙ мин.

Әтәс. Ә Кәзә апай ҡайҙа?
Ул көслөрәк, таҙараҡ.

Ҡуңыҙ. Тиҙҙән килеп етә ул,
Тал кимерә аҙыраҡ.

Соҡоуҙы дауам итәләр.

Кәзә *(инә)*.
Ниңә соҡоп маташырға,
Беҙҙең мөгөҙ һау саҡта?
Мин келәтте емерәм,
Таралығыҙ яҡ-яҡҡа.

Кәзә келәтте мөгөҙөнә элеп ырғыта. Әтәс осоп сыға.

Бөтәһе. Һай, һай, рәхмәт Кәзәгә,
Ҙур маҡтау Әтәс дусҡа,
Беҙҙең тоҡом юғалмаç,
Һалһа ла дошман утҡа.

Әтәс. Теҙелегеҙ сафтарға,
Хужа янына барабыҙ,
Ҡысҡырабыҙ, даулайбыҙ,
Шәп тирмәнде алабыҙ.

Иң алға Кәзә, уның артынан Көсөк, Ҡаҙ, Өйрәк, Ҡуңыҙ теҙелә.
Әтәс уларҙы хужаның тәҙрә төбөнә алып бара.

Кәзә *(йырлай)*.
Һаран хужа, сыҡ бында,
Килтер беҙҙең тирмәнде!
Ниңә талап алдың һин
Әтәс табып биргәнде!

Бөтәһе. Рәхимһеҙ хужа ҡатын,
Ашама кеше хаҡын.

Кәзә *(һүҙ менән)*.
Мин һиңә һөт бирмәмен.

Ҡаҙ. Мин бәпкә үçтермәмен.

Өйрәк. Мин бәпкә үрсетмәмен.

Көсөк. Өйөңдө һаҡлап ултырмам.

Хужа ҡатын *(өйҙән)*.
Ах, уңмаған ялсы һин,
Муйыныңң өҙөлһөн һинең,
Бер йүнле кеше булһаң,
Шуларҙы ҡыуыр инең.

Ялсы *(оҙон ҡолға күтәреп сыға)*.

Келәтте ватҡан улар,
Минең ни ғәйебем бар?

Бөтәһе *(йырлай)*.

Рәхимһеҙ хужа ҡатын,
Ашама кеше хаҡын!

Хужа ҡатын.

Ә шулаймы ни әле?
Ебәр бөтәһен туҡмап,
Ә тилергән Әтәсте
Боҙло мөгәрәпкә яп.

Ялсы бөтәһен дә туҡмап ебәрә, улар илай-илай китәләр. Әтәсте мөгәрәпкә яба ла өйгә инеп китә. Бер аҙ тынлыҡ.

Әтәс *(йырлай)*.

Хужа ҡатын, ҡараңғыла
Үлер был тип уйлама,
Тапҡыр Әтәс тонсоҡмаҫ,
Күп күргән ул донъяла.
Дуҫтар, дуҫтар, килегеҙ!
Ҡотҡарығыҙ мине һеҙ.

Ҡуңыҙ *(килә)*.

Туҡмау мине ҡурҡытмай,
Минең тирем бик ҡалын,
Эй, Әтәс дуҫ, Әтәс дуҫ,
Тиҙерәк әйт, нисек хәлең?

Әтәс. Зинһар өсөн ҡотҡарығыҙ,
Хәл насар, Ҡуңыҙ туған,
Күҙем күрмәй ҡараңғы,
Һалҡын: өшөйөм, туңам.

Ҡаҙ *(кереп килә)*.

Эш башларға тиҙерәк,
Мөгәрәпте соҡорға кәрәк.

Ҡуңыҙ менән эш башлайҙар. Өйрәк, Көсөк инәләр.

Көсөк. Күҙ асып, күҙ йомғансы
Мин Әтәскә юл асам.
Дуҫҡа ауырлыҡ килһә,
Ташламабыҙ һис ҡасан.

Көсөк соҡой, башҡалар балсыҡты ситкә ташыйҙар.
Кәзә менән Ҡаҙ пәйҙә була.

Кәзә. Ташламабыҙ иптәште,
Ҡотҡарырбыҙ юлдашты.
(Мөгөҙө менән ағастарҙы аҡтара.)

Көсөк. Яҡынаябыҙ инде.

Ҡуңыҙ. Һеҙ ебәрегеҙ мине,
Бәләкәй юл тишәйем,
Дуҫ янына төшәйем.

Көсөк. Тиҙерәк, Ҡуңыҙ дуҫҡай!

Ҡуңыҙ *(Әтәскә).*
Һиңә иптәшкә төшәм.
Дуҫтар соҡоп сығарыр.
(Юғала.)

Өйрәк. Хәҙер барып етәбеҙ,
Дуҫты азат итәбеҙ.

Ҡаҙ. Ә унан һуң бергәләп
Ял итергә китәбеҙ.

Кәзә. Әтәс туған, юл асыҡ,
Ҡанат елпеп осоп сыҡ.

Әтәс осоп сыға, уның артынан Ҡуңыҙ үрмәләй.

Әтәс. Рәхмәт һеҙгә, йән дуҫтар,
Ҡотҡарҙығыҙ үлемдән.
Дуҫтар булғас, һис берәү
Айыра алмаҫ көнөмдән.

Кәзә. Ысын дуҫтар ташламаҫ,
Дуҫ башын дуҫ ашамаҫ.

Көсөк. Әйҙә киттек хужаға,
Ҙур тауыш ҡуҙғатабыҙ.
Боларабыҙ, тулайбыҙ,
Тирмәнде алып ҡайтабыҙ.

Бөтәһе. Киттек — уңышлы юл,
Әтәс, һин башлыҡ бул!

Теҙеләләр. Әтәс алданыраҡ, ҡалғандары уның артынан бара. Хужаның ишек алдына килеп туҡтайҙар. Ҡайһы берҙәренең ҡулында таяҡ, ҡайһыһында — һепертке.

Ҡуңыҙ, Өйрәк, Ҡаҙ.
Беҙҙе туҡмап, һин, яуыз,
Тыныш ҡалмаҡ булдыңмы?

Әтәс. Мине ябып һалҡынға,
Туңыр был тип белдеңме?

Кәзә *(һаҡалын һелкетә)*.
Күпте күрҙе был һаҡал,
Күпте белде был аҡыл,
Башым иҫән-һау саҡта,
Ашатмам кеше хаҡын.

Бөтәһе лә *(йырлайҙар)*.
Яуыз ҡатын, бында сыҡ,
Ишегеңде ҡуй асыҡ,
Беҙ тирмәнде алабыҙ.
Өйөңә ут һалабыҙ,
Килтер беҙҙең ҡоралды!
Яндырабыҙ ҡураңды.

Хужа ҡатын *(сәсрәп, түҙып өйҙән сыға)*.
Таш тамаҡтар, туҡтағыҙ!
Алйот ялсы, һин ҡайҙа?
Бөтәһен дә бәйләп ҡуй,
Ҡарт Әтәсте тотоп һуй.
Булһам булырмын бирән,
Сейләй тотоп кимерәм!

Бөтәһе. Ай, ай, ай, булдыҡ харап,
Әтәс, ҡотолоу юлын тап.

Хужа ҡатын өйгә инеп китә.

Ялсы *(Әтәскә)*.
Мин үлтермәмен һине,
Тик һин үлгәнгә һалыш.
Үҙең ҡара ҡалғанын,
Сығара күрмә тауыш.

Ялсы Әтәсте алып китә, Хужа ҡатын үлән өҫтөндә ашъяулыҡ йәйеп, Әтәсте килтергәнде көтә. Ялсы урап килә.

Ялсы. Бына Әтәс, хужам, тот,
Сәйнәмәйсә ҡап та йот.

Хужа ҡатын.
Исмаһам, тамаҡ туйыр,
Тауышынан ҡолаҡ тыныр.

Әтәсте ҡабып йотоу өсөн ауыҙына килтерә һәм ауыҙын аса.

Әтәс. Эй, ҡомһоҙ хужа ҡатын,
Эсмә һин Әтәс ҡанын,
Тамағыңа тығылыр,
Байлығыңятҡа ҡалыр.

Ҡатындың асыҡ ауыҙына башын тығып, телен суҡып өҙә.

Хужа ҡатын.
Быҕы... быҕы... Баһ... баһ...
(Йығыла, Әтәс осоп китә.)

Әтәс. Бына ҡайҙа ҡыҙығы:
Әтәстән ғүмер ҡыҙғанды,
Үҙе теленән яҙҙы.
Дуҫтар, хужа тонсоҡто,
Әтәс ирекк ә сыҡты,
Йыйылығыҙ, килегеҙ,
Шатланығыҙ, бейегеҙ.

Бөтәһе лә йүгереп килә башлайҙар.

Ялсы *(һикерә)*.
Нимә кәрәк, алығыҙ,
Ысын дуҫ булып ҡалығыҙ!

Шаршау

1940

БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ

ӘСӘЙЕМ ҠАЙҘА КИТТЕ?

Һеҙҙең көндәлектәрҙә лә бик күп һәйбәт нәмәләр барҙыр әле. Уларҙы бөтә яҡшы кешеләргә һөйләп биргегеҙ ҙә килә торғандыр.

Минең көндәлемдә лә бар. Бына хәҙер шуларҙы һөйләй башлайым.

Ул ваҡытта һуғыш ине әле. Атайым бөтә егеттәр менән бергә фронтта фашистарҙы туҡмап йөрөй, ә әсәйем колхозда эшләй ине. Бер саҡ әсәйем, колхоз председателе Яҡуп ағайҙың артлы санаһын егеп, Тимертауҙағы өләсәйемде ҡунаҡҡа алып килде. Өләсәй бер кис ҡунғас та, әсәйем ҡайҙалыр китергә йыйына башланы. Мин беләм инде, кеше йыраҡҡа китмәҫ булһа, сохари ҡатырмай ул. Минең әсәйем бер тоҡсай сохари ҡатырҙы, бүтән тәмле нәмәләр бешерҙе. Әллә нисә ваҡ төйөнсөк төйөнләне. Кеше бер ҙә юҡҡа төйөнсөк төйнәйме ни? Миңә әлегә бер ни ҙә әйтмәгән булалар.

Бер көн таң менән өләсәй мине уята:

— Тор инде, Йәмил, тор, ана әсәйең тәмле иттереп ҡоймаҡ бешергән, — ти.

Мин ҡапыл күҙҙәремде асам. Иң элек өҫтәл өҫтөндә пары сығып ултырған самауырҙы күрәм. Әсәйем мейес алдында бешеренеп йөрөй. Буйға бәләкәй булһа ла, минең әсәйем бик уңған.

Өҫтәлдә тәмлерәк нәмәләр булғанда, минең ялындырып тора торған ғәҙәтем юҡ. Тик ундай нәмәләр йыш тәтемәй шул. Тиҙ генә йыуынып, өҫтәл эргәһендәге үҙ

урыныма ултырам. Ул арала әсәйем дә, эшен бөтөрөп, табынға килә. Өләсәйем сәй яһай башлай.

Тик сәй янына ултырғас ҡына, табындың бик иртә әҙерләнгәнен һиҙәм. Шунда уҡ әсәйемдең тоҡсайын, төйөнсөктәрен күҙ алдына килтерәм... Берәү ҙә өндәшмәй. «Әһә, — мин әйтәм, эстән генә, — барыбер беләм инде. Әсәй бөгөн ҡайҙалыр китә».

Сәй эсеп бөткәс, әсәйем мине саҡырып ала ла арҡамдан һөйә:

— Йәмил улым, мин алыҫ ҡалаға барып ҡайтам, һин өләсәйеңде тыңлап ҡына тор, йәме, — ти.

— Йә, — тип мин баш ҡағам. Үҙемдең күҙҙәремдән йәш бөрсөктәре тәгәрәй. Бөтәһен дә алдан белеп торҙом бит инде. Ә ниңәлер сыҙап булмай. Минең илағанды күрмәмешкә һалышалар. Мин бер-ике рәт танауымды тартам да илауҙан туҡтайым.

— Алдыңды-артыңды ҡарап йөрө инде, ҡыҙым, — ти өләсәй, — юл аҙабы — йән ғазабы, тигәндәр бит.

Әсәйем өндәшмәй. Бер аҙҙан һуң ул сөйҙәге тунын алып кейә, аҡ ҡалын шәлен бәйләй. Өләсәй уға тоғоноң биштәрен кейергә булыша. Унан беҙ өсөбөҙ ҙә ултырғыстарға ултырабыҙ. Өләсәй ниҙер уҡына, әсәйем менән беҙ тик кенә торабыҙ. Шунан әсәйем ҡапыл урынынан тора, башта өләсәйҙе, унан һуң мине ҡосаҡлап ала. «Иҫән-һау ғына тороғоҙ инде», — тип бышылдай ул. Мин уны йәлләп киттем. Тышта — ҡыш. Үҙе төн, ә ул алыҫ юлға сыға. Әсәйем, тиҙ-тиҙ атлап, ишеккә бара. Ул тағы беҙгә боролоп ҡарай ҙа: «Хушығыҙ!» — тип өй ишеген аса. Бына ул ҡураға сыҡты. Мин уның аяҡ тауыштарын ишетәм: ул баҫҡан һайын, ҡар шығыр-шығыр итеп китә. Әсәйем ҡапҡаны асып япты. Инде ҡар урамда шығырлай. Тауыш алыҫая һәм аҡрыная бара — шығыр... шығыр... шығыр...

Өләсәй менән икәү генә тороп ҡалабыҙ. Бер аҙҙан һуң мин унан: «Өләсәй, йән ғазабы нимә ул?» — тип һорайым.

Өләсәй тәрән һулыш алып ҡуя ла:

— Балаҡайҙарым, һеҙ белмәһәгеҙ ине инде шул ғазаптарҙы... Белмәһәгеҙ ҙә, күрмәһәгеҙ ҙә ине, — ти.

БАТЫРҘЫҢ ҠЫЛЫСЫ ҠАЙҘА?

Беҙ өләсәй менән һаман икәү генә торабыҙ. Әсәйемдән хат та, хәбәр ҙә юҡ, – өләсәй шулай ти. Мин инде уның нисә кис ҡунғанын да оноттом. Әсәйем киткәс, беҙҙең һыйыр быҙауланы. Теге мөгөҙлө ҡара һарыҡтың ике бәрәсе булды: береһе аҡ, береһе ҡара. Бик һалҡын көндәрҙә беҙ бәрәстәрҙе өйгә алып инәбеҙ. Бигерәк тиләләр әле, бер ни ҙә белмәйҙәр. Йә, янып торған тимер мейескә бәрелеп, һырттарын көйҙөрөп китәләр, йә, һандыҡ өҫтөнә һикергән булып, ҡолап төшәләр. Тамаҡтары туйып, йылынып алғас, бәрәстәр бөтә өйҙө бер итеп сабышып уйнайҙар.

– Эй мәхлүктәрең, ҡалай рәхәтләнәләр, – ти өләсәй. Ул, бейәләй бәйләүенән туҡтап, күҙлеге аҫтынан ғына миңә ҡарай (өләсәй, фронттағыларға тип, шау ғына бейәләй бәйләй). Мин ике быйма ҡунысы араһына һалынған күперемә сыралар теҙеп ултырам. Өләсәй шулай аҙ ғына ҡарап тора ла яңынан шәп-шәп итеп бәйләргә тотона. Үҙе һаман һөйләнә:

– Күңелле шул уларға, икәү булғас... Бына һинең дә туғаның булһа, ниндәй һәйбәт булыр ине, – ти.

Мин, йүгереп килеп, өләсәйгә һыйынам. Ул минең башымдан һыйпай.

– Фәриттең ҡустыһы бар. Мараттың һеңлеһе бар, бөтәһенең дә инде... Минең генә бер кешем дә юҡ, – тип шунда уҡ танауымды тарта башлайым.

– Һинең һеңлең булһа, яратыр инеңме? – тип һорай өләсәй.

– Би-и-к яратыр инем! Эй-й, һеңлем булһамы, мин уны күтәреп кенә йөрөтөр инем. Бер ҙә йыҡмаҫ инем, Марат кеүек.

Өләсәй йомшаҡ ҡулдары менән биттәремдән һөйә. Һеңлем тураһында уны тағы, тағы һөйләткем килә. Ә ул башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәй.

Мин яңынан күперем эргәһенә киләм. Бәрәстәр әллә ҡасан күперемдең аҫтын-өҫкә килтергәндәр инде. Бәрәстәргә рәхәт, улар икәү. Ә минең бер үҙемдең уйнағым да килмәй. Мин инде, һандыҡ өҫтөнә менеп, тик кенә ултырам. Өләсәй әйткән һеңлем нисектер эргәмә үк килеп баҫҡан төҫлө булып китә. Ул миңә шундай асыҡ күренә. Башта бик бәләкәс төҫлө ине. Әҙерәк торғас, ул

Мараттың һеңлеһе Фәһимә тиклем була. Үҙенең сәсе ҡара, ҡыҙыл күлдәгенә ата ҡаҙ күҙе төҫлө түңәрәктәр төшкән... Мин көн буйы уның тураһында ғына уйлап йөрөйөм.

Төн булғас, өләсәйҙең эше бөткәнен көтөп, карауатта бер үҙем генә ятып торам. Ҡайһы саҡта шулай йоҡлап та китәм. Ә бына хәҙер йоҡлап булмай. Тышта буран. Тәҙрә ҡапҡастарына ел килтереп һуға ла бөтә өй дөбөрләп китә. Ошо буранда атайым да, әсәйем дә өйҙә юҡ. Улар өшөйҙәрҙер әле. Ә һеңлем? Ул да атайым менән әсәйем янындалыр кеүек тойола миңә.

Өләсәй самауырҙы түгеп, көлөн ҡаға. Был эшен ул иң аҙаҡтан эшләй. Бына, утты һүндереп, минең янға ята. Мин юрғандан башымды сығарып, өләсәйҙең ҡолағына бышылдайым:

— Өләсәй, өләсәкәйем, әкиәт һөйлә әле.

— Һин һаман йоҡламаныңмы ни әле, төн ҡошо? — ти ул.

— Берҙе генә, өләсәй... унан йоҡлармын. — Ҡапыл тышта ел туҡтап ҡалғандай була. Өйҙә ҡараңғы ла, тын да. Мин йәнә юрған аҫтына инеп китәм. Өләсәй ашыҡмай ғына һөйләй башлай. Уның тауышы миңә юрған аша әллә ҡайҙан, ер аҫтынан, килгән кеүек, юҡ, ер аҫтынан түгел, борон-борон замандан килгән кеүек ишетелә.

— ...Борон-борон заманда, — ти өләсәй, — Тимербәк тигән батырҙың ай йөҙлө, йондоҙ күҙле Гөлнур исемле бик һылыу һеңлеһе булған. Тимербәк үҙе илгә яу менән ингән әҙәм башлы, йылан кәүҙәле батшаның ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышып йөрөй икән. Йорттағы бөтә ирҙәр яуға ҡаршы киткән булғандар, ти. Бер саҡ Гөлнур үҙенең дуҫ ҡыҙҙары менән күл буйына һыуға төшкән, ти, шулай. Тик торғанда бер мәл дауыл күтәрелеп, өйөрмә өйөрөлә башлаған, ти. Ҡыҙҙар бөтәһе лә ҡамыштар араһына кереп боҫҡандар. Өйөрмә килгән дә шул арала үтеп тә киткән. Ҡыҙҙар йүгерешеп йәнә яр башына сыҡҡандар. Тик бер Гөлнур ғына сыҡмаған. Дуҫтары уны, бөтә күл буйын бер итеп, кискә тиклем эҙләп йөрөгәндәр. Шул юҡтан юҡ булған да ҡуйған, ти, ай йөҙлө, йондоҙ күҙле Гөлнур.

Яуҙағы батырҙар, әҙәм башлы, йылан кәүҙәле батшаны еңеп, ҡыуанышып илгә ҡайтҡандар. Тик бер Тимербәктең генә шатлығы ҡайғы менән алмашынған. Батыр

шул яуҙан ҡайтышлай уҡ, аҡбуҙ атынан да төшмәйенсә, бер һелтәгәндә ҡырҡ саҡрым ерҙе айҡай торған ҡылысын һалып, Гөлнурҙы эҙләргә сығып киткән.

Ай йөрөгән, ти, йыл йөрөгән, ти, батыр, ете тауҙы үткән, ете даръяны кискән, ти. Бер заман тау мәмерйәһендә бөлтерәп бөткән сал сәсле ҡартты осратҡан, ти, Тимербәк.

— Һауғынамы, бабай! Ниндәй яҙмыштар килтерҙе үҙеңде был тау-таштар араһына? — тип һораған.

— Юл кешеһенә изге юл! — тип яуап биргән ҡарт. — Һин минең ниндәй юлдар менән бында килеүемде һораның булһа кәрәк, егет. Мин дә һин килгән юлдан килдем.

Тимербәк, атынан төшөп, ҡарт эргәһендәге таш өҫтөнә ултырған. Ҡарт яңынан һүҙгә керешкән:

— Һинең кеүек егет сағымда минең һеңлемде аждаһа урланы. Шул замандан бирле берҙән-бер һеңлемде эҙләп йөрөйөм. Бына хәҙер таптым мин уны. Ошо тауҙың артында аждаһаның алтын түбәле тимер һарайы бар. Тик хәҙер аждаһа менән алышырлыҡ ғәйрәтем ҡалманы шул минең, ҡартайҙым, йонсоном.

Тимербәк, ҡапыл урынынан тороп, аты янына йүгереп килгән.

— Минең һеңлем дә тап шунда булырға тейеш. Әйҙә, киттек, бабай! Беҙ икебеҙ ҙә бер үк нужа менән йөрөйбөҙ икән, — тип батыр өҙәңгеһенә һикереп баҫҡан.

— Сабыр ит әле, ғәйрәтле егет, — тигән ҡарт. — Мин үҙем дә йәш сағымда атаҡлы батырҙарҙан инем. Был аждаһаға яҡын барып булмай. Ул, үҙенең һарайына кеше килгәнен күрһә, ҡырҡ саҡрымға ут сәсеп тора.

Шул саҡ Тимербәк, ҡылысын ҡынынан алып, һелтәп ҡуя. Ҡарттың күҙ алдында ерҙән күккә тиклем йәшен һыҙылып үткәндәй була. Шунан инде егет ҡартҡа ҡылыстың серен аса. «Был ҡылыс, — ти егет, — үс ҡылысы». Шунан һуң былар икәүләшеп юлға сығалар. Көн китәләр, төн китәләр. Таң атыуға инде, ҡарт батыр менән йәш батыр бейек тауҙың башына менеп етәләр. Тау башында торған көйө былар алыҫтағы тимер һарайҙы күрәләр. Уның алтын түбәһе ялтырап тора. Ә һарайҙың тирә-яғы тотош ҡара ер. Ундағы бөтә нәмә көл-күмергә

әйләнгән. Бер мәл һарай эсенән йомғаҡ дәүмәле генә ут тәгәрәп сыға. Ул йомғаҡ яҡынайған һайын ҙурая бара.

— Ана, беҙҙе күреп, аждаһа сыҡты, — ти ҡарт. — Мин был утты бик күп тапҡыр килеп ҡараным.

Батырҙар янына уҡ килеп еткәс, теге ут тотош ялҡынға әйләнә.

Беҙҙең Тимербәк ҡынынан ҡылысын һурып ала ла һарай яғына ҡарай һелтәп ебәрә. Бер һелтәй, ике һелтәй, ә ут һаман көсәйә генә бара. Бер мәл егет үҙе бөтөнләй ялҡын эсендә ҡала, уның ҡаштары, керпектәре көйөп бөтә. Барыбер ул ҡылысын ташламай, һелтәй ҙә һелтәй, ҡылыс үҙе лә уттай ҡыҙара. Көн алышалар, төн алышалар. Тик өсөнсө көндө генә ут әҙерәк баҫыла төшә. Тимербәк аждаһа һарайына яҡынайғандан-яҡыная бара. Уның артынан ҡарт та эйәрә. Кискә табан ут бөтөнләй һүнә. Тик ер өҫтө ҡара төтөн була. Ул — аждаһаның ҡырҡылған ун ике башы төтәп ята икән.

Ҡарт менән егет, аждаһа һарайының ете ҡат ишеген емереп, эскә инәләр. Һарай эсе тотҡондағы ҡыҙҙар — илдең иң матур ҡыҙҙары менән туп-тулы була. Тимербәк менән бабай үҙ һеңлеләрен эҙләп табалар. Ҡыҙҙарҙың бөтәһен дә ҡотҡарып, тыуған илдәренә ҡайтып китәләр... Эй ҡыуаналар, ти, ул көләшәләр, ти, шатлыҡтан илашып та алалар, ти. Шатланмаҫлыҡмы ни?

Өләсәй әкиәтен шау шулай ҡырт ҡына бөтөрә. Мансур бабай кеүек, «әле лә рәхәтләнеп ғүмер итәләр...» тигәнен бер әйтмәй.

Мин шым ғына ятам. Ә күҙ алдымда, йәшен кеүек, ҡылыс ялтырап китә. Мин түҙмәйем, өләсәйҙән һорайым:

— Шул батырҙың ҡылысы әле ҡайҙа икән, өләсәй? — тим мин.

Өләсәй ашыҡмай ғына яуап бирә:

— Атайың ҡулында, балам, хәҙер ул ҡылыс. Йоҡла инде...

ТАНЫП БУЛМАЙ ТОРҒАН ЯҘЫУ

Әсәйем ҡайтмай ҙа ҡайтмай...

Бер көн иртәнсәк, өләсәй һыйыр һауырға сыҡҡас, хаттар, гәзиттәр ташыусы Гөлһылыу апай килеп инде. Әсәйгә Өфөнән килә торған гәзитте ҡалдырҙы. Мин ул

гәзиттең ҙур итеп яҙылған ике һүҙен генә таныйым, уны «Ҡыҙыл Башҡортостан» тип көн дә ҡысҡырып уҡып ҡуям. Гөлһылыу апай дүрткә бөкләнгән тағы бер ҡағыҙ киҫәге лә бирҙе. «Быныһы әсәйеңдән телеграмма», — тине лә сығып китте. Мин ҡулыма телеграмманы тотоп ҡараным да ҡалдым. Нимә икән ул телеграмма? Яҡшы әйберме икән, әллә насармы икән?

Өләсәйгә ҡаршы йүгереп барҙым да: «Өләсәй, өләсәй!.. — тинем. — Телеграмма килде!»

— Кем тинең? Ҡайҙа һуң ул? — Өләсәй яҡ-яғына ҡарана.

Мин ҡулымдағы ҡағыҙҙы уға бирәм. Унын ҡулдары ҡалтырап китә:

— Хоҙайым, пахарун ғына булмаһа ярар ине, — ти.

— Юҡ, өләсәй, пахарун тимәне Гөлһылыу апай. «Әсәйеңдән телеграмма», — тине.

Өләсәй мине, тиҙ генә кейендереп, Мансур бабайҙы алырға ебәрә. Беҙ, бер-бер хәл булһа, кәңәшкә гел уны саҡырабыҙ. Ул нисек әйтһә, шулай эшләйбеҙ. Донъяла ул белмәгән нәмә юҡ.

Мансур бабайҙар беҙгә йәнәшә генә торалар. Ул: «Инде туҡһанға етеп барам», — ти. Туҡһан бик күп була ул, мин туҡһанға тиклем һанай беләм. Ул саҡта Мансур бабайҙың Фәрхениса исемле һуҡыр әбейе бар ине. (Хәҙер инде ул һуҡыр түгел: һуғыш бөткәс, уны Мансур бабай Өфөгә алып барҙы ла күҙҙәрен төҙәттереп ҡайтты. «Харап һәйбәт шәйләйем инде», — ти Фәрхениса әбей хәҙер. Ә элек һуҡыр ине.)

Мансур бабайҙың өйөндә шул әбей ҙә үҙе генә. Улдары булмаған, ә ҡыҙҙары сит ауылға китеп бөткән. «Ҡөҙрәт менән торғандай тораһың инде, Мансур ағай», — ти уға өләсәй. «Колхоз ҡарамаһа, ҡөҙрәт менән генә әллә ҡайҙа барып булмаҫ ине, ҡәрендәш», — ти ул. Мин улар һөйләшкәнде ҡайһы саҡта аңлап та бөтмәйем.

Мин ике аралағы ҡапҡанан ғына Мансур бабайҙар ҡураһына индем. Ул ишек алдын һепереп тора ине.

— Бабай! Телеграмма килтерҙеләр, өләсәйем һине саҡырҙы, тиҙ үк! — тип ҡысҡырҙым.

Бабай һорашып-нитеп торманы, өйөнә инеп китте. Мин болдор эргәһендәге ҡар өйөмөнән бер тапҡыр ғына аяҡ менән шыуып төштөм дә ҡайтып киттем.

Мансур бабай беҙгә кәңәш бирергә килгәндә, һәр ҡасан аҡ сәкмәнен кейеп, ҡыҙыллы-күкле матур билбауын быуып килә. Ҡайһы саҡта Фәрхениса әбейҙе лә эйәртә. Әле лә шулай икәү етәкләшеп килеп инделәр.

— Иҫәнгенәме, һауғынамы, ҡәрендәш? — ти ул һәм әбейҙе етәкләп һандыҡ өҫтөнә килтереп ултырта. — Телеграмма тип һөйләндеме Йәмил, ҡайҙан килгән, кемдән?

— Көнбикәнән, ти ҙә бит, ни икәнен генә белеп булмай шул, — тип бошона өләсәй.

— Ҡана, бир әле бында, — тип бабай ҡағыҙҙы ала. — Телеграмма ни инде ул, ҡәрендәш, тимер сыбыҡ буйлап ебәрелгән хат була. Күрәһең, Көнбикә һуҡҡандыр, — ул ҡағыҙҙы оҙаҡ итеп әйләндергеләп ҡарап тора.

— Уҡыр инең, исмаһам, ағай... Пахарун ғына булмаһа ярар ине, тип йөрәгем ҡупты. Һуғышта балалар бик күп бит.

— Пахарун түгелен асыҡ беләм, ҡәрендәш, бына тик уҡып биреүҙе булдыра алмайым. Заманында өйрәнмәгән һөнәрен, йөрөмәгән ерен ҡалдырманым. Өфөлә тиһеңме, Стәрлелә тиһеңме, — бөтәһендә лә булдым. Ә бына шул яҙыу танырға өйрәнеп булманы.

Өләсәй ҡағыҙҙы ҡабат үҙенә ала, күҙлеген бер кейеп, бер һалып, яҙыуҙы уҡырға итә.

— Бошонма, ҡоҙағый, — тип һүҙгә ҡушыла Фәрхениса әбей. Ул, күҙе күрмәгәс, бик һирәк һөйләшә. — Көнбикәнән булғас, һәйбәт нәмәләр әле.

— Фәрхениса күҙҙәре күрмәгәнгә һуҡыр, — ти өләсәй, — ә беҙ һинең менән күҙле була тороп дөм һуҡырбыҙ, ағай. Әрнеп тә китәм. Анау колхоз төҙөгән йылды өйрәтергә иткәндә, «шайтан һабағы» тип, уҡырға йөрөмәнем бит. Быны хәҙер диуана кеүек ултыр инде. Уҡый-яҙа белһәм, улдарыма үҙ фатихаларымды үҙем яҙып ебәрер инем.

Ҡартайған өс кешенең шулай аптырап тороуынан миңә бик ҡыйын булып китә. Йүгереп барып, ошо яҙыуҙы ҡысҡырып уҡып биргем килә. Нисек ҡыуанырҙар ине улар! Ниңә мин әле ете менән генә барам икән, ниңә һигеҙ менән бармайым икән? Ошо мәлдә үк минең мәктәпкә барып, яҙыу өйрәнеп ҡайтҡым килә. Барыбер өйрәнермен мин ул яҙыуҙы. Әсәйем кеүек, ҡалын-ҡалын

китаптар ҙа уҡырмын әле, башта бөтә әкиәттәрҙе лә уҡып бөтөргәс...

Фәрхениса әбей яңынан өндәшә:

— Ҡоҙағый, урамдан балалар шаулашып үтеп бара түгелме? Берәйһен алып керер ҙә уҡытыр инең шул ҡағыҙҙы.

Өләсәйҙең йөҙө яҡтырып китә:

— Бәй, балалар бар саҡта, ни эшләп аптырап торабыҙ әле? Иҫемә лә төшмәгән... — Ул башта, тәҙрәгә килеп, урамға ҡарай, унан шәлен генә ябына ла сығып китә.

Өләсәйем юғары ос Мәхмүтте эйәртеп инә. Мин беләм, ул быйыл бишенселә уҡый.

— Улым, ошо ҡағыҙҙы ғына уҡып бирсе, бөгөн Гөлһылыу килтереп киткән, — ти өләсәй.

Һынап торам. Мәхмүт эреләнеп кенә яҙыуҙы ала.

— Көнбикә апайҙан телеграмма был. Урыҫса яҙылған.

— Ул тиклемен белдек тә уның белеүен, — ти Мансур бабай.

— Уҡы, улым, уҡы.

Мәхмүт башта яҙыуҙы русса уҡып сыға. Унан башҡортса һөйләп бирә:

— Көнбикә апайым әйткән: «Ун алтыһында ҡайтып төшәбеҙ, станцияға ат ебәрһендәр, — тигән, — сәләм», — тигән.

Өләсәйем, үрһәләнеп, ары-бире йөрөй башлай.

— Сисенегеҙ, ағай, йә, ҡоҙағый, ни эшләп ултыраһың, сисен. Сәй эсеп алырбыҙ, — ул ҡапыл туҡтап ҡала. — Бөгөн нисәһе һуң әле?

— Бөгөн ун бише инде, иртәгә ун алтыһы... Башҡа нәмә әйтмәгән шул, — ти ҙә Мәхмүт сыға башлай.

— Ултыр, улым, һин дә ултыр, — ти өләсәй, — баллап сәй эсербеҙ.

— Рәхмәт, әбей, мәктәпкә барам, — тип Мәхмүт сығып уҡ китте.

Минең Мәхмүткә күҙем ҡыҙып ҡалды. Ҡалайыраҡ, тотлоғоп та торманы, сатнатып уҡыны ла бирҙе. Етмәһә, сәй ҙә эсмәгән була.

Мансур бабай менән Фәрхениса әбей, сисенеп, өҫтәл эргәһенә килеп ултыра.

Теге телеграмманы мин әле яңы ғына аңлап алам: иртәгә минең әсәкәйем ҡайта! Ул әле ҡайҙа икән? Ниңә

бөгөн үк ун алтыһы түгел икән? Миңә ул, шығыр-шығыр баҫып, ҡапҡанан ингән кеүек була. Әсәйемде бигерәк күргем килде шул минең...

Ҡапыл өләсәй радионы бороп ебәрҙе.

— Әллә ниткән ғәҙәтең шул, ҡәрендәш, үҙең русса бер ни ҙә төшөнмәйһең, ә үҙең радионы русса һөйләгәндә лә тыңлайһың, — ти Мансур бабай. — Нисә инһәм дә, тик тормай.

— Мәскәү үҙе һөйләй бит, ағай. Өйөңдә Мәскәү тауышы ишетелеп торғас, күңелгә рәхәт, — ти өләсәй. — Аңламаһам да, мин уның өмөтлө һөйләгәнен беләм бит. Һин улай тимә. — Ул шаулап торған самауырҙың өҫтөндәге көлөн өрөп төшөрә лә өҫтәлгә килтереп ҡуя.

Бына эсәләр инде хәҙер сәйҙе былар, бер башлағас...

БЫНА КЕМ ИКӘН МИНЕҢ ҺЕҢЛЕМ

Председатель Яҡуп ағайҙың артлы санаһы беҙҙең ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Беҙ өләсәй менән икебеҙ ҙә тәҙрәгә ҡапландыҡ. Башта күсергә ултырған толопло берәү һикереп төштө. Быныһын таныйым: бригадир Баҙамша бабай. Унан әсәйемдең аҡ шәле күренеп ҡалды. Ул арала өләсәй тышҡа сығып та йүгерҙе. Мин иҙәнгә һикереп төштөм. Бер быймамды шунда уҡ таптым, ә икенсеһе юҡ та юҡ. Ахыры, быйма мин эҙләгән һайын йыраҡыраҡ ҡаса.

Бына ҡапҡа асыла. Мин яңынан һандыҡ өҫтөнә һикереп менәм дә тәҙрәгә ҡапланам. Ана, әсәйем, әсәкәйем ҡайтып инде! Әсәйем, әсәкәйем! Ә ниндәй бәләкәс ҡыҙҙы етәкләгән һуң ул? Өләсәй ул ҡыҙҙы күтәреп ала. Бүтәнсә түҙеп булмай. Һандыҡ өҫтөнән һикереп төшәм дә шул бер быймамды ғына кейгән көйө тышҡа йүгерәм. Болдорға сығып та етәм — әсәйем мине ҡосаҡлап та ала. «Тиле, — ти әсәй, — ялан аяҡ сығалармы ни?» Уның тауышын ишеткәс, тағы ла күңелем тулып китә. Мин өндәшмәйем, әсәйҙең ҡарлы шәленә битемде ҡуйып, уның муйынынан ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлайым.

Өйгә ингәс, теге бәләкәс ҡыҙ менән мине ҡара-ҡаршы баҫтырып ҡуялар.

— Бына һеңлеңде алып ҡайттым, Йәмил. Оксана исемле. Сисендер өҫтөн! — ти әсәй. Миңә бик күңелле булып

китте. Башта мин Оксананың муйынынан ҡосаҡлап алдым, унан биттәрен һыйпаным. Минең дә һеңлем бар, Оксана исемле һеңлем бар! Һеңлемде күтәреп алырға ла итәм, тик көсөм генә етмәй.

— Күтәрмә, Йәмил, ул ҙур бит инде. Ысҡындыр төймәләрен. — Өләсәй минең башымдан һыйпай. Әсәйем менән улар беҙгә көлөп ҡарап торалар.

Мин башта һеңлемдең башлығын, унан пальтоһын һалдырам.

Оксананың сәстәре ҡара түгел, ҡуңыр, күлдәгенә ата ҡаҙ күҙе төҫлө түңәрәктәр ҙә төшөрөлмәгән. Сәсенә бик матур ҡыҙыл таҫма бәйләгән. Ә буйға Фәһимәнән дә ҙур. Минең саҡлы. Исеме лә урамда бер исем — Оксана, ҡалайыраҡ! Ә ниңә һуң ул өндәшмәй, турһайып тора?

— Әсәй, Оксана ла өндәшһен әле миңә. Ағай, тиһен.

— Ул әле өшөгән, улым, йылынғас, барыһын да әйтер, йәме.

— Йә.

Мин һеңлемде, ҡулынан етәкләп, һандыҡ эргәһенә алып киләм. Шунда уҡ карауат аҫтына инеп, үҙемдең бөтә уйынсыҡтарым һалынған тартманы алып сығам. Минең әйберҙәрем байтаҡ. Таш атым, ағас мылтығым, бәләкәс арбам, баҡа ҡабырсаҡтары, имән сәтләүектәре, тәтәй таштарым, матур-матур һүрәттәр төшөрөлгән ҡағыҙҙарым бар. Ҡалалағы һылыу апа алып килгән ҡыҙыллыйәшелле тутыйғошом менән тимер һаплы бәкем дә юғалмағайны әле ул саҡта. Тимер һаплы бәкенең Марат ҡына былтыр урманда башына етте инде, кипкән шыма көпшәнән һыҙғыртҡыс яһағанда.

Бына ни тиклем уйынсығым бар ине минең! Шуларҙың бөтәһен дә мин Оксана алдына теҙеп ҡуйҙым.

— Ал, ал, Оксана, — тим мин, — бөтәһен дә һиңә бирәм. Йәй булғас, мин тағы бик күп матур нәмәләр йыйырмын әле.

Оксана ояла. Ниңә ояла ул? Мин әсәйем менән өләсәйемә ҡарайым. Улар икеһе лә мейес ҡаршыһындағы эскәмйәлә йылмайышып ултыралар. Әсәйем, беҙҙең янға килеп, икебеҙҙе лә һөйөп ала. Ниндәй шат минең әсәйем! Әсәйем шат саҡта, миңә бик рәхәт була. Һеҙгә лә шулайҙыр инде ул.

— Уйнағыҙ, күгәрсендәрем, уйнағыҙ, — ти әсәйем.

Мин бер үҙем генә саҡта ул «күгәрсенем» тимәй ине. Әле икәү булғанға күрә шулай әйтәлер инде. Күгәрсен яңғыҙ булмай торғандыр шул. Ана бит, беҙҙең келәт ҡыйығына оялаған күгәрсендәр ҙә ни тиклем. «Татыу ҡоштар улар, күгәрсендәр, гөрләшеп кенә торалар», — ти Мансур бабай.

Әсәйем һөйгәс, Оксана көлөп ебәрҙе. Ул башта, тартмаға әкрен генә ҡулын һуҙып, баҡа ҡабырсағын тотоп-тотоп ҡараны, унан һуң имән сәтләүектәрен алды. Иң аҙаҡтан ғына теге ҡыҙыллы-йәшелле тутыйғоштоң ҡойроғонан тотоп, һелкетеп ҡараны. Мин, уның эсен тишеп, ваҡ ҡына таштарын ҡойоп бөтөргәйнем шул инде. Һеңлем миңә низер әйткәндәй булды. Мин аңламаным. «Ни тинең, Оксана, ни тинең?» — тип һораһам да, ул ҡабат өндәшмәне. Үҙенең зәңгәр күҙҙәрен ҙур асып, миңә ҡараны ла торҙо. Мин әллә ниңә ҡурҡып киттем.

Әсәй минең янға килеп ултырҙы.

— Йәмил, — тине ул, — һинең һеңлең бит бик алыҫ ҡалала торҙо. Ул ҡалала беҙҙеңсә һөйләшмәйҙәр. Әлегә Оксана ла башҡортса белмәй. Һин уны өйрәтерһең, йәме?

Мин әсәйҙең һүҙҙәрен аңлап етмәһәм дә, ярар, тинем. Ә ул ҡалала ниңә башҡортса һөйләшмәйҙәр? Ҡайһылай һөйләшәләр һуң унда? Алыҫмы икән ул ҡала? — шуларҙы әсәйемдән һорашҡым килә. Һорашыр нәмәләр тағы ла күп әле.

Ҡапыл һеңлем әсәйемә килеп һыйына. Әллә минән ҡурҡамы икән?

— Әсәй, әйт Оксанаға, мин уға теймәйем бит. Мин уға бер ҙә теймәйем, әсәй, — тим мин. Әсәйем ситкә борола. Күңеле тулғанда, ул гел шулай итә.

— Йәгеҙ, ҡунаҡтар, иркенләп сәй эсеп алайыҡ, — ти өләсәй, — самауыр һыуына.

Мине Оксана менән иң түрҙәге урынға йәнәш ултырталар. Шунда мин үҙемдең бәләкәй сынаяғымды бөтөнләйгә һеңлемә бирҙем. Эйе, бөтөнләйгә шул.

Әҙерәк торғас та, беҙгә Мансур бабай менән Фәрхениса әбей инде. Бабай, әбейҙе етәкләп, һөйләнә-һөйләнә түргә уҙҙы: «Алтылағы сәфәрҙән ҡайтһа, — ти ул, — алтмыштағы күрешә килһен, тигәндәр боронғолар». Улар артынан уҡ Шәһит ағайҙар, Сәғиҙәләр килде. Бөтә урам

килде ул көндө беҙгә. Һәр кеше Оксананы йә күтәреп ала, йә былай ғына һөйөп ҡуя.

— Бына Йәмилдең дә һеңлеһе булды. Ҡалай матур бала, — тине Миңлекәй әбей, — бәхете-тәүфиғы булһын инде.

Үҙе беҙҙең икебеҙгә лә берәр ус муйыл бирҙе. Баҙамша бабай Тәзкирәһе Оксанаға ҡурсаҡ килтерҙе; ҡурсағы бик елле — күлдәк кейгән, яулыҡ бәйләгән, ысын ҡурсаҡ. Оксанаға ул бик оҡшаны, әллә нисә рәт һикертеп алды. Ҡыҫҡа тиклем кешеләр килделәр ҙә килделәр. Өйҙә күмәк саҡта миңә бик рәхәт була, һеҙгә лә шулайҙыр инде ул.

Кешеләр ҡайтышып бөттө. Мин әсәйҙең итәгендә ултырам. Ә өләсәй Оксананың сәсен тарай.

— Ҡыҙымдың сәстәре керләнгән, иртәгә үк мунса яғырға кәрәк булыр, — ти ул.

Минең Оксанаға бик күп һүҙҙәр әйткем килә. Тик нисек кенә тип өндәшергә икән һеңлемә? Ул бит барыбер минең һүҙҙәремде аңламай. Ниңә генә аңламай икән инде? Башта туғаным юҡ ине. Хәҙер туғаным бар ҙа бит, тик минең менән һөйләшә белмәй. Мин ҡыҫҡырып иларҙай булдым.

Үҙем һаман үтә ҡарайым.

— Йәмил... — тине ул. Мин һиҫкәнеп киттем. Әҙерәк торғас, өҫтәп ҡуйҙы: — Ағай...

— Ҡалай матур итеп әйтә ул!

— Оксана! Туғаным! — тим мин. Әсәйемдең итәгенән һикереп төшәм дә уның битен һыйпайым. — Әйт, тағы әйт!

Ул өндәшмәй. Үҙе йылмая.

— Ҡош та бит һайрарға әкренләп өйрәнә. Ул да өйрәнер, балаҡайым, — ти өләсәй.

Ҡараңғы төшкәс тә, Оксананың йоҡоһо килде. Әсәйем эскәмйә янына ултырғыстарҙы теҙеп ҡуйҙы ла уға шунда урын һалды. «Бөгөнгә бында ятып торһон да иртәгә уның үҙенә карауат керетербеҙ», — тине ул өләсәйгә.

Оксана ятҡас та йоҡлап китте. Ә мин уның янына ултырҙым да тик кенә ҡарап торҙом. Унан һуң Оксананың мендәр ситенә башымды тейҙереп ҡараным... Тик әсәйем мине күтәреп алғанда ғына, күҙем аҙыраҡ асылып китте...

ОКСАНА ҠУРҠА

Өләсәйем әллә ҡасан уҡ инде Тимертауға ҡайтып китте. Беҙ өйҙә өсәү генә ҡалдыҡ: мин, әсәйем, Оксана. Әсәй көн буйы колхоз келәтендә бойҙай таҙарта. Ул бойҙайҙы, яҙ булғас, ергә сәсәләр. Әсәйем дә бойҙайҙы машина менән сәсә белә. Беҙ быйыл малайҙар менән, яҡын баҫыуға барып, бойҙай сәскәнде үҙебеҙ ҡарап торҙоҡ. Ат екһәләр, бер машинаға икене егәләр. Ә трактор булһа, әллә нисә машинаға бер генә тракторҙы егәләр. Яҡын баҫыуҙа үҙебеҙ күрҙек.

Әсәйем, көндөҙ ҡайтып, беҙгә аш бешереп ашата ла тағы китә. Оксана менән беҙ икәүләп өйҙә ҡалабыҙ. Беҙ ҙә тик кенә тормайбыҙ: иҙән һеперәбеҙ, сынаяҡтарҙы йыуабыҙ. Һеңлем хәҙер оялмай. Минең менән һөйләшергә лә өйрәнде. Башта ҡыйын ине лә, хәҙер анһат инде. Мин уға быҙауҙарҙың, ҡышлау гөлдәрҙең, бәрәстәрҙең, ҡоштарҙың — бөтә, бөтә нәмәләрҙең исемдәрен өйрәттем. Ул элек осраған бер әйберҙе «был нимә?» тип һорап ҡына тора ине. Ә хәҙер үҙе белә.

Йылы көндәр булһа, Фәриттәр, Мараттар, Фәһимәләр менән бергә тау шыуырға ла йөрөйбөҙ. Хәҙер көндәр йылынды инде. Күптән түгел әсәйҙәрҙең март байрамы ла булды. «Тиҙҙән яҙ килер инде», — тиҙәр ҙур малайҙар.

Ҡайһы саҡта әсәйем беҙҙе Мараттарға илтеп ҡуя. Уның Фәһимә исемле һеңлеһе лә бар, тигәйнем бит. Уларҙа беҙ дүртәүләшеп «күҙ бәйләш» уйнайбыҙ. «Аҡрыныраҡ баҫып йөрөгөҙ, таш табандар!» — ти беҙгә Мараттың өләсәһе. Ул минең өләсәйем кеүек түгел, бер ҙә тауышты яратмай. Әллә башы ауырта инде.

Оксана менән Фәһимә дуҫ ҡушылдылар. Марат менән мин былтырҙан уҡ дуҫ булып алғас, һеңлеләребеҙ тик йөрөһөнмө ни? Беҙ уларҙың ҡулдарын тотоноштторҙоҡ та бер-береһенә өсәр тапҡыр: «Дуҫмы?» — «Дуҫ!» тип әйттерҙек. Беҙҙең урамда бөтә малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа дуҫ ҡушылғанда, шулай итәләр.

Бер көндө шулай, әсәйем төшкә ҡайтып киткәс, тышта бик шәп ел күтәрелде. Мин елдең ниндәйлеген баҡсаның алыҫ мөйөшөндәге ҡайынға ҡарап беләм — ул тәҙрәнән күренеп тора. Тышта дауыл ҡупһа, ҡайын осоп

китерҙәй булып сайҡала башлай. Уның яланғас нескә ботаҡтары, бәүелеп-бәүелеп, беҙҙең урам яҡ ҡоймаға һуғыла. Шундай саҡта ҡайын миңә бик ыҙаланған төҫлө күренә. Ниңә иҫә икән инде ул ел? Ниңә өҙгөләй икән инде ҡайынды?

Беҙ Оксана менән икәү тәҙрәнән баҡсаға ҡарап ултырабыҙ. Мансур бабайҙарҙың мөрйәһенән һоро төтөн сыға ла беҙҙең баҡсаға йығылып төшә. Әллә ул ҡайынды йылытырға итәме икән?

Мин әллә ҡасандан бирле һаҡлап килгән серемде Оксанаға асам. Мин уны ҡар ирегәс кенә әйтермен тигәйнем дә, түҙеп булмай бит.

— Яҙ булғас та, мин һиңә, Оксана, бер һарай хазина бүләк итәм, — тим.

Һеңлем аңламай тора. Уның әле хазина күргәне юҡтыр шул. Мин уға һөйләп бирәм.

— Ана, баҡсаны күрәһеңме? Ул былдай ғына баҡса түгел, унда алтын япраҡлы көмөш ағастар үҫә. Таңдан алып төнгә, төндән алып таңға тиклем төрлө-төрлө ҡоштар һайрай. Сәскәләрҙән нур тамып тора, — тим. — Ошондағы бөтә ағастар араһында бер ҡайын бар, ҡайын төбөндә таштан һалынған һарай, һарай эсендә бер әкиәт малайының хазинаһы бар. Хазина — байлыҡ тигән һүҙ ул. Шул малай, йәй булғас, бер бәләкәс кенә әкиәт ҡыҙын баҡсаға алып инер ҙә ҡайын төбөнә алып килер. Һарайҙың таш ишеген асыр ҙа былай тип әйтер: «Бына, һеңлем, ошо һарайҙа нимә бар, — шуның бөтәһе лә һинеке. Уйна, шатлан, ҡайғы күрмә!»

— Кәрәкмәй, был әкиәт булмаһын, ысын булһын! — ти Оксана.

— Иҫәр, — тим мин, — малайы бит уның Йәмил исемле, ә ҡыҙы Оксана исемле була.

Шулай тигәс, һеңлем көлөп ебәрҙе:

— Тағы ла һөйлә, Йәмил!

— Ә унан һуң, — тим мин, — беҙ унда бәләкәс флагтар ҡаҙап ҡуйырбыҙ ҙа, йәй көнө Көмөшлө буйында булған кеүек, пионерҙар лагеры яһарбыҙ. Фәриттәр, Мараттар, Фәһимәләр килер. Йыр йырларбыҙ. Әйҙә, хәҙер үк йырлап ҡарайыҡ.

— Әйҙә! — ти Оксана.

Беҙ икебеҙ ҙә йырларға тотонабыҙ:

Яҙ килер, яҙ килер,
Ҡар ирер, ҡар ирер.
Үләндәр үҫерҙәр,
Үләндәр үҫерҙәр.
Баҡсаға инербеҙ,
Йырлашып йөрөрбөҙ,
Флагтар ҡаҙарбыҙ,
Лагерҙар яһарбыҙ...

— Тик ҡоштарҙы ҡурҡытмабыҙ, йәме? — ти Оксана, йырҙан туҡтап. — Улар матур һайрап торорҙар.

— Таш та ырғытмабыҙ, «кө-ө-ө-ш!» тип тә ҡысҡырмабыҙ, Оксана, эйе бит? Төйләгәнде генә ҡыуырбыҙ. Ул себештәрҙе урлай.

Ҡапыл көслө ел тәҙрә ҡапҡастарына килтереп һуҡты. Улар дөбөрләп киттеләр. Оксана «ой!» тип ҡаты ҡысҡырып ебәрҙе. Мин һеңлемә әйләнеп ҡараным, уның күҙҙәре ҙур булып асылғандар. Күҙҙәре миңә был юлы асыҡ зәңгәр булып түгел, ҡараһыу булып күренделәр. Ниңә улай ирендәре, иларға иткән кеүек, ҡалтырап тора? Ни булған уға? Шул арала тәҙрә ҡапҡастары тағы ла шәберәк дөбөрләп ҡуйҙы. Оксана инде карауат өҫтөнә өйөлгән мендәрҙәр артына уҡ инеп ҡасты. Мин, аптырап, тышҡа ҡараным. Тышта ҡараңғы төшөп килә. Ел һаман беҙҙең ҡайындың ботаҡтарын тартҡылай. Ә ҡурала элеккесә бер кем дә юҡ. Тик Сәғиҙә апайҙарҙың ала эте генә кәртә буйындағы көрт өҫтөндә аунап ята. Ниҙән ҡурҡа һуң һеңлем? Уның эргәһенә килеп, мин дә мендәргә һыйындым.

Оксана ике ус төбө менән ҡолаҡтарын баҫып тотҡан да бөршәйеп кенә ултырып тора. Ул, ҡалтырана-ҡалтырана, миңә бышылдай:

— Ҡас тиҙерәк, Йәмил, ҡас, ана фашист килгән тышта! Ишетәһеңме, мылтыҡ ата бит! Ул уҫал! Ҡас тиҙерәк!

Мин дә ҡурҡып киткәндәй булдым. Тышта ҡараңғы. Ел һаман тәҙрә ҡапҡастарын һелкетә. Әсәйем дә өйҙә юҡ. Ә фашист алыҫ ул, уныһын яҡшы беләм. Шулай ҙа мин тиҙ генә һикереп төшәм дә тартманан ағас мылтығымды алып киләм.

— Күрәһеңме быны? — тим Оксанаға. — Килеп кенә ҡараһын фашист! Кәрәген алыр. Атайҙар фронтта булғас, килә аламы ни ул бында?.. Ҡурҡма, Оксана, ҡурҡма.

— Ә кем ата һуң унда?

— Ел ул, ел. Тәҙрә ҡапҡастары элек тә дөбөрләй ине. Яҡты саҡта ишетмәгәнһең генә һин уны.

Ул инде ҡолаҡтарын ҡулдары менән ҡапламай. Беҙ икәүләп мендәрҙәр артында, карауаттың арғы башына, арҡаларыбыҙҙы һөйәп, ултырып торабыҙ.

— Беләһеңме, Оксана, — тим, — мин бар саҡта, һин ҡурҡма. Мин, үҫеп, Тимербәк кеүек батыр булғас, фашистарҙы еңергә китәм, һин өйҙә ҡалырһың. Мин ҡайтып етеүгә һине аждаһа урлап китһә лә, мин һине барыбер табып ҡотҡарырмын. Һин ҡурҡма, йәме?

— Ой, кәрәкмәй, кәрәкмәй! Һин бер ҡайҙа ла китмә!.. Ә аждаһа нимә ул?

— Би-и-и-к ҙур йылан.

— Ә йылан нимә?

— Йыланмы? Йылан ул саға, тешләп ала.

— Ҡуй, тешләмәһен, мин ҡурҡам.

— Иҫәр һин, Оксана, мин бит уны еңәм ҡылыс менән.

— Мин ҡурҡам, йә ул ашар.

— Юҡ, аждаһа ашамай ул. Һоро бүре генә ашай, ҡыҙыл таҡыялы ҡыҙҙы ашаған кеүек. Һине бүре ашаһа, мин уның эсен ярып ҡына ебәрермен. Мин ул бүрене!..

Оксана миңә һыйынғандан-һыйына бара. Үҙе дер-дер ҡалтырай. Өйҙә бөтөнләй ҡараңғы төшә. Тик ишек яғындағы мейес кенә ағарып тора.

— Тыңлағыҙ! Өфө һөйләй! — тип беҙҙең радио һөйләй башланы.

Өләсәй әйткәндәй, рәхәт булып китте. Мин инде, мендәр артынан сығып, яңынан тәҙрә эргәһенә килеп баҫтым. Бына урам ҡапҡаһы асылды. Берәү йүгерә-йүгерә болдорға табан килә. Был әсәйем булырға тейеш. Ҡапҡанан ингәс тә ул ғына шулай йүгерә.

ҺЕҢЛЕМДЕҢ ТӨШӨ

Мин яҙ булғанды бик яратам. Оксана ла ярата, һеҙ ҙә шулайҙыр әле. Бәрәстәр ни эшләй һуң, бәрәстәр! Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! Ҡалай рәхәтләнеп йүгерешәләр, һикерешәләр. Ағы нигеҙ буйында ниҙер еҫкәнеп йөрөгән була. Уның бәләкәс кенә ҡойроғо бер туҡтауһыҙ ҡыймылдап тора. Ә ҡараһы болдорға менә лә һикереп төшә.

Уның уйыны шул. Бер аҙҙан һуң инде икеһе өйҙөң ике мөйөшөнә табан йүгереп китәләр ҙә, шунан килеп, маңлайҙары менән төкөшәләр. Ыҙғышып түгел, былай шаярып ҡына итәләр улар. «Мөгөҙҙәре ҡысыта сабыйҙарҙың», — ти Мансур бабай. Бәрәс сабый була тиме ни! Мансур бабай бәләкәс балаларҙы ғына түгел, ҡолондарҙы, бәрәстәрҙе, эттәрҙе — бөтә хайуандарҙы ла бик ярата шул. Шуның өсөн бәрәстәрҙе «сабыйҙар» тип әйтә лә ул. Яман кешеләр менән фашистарҙы ғына яратмай беҙҙең Мансур бабай. Үҙе шулай ти.

Әсәйем алыҫ ҡалаға киткәс тыуған алалы-ҡолалы быҙау ҙа хәҙер бик ҙур үҫте инде. Ул бер үҙе баҡса буйында уйнап тик йөрөй. Ата ҡаҙ менән инә ҡаҙ үҙҙәренең һары йомғаҡтар төҫлө, бәп-бәләкәс кенә балаларына, ниҙер һөйләй-һөйләй, өй алдын күрһәтеп йөрөй. Ул бәпкәләр әле бөгөн генә ҡураға сыҡтылар. Әсәйем өйҙә саҡта, беҙ уларҙы тотоп-тотоп ҡарағаныбыҙ бар. Оксана әле береһенә һыу ҙа эсерҙе.

Быныһын үҙегеҙгә генә әйтәм. Ҡаҙ бәпкәләренең бер иң матурына мин «Оксана» тип ҡуштым. Эсемдән генә. Ул бәпкәне мин алыҫтан уҡ таныйым. Ана әле ул бәләкәс кенә таш өҫтөнә менеп баҫҡан да, муйынын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бороп, йылынып тора.

Әй тауыҡтар һуң, тауыҡтар! Улар, бөтә тирә-яҡты бер итеп, йырлап йөрөйҙәр. Ҡалай күңелле, ерҙә яҙ булғас! Бөтәһе лә шат, бөтәһе лә уйнай, бөтәһе лә йырлай.

Оксана менән беҙ икәүләп баҡса буйындағы бүрәнәләр өҫтөнә менеп ултырғанбыҙ. Был бүрәнәләрҙән яҡын баҫыу күренеп тора. Баҫыуҙа беҙҙең әсәй машина менән бойҙай сәсеп йөрөй.

— А-а-на, Йәмил, алдағы тракторҙың сәскесенә баҫҡан беҙҙең әсәйҙәр әле, — ти Оксана.

Мин уға табан әйләнеп ҡарайым. Һеңлемдең зәңгәр күҙҙәре тағы ла яҡтырып киткән кеүек була миңә. Уның танау өҫтөндәге ваҡ ҡына сыбар һипкелдәре, ҡояш нурҙарында ялтырап, йымылдағандай күренәләр. Мин Оксанаға тағы ла һыйыныбыраҡ ултырам.

— Оксана, — тим мин, — әйҙә, етәкләшеп ултырабыҙ! — Һеңлем шунда уҡ миңә ҡулын һуҙа. Мин уны етәкләп алам. Әсәй ҙә беҙҙе күреп торалыр әле. «Ана, минең

балаларым ҡайҙа менеп ултырғандар!» — тиҙер әле ул. — Үҫкәс, беҙ ҙә бойҙай сәсербеҙ әле, Оксана, эйе бит?

— Эйе шул. Һин тракторҙа йөрөрһөң, ә мин, әсәй кеүек, сәскескә баҫырмын, йәме? — ти Оксана. Ул шунда уҡ бүрәнә өҫтөнә баҫып күрһәтә.

Оксана тағы минең эргәмә ултыра. Ул ҡапыл күңелһеҙләнеп киткән шикелле тойола. Мин һынаным инде. Шундай саҡта һеңлемдең асыҡ зәңгәр күҙҙәре ҡараһыу булып китәләр. Ул шыбырлап ҡына һөйләй башлай:

— Беҙҙең тағы ла бер әсәй бар ине бит, Йәмил. Ул бик алыҫта, алыҫта ҡалды...

— Әкиәттәме, борон-борон замандамы, Оксана?

— Түгел. Ул да бик һәйбәт ине.

Мин һеңлемдең һүҙҙәрен аңламайым. Нисек инде ул ике әсәй булһын ти? Мин беләм инде — донъяла бөтә кешеләрҙең дә атаһы ла, әсәһе лә берәр генә була. Өләсәйем шулай тип үҙе әйтте.

Мин, Оксана иламаһа ярар ине тип, ҡурҡып киттем. Юҡ, һеңлем иламай. Ул бер һүҙ ҙә өндәшмәй, тик кенә ултырып тора. Ел уның ҡуңыр сәсенә ҡушып үрелгән ҡыҙыл таҫманы һелкетә. Ул таҫма, түбән остағы клуб түбәһенә ҡуйылған флаг кеүек, елберләп тә ҡуя. Үҙем таҫмаға ҡарайым, үҙем Оксананың әйткән һүҙҙәрен ҡабатлайым: «Алыҫта, алыҫта ҡалды...» Кем ул алыҫта ҡалған әсәй? Әсәйем өйгә ҡайтҡас, мин унан да һораным инде. «Оксана һиңә, моғайын, төшөн һөйләгәндер», — ти әсәйем. Ниңә улай төштәр күрә икән минең һеңлем? Оксанаға ниндәйҙер һәйбәт һүҙҙәр әйткем килә.

— Әйҙә, баҡсаға инәбеҙ, Оксана, — тим мин, бик оҙаҡ торғас, — анау ҡайын төбөндәге хазинаны һиңә бөтөнләйгә бирәм. Күрһәң, иҫең китер.

Һеңлем баҡса яғына ҡарай:

— Ҡайын төбөндә әле ер ҙә кибеп бөтмәгән...

— Бөтмәһә ни? Саҡ ҡына ҡалған инде. Ҡояш уны барыбер киптереп бөтәсәк... Әйҙә инде, Оксана!

УҪАЛ АТА ҠАҘ

Ҡапыл урам ҡапҡаһы аҫтынан Марат һеңлеһе Фәһимәнең һары башы килеп сыҡты. Беҙҙең оста ундай һары сәсле ҡыҙ берәү генә. Шунда уҡ түше менән шыуып

ҡына Фәһимә үҙе лә килеп инде. Бер Фәһимә генә түгел, беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡапҡа аҫтынан инеп-сығып йөрөйбөҙ. Әлгесе бейек шул беҙҙең ҡапҡаның. Бер Марат ҡына, ҡапҡаны аса алмаһа, ҡойма башынан үрмәләп инә. Йәнәһе, ҙур, имеш, һигеҙ менән бара.

Фәһимәне күргәс, Оксана көлөп үк ебәрҙе. Дуҫы килгәс, кем дә шатлана инде.

Фәһимә ике ҡулына ике ҡағыҙ сәүкә тотҡан. Ул, йүгереп килеп, бер сәүкәһен Оксанаға, береһен миңә һуҙҙы. Үҙе һаҡаулап-һаҡаулап һөйләргә тотондо. Ҙурҙар ҙа аптырай инде. Әллә ниңә һаҡаулығы бөтмәй шул Фәһимәнең. Үҙе бит алты менән бара хәҙер.

— Малат дулт сәүкә яһаны дултебеҙгә. Хәҙел Фәлит менән бында киләләл. Сәүкә осолғас, эй ҡыҙыҡ булыл, — ти Фәһимә. Үҙе Оксанаға биргән сәүкәһен кире алып, осороп та ебәрҙе. — Күлдеңме? — Ҡағыҙ сәүкә ҡыйпылып-ҡыйпылып осоп китте. Оксана ҡыуанысынан ҡул сабып ҡуйҙы.

Икенсе сәүкәне мин Оксанаға бирҙем. Ҡағыҙ ҡош әйләнеп-әйләнеп осоп китте лә теге бәләкәс бәпкә эргәһенә барып ҡунды. Бәпкә ҡурҡыуынан, ахыры, баҫҡан еренән йығылып төштө. Мин һиҙмәй ҙә ҡалдым — һеңлем бәпкә янына тороп йүгерҙе. «Ой бәләкәсем, тәпәйең ауырттымы әллә?» — тип ҡаҙ бәпкәһен күтәреп алмаҡсы булды. Тап шул ваҡыт ата ҡаҙ, асыу менән осоноп, һеңлемдең күлдәген килеп тешләне. Унан һуң, ҡанаттарын киң йәйеп, Оксананы һуғып та йыҡты. Һеңлем әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе. Фәһимә иларға уҡ кереште.

Мин, йүгереп барып, ата ҡаҙҙың ҡанатына тотондом. Ул шунда уҡ Оксананы ысҡындырҙы ла минең беләгемде суҡып алды. Ҡаҙҙың ҡанаты ҡулымдан ысҡынып китте. Ата ҡаҙ тағы ла асыулана төштө, ахыры. Инде ике ҡанаты менән бер юлы мине туҡмай башланы. Мин ата ҡаҙҙың тоноҡ уҫал күҙҙәрен генә күреп ҡалдым. Үҙем нимәгәлер абынып киттем. Шунан һуң бер ни күрмәнем дә, ишетмәнем дә, ике ҡулым менән битемде ҡаплап, бөгәрләндем дә ергә йөҙ түбән яттым. Иламаным да, ҡысҡырманым да. Әйберем ауыртҡанда, минең илай торған ғәҙәтем юҡ. Ә ата ҡаҙ мине һаман өҙгөләй бирҙе...

Кемдер мине күтәреп алды ла баҫтырып ҡуйҙы. Бер күҙемде асҡанда, минең алда Мансур бабай тора ине. Уның янында Мараттар, Фәриттәр, Фәһимәләр буталып йөрөй. Ә Оксана әле булһа күҙҙәрен ыуа-ыуа илап тора. Мине йәлләп илай ул, беләм инде.

— Ике күҙеңде лә ас әле, улым, — ти миңә Мансур бабай, — хайуан түгел был ҡаҙ, дошман был. Харап итә яҙҙы бит баланы.

Шунда уҡ минең күңелем тулып китте. Өҫтөмдәге йәшел күлдәгемдең йыртылып бөткәнен күргәс, тағы ла ҡыйыныраҡ булды.

— Нисә әйттем Көнбикәгә: ата ҡаҙ түгел был, йыртҡыс был. Балаларҙың йөрәктәре ярылыуы бар. — Бабайҙың тауышы миңә шундай яғымлы булып ишетелә. Уның муйынынан ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлағым килә минең. Ә Марат эре генә һөйләнгән була.

— Ярылды ти, мине ҡоторған эт талаһа ла, ярылманы әле. Миңә ҡапһа, ҡаҙығыҙҙың муйынын бороп ташлаған булыр инем.

— Ташлал инең. Әтәстән дә ҡулҡаһың әле.

— Ә һин ҙурҙар һүҙенә ҡыҫылма. Бар, ҡурсағыңды уйна.

— Фәһимә дөрөҫ әйтә. Һин — маҡтансыҡ, — ти Фәрит.

— Минме?

— Һин!

Мин Мараттың артына йәшергән йоҙроғон күреп ҡалдым.

— Эй һеҙ, күҙгә әтәстәр, көш! — ти Мансур бабай. — Татыу ғына уйнағыҙ. Туҡта, Оксана ҡыҙым, илама инде. Хәҙер әсәйегеҙ ҡайтыр. Иртәгә Май байрамы бит, балалар. Татыулыҡ кәрәк. — Шуларҙы әйткәс, аралағы ҡапҡанан сығып та китте.

ЕҢЕҮ АЛМАҒАСТАРЫ

Иртәгә Май!

Беҙ инде бөтәһен дә онотторҡ. Бишәүләшеп тотоноштоҡ та һикерә башланыҡ:

— Иртәгә Май! Иртәгә Май! Иртәгә Май!

— Тәзкилә апай мине илтәгә уламда йөлөлгә алып сыға, белдеңме?

— Ә беҙ үҙебеҙ барабыҙ, әсәйем ебәрә, — ти Оксана. — Флагтар ҙа тоторбоҙ — ҡыҙыл ситсанан яһалғанды.

— Әйҙәгеҙ, бишәүләшеп бергә барабыҙ, юҡ — алтаулашып. Минең ҡустым Заман да эйәрһен, — быны Фәрит шулай ти. Ул гел генә бергә йөрөргә ярата. Марат кеүек түгел.

— Ә кем беҙҙең башлыҡ булыр һуң? Юрамал ғына звеновод йә бригадир?

— Юрамал түгел, ысын кәрәк. Звеновод та түгел, вожатый.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә: «Марат булһын, Марат булһын», — тибеҙ.

— Тик Малат мине төлткөләмәһен, ялалмы? — ти Фәһимә.

— Вожатый төрткөләмәй ул. Бик белеп тор уны. Тик һаҡау көйөңә күп һөйләнеп йөрөмә. — Юҡ, Марат был юлы һеңлеһенә асыуланмай. Вожатый булған өсөн генә шулай ҡысҡырып һөйләй.

Марат беҙҙе, еңдәрҙән тотоп-тотоп, теҙеп ҡуя. Иң алға Фәритте, унан Оксананы, унан мине, иң аҙаҡтан Фәһимәне баҫтыра. Үҙе, бер ситтә генә тороп, команда бирә башлай:

— Алға! Бер, ике, өс! Бер, ике, өс!

Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ! Тик Фәһимә генә, нигеҙ буйындағы бәрәстәргә ҡарап, тороп ҡала. Беҙ ҡапҡа төбөнә яҡынлашҡанда ғына ул, йомғаҡ кеүек тәгәрәп, килеп етә. Марат беҙгә туҡтарға ҡуша.

— Туҡтағыҙ, тим бит инде! Бер, ике!

Шул саҡ ҡапҡа асылып китә. Төбө-тамыры менән ҡуптарылған кескәй генә ағастар күтәреп, әсәйем килеп инә. Уның ҡояшта янған битендә бөрсөк-бөрсөк тир тамсылары ялтырап тора. Асыҡ ҡапҡа төбөндә туҡтап, әсәй аптырап ҡала:

— Был ниндәй ғәскәр тағы?

Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер юлы яуап бирәбеҙ.

— Иртәгә Май! Марат — беҙҙең вожатый.

Әсәй оҙаҡ итеп миңә ҡарап тора. Уның йөҙөндәге йылмайыуы аҡрынлап юғала. Ул, бошоноп, минән һорай:

— Ә һин һуң, Йәмил, ҡайһы фронтта булдың?

Мин өндәшмәй генә башымды эйәм. Оксана менән Фәһимә икеһе бер юлы ата ҡаҙҙы һөйләй. Марат өҫтәп ҡуя:

— Көнбикә апай, Мансур бабай менән беҙ булмаһаҡ, Йәмил бөткәйне бөгөн, — тигән була.

Ҡулындағы ағастарын баҡса ҡапҡаһы янына илтеп ташлай ҙа әсәй Оксана менән мине етәкләп ала.

— Иҫәрҙәр, — ти әсәй йомшаҡ ҡына, — шулай һаҡһыҙ йөрөмәйҙәр инде. Һәр кемгә лә бала ҡәҙерле бит. Кешегә лә, ҡаҙға ла. Бөгөн бойҙайҙы сәсеп бөтөрҙөк. Төштән һуң мин эшкә бармайым. Бына алмағастар алып ҡайттым. Сәй эскәс, бергәләшеп шуларҙы баҡсаға ултыртырбыҙ. — Ул Маратҡа боролоп, өҫтәп ҡуя: — Һин дә отрядыңды алып кил, вожатый, яраймы?

— Ярай, Көнбикә апай, — ти Марат, ҡысҡырып. Үҙе Фәрит менән Фәһимәне урамға төрткөләп алып сығып китә. Әсәйем, ҡапыл ғына эйелеп, ике ҡулы менән икебеҙҙе ҡосаҡлап, биттәребеҙҙән үбеп ала. Үҙе аҡрын ғына һөйләнә: «Балаҡайҙарым, күгәрсендәрем!» — ти.

Сәй эскәс, беҙ өсөбөҙ ҙә баҡсаға сыҡтыҡ. Әсәйем үҙе тимер көрәк алды. Оксана менән миңә бәләкәс тимер тырманы тоттторҙо. Бер тырманы, икәү егелгән булып, һөйрәп килдек.

Баҡсаға ингәс тә, әсәй, көрәген кәртәгә һөйәп, беҙҙең ҡулдағы тырманы алды. Ул башта былтыр сөгөлдөр ултыртылған түтәлдәрҙең сүптәрен бер урынға тырматып өйөп ҡуйҙы. Оксана менән беҙ ул сүптәрҙе ҡойма буйына ташып та бөтөрҙөк.

Унан һуң әсәйем алға килеп төшкән сәс толомон артҡа ташланы ла көрәккә тотондо.

— Мәгеҙ, инде һеҙ бүтән түтәлдәрҙе тырматығыҙ, — тине әсәй, — ә мин ҡаҙырға тотонам.

Ул көрәген батырып-батырып ерҙе ҡаҙый башлай. Ағасты ултыртыу өсөн, башта соҡор яһарға кәрәк шул. Кисә генә Мансур бабай ҙа шулай итте. Ул да ике алмағас, дүрт сейә ағасы ултыртты. Үҙе Оксана менән беҙгә әйтә: «Был ағастарҙың емештәрен мин күрә алмам инде, балалар, ҡартайҙым, — ти. — Ә һеҙ үҫеп етеүгә, уларҙың емештәре өлгөрөр. Мин күрмәһәм, һеҙ күрерһегеҙ. Мин шуға ризамын...» Бабай, билен ыуа-ыуа, саҡ ҡына баҫып тора ла тағы һөйләй башлай: «Донъяла кеше үҙе өсөн генә йәшәргә тейеш түгел. Ана, ҡояшты ҡарағыҙ, ул бөтә ерҙе йылыта...»

Беҙ, Оксана менән икәүләп, ҡулдарыбыҙҙы ҡаш өҫтөнә ҡуйып, күккә ҡарайбыҙ. Баш өҫтөндә, ҙур күк түбәһендә, бәләкәс кенә ҡояш тора. Ул үҙе эҫе, үҙе яҡты.

Эшләгәндә, беҙҙең әсәй һөйләнергә яратмай. Ана әле лә шәп-шәп итеп ерҙе ҡаҙый. Эйелгәндә, уның сәс толомдарына тағылған сулпылары сылтырап китә.

Оксана менән беҙ, тырмаға егелеп, бүтән түтәлдәрҙе тырматып йөрөйбөҙ. Тик ниңәлер әсәй тырматҡандағы кеүек түгел, сүптәр, йыйылып, өйөлмәй.

Урамда берәү һыҙғырып ебәрҙе. Был Марат инде, ул ғына шулай һыҙғыра белә. Шунда уҡ ҡойма өҫтөндә Мараттың башы ҡалҡып сыҡты. Тик, әсәйҙе күреп алғас, тиҙ генә кире боҫто. Әсәй өйҙә саҡта, ул ҡойма башынан йөрөргә шикләнә. Шул арала Заман, Фәһимә, Фәрит бер-бер артлы ҡапҡа аҫтынан шыуып инеп тә еттеләр. Был юлы вожатый үҙе лә тегеләр ингән ерҙән генә инде.

Беҙҙең янға иң алдан Заман йүгереп килеп етте. Уға бер көн генә дүрт йәш тулды, ә үҙенең бүрке миңә лә ҙур. Башы ҙәү уның бик.

Заман әсәй ҡаршыһына уҡ килеп баҫты.

— Көнбикә апай, беҙҙең әсәйҙең уймағы баҙға төшөп китте. Эй эҙләнек — табып булманы, алыҫ ҡасҡан, — ти Заман, үҙе йәһәт кенә баҡсаның арғы яғына йүгереп китә.

Әсәй, эшенән туҡтамай ғына, көлөп ҡуя.

— Көнбикә апай, миңә Сибәл әбей матур күлдәк текте, Май байламына.

Марат уға турһайып ҡарай:

— Күлдәк тә күлдәк, ти, ә атайҙан килгән хатты әйтмәй. Көнбикә апай, әле генә атайымдан хат килде. «Еңеп бөтөп барабыҙ инде», — тигән.

— Беҙҙең атайҙан да килде инде, иртәнсәк, — ти Оксана, — белдеңме!

Әсәй, көрәгенә таянып, беҙгә ҡарап тора. Уның йөҙө шундай яҡты. Эсендәге шатлығы шулай һәр ваҡыт уның төҫөнә сыға. «Көнбикәнең эсендә ҡыуанысы булһа, ул үтәнән-үтә күренеп тора, йөрәгендә тап юҡ минең баламдың», — ти өләсәй.

— Байрам килә, балалар, беҙҙең урамға ҙур Еңеү байрамы килә, — ти әсәй. Уның тыныс тауышы миңә бик матур йыр төҫлө ишетелә.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер юлы ҡысҡырып ебәрәбеҙ:

— Байрам килә! Байрам килә!

Оксана менән Фәһимә, ҡулдарын болғай-болғай, һикерергә үк тотоналар.

* * *

— Әйҙәгеҙ, балалар, — ти әсәйем, — хәҙер инде алмағастарҙы ултырта башлайыҡ. Үҙегеҙ ҙур үҫкәс, бәләкәстәргә һөйләрһегеҙ: «Был алмағастар фашисты еңгән йылды ултыртылды, туғандар», — тип әйтерһегеҙ. «Еңеү алмағастары былар», — тиерһегеҙ. Барығыҙ, малайҙар, ағастарҙы берәмләп кенә бында ташығыҙ.

«Малайҙар» тигәс, Заман да беҙгә эйәргән булды. Үҙе беҙ күтәргән ағастың сыбығына ғына тотоноп йөрөй.

Әсәй беҙ ташыған алмағастарҙы соҡорға баҫтырып ҡуя ла беҙҙең өсөбөҙгә — ҙур малайҙарға — аҙ ғына күтәреп тотоп торорға ҡуша. Үҙе көрәк менән ағастарҙың төптәрен күмә. Оксана менән Фәһимә кәртә буйында үҫкән һары сәскәләрҙе йыйып йөрөй. Ә Заман бөтә эште лә эшләй. Эшләй тигәс тә, бутала инде шунда. Әле беҙ тотоп торған ағасҡа килеп йәбешә, әле усы менән соҡорға тупраҡ һалған була.

— Бына Замандың, исмаһам, эшләмәгән эше юҡ, — ти әсәй, — тик танауын һөртөп алырға ғына ваҡыт теймәй.

Заман шунда уҡ еңе менән танау аҫтын ышҡып ала. Беҙ малайҙар менән пырхылдап көлөп ебәрәбеҙ. Көлмәҫлек тә түгел шул: Замандың түшендә мөйөшөнән булавка менән ҡаптырып ҡуйылған ҡулъяулыҡ бар. Үҙе танауын еңенә һөртә. Беҙ көлгәс, ул танауын ҡулъяулығы менән икенсе ҡат һөртөп ҡуйған була. Бала тиһәң дә бала шул.

Бына беҙ бөтә ағастарҙы ла ултыртып бөтөрҙөк. Уларҙы үҫеп ултырған ысын ағастарҙан айырып та алырлыҡ түгел. Бөтәбеҙ ҙә иң аҙаҡтан ултыртылған ағас янына йыйылдыҡ. Мин ағастарҙы һанап ҡарайым: берәү, икәү, өсәү, дүртәү, бишәү. Бөтәһе биш ағас. Эсемдән генә уйлап торам: быныһы атайыма, быныһы әсәйемә, быныһы Оксанаға, быныһы миңә була. Ә бишенсеһе кемгә була һуң?

— Ә бишенсе алмағас кемдеке була һуң, әсәй? — тим мин.

— Нисек — кемдеке?

— Нисек булһын, шулай. Дүртеһе — дүртебеҙгә, быныһы кемгә була?

Әсәйем, йылмаймайынса, тыныс ҡына яуап бирә. Әллә асыулана инде:

— Өйҙәге нәмәне бүлешмәйҙәр уны, улым. Бөтәһе лә беҙҙеке. Ана тау буйындағы ҙур баҡса ла беҙҙеке.

— Һеҙҙеке генә түгел әле ул, Көнбикә апай, уны минең әсәйем дә ултыртты, — ти Марат. — Мин дә дүртте ултырттым.

— Шуның өсөн дә, беҙҙең барыбыҙҙыҡы, тим дә баһа, берәү ҙә бит бүлешеп йөрөмәй.

Оксана әсәйҙең итәгенә һыйына. Әсәй уның башын һөйөп ала.

— Әсәй, — ти Оксана, — ысынлап түгел ти, юрамал ғына ти, әсәй, йәме?

— Нимә, ҡыҙым? — Әсәй Оксананы бөтөнләй эйелеп тыңлай.

— Юрамал ғына ти, әсәй,— бишенсе алмағас кемгә булыр икән?

Әсәй Оксананы ҡосаҡлап күтәреп ала:

— Ҡыҙым да һорағас, әйтәйем инде: бишенсе алмағас килгән ҡунаҡтыҡы булыр, йәме?

Әһә, әсәй дөрөҫөн әйтте. Беҙ өйҙә өсәү генә торабыҙ. Беҙҙең ултырғысыбыҙ бишәү, сынаяҡтарыбыҙ алты пар, тәрилкәләр тағы ла күберәк. Кем өсөн һуң уның артығы? Хәҙер белгәнһегеҙҙер инде — ҡунаҡтар өсөн. Беҙ ҡунаҡ килгәнде бик яратабыҙ. Мансур бабай бер көн әйтә: «Ҡунаҡ йөҙөн күрмәгән кеше шатлыҡ йөҙөн күрмәй ул», — ти, беҙҙең радио һөйләгәнде тыңлағас. Әллә радио берәйһен ҡунаҡҡа саҡырҙымы икән?

— Бына балаларға ҙур рәхмәт, хәҙер уйынығыҙҙа булығыҙ инде, — ти әсәй.

— Көнбикә апай, миңә лә рәхмәтме? — тип һорай Заман.

— Заманға рәхмәттең иң ҙурыһы инде, — әсәйем шулай тип Заманды үбеп ала. — Замана балаһы һин, Заман!

— Эйе, — тип Заман баш ҡаға.

Тегеләр баҡсанан сыҡҡанда, мин йүгереп кенә хазинам эргәһенә барып киләм. Ҡайын төбөндә саҡ ҡына һыу бар шул әле. Хазина һарайы шул һыуҙың аҫтында ята.

Мин яңы ултыртылған бер алмағас янында саҡ ҡына туҡтап торам. Был алмағас — арала иң матуры. Эсемдән генә, шул иң матуры Оксанаға булыр, тип уйлайым. Уны саҡ ҡына һыйпап та ҡуям мин.

Урам ҡапҡаһы төбөндә тегеләрҙе ҡыуып етәм, ҡапҡаны әсәйем үҙе асып бирә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә урамға сығып йүгерәбеҙ. Мин Оксананы етәкләп алам да артыма әйләнеп ҡарайым. Әсәй, көрәк һабына таянып, ҡарап ҡала. Ә беҙ Тимербулат бабайҙар тыҡрығынан Ҡыр яғына уҡ сығып китәбеҙ. Ауылдың ул яғын шулай «Ҡыр яғы» тип йөрөтәләр. Унда тәрән соҡор ҙа, һай соҡор ҙа бар. Йәй көнө шунда быҙауҙар ҙа, бәрәстәр ҙә, тайҙар ҙа үлән ашап йөрөйҙәр.

СУҠЛЫ БАШМАҠТАР

Мин Ҡаҙанғол һыртына килеп еткән көтөүҙе күреп ҡалдым. «Көтөү ҡайтты, малайҙар!» — тип ҡысҡырып та ебәрҙем. Иң алдан кәзәләр, унан һуң һарыҡтар урам осона сабышып килеп тә инделәр. Быҙа ҡалай оҙаҡ уйнағанбыҙ Ҡыр яғында. Беҙ бөтәбеҙ ҙә урамға табан йүгерҙек.

Беҙҙең ҡапҡа асыҡ ине. Көтөү ҡайтыр алдынан беҙ шулай асып ҡуябыҙ ҡапҡаны. Оксана менән икәүләп йүгерешеп болдорға килеп мендек. Ә беләһегеҙме ни күрҙек беҙ болдорҙа?! Ишек янына ғына һөйәп ҡуйылған таяҡ күрҙек. Еҙ башлы ҡара таяҡ. Кем таяғы тиһегеҙме? — Тимертауҙағы өләсәй таяғы ул. Быҙа кемдең таяғы килгән беҙгә!

Беҙ, таяҡты тотоп та ҡарамайынса, өйгә атлығып керҙек. Өләсәйем, ҡыҙыл камзулын кейеп, өҫтәл артында ултырып тора. Оксана менән икебеҙ ҙә өләсәйҙең муйынына килеп аҫылынабыҙ — һеңлем алдан, мин арттан ҡосаҡлайым. Уны күргебеҙ килеп бөткәйне шул инде. Әсәйҙәрҙең март байрамынан бирле килгәне юҡ ине беҙгә. «Һай, зирәктәрем», — ти өләсәй. Көлгән саҡта уның ауыҙындағы кителгән теше күренеп ҡала. Мин өләсәйемде уйлағанда, уның шул теше шау ғына күҙ алдыма килә.

Өләсәй ҡулдарын камзул кеҫәләренә тығып ала. Ул башта беҙгә кеҫәһенән ике йомортҡа сығарып бирә.

Икебеҙгә лә берәрҙе. Унан һуң ҡағыҙға төрөлгән тағы бер нәмә килтереп сығара. Ни икән ул ҡағыҙ эсендә? Өләсәй төргәкте тиҙ генә һүтеп ташлай. Төргәк эсенән муйыл күҙле бәләкәс кенә ҡамыр турғайҙар килеп сыға. Былары беҙгә икешәрҙән тейҙе. Ул турғайҙарҙы өләсәйем үҙе бешерә белә.

Өләсәйҙең итәгенән төшөп, һеңлем менән икәүләп һандыҡ өҫтөнә барып ултырабыҙ ҙа турғайҙарҙың ҡойроҡтарын тешләп алабыҙ. Мин уларҙы Оксананан йәһәтерәк ашап бөтөрәм. Һуңынан ғына муйылдарын сыртлатып сәйнәп ҡуйған булам.

Өләсәй менән әсәй бер-береһенә ҡарашып ала ла әсәйем шаршау эсенә инеп китә. Беҙ теге бүлмәне, шаршау менән бүленмәһә лә, шаршау эсе тип йөрөтәбеҙ. Шаршауы юҡ, ә шаршау эсе бар — ҡыҙыҡ инде шулай.

Әсәй, ике ҡулын артҡа йәшереп, шунда уҡ кире сыға.

— Быныһы кемгә? — тип һорай ул.

— Низең быныһы һуң, әсәй?

— Һуңынан күрерһегеҙ, әйтегеҙ инде тиҙерәк, — тип ҡабаландыра өләсәй. Мин әллә ни эшләп китәм. Тыным ҡыҫылғандай булып ҡала.

Әсәй, башы менән һул яҡҡа күрһәтеп, яңынан һорай:

— Улай булғас, һин әйт, Оксана, кемгә быныһы?

— Йәмилгә!

— Ә тегенеһе Оксанаға! — тип әйтеп өлгөрәм мин. Әсәй икебеҙгә лә бер юлы берәр пар башмаҡ һуҙа, өрйәңы күн башмаҡтар.

— Өләсәйегеҙ һеҙгә Май бүләге итеп алып килгән уларҙы, рәхмәт әйтегеҙ, — ти әсәй. Беҙ икебеҙ ҙә өләсәйгә һыйынабыҙ: «Рәхмәт һиңә, өләсәй!» — тибеҙ.

Их, күрһәгеҙ ине ул башмаҡтарҙы! Дүртеһе лә һары күндән тегелгән, дүртеһенең дә йөҙөндә ҡыҙыл күндән яһалған суҡтары бар. Бына башмаҡтар, исмаһам! Мин уларҙың суҡтарын һыйпап-һыйпап ҡарайым.

— Йәгеҙ, кейеп ҡарағыҙ әле, балалар, таманмы икән? — ти өләсәй.

Беҙ тиҙ генә иҫке башмаҡтарыбыҙҙы сисеп ташлайбыҙ. Уларҙы сискәс, әсәй беҙҙе туҡтатып тора:

— Булғас, булғас, бөтәһе лә яңынан булһын инде. Болдорҙағы таста һыу бар, аяҡтарығыҙҙы шунда йыуып инегеҙ ҙә яңы ойоҡтар кейҙерермен.

Болдорға сыҡҡанда ла беҙ башмаҡтарҙы ҡалдырмайбыҙ, алып сығабыҙ. Аяҡтарыбыҙҙы тастағы һыуға тығып, беҙ һөйләшеп ултырабыҙ:

— Ҙур үҫкәс, беҙ ҙә өләсәйгә матур-матур күлдәктәр алып бирербеҙ, матур башмаҡтар тектерербеҙ, йәме, Йәмил? — ти һеңлем. Үҙе, ике ҡулына ике башмағын кейеп, туп-туп итеп баҫып ҡараған була.

— Мин үҫкәс, шофер булам да өләсәйҙе, әсәйҙе, атайҙы, һине, машинаға ултыртып, ҡалаға ҡурсаҡ театрына алып барам. Йәме, Оксана?

— Ә мин үҫкәс, өләсәйгә үҙем яңы камзул тегәм. Мин бит тегеүсе булам. Машинаны әйләндерәм дә тек-тек тегәм дә ҡуям.

— Һин өләсәйгә тун да тек, Оксана, уның туны туҙған инде...

Әсәй өйҙән тәҙрә ҡаға, үҙе, беҙҙе саҡырып, ҡулын болғай. Беҙ, болдор иҙәнендә эҙҙәр яһап, саҡ ҡына йөрөйбөҙ ҙә, әсәй биреп сығарған сепрәккә аяҡтарҙы һөртөп, өйгә инәбеҙ.

— Һеҙ унда әллә һыуға баттығыҙмы?

Ҡыҙыҡ һүҙ әйтә әсәй — тастағы һыуға батып буламы инде?

— Кейеп ҡара ла бейеп ҡара. Бындай башмаҡтар кейгәс, кеше нисек итеп бейемәй түҙеп торор икән? — ти өләсәй.

Башмаҡтарҙы кейгәс, беҙ икебеҙ ҙә иҙән буйлап йөрөп ҡарайбыҙ. Бер Оксанаға, бер үҙемә күҙ һалам. Һеңлем баҫҡан һайын, теге ҡыҙыл күн суҡтар, ҡош ҡанаттары кеүек, елпенеп-елпенеп ҡуялар.

Минең яңы башмаҡтарҙы кейгән көйө урамға сығып йүгергем, бөтә ауылды әйләнеп ҡайтҡым килә. Юҡ, улай ғына ла түгел, анау машиналар үтеп йөрөй торған оло юл менән алыҫҡа-алыҫҡа йүгереп китер төҫлө булам. Үҙем хәҙер үк һеңлемде етәкләп алырға итәм. Ниңә аяҡтар йүгереп китергә генә тора икән был тиклем? Әллә ысынлап та, әкиәттәге итектәр кеүек, үҙҙәре йөрөй торған башмаҡтармы икән былар?

— Һинең урамға сығып йүгергең киләме, Оксана? — тип һорайым мин.

— Килә. Әйҙә, сығабыҙ.

Әсәй беҙҙең янға килә лә, икебеҙҙе ҡосаҡлап алып, һандыҡ өҫтөнә ултырта.

— Ана ҡояш та тау артына төшөп китте. Тауыҡтар ҙа ҡунаҡланы, бәрәстәр ҙә хәҙер йоҡларға ята. Һеҙ иртәгә ҡояш менән бергә тороп сығырһығыҙ, — ти әсәй. — Ҡояш һеҙҙең башмаҡтарҙы күргәс, үҙе лә һоҡланып әле: «Ҡалай матур анау балаларҙың башмаҡтары!» — тип әйтер.

Мин әсәйемдең шулай һөйләгәнен яратам. Ҡояштың ни әйтерен дә белә шул ул, әсәй кеше булғас.

— Әсәй, — ти Оксана, — башмаҡтарҙы айға ла күрһәтербеҙ, яраймы, әсәй!

— Һеҙ йоҡларға ятҡас, ай үҙе килеп тәҙрәнән ҡарай ул.

— Ә йондоҙҙарға?

— Йондоҙҙар алыҫтан күрмәйҙәр, шуның өсөн уларға ай ғына һөйләп бирер. «Бына мин бөгөн ерҙәге ике баланың башмаҡтарын күрҙем, бик матурҙар», — тип әйтер ул. Ә йондоҙҙар йымылдашып көлөргә тотонорҙар. Шатлыҡлы һүҙ ишеткәс, улар ҙа ҡыуанып, яҡтырып китәләр бит.

Әсәй һөйләгәндә, мин һеңлем менән икәүләп йондоҙҙар араһында атлап йөрөгәндәй булам. Бына ниндәй башмаҡтар килтерҙе бит беҙгә өләсәй!

Ҡараңғы төшкәс тә беҙ ятмай торабыҙ. Башмаҡтарҙы һалып ҡуйғы килмәй. Ҡасан ғына иртәнсәк булыр икән? Беҙ иң элек Мараттарға, унан Фәриттәргә барыр инек. Һыу буйына төшөп, ҡомда ла йөрөп ҡарар инек әле.

Өләсәй Оксана менән икебеҙгә урындар һалып бирә. Беҙҙең карауаттарыбыҙ тураһына ғына атайҙың ҙур һүрәте эленгән. Ул — ялан баш, күкрәгендә өс миҙал теҙелеп тора. Мыйығы яҡ-яҡҡа ҡыйылып киткән. Был һүрәт элек бәләкәс кенә ине лә, былтыр уны Хисамиҙарға килгән бер таҡыр башлы, алтын тешле ағай әллә нисек кенә ҙурайтып китте. Ул ағай беҙҙе лә һүрәткә төшөрҙө.

Мин һәр көндө кис атайыма оҙаҡ итеп ҡарап ятам. «Ул ҡайҙа икән әле, ул ни эшләй икән әле?» — тип уйлайым. Оксана ла, билдәле, шулай уйлай. Әле һүрәт асыҡ күренмәй. Ләкин мин барыбер уны күреп торған кеүекмен. Күҙҙе йомоп та таный алам мин атайҙы.

Ниңәлер һаман йоҡлап китеп булмай. Бына урам тәҙрәһенән ай ҡараны. Уның яҡтыһы һандыҡ өҫтөнә төштө. Ә һандыҡ өҫтөндә беҙҙең башмаҡтар тора. Ул мине лә, Оксана кеүек, йоҡлай был, тип уйлайҙыр әле. Мин, күҙ-

ҙәремде саҡ ҡына асып, ҡарап ятам. Ай мине күрмәй. Ни һөйләй икән ул ай хәҙер үҙенең йондоҙҙарына?..

Мин юрғанды башымдан үк ябынып ятам. Ҡапыл Мансур бабайҙың һүҙҙәре миңә яңынан ишетелгән кеүек булып китә: «Иртәгә Май байрамы бит, балалар...» Нисек йоҡо килһен ти инде ошондай саҡта!

АҠТЫ ЛА КИТТЕ БЕР БАШМАҠ

Мин әсәйҙең аяҡ тауыштарын ишетәм. Ул, әкрен генә баҫып, өйҙән сығып китте. Ә мин барыбер ишетәм дә күҙҙәремде асам. Өйҙә яҡты. Һеңлем әле уянмаған. Ул үҙе йоҡлай, үҙе көлә. Уның ҡуңыр сәсе маңлайына килеп төшкән. Мин тороп ултырам. Өләсәйем дә өйҙә күренмәй. Ә башмаҡтар күренә. Улар дүртәүләшеп һандыҡ өҫтөндә торалар. Мин һеңлемде уятам:

— Оксана, ана, ҡояш та сыҡҡан, тор инде.

Ул һаман уянмай. Йоҙроғо менән танау осон ыуып ала. Мин һеңлемдең ҡолағына уҡ эйелеп, бышылдап ҡына әйтәм:

— Оксана, ана, башмаҡтар көтөп тора, уян инде, уян.

Һеңлем ҙур зәңгәр күҙҙәрен асып ебәрә лә һикереп тора. Беҙ икебеҙ ҙә, йәһәт кенә ишек янына барып, биттәребеҙҙе йыуабыҙ. Беҙҙең йыуыуына торған еребеҙ шунда.

Өләсәй һөт күнәген күтәреп килеп инә:

— Бына, йылы һөт эсеп алығыҙ, балалар, — ти өләсәй. Ул икебеҙгә лә күбекләнеп торған һөт һалып бирә.

Һөттө эсеп алғас та, беҙ башмаҡтарҙы кейергә тотонабыҙ. Өләсәй тиҙ генә Оксананың сәсен тарап, теге ҡыҙыл таҫманы тағып ҡуя. Оксананың хәҙер башмағында ла, сәсендә лә ҡыҙыл суғы булды.

— Ниндәй уңған балалар былар, ҡояш менән бергә тороп ултырғандар, — ти әсәй, ингәс. — Барығыҙ хәҙер, сәйгә тиклем урамда уйнағыҙ. Байрамға барғанда, яңы күлдәктәр ҙә кейҙерермен.

Урамда бөтә кеше беҙҙең башмаҡтарға ҡарай. Үҙебеҙ ҙә ҡарайбыҙ. Ҡояш та ҡарай. Ул ҡарамаһа, башмаҡтарҙың өҫтәре ялтырап тормаҫ ине бит.

Беҙ иң элек Мансур бабайҙарға индек. Фәрхениса әбей, кәштәләге төйөнсөктө сисеп, беҙҙең икебеҙгә лә берәр ус сәтләүек бирҙе. «Йылы тәнегеҙҙә туҙһын инде.

Башмаҡтарығыҙ бигерәк матур икән», — ти ул. Үҙенең күҙҙәре күрмәй, ә үҙе беҙҙең башмаҡтарҙың матурлығын белә. Әллә әбейгә Мансур бабай һөйләнеме икән? Ай йондоҙҙарға һөйләгән кеүек.

— Өләсәй килтерҙе, суҡтары ла бар, әбей, ҡыҙыл, — ти Оксана. «Ҡана әле, ҡыҙым» — тип, әбей Оксананың аяғын һәрмәп ҡарай. Үҙе һаман маҡтай. «Бигерәк йомшаҡ та икән үҙҙәре. Бармаҡтарым рәхәтләнеп китте, рәхмәт төшһөн инде өләсәйегеҙгә», — ти ул. «Күҙе күрмәһә лә, күңеле күрә шул әбейегеҙҙең», — тип ҡуя Мансур бабай.

Мансур бабайҙарҙан сығып, Мараттарға киттек. Беҙ етәкләшеп, атлап ҡына барабыҙ. Йүгермәйбеҙ. Үҙебеҙҙең шау ғына түбән ҡарағыбыҙ килеп тора.

Марат келәттәре янындағы бүкән өҫтөндә ағас юнып ултыра. Ул ҡылыс яһай ҙа ҡылыс яһай. Үҙе, танауын йыйырып, беҙгә ҡарап тора:

— Әллә-лә-лә, берәүҙәр яңы башмаҡ кейеп алғанмы ни?

— Кейгән шул.

— Кейһә, иҫ китәме әллә? Мин итек яратам, — тигән булып, ул бысағы менән итек ҡунысына һуғып ала. Үҙе тағы ла беҙҙең башмаҡтарға ҡарай.

Оксана, аяғын күтәреп, башмаҡ табанын Маратҡа күрһәтә:

— Ана, яҙыуы ла бар, — ти. Мараттың иҫе лә китмәгән була.

Мин, салбар кеҫәһенән алып, Маратҡа үҙемдең ус менән бер ус сәтләүек бирәм. «Рәхмәт, — ти миңә Марат. — Башмаҡ ҡотлағандар инде, беләм. Суҡтары матур ғына. Һиңә лә ҡылыс яһармын».

Әллә ниндәйерәк шул Марат. Үҙе вожатый, үҙе эре, үҙе барыбер дуҫ.

Мараттарҙың өй ишеге асылды ла унан йылт итеп Фәһимә килеп сыҡты. Ул беҙгә табан йүгерә, үҙенең һары сәсе, тай ялы кеүек, елбер-елбер итеп китә. Өҫтөндәге сәскәле-сәскәле яңы күлдәге күҙ яуын алып тора. Фәһимә, килеп еткәс, Оксананан һорай:

— Матурмы минең күлдәгем?

Оксана уның сәскәле күлдәген тотоп-тотоп ала. «Эй матур!» — ти, ә үҙе түбән ҡарай. Фәһимә, әйләнеп-әй-

ләнеп күлдәген маҡтатҡанда, Оксананың башмаҡтарын күреп ҡала.

— Ой, ниндәй башмаҡтал кейгән! Йә, йөләп ҡала әле. Киләhе йыл миңә лә шундайҙалды алылдал әле! Суҡталы ла суҡталы! Әйҙәгеҙ, hыу буйына балабыҙ.

Марат өндәшмәй генә бысағы менән ҡылысын бүрәнә ярығына килтереп ҡыҫтыра. Унан hуң күлдәгендәге юнышҡыларҙы ҡағып ташлай. «Әйҙәгеҙ!» — тип, беҙҙе урамға алып сыға.

Беҙ hыу буйына төшкәндә, арттан Фәрит менән Заман да килеп етә.

— Беҙ бәрәмәстәр бешерҙек, Оксана, тәмлене, ике икмәк тә hалдыҡ, — ти Заман, үҙе, эйелеп, hеңлемдең башмаҡ суғын тотоп алырға итә. Уны Фәhимә саҡ ҡына төртөп ебәрә:

— Өҙәhең бит инде, Заман! — Заман асыуланмай. Ул, Сәғит Ильясы кеүек, ебегән малай түгел.

Ә беҙҙең hыуҙы күргәнегеҙ бармы hуң? Юҡтыр шул. Ана ул Фәриттәр йортоноң аяҡ осона ағып килә лә туғай яғына табан боролоп китә. Беҙгә табан түгел, беҙҙең аяҡ осонда Ҡыр яғы ғына. Һыуҙың исеме Көмөшлө. Йәй көнө беҙ унда hыу кереп йөрөйбөҙ. Әле hыуы hалҡын уның. Таш ырғытhаң, теге ситенә еткереп тә булмай. Бына ниндәй киң ул! Беҙҙең Көмөшлө бер үҙе генә аға-аға ла бик алыҫ бер еркәйҙә Ағиҙелгә барып ҡушыла. Унан икәү булалар. Ә Мансур бабай әйтә: «Көмөшлөнөң hыуы диңгеҙгә барып етә», — ти. Етәләр ҙә шул, шау ғына ағып торғас. Үҫкәс, hеңлем менән беҙ ҙә диңгеҙгә, балыҡсы бабай алтын балыҡ тотҡан ергә, барып етербеҙ әле.

Бына ошо инде беҙҙең Көмөшлө тигән hыу. Беҙ уны Көмөш кенә тип йөрөтәбеҙ.

Башта беҙ яр буйындағы еүеш ҡомлоҡта эҙҙәр яhап йөрөнөк. Иң матуры — яңы башмаҡтарҙың эҙе инде — Оксана менән минең эҙ.

Шунан hуң, нисә ҡалас ашармын тип, ҡыйпылсыҡ таштарҙы hыу өҫтөнән hикертеп-hикертеп ырғытып уйнаныҡ. Һыу өҫтөндә таш нисә ҡат hикереп китhә, шул тиклем ҡалас ашаған булаhың. Иң күп ҡалас ашағаны Марат менән Фәрит булды. Оксана менән Фәhимә берҙе лә ашамағайны ла, мин — Оксана өсөн, Марат Фәhимә

өсөн икешәрҙе ҡыйпылдырып бирҙек. Заман ҡомда тирмән тартып ҡына ултырҙы.

Беҙ, өс ҙур малай, тал сыбыҡтарынан, төрлө юнышҡыларҙан һал яһарға тотондоҡ. Һал бик ҡыҙыҡ ағып китә ул беҙҙең һыуҙа. Фәрит, тал ҡабығын һуйып, һалды нығытып бәйләп тә ебәрҙе. Һал әҙер генә булғас, беҙҙең янға түбән ос малайҙары килеп етте. Улар ҙа беҙҙең кеүектәр — ҙур ҙа түгел, бәләкәй ҙә түгелдәр. Тик Хәйбулла Рушаны ғына уҫал. Беҙ Оксана менән почтаға атайға яҙған хатты илтергә барғанда, ул гел таш ырғытып ҡала. Үҙенең бер тейҙерә алғаны юҡ. Йә ҡулы салыш ырғыталыр әле.

— Һаумыһығыҙ, юғары остар, — тигән була уларҙың Әхәте, үҙе бер Марат менән генә күрешә.

— Һаумыһығыҙ, түбән остар, — тип яуап ҡайтара беҙҙең Марат. Ҙур малайҙар ҙа осрашҡанда шулай итәләр.

Һал өҫтөнә һалырға тип, мин ҡоро үлән, ағас япраҡтары йыйып йөрөнөм. Оксана менән Фәһимә яр ситендә генә башмаҡтарына тулған ҡомдо ҡағып ултыра. Һеңлем бер башмағын ҡулына тотҡан, икенсеһен һалып, эргәһенә ҡуйған.

— Һал әҙер! — тине Марат. Уны ипләп кенә һыу ситенә килтереп һалды. Фәрит, ботинкаларын сисеп, салбар балаҡтарын төрҙө лә һалды эскә этеп ебәрҙе. Тап бына шул мәлдә күктән осоп, һал өҫтөнә бер һары башмаҡ килеп төштө. Мин Рушандың һелтәнгән ҡулын ғына күреп ҡалдым. Башта аяҡтарыма ҡараным. Минең ике башмағым да кейелгән көйө тора. Шунда уҡ ялт итеп һеңлем яғына әйләндем. Ул һаман да бер башмағын ҡулына тотоп ултыра. Үҙҙәре Фәһимә менән ҡысҡырыпҡысҡырып һөйләшәләр. Ә икенсе башмаҡ уның эргәһендә күренмәй.

— Башмаҡ! — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин, аҙыраҡ торғас.

Мин ҡысҡырғанға тиклем үк, Марат итектәре менән һыуға инеп китте. Һыу биленә еткәс, ул кире боролдо. Ә һал һаман эскә табан китте. Яр башында һеңлем илап ебәрҙе. Малайҙар араһында тартҡылаш башланды. Фәрит Рушанды төртөп йыҡты. Түбән ос малайы Әхәт үҙе Рушандың арҡаһына һыҡты. Рушан урам яғына табан тороп йүгерҙе. Ә беҙ һалға ҡараныҡ та ҡалдыҡ. Ул һыу-

зың уртаһына уҡ йөҙөп сыҡты. Һал өҫтөндә ҡыҙыл суҡлы башмаҡ, һеңлемдең башмағы, бара.

— Их, кәмә булһа! — ти Әхәт.

— Ә йәй булһа һуң, мин йөҙөп барыр ҙа тотор инем...

— Ә мин сумып ҡына...

Мин һеңлем эргәһенә киләм. Ул тыбырсына-тыбырсына илай. Уға ҡушылып Фәһимә менән Заман да илай.

— Илама, Оксана, илама, хәҙер сисәм дә бер башмағымды һиңә бирәм, — тим мин, үҙем һаман һалға ҡарайым. Һал алыҫайғандан-алыҫая бара. Хәҙер башмаҡтың суғы ла күренмәй. Китте өләсәйем Май бүләге итеп килтергән бер башмаҡ...

Мин яр буйлап һуҙылған таҡыр һуҡмаҡты күреп ҡалдым. Беҙ, ул һуҡмаҡтан йүгереп, әллә ҡайҙа тиклем еткәнебеҙ бар.

Берәүгә лә әйтеп-нитеп тормай, башмаҡ артынан торҙом да йүгерҙем. Яр буйынан ғына һуҡмаҡ үҙе алып бара. Мин, әҙерәк киткәс тә, һуҡмаҡ арҡыры ятҡан сыбыҡ-сабыҡҡа абынып йығылдым да танауым менән һөрлөгөп киттем. Танау аҫтынан йылы нәмә тама ла башланы. Ҡул һыртым менән һөртөп алдым — ҡан! Һикереп торғас та, һыу өҫтөнә ҡараным. Һал инде күҙҙән юғалып бара. Мин ҡысҡырып илап ебәрҙем дә тағы ла шәберәк йүгерергә тотондом.

Инде һал менән минең ара яҡыная башланы. Йылғаның бер боролған ерендә башмаҡты ҡыуып та еттем. Ана бара ул. Үрелеп кенә алыр инем дә бит, буй етмәй. Их, әкиәт малайы булһам ине мин! Берәй аҡҡош килер ине лә суҡышына ғына эләктереп алып бирер ине шул башмаҡты. Мин дә уның берәй йомошон тыңлар инем.

Бик оҙаҡ барғас, һал йылға өҫтөнә ауған бер ҙур талдың ботағына килеп эләкте. Бер аҙ тартышып торғас, ул тағы ысҡынып китте лә һыу өҫтөндә әйләнә башланы. Ситкә лә сыҡмай, уртаға ла китмәй. Өйөрөлөп тик йөрөй бер тирәлә. Ырғаҡлы берәй оҙон ҡолға булһамы, мин тартып ҡына алыр инем дә бит...

Ҡояш һыу өҫтөн ялт иттереп ялтыратып тора. Ҡарап та булмай, күҙ сағыла. Күрмәйме икән ни инде? Иртән үҙе шатланып ҡараған башмаҡтарҙың береһе ни хәлгә төштө бит!

Мин, һыуҙың ситенә үк килеп, ҡарап торам. Ағып барған ҙур ағастың башы һалды төртөп ебәрҙе. Һал, әйләнмәнән ысҡынып, йәнә ағып китте.

Һал аға — мин йүгерәм, һал аға — мин йүгерәм. Диңгеҙ алыҫмы икән әле? Алыҫ та ҡалмағандыр инде. Диңгеҙгә етеп булһа ла, тотормон мин ул башмаҡты! Бер ҙур ағас төбөнә еткәс, минең алдыма ялбыр ҡолаҡлы ала эт килеп сыҡты. Ул, ике аяғын һуҙып, һуҡмаҡҡа ултырҙы ла ҡуйҙы. Үҙенең ауыҙынан оҙон ҡыҙыл теле һалынып төшкән. Мин ҡурҡманым унан, тик илауымдан ғына туҡтаным. Башта этте бер ситтән урап үтергә уйлағайным, ялбыр ҡолаҡ минең алға һикереп сыҡты ла ырылдап ебәрҙе. Мин ҙур тирәк торған икенсе яҡҡа йүгерҙем. Эт тағы минең алдыма килеп баҫты. Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә. Шул арала Көмөшлө һалды тағы алыҫҡараҡ алып китте... Их, ошо мәлдә ат менгән атайым бер ҡулына мылтыҡ, бер ҡулына ҡылыс тотоп килеп сыҡһа ине. Был дошман эт үҙе ҡурҡып ҡасыр ине. Этләй бит мине был ала эт. Мин берсә ағып киткән башмаҡҡа, берсә йәмһеҙ ала эткә ҡарап торам. Бына һал күҙҙән дә юғалды...

Ҡапыл урман яғынан кеше тауышы яңғырап килде:

— Барбос!.. Бар-бос!..

Шуны ғына ишеткәс тә, теге ялбыр ҡолаҡ торҙо ла сапты.

Мин алға йүгерҙем. Тағы ла өс рәт йығылғанымды ла, тубығымды ауырттырғанымды ла, битемде ағастан сыйҙыртҡанымды ла һөйләп тормайым. Йөрөгән саҡта ундай ғына хәлдәр була инде ул.

Был юлы мин тағы ла шәберәк йүгерҙем. Ә һал минән әкренерәк йөҙә. Бына мин уны тағы ҡыуып еттем. Туғанымдың башмағына бер бәләкәс кенә ҡош килеп ҡунған. Уға рәхәт. Их, шул әкиәт ҡошо булһа, бер генә һүҙ әйтер инем үҙенә...

Шул ҡошсоҡҡа ҡарап ҡына барғанда, миңә ап-аҡ һаҡаллы бер бабай осраны. Ул иңбашына бер ишкәк һалған, арҡаһына тубал аҫҡан.

— Ҡайҙа йүгерәһең былай, улым, үҙең ҡанға туҙып бөткәнһең? — ти бабай.

— Ана башмаҡ, өҫтөнә ҡош та ҡунған, — тим мин. — Беҙ түгел, уны һал өҫтөнә Рушан ташланы. Һеңлемдеке, ул илай. Ана, ана, күрәһеңме, бабай?

Бабай, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, һыуға ҡарап тора:
— Асыҡ ҡына күрмәйем шул, улым.
— Күр инде, бабай, күрә күр, ана ғына бит.
Бабай арҡаһындағы тубалын һалып, кәкре ағасҡа элеп ҡуйҙы ла, тиҙ-тиҙ атлап, һуҡмаҡ буйлап кире китеп барҙы. Мин уның артынан йүгерә-йүгерә генә эйәрә алдым. Бер йырғанаҡты сыҡҡас, бабай яр аҫтына төшөп китте. Мин дә унан ҡалышманым. Унда йыуан талға бәйләнгән кәмә тора. Бабай кәмә бауын систе лә, ишкәген алып, кәмә эсенә баҫты.
— Йә, улым, ултыр, киттек, — тине ул.
Мин кәмәгә ултырҙым.
Һал тағы күҙҙән юғалды. Теге ҡош ҡына алып китмәһә ярар ине башмаҡты. Ул да, Рушан кеүек уҫал булһа, һыуға ла төртөп төшөрөр әле. Тиҙерәк ҡыуып етһәк ине лә бит! Бабай, кәмәгә баҫҡан көйө, ҡыҙыу-ҡыҙыу ишә бирә. Аяҡҡайы ғына тайып китеп, бабай һөрлөгөп ҡуймаһа ярар ине, тип ҡурҡып бөттөм. Ул-был булманы. Бына беҙ һалды ҡыуып еттек. Теге ҡош осоп киткән инде. Бабай ниңәлер башта һалды ситләберәк үтеп китте. Шунан алға сығып, кәмәне арҡыры борҙо. Бына күрҙегеҙме инде? Һал үҙе тап бабайҙың ҡаршыһына ғына кәмәгә килеп һуғылды. Бабай һеңлемдең ҡыҙыл суҡлы һыңар һары башмағын үрелде лә алды. Әһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа! Бына ниндәй һәйбәт икән был бабай! Бабай башмаҡты миңә бирмәй, кәмә төбөнә ҡуйҙы. «Йә төшөрөп ебәрер, быға бирһәм», — тип уйлағандыр әле ул. Төшөрмәҫ инем, ҡыҫып тотор инем.
Беҙ инде яр буйлап ҡына ҡайтыр яҡҡа табан йөҙөп барабыҙ. Бабай ишкәк ишә, мин унан әкрен генә һорайым.
— Һин әллә әкиәт бабайымы?
— Юҡ, мин — ысын бабай, балыҡсы Яҡшығол ҡарт мин, — ти ул.
— Һин үҙең ысынһың, үҙең Яҡшығолһоң, үҙең бик яҡшыһың, — тим мин. Бабай өндәшмәй.
Кәмә мороно ярға килеп төртөлдө. Мин сөйләгәп китә яҙҙым. Беҙ бая ултырып киткән ергә килеп еткәнбеҙ икән.
— Сыҡ инде, улым, — тине бабай.

Башта кәмәнән мин төштөм, унан һуң, башмаҡты алып, бабай сыҡты. Ул кәмәне бәйләгәс, яр башына мендек. Шунда ғына бабай һеңлемдең ҡыҙыл суҡлы һары башмағын миңә бирҙе:

— Мә, улым, — тине бабай, — бик килешле икән башмағы ла. Һаҡлап ҡына кейһен инде туғаның.

— Рәхмәт, бабаҡай, — тинем мин, уның биленән генә ҡосаҡлап алдым. Муйынынан ҡосаҡларға буй етмәй бит.

Килгән һуҡмаҡтан бабай менән икәүләп ҡайтып та киттек. Ул мине етәкләп алды. Бер һай ғына урынға еткәс, бабай минең битемде, ҡулдарымды йыуҙырҙы. Беҙ икебеҙ ҙә ус менән генә шунда һыу ҙа эстек. Ҡалай рәхәт булып китте. Ана бит, ҡоштары ла матур итеп һайрап торалар. Ҡояш һуң, ҡояш! Ҡайҙа, юғарыға уҡ менеп киткән ул. Һыу өҫтөндә, «бибек-бибек» тип, аҡсарлаҡтар осоп йөрөй. Ағастар ҙа, әле генә үҫеп сыҡҡан һары сәскәләр ҙә, ҡоштар ҙа, бабай ҙа, мин дә — бөтәбеҙ ҙә шатланабыҙ. Шатланмаҫлыҡмы ни? Үҙе яҙ, үҙе йылы, үҙе рәхәт, үҙемдең ҡулымда табылған башмаҡ бар.

Кәкре ағасҡа еткәс, бабай, тубалын алып, арҡаһына аҫты.

Беҙ инде тауыш-тынһыҙ ғына барабыҙ.

Бабай, туҡтап, бишмәтенең түш кеҫәһенән оҙон сылбырлы сәғәтен алып ҡарай:

— Бәй, улым, беҙ бит байрамға һуңға ҡалабыҙ. Сәғәт туғыҙҙы һуғырға тора, әйҙә, ҡыҙыуыраҡ киттек, — ти.

Байрам! Мин әллә ни эшләп киттем: һуңға ҡалмаһаҡ ҡына ярар ине!

Мин бабайҙың салғыйынан тартҡылайым:

— Әйҙә йүгерәбеҙ, әйҙә! — тим.

— Минең итектәрем бик ауыр шул; бар, һин алдан йүгер, бар, — тип ул мине, етәкләп, үҙ алдына сығара. Башмаҡты яйлап ҡына тотоп алдым да һуҡмаҡ буйлап ысҡындым ғына. Ә байрам бөткән булһа? Их, ошо Рушанды, ниҙәр генә күрмәнем шуның арҡаһында? Һеңлемде илатып бөттө... Артҡа әйләнеп ҡарап алам. Баштараҡ бабай бик ҡалышмағайны ла, һуңынан ҡалышты.

Ә кемдәр йүгереп килә һуң былай табан? Береһе ҙур, икеһе бәләкәй. Әллә уларҙың да башмаҡтары ағып киттеме икән? Мине күргәс, улар тағы ла шәберәк йүгерә башланылар. Таныным, таныным! Ҙурыһы әсәйем. Теге-

ләре кемдәр тиһегеҙме? Береһе Марат, ә иң арттан йүгергәне Оксана. Бына кемдәр килә!

Хәле бөткән әсәйем килеп етә лә мине күтәреп ала.

— Ҡотомдо осорҙоң бит, балаҡайым!.. — Ул мине ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлай, биттәремдән, баштарымдан үбә. Ә минең бөтә уй байрам хаҡында:

— Байрам бөтмәнеме әле? — тим мин.

Матур түбәтәйе менән битендәге тирен һөртөп торған Марат яуап бирә:

— Юҡ әле, башланманы ла.

Иң һуңынан Оксана килеп етә. Шунда уҡ әсәй мине ергә төшөрә. Һеңлем мине йүгереп килеп ҡосаҡлап ала:

— Йәмил, Йәмил! — ти ул. — Ә беҙ ҡурҡып бөттөк, — ти. Мин уға башмаҡты бирәм:

— Балыҡсы Яҡшыгол бабай менән икәү тотоп алдыҡ, кәмә менән барып.

Һеңлем башмағын күкрәгенә ҡыҫа. Әсәй бигерәк ҡыуана инде. Икебеҙ ҙә табылдыҡ бит: мин дә, башмаҡ та.

Беҙҙең янға Яҡшыгол бабай килеп туҡтай:

— Байрам ҡотло булһын, Көнбикә. Һинең улыңмы ни был?

— Минеке. Рәхмәт инде, Яҡшыгол ағай, юғиһә байрамдың йәме китә яҙҙы бит.

— Сая малайға оҡшай. Ярай, ярай, бик һәйбәт. Беҙҙең заман сая ирҙәр һорай...

— Башмаҡ артынан үҙе төшөп китмәһә ярар ине тип ҡурҡтыҡ, бигерәк туған йәнле бала... Барығыҙ, балалар, алдан йүгерегеҙ, — ти әсәй.

Беҙ, әсәй менән Яҡшыгол бабайҙы артта уҡ ҡалдырып, урамға килеп инәбеҙ. Урамдың түбән осондағы клуб башында ҙур ҡыҙыл флаг талпынып-талпынып елберләп тора. «Байрамға килегеҙ, байрамға килегеҙ, балалар!» — тип беҙҙе саҡыралыр әле ул ҡыҙыл флаг...

МИН ЫСЫН ФЛАГ ТОТОП БАРАМ

Өләсәй әйткәндәй, суҡтай итеп кейенеп, яңынан урамға сығабыҙ. Беҙ бик күмәкбеҙ. Һанап та бөтөрөрлөк түгел. Иң ҙурыһы — Баҙамша бабайҙың ҡыҙы Тәзкирә апай. Ул әллә нисәнселә генә уҡый инде — әллә алтынсыла, әллә етенселә.

Клуб түбәһендәге флаг, һаман да беҙҙе саҡырып, елберләп тора. Беҙ шул флаг яғына табан китеп барабыҙ. Байрам һайын кешеләр башта шунда йыйылалар ҙа, байраҡтар күтәреп, урамдар буйлап уҙалар. Мин әсәйем менән байрамда ике рәт йөрөгәнем бар. Береһе — былтыр Майҙа, береһе — Октябрҙә. Былтыр Майҙа мин арыным да, әсәйем әҙерәк кенә күтәреп барҙы. Бәләкәс инем шул әле мин ул саҡта.

— Ә ниңә һуң байрамда кешеләр урамға сығып йөрөйҙәр, әсәй? — тип һораным мин шул саҡта. Әсәйем миңә һөйләп бирҙе:

— Донъяла беҙҙең дуҫтарыбыҙ ҙа, дошмандарыбыҙ ҙа күп. Беҙ күмәкләшеп урамдарға сыҡҡас, алыҫ илдәрҙәге дуҫтарыбыҙ беҙҙе күрә лә: «Ана беҙҙекеләр ни саҡлы, үҙҙәре берҙәм, үҙҙәре көслө!» — тип шатланалар. Бөтәбеҙ ҙә бергә йыйылғас, күңелле була бит.

— Ә дошмандар ни эшләй? — тип һорайым мин.

— Дошмандар ҡурҡалар, уларҙың ҡоттары оса, белдеңме инде?

— Белдем инде. Дошмандың да кемлеген беләм мин: фашистар йә буржуйҙар. Шуларҙы еңеп йөрөй бит инде атай.

Бына беҙ күмәкләшеп урамға сыҡтыҡ. Дуҫтар шатланһындар, ә дошмандың ҡото осһон! Алдан вожатый Марат бара, уның артынан Фәрит менән мин, беҙҙең арттан бәләкәстәр эйәргән. Тәзкирә апай ситтән генә атлап килә. Түбән осҡа яҡынайған һайын, беҙ күбәйә барабыҙ. Осраған бөтә бала беҙгә килеп ҡушыла. Ҡалай күңелле икән байрамға барыу.

Клуб янында халыҡ бик күп. Ҙурҙар төркөм-төркөм булып һөйләшеп торалар. Егеттәр менән ҡыҙҙар түңәрәкләнеп баҫҡандар. Түңәрәк эсендә ниҙәр барын алыҫтан күреп булмай, әллә бейейҙәр инде. Бер ҡыҙ ҡысҡырыпҡысҡырып йырлай. Минең кеүектәр йүгереп уйнап йөрөй.

— Килеп еттегеҙме, ҡарттар, бик һуңлап йөрөйһөгөҙ, — ти беҙгә бер ағай, үҙе көлә. Уның исеме Рәшит. Ҡыҙыҡ һүҙ әйтә Рәшит ағай, бәләкәй кешеләргә «ҡарттар» ти.

— Былар килгәс, ҡуҙғалырға ла ярайҙыр инде, Рәшит, — ти уҡытыусы Сания апай. Мин уны беләм. Ул матур апай беҙҙең оста тора.

Кешеләр теҙелә башлайҙар. Беҙҙе, бәләкәс балаларҙы, иң алға килтереп баҫтыралар. Мине Оксана менән йәнәшә ҡуялар. Минең икенсе яҡта – артҡы урамдың бер малайы. Мин уны танийым да, исемен генә белмәйем. Фәрит менән Фәһимә беҙҙең артта, Марат әллә ҡайҙа буталып ҡалды, күренмәй. Мин, артҡа әйләнеп, әсәйемде эҙләйем. Тик табып ҡына булмай.

Оксана минең беләгемдән тарта.

– Йәмил, ана әсәй, – тип, һеңлем бармағы менән төртөп күрһәтә.

Әсәй беҙҙең алға килеп сыҡты. Үҙе шат, үҙе матур беҙҙең әсәйебеҙ. Әле унық ҡайһы ерелер беҙҙең әсәйгә оҡшамаған да төҫлө.

– Етәкләшеп кенә йөрөгөҙ, йәме, – тине лә әсәйем ҙурҙар теҙелгән яҡҡа китеп тә барҙы. Беҙ уға ҡул болғап ҡалдыҡ.

Бер пионер апай алда торған бөтә балаларға ла бәп-бәләкәс кенә ҡыҙыл флагтар таратып бирҙе. Тик миңә генә етмәй ҡалды. Мине күрмәй үтте, ахыры. Ул тиклем бәләкәй ҙә түгелмен инде. Миңә ҡыйын булып китте. Теге артҡы урам малайы менән Оксана бер юлы ҡыс-ҡырып ебәрҙеләр:

– Апай, апай, был малайға флаг теймәне! – Оксананың «был малайға» тип әйтеүе миңә оҡшамай. «Йәмил» тиһә лә ярар ине инде.

Башымды түбән эйеп кенә ҡарап торам. Теге апай шәп-шәп кенә атлап ҡайҙалыр китеп барҙы.

– Йәмил, Йәмил, алмашлап тоторбоҙ, үпкәләмә, Йәмил! – Был һүҙҙәрҙе минең һеңлем әйтә. Унық тауышы миңә тағы ла яғымлыраҡ булып ишетелә. Мин, илап ебәреүҙән ҡурҡып, башымды күтәрмәйем. Шул саҡ башмаҡтар ағып китеүе лә, ҡыҙыл телле ала эт тә, танау ҡанағаны ла иҫемә килеп төшә. Әллә минең бәхетем юҡ инде...

Бик ҙур флаг тотоп, беҙҙең алға бер апай килеп баҫты.

Инде ҡуҙғалып киттек тигәндә генә, баяғы пионер апай килеп етте. Ул ҡулына оҙон һаплы ысын флаг тотҡан. Флагы бик ҙур түгел, шулай ҙа ысын.

— Ә һиңә иң матурын бирәм. Ҡара әле, ҡара, нисек елберләй бит, — ти апай, үҙе флагтың һабын миңә тоттора.

Мин тиҙ генә флагтың һабын эләктереп алам, үҙем юғарыға ҡарайым. Ҡыҙыл ебәк баш өҫтөмдә, ҡош шикелле, талпыныш тора. Әйтерһең, ул ҡыҙыл ҡош бейеккә, әллә ҡайҙарға осоп китергә теләй. Үҙе мине лә күтәреп алырға итә. Әгәр флаг мине күтәреп алып китһә, мин иң элек атайым янына барып төшөр инем дә флагымды атының эйәренә ҡаҙап ҡуйыр инем. Шунан һуң беҙ атайым менән икәүләп фашистарҙы еңеп бөтөрөргә атты елдереп кенә китер инек. Ҡыҙыл флагтан ҡурҡып, фашист ҡасыр ине.

Ә һуң ошо бөтә халыҡ осоп ҡына дошман алдына барып төшһә, ҡурҡыуҙан йөрәге ярылыр ине тегенең. Ә дуҫтар инде шатланып бөтә алмаҫтар ине. Дуҫтар үҙҙәре лә беҙгә ҡушылып китһә, тағы ла күмәгерәк булырбыҙ...

Оксана минең еңемдән тарта. Ҙур байраҡ тотоп торған апай алға уҡ киткән, бөтә халыҡ та ҡуҙғалған, мин бер үҙем тороп ҡала яҙғанмын. Ярай әле минең һеңлем бар.

Мин атлай башлағас, флагым тағы ла ярһыбыраҡ талпынырға тотондо.

Беҙ инде урам буйлап барабыҙ. Беҙҙең яҡ-яҡтағы өйҙәр ҙә, канау буйындағы яңы бөрөләнеп килгән ағастар ҙа, эргәмдәге балалар ҙа миңә бәләкәсләнеп киткән төҫлө күренәләр. Әллә мин үҙем шулай кинәт кенә үҫеп киттемме икән? Мин атлап барған да төҫлө түгелмен. Ысынлап та, ҡулымдағы флаг, ҡыҙыл флаг, мине осороп ҡына алып бара, ахыры.

Артта йыр башланылар. Мин дә ул йырҙы ишеткәнем бар. Ләкин был юлы ул әллә ҡайҙан, алыҫтан яңғырап килгән һымаҡ тойола.

Минең дә йырға ҡушылғым килә. Тик ниңәлер тауышым тамағым төбөнән тышҡа сыҡмай ҡала. Күҙ ҡырыйым менән генә Оксанаға ҡарап алам. Уның да ирендәре ҡыймылдай. Артта яңғыраған йыр, әйтерһең, бөтә байраҡтарҙы ла елберләтеп, баш өҫтөнән ағып үтә. Мин тағы ла ныҡ итеп башымды юғары күтәрәм. Флагым ел көйөнә бәүелеп бара.

Оксана минең беләгемдән тота:

— Йырла, Йәмил, рәхәт бит!

— Эйе, эйе, Оксана, бик рәхәт, — тип бышылдайым мин. Һеңлем, миңә эйеләп төшөп, йырларға тотона.

Үҙебеҙҙең ҡапҡа төбөнә еткәс, өләсәйемде күреп ҡалдым. Ул ҡойма эргәһенә баҫҡан да үткән кешеләргә йылмайып ҡарап тора. Ул беҙҙе эҙләйҙер әле. Беҙ, аяҡ остарына баҫып, уға күренергә тырышабыҙ.

— Өләсәй! — тибеҙ.

Оксана менән мине тапҡас, уның йөҙө тағы ла асылып китә. Өләсәйҙе күргәс, минең иҫемә башмаҡтар ҙа килеп төшә. Мин түбән ҡарайым. Оксана менән икебеҙҙең дә яңы башмаҡтар кейгән аяҡтарыбыҙ туп-туп баҫып килә. Инде йыр ҙа алыҫтан ишетелгән кеүек түгел. Хәҙер мин үҙем дә йырға ҡушылам, һәм бөтә урамды гөрләткән йыр, әйтерһең, бер минең күкрәгемдән генә сыға — мин шулай ҡысҡырып йырлайым. Ана өйҙәр ҙә, ағастар ҙа элекке кеүек кенә күренәләр — бәләкәй ҙә түгел, ҙур ҙа түгел. Тик аяҡтарым менән ергә баҫҡанды ғына һиҙмәйем.

Мин эргәмдәге теге арҡы урам малайына ҡарайым. Уның бәләкәс кенә танауы өҫтөндә бөрсөк-бөрсөк тир ялтырап тора. Атлаған һайын үҙенең итләс бите терт-терт ҡалтырап китә. Миңә ҡыҙыҡ булып тойола. Ниңә бер уның ғына бите шулай һелкенә икән?

Тиҙ генә һеңлемә лә күҙ һалып алам. Ул, туп-тура алға ҡарап, атлап бара. Уның зәңгәр күҙҙәре саҡ ҡына ҡыҫыла төшкән, ә ҡулындағы кескәй генә флагы елберләй, ҡуңыр сәсенә тейеп-тейеп китә. Үҙе ниңәлер әҙерәк турһайған да төҫлө. Ҡапыл минең ҡолағыма кемдер бышылдаған кеүек була. Юҡ, берәү ҙә бышылдамай — мин үҙем эстән генә шулай уйлайым: «Һиңә, Йәмил, ысын флаг тотҡас, бик рәхәт тә бит. Барыһына ҡарағанда ла рәхәтерәк. Уларҙың ысын флаг тотҡолары килмәйҙер шул...» Мин бөтәһенә лә: Оксанаға ла, Фәриткә лә, Фәһимәгә лә, арҡы урам малайына ла бик-бик рәхәт булыуын теләйем. Тотам да хәҙер флагты башта һеңлемә бирәм. Ул, саҡ ҡына барғас, Фәриткә бирер, шунан һуң ҡулдан ҡулға китер ҙә барыр. Ҡалай яҡшы булып сығыр!

Мин, һеңлемдең еңенән тотмаҡсы итеп, ҡулымды һуҙам, тик шунда уҡ туҡталып ҡалам: ә әсәйем беҙгә уҡыған ҡыҙыҡлы китапта нисек ине һуң? Ундағы бер һалдат һуғышта яраланғас та, үҙенең ҡулындағы байраҡты

ташламаған да, берәүгә лә бирмәгән дә. «Байраҡ — ул изге әйбер», — тине миңә әсәйем. «Изге» — ул үтә һәйбәт тигән һүҙ. Байраҡ ни, флаг ни — икеһе лә бер үк инде. Бәлки, минең ҡулымдағыһы ла байраҡтыр әле.

Мин флагтың һабын тағы ла ҡыҫыбыраҡ тотам. Йыр тынған арала уның ҡыштырлауы ла миңә ишетелеп китә. Юҡ, флаг кемгә бирелгән, шуның ҡулында ҡалырға тейеш ул. Бирһәм, теге пионер апайға ғына бирермен.

Алдағы апай Тимербулат бабайҙар тыҡрығынан Ҡыр яғына боролдо. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Ҡыр яғына сыҡтыҡ. Һай соҡорға етәрәк, бер таш өйөмө янында бөтә халыҡ туҡтап ҡалды. Шунда ғына баяғы пионер апай минең флагымды килеп алды. «Ҡулың талғандыр инде, туғаным», — тине ул. Ә минең ҡулым саҡ ҡына ла талманы. Флаг тотҡан кешенең ҡулы таламы икән? Бармаҡтарым ғына ойоно. Уныһы иҫәпкә лә кермәй инде.

Ҙурҙар бөтәһе лә таш өйөмөн уратып алдылар. Рәшит ағай таш өҫтөнә менеп баҫты. Мин уны саҡ ҡына күреп ҡалдым. Ҡайҙандыр Марат килеп сыҡты.

— Әллә-лә-лә, берәүҙәр ысын флаг тотоп барҙымы ни? — тине ул, шунан минең иңбашҡа ҡулын һалды. — Әллә көнләште тиһеңме? Көнләшмәнем дә, күҙ генә ҡыҙҙы әҙерәк.

Мин бер һүҙ ҙә әйтеп өлгөрә алманым, һеңлем килеп етәкләп алды:

— Әйҙә, әсәйҙе табабыҙ, Йәмил, — тине ул. — Һин ысын флаг тотоп барғас, ҡалай яҡшы булды. Әсәй ҙә, өләсәй ҙә, Мансур бабай ҙа шатланыр әле. Мин дә шатландым. Әйҙә инде.

Беҙ халыҡ артында етәкләшеп йүгереп йөрөгәндә, кемдеңдер ҡулдары икебеҙҙе бер юлы ҡосаҡлап алды. Был әсәй ине. Ул Оксананы йәһәт кенә күтәреп, иңбашына ултыртты. Шунда уҡ мине лә ағас аяҡлы бер ағай, эләктереп алып, елкәһенә атландырҙы. Мин осоп ҡына килеп ҡундым. Хәҙер Оксана менән икебеҙгә бөтәһе лә күренеп тора. Таш өҫтөнә баҫҡан Рәшит ағай ҡулындағы фуражкаһын болғай-болғай һөйләй. Фуражкаһындағы йондоҙо, көҙгө киҫәге кеүек, ҡояшта ялтырап-ялтырап китә.

— Йәшәһен бөйөк партия! — ти Рәшит ағай, үҙе таш өҫтөнән һикереп төшә. Бөтә кешеләр ҙә «ура!» тип ҡыс-

ҡыралар, үҙҙәре сәпәкәй итәләр. Оксана менән беҙ ҙә сәпәкәй итәбеҙ.

Беҙҙе ергә төшөрҙөләр.

— Арығанһығыҙҙыр инде, балалар, барығыҙ, ҡайтығыҙ, — тине әсәй. — Ә һин, ҡыҙым, флагыңды миңә бир, апайыңа мин үҙем бирермен, йәме?

Беҙ йүгереп ҡайтып та киттек. Тыҡрыҡҡа ингәндә, беҙ артыбыҙға әйләнеп ҡараныҡ. Бөтә кешеләр ҙә йырлашып ҡайтып килә ине инде.

Ниҙәр менән генә һыйламаны беҙҙе өләсәй ул көндө! Беҙҙе лә, байрамды ла ярата бит ул. Ниҙәр менән һыйланғаныбыҙҙы һеҙгә әйтә алмайым инде. «Мин тегене ашаным, мин быны ашаным, тип һөйләп йөрөү бер ҙә килешә торған эш түгел», — ти өләсәй үҙе. Юҡ, ул һүҙҙәрҙе беҙгә әйтмәй, әллә ниндәй бер апайға әйтә. Ә беҙ һөйләнеп йөрөһәк, беҙгә лә әйтер.

Тап ошо көндө инде мин һеңлемде баҡсалағы ҡайын төбөнә алып килдем. Теге элек әйткән хазинаны соҡоп алып, бөтәһен дә уға бирҙем. Матур тәтәй быялалар менән һәйбәт таштар ғына өс кеҫә булды. Ҡалғаны бөтәһе лә тимер-томор ине. Улар Оксанаға оҡшап етмәне. Ярай, торһон әле ул тимерҙәр. Мин һуңынан берәй нәмә эшләрмен уларҙан.

БЕҘҘЕҢ АТАЙҘЫ КҮРМӘНЕГЕҘМЕ?

Бер аҙҙан һуң тағы ла байрам булды. Был үҙенә башҡа бер байрам ине.

— Һуғыш бөттө, беҙ еңдек! — тинеләр ҙурҙар.

Халыҡ тағы ла клуб янына йыйылды ул көндө. Беҙ ҙә Мараттар, Фәһимәләр менән шунда барҙыҡ. Беҙҙең оста торған матур уҡытыусы апай һүҙ һөйләне. Әбейҙәр ҙә, апайҙар ҙа үҙҙәре көләләр, үҙҙәре илайҙар.

— Улар ниңә илайҙар, Мансур бабай? — тип һорайым мин.

— Шатлыҡ йәштәре, балам, улар, татлы йәштәр, — ти ул. Шулай тигәс, минең дә илағым килеп китә, ләкин түҙәм, сөнки минең күҙҙәремдән берәү ҙә иламай. Ундай татлы йәштәр апайҙар менән әбейҙәрҙә генә булалыр. Әкиәттәге Тимербәк тотҡон ҡыҙҙарҙы ҡотҡарғас, шатлыҡтарынан илашып алғандар бит тегеләр.

Оксананы бер апай күтәреп ала. Үҙе һөйләнә:

— Бик бәхетле булырһығыҙ инде, балаҡайҙарым, ана ниндәй аждаһаны дөмөктөрҙөләр бит...

Кискә ҡаршы беҙ Мансур бабай менән Фәрхениса әбейҙе сәй эсергә саҡырҙыҡ. Үҙебеҙ ҡараңғы төшкәнгә тиклем урамда уйнап йөрөнөк. Ҙурҙар ҙа бер туҡтауһыҙ йырлашып, бейешеп кенә торҙолар. Кешеләр шат булһалар, йырлайҙар шул. Әсәйем дә атайҙан хат килгән көндәрҙә йырлап ҡуя торғайны. Ҡалай яҡшы, кешеләр шат булғас...

Ул саҡта әле муйылдар менән алмағастар яңы ғына сәскә атҡайны. Шул көндән алып беҙ өсөбөҙ ҙә атайҙы көтә башланыҡ. Хәҙер инде беҙҙең колхозда бесәнде бөтөрөп,ураҡҡа төштөләр. Ә атай һаман ҡайтмай ҙа ҡайтмай. «Тиҙҙән күрешербеҙ» тигән хаты килеүгә лә әллә нисә көн булды инде. Әсәй эштән ҡайтҡас, төн буйы өйҙөң стеналарын йыуҙы, мейесте ап-аҡ итеп ағартты, беҙ өсәүләп ҡураны һеперҙек. Унда хәҙер бер генә сүп тә юҡ.

Оксана менән беҙ, әллә нисә ҡат инде ауыл осона сығып, көтөп тә ҡараныҡ. Тик атай һаман ҡайтманы. Шул тиклем оҙаҡ ҡайтмай торған кеше булыр икән.

Бер саҡ әсәйем төшкә ҡайтҡас, беҙгә Тәзкирә апай керҙе.

— Беләһеңме, Көнбикә еңгә, күпер башы Бәкерҙең Рамазаны ҡайтҡан бит, бүтәндәр ҙә оҙаҡламаҫ инде, — ти ул.

— Указ булыуға ла байтаҡ заман үтте шул. Беҙҙеке бит, етмәһә, дүрт ҡат яраланған да, — ти әсәйем.

Мин указдың ни икәнен генә белмәйем. Тик, атай ҡайтыуға ҡатнашы булғас, яҡшы әйберҙер инде. Мин Оксананы ымлап ҡына саҡырып алам да беҙ болдорға сығабыҙ.

— Ишеттеңме? — тим мин.

— Нимәне?

— Күпер башын. Әйҙә, шуларға барып ҡайтабыҙ.

Мин әйткәс, һеңлем ҡарышып тормай. Беҙ, ҡапҡа аҫтынан ғына сығып, түбән осҡа йүгерәбеҙ. Еләбеҙ генә. Хәйбулла Рушаны беҙҙе күрмәй ҙә ҡалды. Күрһә лә, хәҙер таш ырғытмай инде ул. Оксананың башмағын ағыҙып ебәргәс, Рушандың уҫаллығы бөтөп китте. Бер

көн бит беҙ, ҡаҙ һаҡлағанда, Рушанды пленға алдыҡ та Фәһимәнең косынкаһы менән ҡулын артҡа бәйләнек. Шунан уны һәйбәт булырға ант иттерҙек. Ант итте теге, Марат үҙен туҡмай ҙа яҙып ҡуйҙы. «Бәхетең инде, һуғыш бөтөү шатлығынан бер юлға ҡалдырам», — тине. Шуға күрә беҙ уны плендан да ҡотҡарып ебәрҙек. Хәҙер Рушан һәйбәтләнде.

Күпер башы Бәкер ағайҙарҙы мин беләм. Улар почта йортона яҡын ғына торалар. Уларҙың рәшәткә менән уратып алынған ҙур баҡсалары бар. Әле унда ҡыҙарып ҡына килгән алмалар аҫылынып-аҫылынып тора. Почтаға барғанда үҙебеҙ күрҙек.

Оксана менән беҙ икәү Бәкер ағайҙарҙың ҡапҡа төбөнә барып еткәс тә туҡтап ҡалдыҡ. Ҡапҡа асыҡ. Әллә ул асыҡ булғанға, беҙ керергә ҡыймай торабыҙ инде. Мин, башымды тығып, ҡураға ҡараным.

— Кем унда ҡапҡаға һыймай тора? — тине ҡалын тауыш. — Әллә ҙурыһын асырғамы?

Мин ҡаушап төштөм. Кире ҡайтып китергә лә уйлағайным, теге тауыш йомшаҡ ҡына итеп тағы өндәште:

— Инегеҙ, балалар. Ҡунаҡҡа килгән кеше шунда тормай инде...

Беҙ етәкләшеп ҡураға индек. Болдорҙа бер һалдат ағай итек таҙартып тора. Үҙе беҙгә ҡарап йылмая. Итеген ышҡығанда, уның күкрәгендә аҫылынып торған миҙалдары сыңлап китә. Мин Оксананың ҡолағына бышылдап алам: «Ошо үҙе инде!» — тим. Һалдат ағай инде итек таҙартыуҙан туҡтап тора.

— Әйҙүк, ни йомош, туғандар? — тип һораша ул. Мин ҡаушауымдан:

— Бер йомош та юҡ, — тип әйтеп һалам.

Оксана ҡапыл ныҡ итеп минең еңемдән тарта.

— Йәмил оноҡҡан, ағай, беҙҙең йомошобоҙ бар, — һеңлем үҙе бер аҙым алға атлап ҡуя. — Беҙҙең атайҙы күрмәнегеҙме? Ҡасан ҡайта ул?

— Кем һуң һеҙҙең атайығыҙ?

— Кавалерист. Уның да өс миҙалы бар.

— Улай булғас, беләм, — ти ағай, үҙе рәхәтләнеп көлә, фашисты еңгәнгә шулай шатланалыр инде, — тик ҡайтҡан саҡта ғына күрә алманым шул. Оҙаҡламаҫ инде, ул да ҡайтыр.

Тап ошо минутта атай өйгә ҡайтып ингәндәй була миңә. Ә ысынлап та шулай булһа?

— Беҙ ҡайтабыҙ инде, ағай, — тип, мин тиҙ генә һеңлемде етәкләп алам.

— Туҡтағыҙ әле, туҡтағыҙ! — тип ағай минең беләгемдән тота, үҙе асыҡ тәҙрә яғына ҡарап ҡысҡыра. — Әсәй, бында ике ҡунаҡ бар, күстәнәс сығарыр инең!

Матур яулыҡ бәйләгән әбей икебеҙгә икешәр дәү сәтләүек менән берәр кәнфит бирҙе. Беҙ рәхмәт әйттек. Һалдат ағай һаман һорашып тора:

— Һеҙ игеҙәктәрме әллә? Юғиһә бигерәк тип-тигеҙһегеҙ.

— Юҡ, игеҙәк түгелбеҙ, — тип яуап бирәм мин, — беҙ былай ғына икәүбеҙ, ағай.

Шунда уҡ сығып та йүгерәбеҙ.

— Мин бындай һалдаттарҙы бик күп күргәнем бар, — ти һеңлем.

— Ҡайҙа?

— Һуғыш булған ерҙә, бик алыҫта. Атай мине ҡосаҡлап-ҡосаҡлап яратҡан ерҙә...

Оксана ҡайһы ваҡытта шулай ҡыҙыҡ һүҙҙәр һөйләп ҡуя. Бәләкәй кеше һуғыш булған ерҙә йөрөймө инде? Тик мин бәхәсләшмәйем. Йә ул үпкәләр.

Беҙ йортҡа ҡайтып инәбеҙ. Әсәй, ишек келәһенә ағас ҡына тығып, эшкә киткән. Ә атай һаман да ҡайтмаған.

* * *

Көн һайын кешеләр фронттан ҡайтып торҙо. Марат менән Фәһимәнең атаһы ла, Баҙамша бабайҙың ҙур улы ла, арҡы урам кешеләре лә ҡайтты. Беҙ Оксана менән икәү, уларҙың бөтәһенә лә барып, атайҙы һорашып йөрөнөк. Тик барыбер «күрҙем» тип асыҡ ҡына әйтеүсе булманы. Ҡайһыһы атай тураһында ишеткән, ҡайһыһы алыҫтан ғына күреп ҡалған, ҡайһыһы уның хаҡында газетала яҙылғанды уҡыған.

Беҙ көндәр буйы станция юлынан күҙ ҙә алмайбыҙ. Берәй әҙәм күренһә, йүгереп ҡаршы барабыҙ. Ә атай юҡ та юҡ.

Атайҙы көтә башлағанда ҡаҙ бәпкәләре бәләкәй генә ине. Улар үҫеп бөттө. Арала иң матуры — теге мин эсемдән генә «Оксана» тип исем ҡушҡаны. Ата ҡаҙ беҙҙе талаһа ла, уларҙың балаларын барыбер яратабыҙ. Көн дә ем биреп торабыҙ. «Атай ҡайтҡансы, үҫә торһондар!» — тип алмағастарға көн дә һыу һибәбеҙ. Улар сәскә атманылар атыуын, күп иттереп япраҡ ҡына ярҙылар. Ә мәктәрҙең сәскәләре ҡойолоп бөттө инде. Бына ни тиклем ваҡыт үтеп китте. Беҙҙең башмаҡтарыбыҙ ғына шул көйө тора. Уларҙы беҙ киймәйбеҙ, атай ҡайтыуға һаҡлайбыҙ.

Кис ятҡан һайын атайҙың һүрәтенә ҡарайбыҙ. Оксана ҡулдары менән уны үҙенә саҡыра:

— Ҡайт инде, атай, ҡайт! — ти.

— Беҙҙең атай дошманды иң алыҫҡа тиклем ҡыуып барғандыр, шуның өсөн тиҙ генә ҡайта алмайҙыр, эйе бит, Оксана?

Һеңлем «эйе» тип иҫнәп ала ла шунда уҡ йоҡлап китә.

Тиҙерәк иртә булһын ине лә, атай ҡайтһын ине, тип уйлайым мин кис һайын... Беҙгә ҡарап, әсәй йыш ҡына көрһөнөп ҡуя.

ТӨШ ТӘ, ӨН ДӘ

Өндә һүрәттәр һөйләшмәй бит. Ә төштә улар һөйләшәләр ҙә, көләләр ҙә. Мин һүрәт тураһында төш күреп ятам. Бына, имеш, атайҙың карауат өҫтөндә эленеп торған һүрәте стена буйлап шыуып ҡына минең янға төштө. Үҙенең аяҡтары ла, ҡулдары ла бар. Ауыҙ ситтәренән асылынып төшкән мыйығы ҡыймылдап тора, күкрәгендәге миҙалдары сыңлап-сыңлап китә. Ул шундай асыҡ итеп йылмая, уның күҙҙәренән сәселеп торған яҡтылыҡҡа минең күҙҙәрем сағыла. Һүрәт үҙе кем менәндер мыңғырлап ҡына һөйләшә лә төҫлө. Мин күҙҙәремде асмаҡсы итәм, тик, ниңәлер, улар башта тиҙ генә асылмайҙар. Өндәшергә итһәм, тауышым сыҡмай. Ҡалай әкәмәт төш күрәм мин.

Ҡапыл күҙҙәрем үҙҙәре асылып китә. Өй эсе шундай яҡты, ҡояш тап Оксана менән миңә ҡарап тора. Ә һүрәт, ни эшләптер, икәү булып китә, береһе элеккесә стенала элеүле тора, икенсеһе — тереһе — һаман минең янда

баҫып ҡала. Ҡапыл ул мине күтәреп алып, күкрәгенә ҡыҫа. Мин инде бөтөнләй уянып китәм. Беҙҙең янға әсәй ҙә йүгереп килә. Әсәй йыш-йыш итеп низер әйтә. Мин уның һүҙҙәрен аңламайым, үҙем башымды атайҙың иңбашына һалып, уның биттәрен һыйпайым.

— Атай! — тип ҡысҡырып ебәрәм. — Ниңә шул тиклем оҙаҡ ҡайтмай торҙоң, атай?

Атай мине күтәреп тора. Мин Оксанаға ҡарайым. Ул, низәндер һиҫкәнеп, тороп ултыра. Атай шунда уҡ икенсе ҡулы менән һеңлемде күтәреп ала:

— Бына ҡыҙым да уянды, танынйһыңмы мине, ҡыҙым?

Оксана көлөп ебәрә лә атайҙы үбеп ала. Ә мин уны үбергә лә оноттом.

— Атай! — ти һеңлем. — Беҙ һине көттөк тә көттөк.

— Һеҙ көткән өсөн дә, иҫән-һау йөрөп ҡайттым бит инде, бәхетегеҙ бар икән, балалар, — ти атай. Үҙе, икебеҙҙе лә күтәргән көйө, һандыҡ өҫтөнә барып ултыра.

Мин уның миҙалдарын һанап ҡарайым: бер, ике, өс, дүрт, биш... Тик күлдәгенең һул кеҫәһе өҫтөндәге ике һары, ике ҡыҙыл таҫманың ғына ни икәнен ул саҡта белмәнем. Ә хәҙер беләм. Улмы? Ул — беҙҙең атай дүрт тапҡыр яраланып, дүрт тапҡыр һауыҡҡан тигән һүҙ.

Беҙ һандыҡ өҫтөндә ошолай бик оҙаҡ ултырҙыҡ.

Оксана ҡайтҡанда ла, беҙгә кеше бик күп килгәйне бит, ә был юлы тағы ла күберәк килде. Ҡайһылары атай менән ике ҡуллап күрешә, ҡайһылары бер ҡуллап күрешә. Әбей кешеләр уның арҡаһынан да һөйөп ала. Мансур бабай ҙа инеп, әҙерәк ултырып китте.

— Изге эш башҡарып ҡайттығыҙ, бик ҙур рәхмәт инде, — ти ул. — Емерелгәне төҙәлер, туҙғаны яңырыр, тик ана етемдәр генә бик ҡыҙғаныс.

Атай тәрән көрһөнөп ҡуя. Мансур бабай шунда уҡ икенсе нәмә һөйләй башлай:

— Беҙгә лә ҡыйын булды, иллә-мәгәр бирешмәнек, бер ниндәй эш тә ҡарышып торманы, үҙең дә күрерһең...

Беҙҙең кеүектәрҙән иң элек Марат менән Фәһимә килеп етте. Улар был юлы әллә ниңә ишек яңағына һөйәлделәр ҙә ҡаттылар. «Уҙығыҙ, түргә уҙығыҙ», — тиһәк тә, урындарынан ҡуҙғалманылар. Беләм инде, улар атайымдан оялалар.

Заман бөтәһенән дә аҙаҡ килде, тик ул ишек төбөндә туҡтап ҡалманы, туп-тура атайға килеп һырынды. Атайым Заманды күтәреп алды. Ә теге атайҙың муйынынан ҡосаҡланы ла үбергә тотондо. Беҙ аптырап ҡарап торабыҙ.

— Иң һағынған кеше бына кем икән! — ти атай.

— Мылтығың булһа, ат әле, ағай! — ти Заман.

— Бында бит фашист юҡ.

— Һин төйләгәнгә ат, ул бөгөн бер ҙур себеште урлап китте.

Бөтә өй эсе геү килеп көлөп ебәрә. Заман һаман үҙенекен һораша:

— Ҡылысыңды күрһәт әле миңә.

— Ҡылысты алып ҡайтманым шул, балаҡай. Бына ҡалаға барғас, мин һиңә бәләкәс ҡылыс һатып алырмын, йәме?

— Ярар, бәләкәс булһа ла... — тип, Заман атайҙың ҡосағынан шыуып төшә. Үҙ өлөшөнә тейгән күстәнәсте алғас та сығып уҡ йүгерә.

Марат менән Фәһимә беҙҙе уйнарға саҡыралар. Беҙ атайҙың бер үҙен генә ҡалдырып барыбер сығып китмәйбеҙ.

Әсәйем ул көндө эшкә барманы. Кискә тиклем мейес янында төрлө тәмле нәмәләр бешереп йөрөнө. Беҙ һәр ваҡыт атайға һыйынып ҡына торҙоҡ. Әсәй ҙә беҙҙең янға килгеләп китә. Ул бер атайға, бер Оксанаға, бер миңә ҡарай. Үҙе өҙлөкһөҙ йылмая, һөйләгәндә һүҙҙәре лә, сулпы сылтырауы кеүек, матур булып сыға. Әсәйемдең янып торған ал йөҙөндә ниндәйҙер нур балҡыған төҫлө тойола. Эйе, мин күреп торам: ул нурҙар әсәйемдең күҙҙәренән бөркөлөп сығалар ҙа йөҙөнә таралалар. Бер уның йөҙөнә генә түгел, бөтә өйгә, бөтә урамға тарала ул нурҙар. Теге саҡта, арҡаһына тоҡ аҫып, ҡалын аҡ шәлен ябынып, ҡышҡы төндә алыҫ ҡалаға киткән әсәйгә бер ҙә оҡшамаған ул бөгөн. Ә үҙе шул уҡ беҙҙең әсәй.

Төштән һуң Тимертауҙағы өләсәй ҙә килеп етте. Беҙ уның ҡапҡанан ингәнен күреп, йүгереп ҡаршы сыҡтыҡ.

— Һай, зирәктәрем, — ти өләсәй, үҙе икебеҙҙе лә етәкләп, йүгерә-атлай өйгә инеп китә. Беҙ был юлы уның камзул кеҫәһен дә аҡтарманыҡ.

Өләсәй үҙе атайымды һөйә, үҙе аҡрын ғына илай.

— Беләһеңме, Оксана, өләсәйҙең күҙенән сыҡҡан йәштәр — шатлыҡ йәштәре, татлы йәштәр улар, — тим мин.

— Ә һин ҡайҙан беләһең?

— Мансур бабай әйтте.

— Саҡ ҡына ла бирешмәгәнһең бит, инәй. Тимертауҙыҡы булғас та, әллә тимер кешеһең инде, — ти атай өләсәйгә.

— Тимер ҙә тутыға, балаҡай, был ауыр заманда тимерҙән дә ныҡ булырға кәрәк ине шул.

Мин пырхылдап көлөп ебәрәм.

— Ниңә көләһең? — тип һорай Оксана.

— Өләсәйҙең ҡулдары йоп-йомшаҡ, үҙе тимерҙән дә ныҡ, имеш!

Минең өләсәйҙән көлөүем Оксанаға оҡшамай. Ул ҡашын йыйырып ҡуя.

Төшкө сәйҙе эсеп бөткәс, атай ҡайышын быуҙы, пилоткаһын кейҙе.

— Әсәһе, — тине ул, — беҙ балалар менән бергәләп яландарҙы ураштырып ҡайтмаҡсыбыҙ. Иҫән ҡайтһам, арҡамдағы тоҡсайымды ла һалмай, яландарҙы, туғайҙарҙы урап сығырмын тигән һүҙем бар ине... Әллә беҙҙең менән үҙең дә бараһыңмы?

— Был юлы үҙегеҙ генә йөрөп ҡайтығыҙ. Бер ҙә генә бушамайым шул, — ти әсәй, үҙе Оксана менән минең ялан аяҡҡа ҡарай. — Ә һеҙ ни эшләп башмаҡтарығыҙҙы киймәнегеҙ?

Бына һиңә кәрәк булһа! Атай ҡайтҡас, башмаҡтарҙы бөтөнләй онотҡанбыҙ. Мин шунда уҡ карауат аҫтына тәгәрәп инеп китәм дә башмаҡтың дүртеһен бер юлы алып сығам.

— Бына, атай, өләсәйҙең бүләге — ҡыҙыл суҡлы һары башмаҡтар, — тим мин.

— Минең бер башмаҡ Көмөшлөлә ағып киткәйне әле, Йәмил табып алып ҡайтты, — ти һеңлем.

— Балыҡсы Яҡшығол бабай менән икәүләп тотоҡ.

— Ул башмаҡтар шатлыҡ та, ҡайғы ла булды инде, — ти өләсәй. — Һин ҡайтҡансы, кейҙерә алманыҡ: «Атай ҡайтҡас кейәбеҙ», — тиҙәр. Әле бөтөнләй иҫтәренән дә сыҡҡан. Эй балалар, балалар...

Беҙ башмаҡтарыбыҙҙы кейеп ебәрәбеҙ. Шунан һуң өсәүләшеп, мунса янынан ғына үтеп, Ҡыр яғына сығабыҙ.

Беҙ Оксана менән икебеҙ атайҙың ике яғынан йүгерәбеҙ. Ә ул еҫле үләндәрҙе өҙөп ала ла, танауына килтереп, еҫкәп тора; ҡояшта ҡыҙған саҡматаштарҙы алып, әкрен генә яңағына ышҡый. Йә ул беҙҙең менән бергә йүгереп, тәрән соҡорҙарҙың төптәренә төшә лә сәнскеле күрән сәскәне өҙә, йәиһә берәй таш өҫтөнә баҫып, оҙаҡ итеп бөтә тирә-яҡты ҡарап тора. Беҙ инде һай соҡорҙо ла үттек. Атай беҙҙе ҡайынлыҡ урманының теге башындағы шишмә янына алып килде. Эй һалҡын ул шишмәнең һыуы! Атай шишмәлә ҡулдарын, биттәрен йыуҙы, унан, устары менән алып, һыу эсте. Беҙ ҙә эстек. Шунан өсәүләп үлән өҫтөнә ултырҙыҡ.

— Был шишмәне һеҙҙең олатайығыҙ — минең атайым Батырша ҡаҙығайны, — ти атай. — Мин ул саҡта һеҙҙең кеүек кенә инем. Шунан бирле «Батырша шишмәһе» тип йөрөтәләр. Ә күпме кеше һыу эскән, битен йыуған ошонда!.. Ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә килеп һыу эсеп китәләр... Ана ҡарағыҙ, ҡалай рәхәтләнеп үҫеп ултыралар уның тирәһендәге ҡыҙыл сәскәләр!

— Рәхмәт инде олатайға, — ти Оксана.

Атай уны, ҡосағына алып, маңлайынан үбә лә тағы ергә баҫтырып ҡуя.

— Дөрөҫ, ҡыҙым. Ҡалай аҡыллы бит минең ҡыҙым.

— Атай, — тим мин, — атай, әйҙә беҙ ҙә өс шишмә, юҡ, дүрт шишмә яһайыҡ: һиңә, әсәйгә, Оксанаға, миңә. Беҙгә рәхмәт әйтерҙәр.

— Һеҙ үҫкәс, бәләкәс шишмәләр генә түгел, ҙур күлдәр яһарһығыҙ, ҙур йылғаларҙың ағышын борорһоғоҙ, — ти атай. — Кешеләргә файҙалы тағы бик күп эштәр эшләрһегеҙ.

— Ярай, — тип мин баш ҡағам. Тик үҙем хәҙергә ҙур күлдәр ҙә, ҙур йылғалар ҙа яһай белмәйем. Үҫкәс белермен әле, атай үҙе өйрәтеп бирер.

— Мин дә яһашырмын, атай, ярармы? — ти һеңлем. Атай ултырып тора, ә үҙе беҙгә ҡулдарын һуҙа, беҙ һеңлем менән икәү уны, ҡулдарынан тотоп, баҫтырып ҡуябыҙ.

— Хәҙер инде Имәнлекүл буйҙарына барып сығайыҡ. Арыманығыҙмы? — тип һорай атай.

Беҙ тамсы ла арыманыҡ әле. Атай ҡайтҡас, арыта тиме ни? Беҙ ауыл осон кире урап, Көмөшлө туғайына сығабыҙ.

Имәнлекүл буйында туҡмаҡ башлы бер нәмәкәй үҫә, үҙе матур, үҙенең мамыҡтары осоп тора. Уның исеме — екән. Күл буйына барғас, беҙ уларҙы күп итеп өҙҙөк. Томбойоҡ япраҡтары ла йыйҙыҡ. Уҡ яһарға төҙ ҡамыштар алдыҡ. Беҙ унда ҙур өйрәктәрҙе лә, бәләкәсерәк өйрәктәрҙе лә күрҙек. Улар, беҙҙән ҡурҡып, осоп киттеләр. Ә тәлмәрйендәрҙе күрһәк тә, әйтеп тормайым. Яратмайым мин ул баҡылдаҡтарҙы.

Шунан һуң атай беҙҙе әллә ниндәй һуҡмаҡтарҙан алып китте лә ҡайтыр юлға сығарҙы. Туғайҙан ҡайтҡанда, бер тауға менергә кәрәк. Беҙ саҡ ҡына арығайныҡ та, бер ағас төбөнә ултырып ял иттек. Тағы ла атайҙың миҙалдарын тотоп-тотоп ҡараныҡ. Шунан һуң ул ике түңәрәк миҙалды күлдәгенән ысҡындырҙы ла беҙҙең күкрәктәргә ҡаҙап ҡуйҙы. Шунда уҡ беҙҙең арыуыбыҙ бөтөп китте. Һуғышта миҙал алғас, атайҙың арыуы ла шулай бөткәндер әле. Бына ҡалай яҡшы бит ул миҙал!

Тауҙы инде беҙ шәп итеп мендек. Иң бейеккә еткәс, атай тағы туҡталды. Бынан беҙҙең ауылдың өс урамы ла, Көмөшлө буйҙары ла, теге Имәнлекүл дә, күкһел урман ситендәге Тимертау ҙа күренеп тора. Мин аптырайым: беҙҙең урмандар бөтәһе лә йәшел, ә Тимертау урманы күкһел. Өләсәй менән барып ҡарармын әле мин ул урманды...

Алыҫтағы тау яғынан, оҙон төтөн сығарып, поезд үтеп бара. Яҡын баҫыуҙа комбайн бойҙай урып йөрөй, уның өҫтөнә бәләкәс кенә бер кеше менеп баҫҡан. Әллә минең кеүек кенә берәй малаймы икән ул?

Атай, ҡулдарын ҡаштары өҫтөнә ҡуйып, оҙаҡ итеп ҡарап тора:

— Бына, балалар, — ти ул, — былар бөтәһе лә һеҙҙең тыуған ерегеҙ. Ана теге тауҙар, урмандар, йылғалар артындағы ла, бик алыҫтағы ла һеҙҙең тыуған ерегеҙ. Әле һеҙ күрмәгән, һеҙ белмәгән ерҙәр бар. Ана шул ерҙәрҙән дә ҡыуып ебәрҙек беҙ фашистарҙы. Аңлайһығыҙмы?

Беҙ бөтәһен үк төшөнөп бөтмәйбеҙ. Тик атайҙың бик яҡшы һүҙҙәр һөйләгәнен аңлайбыҙ. Ә үҫкәс, атай һуғышып йөрөгән яҡтарҙы барып күрербеҙ ҙә бөтәһен дә аңлап ҡайтырбыҙ.

— Ә һағыныуҙың ни икәнен беләһегеҙме? — ти атай.

— Нимә һуң ул?

— Һеҙҙең мине күргегеҙ килдеме?

— Эй оҙаҡ торҙоң, атай, беҙ илап бөттөк, — тип, Оксана уны ҡосаҡлап ала.

— Бына минең дә шулай һеҙҙе лә, ошо урмандарҙы ла, шишмәләрҙе лә, юлдарҙы ла күргем килде.

— Ә һин иланыңмы, атай? — тип һораша һеңлем.

— Юҡ, ҡыҙым, илауын иламаным. Илағым килһә лә, түҙҙем.

— Ә ниңә түҙҙең?

Оксана шуны ла белмәй, һаддат кеше илап тормаҫ инде.

Беҙҙең арттан һаҡаллы бер ағай килеп етте.

— Һау ғына ҡайттыңмы, иҫән генәме, йорт-ер именме, туған?.. Сәхрәгә сыҡтыңмы? Ярай, ярай, бик һәйбәт. Күркәм эш. Һағындыртҡандыр шул. Эйе, ярай, ярай, бик һәйбәт! — тип һөйләргә тотондо. Үҙе атайҙың ҡулын тотҡан да ебәрмәй.

Атай, ниҙер әйтергә теләп, ауыҙын асҡайны, теге ағай, уның һүҙен тыңламай, йәнә һөйләп алып китте:

— Ниңә шунда, бер сыҡҡас, беҙҙең йәшелсә бригадаһы яғына ла барып етмәнең? Ҡарбуз менән һыйлар инек. Эйе. Помидорҙар ҡотороп уңды быйыл. Бына һис арттырыу булмаҫ, ҡуш йоҙроҡтан һис ҡайтыш түгел. Балаларыңды ла алып төш. Ҡалай үҫкәндәр икән, тфү-тфү, күҙ теймәһен... Ҡабаҡтар мискә урынына тәгәрәп яталар, носилка менән ташырға тура килер инде. Бар, яраймы? — тине ул, үҙе шәп-шәп атлап китеп үк барҙы. Был ағайҙың аяҡ атлауына күҙ ҙә эйәрмәй, үҙе бәләкәй генә, үҙе ҡалайыраҡ шәп йөрөй. Эше күптер инде.

Атай уның артынан йылмайып ҡарап ҡала:

— Һаман шул Йәнтүҙмәҫ Гәрәй икәнһең, — ти ул теге ағай тураһында.

Беҙ ҡайтырға ҡуҙғалабыҙ. Йәнтүҙмәҫ Гәрәй ағай ҡапыл кире боролоп, беҙгә ҡаршы йүгереп килә:

— Ғәйепкә алма, туған, — ти ул, — ниндәйерәк эшкә тотонмаҡсыһың — ағынамы, ҡараһынамы тигәндәй? Әгәр ашығыс тимәһәң, минең бригадала бик һәйбәт аҡлы-ҡаралы бер эш бар. Ҡалаға емеш һатыуҙы юлға һалып ебәрер инең. Эйе.

— Һин дә ғәйепкә алма, Гәрәй ағай, мин шул ат тирәһенә барырмын тип торам.

— Биғәйбә, — ти Гәрәй ағай, — үҙең беләһең.

Ул яңынан беҙҙе артта ҡалдырып китә.

Беҙ урам башына килеп етәбеҙ. Ситтән дүртенсе анау өй беҙҙеке инде.

* * *

Бына күрҙегеҙме инде, дүртенсе алмағастың да эйәһе булды. Атайҙы әйтәм. Мин өләсәйҙе иҫәпкә индермәйем. Ул бит Тимертауҙан ҡунаҡҡа ғына килеп йөрөй. «Ни өсөн мине иҫәпкә индермәйһең?» — тип асыуланмай ул беҙҙең өләсәй. Ниңә, ҡунаҡ булып тороу яҡшы түгелме ни?

Мин бөтәбеҙ тураһында ла һөйләп бөтмәнем әле. Тик һеҙ ашыҡмағыҙ. Бер һөйләй башлаһас, мин туҡталып ҡала торған малай түгел. Үҙебеҙҙең өй, бигерәк тә һеңлем, тураһында һөйләргә мин бик яратам. Тик һүҙемә ҡолаҡ һалыусы ғына булһын. Һеҙ ҙә, бер тыңлай башлаһас, ярты юлда туҡталып ҡалмағыҙ. «Ярым-ярты эш эшләп йөрөү — ирлек түгел!» — ти Мансур бабай бер көн соҡор буйы Заһитҡа. Заһиты ла бит ярты баҡсаһын кәртәләгән, яртыһын кәртәләмәгән.

БЕҘ ТИҘҘӘН МӘКТӘПКӘ БАРАСАҠБЫҘ

Атай ҡайтҡас, мин һигеҙгә сыҡтым, ә Оксана һаман ете менән бара.

— Балаларға һабаҡҡа төшөргә кәрәктер бит инде быйыл, — тине атай бер көндө иртән, аттар янынан ҡайтҡас.

— Үҙҙәре бер ҙә һүҙ ҡуҙғатмайҙар бит әле. Әллә уҡыһылары килмәй инде, — ти әсәй. Беләм инде, ул шаярып ҡына шулай әйтә. Ҡапыл шул ваҡыт әсәй ҡыш көнө ебәргән теге телеграмма минең хәтеремә килеп төшә. Өләсәй менән Мансур бабайҙың яҙыуҙы танымай торғандарын, Мәхмүттең эре генә ҡыланып, уҡып төшөндөргәнен уйлайым. Әсәй уларҙы белмәй шул, ә мин беләм. Белһә, ул шулай шаяртып тормаҫ та ине.

— Беҙҙең уҡығыбыҙ бик килә, әсәй, — ти һеңлем. — Сентябрь булғас та, эй күмәк китербеҙ мәктәпкә.

Ә мин һаман өндәшмәйем, теге телеграмманы уйлап ултырам.

— Һин һуң, Йәмил, ҡалайыраҡ уйлайһың?

Быны атай һорай. Ҡалай уйлайым ти мин? Һәйбәт уйлайым.

— Һәйбәт уйлайым, атай, — тим мин ҡысҡырып. — Сентябрь генә тиҙерәк булһын...

Мәктәп тураһында башҡаса һөйләшмәйҙәр.

Атай менән әсәй эшкә киткәс тә, беҙ икебеҙ болдорға сығып ултырабыҙ. Артҡы урамдың теге осондағы ҙур аҡ мәктәп беҙгә күренеп тора. Сентябрь булғас, беҙ Оксана менән икәү, китаптарыбыҙҙы күтәреп, ошо болдорҙан төшөрбөҙ. Унан урамға сығырбыҙ ҙа ан-а-ау юл менән китербеҙ, шунан мәктәпкә лә барып етербеҙ.

— Беҙ унда яҙыу ҙа яҙырбыҙ, һүрәттәр ҙә төшөрөрбөҙ. Мин сәскә төшөрөрмөн, яраймы, Йәмил?

— Мин — ат та мылтыҡ...

— Матур йырҙар йырларбыҙ. Һин башларһың, йәме?

— Уҡытыусы апай башлаһын...

Тап ошо ваҡытта үҙемдең йырлағым килеп китә. Алыҫтағы аҡ мәктәпте, уның тәҙрәләрен, мәктәп янындағы ҙур ағастарҙы, ағастар янынан үткән юлды күреп торһағыҙ, уның өҫтәүенә, шул юлдан үҙегеҙҙең барасағығыҙҙы уйлаһағыҙ, һеҙҙең дә йырлағығыҙ килер ине.

Мин йырҙы башлап ебәрәм:

Тау башында аҡ мәктәп,
Беҙ барырбыҙ күмәкләп...

Һеңлем ялт итеп миңә әйләнеп ҡарай. Ул, үҙенең зәңгәр күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, шунда уҡ йырға ҡушыла. Беҙҙең аяҡтарыбыҙ ҙа тик кенә тормайҙар, йыр ыңғайына бәүелергә тотоналар.

Китаптары шау һүрәт,
Мәктәп, һин беҙҙе өйрәт
Уҡырға, яҙырға,
Һүрәттәр яһарға!

Беҙҙең ҡапҡа аҫтынан Фәһимә үрелеп ҡарай. Беҙ йырҙан туҡтайбыҙ. Шул арала Марат ҡоймаға менеп үк атлана. Фәһимә, беҙҙе күргәс, йүгереп килә.

— Йыллашып ултыламы ни беләүҙәл! — ти ул. Һаман бөтмәй шул Фәһимәнең һаҡаулығы.

Марат һыҙғыртҡысын һыҙғыртып ебәрә, үҙе ҡулы менән беҙҙе урамға саҡыра. Оксана өй ишеген ябып ҡуя. Ишекте япмай китһәк, тауыҡ, себештәр өйгә килә лә тула. Тәҙрә төптәренә ҡунып бөтәләр улар. Үҙҙәре усалдар, үҙҙәре әллә ниндәй әрһеҙҙәр.

— Балабыҙмы? — ти Фәһимә.

— Ҡайҙа?

Марат һыҙғыртҡысын икенсе тапҡыр һыҙғырта:

— Киттек! — ти ул.

— Ҡайҙа киттек?

— Их, һеҙ, — тигән була Марат, — бер ни ҙә белмәйһегеҙ. Кисә бит бер апай беҙҙең кеүектәрҙе уҡырға яҙып йөрөгән. Беҙ урманда тороп ҡалдыҡ. Һинең бәкең арҡаһында инде.

— Юғалтма үҙең кеше бәкеһен!

— Кем юғалтҡан? Һин юрамал миңә ябаһың бит, белгең килһә.

— Әрләшмә, Марат, — ти Оксана. — Ул бәке бит үҙе юғалды. Эйе бит, Йәмил?

— Үҙе...

— Балайыҡ инде. Әй бынауы малайҙалды!

Беҙ дүртәүләшеп урамға сығабыҙ. Арттан Фәрит менән Заман ҡыуып етә. Улар шау ғына шулай инде. Бөтә баланан да һуңға ҡалалар.

— Минең дә ҡәләмем бар! — ти Заман, бармаҡ буйы ғына ҡәләмен Оксанаға күрһәтә. — Беҙҙең бесәй бөгөн бер турғайҙы тота яҙҙы ла, турғай осоп китте. Һәйбәтме?

— Нимә, турғаймы, Заман?

— Ҡәләм.

Марат Заманға һөйләнмәҫкә ҡуша. Күп һөйләй шул Заман. Әсәй миңә: «Һөйләргә яратаһың», — ти. Заман минең ише генәме һуң, бәп-бәләкәс көйөнә ауыҙы һүҙҙән бушамай.

Беҙ инде урамдың теге яғынан, Хәйбулла Рушандары яғынан, йөрөргә лә ҡурҡмайбыҙ. Рушан хәҙер бер ҙә таш ырғытмай. Ямғыр яуған көндө беҙҙең быҙау тары баҫыуына керергә иткәйне. Беҙ Оксана менән йүгерә-

без-йүгерәбеҙ, һис тегене тыйып булмай. Шунда Рушан быҙауҙы тотоп бирҙе. Ул бик шәп йүгерә бит.

Ана ул әле ҡапҡалары башында ниҙер йырлап ултыра. Ҡыҙыҡ малай ул Рушан: йә ағас ботағына, йә өй ҡыйығына, йә берәй бағана башына менә лә йырлап тик ултыра. Үҙенең йырын бер ҙә аңлап булмай.

— Әйҙә, Рушан, мәктәпкә! — ти Марат.

— Мин сентябрь еткәс барам, кисә апай шулай тине.

— Ә беҙ урманда йөлөнөк тә апайҙы күлмәнек.

Марат һеңлеһенә асыуланып ҡарай:

— Һин һаҡау көйөңә мәктәптә күп һөйләнеп торма! — ти ул.

Фәһимә үпкәләмәй, тик үҙенең һары башын ғына ҡағып ҡуя:

— Ялал...

Беҙ артҡы урам осона сыҡтыҡ та мәктәпкә килеп еттек. Бер малай ҙа теймәне беҙгә. Артҡы урам малайҙары лә һәйбәттәр бит.

Беҙ ишек төбөндә генә туҡтап ҡалдыҡ. Берәү ҙә алдан кермәй. Фәһимә ишек тотҡаһына үрелгәйне лә, Марат уның ҡулынан тартты. Беҙ, тирә-яҡҡа ҡараңғылап, һаман торабыҙ. Ҡулына ҙур ҡыҙыл сәскә тотоп, мәктәп баҡсаһынан Заман килеп сыҡты. Ул башта уҡ туп-тура шунда йүгергән, ахыры.

— Эй күп сәскә таптым, әйҙәгеҙ, сәскә йыябыҙ! — ти Заман.

Фәрит уны әрләй. Баҡсалағы сәскәләрҙе өҙөргә яраймы ни? Бигерәк тә бер ни белмәй шул әле Заман.

— Мин ҡәләмде юғалттым, Фәрит, — ти ул.

Баҡсанан бер апай килеп сыға:

— Ҡайһығыҙ бында сәскә өҙөп йөрөй?

— Мин түгел! — ти Заман, үҙе Фәриттең артына боҫа. Теге апай көлә. Көлгәс, асыуланмайҙыр инде.

— Баҡсала уйнарға ярай, тик сәскәләрҙе өҙөргә ярамай, — ти апай, үҙе Замандың башын һыйпай, — өҙгәс, бөтә бит улар. Барығыҙ, уйнағыҙ.

— Беҙ уйнарға килмәнек, апай, йомош менән килдек, — ти Марат.

— Йомошоғоҙ кемдә һуң?

— Мәктәптә. Беҙ уҡылға килдек, апай, — ти Фәһимә.

Марат уның итәгенән тартып ҡуя:

— Юҡ, әлегә уҡырға түгел. Беҙҙе яҙып ҡуйығыҙ, апай.

Апай беҙҙе мәктәпкә, бер ҙур бүлмәгә, алып инә. Унда балалар ултыра торған парталар ҡуйылған.

— Йә, ултырышығыҙ, балалар, — ти апай. Беҙ парталар артына инәбеҙ. Апай үҙе өҫтәл янына килеп, бер китаптымы, дәфтәрҙеме асып ҡуя.

— Апай, беҙ кисә урманға барҙыҡ...

— Шулаймы ни?

— Эйе! — ти Заман. Заман алдаша: ул кисә урманға барманы.

— Кемдән башлайбыҙ?

Беҙ өндәшмәй торабыҙ. Шунан һуң апай башта Мараттың, унан Фәриттең, унан Оксана менән минең исемдәрҙе, фамилияларҙы, йәштәрҙе һорашты.

Сират Заманға килеп етте.

Ул апайҙың янына уҡ килде лә бая үҙе өҙгән сәскәһен һуҙҙы:

— Мә, апай. Мин дүрттә.

— Мин алтыла, — тине Фәһимә.

Апай тағы ла йылмая, үҙе Замандың арҡаһынан һөйә.

— Беләм, беләм, һеҙҙе лә яҙып ҡуйҙым, — ти ул, шунан һуң беҙгә ҡарай. — Минең исемем — Рауза апай. Һеҙ бергәләшеп ошо класта уҡырһығыҙ, мин уҡытырмын, ә хәҙергә ҡайтығыҙ, уйнағыҙ...

Рауза апай беҙҙе болдорға тиклем оҙата сыҡты. Беҙ йүгерешеп ҡайтып киттек. Заман да ҡалышманы. Соҡор буйына еткәс, беҙ йүгереүҙән туҡтаныҡ.

— Рауза апай һәйбәтме? — тип һораны Оксана минән.

— Һәйбәт. Ул беҙҙе уҡырға ла, яҙырға ла өйрәтер.

— Тағы ун дүрт көндән сентябрь, уны бик белеп тороғоҙ! — тип әйтеп ҡайтарҙы беҙгә Марат.

Ошо мәлдән алып беҙҙе мәктәпкә әҙерләй башланылар. Әсәй икебеҙгә лә матур итеп муҡсалар тегеп бирҙе, атай лавканан ҡәләмдәр, төрлө буяуҙар алып ҡайтты. Оксанаға ла, миңә лә яңы күлдәк тектеләр.

Беҙ көн һайын мәктәп тирәһенә барып ҡайтабыҙ; эскә инмәһәк тә, баҡсаһында йөрөйбөҙ. Сәскәләрҙе өҙмәгәс, беҙгә берәү ҙә һүҙ әйтмәй. Ниндәй генә сәскәләр, ниндәй генә ағастар үҫмәй ул баҡсала!

ЯҠШЫ ХӘБӘРҘӘР

Беҙ кисен дүртәүләп сәй эсеп ултырабыҙ. Оксана баянан бирле минең менән бәхәсләшә. Мин әйтәм: «1 сентябргә тиклем ете көн ҡалды», — тим. Ул әйтә: «Һигеҙ көн», — ти, мин әйтәм: «Юҡ, ете», — тим, ул әйтә: «Юҡ, һигеҙ», — ти. Атай менән әсәй өндәшмәй генә беҙгә ҡарап тора.

Һеңлем ҡапыл атайға һыйына:

— Улайһа иң-иң дөрөҫөн, атайым, һин әйт, — ти ул.

Атай мыйығын һыйпап ала, үҙе саҡ ҡына йылмайып та ҡуя.

— Минеңсә, — ти ул, — иң дөрөҫө — ете көн, һигеҙ төн.

Мин бармаҡ бөгә-бөгә көндәрҙе лә, төндәрҙе лә иҫәпләп сығмаҡсы итәм. Тик бер ҙә рәтен табып булмай. Эй ҙә, ниңә төндө һанап торорға? Кешеләр бит төнөн йоҡлайҙар.

Атайым әсәйемә, унан беҙгә күҙ төшөрөп ала ла тыныс ҡына һүҙ башлай:

— Бөгөн, — ти ул, — алыҫ ерҙән яҡшы хәбәрҙәр алдыҡ, балалар, — бик яҡын кешебеҙҙән хат килде...

Ниндәй ерҙәрҙән, ниндәй яҡын кешенән килде икән ул хәбәрҙәр? Атай шуны төшөндөрөп бирмәй бит. Оксананың сәсен һыйпағанда ниңә һуң әсәйемдең ҡулы саҡ ҡына ҡалтыранғандай итә?

Мин яҡын кешебеҙ йәшәгән алыҫ ерҙәр тураһында уйлайым. Ул яҡтар ҡайҙа икән? Әллә теге Тимертауҙың күкһел урманы артындамы? Мин атайҙан шуларҙы һорашмаҡсы итәм. Ләкин инде атай урынынан тороп китә лә әсәйем менән йыш-йыш итеп һөйләшә башлай: «Көнбикә, һин иртәгә умарталыҡтан бал алып ҡайтырға онотма. Тимертауға ла хәбәр итер инең. Шулай һәйбәтерәк булыр...» «Ярар», — тип баш ҡаға әсәйем. Әлбиттә, шулай һәйбәтерәк булыр. Өләсәй беҙҙә саҡта һәр ваҡыт һәйбәтерәк була.

— Ә һеҙгә, балалар, һүнәй баҙарына китергә ваҡыт, — ти әсәй, уның тауышы бөгөн ни эшләптер тоноҡлана төшкән.

Алыҫ ерҙәр, яҡшы хәбәрҙәр хаҡында ул кис бер ни ҙә белә алмайынса, Оксана менән йоҡларға яттыҡ.

Ә иртәнсәк һуң, иртәнсәк ниҙәр генә эшләнмәне беҙҙең өйҙә! Беҙ тороуға, әсәйем мейесте ап-аҡ итеп ағартып ебәргән, һандыҡтағы биҙәкле таҫтамалдар ҡаҙауҙарға алып эленгән, ҙур карауатҡа беҙҙең теге шаҡмаҡлы-шаҡмаҡлы матур балаҫ йәйелгән. Тәҙрәләргә селтәрле яңы ҡорғандар ҡоролған. Самауыр һуң, самауыр! Ҡалайыраҡ ялтырап ултыра ул өҫтәл өҫтөндә!

Атайым бөтә ҡураны тап-таҙа итеп һепереп ҡуйған. Һарғайып килгән йорт үләне өҫтөндә бына бынау саҡлы ла сүп таба алмаҫһың.

Алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәрҙәр килгәс, бына нисек була бит ул!

Кискә ҡаршы беҙгә өләсәй ҙә килеп етте. Беҙ уны Хәйбулла Рушандары тәңгәленә еткәс тә күреп, ҡаршы йүгереп барҙыҡ.

— Өләсәкәй, — тип, беҙ уны икебеҙ ике яҡтан ҡосаҡлап алдыҡ, — беҙгә алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәрҙәр килде. Шуға күрә һине лә саҡырып ебәрҙек...

— Хәбәрҙең яҡшы булыуы һәйбәт, балалар... — ти өләсәй, үҙе йомшаҡ ҡулдары менән арҡабыҙҙан һөйә.

Атай көнө буйы аттары янында йөрөнө. Бына көтөү ҙә ҡайтты.

Өләсәй менән Оксана Мансур бабайҙарға инеп киттеләр. Мин шым ғына әсәйем һыйыр һауған ергә барҙым.

— Әсәй, — тинем мин бышылдап ҡына, — әсәй, алыҫ ерҙәге яҡын кеше кем ул?

Әсәй ҡапыл миңә боролоп ҡараны ла йомшаҡ ҡына тауыш менән әйтеп ҡуйҙы:

— Изге сәғәткә тура килһә, бөтәһен дә үҙегеҙ күреп белерһегеҙ, улым...

Бер көн үтте, ике көн үтте. Беҙ бер ни ҙә күреп белә алманыҡ. Ә өсөнсө көндө беҙҙең өйгә, өләсәй әйтмешләй, һөйөнөс тә, көйөнөс тә килеп инде...

ҠУНАҠ КИЛДЕ

Көмөшлө буйынан беҙ кис кенә ҡайтып индек. Баҡса янындағы бүрәнә өҫтөндә атай менән бер һалдат ултырып тора. Беҙҙе күргәс, теге һалдат аяҡ үрә баҫты ла ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Оксана!.. — Ул тағы ла низер әйтте, тик мин генә аңламаным.

Һеңлем менән беҙ икебеҙ туҡтап ҡалдыҡ. Оксананы ҡайҙан белә был мыйыҡһыҙ һалдат ағай? Атай әйттеме икән ни?

Мин ҡурҡып киттем. Оксана ла ҡурҡты. Уның ирендәре лә ҡалтырай башланы.

— Бында килегеҙ, балалар, был ағай — ҡәҙерле ҡунаҡ, — тине атай. — Ул әле генә килеп төштө.

Тик беҙ барыбер ҡуҙғалманыҡ. Ҡәҙерле ҡунаҡ үҙе йүгереп килде лә Оксананы күтәреп алды. Башта ул һеңлемдең күҙҙәренә бик оҙаҡ ҡарап торҙо, ә унан һуң күкрәгенә ҡыҫты. Оксана иламаны ла, ҡысҡырманы ла. Уны бит былай ҙа һәр осраған кеше күтәреп ала. Бөтә кеше ярата минең һеңлемде. Ҡәҙерле ҡунаҡ үҙе һөйә, үҙе һөйләнә: «Оксана... Оксана...» Мин атайға ҡарайым. Ул башын эйә лә ҡул һырттары менән күҙен ыуып ала. Сүп керҙеме икән әллә уның күҙенә? Өләсәй асыҡ тәҙрәнән тышҡа ҡарап тора. Ул ниңәлер ауыҙын яулыҡ осо менән ҡаплаған. Әсәй болдорға сығып баҫҡан. Ул әллә көлә, әллә илай — мин шуны һис аңлай алмайым. Ул, ахыры, илай ҙа, көлә лә.

Ә ҡәҙерле ҡунаҡ Оксананы һаман ҡосаҡлап тора. Был һалдатҡа асыуым да килә башлай, нимәһелер оҡшамай уның миңә. Кеше һеңлеһен шул тиклем оҙаҡ һөймәйҙәр инде. Ул ҡунаҡ минең өсөн ҡәҙерле лә түгел әле, белгегеҙ килһә!

Аҙаҡтан ғына ҡунаҡ Оксананы ергә баҫтыра ла мине күтәреп алмаҡсы итә. Мин атай янына ҡасып китәм. Ул ҡунаҡ тағы бер тапҡыр шулай итһә, һеңлемде Тимертауға алам да таям.

— Улай ҡырыҫ итенмә, улым, беҙҙең ҡунаҡ, Петро ағайың, һине ярата бит, — ти атай.

— Кәрәкмәй, яратмаһын, мине лә, Оксананы ла яратмаһын.

Ҡунаҡ Оксананы етәкләп, беҙҙең эргәгә килә. Мин йүгереп китәм дә болдорға барып ултырам. Әллә ниңә эсем бошоп ҡуя. Оксана инде тегенең итәгендә ултырып тора... Мин атайға, әсәйгә, өләсәйгә ҡарайым: улар бөтәһе лә бөгөн әллә ниндәйҙәр. Әллә шатланалар, әллә ҡайғыралар инде. Оксана ла бөтөнләй үҙгәреп китте.

Минең турала, ахыры, онотто ла инде ул... Юҡ, онотманы. Бына һеңлем минең эргәмә йүгереп килә. Уның зәңгәр күҙҙәре тағы ла яҡтыра төшкән. Тимәк, ул шатлана. Ул ҡыуаныш сәпәкәй итә:

— Беләһеңме, беҙгә кем килде? — ти.

— Ә кем һуң?

— Әйтәйемме? Беҙгә килде... Әйтмәһәм, ғүмергә лә беләсәк түгелһең.

Һеҙ белә алыр инегеҙме һуң? Мәңге белә алмаҫ инегеҙ.

БЫНА КЕМ ИКӘН УЛ БЕҘҘЕҢ ҠӘҘЕРЛЕ ҠУНАҠ...

— Көнбикә, инәй, — тип саҡыра атай, — бында килегеҙ әле. Бөтәбеҙ ҙә бергәләп ултырып алайыҡ.

Беҙ шул уҡ бүрәнәләр өҫтөнә теҙелешеп ултырабыҙ, Оксана ҡунаҡ ағай менән минең араға ултыра.

Мин Ҡыр яғына әйләнеп ҡарайым. Ҡояш алыҫ тау артына төшөп бара. Беҙҙең баҡса артындағы һыртта аттар ҡурпы утлап йөрөй. Уларҙың күләгәләре оҙон булып ергә төшә. Яңғыҙ имән төбөндә алмасыбар ат баҫып тора. Уның исеме Атака. Ул ат та, атайҙар кеүек үк, фронтта йөрөп ҡайтҡан. Атаканың янбашына һуғышта пуля тейгән. Ул юртҡанда әле лә саҡ ҡына аҡһап китә. Атака тирәһенә тайтулаҡ йыйылған. Ул аҡрын ғына башын ҡағып ала, ә тегеләре, ҡойроҡтарын да ҡыймылдатмай, тик торалар. Бәләкәс аттарға Атака һуғышта булған хәлдәрҙе, үҙенең күргәндәрен һөйләй, ахыры.

Атай ҡояшҡа ҡаршы таш өҫтөнә күсеп ултыра. Ҡояштың ҡыҙыл нурҙары уның битенә төшә. Атайҙың йөҙө ялҡын бөркөп торған һымаҡ күренә миңә. Уның оҙон мыйыҡтары дөрләп янып китмәһә ярар ине тип шикләнеп тә ҡуям.

— Ҡәҙерле ҡунаҡты беҙҙең өйгә ниндәй яҙмыш килтергәнен һөйләргә ваҡыт етте, балалар, — ти атай, ул башта Петро ағайға, унан Оксанаға һәм миңә ҡарап ала.

Петро ағай башын түбән эйеп ултыра, ни тураһындалыр уйлана, ахыры, ул. Беҙ, Оксана менән икәү, атайҙың ни әйтеүен көтөп торабыҙ. Ләкин атай һүҙен тиҙ генә башлап китә алмай.

— Минең һүҙем ҡыҫҡа булыр, — ти ул, тамағын ҡырып. — Һуғыш — ул, балалар, ҡот осҡос нәмә. Кешеләр-

гә бик күп ҡайғы-хәсрәттәр килтерә ул. Аҙмы емерелгән, яндырылған ауылдар һәм ҡалалар үттек беҙ — әйтеп бөтөргөһөҙ. Беҙҙең дошмандарыбыҙ — фашистар йыртҡыстан да яман булып сыҡты. Улар әсәләрҙе лә, кескәй балаларҙы ла ҡыҙғанманылар.

Беҙ уларҙы Украина еренән ҡыуып бара инек. Бер саҡ шулай дошманды бер ауылдан бәреп сығарҙыҡ. Емерек өйҙәр, ҡара көйгән баҡсалар әле лә күҙ алдымда тора. Бөтә ерҙе төтөн ҡаплаған, хатта тын алыу ҙа ауыр. Урамда кеше заты күренмәй. Ҡапыл мин ситтәге бер өйҙә бала илауын ишеттем.

Атай яңынан тамаҡ ҡырҙы ла ялт итеп Оксанаға ҡараны. Оксана ла, унан күҙен алмай, ҡарап тора. Үҙенең ирендәре лә аҙ ғына ҡалтырай. Петро ағай, низәндер ҡурҡҡан төҫлө, бөршәйеп кенә ултыра. Ул өндәшмәй генә атайҙың һөйләп бөткәнен көтә.

— Мин шул өйгә йүгереп керҙем. Керһәм — иҙәндә үлек әсә ята. Уның эргәһендә бер ҡыҙ бала илап ултыра. Иҙән уртаһында туҡтап, ҡатып ҡалдым. Ни эшләргә белмәйем. Ә ҡулдарым ирекһеҙҙән ҡыҙ баланы күтәреп алдылар. Ул миңә ҡапыл: «Атай!» — тип өндәште. Күрәһең, мине шулай уҡ фронтта йөрөгән атаһы тип уйланы. «Изге сәғәттә, балаҡай! — тинем мин. — Бөгөндән башлап һин Йәмилдең туғаны булырһың...»

Оксана ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ул мин инемме?

— Эйе, һин инең, ҡыҙым... — тине атай йомшаҡ ҡына. — Йә инде, балалар, ҡалғанын тыңлағыҙ. Мин мейестән күмер алып, стенаға үҙемдең адресты яҙҙым, шунан ҡыҙымды шинелгә төрөп күтәрҙем дә иптәштәремде ҡыуа киттем... Һуғыш тынып торған арала, ҡыҙымды яҡындағы ҡалаға балалар йортона илтеп ҡуйырға командирым миңә рөхсәт бирҙе. «Оксананы килеп ал!» — тип әсәйегеҙгә шунда уҡ хат та яҙҙым. Әсәйегеҙ ул алыҫ юлға тик бер нисә айҙан һуң сыға алды... Туғаныңдың ҡайтып төшкән көнөн хәтерләйһеңдер бит, Йәмил?

Хәтерләмәй буламмы һуң!..

— Бынан өс көн элек хат килеүе тураһында әйткәйнем һеҙгә. Ул хатты Петро яҙғайны. Оксананың атаһы — беҙҙең ҡәҙерле ҡунағыбыҙ һәм туғаныбыҙ Петро —

бөгөн үҙе килеп төштө, — тине атай. Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә, уның тауышы нисектер ҡалтыранып китте...

Мин ҡысҡырып илап ебәрерҙәй булдым. Ләкин тап шул мәлдә Оксана бышылдап ҡына миңә өндәште:

— Беҙҙең тағы ла бер әсәйебеҙ бар тигәйнем бит һиңә, Йәмил, эйеме?! Бына тағы бер атайыбыҙ ҙа килде. Минең атайым!

Ҡапыл Петро ағай Оксана менән икебеҙҙе бер юлы күтәреп алды ла күкрәгенә ҡысты: «Йәмил, Оксана...» — тип шыбырланы ул.

Шул саҡ мин уның ысындан да ҡәҙерле ҡунаҡ икәнен аңланым.

ҺУҢҒЫ ӨС КӨН

Мин Петро ағайға шунда уҡ эйәләшеп алдым.

Бына тигән ул беҙҙең Петро ағай. Оксана менән икебеҙҙе, ике иңбашына ултыртып, ҡура буйынса күтәреп тә йөрөй әле ул. Беҙҙең өйҙә унан да дәүерәк кеше юҡ. Соланға ла ул эйелеп кенә инә, юғиһә, маңлайы ишек башына бәрелә. Йомарлаһа, һәр бер йоҙроғо Замандың ҙур ҡыҙыл тубы саҡлы булыр. Бына ҡалайыраҡ бит ул беҙҙең Петро ағай. «Баһадир!» — бынықын Мансур бабай шулай ти.

Тик өләсәйем генә бошона: «Бигерәк тынғыһыҙ шул. Көнө буйы ашап-эсеп, рәхәтләнеп ҡунаҡ булып ҡына ятмаҫҡа шунда. Ә уның етмәгән ере юҡ», — ти.

Өләсәй дөрөҫөн әйтә: был арала беҙҙең өсөбөҙҙөң етмәгән еребеҙ ҡалманы. Иң тәүҙә беҙ Петро ағайға Батырша олатай шишмәһен күрһәттек. Унан яҡын баҫыуҙа әсәйемдәр ҙур машина менән бойҙай һуҡҡан ергә барҙыҡ. Петро ағайым ҡарап тороп ҡына сыҙай алманы. Машинаның башына уҡ менеп, барабанға көлтә бирергә тотондо. Оксана менән беҙ ситтә, эҫкерт янында, баҫып торҙоҡ.

— Һалдаттың ҡулдары эш һағынған, һай, нығ һағынған! — ти шунда һалам өйөүсе бер бабай.

— Дөрөҫ! — тип уның һүҙен ҡеүәтләй апай кеше.

Машина туҡтаған арала туҙанға батып бөткән Петро ағай беҙҙең янға килде. Шунан һуң беҙ өсәүләп атайым-

дың аттары янына барып сыҡтыҡ. Их, шәп тә һуң беҙҙең аттар! Улар Петро ағайға ла бик оҡшаны.

Әйтәм бит, йөрөмәгән еребеҙ ҡалманы — йәшелсә баҡсаһында ла, умарталыҡта ла, кирбес һуға торған ерҙә лә булдыҡ беҙ. Петро ағайға беҙҙең ауыл бик оҡшаны, ахыры, күреп туя алмай. Ә кешеләр һуң, кешеләр! Һәр береһе Петро ағайға: «Хуш килдең, туған!» — тип өндәшә һәм, уның ҡулын ҡыҫып, оҙаҡ-оҙаҡ итеп күрешә.

Ҡарт әбейҙәр уның арҡаһынан һөйөп алалар. Ҡәҙерле ҡунаҡ булмаһа, кешеләр шулай яратырҙар инеме һуң Петро ағайҙы, ә?!

Петро ағайға иң оҡшаған нәмә беҙҙең тимерлек булды. Беҙ унда әллә нисә рәт барҙыҡ. Тимерлектә ике Ғәби эшләй: береһен — «Йыуан Ғәби», икенсеһен «Нәҙек Ғәби» тип йөрөтәләр. Ғәбиҙәр ҡәҙерле ҡунаҡ менән тиҙ үк дуҫлашып алдылар. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Барған һайын Петро ағай, еңдәрен һыҙғанып, ҡулына сүкеш ала. Бер саҡ ул, минең баш дәүмәле сүкеште күтәреп, ҡыҙған тимер өҫтөнә килтереп һуҡҡайны, теге тимер ҡоймаҡ ҡалынлығы ғына ҡалды.

— Бына тимерсе, исмаһам, — ти Нәҙек Ғәби Йыуан Ғәбигә. — Бына кемдә ул көс!

Ошо тимерлектә инде Петро ағай миңә тимер һаплы бәке, әсәйемә тәртешкә яһап бирҙе. Тик Оксанаға ғына бер әйбер ҙә булманы. Ҡурсаҡ яһап булмай шул бында...

Әсәйем әйткәндәй, төштәге кейек үтте лә китте ул өс көн!

СЕРЛЕ ҺӨЙЛӘШЕҮ

Оксана менән Петро ағай өйгә инеп китте. Мин, тимерлектән алып ҡайтҡан һәйбәт нәмәләремде теге таш һарайға ҡуйырға тип, баҡсаға керҙем. Яҙ ултыртҡан алмағастар араһынан эйелеп кенә ҡайын төбөнә килдем. Бына Оксана алмағасы, бына минеке, анауҙары атайым менән әсәйемдеке... Ә был ситтәгеһе кемдеке һуң? Теге саҡ, яҙ көнө, әсәйем ни тигәйне әле? «Бишенсе алмағас ҡунаҡҡа булыр», — тигәйне. Беҙҙең хәҙер ҡәҙерле ҡунағыбыҙ бар. Шулай булғас, бишенсе алмағасты Петро ағайға атайым да ҡуям. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты!

Кеҫәләге тимер-томорҙарҙы бушатып торғанда, баҡсаның арғы башында кемдәрҙеңдер мыңғыр-мыңғыр һөйләшкәнен ишетеп ҡалдым. «Кемдәр икән?» Мин ҡапыл әйләнеп ҡараным. Кәртәнең был яғына өләсәй баҫҡан, теге яҡтан Мансур бабайҙың аҡ һаҡалы елберләп күренеп тора.

— Бигерәк тә бала йәнле инде. Үҙе шундай кеселекле, үҙе харап уңғанға оҡшап тора, — ти өләсәй. — Уңдыҡ яңы туғандан, бик уңдыҡ.

— Шулай, шулай, ҡәрендәш, — тип, Мансур бабай уның һүҙен ҡеүәтләй, — бәндәләрҙе тел дә, байлыҡ та туғанлаштырмай. Бәндәләрҙе йөрәк туғанлаштыра. Мин күп йәшәгән кеше инде, беләм: был заман кешеләрҙең тормоштарын ғына түгел, йөрәктәрен дә яҡшыртты.

Өләсәй көрһөнөп ҡуя ла яңынан һөйләй башлай:

— Йөрәк итен телеп алған кеүек булыр инде, Мансур ағай. Артыҡ ныҡ эйәләштек шул ҡыҙыбыҙға. Атаһын да әле күреп туя алған юҡ. Бигерәк Йәмил менән Көнбикә өҙгөләнер инде. Ошонда бергәләп кенә йәшәүгә ни етер ине лә бит, күндереп булмай шул.

Унан һуң Мансур бабайҙың ҡалын тауышы ишетелә:

— Күндерергә кәрәкмәй ҙә, ҡәрендәш. Үҙ ере көлкүмергә ҡалған ир-егет, йөрәге сыҙап, бында ятмаҫ шул. Уның урынында булһам, мин дә үҙ тупрағыма ҡайтып, орлоҡ сәсер инем...

Был ике оло кешенең һөйләшеүе бик серле тойолдо миңә. Эсемдә ниндәйҙер нәмә келт итеп өҙөлгәндәй булды. Эйе, улар һеңлем менән Петро ағай тураһында һөйләйҙәр ине.

Мин өйгә атлығып индем. Һеңлем, аяҡтарын һелкеп, һандыҡ өҫтөндә ултыра, үҙе атаһына низер һөйләй. Уның асыҡ зәңгәр күҙҙәре нисек йылмаялар!.. Мин шунда уҡ тынысланам. Юҡсы, улар бер ҡайҙа ла китмәгәндәр бит.

— Һин хазина һарайына барҙың, мин беләм инде, — ти һеңлем. — Әйҙә, атыңа ултыртып, минең ҡурсаҡтарҙы ҡунаҡҡа алып китәбеҙ.

— Ә ҡайҙа?

— Алыҫҡа, би-ик алыҫҡа, Украинаға.

Атлай-йүгерә өләсәй килеп инә һәм шунда уҡ самауырына тотона, үҙе һөйләнә:

— Ҡунаҡтар ҡайтып та еткән, ә мин күрмәй ҙә ҡалғанмын. Бына нисек була бит ул, донъяңды онотоп йөрөгәс. Йә инде...

Ә минең ҡолаҡ төбөндә башҡа һүҙҙәр яңғырай: «Йөрәк итеп телеп алған киҫәк булыр инде...»

Ниңә улай ти икән өләсәй?

Ниңә икәнен мин тик һуңынан ғына аңланым.

ОҘАТЫУ

Август айының һуңғы көнө килеп етте. Ул иртә шундай йылы ине. Өй алдындағы һары үләндәр, баҡсалағы ағас япраҡтары, өй түбәләре, урамдағы яңы телеграф бағаналары — бөтәһе, бөтәһе лә ҡояш нурына күмелгән.

— Йәй беҙҙең менән нисек йылы, яғымлы итеп хушлаша! — ти өләсәй. — Беҙ уны яҡшы һүҙ менән хәтергә алабыҙ.

Был иртәлә Петро ағай һәм Оксана беҙҙең ауыл менән хушлаштылар.

Ҡапҡа төбөндә күптән инде егеүле Атака тора. Арба тирәһендә малайҙар һәм ҡыҙҙар йүгерешеп йөрөй. Оло-лар ҡойма буйында һөйләшеп тора.

Өйҙә юлға йыйыналар. Әсәй Оксанаға иң матур күлдәген кейҙерә. Петро ағай тиҙ генә ҡырынып ала. Уның мыйығы ҙур түгел бит, шуның өсөн тиҙ.

Атай юл әйберҙәрен арбаға сығарып һала ла яңынан өйгә инә. Өләсәй бөтәбеҙгә лә саҡ ҡына ултырып торорға ҡуша. Тик шул ваҡытта ғына әсәй миңә табан боролоп, әйтеп ҡуя:

— Бына, Йәмил, — ти ул, — һеңлең менән хушлашыр ваҡыт та етте. Бөгөн Оксана атаһы менән бергә Украинаға китә. Һуңыраҡ беҙ ҙә күмәкләп Петро ағайыңдарға ҡунаҡҡа барырбыҙ. Ярармы, ҡыҙым? — Ул был һүҙҙәрҙе Оксанаға әйтә.

— Ой, әсәкәйем, тиҙерәк килегеҙ! — ти һеңлем. — Ә Йәмил әле үк барһын. Бараһыңмы, Йәмил?

— Икегеҙ ҙә киткәс, өйҙә кем ҡалыр һуң? Йәмил беҙҙең менән барыр, — ти өләсәй.

Мин аптырайым: ни эшләп Оксана үҙе генә китә икән? Мин бит уның менән теләһә ҡайҙа барырға әҙер торам. Шуны аңламайҙармы икән ни?

Аҙыраҡ ултырғандан һуң, өләсәй урынынан тора. Уның артынан беҙ ҙә ҡуҙғалабыҙ.

Бөтәбеҙ ҙә урамға сығабыҙ. Кешеләр Петро ағайҙы уратып алалар, уның ҡулын ҡыҫалар:

— Хуш бул, туған, — тиҙәр улар, — беҙҙе онотма. Ҡунаҡҡа йышыраҡ кил.

Кемдер, Оксананы күтәреп алып, биттәренән үбә. Шунан һуң уны ҡулдан ҡулға йөрөтәләр. Хушлашыу бик оҙаҡҡа һуҙыла. Һеңлем эргәһенә иң аҙаҡтан өләсәй килә һәм уның сәсенән һыйпай.

— Бәхетле, тәүфиҡлы бул, ҡыҙым, — ти. Өләсәйҙең йәшле күҙҙәре берсә асыла, берсә йомола.

Беҙ бишебеҙ ҙә арбаға менеп ултырабыҙ. Әсәй Оксананы итәгенә ала. Атай дилбегәне һелтәп ебәрә. Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ. Ҡапҡа төбөнә йыйылған кешеләр ҡарап ҡалалар. Фәһимә ҡысҡырып иларға тотона, ә Марат менән Фәрит арба артынан эйәреп, йүгереп килә.

— Һау бул, Оксана! — ти Марат.

— Иҫән бул! — ти Фәрит.

Һеңлем малайҙарға ҡул болғай. Урам башында улар ҙа тороп ҡалалар.

Анау саҡта беҙ атай менән туҡтап хәл йыйған урманлы тауҙы ла үтеп китәбеҙ. Туғайға килеп сыҡҡас, атай атты туҡтата. Иң элек арбанан үҙе һикереп төшә.

— Барығыҙ, балалар, һеҙ алдан йүгерегеҙ, арығас, тағы ултырырһығыҙ, — ти ул.

Әсәй Оксананы арбанан төшөрә, ә мин үҙем һикереп төшәм. Беҙ һарғая башлаған үлән өҫтөнән йүгереп китәбеҙ. Бында инде сәскәләр ҙә юҡ, улар ҡойолоп бөткәндәр, күбәләктәр ҙә әллә ҡайҙа осоп киткәндәр. Ҙур бесән эҫкертенең башында бер дәү һоро ҡош ултырып тора. Ергә уның ҡара күләгәһе төшә. Мин: «Кө-өш!» — тип ҡысҡырам, ул барыбер осоп китмәй.

— Ҡурҡытма, Йәмил, йә уның йоҡоһо киләлер. Ниңә ул яңғыҙ икән? Уның балалары ҡайҙа икән? — Ул ҡапыл тынып ҡала. Аҙыраҡ барғас, аҡрын ғына һөйләй башлай. — Әсәйем бөгөн иртәнсәк мине соланға алып сығып һөйҙө-һөйҙө лә ҡысҡырып иларға кереште...

Мин артҡа әйләнеп ҡарайым. Атай, әсәй, Петро ағай — өсөһө лә арба артынан атлап килә.

Алыҫта беҙҙең Ҡыр яғы саҡ ҡына күренеп тора. Йәй көнө унда минең һеңлемдең күҙҙәре төҫлө зәңгәр сәскәләр — күгәрсен күҙҙәре үҫә. Беҙ уларҙы йыйып ҡайта ла һыулы стаканға ултыртып ҡуя инек. Ә хәҙер ул сәскәләр ҙә юҡ инде. Беҙҙең яңы башмаҡтарыбыҙ ҙа иҫкерҙе. Оксана ла китә. Өйҙә бары «Оксана» исемле ҡаҙ бәпкәһе менән «Оксана» исемле алмағас ҡына тороп ҡалды.

— Һин китмә, туғаным! — тим мин.

— Әсәй ҙә барырға ҡуша бит, — ти ул. — Минең атайым бик һәйбәт. Ул һине лә, мине лә ярата. Ә һин әсәйҙәр менән бергә беҙгә ҡунаҡҡа килерһең. Беҙҙең унда яңы өйөбөҙ булыр.

Атайҙар, атты саптырып, беҙҙең арттан килеп етә. Оксана менән беҙ арбаға менеп ултырабыҙ. Беҙ бик оҙаҡ барабыҙ, ҙур урмандарҙы, күл буйҙарын, күперҙәрҙе үтәбеҙ. Шунан һуң тағы тауға менәбеҙ. Беҙҙең алдан, оҙон төтөн сығарып, поезд үтеп китә. Алыҫта, ағастар араһында, бер аҡ йорт күренеп ҡала.

— Бына килеп тә еттек! — ти атай.

Беҙ ана шул аҡ йортҡа етер-етмәҫ бер ағас төбөндә туҡтайбыҙ. Атай менән Петро ағай йортҡа инеп китә, беҙ өсәү арбала ултырып ҡалабыҙ. Әҙерәк торғас, әсәй беҙҙе теге йорт янына алып килә. Ошо йорттоң янында ғына дүрт оҙон тимер юл ялтырап ята. Уларҙың осо ла, ҡырыйы ла күренмәй. Ошо тимерҙәр өҫтөнән тәгәрәп китә инде поездың тәгәрмәстәре.

Йорт тирәһендә Мансур бабайҙарҙың балта сары төҫлө ҙур-ҙур таштар йәйелгән. Шул таштар өҫтөнә баҫып, кешеләр йөрөп тора. Бөтәһе лә ҙурҙар, беҙҙең кеүектән берәү ҙә юҡ.

Әсәй беҙҙе етәкләп ала, һәм беҙ өсәүләп ошо таштарға баҫып йөрөргә тотонабыҙ. Әсәй үҙе көлмәй ҙә, һөйләшмәй ҙә.

— Билеттар булды! — тигәнде ишетеп, беҙ әйләнеп ҡарайбыҙ. Атай менән Петро ағай беҙҙең артта баҫып тора.

— Тиҙҙән поезд киләсәк, мин әйберҙәрҙе килтерәйем, — ти ҙә атай шәп-шәп атлап китеп бара. Беҙ дүртәү шунда ҡалабыҙ. Петро ағай менән әсәй нимер һөйләшә. Русса белмәгәс, мин уларҙың һүҙҙәрен аңламайым.

Әйберҙәрҙе күтәреп, атай ҙа килеп етә. Инде улар өсәүләп һөйләшә башлайҙар.

— Килә! — тип ҡысҡырҙы кемдер.

Өй алдындағы халыҡ ары-бире йүгергеләй башланы. Ағастар артынан ухылдап паровоз килеп сыҡты. Шул саҡ ер тетрәп ҡуйғандай булды. Ул пых-пых итеп беҙҙең яндан уҙғанда, мин ҡурҡып та киттем. Шунан һуң йәшел вагондар әкрен генә үтә башланылар. Әсәй мине ҡапыл етәкләп алды. Беҙ вагондар артынан йүгерҙек. Бер вагон эргәһендә Петро ағай туҡтап ҡалды. Беҙ ҙә шунда килдек. Кейеменә ялтырап торған төймәләр теҙелгән бер кешегә Петро ағай билетын һуҙҙы.

Беҙ хушлаша башланыҡ. Петро ағай башта атайҙы ныҡ итеп ҡосаҡланы, унан һуң әсәйҙең ҡулдарын ҡыҫты, иң аҙаҡтан мине күтәреп алды ла өс тапҡыр битемдән үпте.

Оксана ҡапыл әсәйгә килеп һыйынды. Әсәйем уны ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡларға тотондо. Шунан атайым һеңлемде әсәй ҡулынан йәһәт кенә алып һөйҙө лә ергә төшөрҙө.

— Хушлашығыҙ инде, балалар, — тине атай.

Һеңлем миңә әйләнеп ҡараны. Уның яңаҡтары буйлап юл-юл булып йәш аға ине.

Мин һеңлемдең беләгенән тотоп алдым:

— Оксана, китмә, туғаным!

— Йәмил, илама, улым, һеҙ тиҙҙән тағы күрешерһегеҙ. Беҙ бит бер үк тыуған илдә йәшәйбеҙ, — тине атай.

Петро ағай һеңлемде тиҙ генә вагондың өҫкө баҫҡысына баҫтырып ҡуйҙы, шунан һуң үҙе һикереп менде.

Паровоз ҡысҡыртып ебәрҙе. Вагондар ҡуҙғалып китте. Беҙ ҡул болғап ҡалдыҡ. Бына Оксана вагон тәҙрәһенән үрелеп ҡараны. Ул низер ҡысҡырҙы, ахыры, тик мин генә ишетмәнем...

Поезд урман эсенә инеп юғалды. Ә беҙ һаман шунда баҫып торабыҙ. Ҡапыл мин әсәйҙең йомшаҡ тауышын ишетәм:

— Үҙ ояһына осоп китте... ҡошсоғом минең... шатлығым минең...

Атай бик оҙаҡ уйланып тора. Унан һуң беребеҙгә лә ҡарамай һүҙ башлай:

— Улай тимә, Көнбикә. Ҡыҙыбыҙ ғүмер буйы беҙҙең өйөбөҙҙөң йәме булып ҡалыр. Хәҙер Оксананың ғына түгел, беҙҙең бөтәбеҙҙең дә ике оябыҙ буласаҡ. Үҙ нигеҙендә Петро өр-яңы ҙур йорт һалыр. Ул булдыҡлы, ҡеүәтле кеше. Бынан һуң шатлыҡтар ҙа, ҡайғылар ҙа улар менән уртаҡ буласаҡ... Бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа йөрөшөрбөҙ, кәрәк сағында ярҙам да итешербеҙ.

Мин һаман да урман өҫтөнә һибелеп ҡалған төтөнгә ҡарайым. Был — Оксананы алып киткән паровоз төтөнө.

...Бына минең ҡаршыма Петро ағай үҙе һалған яңы йорт килеп баҫа. Йорт алдында беҙҙеке кеүек үк баҡса, унда бер ҡайын, биш алмағас үҫеп ултыра. Ҡурала апаҡ ҡаҙҙар йөрөй. Беҙ, Оксана менән етәкләшеп, бейек болдорға менеп барабыҙ...

Алыҫта паровоз ҡысҡыра. Минең баш осомда аяҙ күк йөҙө — һеңлем Оксананың күҙҙәре төҫлө, асыҡ зәңгәр күк йөҙө.

Оксана... һеңлем, беҙҙең өйҙөң йәме инең бит һин...

1947–1949

ӨС ТАҒАН

БӨРКӨТЛӨ

Һеҙҙең Бөркөтләлә булғанығыҙ бармы? Юҡмы ни? Донъялағы иң матур ауылдарҙың береһен күрмәй нисек түҙәһегеҙ икән? Ҡыйындыр, әлбиттә. Ә бит Бөркөтләнә күреү генә түгел, шунда тыуып, шунда үҫкән кешеләр бар. Уларға рәхәт, исмаһам, тыуҙыңмы, рәхим ит: Бөркөтлө.

Шулай ҙа кешеләрҙе аңламаҫһың. Бөркөтләләр үҙ ихтыярҙары менән ҡайҙағылыр алыҫ ҡалаларға, күҙ күрмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ илдәргә барып йөрөп ҡайталар. Күргәндәрен мәрәкә итеп һөйләйҙәр. (Мин һуғышты әйтмәйем. Унда берәү ҙә мәрәкә күрәйем тип бармаған.)

Йорттан сыға алмағандары лимон-әфлисундар үҫкән йыраҡ ерҙәр, шаулы диңгеҙҙәр, ҡыш булмай торған илдәр, төн булмай торған яҡтар тураһында хыялланалар. «Их, шуларҙы барып күрһәң ине!» — тиҙәр. Ә бына: «Их, Бөркөтләнә күрһәң ине!» — тип уфтанған кешене ниңәлер осратырға тура килмәне. Кешеләрҙең шундай ҡыҙыҡһынмаусан булыуына аптырарһың. Ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Бөркөтләлә, әйткәнемсә, донъя күргән кешеләр байтаҡ. Күрмәгәндәре лә сей наҙан түгел. Аҡты ҡаранан айыралар. Ана һарыҡ көтөүсеһе Шәрифулланы ғына тыңлап ҡарағыҙ. Алтмышҡа етеп, ситкә аяҡ атлағаны юҡ, ә үҙе ер шарын биш бармағы кеүек белә. «Ҡыҙыл буяуҙы — Ҡыҙыл диңгеҙ һыуынан, ҡара буяуҙы — Ҡара диңгеҙ һыуынан, аҡ буяуҙы Аҡ диңгеҙ һыуынан яһайҙар, йәнә Һары диңгеҙ, Йәшел диңгеҙ, Зәңгәр диңгеҙ бар... — ти ул. — Йылы яҡта шундай тигеҙ далалар бар, ҡояш

сыҡҡанда йомортҡа тәгәрәтеп ебәрһәң, ҡояш батҡансы туҡтамай барасаҡ», — ти.

Ә Бөркөтлө ҡарағас, ҡайын, ҡарағай урмандары менән ҡапланған тауҙар араһында — Урал итәгендә ултыра. Уның ике яғында — ике ҙур күл. Береһен — Ҡалҡанкүл, икенсеһен Ҡылыскүл тип атап йөрөтәләр. Ҡалҡаны алыҫыраҡ, Ҡылысы ауыл эргәһендә генә. Тау битләүендә үлән йәшәреүгә Ҡалҡандың һыуы йылыныш та өлгөрә, ә Ҡылыстың һыуы йәй уртаһында ла, боҙ кеүек, һалҡын була, инһәң, тәнде ҡурыш ала.

Донъяла бер нәмә лә үҙ-үҙенән генә яралмай. Әлеге күлдәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһында ошондай әңгәмә йөрөй. Имеш, борон-борон заманда, Уралды илбаҫарҙарҙан һаҡлағанда, бәһлеүәнгә уҡ тейгән. Ул гөрһөлдәп ергә ауған. Уң ҡулындағы ҡылысы — бер яҡҡа, һул ҡулындағы ҡалҡаны икенсе яҡҡа барып төшкән. Ҡалҡан төшкән ерҙә — йылы күл, ҡылыс төшкән ерҙә һалҡын күл ҡалҡҡан. «Ни өсөн шулай ике төрлө һыу сыҡҡан?» — тип һораһағыҙ, баяғы Шәрифулла былай тип яуап бирер: «Сөнки ҡылыс йән ҡыя торған яман ҡорал, ә ҡалҡан йән һаҡлай торған яҡшы нәмә», — тиер.

Бөркөтлөнөң күрке күлдәр генә түгел. Уның тирәһендә кем уҙарҙан ярышып күккә үрләгән тауҙар, тау араларындағы йәшел үҙәндәр, ҡаяларҙан урғылып сыҡҡан шишмәләр, таштан ташҡа һикереп уйнаған ҡыр кәзәләре, яҙғы шарлауыҡтарҙан күҙгө ҡырауҙарға тиклем тынмай һайраған ҡоштар йәм өҫтөнә йәм өҫтәй. Яҙғы күкрәүҙәр ваҡытында бында тауҙар гөрләп тора. Әйтерһең, улар үҙҙәре күкте күкрәтәләр. Урмандарҙа беләк йыуанлығы көпшәләр үҫә, аҡландарҙа турғай башы ҙурлығы еләктәр бешә. Кеше аяғы баҫмаған түбәләрҙә бөркөттәр бала сығара. Улар йыш ҡына саңҡ-саңҡ итеп ауыл өҫтөнән осоп үтәләр. Ана шул бөркөттәр инде бынан бик күп йылдар әүәл ауылға исем биргәндәр: Бөркөтлө.

КҮКРӘКТАУҘАҒЫ ӘҢГӘМӘ

Ҡылыскүл эргәһендәге бейек түбәне Күкрәктау тип йөрөтәләр. Уның төньяҡ битләүен ҡуйы ҡарағай урманы ҡаплаған, ә көньяҡ битләүе тап-таҡыр сиҙәмлек. Бер ҡараһаң, ул яртылаш сәсе алынған малай башына оҡшап ҡуя.

Был яҡта ул шулай: ағастар тауҙарҙың төньяҡ итәктәренә һыйынып үҫәләр. Әйтерһең, улар тауҙарҙы һалҡын елдәрҙән ышыҡлар өсөн шулай итәләр.

Күкрәктау башына менеп ҡараһаң, күк сите әллә ҡайҙа алыҫҡа күсеп китә. Түбәндә Йайыҡ буйына ултырған Тирмә ауылының йорттары умарталыҡтағы умарталар саҡлы ғына күренә. Ә Урал итәгендә көтөүселәр яҡҡан усаҡтың төтөнө Шәрифулла төрөпкәһенән сыҡҡан төтөн хәтле генә. Тик әллә ҡайҙа ятҡан Кирәмәт кенә аяҙ көндәрҙә ҡараған һайын яҡынайған һымаҡ күренә. Тулҡын-тулҡын булып күгәреп ятҡан бүтән түбәләр араһында уның ғына башы ҡояшта ялтырап ағарып тора. Йәйге селләгә тиклем унда ҡар ята.

Кирәмәт башына менеү тураһында күп малайҙар хыяллана. Ләкин унда менеү өсөн ҡара урмандар, текә ҡаялар, тәрән соҡорҙар аша уралып-уралып киткән тар, хәтәр һуҡмаҡ менән бер көн, бер төн барырға кәрәк. Ирмен тигән кеше Кирәмәткә менмәй ҡалмаҫ, әлбиттә.

Ә хәҙергә Күкрәктауҙың көньяҡ битләүендә Шәрифулланың һарыҡтары керт-керт үлән ашап йөрөй. Тау башында эреле-ваҡлы биш кеше ултыра. Һары мыйыҡлы, ас яңаҡлы Шәрифулла ағай үҙе инде. Ә ҡалған дүртеһе тураһында һеҙҙең хатта ишеткәнегеҙ ҙә юҡтыр. Ғәжәп тә түгел. Уларҙың әлегә һис ни менән дан ҡаҙанғандары юҡ шул. Өсөһө кисә генә төрлө-төрлө билдәләр менән бишенсе класты тамамлап сыҡты. Тәртип яғы ла ал да гөл генә булманы. Шулай ҙа ҡойроҡ-фәлән эйәрмәне.

Ыҫмала төҫлө ҡара ҡуйы сәсле, ҡылыс танаулы сандыр малай Ғабдулла исемле. Уның сәсенә ҡулыңды тейҙерһәң, бармаҡтарың сатнап йәбешер һымаҡ. Йәмшек танаулы, табаҡ битле йыуаны — Вәзир. Һыуыҡта ла, эҫелә лә уның ике бит алмаһы гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған ғәҙәте бар. Бер саҡ яңы килгән уҡытыусы апай, үсекләшә тип уйлап, ошо ҡылығы өсөн уны кластан да ҡыуып сығарҙы. Үҙе шундай булһа ла, рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө — Бөркөтлөлә берҙән-бер ерән сәсле, һипкелле малай Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә толомона матур

ҡыҙыл таҫма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның — Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теш булмағас, ауыҙында һис кенә лә һүҙ тормай.

Шәрифулла ағай бик серле тауыш менән нимә тураһындалыр әңгәмә һөйләй. Ҡалған дүртеһе тын да алмай тыңлап ултыра. Байыр яҡҡа тәгәрәгән ҡояштың һарғылт нурҙары Шәрифулланың ыҫланған мыйыҡ остарына төшөп йымылдайҙар. Йымылдайҙар ҙа уның аҫҡы ирененә һикереп төшәләр. Шуға күрә уның ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе ниндәйҙер бер яңы серҙе аса һымаҡ.

Нимә һөйләй икән ул? Әйҙәгеҙ, ҡолаҡ һалып ҡарайыҡ.

— ...Кирәмәт башына менеү — бөркөт осор бейеклеккә күтәрелеү тигән һүҙ ул. Төндәрен уның өҫтөндә, — ти Шәрифулла, — усаҡ тирәһендә әйләнгән күбәләктәр төҫлө, йондоҙҙар һикерешеп уйнай. Улар түбән үк төшәләр — үрел дә тот үҙҙәрен! Ҡайһы бер үтә шуҡтары, яңылыш ҡаяға һуғылып, селпәрәмә лә киләләр. Ана шуны инде йондоҙ атылыу тиҙәр.

Әммә Кирәмәттең ҙур хәсрәте бар. Уның башындағы кескәй генә күлдә әүәл заман алтын-көмөш балыҡтар мыжғып торған. Бәлки, йондоҙҙар шулар менән шаярып өсөн тау түбәһенә төшкәндәрҙер ҙә. Балыҡтарҙың күптән инде заты ҡороған, ә йондоҙҙар иҫке ғәҙәттәрен һаман да ташламағандар. Балыҡтарҙы бер яман кеше һәләк иткән. Ул күлгә бер генә суртан ебәргән. Шул суртан аҙмы-күпме ғүмер үтеүгә алтын-көмөш балыҡтарҙы йотоп бөтөргән. Тау быға ҡайғырған. Шул ҡайғынан түбәһендәге күле лә кибә башлаған. Ул кибеп бөтһә, Кирәмәт дөм һуҡыр булып ҡаласаҡ. Ҡояш яҡтыһын да, болоттар аҡҡанын да, йондоҙҙар йымылдауын да күрмәйәсәк. Теге ҡомһоҙ суртан да дөмөгөүен дөмөккән, тик күлдәге йән эйәләрен бөтөрөп дөмөккән.

Әгәр батыр егеттәр табылып, беҙҙең Ҡылыстағы төҫлө алтын-көмөш балыҡтарҙы шунда илтеп ебәрмәһәләр, ул күл кибәсәк. Кирәмәт хәсрәтенән ишелеп төшәсәк. Көндәрҙән бер көндө анау аҡ нур сәсеп торған бейек тау урынында бушлыҡ тороп ҡалһа, бик күңелһеҙ буласаҡ. Шулай түгелме ни, егеттәр?

Егеттәр өндәшмәне.

БАШЛЫҠ ҺАЙЛАУ

Ҡояш алыҫтағы урманға барып төртөлгәндә, Шәрифулла һарыҡтарын фермаға табан ҡыуып китте. Малайҙар ҙа ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы. Башлап Вәзир өндәште:

— Кирәмәттең хәле мөшкөл икән...

— Бер суртан арҡаһында... — тип ҡушылды Айҙар.

— Суртан түгел, бер яман кеше арҡаһында, — тип төҙәтте Ғабдулла. — Кирәмәтте был хәлдә ҡалдырырға ярамай.

— Күп итеп ыуылдырыҡ йыяйыҡ та, — тип кәңәш бирҙе Вәзир, — илтеп һалайыҡ. Балыҡ ул ыуылдырыҡтан ярала.

Айҙар уны ҡырт киҫте:

— Ыуылдырыҡ түгел, тере балыҡ ебәрергә кәрәк!

— Ҡыҙыл ыуылдырыҡ магазинда ла бар, — тип хәбәр итте Гөлнур.

Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алдылар. Шундай ҙур эш тураһында кәңәш барғанда был «ике ҡолаҡтың» артыҡ булыуы һәр кемгә асыҡ ине. Ҡарышырға урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп, Айҙар һеңлеһенә бойороҡ бирҙе:

— Ысҡын бынан!

Ләкин Гөлнур ҡарышты:

— Ысҡынмайым.

— Шыл, тиҙәр һиңә!

— Шылмайым, үҙең шыл.

Айҙар ҡаты бойороҡто ҡапыл йомшаҡ вәғәҙәгә алмаштырҙы:

— Тыңлаһаң, турғай балаһы тотоп бирермен, һылыуым, хатта икене.

— Антмы?

— Ант!

Гөлнур шунда уҡ ауыл яғына тороп йүгерҙе. Сыбар күлдәге генә елберләп ҡалды.

Беҙҙең яҡта кешеләр етди нәмә тураһында аяҡ өҫтө баҫып һөйләшмәйҙәр. Аҡылды ултырып йыялар. Малайҙар йәшел үлән өҫтөнә аҡыл йыйырға ултырҙылар.

«Кирәмәтте ҡотҡарырғамы, юҡмы?» — тигән һорауҙы ҡабатлауҙың кәрәге юҡ ине. Ул һис шикһеҙ ҡотҡарылырға тейеш. Ә ҡотҡарыу юлдары тураһында фекер төрлөсәрәк булды. Айҙар колхоздың балыҡсылар брига-

даһына барып ярҙам һорарға кәңәш итте. Вәзир уны үсекләргә үк кереште:

— Ярҙам, ярҙам, имеш... Бар, бөтә ауылға сығып ҡысҡыр, ярҙам һора. Бахыр. — Ул теш араһынан серт итеп төкөрөп ҡуйҙы.

— Башта уҡ ант итәйек, — тине Ғабдулла, — был — сер. Өндә лә, төштә лә, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә серҙе сисмәҫтән булһын. Кем дә кем телен тыя алмай, ул һатлыҡ йән тип аталасаҡ. Антмы?

Үҙе ҡуш ҡулын маңлайына ҡуйып ант итте:

— Ант!

Уның артынан Вәзир менән Айҙар ҡабатланы:

— Ант!

— Ант!

— Ыуылдырыҡлыһын һайлап ҡына беҙгә дәү бер күнәк балыҡ тоторға кәрәк, — тине Ғабдулла.

Вәзир һикереп үк торҙо:

— Ниңә уны тотоп торорға? Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын.

— Батмай. Тура эште кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр! — Был һүҙҙәрҙе Ғабдулла әйтте. Ләкин улар баяғы Шәрифулла һүҙҙәре ине.

Вәзир ҙә тиҙ генә ҡойолоп төшмәне:

— Ҡалайыраҡ эре сирттергән була, — тине ул, һуҙа биреп, — әйтерһең, башлыҡ...

— Малайҙар! — тип ҡысҡырҙы Айҙар. — Беҙгә ысынлап та бер башлыҡ кәрәк. Кем башлыҡ була?

Ҡалған икәү, йәнәһе, төптән уйлаған булып, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Сөнки кәңәш ваҡытында һәр һүҙгә тиҙ үк ҡушылып барыу ир кешегә килешмәй. Шулай ҙа Айҙар тәҡдимен иғтибарға алмау мөмкин түгел ине.

— Башлыҡты һайларға кәрәк, — тине һайлау-һайланыуҙарҙың рәтен яҡшы уҡ белгән Ғабдулла.

Шул саҡ Вәзир үҙенең барлы-юҡлы баҫалҡылығын бөтөнләй юғалтып ташланы. Ул, ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ялбарырға тотондо:

— Малайҙар, ә, малайҙар, минең бер генә лә башлыҡ булғаным юҡ. — Хатта уның тауышы нескәрҙе. — Айҙар

ҡыш буйы класта староста булды, Ғабдулла стена гәзитенә һайланды, район слетына барҙы. Бер мин генә...

Вәзирҙең уң күҙенән бер бөрсөк йәш бына-бына тәгәрәп төшәм тигәндә, Ғабдулланың, тау еле кеүек, һалҡын тауышы уны тыйып ҡалды:

— Башлыҡты һорап алмайҙар!

Ләкин Вәзир өмөтөнән тиҙ генә баш тартманы. Ул үҙенсә шундай хәйләкәр юл уйлап тапты:

— Шыбаға! Кем өҫкә сыға, шул башлыҡ була.

Инде уға Айҙар ҡаршы төштө:

— Шыбағаны уйында ғына тоталар. Тапҡан уйын! Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше башлыҡ була.

Хәҙер Вәзир арҡа терәберәк һүҙ башланы:

— Харап икән. Йүгеректе башлыҡ итергә, имеш. «Башлыҡ» ул «аяҡ» һүҙенән түгел, «баш» һүҙенән алынған — белмәһәң, бел. Иң йәтеше уның — мәргәнлектә ярышыу. Кем мәргән ата, шул командир. Ана, Ғабдулла әйтһен!

Ғабдулла, әлбиттә, үҙ фекерен әйтеүҙән баш тартманы:

— Иң дөрөҫөн әйтәйемме?

— Әйт!

— Иң дөрөҫө — көрәштә көс һынашыу. Кем алышта еңә, шул башлыҡ.

Ғабдуллаға ҡаршы төшөү урынһыҙ булһа ла, малайҙар оҙаҡ бәхәсләштеләр. «Ҡара көс күрһәтеп кенә башлыҡ булыу замандары үткән инде», — тигән өсөн Вәзирҙең саҡ-саҡ ҡына яңағына эләкмәне. Шулай ҙа, аҙаҡ килеп, ғәҙеллек еңде. Өсөһөнөң дә һүҙе һүҙ булды.

Башта малайҙар үҙҙәре ултырған ерҙән ауыл ситендәге яңғыҙ ҡарағасҡа тиклем йүгереп уҙышырға булдылар. Өсөһө лә, балаҡтарын төрөп, Айҙар таяҡ менән һыҙып билдәләгән һыҙыҡҡа баҫтылар.

Вәзир команда бирҙе:

— Раз, два, пли!

Йәйәнән ысҡынған уҡ шикелле, Айҙар шунда уҡ, атлығып алға сыҡты. Их, йүгерә лә һуң! Табандары ергә лә теймәй, тик үксәләре генә алмаш-тилмәш ялтырап бара. Байтаҡ ара Ғабдулла ла унан артыҡ ҡалышманы. Вәзир, инәһенә эйәрер-эйәрмәҫ барған ялҡау ҡолон һымаҡ, артта уҡ тороп ҡалды. Уның Айҙарға асыуы килде:

«Ерән шайтан! — тине ул эсенән. — Ботон таш менән бәреп һындыраһыңмы ни? Һөрләгеп тә китмәй бит, исмаһам!» Айҙарҙың һөрләгергә самаһы юҡ ине. Ул, Ғабдулланы дилбегә буйы артта ҡалдырып, ҡарағасты килеп ҡосаҡланы. Ғабдулла икенсе урынды алды.

Ярты юлға еткәс, Вәзир лап итеп ергә ултырҙы. Уң аяғын күтәреп, нимәлер соҡорға тотондо. Күрәһең, табанына сүп кергәндер. Бер аҙҙан ул, аҡһай биреп, иптәштәрен ҡыуып етте.

— Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына, — тип көлдө унан Айҙар.

— Аяғыма сүп керҙе, — тине Вәзир. — Мине ярышта ҡатнашмаған тип иҫәпләгеҙ!

Вәзирҙең аяҡ табанына, белгестәрсә ентекләп, тикшереү үткәрҙеләр. Ләкин унда былтырғы яраларҙың йөйҙәренән башҡа телгә алырлыҡ һис нәмә табылманы. Вәзир, бәхәскә инмәй генә, үҙенең еңелеү оятын күтәрергә мәжбүр булды.

Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ярыштың яңы төрө башланды. Тәүҙә өсөһө лә һәр саҡ янда йөрөй торған ҡоралдарын — рогаткаларын салбар кеҫәләренән һурып сығарҙылар. Бер тауыштан ярыштың шарттары раҫланды. Ҡарағастың түбәндә генә һерәйеп торған ҡоро ботағына Айҙарҙың сигелгән түбәтәйен ҡуйҙылар. Ҡарағастан утыҙ аҙым үлсәп, таяҡ ҡаҙанылар. Ошонан тороп атырға тейештәр. Кеҫәләрҙә һәр саҡ йөрөй торған запастан иң йомро, иң шыма өсәр таш алдылар. Өс атыуҙа түбәтәйгә кем күберәк тейҙерә, тимәк, шул ота. Сиратты алфавит буйынса билдәләнеләр. Беренсе булып Айҙар атты. Тәүге таш выжлап осоп китте, ләкин ҡайҙа барып тейгәнен берәү ҙә күрмәне. Икенсеһе шап итеп ҡарағастың үҙенә һуғылды. Өсөнсөһөн Айҙар бик оҙаҡ тоҫҡаны. Инде быныһы түбәтәйҙе осороп алып китергә тейеш ине. Ләкин таш үҙ юлына китте, түбәтәй ҡымшанмай тора бирҙе.

Икенсе булып майҙанға Вәзир сыҡты. Башта ул бик етди ҡиәфәт менән бер талай сәпкә ҡарап торҙо. Ашыҡмай ғына рогаткаһын ҡорҙо. Бына ул тоҫҡай башланы. Тап шул ваҡытта уның йәлпәк танауына бер серәкәй килеп ҡунды. Ләкин Вәзирҙең уға иҫе китмәне. Быны күреп торған Айҙарҙың эсе бошто: «Ҡурҡаҡ һин, серә-

кәй, — тип әрләне ул эсенән генә оҙон морондо. — Танауына ҡунғансы, күҙенә килеп инһәң, ни ерең кәмер ине, йүнһеҙ... Етмәһә, минең сигелгән түбәтәйгә ата». Айҙар һуҡраныш та бөтә алманы, түбәтәй осоп та китте.

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ, — тине Вәзир эре генә. Ғабдулла йүгереп барып түбәтәйҙе кире урынына ҡуйҙы. Икенсе атыуҙа түбәтәй, йәмшәйеп, тағы ла килеп төштө. Был юлы Айҙарҙың башы сатнап китте. Таш, әйтерһең, уның түбәтәйенә түгел, маңлайына килеп тейҙе. Вәзир үҙенекен ҡабатлай бирҙе:

— Ике ҡоймаҡты майланыҡ!

Өсөнсө атыу бәхәсле булып сыҡты. Түбәтәй төшөүен төштө, ләкин ул ботаҡ һелкенеүҙән генә төштө. Таш был юлы түбәтәйгә түгел, ботаҡҡа тейгәйне. Вәзир тағы ла тантаналыраҡ итеп йәнә ҡысҡырған булды:

— Өс ҡоймаҡты майланыҡ!

— Майламайыраҡ тор әле... — тине Айҙар, эстән һөйөнөп, — майың етмәҫ!

— Күҙең ҡыҙамы? Эсең әрнейме? — Өсөнсө атыуҙың буш булыуын Вәзир үҙе лә белә ине. Ләкин маһайған йүгеректе үсекләгеһе килде уның. — Бына шулай атырға кәрәк, Айҙар мырҙам, — тип кәпрәйҙе ул. — Был һиңә тыр-мыр йүгереү түгел.

— Шул тиклем маҡтаныуҙан нисек телдәре талмай, — тип бошондо Ғабдулла. — Вәзирҙең өсөнсө ташы бары-бер иҫәпләнмәй. Харамлашма ла!

Вәзир ҙә артыҡ ныҡышманы. Сөнки ул Ғабдулланың уҙа алмаҫын яҡшы белә ине. Ысынлап та, Ғабдулла, өс атыуҙан да бары бер генә тейҙереп, икенсе урынға сыҡты.

Яңғыҙ ҡарағастың күләгәһе Вәзирҙәрҙең картуф баҡсаһына барып еткәндә, көрәш майҙаны асылды. Шыбаға буйынса, тәүҙә Вәзир менән Айҙар, устарына төкөрөп, ҡара-ҡаршы килеп баҫтылар.

— Алыш бармы, еңеш бармы? — тине Айҙар.

— Алыш та бар, еңеш тә бар! — тип, Вәзир тағы бер тапҡыр усына төкөрҙө.

Һабантуй майҙанындағы көрәшселәргә оҡшатып, улар яурынға яурын һуғып алдылар. Шунан һуң ғына, бер-береһенең күлдәген арттан бороп тотоп, билдән алыш-

тылар. Улар, орсоҡ кеүек әйләнеп, байтаҡ йөрөнөләр, икеһе лә мышнап төштө. Ләкин берәү ҙә бил бирмәне. Малайҙарҙың көс бер сама булһа ла, Айҙар кесҡә кеүек ауыр Вәзирҙе күтәреп сөйөргә иҫәп тотмай ине. Ул бер нисә тапҡыр, үҙе ҡырын йығылып, Вәзирҙе баш аша осорорға маташып ҡараны, әммә теге гөрҫ итеп уның өҫтөнә ауып торҙо. Хатта бер ваҡыт Айҙарҙың үпкәһе боғаҙына килгәндәй булды.

Алыш тауышһыҙ-тынһыҙ дауам итте. Аяҡ салыу кеүек харамлашыуға берәү ҙә барманы. Бер саҡ иҫләмәгәндә генә Вәзир Айҙарҙы бөтөрөп алды ла, билен өҙөрҙәй ҡыҫып, күкрәгенә күтәрҙе. Айҙарҙың яҙғы себешкенән яңы ғына ҡотолоп килгән аяҡтары ерҙән өҙөлдө. Улар, таяныс эҙләгән шикелле, тыбырсынырға тотондолар, тик таяныс таба алманылар. Вәзир, ҡырын йығыла биреп, оҙонса буйлы ҡаҡса Айҙарҙы баш аша ырғытты. Шул ваҡыт нимәлер пыр-р-р итеп йыртылып китте.

Тәгәрәп ятҡан Айҙарҙың ике усында Вәзир өҫтөндәге зәңгәр күлдәктең ике итәге ине. Хужа өҫтөндә бары ике еңе менән яғаһы ғына эленеп ҡалған. Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен башта күргән Ғабдулла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Ҡабырғаһы менән осло ташҡа барып төшкән Айҙар, ауыртыныуын онотоп, Ғабдуллаға ҡушылды:

— Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир! Ха-ха-ха!

Әлегә бер нәмә лә аңламаған Вәзир, битендәге тирен һөртмәксе булып, күлдәк итәген ҡапшаны. Ләкин ҡулы яланғас ҡорһағына тейҙе. Ул бары шунда ғына Айҙар ҡулындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоп алынғанын төшөндө.

Вәзир бына хәҙер йә ҡысҡырып илар, йә Айҙар менән һуғыша башлар тип көтәһегеҙҙер, бәлки. Көтмәгеҙ, көтөүегеҙ бушҡа сығасаҡ. Вәзир донъяның ваҡ-төйәгенә иҫе китеп бара торған малай түгел. Йәнә шуны ла әйтеп үтергә кәрәк. Кейем-һалым һандығы уның бөтөнләй үк буш та түгел. Өйҙә тағы бер күлдәге бар. Тик бына төҫөн генә хәтерләүе ҡыйын. Дөрөҫөрәге, уның төҫө юҡ. Көн ашаған.

Шулай ҙа «Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир» иптәштәренә ҡушылып көлмәне. Ниңәлер көлгөһө килмәне. Танауын йыйыра биреп, ғорур ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Баш һау булһа, мал табылыр әле. — Был саҡ ул үҙендә дейеүҙе еңерлек көс һиҙҙе. Автомобиль тәгәрмәсенә тын өргән шикелле, кемдер уның беләктәренә көс өрөп тултыра, уның мускулдары ҡабарып тулыша ла таш булып ҡата, имеш.

Көрәш әле бөтмәгәйне. Вәзир Ғабдулла ҡаршыһына килеп баҫты:

— Алыш бармы, һалыш бармы?

— Алыш та бар, һалыш та бар! Сәмләнеүҙең сигенә еткән Вәзир йән асыуы менән Ғабдулланың салбар ҡайышынан эләктереп алды. Ләкин Ғабдулла көрәште ҡабул итмәне. Сөнки «дошмандың» өҫтөндә күлдәге лә, билендә ҡайышы ла юҡ ине. Етмәһә, салбары ла өлтөрәп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, уның тотонор нәмәһе юҡ ине. Айҙар үҙ ҡайышын сисеп Вәзиргә бирҙе. Баштарын сайҡай-сайҡай һөҙөшөргә килгән йәш үгеҙҙәр кеүек ғәйрәтләнеп, малайҙар бер-береһенә ташландылар. Алыш был юлы баяғынан да яманыраҡ барҙы. Хәйләкәр Вәзир, бил бирмәҫкә тырышып, осаһын һуҙып, гел әйелеп йөрөнө. Ул башта Ғабдулланың хәлен бөтөрөргә иҫәп тотто. Ләкин беше имән кеүек Ғабдулла тиҙ генә әлһерәп төшә торғандарҙан түгел ине. Ул Вәзирҙең хәйләһенә ирек ҡуйҙы. Бара торғас, улар алышҡан ер, үләне тапалып, тап-таҡыр булып ҡалды.

Үҙәнгә һалҡынса шыйыҡ эңер төшә башланы. Ә «батырҙар» йән-фарман килеп һаман алыша бирҙе. Вәзирҙең итләс арҡаһына бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты. Ә Ғабдулланың күлдәгендә әле дым күренмәй ине. «Уңған аттың тире сыҡҡансы, ялҡау аттың йәне сығыр» тигәндәре ошо булалыр инде.

Вәзир көйөнә йөрөп, Ғабдулла ялҡыуҙың сигенә сыҡты. Ул, ҡапыл теҙләнеп, Вәзирҙең күкрәк аҫтына инде. Күҙ асып йомғансы тегене яурынына алды ла зырылдатып әйләндерергә тотондо. Әйләнеп-әйләнеп йөрөнө лә, үҙе йығылып, Вәзирҙе баш аша тәгәрәтеп ебәрҙе. Оҙаҡ барған ҡаты алыш шулай кинәт кенә тамам булды.

Нимә тип былай көс һынашыуҙарын малайҙар онотоп та өлгөргәйне инде. Арала иң зирәк иҫәпләнгән Айҙар беренсе булып бәхәстең башын хәтергә төшөрҙө.

— Һайлауҙар бөттө, — тине ул. — Башлыҡҡа суҡмарҙы тапшырырға ваҡыттыр инде.

Дүрт күҙ берсә Ғабдуллаға төбәлде. Иң күп отош, әлбиттә, уның яғында ине. Хәтер ҡалыуҙың йәки үс һаҡлауҙың нимә икәнен белмәй торған Вәзир тәү башлап Ғабдулла алдына килеп баҫты:

— Теләһәң утҡа, теләһәң һыуға алып ин! Беҙ һинең тоғро юлдаштарың.

— Малайҙар, — тине Ғабдулла, — әкиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе — йүгерек, береһе — мәргән, береһе — көрәшсе. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты.

— Юҡ инде, иптәшкәй, баш бирәү генә була. Һин — Башлыҡ. Һиңә — ура! — Айҙар тауҙарҙы яңғыратып һөрән һалды.

Башлыҡҡа хас етди тауыш менән Ғабдулла үҙенең беренсе фарманын халыҡҡа иғлан итте:

— Кирәмәтте ҡотҡарыу өсөн төҙөлгән отрядҡа «Өс таған» тип исем ҡушырға. Ризамы?

— Риза. Артистар бейей торған шундай бейеү ҙә бар хатта, — тип өҫтәне Вәзир. Айҙар баш ҡына ҡаҡты.

Ошо тарихи фарманды ҡабул иткәндән һуң, малайҙар ҡосаҡлашып ауыл яғына атланылар. «Өс таған» был мәлдә үҙен мәңге ҡаҡшамаҫлыҡ итеп һиҙә ине.

ВӘЗИРҘЕҢ БЕРЕНСЕ ҺӘЛӘКӘТЕ

Уң ҡулы менән Башлыҡты ҡосаҡлап барғанда, мәргәндең күңеле үҫеп китте. Ун ике йәшкә тиклем башлыҡ булмай йәшәгән икән, бынан һуң да йәшәр.

Вәзирҙең кемгәлер яҡшылыҡ эшләгеһе, кемделер ҡыуандырғыһы килде. Ул салбарының һул кеҫәһендәге һалҡын ғына тос нәмәне ҡапшап ҡараны.

— Малайҙар, ә, малайҙар, туҡтағыҙ әле, — тине ул. — Башлыҡҡа ҡоралһыҙ йөрөү килешмәҫ. Мә, Ғабдулла, ал. — Ул кеҫәһенән һөйәк һаплы боронғо бәке сығарып Ғабдуллаға һуҙҙы.

Башлыҡ менән йүгеректең дүрт күҙе һигеҙ булды. Бындай затлы нәмәне улар беренсе тапҡыр күрәләр ине.

— Ҡайҙан ҡулға төшөрҙөң быны?

— Һорашып торма, биргәндә ал.

Ләкин Башлыҡ бүләкте алырға ашыҡманы. Бәке оҡшаны уға, бик оҡшаны. Тик: «Был нәмә Вәзир ҡулына яҙып-яңылышып килеп инмәнеме икән», — тигән шик уны тыйып ҡалды. Сөнки мәргән ҡулына ундай малдар кереп сыҡҡылай ине шул.

— Ҡайҙан алдың, дөрөҫөн әйт. Юғиһә, бәкеңә бармаҡ осомдо ла тейҙермәйем.

— Дөрөҫө ни инде уның... Биргәс, ал да ҡуй.

— Ҡайҙан алдың тиҙәр һиңә?

— Ҡайҙан тип ни... Дөрөҫө генә... — Вәзир ҡапыл төйөлөп ҡалды.

— Нимә «дөрөҫө генә»?

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, бая мин уны Шәрифулланың сумкаһынан сәлдерҙем. Ниңә, оҡшамаймы ни? — Был ваҡыт Вәзир үҙенең яҙа атҡанын һиҙеп ҡалғайны инде.

— Урланыңмы? — Башлыҡ ике юлдашын ике яҡҡа этәреп ебәрҙе. Күҙҙәренән уның уҫал осҡондар сәсрәп сыҡты. — Урланыңмы, эт ҡайышы?

— Урламаным, сәлдерҙем, — тип аҡланды Вәзир, — һабы күренеп тора ине.

— Ух, бәке ҡарағы! — Ғабдулла уға бер ҡуныш та төштө. Икенсе һелтәгәндә уның ҡулын Айҙар тотоп ҡалды.

— Ҡулыңды бысратма шуға һуғып, — тине ул.

Башлыҡ шунда уҡ үҙенең икенсе фарманын иғлан итте:

— Көтөүсе Шәрифулланың һөйәк һаплы бәкеһен урлаған өсөн, ҡараҡ Вәзирҙе «Өс таған»дан сығарып ташларға. Бынан һуң уға ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа. Мәсхәрә!

— Ҡараҡҡа мәсхәрә! — тип ҡабатланы Айҙар.

Вәзир, үҙ хәленең бөтә әшәкелеген аңлап, башын түбән эйҙе. Уның күҙҙәре үлән төбөндәге үҙенең бәләкәс кенә өңөнән имгәкләп сығып килгән ҡуңыҙға туҡталды. Ҡуңыҙ тишектән сыҡҡас, тирә-яҡҡа һынаулы ҡараш ташлағандай, саҡ ҡына туҡтап торҙо ла үҙ юлына китеп барҙы. Уның эштәре Вәзирҙекенә ҡарағанда шәберәк ине.

Мәргән өҫтөндәге зәңгәр сәләмәләрҙе киске һалҡынса ел тарҡҡылай. Буй-буй ҡара эҙ ҡалдырып, маңлайынан тир аға, күҙҙәре ғәҙәттәгенән дә йышыраҡ сылтлап йомола. Тик иҙеүендәге ҙур аҡ төймә генә, һис нәмә

булмағандай, үҙ урынында тыныс ултыра. Был минутта Вәзирҙәге берҙән-бер аҡ тап ана шул төймә ине. Ошо мәлдә ситтән генә берәй кеше ҡарап торһа, ул былай тип әйтер ине: «Ер йөҙөндәге хәҙер иң ҡайғылы кеше Вәзир. Ҡыҙғанығыҙ уны, ғәфү итегеҙ», — тиер ине. Ләкин мәргәндең элекке иптәштәре уға ситтән генә ҡараманылар. Ҡыҙғаныу, ғәфү итеү кеүек йомшаҡлыҡтарға улар күңелендә урын ҡалмағайны.

Был кистә «Өс таған» буйынса өсөнсө фарман яңғыраны:

— Бәкене хәҙер үк хужаһына илтеп бирергә, Шәрифулланың аяғына йығылып, ғәфү үтенергә! Әгәр ҡарышһа, «ҡараҡ» тигән яманатты бөтә ауылға таратырға!

Башлыҡ икенсе фармандың аҙағын яңынан ҡабатланы:

— Ҡараҡҡа ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа! Мәсхәрә!

— Мәсхәрә!

«Өс таған»дың икеһе, ҡапыл боролоп, ҡайтыр яҡҡа китте. Бер-ике аҙым атлағас, улар артҡа әйләнеп, Вәзиргә мыҫҡыллы ҡараш ташланылар. Һәм теш араһынан төкөрөп ҡуйҙылар.

Өсөнсө «таған» һерәйеп баҫып ҡалды. Оҙаҡ торҙо ул. Бөгөн донъя бөтһә, ул Башлыҡтың һуңғы фарманын, бәлки, үтәмәҫ тә ине. Ләкин иртәгә лә көн бар бит. Шуны уйлап, Вәзир туп-тура ферма яғына йүгерҙе. Шәрифулла, эшен бөтөрөп, ҡайтырға сыҡҡайны.

— Бына, ағай, Күкрәктауҙа таптым... — тип шыуҙырҙы ул. Дөрөҫөн әйтеп, ғәфү һорарға көсө етмәне.

— Вәт маладис, мырҙам! Ғәҙел егет икәнһең. Рәхмәт үҙеңә, — тине Шәрифулла.

Ләкин былдай маҡтауҙар һәм рәхмәттәр «ғәҙел егетте» ҡыуандырманы. Сөнки был юлы бер рәхмәт Вәзирҙе мең бәләнән дә ҡотҡарасаҡ түгел ине[1].

ӨЙҘӘ ЗАРЫҒЫП КӨТКӘНДӘР, АХЫРЫҺЫ

Хәҙер малайҙарҙың өй эстәренә күҙ һалайыҡ. Кемдән башлайыҡ икән? Башлыҡтан башлайыҡ. Юғиһә, хәтере ҡалыр.

---

[1] Боронғолар: «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр», — тигәндәр.

Ғабдулланың өй эсендә өс кеше. Әсәһе яҙ башында уҡ йәйләүгә күсеп китте. Ул һауынсы булып эшләй. Өйҙә улар өләсәһе Нәғимә инәй менән икәү генә ҡалдылар. Атаһы һуғыштан ҡайтманы, «гармунсы Мөхәммәт» тип, уны ауылда әле лә иҫкә алғылайҙар.

Мөхәммәт тураһындағы яман ҡағыҙ һуғыш бөтөргә ун-ун биш көн ҡалғас ҡына килде. Унда: «Ватан өсөн көрәштә батырҙарса һәләк булды», — тип яҙылғайны. Әсәһе менән өләсәһе һыҡтап-һыҡтап бик оҙаҡ иланылар, унан һуң бөтөнләй шымып ҡалдылар. Оҙон көндәр буйына ауыҙ асып өндәшмәгән саҡтары ла булды. Ул ваҡытта Ғабдулланың етеһе лә тулмағайны. Шулай ҙа ул йортҡа ҡот осҡос бәлә килгәнен үҙенең бәләкәс кенә йөрәге менән аңланы һәм ололарға үҙ ҡайғыларын ҡайғыртырға ҡамасауламаны. Атаһының иҫке һырмаһын бөркәнеп, көндәр буйы ҡапҡа төбөндәге яҫы таш өҫтөндә ултырҙы. Йылы килде ул яҙ. Апрель бөтмәҫ борон уҡ үләндәр йәшәрҙе, ҡоштар һайрай башланы, күлдә аҡ сабаҡтар һикерешеп уйнаны. Тик урамдан үтеп-һүтеп йөрөүсе апайҙар ғына, Ғабдулла тураһына еткәс, уға тултырып ҡарайҙар ҙа, баштарын ситкә бороп, бышылдайҙар: «Бахырҡай...» — тип ҡыҙғаналар. Ҡайһылары ең осо менән күҙҙәрен дә һөртөп алалар. Ғабдулла ул ваҡытта атайҙың кем икәнен һәм уның ниңә кәрәклеген белеп еткермәй ине. Шулай ҙа бала күңеленә ауыр шом керҙе.

Бер аҙҙан һуң Мөхәммәттең «Батырлыҡ өсөн» тигән миҙалы килеп төштө. Иптәштәре ебәргән икән.

Бына алтынсы йыл инде Нәғимә инәй һәр кесаҙна көндө кис шул миҙалды аҡбур менән ялтыратып улының стенаһағы берҙән-бер һүрәте аҫтына элеп ҡуя.

Ғабдулла ҡайтып ингәндә, Нәғимә инәй әлеге миҙалды ялтыратып ултыра ине. Ул ауыр көрһөнөп ҡуйҙы ла ейәнен шелтәләргә кереште.

— Атаһыҙ бала — йүгәнһеҙ ат шул инде. Бөтөнләй баш бирмәй башланыңсы. Төнгә саҡлы әллә ҡайҙа шайтан ҡыуып йөрөйһөң. Ана Яҡуптан саҡ ҡына өлгө алыр инең. Нисә ҡарама өй тирәһендә урала. Ваҡытында ашаған, ваҡытында эскән. Өҫ-башы ҡыйып ҡарағыһыҙ. Ә һин шул Вәзирҙән тотам да ҡалмай эйәреп йөрөйһөң. Өҫ-башың ни эшләп бөткән?!

— Вәзир үҙе миңә эйәрә ул, эйәртеүсе булһа, — тип мығырланы Башлыҡ.

Нәғимә инәй әлегә тиклем ябай ғына малай иҫәпләнгән ейәненең «Өс таған»ға башлыҡ булыуын белмәй ине шул. Белһә, моғайын, башҡасараҡ һөйләшер ине. Ул һаман үҙенекен тылҡый бирҙе.

— Ана, Яҡуптан өлгө алыр инең...

— Ҡуй әле шул Яҡупты, өләсәй!

Яҡуп бөтә урамда иң йыуаш һәм тыңлаусан малай ине. Оҫҡорлоғо самалы булһа ла, ул дәрестә лә тырышлығы менән алдыра ине. Мәктәптә уҡытыусылар, өйҙә әсәйҙәр һәм өләсәйҙәр малайҙарҙы әрләгәндә йыш ҡына Яҡупты өлгө итеп ҡуялар. Өҙөшөп-тартышып кейемдәрен йыртһалар ҙа, ыҙғышып ауыҙ-морон ҡанатышһалар ҙа, малайҙар гел шул бер һүҙҙе ишеттеләр: «Ана, Яҡуптан өлгө алыр инең, исмаһам...» Шуның арҡаһында Яҡупҡа «Өлгө Яҡуп» тигән ҡушамат үҙенән-үҙе йәбеште лә ҡуйҙы. Уны йыш ҡына ситкә тибәрҙеләр, хатта ҡаҡҡылап-һуҡҡылап та алғыланылар. Ләкин Яҡуп берәүгә лә ҡаршы өндәшмәне, ҡул күтәреп һуҡманы.

Ғабдуллаға эләккән шелтә шунан уҙманы. Өләсәһе өҫтәл яғына ишара яһаны. Унда быуы сығып торған бер туҫтаҡ тары бутҡаһы ултыра ине.

— Башта һәйбәтләп ҡулыңды йыуып ин, — тип бойорҙо Нәғимә инәй. Үҙе тағы ла ауыр көрһөнөп миҙалды улының һүрәте аҫтына элеп ҡуйҙы. Быға тиклем миҙалға Ғабдулланың бер ҙә иҫе китмәй ине. Бөгөн ул алдындағы ашын ашап бөтөргәнсе унан күҙен дә алманы. Электр яҡтыһында көмөш миҙал нур сәсеп тора ине.

Ни тиһәң дә, Башлыҡты өйҙә майлы бутҡа менән ҡаршыланылар. Ә Вәзирҙе Ҡорбанбикә еңгә, бөтә ауылды яңғыратып, янап ҡаршыланы. Ҡорбанбикә еңгәнең ҡылығы үтә ҡырҡыу шул. Әгәр һыйыры көтөүҙән ҡайтмаһа, урам буйлап һөрән һалып уҙа:

— Бүре лә быуып йыҡмай бит шул мәлғүнде! Бүре йыҡһа, Әжмәғол муллаға хәйерҙәр бирер инем!

Тауыҡтары картуф баҡсаһына инеп тибенә башлаһа, күрше тирә-яҡ йәнә Ҡорбанбикә еңгәнең әсе ҡарғышын ишетә:

— Үләт тә ҡырмай бит, исмаһам, шуларҙы! Көш! Үләт ҡырһа, йәндәрем тыныр ине! Кө-ө-ш!

Ҡайтып инер алдынан Вәзир зәңгәр күлдәктең ҡалдыҡ-боҫтоҡтарын сисеп ҡултығына ҡыҫтырғайны. Ул ҡапҡанан инеү менән, асыҡ тәҙрәнән әсәһенең сағыу тауышы яңғыраны.

— Вәзир, тим, малай аламаһы! Ҡайтып ҡына ин! Бәреп үлтерәм хәҙер, муйыныҡ һынғыры! Йомош ҡушһаң, елкә йоҡа, уйын тиһәң, донъяһын онота! Анау Яҡуптан өлгө алыр инең саҡ ҡына!

Ун ике йыллыҡ ғүмерендә янауҙарҙы күп ишеткән Вәзир был юлы ла, үҙенең күрәсәге алдында баш эйеп, яй ғына өйгә табан атланы. Ләкин шуны ла әйтергә кәрәк: Ҡорбанбикә еңгә телгә уҫал булһа ла, Вәзиргә һис ҡасан ҡул күтәрмәне.

Элекке зәңгәр күлдәкте соландағы һандыҡ артына йәшереп, Вәзир өйгә инде. Атаһы ҡарауылға киткәйне. Һуғыштан бер аяҡһыҙ ҡайтҡан Сәмиғулла ҡарауылдан башҡа эшкә ярамай ине. Өс йәшкә кесе ҡустыһы Насип өҫтәл эргәһендә, стенаға һөйәлеп, йоҡлап ултыра. Уның ике урты бүлтәйеп сыҡҡан. Күрәһең, ул ауыҙындағы икмәген сәйнәп бөтөрмәйенсә ойоп киткән.

— Күлдәгеңде ҡайҙа иттең, йүнһеҙ?

— Мин быйыл йәй күлдәк кеймәҫкә булдым, әсәй. Тәнде сыныҡтырырға кәрәк, — тип Вәзир ипле генә яуап бирҙе.

— Сыныҡтырырға түгел, һине сыбыҡларға кәрәк! Күлдәгең ҡайҙа?

— Ул саҡ ҡына һүтелеп киткәйне, әсәй, мин уны соланда ҡалдырҙым.

— Ана, йөрө әйҙә, иҫәр Ғабдрафиҡ кеүек. Ыштаныңды ла һалып ташла...

— Миңә бит күкрәкте генә сыныҡтырырға кәрәк, әсәй.

Ҡорбанбикә еңгә, ҡоро һалам кеүек, дөрләп яна ла, ҡапыл һүнә лә ине. Был юлы ла уның ялҡыны оҙаҡҡа барманы.

— Ана, бүлтерек бәрәс, ултыр, аша, — тине ул, йомшара төшөп.

Айҙарҙы өйҙә иҫкә алыусы ла булманы. Туғыҙ бала араһында берәүҙең юҡлығын һиҙмәнеләр ҙә. Ул, аласыҡ-

ҡа инеп, көршәктәге ҡатыҡты күтәреп эсте лә бесәнлеккә, үҙ урынына, инеп ятты. Ятҡас та йоҡлап китте.

Вәзир, болдорға сығып, байтаҡ ҡына йондоҙҙарға ҡарап ултырҙы. Аралағы иң тоноҡ йондоҙ — уның йондоҙо һымаҡ тойолдо. Ниңә бер уға ғына бөтәһе лә тиҫкәре килеп тора икән? Ниңә?

Башлыҡты ла был төндө бик оҙаҡ йоҡо алманы. Бер терәүе серек булып сыҡҡан «Өс таған»ды аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине. Өсөнсө терәү кәрәк ине тағанға. Кемгә ышанырға? Кемгә таянырға?

ӨСӨНСӨ ТЕРӘҮ

Ғабдулла йоҡонан уянғанда, өләсәһе өйҙә юҡ ине. Уның ҡарашы иң тәүҙә ҡаршы стеналағы йылтыр түңәрәккә төштө. Ул һикереп торҙо ла миҙалға үрелде. Ләкин ҡапыл тыйылып ҡалды. Сөнки Нәғимә инәй уға ҡағылырға берәүгә лә рөхсәт итмәй ине. Әсәһенең муйынсаһындағы иң ҙур тәңкәнән дә дәүерәк көмөш түңәрәктәге яҙыуҙы Ғабдулла яттан белә. Шулай ҙа уны бөгөн һәр ижегенә баҫым яһап, тағы бер ҡат ҡысҡырып уҡыны: «За от-ва-гу». Һәм малай ҡапыл был һүҙҙәрҙең оло мәғәнәһенә төшөнөп алды. Әлегә тиклем Ғабдулла уларҙың мәғәнәһе тураһында уйламағайны.

Батырлыҡ өсөн! Тимәк, уның атаһы батыр булған! Ниңә һуң уны «Мөхәммәт батыр» тип һөйләмәйҙәр? Күрәһең, белмәйҙәрҙер.

Әкиәттәге батыр үлһә, ул үҙенең ҡылыс-ҡалҡанын, уҡ-һаҙағын улына васыят иткән. Бәлки, Ғабдулланың атаһы ла: «Миҙалымды улыма бирегеҙ, төҫөм итеп, күкрәгенә таҡһын», — тигәндер. Моғайын, шулай иткәндер. Юғиһә, ул миҙалды ебәреп тә тормаҫтар ине.

Ғабдулла атаһы мираҫын һаҡлыҡ менән генә алды ла күкрәгенең уң яғына таҡты. Стенаға беркетелеп ҡуйылған тутлы көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты. Башлыҡ кешегә миҙал килешеп тора икән. Бынан һуң ул гел генә тағып йөрөтәсәк уны. Өләсәй менән килешеү әллә ни ҡыйын булмаясаҡ. Бер һуҡраныр ҙа бер бөтөр.

Миҙалын ялтыратып Ғабдулла урамға сыҡҡанда, ҡапҡа төбөндә тоғро юлдашы Айҙар ултыра ине. Күптән

килгән булһа ла, өйгә инеп, Башлыкты борсоманы. Ул әрһеҙ, сабырһыҙ малай түгел ине. Миҙалды күргәс тә Айҙарҙың артык иҫе китмәне. Киреһенсә, атай кешенең миҙалын уйынсык урынына тағып сығыуҙы ул килештереп етмәне. Ләкин, Башлыктың хәтерен һаклап, был турала өндәшмәҫкә булды. Тик көлөмһөрәп былай тине:

— «Батырлык өсөн» миҙалын һул якка, йөрәк тураһына тағалар...

Дуҫының шак катмауына аптыраған Ғабдулла миҙалды һүҙһеҙ генә һул якка күсереп такты. Айҙарға уның хатта бер аҙ асыуы ла килде. «Белмәгәне юк ошоноң», — тип, эсенән һукраныш куйҙы.

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, Кирәмәт емерелә, тип, Шәрифулла ағай арттыра. Ерле юкка тау емерелмәй ул, ер тетрәмәһә...

— Нимә һин, «Өс таған»ды емерер өсөн, котко таратаһыңмы? — тип кыҙып китте былай ҙа кәйефе кырылған Башлык. — Шөрләйһеңме, куркак?

— Мин куркакмы?

— Һин!

— Ә һин сәбәләнмә, — тине Айҙар тыныс кына. — Мин ситләтеп кенә атайымдан һораштым. Кирәмәт башында, ысынлап та, күл бар, ти, тик балығы ғына юк, ти, балыкһыҙ күл ул һукыр күҙ ише, ти. Белдеңме?

— Нимәне?

— Нимәне, нимәне? Беҙ шунда балык ебәреп үрсетһәк, калай һәйбәт буласак. Күлдең эсенә йән кереп китәсәк.

— Һин шулай тип атайыңа ла әйттеңме?

— Әйтте ти, ана.

Ток-томалға дуҫына каты бәрелгәне өсөн, Ғабдулла эстән үкенеп куйҙы. Уның тауышы йомшак, яғымлыға әйләнде.

— Беләһеңме, Айҙар, — тине ул, — Кирәмәт емерелмәһен дә, ти. Ә кешеләргә бер күл тултырып балык үрсетеп ебәрһәк, ул да ярап калыр. Иң тәүҙә беҙгә мурҙа үрергә кәрәк. Тоткан балыкты шунда һалырбыҙ. Кылыстың арғы башында һәләк йәтеш камышлык бар, балык унда илереп каба.

— Мурҙаны мин уны һә тигәнсе үреп ташлайым, — тине Айҙар.

Малайҙар бөгөн үк Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа барып мурҙа үрергә булдылар. Ләкин «Өс таған»дың икегә ҡалыуы уларҙы һаман борсой ине әле. Эште боҙҙо бит тинтәк Вәзир. Нисек кенә булһа ла өсөнсө терәүҙе табырға кәрәк ине.

Малайҙар көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултырғанда, Өлгө Яҡуп, ҡулына оҙон сыбыҡ тотоп, күл яғына ҡаҙҙар ҡыуып бара ине. Уны күргән Ғабдулла менән Айҙар бербереһенә ҡарашып алды.

— Эй, Яҡуп, кил әле бында! — тип ҡысҡырҙы уға Айҙар.

— Ҡаҙҙар ҡыуамсы, — тине тегенеһе, үҙе ниндәйҙер меҫкен йылмайыу менән йылмайҙы.

— Ҡаҙҙар юлды үҙҙәре лә беләләр. Кил тиҙәр бит һиңә!

Кеше саҡырғас, Яҡуп тыңламай булдыра алманы. Сыбығын һөйрәп, йүгереп килеп тә етте.

— Ултыр! — тип бойорҙо уға Башлыҡ. Яҡуп тубыҡланып ултырҙы. — Һинең батыр булғың киләме?

— Килә лә... Нисек булырға һуң? — Яҡуп күҙҙәрен йылтыратып Ғабдулла күкрәгендәге миҙалға ҡарап алды. «Их, бәхетле кешеләр була бит...» тигәндәй, көрһөнөп ҡуйҙы.

Башлыҡ Яҡупты тағы бер ҡат баштан-аяҡ һынап тикшереп сыҡты. Ғабдулланың һынаулы үткер ҡарашын күргән Яҡуп, бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды. «Нимә эшләтерҙәр икән?» — тип тынын да алмай ултырҙы. Әммә шөрләүе бушҡа булды. Ғабдулла, үҙ тиңдәше менән һөйләшкәндәй, уға етди һәм тыныс тауыш менән мөрәжәғәт итте.

— Һинең, Яҡуп, Күкрәктауға менгәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ағарып торған Кирәмәтте күргәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ана шуның башында түңәрәк күл бар. Ә күлдә балыҡ юҡ.

— Ҡуй, балыҡһыҙ күл булмай ҙа ул.

— Була шул. Беҙ — «Өс таған» тигән отряд — шунда балыҡ ебәреп үрсетергә булдыҡ. Өсөнсө булып беҙгә ҡушылаһыңмы? Отрядтың башлығы мин.

— Ҡалай ирмәк! — Яҡуп көлөп үк ебәрҙе. Башлыҡ һорауын ҡабатланы:

— Ҡушылаһыңмы?

— Әсәйемдән һорап ҡарармын.

— Мәмәй һин, Яҡуп. Был сер. Белеп тор: аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә, был турала һис кемгә әйтмәҫкә!

Ғабдулла бурысты яйлап ҡына аңлатып бирҙе:

— Башта күп итеп ыуылдырыҡлы балыҡ тотабыҙ ҙа мурҙаға йыябыҙ. Унан һуң күнәктәргә яртылаш һыу, яртылаш тере балыҡ һалып Кирәмәткә шылабыҙ. Һыу алыштырам тиһәң, юлда аҙым һайын шишмә. Ҡурҡыр булһаң, башта уҡ әйт!

— Әрләмәҫтәрме һуң?

— Кемдәр?

— Әсәйҙәр.

— Әрләрҙәр. Бер әрләрҙәр ҙә бер туҡтарҙар. Ҙур эш башҡарған кешеләрҙе элек тә аңлап еткермәгәндәр.

«Өс таған» алдындағы маҡсаттың бөтә бөйөклөгөн Яҡуп та аңлап еткермәне, әлбиттә. Уны икенсе нәмә ҡыҙыҡһындырҙы. Гел ситкә тибәрелеп йөрөгән малайҙың үҙ тиҫтерҙәре араһында булғыһы, бергә уйнағыһы, шаярғыһы килде. Шуға күрә ул, сер һаҡларға ант итеп, үҙе теләп, «Өс таған»ға инде. Башлыҡ уға йәнә шундай шарт ҡуйҙы:

— Өс көн эсендә үҙеңдең өлгөләгеңдө бөтөр! Мәргән атырға, ағас башына үрмәләргә, ҡаянан ҡаяға һикерергә, һыуҙа йөҙөргә, ишкәк ишергә өйрән! Бөтәһе лә кәрәк буласаҡ. — Ғабдулла киҫәтеп йәнә өҫтәп ҡуйҙы. — Вәзиргә ҡул бирмәҫкә!

— Ә ниңә?

— Быныһын хәҙергә белмәй торһаң да ярар. Ризамы шуларға? Антмы?

— Риза, ант! — тине «Өс таған»дың яңы терәүе. Иң һуңынан Башлыҡ тағы шундай киҫәтеү яһаны:

— Былар҄ҙың көнө миңә ҡалған икән тип маһайма. Беҙ һине әҙәм итергә самалайбыҙ. Бел шуны.

— Ярай, — тип, Яҡуп баш ҡаҡты.

Ошо сәғәттән алып ҙур сәйәхәткә әҙерлек башланды. Һөйләшеп килешеү буйынса, Ғабдулла менән Айҙар Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа мурҙа үрергә китергә

булды. Ә Яҡуп, үҙенең өлгөлөгөн бөтөрөү өсөн, ауылда ҡалырға тейеш ине. Уға бирелгән өс көндөң тәүгеһе күптән башланғайны.

ДАН КӘПӘС ТҮГЕЛ

Айҙар урамда тороп ҡалды. Ғабдулла, йүгереп, өйгә инеп китте. Бер ҡыйырсыҡ икмәк менән өләсәһенең һалма киҫә торған бысағын эләктереп болдорға сыҡҡас ҡына, Нәғимә инәй ҡайтып инде. Ғабдулла бысаҡты тиҙ генә артына йәшерҙе. Өләсәһе һиҙмәй ҙә ҡалды, ахыры-һы. Ләкин ейәненең күкрәгендәге миҙалды ул шунда уҡ күрҙе. Нәғимә инәйҙең йөҙө ҡапыл үҙгәреп китте. Уның йөрәген сәнсеү алды, быуындары таралды. Ләкин ул сәпсәләнмәне, ҡысҡырынманы. Ғабдулланың арҡаһынан йомшаҡ ҡына һөйҙө лә өйгә саҡырҙы:

— Әйҙә, улым, өйгә инәйек әле.

— Беҙ ни, өләсәй, Айҙар менән Ҡылыс башына...

— Хәҙер китерһегеҙ, Айҙар бәләкәс кенә сабыр итер.

Өйгә ингәс, Нәғимә инәй ейәнен эргәһенә ултыртты ла арҡаһынан тағы ла бер ҡат һөйөп алды.

— Миҙал килешеп тора тағы үҙеңә.

— Ысынлапмы, өләсәй?

— Өләсәйең бушты һөйләмәҫ. Бына һин, биш ҡыш һабаҡ уҡыған кеше, өләсәйеңә төшөндөрөп бирсе: миҙалды ни өсөн бирәләр?

— Батырлыҡ өсөн. Бында шулай тип яҙылған да, өләсәй. Урыҫса.

— Ярай, быныһын аңлаттың, рәхмәт. Ә кемгә бирәләр уны?

— Батырҙарға.

Нәғимә инәй ейәненең күкрәгенә эйәге менән ишара яһаны. (Беҙҙең яҡта изге һаналған нәмәгә бармаҡ төртөп түгел, эйәк менән ымлап күрһәтәләр.)

— Ә быны кемгә биргәндәр?

— Beләһең дә инде, өләсәй... Атайыма.

— Шулай булғас, уны кем тағырға тейеш ине?

— Атайым да... Ул ҡайтманы ла баһа. Мин ни уны, өләсәй, атайымдың төҫө итеп кенә таҡҡайным.

Нәғимә инәй байтаҡ өндәшмәй торҙо. Ғәҙәтенсә, тәрән итеп көрһөндө. Бәлки, ул ҡасандыр ошолай аяҡтарын урындыҡтан һәлендереп ултырған Мөхәммәтте иҫенә төшөргәндер. Ғабдулла атаһына оҡшағайны. Уның ҡылыҡтары, һөйләшеүе, тыйнаҡлы йылмайыуы Мөхәммәттең бала сағын хәтерләтә. Нәғимә инәй ейәненә ҡарап берсә ҡыуана, берсә ҡайғылары яңырып, эсе өҙөлөп китә. Ғабдулла ла быны аңлай һәм шундай саҡтарҙа өләсәһенә тағы ла яғымлыраҡ булырға тырыша.

Нәғимә инәй өҙөлгән һүҙҙе ашыҡмай ғына йәнә ялғаны:

— Улай булһа, тыңла. Батыр үлһә, улына ҡылысы ҡала, мәргән үлһә, уҡ-һаҙағы ҡала. Кәрәк саҡта, ил ҡушҡанда, ата ҡоралын уландары ҡулға алғандар. Атанан мираҫ ҡалған һабан менән улдары ер һөрәләр. Уның сүкеше менән тимер сүкейҙәр, көрәге менән ер ҡаҙыйҙар. Атанан ҡалған көпө-кәпәсте балалары кейә. Ана һинең башыңда ла атайың мәрхүмдең кәпәсе. Әммә атанан ҡалған дан-шөһрәт кәпәс түгел. Балалары уны алмаштилмәш кейеп йөрөй алмай. Мөрйәнән сыҡҡан төтөн донъяны йылытмаған кеүек, ата даны ла баланы биҙәмәй. Бына үҙең, атайыңа лайыҡлы булып, ил һоҡланырлыҡ, кешеләр хайран ҡалырлыҡ эштәр башҡарһаң икән...

— Беҙ башҡарасаҡбыҙ, өләсәй. Күр ҙә тор бына. Үҙең дә шаҡ ҡатырһың хатта.

— Күрергә насип булһын, — Нәғимә инәй йәнә өҫтәп ҡуйҙы: — Үҙеңә оҡшаһа, тағып йөрө, миҙалды әйтәм. Мин ҡаршы түгел.

Ғабдулла өндәшмәне. Күкрәгендәге миҙалды алды ла һүрәт аҫтына кире элеп ҡуйҙы. Шул саҡ урамда әсе итеп Айҙар һыҙғырып ебәрҙе. Хатта уның да сыҙамлығы бөттө, ахырыһы.

— Хәҙер бар инде, — тине Ғабдуллаға өләсәһе. — Бысаҡты юғалта күрмә берүк! — Һалма бысағына башҡа ваҡыт тотонорға рөхсәт итмәһә лә, был юлы ул ейәненә һүҙ әйтмәне. Бер ҡатарҙан ике нәмә менән уның күңелен төшөргөһө килмәгәндер инде.

— Ярай, өләсәй, — тине лә Ғабдулла атылып сығып китте.

Ейәне сығып киткәс, Нәғимә инәй миҙалды усына алып, бер талай ҡарап торҙо. Ең осо менән уны һаҡ ҡына һөртөп алды ла кире элеп ҡуйҙы.

«ӨЛГӨ»ЛӘР ҠЫЙРАЛА БАШЛАНЫ

Өйгә ҡайтҡас, үҙенең өлгөлөгөн бөтөрөү тураһында Яҡуп байтаҡ баш ватты. Эште низән башларға?

Кесе йәштән үк Яҡуп һәр аҙымын үлсәп атларға өйрәнгәйне. Ул үҙен һәр ваҡыт тар ғына баҫманан атлаған һымаҡ хис итте. Бына-бына яҙа баҫыр ҙа ҡолап төшөр кеүек булды. Сөнки әсә үҙенең берҙән-бер балаһын артыҡ һаҡлап, ҡәҙерләп үҫтерҙе.

Бәләкәс Яҡупҡа ерҙәге нәмәләр менән танышыу тотош «ярамай»ҙан башланды. Болдорҙан ергә һикереп уйнарға ярамай, ҡойма башына менергә ярамай, таш ырғытырға ярамай, күрше Сабирҙарҙың Алабайын һыйпап ҡарарға ярамай. Быларҙы уға әсәһе гел шулай тылҡып торҙо. Торған һайын «ярамай»ҙар арта барҙы. Малайҙар менән урманға барырға ярамай — аҙашырһың; күлдә һыу керергә ярамай — батырһың; тауға менергә ярамай — ҡаянан йығылып төшөрһөң; йәй кәпәсеңде һалма — башыңа эҫе ҡабыр; яҙ туныңды һалма — тымау төшөр. Бына шундай «ярамай»ҙарҙың осо ла, ҡырыйы ла булманы. Ә бит уларҙың бер сиге булырға тейеш ине.

Әсә улының әхлағы хаҡында ла күп ҡайғыртты. Тегенең менән уйнама, бының менән дуҫ булма, тегене өйгә саҡырма, бының өйөнә барма. Тора-бара Яҡуп менән берәү ҙә аралашмаҫ булды. Элегерәк тиҫтерҙәре уны йыш ҡына үсекләй, хатта еңел-елпе төрткөләп тә ала торғайнылар. Һуңыраҡ, уға бөтөнләй иғтибар ҙа итмәй башланылар. Бармы Яҡуп донъяла, юҡмы — был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай ине. Тик әсәйҙәр йәки өләсәйҙәр генә ғәҙәт буйынса уны үҙ балаларына һаман да өлгө итеп ҡуя бирҙеләр. Ләкин ҡаты башлы малайҙар Яҡуптан өлгө алырға теләмәнеләр.

Ғабдулла менән Айҙар үҙ эргәләренә саҡырғас, Яҡуп башта ғәжәпләнде, һуңынан ҡурҡты. Сөнки уны күптән инде берәү ҙә һанға һуҡмай ине. Килгәс, Яҡуп шуны

төшөнөп алды: тимәк, әле тиҫтерҙәре уға бөтөнләй ҡул һелтәмәгәндәр икән.

Әммә берәүҙең бәхетһеҙлеге икенсегә ҡыуаныс килтергәнде ул белмәй ине. Вәзир шундай хурлыҡҡа төшмәгән булһа, Яҡуп һаман «өлгө» булып йөрөй бирер ине.

Бына хәҙер уның «өлгө»лөгө үҙенең һуңғы минуттарын кисерә. Тик ниҙән башларға?

Моғайын, рогатканан башларға кәрәктер. Юғиһә, ул хәтәр ҡорал бөтә малайҙарҙың да кеҫәләрендә йөрөмәҫ ине. Ул, бысаҡ алып, утынлыҡҡа сыҡты. Ике йәпле ағас эҙләп тапты. Хәҙер таманлап киҫергә лә, матурлап юнырға ғына ҡалды. Киҫкәгә сабылған балтаны көс-хәл менән һурып алып, ике йәпте таманлап ҡыҫҡартырға тотондо. Ләкин икенсе сабыуҙа бер йәпте яңылыш төбөнән үк ҡырҡып ташланы. Бүтән ағас эҙләп табырға тура килде. Быныһын арыу йәтеш кенә сапты. Инде бысаҡ менән рогатканың һабын, йәптәрен юнып шымартырға ғына ҡалды. Рогаткаһы шәп булырға оҡшай.

Башта уны ул ап-аҡ итеп йышҡылар, унан Вәзирҙеке кеүек ҡыҙыл буяуға буяр. Яҡупта буяуҙар етерлек. Шунан атаһының иҫке велосипед камераһынан матур ғына итеп резинка телеп алыр, иҫке итек ҡунысынан түңәрәк кенә итеп күн уйып алыр. Әлбиттә, уның әлегә тиклем был ҡоралды яһағаны юҡ. Шулай ҙа уның рогатканы күргәне, хатта тотоп ҡарағаны бар. Башҡалар яһағанды ул яһай алмаҫ, тиһегеҙме? Яһар, һис шикһеҙ яһар. Яһар ҙа, йомро ғына таш ҡуйып, анау аласыҡ башында ултырған бесәйгә тоҫҡап атып та ебәрер.

Шундай татлы уйҙарға батып, ағасын юна ғына башлағайны, үткер бысаҡ, кескәй генә бер ботаҡты киҫеп, һул ҡулдың баш бармағына килеп тә тейҙе. Бармаҡтан атылып ҡан сыҡты. Яҡуп сарбайлап ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әсәй!

Ул шунда уҡ үҙенең хатаһын аңлап алды. Аяҡ-ҡулы ҡанағанда, малайҙарҙың береһе лә әсәһенә йүгереп ҡайтмай, тота ла ағас сөрөгө һибә. Ана бит ошо утынлыҡта уҡ серек бүрәнә башы ята.

Ул арала Яҡуптың әсәһе, сәсрәп, болдорға килеп сыҡты:

— Ни булды, балаҡайым?!

Әсәһенән йәлләтеп торорға был элекке Яҡуп түгел ине инде. Ул ҡулын тиҙ генә артҡа йәшерҙе.

— Мин һиңә түгел, ана бесәйгә «бесәй!» тип ҡысҡырҙым.

— Ҡоттарымды алдыңсы, — тине лә әсәһе кире инеп китте.

Бүрәнәнән сөрөк алып, Яҡуп йәрәхәтенә һипте, күп итеп һипте. Ҡан башта сөрөк аша ла һарҡып сыҡты, ләкин бер аҙҙан туҡтаны. Башланған эште бөтөрөргә кәрәк ине. Әле генә бәлә килтергән яман бысаҡты Яҡуп яңынан ҡулына алды. Шулай ҙа эш барманы. Киҫелгән бармаҡ һулҡып һыҙларға кереште.

Яҡуп «өлгө»лөктө бөтөрөүҙең планын үҙгәртте. Бөгөнгә ҡул эшкә ярамай икән, аяҡтар бар. Ул хәҙер Күкрәктауҙың ослайып торған ҡаялы еренә барыр ҙа таштан ташҡа һикерергә өйрәнер. Башлыҡ ҡуйған бурысты үтәр. Әсәһенең һиҙгер күҙҙәре шикләнеп ҡарамаһын тип, ул башта яй ғына ҡапҡа төбөнә килде. Ҡойма буйында ятҡан тупты алып, ҡапҡаға бәреп уйнаған булды. Бер аҙҙан һуң тубын ҡапҡа аҫтынан урамға тәгәрәтеп сығарҙы. Үрелеп, бәләкәй ҡапҡаны асты. Ҡапҡа шығырлап ҡуйҙы. Быны ишеткән әсәһе шунда уҡ асыҡ тәҙрә эргәһенә йүгереп килде:

— Яҡуп, тим, ҡайҙа бараһың?

— Тубым урамға тәгәрәп сыҡты, әсәй, — тип, Яҡуп дөрөҫөн әйтте.

Әсәһе тәҙрә янынан киткәнсе, Яҡуп, тубын ҡапҡаға бәреп, урам яҡта уйнаны. Юрамалмы, ысынмы — туп тау яғына сыға торған тыҡрыҡҡа табан тәгәрәне. Яҡуп уны ҡыуа китте. Туп тәгәрәй — ул йүгерә, туп тәгәрәй — ул йүгерә. Ләкин туп йомшаҡ үләндә оҙаҡ бара алманы, туҡтаны. Ә Яҡуп, бер йүгерә башлағас, тиҙ генә туҡтай алманы. Күкрәктауға тиклем барып етте.

Ул үрмәләп, осло ҡая эргәһенә менде. Унда һандыҡ дәүмәле, хатта унан да эрерәк таштар береһе өҫтөнә икенсеһе өйөлгән. Бүтән малайҙар, «һуғыш уйыны» уйнағанда, ошо таштар араһына боҫоп атышалар ине. Был ерҙә бик хәтәр. Яҙа баҫһаң, йығылып, башың тишелеүҙе көт тә тор. Яҡуп башта бәләкәсерәк таштар араһында һикергеләп йөрөнө. Бер тапҡыр, һөрлөгөп, тубы-

ғын бәрҙе. Әммә бирешмәне, һаман һикереүен белде. Һуңыраҡ ул эре таштар ятҡан яҡҡа күсте.

Ауыл яғынан күҙ һалыусы булһа, ҡурсаҡ ҙурлығы ғына бер нәмәнең ҡая итәгендә һикереп уйнауын күреп, ғәжәпләнер ине. Әммә уға күҙ һалыусы булманы. Улының быңдай ярамаған эш эшләүе әсәһенең хатта уйына ла килмәне. Яҡуп һаман һикерҙе лә һикерҙе. Был уның өсөн уйын түгел, ә иң ҡыҫтау эш ине. Малайҙың, йығылып, беләге һыҙырылды, сикәһе сыйылды, маңлайы ҡабарып сыҡты. Яраһы күбәйгән һайын уның сәме артты, йөрәге ярһыны. Шәрифулла әйтмешләй, бәлки, уның йөрәгенә лә бөркөт оялаған булғандыр. Тик әлегә тиклем ҡанат ҡына йәйә алмағандыр.

Яҡуп менән мауығып, кисә беҙҙән бик алама хәлдә ҡалған Вәзирҙе онотоп ебәрҙек бит. Әйҙә, Яҡуп үҙ эшен эшләй торһон, беҙ Вәзирҙәр яғына ҡағылып үтәйек. Улар Яҡуптарға ҡыйғас ҡына урам аша тора.

ЙОМРО-ЙОМРО ЙОМҒАҒЫМ

Һуғыш йылдарында ла, һуғыштан һуң да Вәзирҙәр ғаиләһе, башҡалар кеүек үк, ашау-эсеүгә наҡыҫ, бик наҡыҫ йәшәне. Шуға күрәлерме, Ҡорбанбикә еңгәлә бер сәйер ғәҙәт булды. Ул икмәк-тоҙон, сәй-шәкәрен, май-ҡаймағын иренән, балаларынан йыйып, йәшереп тотто. Һандыҡ, шкаф, келәт, аласыҡ асҡыстарын һәр ваҡыт үҙе менән йөрөттө. Ул ғәҙәтен йылдар именләнә төшкәс тә ҡуйманы. Бөтә ашамлыҡ затын йыйҙы, йәшерҙе. Әммә сепрәк-сапраҡ затына уның иҫе китмәне.

Өйҙә бөтә нәмә йоҙаҡлы булғанлыҡтан, Вәзир бәләкәйҙән үк аҡтарынырға, һәрмәләнергә өйрәнде. Дүртбиш йәшлек саҡта уҡ әле мендәр араһына йәшерелгән арыш көлсәһен тапты. Юҡ, ҡомһоҙланып, бер үҙе генә ашаманы. Нәҡ яртыһын бүлеп, яңы тәпәй баҫҡан ҡустыһы Насипҡа бирҙе. Һуңыраҡ, аласыҡ йоҙағын ҡаҙау менән асып, икәүләп һөт эстеләр. Һандыҡҡа ла асҡыс яраттылар. Унан «ҡунаҡ өсөн» генә һаҡланған өс шаҡмаҡ шәкәрҙең береһен сәлдерҙеләр. Балта менән сабып, шаҡмаҡты икегә бүлделәр. Бәләкәйерәге Насипка эләкте. Малайҙар бөтә йоҙаҡтарҙың да телдәрен тиҙ төшөнөп

алдылар. Тора-бара йоҙаҡтар үҙ хеҙмәттәрен үтәүҙән бөтөнләй баш тарттылар.

Быны Ҡорбанбикә еңгә лә бик тиҙ һиҙҙе. Иҫәпһеҙ һыйҙары юҡ ине шул уның. Малайҙарҙың башына күп ҡарғыштар яуҙы. Ләкин улар ныҡыш булдылар, эҙләнеүҙәрен дауам иттеләр. Ҡорбанбикә еңгә лә үҙенең хәйләһен үҙгәртте. Нәмәләрен ул һандыҡҡа йәки соланға бикләмәй башланы. Шәкәр, кәнфит кеүек нәмәләр өйҙәге иҫке тун киҫәгенә, осормалағы быйма ҡунысына йәки келәттә ғүмер баҡый буш элләнеп торған тубалға йәшерелде. Май-ҡаймаҡ аласыҡ мөгәрәбенән емерек мунса мейесенә күсерелде. Әммә был саралар ҙа көткән нәтижәне бирмәне. Малайҙар бер сер артынан икенсеһен аса барҙылар. Әйтергә кәрәк, улар бер нәмәне лә умырып алманылар. Йәшерелгән әйберҙәрҙе табыу үҙе бер ирмәк уйынға, ҡыҙыҡлы кәсепкә әйләнде.

Был уйындан аҡса тигән зат та ситтә тороп ҡалманы. Әйтәйек, мейес ҡыуышында ултырған һуҡыр лампа аҫтындағы биш һум аҡсаны табып, уға перәник һатып алыу, ул перәникте малайҙар менән бүлешеп ашау ҡыҙыҡ түгелме ни? Вәзир уны ҡыҙыҡҡа һананы һәм шулай эшләне лә. Әрләүҙәр, ҡарғауҙар, өй түбәһенә яуған борсаҡ кеүек һикерешеп, ситкә тәгәрәп торҙолар. Шулай ҙа йәшерелгән аҡсаны табыу еңел эш түгел икән. Бер таптылар, ике таптылар, ләкин өсөнсөгә уларҙың һәрмәнеү һәләтлеге етмәне.

Бөгөн Вәзир эҙләнеүҙәрен яңынан башланы. Уға аҡса бик кәрәк ине. Кисәге хурлыҡты, иптәштәре менән килешеп, яҡшылыҡ менән генә юйырға мөмкин. Уның башында бик йәтеш бер план тыуҙы. Аҡса табып, лавканан перәник һатып алырға ла, иптәштәрҙе һыйлап, ғәфү үтенергә. Ололар ҙа бит беҙҙең яҡта нахаҡҡа хәтерен ҡалдырған кешеһен саҡырып һыйлайҙар ҙа ғәфү итеүен һорайҙар. Вәзир ҙә шулай эшләйәсәк.

Ҡарауылдан ҡайтҡан атаһы соланда йоҡлап ята. Әсәһе эшкә киткән. Артыҡ шаһит булмаһын тип, Вәзир Насипты күл буйына бәпкә һаҡларға ҡыуып ебәрҙе лә, аулаҡ ҡалған өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереп, аҡтарынырға кереште. Китап эстәрен, тоҙ һауыттарын, ишек-тәҙрә баштарын тотош тентеп сыҡты. Әммә эҙләгәнен таба

алманы. Уның күҙ ҡарашы әлеге мейес ҡыуышындағы ҙур ғына йөн йомғаҡҡа туҡталды. Вәзир йомғаҡты алып ҡыҫҡылап ҡараны. Ул ашыҡ-бошоҡ ҡына сырмалғанға оҡшай. Үтә йомшаҡ ине. Вәзир йомғаҡты ҡолағына килтереп тағы ла ҡыҫҡыланы. Йомғаҡ эсенән ҡыштырлау ишетелде. Был йомғаҡта ниндәйҙер сер бар ине.

Вәзир йомғаҡтың осон табып алды ла һүтеп сырмарға кереште. Уның йөрәге, айыу эҙенә төшкән һунарсы йөрәге һымаҡ, ярһып тибергә тотондо. Үҙе йомғаҡты һүтә, үҙе һуҙып-һуҙып көйләй:

— Йомро-йомро йомғағым, күрмәнеңме аҡсамды? — ти. Шунда уҡ йомғаҡ өсөн яуап та ҡайтара.

— Йомро-йомро йомғаҡмын, һүтелеп бөткәс, әйтермен...

— Әйтмәһәң дә, белермен...

Һүтә торғас, йөн еп икенсе йомғаҡҡа сырмалып бөттө. Вәзир ҡулында ҡат-ҡат бөкләнгән йәшкелт ҡағыҙ ғына тороп ҡалды. Вәзир уны ашыҡмай ғына һүтте. Был өр-яңы илле һумлыҡ аҡса ине. Уның эсенән тағы бер егерме бишлек, бер бишлек килеп сыҡты. Вәзиргә күп кәрәкмәй ине.

— Ата-әсәһенә теймәйек, беҙгә балаһы ла еткән, — тип бишлекте алып салбар кеҫәһенә тыҡты. Ҡалғандарын элеккесә кире бөкләп, уларға йомғаҡты яңынан һүтеп сырмарға тотондо. Үҙе сырмай, үҙе һуҙып-һуҙып һөйләй:

— Йомро-йомро йомғағым, ни күрҙең дә ни белдең?

Йомғаҡ өсөн яуапты үҙе ҡайтара:

— Ай күрҙе, ҡояш алды, мин бер ни ҙә күрмәнем...

Йомғаҡты элекке хәленә килтереп урынына ҡуйғас та, Вәзир лавкаға йүгерҙе. Биш һумлыҡ перәник үлсәтеп, ике салбар кеҫәһенә тултырҙы. Тик ниңәлер һатыусы апай уға бер аҙ шикләнеп ҡарап ҡалды. Әйтерһең, Вәзир биш һум аҡса табырлыҡ малай түгел.

Юҡ, һатыусы апай уға шикләнеп ҡараманы. Ул бөтөнләй башҡа нәмә хаҡында уйланы: «Әсәһе кер йыуалыр, күрәһең. Бахырҙың алмаш күлдәге юҡмы икән ни?» — тип бошондо ул. Вәзирҙең тән сыныҡтырып йөрөүен белмәй ине шул.

Вәзир перәникте ҡайтарып аҙбар ситәне араһындағы һаламға йәшерҙе. Яйы килгәс, тегеләрҙең ҡолағына тө-

шөрөр ҙә, шунан улар өсәүләп тауға менерҙәр. Иптәштәре: «Ни булыр икән?» — тип көтөп торғанда, ул кеҫәләрендәге һигеҙ пәрәникте берәм-берәм сығарып, үлән өҫтөнә ҡуйыр, унан өләшергә тотонор. Иптәштәренә өсәрҙе бирер, үҙенә икене алыр. Үҙенә хатта берәү ҡалмаһа ла риза. Ҡунаҡ һыйлауҙың йолаһын белә ул. Ошо уйҙарҙан уның түбәһе күккә тейҙе. Был минуттарҙа унан да шатыраҡ, унан да бәхетлерәк кеше юҡ ине.

Вәзир, эре генә атлап, урамға сыҡты. Ҡулдарын артҡа ҡуйып, яланғас ҡорһағын кирә биреп, байтаҡ ҡына тирә-яҡҡа ҡаранғылап торҙо. Ул үҙенән сиктән тыш риза ине.

Шул арала тау тыҡрығынан, былт итеп, Яҡуп килеп сыҡты. Уның ҡабармаған, сыйылмаған ере юҡ ине.

— Эй, Өлгө, ҡайҙа барҙың? — тине уға Вәзир.

— Мин Өлгө түгел, мин — Яҡуп, — тип ҡарыулашты тегеһе.

— Әллә айыу менән алыштыңмы, бәһлеүән?

Яҡуп, иптәштәренә биргән антын шунда уҡ хәтеренә төшөрөп, үҙ юлына китә башланы. Ләкин ул ҡул биреү тигән һүҙ түгел дә. Вәзир эргәһенән маһайған кеше һымаҡ үтеп китеүҙе ул килештермәне.

— Мин быҙау эҙләнем, — тип шылдырҙы ул.

— Маңлайыңды ташҡа ора-ора эҙләнеңме ни ул быҙауҙы?

— Булды инде, — тине Яҡуп. Бәйнә-бәйнә һөйләп биреүҙе кәрәк тапманы.

— Ну биҙәнгәнһең, әй... Нисауа, төҙәлер әле. Ямауы өҫтөндә, — тип тынысландырҙы Вәзир. Уның бөгөн күңеле күтәренке ине. Кемгә булһа ла берәй яҡшылыҡ эшләгеһе килеп кенә тора. Шуға күрә әллә ҡасан күҙҙән төшкән Өлгө Яҡупҡа ла, тиң күреп, һүҙ ҡушты, иғтибар күрһәтте, уның йәрәхәттәрен күреп, хатта ҡыҙғанып та ҡуйҙы. Ләкин был ғына аҙыраҡ тойолдо уға. Яҡупты нимә менәндер ҡыуандырғыһы килде уның. Ә Яҡуп иһә был минутта башҡасараҡ уйҙа ине: ул Вәзиргә сәләм дә бирмәй үтеп китәһе урында, хәтер һаҡлап, уның менән һөйләшеп тора, түбәнселек күрһәтә.

Әгәр Яҡуптың ошо уйҙарын Вәзир һиҙеп ҡалһа, һис шикһеҙ, Өлгөнөң маңлайына тағы бер-ике оро өҫтәлер

ине. Ю̇к, бер ни ҙә һиҙенмәне Вәзир. Рәхәтлек кисереүселәр шулай һу̇кыр булалар инде. Киреһенсә, Я̇куп̇ка ̇карата уның я̇кшылығы арт̇кандан-арта барҙы. Оҙа̇к көттөрмәйенсә, салбар кеҫәһенән рогатка килеп сы̇кты. Был — бөтә урамда дан тот̇кан теге ̇кыҙыл һаплы рогатка ине инде.

— О̇кшаймы һиңә? — тине Вәзир.

— Ниңә, о̇кшай ҙа...

— Кәрәкме һиңә?

— Кәрәк тә...

— Кәрәкһә, ал. Мин һиңә бөтөнләйгә бирәм.

Я̇куптың ̇капыл башы әйләнеп киткәндәй булды. Күҙ алдында ниндәйҙер кескәй генә ̇кыҙыл шәүләләр һикерешеп уйнаны. Был ва̇кытта Вәзир ̇кыҙыл һаплы рогатканы уға һуҙып тора ине.

— Биргәндә, ал! — тип бойорҙо Вәзир. Уның тупаҫ тауышы Я̇купты айнытып ебәрҙе.

— Ә мин һиңә резина туп йәнә велосипед звоногы бирермен. Һәләк ирмәк шылтырай ул, — тип бышылданы Я̇куп.

— Кәрәкмәй. Бүләкте һатып бирмәйҙәр. Рогаткалар миндә бер ̇кумта ул...

Я̇куп ̇кыйыр-̇кыймаҫ ̇кына рогаткаға үрелде. Алдатмаймы икән тип шикләнде ул. Ләкин киң күңелле, йомарт Вәзир ундай ва̇ксыл шаярыуҙарҙан өҫтөн ине.

Я̇куп рогатканы алып, ̇калтырана-̇калтырана, салбар кеҫәһенә ты̇кты.

— Мин дә һиңә... — тип нимәлер вәғәҙә итергә керешкәйне, Вәзир уны шып ту̇ктатты:

— Кәрәкмәй. Бар, ̇кайт та атырға өйрән!

— Ярай! — тип теге шунда у̇к өйөнә йүгерҙе. Я̇куптың китеүе булды, ауыҙы ̇кола̇к артына еткән Гөлнурҙың Вәзир ̇каршыһына килеп баҫыуы булды. Ул ̇култы̇к аҫтына сәскәле ̇кыҙыл ситса төрөп ̇кыҫтырғайны.

— Абау, мәсхәрә, күлдәк тә кеймәгән! — тип сәрелдәргә тотондо Гөлнур.

— Бар, юлыңда бул.

— Барам шул. Мин түбән ос Йәмлиха апайымдарға ситса илтәм, ул миңә матур күлдәк тегә, — тип хәбәр һалды ̇кыҙ. — Айҙар менән Ғабдулла ̇Кылыстың арғы

башына китте. Мине эйәртмәнеләр. Улар миңә турғай балаһы тотоп ҡайталар. Икене.

Гөлнур үҙ юлына китеп барҙы. Вәзирҙең ҡобараһы осоп, эсе әрнеп ҡалыуын ул һиҙмәне лә. Ас ҡәҙерен туҡ белмәй шул инде.

Әле генә ҡуҡырайып баҫып торған Вәзир ҡапыл бөршәйеп ҡалды. Уның кисәге ҡайғыһы яңырып китте: тимәк, тегеләрҙең Вәзирҙән бөтөнләй ҡул һелтәүҙәре раҫ. Уның Өлгө Яҡуп хәленә төшөүе, күрәһең, ошолор инде.

Бөгөндән алып Яҡуптың йондоҙо юғарыға үрләй башлауын белмәй ине шул ул. Белһә, үҙ ҡулы менән үҙ ҡоралын уға тоттороп та ебәрмәҫ ине.

«Нисек тә яйын табып, бөгөн кис үк иптәштәрҙе һыйлап, ғәфү үтенергә кәрәк. Юғиһә, донъяның ҡыҙығы ҡалманы...» — тип уйланы ул.

«ӨЛГӨ»ЛӘР СЫЛТЫРАП ҠОЙОЛА

Яҡуп ҡайтып күренгәс, әсәһе бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Тамағына төйөр тығылып, башта ул байтаҡ өндәшә алмай торҙо, унан әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Үлтергәндәр балаҡайымды! Үлтергәндәр! Иларлыҡ та хәле ҡалмаған бит. Ҡайһы ҡоторған эт таланы шулай, балаҡайым?

«Үлергә» самаһында ла булмаған Яҡуп тыныс, хатта бер аҙ тантаналы тауыш менән яуап ҡайтарҙы:

— Мин ҡая ташта һикереп уйнаным, әсәй. Һәләк ирмәк булды. Шунда яҙа баҫып...

Гөлйемеш апай уны тыңларға ла теләмәне, һаман сәрелдәй бирҙе:

— Әлеге Вәзирҙер инде, йөҙө ҡара! Кәнсәгә барыбып, аҡылға ултыртмаһаммы шуны!

Әле генә шундай йомартлыҡ күрһәтеп, рогатка биргән Вәзирҙең ғәйепһеҙ әрләнеүен Яҡуп тыныс ҡына тыңлап тора алманы. Уның хатта эсе әрнеп ҡуйҙы.

— Вәзиргә тел тейҙермә, әсәй. Ул минең дуҫым хәҙер. Мин үҙем йығылдым. Үҙе йығылған — иламаҫ.

Әсә торған һайын ярһый ғына барҙы:

— Һин үҙе йығыла торған бала түгел, һөйләмә буштың! Нисәмә әйттем, шул Вәзирҙәргә аяҡ баҫма, тип. Нисәмәләр әйттем...

Әсәһен ышандырырға әмәл тапмай торған Яҡуптың башына шундай хәтәр бер уй төштө:

— Улайһа, әсәй, — тине ул, — бына күр ҙә тор. Анау ҡараманың иң осона менәм дә һикереп төшәм. Ыһ та итмәйем.

Шулай тип әйтеүе булды, ҡойма буйындағы яңғыҙ ҡарамаға табан йүгереүе булды. Яҡуп иң түбәндәге ботаҡҡа үрелергә лә өлгөрмәне, әсәһе уны килеп ҡосаҡлап та алды. Әйтергә кәрәк, күпме тырышып ҡарамаһын, быға тиклем ул ҡарама башына Яҡуптың бер тапҡыр ҙа менә алғаны юҡ ине әле. Был юлы ла менеүе бик шикле ине.

— Иҫәрләнмә, балам, — тине Гөлйемеш апай. Һәм үҙ һүҙенән тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Уның күңелендә бер шик яралды: «Әллә бер-бер төрлө шауҡым ҡағылдымы был балаға? Аҡылына зәғифлек килдеме, юғиһә?» — тип ҡото осто. Ысынлап та, быға тиклем һәр аҙымын әсәһе ҡушҡанса ғына атлап өйрәнгән Яҡуптың был ҡылығына иҫ китерлек ине.

Яҡуп әсәһенең ҡосағында тыпырсынырға тотондо:

— Ебәр, тим, әсәй! Һикерәм тигәс, һикерәм...

Гөлйемеш апай тамам ҡаушап, хәлһеҙләнеп ҡалды. Был баланың боларыуы тиктәҫкә түгел ине.

— Һикерерһең, улым, һикерерһең. Тик иртәгә, йәме? — тип тынысландырҙы ул Яҡупты, — Ә хәҙер өйгә инәйек. Үҙеңдә ҡаймаҡ менән һыйлармын. Сәксәк тә бирермен.

Шундай тәмле нәмәләрҙең исемен ишеткәс, Яҡуп башҡаса туламаны. Әсәһе уны өйгә шул ҡосағында килеш күтәреп индерҙе. Малай, әлбиттә, әсәһенең ҡурҡыныс уйҙарға батыуын һиҙмәне. «Әсәйҙе барыбер ышандырҙым», — тип кенә уйланы.

Өйгә ингәс, Яҡуп бер сынаяҡ ҡаймаҡ менән арыу ғына өйөм сәксәкте тиҙ үк һелтәп ҡуйҙы. Булһа, тағы ла ашар ине, тик һорарға ғына ҡыйманы. Гөлйемеш апай улынан күҙҙәрен алмай ҡарап ултырҙы. «Атаһы ла китте лә олаҡты. Ҡайҙа барып һуғылмаҡ кәрәк хәҙер?» — тип эстән өҙгөләнде ул. Ә Яҡуп, рәхәтләнеп туйынып алғас, ултырған ерендә хатта бер талпынып ҡуйҙы.

— Йәрәхәттәрең һыҙлаймы, балам? — тип һораны әсә.

— Юҡ, — тине улы. Үҙе маңлайындағы күкһел ҡара ороно һыйпап ҡуйҙы. Гөлйемеш апайҙың йөрәге жыу итеп китте. «Сире шулай уҡ ҡатымы икән ни? — тип әрнене ул. — Шул тиклем һыҙлауҙарҙы ла һиҙмәй бит был бала!»

— Ятып ал, балам, арығанһыңдыр, — тине әсә, шунда уҡ урын түшәргә тотондо. Үҙенең «өлгө»лөгөнә ҡаршы иртәнән бирле көрәшкән Яҡуп байтаҡ йонсоғайны. Шуға күрә ул ҡарышманы. Түшәгән урынға барып ятты. Ятҡас та уң ботона ниндәйҙер ҡаты нәмә тейҙе. Яҡуп уны һәрмәп ҡараны. Был баяғы ҡыҙыл һаплы рогатка ине. Тимәк, ул кеҫәлә ята. Яҡуптың бөтә арығанлығы бер юлы әллә ҡайҙа осоп юғалды. Ул ҡапыл һикереп тормаҡсы булғайны ла... торманы. Йоҡлаған кеше булып күҙҙәрен йомдо, ә бер аҙҙан килештереп хырылдап та ебәрҙе.

Улының йоҡлап китеүенә тамам ышанған Гөлйемеш апай шым ғына ишеккә табан йүнәлде. Ул ауылдан бер саҡрым самаһы ситтәрәк йәшәгән урман ҡарауылсыһына барырға ҡарар иткәйне. Ҡарауылсы ҡарттың ҡалалағы врач ҡыҙы элекке көндө генә бала-сағаһы менән ялға ҡайтҡайны. Гөлйемеш апай шул врачты саҡырмаҡсы булды.

Әсә соланға сыҡты. Бына аҡрын ғына ишек асылып ябылды, унан ҡапҡа шығырлап ҡуйҙы. Яҡуп шуларҙың бөтәһен дә ишетеп ятты. Ул ырғып урынынан торҙо ла, иҙәнгә төшкәс, бер-ике ҡат үрә һикереп алды. Унан һуң тышҡа тороп йүгерҙе. Ҡойма буйына килеп боҫто ла әсәһенең ҡайһы яҡҡа киткәнен ярыҡ аша күҙәтеп торҙо. Әсәһе Вәзирҙәргә лә инмәне, канцелярия яғына ла боролманы, тыҡрыҡ аша ауыл ситенә сығып китте.

Яҡуп ҡыҙыл һаплы рогатканы кеҫәһенән һурып сығарҙы ла уға байтаҡ ара һоҡланып ҡарап торҙо. Егет ҡулына ниндәй генә малдар төшмәй! Хәҙер эшкә тотонаһы ғына ҡалды.

Өй алдына ваҡ таш ҡатыш ҡом һибелгән. Башта Яҡуп фуражкаһына күп итеп ваҡ таш йыйҙы. Унан яйлап ҡына болдорға менеп ултырҙы. Хәҙер атыр өсөн йәтеш сәп табып алырға кәрәк ине. Аҡ келәт эргәһендәге бағана йәбенә түңкәреп элеп ҡуйылған йәшел күнәктән дә шәберәк сәпте эҙләп тә таба алмаҫһың. Яҡуптың ҡарашы

шул күнәккә туҡталды. Ул йомро ғына бер таш менән рогаткаһын ҡороп, тоҫҡарға тотондо. Оҙаҡ тоҫҡаны. Рогатканың резина кереше, һуҙыла торғас, нәп-нәҙек булып ҡалды. Яҡуп керешле ысҡындырҙы. Таш үҙ юлына осоп китте, ә ҡапыл ысҡынған кереш бая ғына киҫелгән баш бармаҡҡа килтереп һуҡты. Яҡуптың күҙ алдында ҡыҙыл түңәрәктәр һикерешеп уйнарға кереште. Элегерәк шундай хәл булһа, Яҡуп рогаткаһын атып бәрер ҙә илай-илай өйгә йүгерер ине. Хәҙер ундай саҡтар үтте шул.

Был тәүге бәлә малайҙың бары сәмен генә арттырҙы. Ауыртҡан бармағына бер-ике тапҡыр өрөп алды ла яңынан үҙ эшенә тотондо. Бер атты, ике атты, биш атты, әммә йәшел күнәк иҫе лә китмәй эленеп тора бирҙе. Зыңлап та ҡараманы. Яҡуп болдорҙан төшөп бер-ике аҙым келәткә яҡынлашты. Ул баҫып атырға тотондо. Өсөнсө таш йәшел күнәктең ҡабырғаһына барып тейҙе. Күнәк зың итеп ҡалды. Яҡуп Вәзирҙән күп тапҡырҙар ишеткән һүҙҙәрҙе ҡабатлап ҡуйҙы:

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ!

Ләкин «икенсе ҡоймаҡ» бик оҙаҡ «майланмай» яфаланы. Инде тейҙерҙем тип кенә атҡанда, йәшел күнәк ҡымшанмай ҙа тороп ҡалды, ә аҡ келәт тәҙрәһенең бер өлгөһө сылтырап ҡойолоп төштө. Был ваҡыт шығырлап ҡапҡа асылды. Әммә Яҡуп уны ишетмәне. Ул, сәмләнә төшөп, күнәккә йәнә атып ебәрҙе. Был юлы баяғы тәҙрәнең түбәнге өлгөһө селпәрәмә килде.

Ҡапҡанан килеп ингән Гөлйемеш апай менән врач, ни тиергә лә белмәй, баштa аптырап ҡалды. Әсә үҙәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе.

— Балаҡайым! — Ул йүгереп килеп, Яҡупты етәкләп алды. Был арала Яҡуп рогатканы кеҫәһенә йәшерергә өлгөргәйне. Ләкин әсәлә рогатка ҡайғыһы юҡ ине.

— Ауырыу балағыҙ ошомо? — тип һораны врач.

— Ошо шул. Минең берҙән-бергенәм ул.

Яҡупты өйгә алып инделәр. Врач уның тамағын, күҙҙәрен ҡараны, яҡҡырып ҡорһағын ҡапшаны. Ике ҡолағына ике резина эсәк тығып, ул малайҙың арҡаһын, күкрәген тыңланы, шунан һуң тағы бер тапҡыр күҙҙәрен ҡараны.

— Балағыҙ сәләмәт. Сәп-сәләмәт, — тине.

— Сәләмәт бала шулай буламы ни? Янмаған, күгәрмәгән ере юҡ бит.

— Сирле булһа, ырғымаç, һикермәç ине. Һикермәһә, йығылмаç та ине. Шулаймы, егет кеше? — тине врач.

«Егет кеше» баш ҡаҡты.

Әсә һаман үҙенекен тылҡый бирҙе:

— Бынау ороларына, уйылған-сыйылған ерҙәренә ниндәй дарыу һөртәйем һуң?

— Дарыу һөртөп тораһы юҡ, төҙәлер.

«Эсендә йәне юҡтыр был докторҙың», — тип уйланы Гөлйемеш апай. Ә докторҙың эсендә йәне бар ине. Ләкин юҡ сирҙе бар итеп һөрән һалыусыларҙы уның ене һөймәй ине. Врач, әйберҙәрен йыйып, кескәй ҡумтаһына һалды ла хушлашып сығып китте.

— Ярай инде, улай булғас, — тип тороп ҡалды Гөлйемеш апай.

Кискә тиклем әсә улын тышҡа сығарманы, һағалап ултырҙы. Тик көтөү ҡайтыр алдынан ғына, быҙау эҙләп алып ҡайтырға тип, тау яғына сыҡты. Унда ла улын киçәтеп китте: «Тышҡа аяҡ атлайһы булма!» — тине. Үҙ һүҙҙәренең көсөнә ышанып етмәй, ишекте тыштан элеп тә ҡуйҙы. Ишекте элмәһә, Яҡуп, бәлки, өйҙә лә ултырыр ине. Аҙбарға ябылған кәзә бәрәсе кеүек, нисек бик аçтында ултырһын инде ул? Тәҙрәнән һикереп, Яҡуп тышҡа сыҡты. Ул башлаған эшен бер тиклем ослап ҡуйырға булды. Сөнки уға бирелгән өс көндөң береһе үтеп бара ине. Әсәһе ҡайтҡансы, ул мунса мөрйәһенең осона ҡуйылған ҡалай торбаны атып төшөрөргә лә, уң күрше Сабирҙарҙың нигеҙ өйөмөндә торған балсыҡ көршәкте ватырға ла, һул күрше Йомабикә ҡарсыҡтың үлән өçтөндә ултырған еҙ ҡомғанын йәмшәйтергә лә өлгөрҙө. Яҙа атыуҙан түгел, уларҙың һәр береһенә тоçҡап атты ул. Йомабикә ҡарсыҡ ишетмәне лә, күрмәне лә, әммә Сәрби апай Яҡуптың тетмәһен тетте. «Икенсе Вәзир булдыңмы әллә, аҙғын малай?! Яҡшынан яман тыуған! Тәртиптең нимә икәнен белмәгән йүнһеҙ! Бына әсәйең генә ҡайтһын әле...»

Яҡуп ғүмерендә беренсе ҡат «тәртипһеҙ» тигән һүҙ ишетте. Юҡ, быға ул бошонманы. Тимәк, хәҙер уны берәү ҙә «Өлгө Яҡуп» тип үсекләй алмаясаҡ.

КҮЛ ӨҪТӨНДӘ БАЛЫҠ УЙНАЙ

Көн кискә ауышып бара. Күл өҫтөндә иртәнән бирле йүгерешеп уйнаған ваҡ тулҡындар, ярға һыйынып, тынып ҡалғандар. Талсыҡҡандарҙыр, күрәһең. «Былар ял итһендәр әле», — тигән һымаҡ, ел дә тау яғына китеп олаҡҡан. Был мәлдә ул, моғайын, ҡарағай ботаҡтарын һелкетеп йөрөйҙөр әле. Уның эше бер ваҡытта ла бөтмәй.

Ә бына ҡоштар, исмаһам, миҙгелен белеп кенә һайрайҙар. Көн эҫеһендә улар һайрау яғына бик әүәҫ булмайҙар. Һалҡын төшә башлағас, уларҙы тотоп та тыя алмаҫһың. Ҡылыс буйындағы һәр ҡыуаҡ йыр-моң сәсеп тора. Тыңлап ҡына өлгөр.

Балыҡтар ҙа иртәле-кисле шаянраҡ булалар. Әле лә бына, һыу өҫтөндә иҫәпһеҙ-хисапһыҙ түңәрәктәр яһап, балыҡ уйнай. Ҡайһы бер үтә шуҡтары өҫкә һикереп сығалар ҙа үҙҙәренең тәңкәләрен йылтыратып, маҡтанған булалар. Йәнәһе: «Күрегеҙ, беҙ ниндәй һылыубыҙ!» — тиҙәр. Шулай ҙа ғәмһеҙҙәр улар, балыҡтарҙы әйтәм. Әле күлде бер итеп уйнап йөрөгән сабаҡтарҙың һәм ҡыҙылғанаттарҙың байтағына бер нисә көндән, үҙ күлдәрен ташлап, Кирәмәт башындағы ят күлгә күсергә тура киләсәк. Һәм улар бер ҡасан да Ҡылысҡа кире әйләнеп ҡайта алмаясаҡтар. Был хаҡта балыҡтар бер нәмә лә белмәйҙәр. Хатта уйҙарына ла килтермәйҙәр. Саҡ ҡына һиҙенһәләр ҙә, шул тиклем үк уйынсаҡ булмаҫтар ине.

Ҡоштарҙың эше бөтөнләй башҡа. Уларҙы һин әллә ҡайҙағы урмандарға илтеп ташла, барыбер теләгән саҡтарында үҙ ҡыуаҡтарына ҡайталар ҙа киләләр. Бына бит ул ер өҫтөндә йәшәү нисек һәйбәт. Һыу аҫтында йәшәү ише түгел инде.

Әйҙә, балыҡтар һикерешә, ҡоштар һайраша торһон. Беҙ яр буйындағы тал ҡыуаҡтары араһына күҙ һалайыҡ. Иң тәүҙә беҙ унда бер сем ҡара, бер ерән баш күрербеҙ. Кәүҙәләрен ҡамыш ҡаплай. Шулай ҙа ул баштарҙың кемдәрҙеке икәнен таныуы ҡыйын түгел. Ҡараһы: «Мин Ғабдулла», ерәне: «Мин Айҙар», — тип әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора.

«Өс таған»дың ике терәге тауышһыҙ-тынһыҙ мурҙа үреп ултыра. Хәҙер эш бөтөп бара инде. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, Ғабдуллаға, Башлыҡ булһа ла, бары ҡара

эштәрҙе генә башҡарырға, дөрөҫөрәге, Айҙарҙың ярҙамсыһы ғына булырға тура килде. Ул өләсәһенең һалма бысағы менән сыбыҡ ҡырҡып, уларҙы ботаҡтарҙан әрсеп, Айҙар алдына һалып торҙо. Был саҡта ул үҙенең Башлыҡ икәнен бөтөнләй онотоп ебәрҙе. Киреһенсә, Айҙарға һоҡланып, уны өҫтөн итеп ҡараны. Хатта бер саҡ: «Ну оҫта икәнһең, малай», — тип иптәше алдында ярамһаҡлана биреп тә ҡуйҙы. Ҡулың һөнәр белмәгәс, шулайыраҡ була шул.

Айҙарҙың ярылып бөткән йүгерек ҡулдарына ысынлап та һоҡланып туймаҫлыҡ ине. Нескә, оҙон тал сыбыҡтары уның бәләкәс бармаҡтарында, ебәк таҫма урынына, бөгөлөп-һығылып уйнай. Әйтерһең дә, ул тал сыбыҡтарынан мурҙа түгел, ә ебәктән селтәр үрә ине. Әммә үҙенең булдыҡлылығы менән ул бер генә тапҡыр ҙа шапырынманы, уның йөҙөндә ҡуҡырайыуҙың әҫәре лә сағылманы. Ара-тирә танауын тартҡылап, бары эшләй бирҙе. Ысын оҫталар ана шундай булалар ҙа инде.

Балыҡтар һикерешеүендә, ҡоштар һайрашыуында, малайҙар мурҙа үреүендә булды. Һәр кем үҙ һөнәре менән мәшғүл ине. Шуға күрә улар яр башындағы тар һуҡмаҡ буйлап боҫа-ҡаса үтеп барыусы күлдәкһеҙ малайға иғтибар ҙа итмәнеләр. Малайҙың яланғас беләктәренә тейеп ҡалған тал япраҡтары нимәлер шыбырларға итеп ҡараһалар ҙа, уларға ҡолаҡ һалыусы булманы. Бер аҙ уҙа биргәс, әлеге малай йөҙ түбән ятып, ҡамыш араһындағы икәүҙе күҙәтергә кереште. Уның сылт-сылт йомолоп торған күҙҙәре бөтәһен дә күрҙе, бөтәһен дә шәйләне. Бер аҙҙан һуң ул ҡамыш төбөндәге йәш күрәнде шәлкем итеп усына йыйып тотто ла, ат ҡойроғо төйнәгән кеүек төйнәп ҡуйҙы. Беҙҙең урман яғында кешеләр эҙ юғалтмаҫ өсөн шулай билдә ҡалдыралар. Күрәһең, был малай ҙа әлеге урынды билдәләп үтергә булды. Сөнки Ҡылыс буйы ҙур. Ҡайҙа ҡарама, йырып сыҡҡыһыҙ ҡамышлыҡ.

Йәй көнө, тән яндырып, күлдәкһеҙ йөрөгән малайҙар һирәк осрамай. Ләкин быны кеүек етеҙ һәм һаҡ хәрәкәт итеүселәр Бөркөтлөлә күп түгел. Уның һәр ҡыймылдауы: «Мин Вәзир!» — тип ҡысҡырып тора. Үҙенә кәрәктең бөтәһен дә барлап, тикшереп сыҡҡас, Вәзир, аҡрын ғына шыуышып, артҡа сигенде. Артта урман.

Урманға инеп алғас, ул, ҡуйы үлән араһындағы бүҙәнә кеүек, йылт итеп кенә ҡалды.

Был арала Айҙар менән Ғабдулла ла мурҙаны үреп бөтөрҙө. Ысынлап та, матур нәмә килеп сыҡты. Шулай ҙа Айҙар һөнәр эйәләренә генә хас бер ентеклелек менән үҙ эшен тағы бер ҡат тикшереп сыҡты, ҡапҡасын бер ябып, бер асып ҡараны. Шунан һуң ғына малайҙар салбарҙарын сисеп ырғыттылар. Ике-өс күнәк балыҡ һыйышлығы ауҙың эсенә ҙур ғына ике таш һалып, уны күл эсенә, ҡамыштар араһына күтәреп индерҙеләр. Мурҙа тиҙ генә батырға теләмәне. Уны, түбән тарттырып, ҡамыш һабаҡтары менән бәйләштергеләргә тура килде. Ҡыҫала-фәлән инмәһен тип, мурҙаның ҡапҡасын ябып, нығытып ҡуйҙылар. Сөнки беҙҙең балыҡсылар бер ҡатлы түгелдәр. Улар балыҡсылар кәсебенең рәтен беләләр. Был миҙгелдә мурҙаға яҙып-яңылышып ингән балыҡты көтөп тороу йүнһеҙлек булыр ине. Ундай аҙашҡан сабаҡтарҙы ғына аңдып ултырһаң, йәй үтеп китер. Иртәгә үк кәм тигәндә дүрт ҡармаҡ менән эшкә тотонорға тура киләсәк.

Ана бит һыу өҫтөндә күпме балыҡ сиртә. Малайҙар оҙаҡ итеп күлгә ҡарап торҙо. Уларҙың күҙ алдында һикереп уйнаған балыҡ тик ҡармаҡҡа ҡабыр өсөн генә ашҡына. Бәлки, улар үҙҙәренең яңы күлгә китәсәктәрен һиҙеп шулай ҡыуанышалар ҙыр. Ил гиҙеүҙе, донъя күреүҙе кем генә яратмай һуң?

— Уйнағыҙ, уйнағыҙ, — тине Ғабдулла, — уйнар көнөгөҙ алда әле.

Һәм үтә мөһим эш башҡарған малайҙар, салбарҙарын кейеп, ауыл яғына ыңғайланы.

ИРТӘ ЯМҒЫРЛЫ БУЛДЫ

Беҙҙең яҡта хатта йәйге ямғырҙар ҙа ултырып яуа. Бер башлаһа, тәүлек буйына талғын ғына шыбырлай бирә. Шуға күрә уны: «Ултырып яуа», — тиҙәр. Был саҡта инде ер, майлы бутҡа ашаған малай ирендәре кеүек йылтырап, рәхәт сигеп ята.

Төн уртаһында башлаған ямғыр иртә менән дә туҡтаманы. Ләкин барыбер дүрт өйҙәге дүрт малай ҡул ҡау-

шырып тик ултырманы. Ҡыҙыл туҡалды көтөүгә ҡыуып ҡайтҡан ыңғайҙа уҡ Ғабдулла Айҙарҙарға инде. Улар аласыҡта бынамын тигән дүрт ҡармаҡ рәтләнеләр. Иҫке ауҙы ҡырҡып, селтәр тоҡ йүнәттеләр. Ул тоҡтоң ниңә кәрәклеген балыҡсылар үҙҙәре генә белә. Унан аҙбар артына сығып консерва ҡалайына селәүсен йыйҙылар. Ер еүеш булғас, бөгөн селәүсендәр теремектәр ине. Ҡомһоҙ балыҡты улар үҙҙәре үк саҡырып торасаҡ.

— Йыға һуҡты был ямғыр, — тине Ғабдулла, уфтанып, — тапты яуыр ваҡыт!

Һәр нәмәне яҡшыға юрарға өйрәнгән Айҙар дуҫын тынысландырырға кереште:

— Яуһын әйҙә. Игендәр үҫер. Яуыр, яуыр ҙа туҡтар. Иртәгә лә көн беҙҙеке бит. Ямғырҙан һуң балыҡ һәләк шәп ҡаба ул.

— Һиңә бөтәһе лә шәп инде, үҙ башың менән уйламағас, — тип Ғабдулла үҙенең Башлыҡ икәнен хәтергә төшөрөп алды. — Ә бына ҡайҙан кәмә табырға? Кәмә! Һинең уйыңа кергәне бармы шул?

— Ә ниңә кәрәк ул? Яр башынан да тупылдап ҡабып тора.

— Юҡ инде. Селбәрә аулаған ыбыр-сыбыр малайҙар кеүек, яр башынан ҡармаҡ һалып йөрөп булмаҫ, — Ғабдулла эре генә өҫтәп тә ҡуйҙы: — Ул замандар үткән.

Ысынлап та, үҙен «балыҡсымын» тигән кеше беҙҙең Ҡылыс буйында яр башынан ҡармаҡ һалып йөрөмәҫ. Балыҡтың эреһе — күл эсендә, балыҡсының йүнлеһе күл өҫтөндә булыр.

— Ярай, табылыр әле, — тип килеште Айҙар. — Өлгөнөң олатаһы ҡалала ҡунаҡта йөрөй. Тик кәмәһен һәләк ҙур йоҙаҡ менән йоҙаҡлап киткән. Аҫҡыс яратып булһа...

Башлыҡ яңы фарманын иғлан итте:

— Кәмә табыуҙы Өлгө Яҡупҡа йөкмәтергә!

Был ваҡыт Вәзирҙәр өйөндә ошондай күңелле һөйләшеү бара ине:

— Таңдан тороп, бөгөн ҡоймаҡ иҙгәйнем. Балаларымды бер һыйлайым әле, исмаһам, — тип теҙеп китте Ҡорбанбикә еңгә. — Хәҙер дөрләтеп мейес яғып ебәрәм.

— Әсәй, — тине Насип, — ҡоймаҡтың шыма яғын майларһыңмы, әллә шаҙра яғынмы?

— Шыма яғын да, шаҙра яғын да майлармын, улым. Бар әле йүгереп кенә аласыктан ҡоро утын алып ин.

— Их, тәмле була икән! — тип Насип хатта сәпәкәй итеп алды. Ул һә тигәнсе, ҡосаҡ тултырып, утын да кертеп ташланы.

Вәзиргә лә эш ҡалғайны әле:

— Ә һин, Вәзир, йүгереп кенә Йәмлегөл инәйҙәрҙән таба алып ҡайт. Ике таба менән сыжлатып ҡына бешереп алырмын. Ҡара уны, бер аяғың унда, икенсеһе бында булһын!

Бүтән йомош булһа, Вәзир, бәлки: «Ана Насибың барһын», — тип ҡаршылашып та торор ине. Әммә был йомош ҡарыша торған йомош түгел ине. Ул атаһының оло итектәрен ҡуңалтаҡ кейеп кенә тышҡа атылды.

— Ҡойоп ямғыр яуа бит. Яланғас йөрөмә шулай әҙәм көлдөрөп, йүнһеҙ! Ана һырмаңды булһа ла элеп ал! — тип ҡысҡырып ҡалды Ҡорбанбикә еңгә.

Вәзир әйләнеп тә ҡараманы. Ағаһы өсөн яуапты Насип ҡайтарҙы:

— Тән сыныҡтыра бит ул, әсәй. Вәзир ағайым баһадир кеүек көслө буласаҡ. Бына күр ҙә тор. Анау уҫал үгеҙ бар бит әле, ана шуны сәтәкәй бармағы менән генә төртөп осорасаҡ ул.

— Бик осорор әле, һалҡын тейҙереп, анау Кашаф кеүек, ҡых-ҡых ҡыһылдай башлаһа...

— Баһадирға һалҡын теймәй ҙә ул, әсәй.

— Бына тағы икенсе бер иҫәүәне. Һиңә генә етмәгәйне тағы, тәтелдек.

Ҡорбанбикә еңгәнең бөгөн күңеле күтәренке ине. Өфөнөң үҙенән килгән күҙлекле ағай кисә уның эшен маҡтап китте:

— Тауыҡтарың йырлап тора, эшең ырап тора икән, килен. Районда алдынғылар рәтенә сығып бараһың бит, — тине.

— Яҡшы һүҙең — йән аҙығы, рәхмәт, ағай, — тип ҡыуанып ҡалды Ҡорбанбикә еңгә.

Шулай итеп, бөгөнгө ҡоймаҡтың әсеткеһе кисә үк һалынғайны. Эшенә маҡтау ишеткән әсә, ҡоймаҡ менән һыйлап, балаларын да ҡыуандырырға булды.

Мейескә ут та яғылды. Күмер ҙә төштө. Яңғыҙ таба күп тапҡырҙар сыжлап мейескә лә кереп сыҡты. Тик Вәзир генә китте лә батты.

КӘМӘНЕ ЙӨҘӨРГӘ ӨЙРӘТӘМ...

Бөтә йорттар урамға теҙелешеп ултырған. Бер Йәмлегөл инәйҙең генә ескәй өйө, көтөүҙән айырылған кәзә бәрәсе һымаҡ, күл тыҡрығының арғы башына яр ситенә сығып баҫҡан. Уның ике тәҙрәһе күл яғына ҡарап тора. Әллә бер-бер нәмәгә үпкәләп, был өй шулай ауылға арты менән әйләнгән инде? Улай тиһәң, бөтә Бөркөтлө Йәмлегөл инәйҙе аһ итеп тора. Күрше-тирә уны ашһыуҙан ҡалдырмай.

Был өйҙөң үҙ тарихы, үҙ яҙмышы бар. Өйҙөң төп хужаһы Мырҙабай атаҡлы балыҡсы ине. «Балыҡсы урыны һыу янында булырға тейеш», — тип ул нигеҙен яр буйына ҡорҙо. Бик матур ғүмер иттеләр, улдар үҫтерҙеләр. Күл өҫтө тып-тын бер көндө Йәмлегөл инәйҙең өрлөк кеүек ике улы бер юлы ошо өйҙән һуғышҡа сығып китте. Икеһенең береһе әйләнеп ҡайтманы. Һуғыш баҫылыр алдынан ғына Мырҙабай ҡарт үҙе лә үлеп китте. Донъялар именләнә башлағас, колхоз идараһы Йәмлегөл инәйҙең өйөн ауыл уртаһындағы буш урынға күсереп һалырға ҡарар сығарҙы. Ләкин ул риза булманы: «Улдарымдың нигеҙенән ҡуҙғалмайым», — тине.

Әгәр Йәмлегөл инәй теге саҡта өйөн күсереп һалырға ризалашҡан булһа, бая таба алырға сыҡҡан Вәзир шунда уҡ әйләнеп ҡайтыр ине. Ә ул китте лә олаҡты.

Вәзир ҡыштыр-ҡыштыр йүгереп, тыҡрыҡ башына килеп сыҡты. Йәмлегөл инәйҙең урам ҡапҡаһын инде үрелеп астым тигәндә генә, уның йылғыр күҙҙәре ямғыр селтәре аша күл өҫтөн ҡапшап сыҡты. Яр ситендә ҡаҙҙар күшегеп ултыра. Ә эстәрәк кемдер кәмәлә ишкәк ишеп булаша.

Бәй, был Яҡуп та баһа!

Яҡуптың кәмәлә йөрөүен Вәзир яҡындан ҡарап китмәй булдыра алманы, әлбиттә. Быға уның көсө етмәне. Ҡойоп ямғыр яуғанда Өлгө Яҡуп кәмәлә йөрөһөн дә,

һин шуны иҫәпкә алмай уҙып кит, имеш. Юҡ инде. Былдай мәрәкәләр һирәк була ул.

Вәзир күл ситенә йүгереп килде. Башта бер аҙ өндәшмәй ҡарап торҙо. Яҡуп уның килгәнен дә, торғанын да күрмәне. Үҙ мәшәҡәте үҙенә еткәйне уның. Нисек кенә ишеп ҡарамаһын, кәмә алға ла китмәй, артҡа ла сикмәй, бер урында әйләнеп тик тора. Ә яр яғынан иҫкән ел уны аҡрын-аҡрын ғына эскә ҡыуа. Вәзир сыҙаманы:

— Эй, Өлгө, ни эшләйһең унда? — тип ҡысҡырҙы.

Яҡуп ҡапыл тертләп китте. Ләкин үҙен тиҙ үк ҡулға алды:

— Олатайымдың яңы кәмәһен йөҙөргә өйрәтәм, — тип яуап ҡайтарҙы.

— Их, һин. Бер ишкәкле кәмәне ултырып ишәләрме ни? Уны аяҡ үрә баҫып ишәләр. Баҫ хәҙер үк! — тип бойорҙо Вәзир.

Яҡуп, кәмә ситенә үрелә биреп, һыуға ҡарап алды:

— Һыу тәрән бит...

— Ҡурҡма, йүнһеҙ, бында һай, һине лә буйламай.

— Мин ҡурҡмайым да ул.

Яҡуп кәмәнең нәҡ уртаһында ултыра ине. Шул ултырған еренә аяҡ үрә баҫты. Вәзир уға яңы команда бирҙе:

— Артҡа күс! Уртаға баҫып кем ишкәк ишә, ә?

Яҡуп һаҡ ҡына артҡа сигенде.

— Бына шулай, — тип хупланы уны Вәзир. — Хәҙер ишә башла. Башта уң яҡтан иш! Уң яҡтан тим бит! Уң менән һулды айырмайһыңмы ни?

Әммә был юлы Вәзир уң менән һулды үҙе бутаны. Уға ҡаршы баҫҡан Яҡуптың уң яҡтан ишеүе һул булып күренде. Быны Вәзир үҙе лә һиҙеп алды. Тик сер генә бирмәне.

— Ярай, әләйһә, белгәнеңде иш, — тигән булды.

Яҡуп ишә бирҙе, ә яр башынан команда ҡабатлана торҙо: «Аръяҡтан иш, шулай, шулай! Бирьяҡтан иш! Аръяҡтан иш!». Әйләнеп-тулғанып булһа ла, кәмә ярға яҡынлаша башланы. Ләкин был ғына Вәзирҙе ҡәнәғәтләндермәне. Ул ике ҡулын алмаш-тилмәш һелтәй биреп, бойороҡ өҫтөнә бойороҡто яуҙырып ҡына торҙо: «Ишкәгеңде батырма! Киңерәк һелтә! Киңерәк! Ниңә сәғәт

теле кеүек һелкенеп тораһың? Тура баҫып иш! Ана шулай!».

Яҡуп һәр бер бойороҡто теүәл үтәргә тырышты. Тик инде өйрәнеп бөттөм тигәндә генә, көтөлмәгән бәлә килеп сыҡты. Яҡуптың киң генә һелтәп, һул яҡтан ишеп ебәреүе булды, кәмәнең ҡырынайып китеүе булды. Тегеләй сайҡалды кәмә, былай сайҡалды. Кәмәнән былайыраҡ Яҡуп сайҡалды. Вәзир: «Ултыр!» — тип ҡысҡырырға ла өлгөрмәне, Яҡуп гөпөрт итеп һыуға ла сумды. Ҡурҡыуынан һөрәнләргә лә онотто. Ҡолап төшкәс, Яҡуп бер талай бөтөнләй күренмәй торҙо. Тулҡын өҫтөндә уның шаҡмаҡлы кепкаһы ғына тороп ҡалды. Лысма еүеш кепка бата башлауға, Яҡуптың башы ҡалҡып сыҡты.

Вәзир, рогатканан атылған таштай, күлгә ташланды. Һыуға инеү менән, уның итектәре үҙенән-үҙе төшөп ҡалды. Яҡуптың башы күренеүгә, Вәзир кәмә эргәһенә барып та етте. Был урында күл ысынлап та тәрән түгел. Шулай ҙа Яҡуптың ҡолағына етерлек ине. Йөҙә белмәгән кешене батырырға күп кәрәкме ни?

Вәзир, бешмәгән ишкәксенең яғаһынан эләктереп, ярға табан һөйрәне. Бер нисә аҙымдан һуң уны баҫтырып ҡуйҙы. Яҡуптың йөҙө борған сепрәк төҫлө ап-аҡ ине.

— Күл һыуы тәмлеме? — тип шаяртмаҡсы булды Вәзир. Тегеһе баш ҡына сайҡаны. Күрәһең, бик үк тәмле түгелдер.

— Бар, сыға тор, — тине Вәзир. — Мин сумып, кепкаңды эҙләйем.

Шунда ғына Яҡуп телгә килде.

— Кәрәкмәй, — тине ул, ҡалтырана-ҡалтырана, — баш һау булһа, кәпәс табылыр әле.

Кепкаһы — кепка. Ә бына кәмә менән ишкәк икеһе ике ерҙә, тулҡын өҫтөндә аҡрын ғына бәүелгән булып, эскә табан ыңғайларға самалай түгелме? Шулай шул. Юҡ инде. Быңдай баш-баштаҡлыҡҡа юл ҡуйып булмай. Вәзир, ҡолас һалып, яңынан күлгә йөҙөп инде. Башта ул ишкәкте барып тотто. Унан, кәмәнең ҡойроғона сығып, бер ынтылыуҙа менеп тә баҫты. Яҡуптың хәл мөшкөлөрәк булһа ла, сая иптәшенә һоҡланмай булдыра алманы ул. «Их, шулай йөҙә белһәң ине», — тип эсенән көнләшеп ҡуйҙы.

Кәмә мороно ярға төртөлгәс тә, Вәзир һикереп төштө. Күл ситендә ҡуныстары ғына күренеп ятҡан итектәрҙе табып, уларҙың эсендәге һыуҙы түкте. «Атайымдың итектәре йыуылды. Һәйбәт булып ҡалды әле, — тип, был мәшәҡәттәргә яҡшы һөҙөмтә лә сығарып ҡуйҙы ул. — Былай булғас, ялан аяҡ ҡына ҡайтырға тура килә инде».

Яҡуп баҫҡан урынында ҡуҙғалмай ҡатып тик торҙо.

— Һинән рәт сығасаҡ, — тип йыуатты уны Вәзир. — Тик әлегә таҫыл яғы ғына самалыраҡ. Ә рәт сығасаҡ.

— Ысынмы?

— «Ысынмы?», «Ысынмы?», имеш... Мин ҡасан буштым һөйләгәнем бар?

— Юҡ та.

— Ә хәҙер ни эшләйбеҙ?

— Әлләсе. Олатайымдың кәмәһен урынына илтеп ҡуяйыҡ.

Малайҙар кәмәне яңынан һыуға этәреп төшөрҙөләр.

— Ал ишкәкте, түлке ашыҡмай иш! — тине оҫта үҙенең өйрәнсегенә.

Күл ситенән генә Яҡуп кәмәне үҙ урынына алып китте. Вәзир уға үҙ кәңәштәрен һаман бирә барҙы. Бер сирҡаныс алған Яҡуп үҙе лә был юлы ишкәк менән ҡыйыуыраҡ эш итте. Утыҙ-ҡырҡ аҙым араны үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Кәмәнең сылбырын бағанаға урап, йоҙаҡ элеп торғанда ғына, тыҡрыҡ осонан Яҡуптың әсәһе сәрелдәп килеп сыҡты.

— Утҡа ла һала, һыуға ла батыра бит был бала мине! Әлеге Вәзирҙең эшелер инде! Көшөл кеүек булғанһың бит, балаҡайым! Бөгөн үк кәнсәләргә барып башырмаһаммы — исемем Гөлйемеш булмаһын. Ҡайҙа иттең уның кәпәсен? Ниңә шул балаға ҡаныҡтың һин! Торғаны менән бер юлбаҫар үҫә бит!

Гөлйемеш апай Яҡуптың беләгенән тотмаҡсы итте. Ләкин Яҡуп ситкә тайшанды.

— Әгәр, әсәй, Вәзиргә тағы ла тел тейҙерһәң, хәҙер үк ошо кәмәгә ултырам да күл эсенә инәм дә китәм. Бер инһәм, мәңге сығасаҡ башым юҡ. Бел дә тор.

Һүҙһеҙ генә башын эйеп торған Вәзиргә зәһәрле ҡараш ташлап алды ла Гөлйемеш апай һүҙен ҡапыл икенсегә борҙо:

— Ярай, ярай, тел тейҙермәм; әйҙә, һинеңсә булһын, — тип улын етәкләргә ынтылды.

— Етәкләмә мине, — тип ҡарышты Яҡуп. — Етәкләмәһәң дә ҡайтырмын... Тик Вәзиргә тел тейҙермәҫтән булһын. Юғиһә...

— Ярай, ярай, бөттө тим бит инде.

Әсә менән улы ҡайтыр яҡҡа китте. Ике итеген ике ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Вәзир күл ситендә баҫып ҡалды. Унда таба ҡайғыһы ла, ҡоймаҡ шатлығы ла юҡ ине инде.

ЯМҒЫРҘАН ҺУҢ

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. Китмәҫкә килгәндәй түшәлеп торған болоттар әллә ни арала таралып та өлгөрҙө. Ямғырҙа йыуылып таҙарған асыҡ зәңгәр күккә ҡояш яңынан хужа булды. Тик ҡайҙалыр бейектә аҙашып ҡалған ваҡ тамсылар ғына һирәкһаяҡ тамғылап ҡуя. Эре тамсылар ергә төшкән саҡта, улар, уйынға мауығып, һауала тороп ҡалғандар, күрәһең. Ни тиһәң дә, бәләкәстәр шул. Уйынға бер керешеп китһәләр, донъяларын оноталар.

Ул кескәй тамсылар шундай йылы, яғымлы булалар, ҡулыңды һуҙып торһаң, усыңа һикереп иркәләнәләр, шаяралар. Усыңды йомһаң, бармаҡ араларынан сығып ҡасалар. Ҡалай шаяндар!

— Эһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа, эләктеңме бармаҡҡа! — ти Гөлнур, усына тамған тамсыны йомарлап. — Үҙе ҡалай йылыҡай... Унда, ҡояш эргәһендә, йылылыр шул. — Ул яңынан усын аса ла бүтән тамсыны саҡыра. — Йә, там инде, тағы бер генә там!

Ҡыҙҙың кескәй усына тамсы тағы тама. Ул шарҡылдап көлөп ебәрә.

Гөлнур ҡойма буйындағы йыуан бүрәнәнең бер башына атланған да ямғыр тамсылары менән һөйләшә. Ә бүрәнәнең арғы осонда Айҙар менән Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыра. Малайҙарҙың кәйефе һүрән

күренә. Эше ҡалған кешеләр шундайыраҡ була инде. Улар бөтә урамды бер итеп шарлауыҡ эсендә сабышып уйнаусы ваҡ малайҙарҙың сырсыуына ла, Гөлнурҙың өҙләкһеҙ һайрауына ла иғтибар итмәйҙәр. Үҙ мәшәҡәттәре үҙҙәренә еткән.

— Был Өлгөнән дә уңманыҡ, — тине Айҙар, ниндәйҙер фекерҙәренә йомғаҡ яһап. — Кәрәкмәгәндә гел эргәлә урала, кәрәк саҡта күҙгә лә күренмәй, мәмәй.

Һүҙгә ҡушылыу урынына Ғабдулла теш араһынан төкөрөп кенә ҡуйҙы. Был инде асыуҙың сиген аңлата ине.

Бер аҙҙан Айҙар тағы һүҙ ҡуҙғатты:

— Йә ул шөрләгәндер әле... Ә ҡарттың кәмәһе бер тигән. Тамсы ла һыу кермәй.

Малайҙарға Яҡуптан бигерәк кәмә кәрәк ине.

— Мине Башлыҡ тип һанайһыңмы? — тине Ғабдулла ҡапыл ғына.

— Һанайым.

— Һанаһаң, бар, хәҙер үк Өлгөнө бында саҡырып килтер.

— Әсәһе мине күреп ҡалһа, ғүмерҙә ебәрәсәк башы юҡ. Хәҙер сәрелдәргә тотонор.

Нәҡ шул саҡ Айҙарҙың ҡолағына Гөлнур тауышы сағылып ҡалды. Ул инде аҡ таш эргәһендә үҫеп ултырған үлән ҡыяғы менән һөйләшә ине.

Айҙар һеңлеһен үҙ эргәһенә саҡырып алды:

— Гөлнур һылыуым, — тине ул, ярамһаҡланып, — һиңә турғай балаһы кәрәкме?

— Кәрәк тә... Һин бит тота белмәйһең.

— Беләм. Бына күр ҙә тор. Һинең тәтәй күлдәгеңде ҡотлап, бер юлы икене тотоп бирермен, йәме.

Йә, тип Гөлнур үҙ юлына китмәксе итте. Уның баяғы үлән ҡыяғы менән һөйләшер һүҙе бөтмәгәйне әле. Ләкин ағаһы уны тиҙ генә ҡотҡарманы.

— Ул турғай балаларына мин ситлек тә яһап бирермен, зәңгәргә буяп. Йәме.

— Йә, — тип баш ҡаҡты Гөлнур. — Мин уларға ем һибермен. Эйеме?

— Һиберһең. Шуның өсөн һин дә минең йомошомдо тыңла. Һин үҫкән бит инде.

Был юлы «үҫкән» булғыһы килмәһә лә, Гөлнур ҡаршы өндәшмәне. Сөнки уға турғай балаһы бик кәрәк ине. Әлфиә исемле ҡыҙҙың турғайы булһын да, Гөлнурҙыҡы булмаһын, имеш. Ул, теләһә нindәй йомошто тыңларға әҙер икәнен белдереп, ағаһының күҙҙәренә ҡараны.

— Бар, һылыуым, тиҙ генә Яҡупты саҡырып кил, — тине Айҙар. — Тик ҡара уны, әсәһе күреп ҡалмаһын. Әрләшә ул.

Ялан аяҡтары менән бысраҡты сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптар яғына ҡарай йүгерҙе. Барып еткәс тә ул дөбөрләтеп ҡапҡанан килеп инмәне. Ҡойма ярығынан башта йорт алдын күҙәтеп сыҡты. Уның ҡарашы утынлыҡта нимәлер юныш ултырған Яҡупҡа туҡталды. Тегеһе үҙ эше менән шул саҡлы мауыҡҡан, хатта күтәрелеп тә ҡарамай. Ҡысҡырһаң, әсәһенең ишетеүе бар. Күп уйлапнитеп тормай, Гөлнур йоҙроҡ ҙурлығы таш алып ҡойма аша ырғытты. Таш сәп итеп батҡаҡҡа килеп төштө. Яҡуп һиҫкәнеп китте. Шунда уҡ ҡойма ярығынан кескәй генә бармаҡ килеп сыҡты. Яҡуп, әлбиттә, алыҫтан бармаҡты күрмәне. Шулай ҙа ул, нимәлер һиҙенеп, ҡойма эргәһенә килде. Баяғы бармаҡ ҡытыр-ҡытыр ҡойманы тырнарға кереште.

— Кем унда? — тип бышылданы Яҡуп. Урам яҡтан Гөлнур сипылдап яуап ҡайтарҙы:

— Мин. Айҙар ағайым менән Ғабдулла һине саҡырҙы. Тиҙ үк килһен, тинеләр. Был Өлгөнән дә уңманыҡ, тип асыуланырҙар, юғиһә. Улар беҙҙең бүрәнә өҫтөндә ултыра.

— Ярар, күп телеңә һалынма, бар, ысҡын!

— Ысҡынырмын шул!

Әммә Гөлнур ҡайтыр яҡҡа «ысҡынманы». Ҡапыл уның иҫенә тегелеп ятҡан күлдәге килеп төштө. Яңы күлдәктең хәлен белергә тип, ул Йәмлиха апайҙарына тороп йүгерҙе. Уны бит бер юлы ике шатлыҡ көтә: тәтәй күлдәк тә, күлдәктең һөйөнсөһө лә!

Яҡуп иптәштәрен оҙаҡ көттөрмәне. Картуф баҡсаһы аша башта ул күл яғына сыҡты, унан тыҡрыҡ буйлап урамға менде. Урауыраҡ булһа ла, был юл ҡурҡынысһыҙ ине. Сөнки шығырлыҡ урам ҡапҡаһы һәр ингән-сыҡҡанды Гөлйемеш апайға ошаҡлап ҡына тора.

Ғабдулла менән Айҙарҙың Яҡупты ике көн күргәндәре юҡ ине. Был арала Яҡуп бер аҙ тартыла төшкән. Маңлайы ҡара көйөп күгәргән, сикәләре, яңаҡтары ҡутырлап бөткән. Ә шулай ҙа ул элеккегә ҡарағанда нисектер үҫеп, турайып киткән һымаҡ күренә.

— Кем үҙеңде шулай килештереп биҙәне? — тип ҡаршылаңы уны Башлыҡ.

— Үҙем.

— Шыттырма!

— Икмәк өҫтө. Мин ҡаянан һикерергә өйрәндем. Үҙең ҡуштың да. Минең өлгөлөк бөттө инде. Тик йөҙә генә белмәйем.

— Бер-ике күнәк күл һыуы эсһәң, өйрәнерһең әле.

— Өйрәнермен дә ул... — иртән уртлаған күл һыуына уның әле лә күңеле болғана ине.

Был ике көн эсендә нимәләр эшләгәнен Яҡуп берәмберәм һөйләп бирмәксе ине лә, Башлыҡ үҙе һорамағас, сабыр итергә булды.

— Олатайың ҡасан ҡайта? — тип һораны Айҙар.

— Олатай ни ул тиҙ генә ҡайтмаҫ әле. Ә ниңә?

— Уның кәмә аҫҡысы ҡайҙа?

— Әллә.

— Һин күп әлләләмә әле, — тине Башлыҡ ҡырҡа ғына, — иртәгә таңдан күлгә төшөргә кәрәк. Яҡтырыр-яҡтырмаҫ Йәмлегөл инәйҙең мунсаһы артында йыйылышабыҙ. Кәмәң кистән үк әҙер булһын.

Иптәштәренең йомошо төшөүгә Яҡуп сиктән тыш шатланды. Быға тиклем гел ситкә тибәрелеп йөрөгән кешегә «Өс таған»дың Башлығы үҙе эш йөкмәтһен дә, шатланырһыңмы, юҡмы? Яҡуптың аҡһыл йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, күҙҙәрендә быға са күренмәгән яҡты нур балҡыны. Тиңдәштәрең араһында үҙеңде тиң һиҙеү бик рәхәт була икән.

— Кәмә ни ул әҙер! — Яҡуп ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Хыт хәҙер үк ултыр ҙа сыҡ та кит.

— Әҙер, имеш, унда бейәләй дәүмәле йоҙаҡ эленеп тора.

— Дәү булһа ла, алдаҡ йоҙаҡ ул. Заһиттарҙың алабайы һымаҡ, өрмәй ҙә, тешләмәй ҙә. Олатайым уны былай ғына элеп ҡуя.

— Олатайың аҙаҡтан әрләмәҫме һуң? — тип Айҙар арт яҡты ҡайғыртып ҡуйҙы.

— Әрләмәҫ. Олатайым үҙемдеке әле.

«Өс таған»дың өс тәрәүе шундай мөһим нәмә хаҡында һөйләшеп ултырғанда, ике ҡулын кеҫәһенә тығып, урамдың арьяғынан Вәзир үтеп китте. Үҙе ниндәйҙер көйгә һыҙғырған була. Йәнәһе, уның быларға иҫе лә китмәй. Йәнәһе, уның эшләнәһе эше эшләнгән, доньяһы тигеҙ, урамға ла былай ғына, тән сыныҡтырып йөрөү өсөн генә сыҡҡан.

Ары үтте Вәзир, бире үтте. Ләкин уға әйләнеп ҡараусы ла булманы. Дөрөҫөрәге, әйләнеп ҡаранылар, тик сер бирмәнеләр. Бүрәнә өҫтөндәгеләрҙең береһе лә Вәзир исемен телгә алып һүҙ башларға баҙнат итмәне. Әйтерһең, урамда уларҙың элекке дуҫы түгел, ә инер ҡапҡаһын тапмай аҙашҡан һарыҡ бәрәсе йөрөй ине. Юҡ, аҙашҡан бәрәс булһа, уны һәр ҡайһыһы ҡапҡа асып индерер ине.

Юғары остан урап ҡайтҡанда, Вәзир урамдың был яғына сыҡты. «Өс таған»ға яҡынлаша башлағас, һыҙғырыуҙан туҡтаны, кеҫәләренән ҡулдарын алды, мөмкин тиклем меҫкенерәк ҡиәфәткә инергә тырышты. Ә меҫкен булыу уға шул тиклем ауыр ине. Үҙ-үҙен ҡыҙғаныуҙан хатта күңеле тулып китте. Әммә, түбәнһенеп булһа ла, уға иптәштәре менән яңынан аралашырға кәрәк ине. Яңғыҙлыҡҡа сыҙай торғандарҙан түгел ине Вәзир. Малайҙар тураһына еткәс, ул, бөтә көсөн йыйып, һүҙ ҡушты:

— Ғабдулла, — тине ул үҙәк өҙгөс ҡыҙғаныс тауыш менән, — теге бәкене мин шунда уҡ... ышанмаһаң, Шәрифулланың үҙенән барып һора. Бынан һуң кеше әйберенә тейһәм ҡулым ҡороһон. — Уға иң тәүҙә Ғабдулланың күңелен иретергә кәрәк ине. Айҙары иһә Башлыҡ һүҙенән сығасаҡ түгел.

Ғабдулла, тупаҫ ҡына яуап ҡайтарырға әҙерләнеп, Вәзирҙең йөҙөнә күтәрелеп ҡараны. Ләкин әйтер һүҙен әйтә алманы. Уның алдында күҙҙәрен сылт-сылт йомоп торған Вәзирҙең бөтә ҡиәфәте, ҡарашы Башлыҡтың барлыҡ асыуҙарын берсә таратып ебәрҙе. Уның беләктәренә, күкрәктәренә ҡаҙ тәне ҡалҡҡан, өҫкө ирене дерр-дерр ҡалтырай, ҡорһағында буйҙан-буй сыйылған эҙ ята, —

ул эҙ иртән күлдә, Яҡуптың кәмәһенә үрмәләп менгән саҡта һалынғайны.

Ғабдуллала ҡыҙғаныу тойғоһо уянды тиеү генә аҙ булыр. Малайҙың йөрәген нимәлер, әрнетерлек итеп, семтеп алды. Уның күҙ ҡарашына әлеге Вәзир түгел, элекке дуҫ, бәләкәстән бергә үҫкән Вәзир килеп баҫты. Шундай саҡта бөтәһе лә бер юлы хәтергә төшә бит ул... Әле мәктәпкә лә йөрөмәйҙәр ине, буғай. Бер саҡ урманда кәпәс сөйөп уйнағанда, Ғабдулланың кепкаһы иң өҫтәге ҡоро ботаҡҡа эленеп ҡалды. Күпме таяҡ, таш ырғыттылар улар, ләкин кепканы бәреп төшөрә алманылар. Ә ағас башына үрмәләргә Вәзирҙән башҡа берәүҙең дә һоло етмәне. Кепканы ул менеп алды. Төшкән саҡта яҙа баҫып, үҙе лә ҡолап төштө. Хатта шыңшып та ҡараманы ул. «Йөрөмәгән — йығылмаҫ», — тип кенә ҡуйҙы.

Ғабдулла менән Вәзир бергәләп күпме балыҡҡа йөрөнөләр. Ғабдулланың балыҡтан бәхете гел самалы булды. Вәзир ике-өстө ҡаптырғанда, ул берҙе лә эләктерә алмай йонсоно. Шулай ҙа Вәзир, кис ҡайтҡанда, балыҡты, эреһен эрегә, ваҡын ваҡҡа айырып, һәр ваҡыт ҡап уртаға бүлде.

Ә былтыр шундай хәл булды. Ҡайһылыр бер яманы күл тыҡрығындағы тәрән ҡоҙоҡҡа бесәй балаһы ташлап киткән. Бесәй һыуға батмаған, ә иң түбәндә сығып торған бер бураға менеп ултырған. Төшкә тиклем ҡысҡырҙы бисара. Дилбегәгә күнәк бәйләп төшөрөп ҡаранылар. Бесәй балаһының күнәккә күсеп ултырырға башы етмәне. Ололар ҙа, малайҙар ҙа әллә ни саҡлы булаштылар, тик эш сығара алманылар. Шул саҡ, оҙон арҡан һөйрәп Вәзир килеп етте. Бер осон бағанаға бәйләне лә, арҡанға тотоноп, тәрән ҡараңғы ҡоҙоҡҡа төшөп тә китте. Башта теге күнәккә ултыртып бесәй балаһын мендереп ебәрҙе, унан үҙе менде.

Бына шул малай хәҙер, ғәйепле башын түбән эйеп, иптәштәренән һүҙһеҙ генә ғәфү үтенә. Ғабдулла ла, Айҙар ҙа уны ғәфү итергә әҙер ине. Әммә «Өс таған»дың намыҫына тап төшөргән кешегә ҡарата тиҙ үк сиселеп китеүҙе Башлыҡ урынһыҙ тапты. «Быңдай саҡта нескә тойғоло булырға ярамай», — тип уйланы ул, шуға күрә лә Ғабдулла ғәмһеҙ, һалҡын тауыш менән һорау бирҙе:

— Нимә кәрәк һиңә?
— Кәрәкмәй.
— Кәрәкмәгәс, ниңә был тирәлә уралаһың?
— Һеҙ кәрәк миңә. — Вәзирҙең хатта тауышы ҡыҫылды.

Вәзирҙе йәлләп, Яҡуп саҡ-саҡ илап ебәрмәне. Егетлектә, саялыҡта һәр саҡ өлгө булған малайҙың шундай хәлгә төшөүе уның башына һыймай ине. Бөтә урамды дер һелкетеп торған Вәзиргә ни булды икән? Иптәштәре ниңә уны ситкә тибәрәләр? Дуҫына хөрмәт йөҙөнән ул кеҫәһендәге ҡыҙыл һаплы рогатканы ҡапшап ҡуйҙы.

— Теләһәгеҙ әрләгеҙ, теләһәгеҙ туҡмағыҙ, — тине Вәзир, — тик бер һүҙемде генә тыңлағыҙ, малайҙар.
— Йә, һал хәбәреңде. Юғиһә, беҙҙең ваҡыт юҡ.
— Беҙҙең аҙбарҙа бер ирмәк нәмә бар. Ирмәк тип ни инде, әллә ни ирмәк тә түгел. Әйҙәгеҙ шуны барып ҡарайбыҙ.
— Йә берәй хәйләлер әле, — тип шик белдерҙе Айҙар.
— Хәйлә түгел ул.
— Ә нимә?
— Барғас, күрерһегеҙ.

«Өс таған»дың өс терәүе бер-береһенә ҡарашып алды. Тәүге һүҙҙе, әлбиттә, Башлыҡ әйтергә тейеш ине. Һәм ул әйтте лә:

— Барһаҡ та, һине һынар өсөн генә барабыҙ. Ҡара уны, хәйлә-мәйлә ҡороп маташһаң, аҙаҡ үпкәләштән булмаһын... — Башлыҡ үҙенең тос йоҙроғон күрһәтеп алды.
— Әйтәм бит, теләһәгеҙ аҫырһығыҙ, теләһәгеҙ киҫерһегеҙ.

Ғабдулла «Өс таған»ға команда бирҙе:

— Әйҙәгеҙ, ҡарап ҡарайыҡ әле.

Яҡупты саҡырыу Вәзирҙең самаһына тура килмәй ине. Унан да бигерәк, был урында Өлгө бөтөнләй артыҡ ине. Әҙәм араһына керергә уға иртәрәк әле.

— Ә һиңә, Яҡуп, эйәрмәһәң дә була, — тине ул.

Яҡуп күҙҙәрен мөлдөрәтеп Ғабдуллаға ҡараны. Уның өсөн яуапты Башлыҡ үҙе бирҙе:

— Эйәрһен! Ул беҙҙең өсөнсө таған.

Вәзирҙең йөрәге жыу итеп китте. Әммә сер бирмәне.

— Барһын әләйһә, — тигән булды. Шунда уҡ уйында яңы иҫәп сығарып алды: «Ғабдулла менән Айҙарға өсәр перәник тейһә, Яҡуп менән үҙемә берәр ҙә еткән. Әгәр улай тура килмәй икән, кеше башына икешәр сығасаҡ...»

ВӘЗИРҘЕҢ ИКЕНСЕ ҺӘЛӘКӘТЕ

Аҙбарға килеп ингәс, Вәзир үҙен хужа итеп һиҙҙе. Уның тауышы ла хәҙер көрөрәк яңғырай башланы. Ни тиһәң дә, бөгөн ул табын хужаһы буласаҡ.

— Малайҙар, — тине ул тантаналы тауыш менән, — һеҙҙең өсөн бәләкәс кенә һыйым бар. Аҙ булһа ла күп итеп ҡабул итегеҙ. — Был һүҙҙәрҙе табын йыйған саҡта уның атаһы йыш ҡына әйтә торғайны.

«Ниндәй һый булыр икән?» — тип малайҙарҙың күҙҙәре йылтырай башланы. Тәмле тамаҡ Яҡуп хатта ирендәрен сәпелдәтеп, һеләгәйен йотоп ҡуйҙы.

— Һый тип ни, әллә ниндәй һый ҙа түгел инде, — ҡыуанысынан Вәзир бер туҡтауһыҙ тәтелдәне. — Ҡана, Яҡуп, фуражкаңды биреп торсо.

Яҡуптың башында атаһының иҫке фуражкаһы ине.

Вәзир, фуражканы алып, аҙбарҙың ҡараңғы мөйөшөнә китте.Ситән араһына ҡулын тығып, ул һәрмәнергә кереште. Ҡалған алты күҙ уны күҙәтеп торҙо.

— Әһә, эләктегеҙме, тәмлекәйҙәр! — тип ул ситән араһындағы перәниктәрҙе берәм-берәм фуражкаға тултырҙы. — Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ, Ғабдулла менән Айҙарға өсәр перәник, ҡалғандарға — берәр, бөтәһенә лә тигеҙ.

Әлбиттә, һый малайҙар көткәндән артығыраҡ ине. Иҫ итмәгәндә перәник менән һыйланыу һирәк эләгә ул. Яҡуп йәнә бер тапҡыр иренен сәпелдәтеп ҡуйҙы. Бүтәндәрҙең дә тамаҡ төптәре ҡытыҡланып китте.

Вәзир фуражканың ике ситенән бөрөп тотоп алды. Ҡунаҡтарҙы аҙбарҙа һыйлауҙы ул яҡшыһынманы. Аҙбарҙа көйшәп ултырырға улар быҙау түгел дә.

— Әйҙәгеҙ, аласыҡ артына барабыҙ, унда һәләк аулаҡ, — тип саҡырҙы ул ҡунаҡтарын. Ҡунаҡтар хужаның һүҙен йыҡманылар.

Аласыҡ артында яҫы ҙур таш ята. Табынды шунда ҡороп ебәргәндә, бик йәтеш буласаҡ. Бына хәҙер хужа шул таш өҫтөнә перәниктәрҙе таратып ташлар. Ҡунаҡтар ҡыҫтатҡан булыр. Вәзир уларҙы өҙлөкһөҙ ҡыҫтап торор, Яҡупты, бәлки, артыҡ ҡыҫтамаҫ та.

Ҡунаҡ һыйлауҙан да күңеллерәк нәмә бармы икән был донъяла?

Аласыҡ артына сыҡҡас, Вәзир фуражкалағы мөлкәтте таш өҫтөнә сәсеп ебәрҙе лә бушаған «һауыт»ты Яҡупҡа ырғытты. Әммә ҡунаҡтарға ни булды? Әле генә йылмайған ирендәр ҡапыл ғына турһайҙы, йылтырап торған күҙҙәр тоноп китте. Ни булды был ҡунаҡтарға?

Таш өҫтөндәге һигеҙ перәниктең береһе генә лә бөтөн түгел ине. Ҡайһыһының башы, ҡайһыһының ҡырыйы кимерелгән, бер нисәһе үтәнән-үтә тишелгән. Күрәһең, перәникте малайҙар ғына түгел, сысҡандар ҙа ярата икән. Ике көн эсендә улар байтаҡ хөрмәт күрергә өлгөргәндәр.

— Сысҡандан ҡалған һыйынды үҙең генә һоғон инде, — тине Башлыҡ.

Вәзир тамам ҡойолоп төштө. Кеше башына бәлә килеүен килер ҙә, был тиклем үк килмәҫ инде.

— Кисә генә ҡайтарып ҡуйғайным да, — тип мығырланы ул, — ышанмаһағыҙ ана...

Яҡуп эште төҙәтергә тырышып ҡараны:

— Сысҡандан ҡалғанды ашаһаң, теш ныҡ була икән ул, — тигән булды.

Айҙар уны шып туҡтатты:

— Беҙҙең тештәр былай ҙа ныҡ. Һинең кеүек беҙ шәкәр кимереп үҫмәгән.

Шул тиклем ымһынып ҡал да, ғәрлегең килерме, юҡмы? Малайҙарҙың ғәрлеге эстәренә һыймай ине.

— Рәхмәт, һыйланғандан да артыҡ булды, — тине Ғабдулла. «Өс таған»ға шунда уҡ бойороҡ бирҙе:

— Киттек!

Ҡунаҡтар яй ғына китеп барҙылар. Вәзир тәүҙә таш өҫтөндәге перәниктәргә бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Унан тегеләрҙе берәм-берәм картуф баҡсаһына тондора башланы. Һелтәгән һайын әсенеп бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы: «Мә һиңә!», «Мә һиңә!», «Мә һиңә!». Был һүҙҙәрҙе

ул сыҡҡандарға ҡаратамы, перәниктәргә ҡаратамы, иптәштәренә ҡаратамы, үҙенә ҡаратамы әйтте, — уныһы билдәһеҙ ине. Һуңғы перәникте ырғытҡас, ул лап итеп таш өҫтөнә ултырҙы ла быуылып иларға кереште. Күптән инде илау-һыҡтауҙың ни икәнен белмәгән Вәзир оҙаҡ, бик оҙаҡ үкһене. Күҙҙәрендә йәше бөткәнсе иланы ул.

ҠАПТЫҢМЫ, БАЛЫҠ ҠАРАҒЫ!

Көн тыуғанда беҙҙең Ҡылыс күлен күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр шул. Бер генә тапҡыр күрһәгеҙ ҙә, хайран ҡалыр инегеҙ. Мин был хаҡта маҡтаныр өсөн һүҙ ҡуҙғатмайым. Ҡылысты ла, уның таңдарын да беҙ яһамаған, уларҙы тәбиғәт шулай яратҡан. Беҙҙең маҡтаныр урыныбыҙ юҡ. Мин тик шуның өсөн генә әйтәм: ошо матурлыҡтан һеҙгә лә өлөш сығарғы килә.

Яңы көндөң тәүге нурҙары башта Ҡылыс арьяғындағы бейек текә ҡаяға килеп бәрелә. Шунан һуң, сәселеп, тирә-яҡҡа тарала. Был ваҡыт әле күл, ап-аҡ томандан һырылған йомшаҡ юрғанын баштан-аяҡ ябынып, йоҡлап ята. Таң яҡтыһы ғына уны рәхәт йоҡоһонан уята алмай, киреһенсә, күл юрғанын тағы ла нығыраҡ бөркәнә төшә. Беҙҙең тау яғында йәйге иртәләр һалҡынса була шул. Тик ҡояш үҙе күренгәс кенә, Ҡылыс, ҡынынан һурып алынған ҡылыс төҫлө, ялтырай башлай.

— Оҙаҡ йоҡлайһың, Ҡылыс, — тип шелтәләй уны ҡояш. — Ниндәй төштәр күрҙең?

— Замандар имен ваҡытта ҡылыс йоҡларға тейеш, — тип шаяра күл. — Яҡшы төштәр күрҙем, ҡояш. Рәхмәт!

Ҡояш уға башҡаса һүҙ ҡушып тормай, үҙ юлына китә. Ерҙәге һәр нәмә менән оҙон-оҙаҡ әңгәмәләшеп торһа, бер көн эсендә күкте нисек урап сыҡһын ти ул!

Был мәлдә күл өҫтө тигеҙ, ғәжәп яғымлы була. Шул тигеҙлектә ялан аяҡ йүгереп уйнағы, һикерге килә. Яңы көн тыуғанда, яңы шатлыҡтар, яңы өмөттәр ҙә тыуа бит. Тик томандар ғына бойоҡ, сөнки уларҙың ғүмерҙәре ҡыҫҡа. Шулай ҙа, яр ситендәге ҡамыштарға, тал ҡыуаҡтарына, томбойоҡ япраҡтарына уралып булһа ла, күл эргәһендә ҡалырға тырышалар улар. Әммә юҡҡа. Ҡояш менән томан һыйышып оҙаҡ йәшәй алмай. Быны һәр кем белә.

Бөтә ауылды бер итеп әтәстәр ҡысҡырғанда, өс малай кәмәгә ултырҙы. Ғабдулла менән Айҙар бесәнлектә бергә йоҡланылар. Уларҙың торғанын да, киткәнен дә күреүсе булманы. Ләкин Яҡуп тауыш-тынһыҙ ғына ысҡына алманы. Ул таң һыҙыла башлағас та уянғайны. Байтаҡ ара ҡуҙғалмай ятты. Унан һуң шым ғына кейенергә кереште. Салбарының бер балағын кейгәс тә, әсәһе уянды.

— Ниңә иртә уяндың, улым? Әллә яман төш күрҙеңме?

— Күрмәнем. Беҙ бөгөн малайҙар менән балыҡҡа барабыҙ.

— Балыҡҡа? Күлгәме? — Гөлйемеш апай һикереп үк торҙо.

— Балыҡ күлдә була инде ул, әсәй.

— Ауыҙыңды ла асма. Шул ғына етмәгәйне тағы.

— Мин иптәштәремә вәғәҙә бирҙем, әсәй. Вәғәҙәне боҙорға ярамай.

— Ярамағаны бар, ярағаны бар. Аяғыңды ла атламайһың. Бына шул.

— Мин кемдән кәм, әсәй? Бүтәндәргә яраған ниңә бер миңә генә ярамай ул?

— Бүтәндәрҙә эшем юҡ. Минең балам берәү генә.

— Беләһеңме, әсәй, әгәр иптәштәрем менән бергә ебәрмәһәң, олатайымдың кәмәһенә ултырам да бер үҙем күлгә инәм дә китәм. Бына күр ҙә тор. Гел генә мине тыйып тора алмаҫһың, мин хәҙер ҙур инде.

Гөлйемеш апайҙың күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Ни булды был балаға? Ниндәй генә зәхмәттәр ҡағылды икән? Өй тауығы кеүек йыуаш малай ике-өс көн эсендә бөтөнләй ҡулдан ысҡынды. «Әгәр уны хәҙер ебәрмәһәң, барыбер һүҙен һүҙ итер, тәки кәмәгә ултырып сығып китер», — тип уйланы әсә.

— Иптәштәрең кем һуң? Шул Вәзирҙәр әле, — тине ул, бер талай һүҙһеҙ торғас.

— Ғабдулла ла Айҙар! — тип ғорурланып яуап ҡайтарҙы Яҡуп.

Байтаҡ һатыулашҡандан һуң, әсәй илай-һыҡтай ғына риза булды. Был Яҡуптың ҙур еңеүе ине.

— Алдыңды-артыңды ҡарап йөрөй күр инде, балам, — тип ҡалды әсә.

Бына хәҙер Яҡуп, ишкәк тотоп, кәмәнең артына баҫты. Ғабдулла уртаға, Айҙар осҡа ултырҙы. Ишкәксе арыу, һолло ғына ишә башланы. Кәмә яр буйлап яй ғына алға шыуҙы, бер аҙҙан ул бөтөнләй томан эсенә инеп юғалды.

Ҡылыстың арғы башына, мурҙа тураһындағы ҡамышлыҡҡа еткәс, малайҙар, кәмәне туҡтатып, ҡармаҡ һала башланылар. Был ваҡытта инде ҡояш сығып, күл өҫтөндәге томандарҙы ҡыуып ебәргәйне.

Тәүҙә балыҡ арыу сиртте. Айҙарға матур ғына һигеҙ сабаҡ, ике алабуға, бер ҡыҙылғанат эләкте. Ғабдулла ла, вағыраҡ булһа ла, алты-ете баш ҡаптырҙы. Яҡуп ҡына берҙе лә ала алманы. Сөнки ул, балыҡ емде ҡымтығас та, ҡармағын кинәт тарта.

Эләккән һәр балыҡ кәмә ситенән һыуға төшөрөлгән селтәр тоҡҡа һалына барҙы. Улар, яңынан күлгә ҡайттыҡ, тип рәхәтләнеп йөҙәләр, һикерешәләр.

Балыҡ ҡаптырғанда шауларға ярамай. Ләкин ҡармаҡ ташлағанда тылсымлы һүҙҙәр әйтеү беҙҙең яҡта йолаға кергән. Ул шаулауға ла иҫәпләнмәй.

— Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр, төкөрөп һалдым, һикереп сыҡ, бер сабағын алып сыҡ, — тип һәр юлы ҡармағын сихырлай Ғабдулла.

Теге ҡыҙылғанат эләккәс, Айҙар башта уның ауыҙына төкөрҙө, шунан таҡмаҡларға тотондо.

— Ҡыҙылғанат, Ғиҙелбанат, әсәйеңде саҡыр, атайыңды саҡыр, ағайыңды саҡыр, апайыңды саҡыр. Саҡыр ҡат-ҡат! Ҡыҙылғанат, ҡап, ҡап!

— Ҡап-ҡап ҡармаҡҡа, эләгерһең бармаҡҡа, эләкмәһәң ҡармаҡҡа, әйләнерһең һармаҡҡа, — тип тегеләргә ҡушылды Яҡуп. Күрәһең, балыҡтар ҡармаҡҡа эләгеүгә ҡарағанда һармаҡҡа әйләнеүҙе яҡшыраҡҡа һанағандарҙыр. Улар Яҡуптың янауҙарына ҡолаҡ та һалманылар. Бәлки, ҡолаҡ һалырҙар ине лә, уларҙың ҡолаҡтары юҡ шул.

Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, һирәгерәк сиртә башланы. Балыҡсылар бер нисә тапҡыр күсеп тә ҡаранылар, барыбер балыҡтар, һүҙ берләшкәндәй, ҡармаҡҡа ҡағылмаҫҡа булдылар. Артыҡ ултырыуҙың файҙаһы юҡ

ине. Бар балыҡты, иҫән-һау сығарып, мурҙаға ебәрергә кәрәк. Юғиһә, эстә лә эттәр өрә башланы.

Мурҙа тураһындағы ҡамыштарҙы ярып, кәмә ярға килеп төртөлдө. Ғабдулла менән Айҙар, салбарҙарын сисеп, мурҙа эргәһенә ашыҡтылар. Ул тап үҙ урынында тора. Туҡта, туҡта! Мурҙа тирәһендә ҡамыштар һелкенә түгелме? Малайҙар мурҙаны күреп алды. Ни тамаша был? Мурҙа эсендә эре-эре сабаҡтар, ҡыҙылҡанаттар, алабуғалар сәпелдәшеп ята. Ун биш-егерме баш булыр. Нисек кергәндәр улар? Бына һиңә мәрәкә! Мурҙаның ауыҙы нәҡ элек ябып киткәнсә. Тимәк, был эште ниндәйҙер әҙәм ҡулы эшләгән.

Ауҙан балыҡ сәлдереү ғәҙәте бар ул беҙҙә. Әле иҫәрерәк саҡта Ғабдулла менән Айҙар үҙҙәре лә кеше ауына бер-ике тапҡыр ҡул һалғайнылар. Вәзирҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Әммә сит мурҙаға балыҡ килтереп һалған кешене уларҙың күргәндәре лә, ишеткәндәре лә юҡ ине. Бөркөтлөлә бындай хәл булғанын хәтерләүсе табылмаҫ. Һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫлыҡ мәрәкә был.

— Бына һиңә, өләсәйем әйтмешләй, бирәһе килгән ҡолона — сығарып ҡуйған юлына! Әйҙә, иш янына ҡуш булыр, — тине Ғабдулла.

— Йә берәйһе, үҙемдең мурҙам тип, яңылыш һалып киткәндер әле, — тигән фекер әйтте Айҙар.

— Китте ти ана, тот ҡапсығыңды.

— Улайһа, бер-бер хәйлә барҙыр, — тип йәнә шик белдерҙе Айҙар.

— Һинең өсөн бөтәһе лә хәйлә инде.

— Беләһегеҙме, быны кем эшләне? — тине яр башындағы Яҡуп. — Балыҡсыларға ҡот килтереүсе изге рух эшләгән.

— Изге рух, имеш. Етмәһә, үҙе пионер тағы, — тип Айҙар уның һүҙен бушҡа сығарҙы.

Малайҙар аптырашта ҡалдылар шулай ҙа. Хатта Башлыҡ үҙе лә бының серенә төшөнә алманы. Йомаҡ сиселмәй ҡалды.

Икенсе көндө балыҡсыларҙың кәсебе уңышлыраҡ булды: ярты күнәк самаһы балыҡ тотоп сыҡтылар. Ләкин уларҙы кисәгегә ҡарағанда ла нығыраҡ борсоу алды. Мурҙала балыҡ тағы ла арта төшкән. Етмәһә, арала өс

һарытабан да бар. Был юлы малайҙар бөтөнләй телдән ҡалды. Шатланырғамы быға әллә ҡайғырырғамы? Мырҙала балыҡ кәмеһә, бер хәл ине. «Ниндәйҙер бер кәкре ҡулдың эше», — тиерҙәр ине. Шик иң тәүҙә, әлбиттә, Вәзиргә төшөр ине.

— Малайҙар, — тине Яҡуп, — әйҙәгеҙ яҡшыға юрайыҡ. Тимәк, беҙгә ҡот килгән. Беҙ кешенекен урламаған да.

— Көс түкмәй табылған нәмә барыбер урлау менән бәрәбәр ул, — тине Башлыҡ.

— Беҙ үҙебеҙ тотҡандарҙы таныйбыҙ бит. Әләйһә, сит балыҡтарҙы сығарайыҡ та ебәрәйек. Эше лә бөттө. — Был ҡыйыу тәҡдимде Айҙар индерҙе.

Шулай ҙа ҡыйыу һүҙҙән ҡыйыу эшкә күсергә малайҙарҙың ҡулы барманы. Бынау йылҡылдап торған балыҡтарҙы үҙ ҡулдарың менән кире күлгә ебәр, имеш. Был ахмаҡлыҡ булыр ине.

— Төптән уйлап ҡараһаң, беҙ ни өсөн балыҡ тотабыҙ? Табала ҡурып, кетерләтеп ашар өсөнмө ни? — тигән һорау ҡуйҙы Башлыҡ.

— Кетерләтеп ашар өсөн түгел.

— Шулай булғас, тора бирһендәр. Аҙаҡтан күҙ күрер.

— Әгәр харамдан ҡурҡһағыҙ, минең өлөштән булыр. Миңә бит барыбер балыҡ ҡапмай, — тип Яҡуп яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алмаҡсы булды.

— Бында һинеке-минеке юҡ! — тине Ғабдулла. — Бөтәһе лә уртаҡ.

Нисек кенә булмаһын, серле мажара малайҙарҙың маҙаһын китәрҙе.

Әммә беҙҙең балыҡсылар асыҡ ауыҙҙарҙан түгел ине. Өсөнсө көндө улар, бер күл уртаһына инеп, бер ҡамышлыҡҡа һуғылып, аҙ ғына ҡармаҡ һалып йөрөгән булдылар ҙа мурҙанан байтаҡ ситтә ярға сыҡтылар. Кәмәләрен ҡамыш араһына йәшерҙеләр ҙә, мурҙа тураһына килеп, күрән эсенә боҫтолар. Был хәйләне улар кисә үк ҡорғайнылар. Нисек тә серҙе сисергә кәрәк ине. Уларҙың башҡаса сыҙар хәле ҡалманы.

Мурҙа яғынан күҙ ҙә алмайынса, малайҙар байтаҡ яттылар. Ләкин шылт иткән тауыш та ишетелмәне. Ҡамыш һабаҡтары, ағас япраҡтары, үлән ҡыяҡтары әле иртәнге йоҡоларынан уянмағайны. Ә ҡыуаҡ һайын үҙ

йырҙарын йырлаған ҡоштарға малайҙар иғтибар итмәне. Ҡоштарҙа уларҙың эше юҡ ине.

Бына бер саҡ күл өҫтөн шаҙралатып ел йүгереп үтте. Ҡамыштар: «Ниңә уяттың?» — тигән һымаҡ, бер-береһен әрләп, ҡыштырлашып алдылар. Ә ағас япраҡтары яҙын йомшаҡ күңелле булалар. Улар әрләшмәнеләр. Киреһенсә, бер-береһенә яғымлы итеп сәләм бирҙеләр. Ел үтеп киткәс, тирә-яҡ йәнә тып-тын булып ҡалды. Хатта күбәләк осҡаны ла ишетелә ине.

Бәлки, ике, бәлки, өс сәғәт үткәндер. Малайҙарҙың ҡул сәғәте лә, кеҫә сәғәте лә юҡ ине. Бала саҡта сәғәт ҡорһаҡта була ул. Асыҡтыңмы, ана шул сәғәт йә иртәнгене, йә төшкөнө, йә кискене ашарға ваҡыт еткәнен күрһәтә. Балыҡсыларҙың ҡорһағындағы сәғәте, иртәнгене күптән һуғып, төшкә табан ыңғайлай ине. Быңдай саҡта түҙемлек тигән нәмәнең дә рәте китә башлай.

— Юҡты бушҡа бушатып ят инде, — тип бошоноп ҡуйҙы Яҡуп. Айҙар шунда уҡ түбәтәйе менән иптәшенең ауыҙын ҡапланы. Унан йоҙроҡ күрһәтеп алды. Яҡуп бөтәһен дә төшөндө һәм шымып ҡалды.

Яҡында ғына ағасты ағас ҡырған тауыш ишетелде. Был тауышты балыҡсы булған кеше тиҙ таный. Кәмә ситенә ишкәк тейгәндә сыға ул. Унан һыу һыу сапылдауы, ҡамыш ҡыштырлауы ҡолаҡҡа салынды. Әммә был ишкәксе йүнле юлда йөрөмәй ине. Ул нимәнәндер шикләнеп, үтә һаҡ ҡылана ине.

Ҡамыш араһынан, ялғаш дәүмәле генә кәмәгә баҫып, Вәзир килеп сыҡты. Ул башта алан-йолан ҡаранып алды, кеше заты юҡлыҡҡа ышанғас ҡына, кәмәһенән һикереп төштө. Кәмә ҡойроғона нимәлер таҡҡан түгелме һуң? Эйе шул. Вәзир ҡойроҡтан һәленеп йөҙөп килгән шул нәмәне сисеп алды. Ул ҙур арыш тоғо булып сыҡты. Тоҡ төбөндә нимәлер сәпелдәргә тотондо. Вәзир тоҡто яңынан һыуға батырҙы ла мурҙа эргәһенә һөйрәп китте. Тимәк, уға үҙе тотҡан балыҡ ҡына етмәгән. Ниңдәй ҡомһоҙ! Хәҙер мурҙалағын сәлдерергә самалай. Барып сыҡмаҫ! Һинең һәр аҙымыңды алты күҙ күҙәтеп тора. Тейеп кенә ҡараһын! Кемдер берәү йәшерен ярҙам итә. Ә Вәзир уларҙы таларға маташа.

Ғабдулланың башынан ана шундай уйҙар йүгереп үтте. Ҡалғандар ҙа ҡараҡ тотоп фашлау тантанаһын кисерә башлағайнылар инде. Ух, эләгәсәк тә һуң Вәзиргә!

Вәзир мурҙаның ҡапҡасын асты. Ул ярға арты менән баҫҡайны. Уның кәүҙәһе ҡулдары нимә эшләгәнде күҙәтеүселәрҙән ышыҡланы. Балыҡ сәпелдәгән тауыш ишетелде. Әһә, мурҙалағы балыҡтарҙы берәм-берәм тоғона күсерә түгелме һуң? Ҡараҡ, үҙ эшен еренә еткереп, ҡапҡасты элеккесә ябып нығытып ҡуйҙы. Тап шул ваҡыт ярҙан Ғабдулланың зәһәр тауышы яңғыраны.

— Ҡаптыңмы, балыҡ ҡарағы!

Вәзир һиҫкәнеп китте. Башта ул ҡарашы менән тирәяҡты байҡап алды. Иптәштәрен күргәс, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, йылмайып ебәрҙе. Был йылмайыу малайҙарҙың асыуын ғына килтерҙе. Ғабдулланың килеп етеүе булды, Вәзирҙең яңағына ҡунып төшөүе булды. Айҙар ҙа берҙе өҫтәп ебәрҙе. Ләкин Вәзир яуап ҡайтарманы, төп кеүек ҡымшанмай тик торҙо.

— Балыҡ ашағың килдеме, тәмле тамаҡ? — тип ярһыны Башлыҡ. — Мә улайһа, тағы бер суртанды! — Ул Вәзиргә йәнә киҙәнде. Шул саҡ Вәзир ҡулындағы буш тоғон күтәрҙе. Уның төбөнән сөбөрләп һыу аға ине. Әммә тоҡ эсендә ҡыймылдаған нәмә һиҙелмәне.

— Ҡайҙа иттең балыҡты? Беҙгә үсләшеп, күлгә ебәрҙеңме?

— Ана мурҙаны ҡара, ышанмаһаң...

Ғабдулла менән Айҙар мурҙаға ташланды. Күтәреп ҡараһалар, уның төбө туп-тулы балыҡ ине. Баяғыға ҡарағанда ла күберәк. Яр башындағы Яҡуп ҡыуанысынан хатта һыҙғырып ебәрҙе.

Малайҙар мурҙаны кире һыуға батырҙылар. Дөрөҫөрәге, ул үҙе ҡулдан төшөп китте лә аҡрын ғына бата башланы. Бына нисек булып сыҡты! Ғабдулла менән Айҙар, телдән яҙып, Вәзиргә ҡарап ҡаттылар. Тегеһе «их, һеҙ» тигән һымаҡ, башта йылмайып ҡуйҙы, һуңынан шарҡылдап көлөргә кереште. Көлгәндә уның яланғас ҡорһағы, һыу өҫтөндә ваҡ тулҡын сығарып, бейеп тора ине. Быны күргәс, Айҙар көлөүенән тыйылып ҡала алманы. Уларға Башлыҡ үҙе лә ҡушылды.

Билдән һыуҙа торған өс малай, бөтә күл буйын яңғыратып, шулай байтаҡ хахылданы. Ситтән ҡарап торған берәү: «Был ниндәй иҫәрҙәр?» — тип уйлар ине.

Бөтәһенән дә бигерәк Яҡуп ҡыуанды. Быға тиклем ул үҙен гел ике ут араһында һымаҡ һиҙә ине.

— Ҡалай ирмәк булып сыҡты! — тип һикереп ҡуйҙы ул.

— Кисә лә һин һалдыңмы? — тип һораны Ғабдулла ярға сыҡҡас.

— Эйе, — тип баш ҡаҡты Вәзир.

— Әлекке көндө ләме?

— Эйе.

— Ә ни өсөн?

— Тик, былай. Һеҙҙең мурҙағыҙ тиҙерәк тулһын өсөн. Шулай ҙа йоҙроғоң тос икән, малай. — Вәзир яңағын һыйпап алды.

— Йә, ярар инде, — тине ғәйебен танып Ғабдулла. — Бөтһөн дә ҡуйһын ошонда. Үҙең бит...

— Вәзирҙең балыҡтан ҡото бар, — тип һүҙҙе икенсегә борҙо Яҡуп. — Гел эреһен генә ҡаптырған.

— Ыбыр-сыбырын мин уның кире ебәрә барҙым да...

Башлыҡтың башына бынамын тигән бер фекер килеп төштө:

— Таранда нисә терәү була?

Ғабдулланың был кинәйәле һорауын зирәк Айҙар шунда уҡ аңлап алды:

— Нисәне терәһәң шул саҡлы була. Терәүсенең үҙ ҡулында ул. Теләһәң унды терә.

Был юлы Башлыҡ ғәҙәтенсә бойороҡ иғлан итмәне, ә иптәштәренән кәңәш һораны. Вәзирҙе наһаҡҡа йәберләүе өсөн ул эсенән бик бошона ине. Шуға күрә бойороҡ бирергә үҙен хаҡһыҙ һананы. Башлыҡ кеше сабырыраҡ, тотанаҡлыраҡ булырға тейеш ине.

— Малайҙар, — тине ул, — Вәзирҙе «Өс таған»ға яҡынан алһаҡ, ҡалай йәтеш булыр ине. Кем дә кем риза, шул ҡул күтәрә.

Малайҙар берҙәм ҡул күтәрҙе. Иптәштәренә ҡушылып, хатта Вәзир үҙе лә күтәрҙе. Бөтәһе лә эстән үтә шат ине. Тик уны тышҡа сығарыуҙы һәр кем урынһыҙ һананы.

Байтаҡ михнәттәр күргән «Өс таған» шулай итеп яңынан ныҡлап аяҡҡа басты. Был юлы ул ҡаҡшамаҫ дүрт терәүгә таянды.

Малайҙар кейемдәрен бороп кейҙеләр. Вәзир бөтәһенән дә алдараҡ өлгөрҙө. Уның бар кейеме — бер ҡат салбар ине.

— Ниңә, һинең бүтән күлдәгең юҡмы ни? — тип хәстәрлек күрһәтте Башлыҡ. — Ямғырҙа ла яланғас йөрөйһөң.

— Бар, һандыҡта ята. Мин, тән сыныҡтырып, юрамал күлдәкһеҙ йөрөйөм.

Иптәштәре уның тән сыныҡтырыуын белмәй ине шул.

Кирәмәт күленә йән индереү сәғәте алыҫ түгел ине инде. Юлға сығыу бирһегөнгә билдәләнде. Көндө лә көтөп тормайынса, улар таң атҡансы уҡ ҡуҙғаласаҡтар. Ә хәҙергә ике кәмә ауыл яғына ҡарай йөҙөп китте. Алдағыһына өсәү, арттағы кескәйенә бәрәү ултырған. Кәмәләр күл уртаһына еткәс, бик моңло йыр яңғыраны. Беҙҙең Айҙар шулай моңло йырлай. «Бигерәк моңло балаһың, бәхетһеҙ булмаһаң ярай инде», — ти торғайны уға өләсәһе. Ни эшләп бәхетһеҙ булһын ти ул? Кешеләр күңелен йыр менән иркәләү үҙе ҙур бәхет түгелме һуң?

Бына әле лә уның матур тауышы күл өҫтөнә һибелә лә ярҙарға килеп бәрелә. Юҡ, ярҙарға ғына түгел, кешеләр ҡолағына барып һуғыла ла йөрәктәргә үтеп инә.

Ҡайҙарҙа ғына булмай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

ҮГЕҘ МЕНӘН АЛЫШЫУ

Ауыл осонан көтөү күренде. Иң алдан Йәмлегөл инәйҙең һыңар мөгөҙлө ала кәзәһе килә. Ул Бөркөтлө көтөүенең алдан йөрөүсеһе. Хатта иң шуҡ һарыҡ бәрәстәре лә яланда уны уҙырға баҙнат итмәйҙәр. Тик ауылға кергәс кенә ала кәзә бер ситкәрәк сығып, башҡаларға юл бирә. Шуны ғына көтөп килгән һарыҡтар, баҡырыша-баҡырыша, йүгерә башлай.

Был саҡ инде бөтә урамды яңғыратып ваҡ малайҙар оран һала:

— Көтөү ҡайтты! Көтөү ҡайтты!

Оранды ишетеп, һәр өйҙән кем дә булһа берәү көтөү ҡаршыларға ҡапҡа төбөнә сыға. Эштән ҡайтып өлгөрмәгән яңғыҙ кешеләрҙең малын күрше-күләндең бала-сағаһы ҡаршылай. Был беҙҙең Бөркөтлөлә ғүмер баҡый шулай.

Йәше-ҡарты, төрлөһө төрлө тауышҡа ҡысҡырып, мал саҡыра:

— Бәрәс, бәрәс...

— Кәзәкәй-кәзәкәй...

— Һәү-һәш, һәү-һәш...

Бөгөн көтөү ҡаршыларға Ғабдулла сыҡты. Өләсәһе өйҙә юҡ ине. Әле бая уҡ уларға Яҡуп килгәйне. Ул Башлыҡҡа Вәзир биргән рогатканы күрһәтте. Быға тиклем Яҡуп теге ваҡытта Вәзир менән аралашҡаны өсөн шөрләп йөрөй ине. Хәҙер бөтәһе лә үҙ кешеләр. Ғабдулла ла уға үпкә һүҙе әйтмәне. Киреһенсә, Яҡуп бер нисә тапҡыр мәргән генә атып күрһәткәс, уны маҡтап ҡуйҙы.

Хәҙер ҙә улар көтөү ҡаршыларға бергә сыҡтылар. Ғабдуллаларҙың башта ике һарығы, унан һыйыры ҡайтты. Ләкин малайҙар шунда уҡ кире өйгә инмәнеләр. Бөркөтлөлә һәр кем шулай. Үҙ малы ҡайтҡас та бороло п ҡына инмәй. Ҡалған көтөүҙе оҙатып ебәрә. Был шаушыулы бер нисә минуттың үҙ йәме бар. Кескәй генә байрамға оҡшап ҡала ул. Иң ялҡау һыйырҙарҙан да йөҙйөҙ илле аҙым артта ҡалып, түбән остоң ҡыҙыл күҙле ҡоба үгеҙе ҡайта. Үҙе әллә ни ҙур ҙа түгел, әммә һөҙгәк, тиҙәр. Ул үткәндә, бала-сағаның ҡото оса. Ҡайһыһы ҡапҡа артына боҫа, ҡайһыһы кәртә башына менә. Бына әле лә, ул яҡынлаша башлағас, Ғабдулла менән Яҡуп, ҡурҡып түгел, тик былай ғына, кәртәгә менеп атландылар. Яҡуп, кеҫәһенән ҙур ғына йомро таш алып, рогатҡаһын ҡорҙо. Донъя хәлен белеп булмай, кәрәк булып ҡуйыуы бар.

Үгеҙ Ғабдуллалар тураһына еткәндә генә, күршеләрҙең өй алдындағы ағас ышығынан Гөлнур килеп сыҡты. Ул яңы ҡыҙыл күлдәген кейеп тегенсенән ҡайтып килә ине. Гөлнурҙың түбәһе күккә тейгән. Ул бер уңға, бер һулға борғолана, күлдәгенең матур төймәләрен тотоп ҡарай, эйелеп-эйелеп, балитәктәрен һыйпап ала. Үҙе нимәлер бышылдай. Ә-ә-ә... «Күлдәгең бик матур икән,

Гөлнур, ҡотло булһын. Йылы тәнеңдә туҙһын!..» — ти икән ул. Был һүҙҙәрҙе уға әле бер генә апай әйткәйне.

Ысынлап та, ҡыҙыл күлдәктең килмәгән ере юҡ ине. Урам уртаһынан ғәмһеҙ уҙып барған ҡоба үгеҙ ҙә иғтибарһыҙ ғына үтә алманы. Тәүҙә ул, туҡтап, күҙҙәрен аҡайтып ҡарап торҙо. Шунан һуң, башын эйә биреп, аҡрын ғына Гөлнурға табан атланы. Был саҡ Гөлнур күлдәгенең түшендәге йәшел бәрхәт күбәләккә нимәлер һөйләй ине.

— Гөлнур! Ҡас! — тип ҡысҡырҙы Ғабдулла.

Гөлнур тертләп китте, ләкин ҡот осҡос бәлә килгәнен аңламаны, сөнки бөтә донъяла уның өсөн тәтәй күлдәктән башҡа нәмә юҡ ине.

Шул арала үгеҙ кескәй канауҙы һикереп сыҡты ла, башын ҡырын һала биреп, Гөлнурға ташланды. Бына-бына ҡыҙыл күлдәкле кескәй ҡыҙҙы мөгөҙөнә элеп ырғытасаҡ ул.

— Әсәкәй! — тип ҡысҡырыш илап ебәрҙе Гөлнур.

Кәртә башындағы Ғабдулла һикереп түгел, осоп төштө. Осло мөгөҙҙәр инде Гөлнурға сәнселде тигәндә генә, ул ҡыҙҙы күтәреп кәртә аша ырғытты. Был турала эстә Ғабдуллаларҙың ҡыяр баҡсаһы ине. Ярһыған үгеҙ, аҙ ғына сигенә биреп, Ғабдуллаға ынтылды һәм уны элеп тә алды. Мөгөҙ уға ҡаҙалманы. Ғабдулланың кәүҙәһе ике мөгөҙ араһына тура килеп ҡыҫылды. Был хатаһына асыуы килеп шашынған үгеҙ, башын ҡапыл юғары күтәреп, Ғабдулланы сөйөп ырғытты. Ул кәртә буйында ятҡан ҡырлы таш өҫтөнә барып төштө. Ыһ тип бер генә һыҡтаны ла ул бөгәрләнеп ятты. Үгеҙ, тағы артҡа сигенеп, яңынан ташланырға әҙерләнде. Инде ынтылдым тигәндә генә уның ҡан һауған күҙенә сәп итеп таш килеп тейҙе. Ул ташты Яҡуп шулай рогатканан ҡыйыш атып тура тейҙерҙе. Ауыртыуға сыҙай алмай ҡоба йыртҡыс хатта үкереп ебәрҙе. Башын сайҡай-сайҡай бер урында зырлап әйләнде лә урам буйлап тороп йүгерҙе.

Был хәл күҙ асып йомған арала булды.

Ғабдулла эргәһенә халыҡ йыйылды. Ул, ауыртыуҙан ыңғырашып ебәрмәҫ өсөн, күлдәк итәген сәйнәп ята ине. Кемдер уны күтәреп алмаҡсы итте:

— Ах, ҡулым! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Ғабдулла. Уның ауыҙ ситенән, нескә генә эҙ ҡалдырып, ҡан аға ине. Быны күргән Гөлнур сыйылдап илап ебәрҙе.

— Баҡырма әле! — тип туҡтатты уны яңы ғына килеп еткән Айҙар.

Йыйылған халыҡ гөж килде. Һәр кем үҙ һүҙен әйтергә, үҙ кәңәшен бирергә тырышты. Берәүҙәр үгеҙҙе һүкте, икенселәр уның хужаһын әрләне.

— Мал үҙ эйәһенә оҡшамай буламы?

— Уның эйәһе лә йылан аяғы киҫкән нәмә.

— Харап иткән баланы...

— Һүҙ менән һөйәк ялғап булмаҫ. Сараһын күрергә кәрәк.

— Сараһы ни уның шул — тиҙ үк больницаға оҙатырға кәрәк.

— Ике машинаның береһе өйҙә юҡ, исмаһам...

— Бар, йәһәт кенә ат егеп кил, Яуымбаев!

— Эй, туҡта әле, — тип ҡысҡырҙы Шәрифулла еңел ҡырандаста уҙып барыусы оло ғына бер кешегә. Юлсы, атын туҡтатып, халыҡ яғына килде.

— Быуа малайҙы үгеҙ һөҙөп имгәтте, — тинеләр уға. Юлсы күп төпсөнөп торманы:

— Һалығыҙ малайҙы ҡырандасҡа, — тине. Шәрифулла, һаҡ ҡына алып, Ғабдулланы төбөнә йомшаҡ бесән түшәлгән ҡырандасҡа илтеп һалды. Ғабдулла, күлдәк итәген йомарлап, йәнә ауыҙына тыҡты. Уның йөҙөндә ҡан әҫәре юҡ ине.

— Йә, ҡайһығыҙ бара? — тине ат хужаһы. — Ҡуҙғалырға кәрәк.

— Өләсәһе өйҙә юҡ бит әле, — тине берәү.

— Үҙем барам.

— Үҙем...

— Минһеҙ эш сыҡмаҫ, — тип, Шәрифулла ҡырандас күсәренә менеп үк ултырҙы.

Айҙар менән Вәзир ҙә һорап ҡараны, тик уларҙы ултыртманылар.

Әле генә осҡон кеүек һикереп йөрөгән Ғабдулланы, һоло тоғо урынына һалып, бынан егерме саҡрым ерҙәге Ҡултабан больницаһына алып киттеләр. Ҡырандастағылар, күл башын урап, ҡалҡыулыҡ артына күмелгәс тә,

халыҡ таралыша башланы. Ғабдуллалар ҡапҡа төбөндә иң һуңынан өсәү ҡалды. Улар тау аша киткән алыҫ юлға оҙаҡ ҡарап торҙолар. Инәләрен бесәй урлап ҡасҡан турғай балаларына оҡшай ине был өсәү.

ХАТ

Ғабдулла киткәндән һуң, малайҙар балыҡҡа төшмәне. Ләкин һәр көн мурҙалағы балыҡты барлап, ем һибеп ҡайттылар.

Был арала ауылда әллә ни иҫ китмәле ваҡиғалар булманы. Улай тиһәң дә теге ҡоба үгеҙҙе хужаһы йығып һуйҙы. Һуймаҫ та ине, халыҡ тауыш күтәрҙе: «Юғиһә, үҙеңде үгеҙең-ниең менән судҡа бирәбеҙ», — тип ҡурҡыттылар.

Йәнә шул бар икән: Айҙар һеңлеһе Гөлнурға биргән вәғәҙәһен үтәне. Ферма ҡыйығына менеп, яңы ғына ҡанаттары сыҡҡан ике турғай балаһы тотоп бирҙе. Тик ағаһы ситлек яһағансы, Гөлнур уларҙың икеһен дә осороп ебәрҙе. Вәзиргә әсәһе һары сатин күлдәк тектерҙе, әммә Вәзир уны барыбер кеймәне. «Һабантуйҙа кейермен әле», — тине. Яҡуптың иҫке йәрәхәттәре уңала барҙы, яңылары өҫтәлә торҙо. Сөнки уның менмәгән ҡаяһы, үрмәләмәгән ағасы, аша һикермәгән соҡор-саҡыры ҡалманы. Быға хатта Гөлйемеш апай ҙа күнегә төштө.

Ғабдулланың имгәнеү хәбәре йәйләүҙәге әсәһенә лә барып етте. Ул икенсе төндө өҙгөләнеп ҡайтып килде. Еккән атын да туғармай, шунда уҡ Ҡултабанға сапты. Уны ауылда күреүсе лә булманы. Улының тере икәнен күргәс кенә, әсә бер аҙ тынысланды. Ғабдулланың ике ҡабырғаһы, һул ҡулы һынғайны. «Йәш һөйәк тиҙ үк ялғаныр, — тине доктор. — Малайың сыҙам икән. Айһай-һай. Шәп егет буласаҡ». Кешене үлемдән ҡотҡарған ҡыйыу улы өсөн әсә ғорурланып та ҡуйҙы. «Хас та атаһы инде», — тип уйланы ул.

Ауылда ла Ғабдулланың исеме бер нисә көн телдән төшмәне. Гөлнурҙың әсәһе, өй беренсә йөрөп, Ғабдулланы илай-илай маҡтап һөйләне: «Мәңге түләп бөтөргөһөҙ бурыслыбыҙ инде ул балаға», — тине. Ғабдулла

ҡайтҡас һыйлармын тип, йомортҡа йыйып, май яҙып ҡуйҙы.

Бөтә ауырлыҡты һүҙһеҙ кисерергә өйрәнгән Нәғимә инәй был юлы ла кешегә белдереп аh-вah килмәне. Әммә эсе бик өҙөлдө. «Ҡарап торған берҙән-бер ейәнемдән тороп ҡалмаһам ярар ине», — тип әрнене ул. Яңы ҡайғыһы ни тиклем генә ҙур булмаһын, ул кесаҙна көндө кис улы Мөхәммәттең «Батырлыҡ өсөн» миҙалын аҡбур менән ялтыратып ҡуйырға онотманы.

Ун көн тигәндә, өләсәһенә Ғабдулланан хат килеп төштө. Үҙе уҡый белмәһә лә, Нәғимә инәй хатты асмай түҙә алманы. Ул һаҡ ҡына конверттың елемен ҡуптарҙы. Хатты сығарып әйләндереп-әйләндереп ҡарап торҙо. Шунан ғына ейәненең өс дуҫын хат уҡырға саҡырҙы. Арала иң еренә еткереп уҡыусы Яҡуп ине. Тыңлаусылар теҙелешеп һикегә ултырҙы. Яҡуп ҡаршыға баҫты. Ул тамағын ҡырып алды ла уҡырға кереште.

Хат башы – яҙ ҡаршы!

Ҡәҙерле һәм хөрмәтле өләсәйем! Әлегә тиклем ни өсөн хат яҙмай торҙоң, тип һораһаң, яуап бирәм. Минең ике ҡабырғам, һул ҡулым һынған булып сыҡты. Йәнә өс көн ҡан төкөрөп яттым, эс-бауырым ҡуҙғалған икән. Хәҙер урынына ултырҙы инде. Мине карауатҡа һалып ҡуйҙылар ҙа бер аҙна торғоҙманылар. Тышҡа сығаһы килгәндә лә, ҡуҙғатманылар, аҫҡа һынаяҡ һауыт ҡуйып ҡына торҙолар. Мин оялып бөттөм. Һул ҡулымды, аҡ балсыҡ һылап, ҡатырҙылар. Хәҙер ҡуҙғатып ҡарайым да, ҡулым яман ауыр. Ҡулымдың һыҙлауы бөттө. Тик балсыҡ аҫтында ҡысытып маҙамды ебәрә. Тын алғанда, һул ҡабырғам сәнсешә. Сәнсешһә лә әүәлге кеүек ҡыйын түгел. Мин тынымды самалап ҡына алырға тырышам.

Күлдәгемде, салбарымды һалдырып алдылар. Ғәләмәт ҙур аҡ күлдәк-ыштан кейҙерҙеләр. Ыштанымды сестра апай яра бәйләй торған оҙон тар марля менән быуып ҡуйҙы. Больницала бик эҫе. Себен кермәһен өсөн, тәҙрәләргә селтәр көпләгәндәр. Себен барыбер керә. Ашап туйғас, көн дә емеш һыуы эсерәләр. Компот тиҙәр уны. Һәләк тәмле була икән ул компот. (Һуңғы һүҙҙәрҙе уҡығанда Яҡуп ирекһеҙҙән ирендәрен сәпелдәтеп алды.)

Докторҙар ифрат һәйбәттәр, өләсәй. Иң баш доктор минең менән гел шаярып һөйләшә. Бүлмәгә килеп ингәс тә: «Шәпме, батыр!» – тигән була. Минең сәсемде машинка менән алдылар. Ул машинка тамсы ла ауырттырмай икән. Аллабирҙе олатай башымды бәке менән ҡырғанда, күҙҙән уттар күренә торғайны.

Бер бүлмәлә беҙ өсәүбеҙ. Тәҙрә янында ятҡан ағай иҫерек көйө ҡыҙыл араҡы тип ҡараңғыла шыйыҡ елем эскән. Ҡағыҙ йәбештерә торған елем. Уның эсе эскә йәбешкән. Радио ҡумтаһы эргәһендәге ағайҙы урман ҡырҡҡанда ағас баҫҡан. Ул телен тешләп өҙгән, хәҙер һөйләшә алмай.

Мин бында бик ялҡанам инде. Ерһеп китмәһәм ярар ине тип ҡурҡам. Күлдәк менән салбарҙы бирһәләр, бөгөн үк ҡайтып китер инем.

Өләсәй, был хатты, моғайын, йә Вәзир, йә Айҙар, йә Яҡуп уҡып бирер. Кем уҡыһа ла әйт: теге балыҡтарҙың хәлен белеп торһондар, ем илтеп һипһендәр. Астан үлерҙәр, юғиһә. Әсәйемдән һорарға ла онотҡанмын: Гөлнурҙың аяҡ-ҡулы иҫәнме?

Өләсәй, мин һиңә бәләкәс кенә күстәнәс йыйҙым: ун бер печенье, һигеҙ кәнфит, ун шаҡмаҡ шәкәр. Был үҙ ауыҙынан өҙә икән, тип уйлама тағы. Быныһы – артып ҡалғаны.

Хат ахырында шуны яҙам: бөтә нәҫел-ырыуға, дуҫ-ишкә айырмайынса минән сәләм тапшыр. Үҙең менән әсәйемә, йәнә Айҙарға, Яҡупҡа, Вәзиргә айырым-айырым сәләм. Минең өсөн хәҙер борсолма инде, өләсәй. «Батыр яраһыҙ булмаҫ», – тине доктор.

Шуның менән хат тамам. Алыҫсыһы өләсәйем, яҙыусыһы Ғабдулла.

1950 йыл, 9 июнь.

Хатты тыңлап бөткәс, Нәғимә инәй Яҡупҡа буш конверт һуҙҙы:

— Мә әле, улым, бынауҙың артына ла нимәлер яҙған түгелме?

Конверт артына ошондай һүҙҙәр яҙылғайны: *«Был конвертты теге елем эскән ағай бирҙе. Маркаһы ла өҫтөндә».*

Нәғимә инәй үҙе хат тыңланы, үҙе Ғабдулланың ун ике йыллыҡ бөтә ғүмерен күҙ алдынан кисереп ултырҙы.

Әле күптәнме һуң ул ейәне тураһында: «Ҡасан тәпәй баҫыр?», унан: «Ҡасан һөйләшә башлар?», «Ҡасан мәктәпкә китер?» — тип уйлай торғайны. Бына хәҙер уның ейәне ер аяғы, ер башы ерҙән, Ҡултабан ауылынан, килештереп хат яҙып ебәргән. Ғабдулланың ғүмерендә беренсе яҙған хаты ине был.

ЯУАП

Яуап яҙыуҙы оҙаҡҡа һуҙманылар. Ғабдулланың яҙылып бөтмәгән дәфтәренән ҡағыҙ йыртып алдылар. Ләкин өйҙә ҡәләм заты ла, яҙыу ҡараһы ла табылманы. Башлыҡ һаҡсыл кешеләрҙән түгел ине. Әлеге Яҡуп йүгереп өйҙән ҡәләм алып килде. Хатты яҙа башлағансы уҡ, Нәғимә инәй, ҡулына аҡса тоттороп, Айҙарҙы почтальонға маркалы конверт алырға ебәрҙе.

Хатты Вәзир яҙҙы, сөнки уның яҙыуы арала иң матуры ине. Яҙҙы тигәс тә, үҙ башынан уйлап сығарманы. Уға Нәғимә инәй бөтәһен дә теҙеп әйтеп торҙо.

— *Һеҙки ғиҙҙәтле вә хөрмәтле булып тороусы ейәнем Ғабдулла!* Яҙҙыңмы? — тип һораны Нәғимә инәй.

— Яҙҙым да, «ғиҙҙәтле» һүҙендә ике «ҙ» яҙайыҡмы әллә берәү ҙә еткәнме?

— Нисәү кәрәк, шул тиклем яҙ. Етмәй ҡалғансы, артыҡ булһын, икене ҡуй.

— Нимә тигән һүҙ ул ғиҙҙәтле?

— Мин үҙем дә белеп еткермәйем уны. Әммә хат башына уны ҡуймай килешмәй. Һин күп төпсөнмә, әйткәнде яҙа ултыр. Әйҙә, баштан башлайыҡ:

Һеҙки ғиҙҙәтле вә хөрмәтле булып тороусы ейәнем Ғабдулла!

Бер кәлимә һүҙемде әйтерҙән әүәл, бер генә шәлкем сәскә кеүек сәләмдәремде һиңә күндереп ҡалайым, тим. Һин ятҡан Ҡултабан яҡтарынан күҙҙәремде алмай зарығып көткән өләсәйеңдән күптән-күп сәләм, йәнә Яйыҡ буйында йәйләүҙә һыйыр һауып, һинең өсөн янып-көйөп йәшәүсе әсәйеңдән сәләм. Дәхи атайыңдың да, әсәйеңдең дә кендеген киҫеп, өйҙә лә, илдә лә хөрмәт күреп торған Йәмлегөл инәйеңдән сәләм, олатайыңдың һунарҙаш дуҫы Аллабирҙе олатайыңдарҙың бөтә өй эсенән сәләм. Оло башын кесе

кылып, юк вакытын бар күреп, һине духтырга үҙ кулдары менән илтеп тапшырган Шәрифулла агайыңдан сәләм. Атайыңдың иң якын корҙашы, хәҙергеһе көндә кәнсәлә счет төймәһе тартып ултырыусы сатан Сәхипгәрәйҙән сәләм. Ике як ут күршеләрҙән өй эстәре менән сәләм. Сәләм шуның менән тамам.

— Ә беҙҙән? — тине Якуп.

Нәғимә инәй хатаһын тиҙ үк аңлап алды ла дауам итте:

— Тамам тигәнсе өҫтәп яҙ: — *Бергә уйнап үҫкән тиҫтерҙәрең Вәзирҙән, Якуптан, Айҙарҙан күп сәләм. Сәләм шуның менән тамам.*

Ейәнем Ғабдулла, һинең ебәктән затлы, алтындан киммәтле хатыңды мең дә тугыҙ йөҙ ҙә илленсе йылдың ун икенсе июнь көнөндә өйлә вакытында алып, тиҫтерҙәрең Айҙар, Якуп, Вәзир менән кат-кат укып сыктык. Һинең аҫыл һөйәктәрең һыҙлаганда минең йөрәккәйем әрнеү бушка гына булмаган икән. Ярай, аҙагы хәйерле бөтһөн инде. Бер сабый баланы һәләкәттән коткарып, күпме кешенең кайгыһын юйҙың бит һин. Әгәр ҙә ки һинең күҙ алдыңда шул баланы үгеҙ һөҙөп үлтерһә, гүмер буйы йәнең газаптан сыкмаç ине. Йән газабы тән газабынан әсерәк була ул. Инде хәҙер духтырҙарыңды тыңлап кына тор. Һауыккас, телефон сыбыгы аша хәбәр ит. Колхоз рәйесе Дәүләт агайың әйтте, Ғабдулланы алырга иң якшы айгырҙы ектерермен, тине. Ундай айгырга элек губернатор гына ултырып йөрөй ине.

Беләгем кысыта, тигәнһең. Әйт духтырыңа, мунса ягып кертһендәр. Кайын миндеге менән сабып карагыҙ. Әммә үтә эҫе сапмагыҙ. Күстәнәстәреңде ашагандан да артык булдым. Эсең бошканда, һин үҙең аша уларҙы. Өләсәйеңдең күстәнәсе итеп аша. Әллә берәй тиҫтә йомортка, берәй көршәк каймак ебәрәйемме тигәйнем дә, Дәүләт агайың кире һүрҙе. «Бәлнистә ашау етә ул», — тине.

Йәнә шул да мәгълүм булһын. Йорт-ер, мал-тыуар, кош-корт бары менән шөкөр, имен. Тауыктар йомортка һалып тора. Теге сыбар тауык, ун ике себеш сыгарҙы. Һыйырҙың да һөтө был арала арта төштө. Элекке көндө, эсебеҙ бошоп, Йәмлегөл инәйең менән баҫыуга сыккайнык. Игендәр бик матур күренә. Түбән ос Әмирхандарҙың

мунсаһы яныл китте. Башҡа бәлә-ҡаза күреүсе юҡ. Именлек улай.

Хәҙер инде һинең һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуыңды зар-интизар булып көтөп ҡалабыҙ. Ҡайтып күҙемә күренһәң, атайыңдың миҙалын берәй көн тағын йөрөргә биреп торормон тип торам әле. Бер көн миҙал тағып йөрөрлөк кенә эш күрһәтмәнең түгел, күрһәттең. Гөлнур тураһында һорағанһың. Ул һау-сәләмәт, йүгереп йөрөй. Ҡош телендәй генә хатымды ошо ерҙә тамамлап, һиңә аҡ юлдар теләп ҡалыусы өләсәйең.

— Ә балыҡтар хаҡында, өләсәй?

— Бая ла һорармын тинем дә, оноттом. Ниндәй балыҡтар һуң ул?

— Уныһы сер, өләсәй.

— Һеҙҙең серегеҙ бөтөрмө. Әләйһә, белгәнеңде үҙең өҫтәп яҙ ҙа ҡуй.

Вәзир үҙ белдеге менән өҫтәп ҡуйҙы:

Ғабдулла, балыҡтар өсөн ҡайғырма. Улар иҫән. Тиҙерәк ҡайт!

Хатты әйтеп тороусы өләсәйең, яҙыусы Вәзир.

Айҙар хат яҙылып бөткәнсе үк урап ҡайтҡайны. Баҫма хәрефтәр менән Вәзир бик матур итеп адрес яҙҙы. *«Тапшырырға: Ғабдулла Юламановҡа»* тигән һүҙҙәрҙең аҫтына ла һыҙып ҡуйҙы.

— Ҡана, өләсәй, үҙем йүгереп кенә почта тартмаһына һалып киләйем, — тине Яҡуп.

— Рәхмәт, балалар, үҙем юл ыңғайында һалып китермен әле. Шул яҡҡа бараһым да бар ине, — тине Нәғимә инәй. Мейес артындағы тартманан алып, ул малайҙарға икешәр йомортҡа һондо. Тегеләр алмаҫҡа итеп ҡараһалар ҙа, булдыра алманылар. Һыйҙан оло булырға ярамай. Бөркөтлөлә йола боҙоу ғәйепкә һанала.

— Тора биргәсерәк инеп сыҡһаң, Яҡуп, тағы бер ҡат уҡып ишеттерер инең, — тип ҡалды Нәғимә инәй.

Яҡуп баш ҡаҡты.

Малайҙар сығып киткәс, Нәғимә инәй, һандыҡтан алып, оҙон сыбар күлдәген, йәшел бәрхәт камзулын кейҙе, яңы ҡушъяулығын бәйләне. Уның башҡа барыр ере юҡ ине. Ейәненә хатты инәйҙең үҙ ҡулдары менән һалғыһы

килде. Ә шундай күңелле эште ул байрамса кейенеп эшләргә булды.

Нәғимә инәй йүгерә-атлай клуб эргәһенә килде. Ана ишектең һул яғында ғына почта тартмаһы эленеп тора. Ниндәй уңмағандар был почта кешеләре! Тартманы бер иле туҙан баҫҡан бит. Нәғимә инәй тартма өҫтөнә ҡунған туҙанды башта өрөп төшөрмәксе итте. Былай ғына барып сыҡмағас, камзул кеҫәһенән ҡулъяулыҡ алып, уны һәйбәтләп һөрттө. Шунан һуң ғына, кескәй ҡапҡасты асып, хатты эскә төшөрҙө. Ул тиҙ генә боролоп китмәне. Тартмаға байтаҡ ҡарап торҙо ла йомшаҡ ҡартлас ҡулдары менән уны һыйпап, һөйөп ҡуйҙы.

— Ҡош ҡанатҡайҙары юлдаш булһын! — тине ул.

ЮЛ

Үҙ башың менән ныҡлап уйлаһаң, теләһә ниндәй нәмәнең осона сығырға була. Бер көндө кис тау яғында һыйыр ашатҡанда малайҙар, уйлай торғас, шундай фекергә килделәр: иртәгә үк Ғабдулла янына барырға кәрәк. Нимә эшләп һуң әле был уй уларға элегерәк килмәгән? «Өс таған»дың башлығы ғазап сигеп больницала ята, ә былар, һис нәмә булмағандай, шаярып йөрөй. Дуҫтарының хәлен барып белеү иҫтәрендә лә юҡ. Шул да булдымы иптәшлек?

Малайҙарҙың өсөһө лә өйҙәренә ҡайтҡас, иртәгә ҡояш менән бергә юлға сығасаҡтарын әйттеләр. Ғабдулла исеме сыҡҡас, ата-әсәләрҙән берәү ҙә ҡаршы төшмәне. Хатта Гөлйемеш апай ҙа икеләнеп-нитеп тормай риза булды. Ә Айҙарҙың әсәһе ҡыуанып уҡ китте.

— Әллә ҡасан кәрәк ине! Йөрөйһөгөҙ шунда йыйын йүнһеҙ, — тине ул. Үҙ балалары ауыҙынан өҙөп булһа ла Ғабдуллаға тип әҙерләгән йомортҡаһынан, майынан күстәнәс йүнәтте. Яҡуптың әсәһе кескәй банкаға һалып бал, байтаҡ ҡына йыуаса ҡуйҙы. Ҡорбанбикә еңгә осормалағы йөн араһына йәшергән ҡарағат ҡағынан бер оло йәймә алып бирҙе. «Сәйенә һалып эсһен, һөйәкте йомшарта ул», — тине.

Башлыҡ вазифаһын ваҡытлыса үҙ өҫтөнә алған Айҙар кистән үк иптәштәренә төрлө бойороҡтар бирҙе.

Кейем-һалымға арала иң бөтөн иҫәпләнгән Яҡупҡа ике ҡат салбар, ике ҡат күлдәк кейергә ҡушты.

— Эҫе булыр бит, — тип ҡараны тегеһе.

— Эҫе һөйәк һындырмай ул.

Яҡуп төпсөнөргә тотондо.

— Ә ниңә ике ҡат?

— Кәрәк булыуы бар.

Был юлы Вәзиргә лә һары сатин күлдәкте кейергә тура килде. Әллә ҡайҙа сит ергә барып күлдәкһеҙ йөрөү абруйһыҙлыҡ булыр ине. Һәр нәмәнең самаһын белергә кәрәк.

Ҡояштың тәүге нурҙары офоҡ ситен тишеп сыҡҡанда, ҡулдарына төйөнсөктәр тотҡан өс малай юлда ине инде. Башта улар бик йылдам атланылар, тау түбәне тура килгәндә, йүгергеләп тә алдылар. Ҡояш күтәрелгән һайын, юлсыларҙың аҙымы һүлпәнләнә барҙы. Таш араһынан сылтырап ҡына аҡҡан бер шишмә янында һыу эсергә туҡтанылар. Ләкин улар, һыуһауҙан былай, асыҡҡайнылар инде.

— Әйҙәгеҙ, тамаҡ ялғап алабыҙ, — тине Вәзир. Был урынлы тәҡдимде берәү ҙә кире ҡаҡманы.

Тамаҡ ялғарға ғына ултырған малайҙар ошо шишмә янында көнлөк аҙыҡтарын йылт иттереп кенә ҡалдырҙылар. Ашап туйғас, Айҙар килештереп нәтижә лә сығарып ҡуйҙы:

— Ярай, көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта булыр.

Шишмәнән ятып һыу эстеләр ҙә юлсылар йәнә юлдарында булдылар. Уларҙы байтаҡ ара атлы ла, машина ла ҡыуып етмәне. Малайҙар, урман, тау араларын үтеп, дала юлына сыҡтылар. Ҡултабан дала яғында. Вәзир юлды яҡшы белә. Ул, атаһына ултырып, былтыр ғына ике тапҡыр Ҡултабан баҙарына барғайны.

Ярты юлды үткәс, малайҙарҙы оҙон бүрәнә тейәгән тағылма арбалы машина ажғырып ҡыуып етте. Өсөһө лә ҡулдарын күтәрҙеләр. Машина былар тураһына яй ғына килеп туҡтаны. Шофер ишекте асып ебәрҙе. Ул ун етеун һигеҙ йәшлек кенә егет ине.

— Ҡайҙа юл тоттоғоҙ, юлсылар?

— Ҡултабанға.

— Ни етмәгән унда һеҙгә?

— Беҙҙең иптәшебеҙ больницала ята. Үгеҙ һөҙөп имгәтте. Шуның хәлен белергә барабыҙ.

— Ултыртығыҙ әле, ағай?

— Йөк бик ауыр, — тип шаяртты шофер, — машина тарта алһа ярай ҙа.

— Тартыр әле. Юл тигеҙ бит, — тип тынысландырҙы уны Яҡуп. — Беҙ еп-еңелбеҙ.

— Улайһа, ултырығыҙ. Тик кабинаға бөтәгеҙ ҙә һыймаҫһығыҙ. Берегеҙгә өҫкә ҡунаҡларға тура килер.

— Өсөбөҙ ҙә өҫтә барайыҡ, ағай.

— Ҡарағыҙ уны, осоп төшмәгеҙ. Бәләгеҙ үҙегеҙҙән ҙур булыр.

Һәм тигәнсе малайҙар бүрәнә өҫтөнә менеп ҡунаҡланылар.

Дала юлы тигеҙ, йомшаҡ ине. Машина бәүелтеп кенә алып бара. Малайҙарҙың күңеле күтәрелеп китте. Юлдың ике яғында игендәр күкрәп үҫеп ултыра. Баҫыу өҫтөндә еңелсә ел йүгереп уйнай. Алыҫта, артта, тауҙар күгәреп ята. Бөркөтлө лә шул яҡта күмелеп ҡалды. Тауҙар итәгендә төтөн бағаналары күренә. Бөтә түбәләрҙән юғары булып, Кирәмәттең аҡ түбәһе ялтырап тора. Беҙҙең яҡта Кирәмәтте тауҙар батшаһы тиҙәр.

Рәхәтлеккә сыҙай алмай, Айҙар йырлап ебәрҙе:

Тыуған еркәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡ балтырҙарым талһа ла, имгәкләп...

Йырлағанда ул бөтә донъяһын онота. Әле лә йырлай торғас, төйөнсөгөн яңылыш бүрәнәгә бәреп алды. Сепрәк аша шыйыҡ нәмә һарҡый башланы. Ғабдуллаға ҡусТәнәскә тигән йомортҡалар шундай йоҡа ҡабыҡлы булып сыҡты. Ләкин Айҙар ҙа, башҡалар ҙа быны күрмәне. Һарҡып сыҡҡан йомортҡа шыйығы ҡояшта тиҙ үк кибеп тә өлгөрҙө. Ҡара сепрәк бөтә серҙе йәшереп ҡалдырҙы.

Ҡултабанға еткәс, шофер машинаһын туҡтатты.

— Мин, ауылға инеп тормай, тура китәм. Ғәйепләштән булмаһын, егеттәр, илтеп үк еткерә алмайым, — тине ул, ишектән башын сығарып. — Ҡайһығыҙҙыр бик шәп йырлай икән. Юл һиҙелмәй ҙә ҡалды.

— Бына был, — тип, Айҙарға төртөп күрһәтте Яҡуп.

— Молодец, ҡустым!

Малайҙар машинанан төштө.

— Рәхмәт, ағай! — тине өсөһө лә аллы-артлы. Ғабдулла өлөшөнә инеп, Айҙар шоферға ике йомортҡа ла бирергә уйлағайны, баҙнат итмәне. «Йә алмаҫ, алмаһа оят булыр», — тип икеләнде.

— Больница ауылдың арғы осонда, урман ситендә булыр. Оло урамдан туп-тура менәһегеҙ ҙә китәһегеҙ, — тип юл өйрәтте лә шофер ҡуҙғалып китте.

Юлсылар йәнә йәйәүгә ҡалдылар. Ләкин больница күҙ күреме ерҙә генә ине. Ауыл уртаһындағы йылғаға еткәс, малайҙар өҫтәрендәге туҙанды ҡаҡтылар, йыуынып алдылар. Улар бит мал аҙбарына бармайҙар, больницаға баралар. Һәр нәмәнең үҙ рәте була.

Больница болдоронда аҡ халатлы оло ғына бер ҡатын һарыҡ йөнөнән шәл бәйләп ултыра ине. Ихата эсендәрәк тағы бер ағас йорт бар. Уның эргәһендәге эскәмйә артына һөйәлеп, йәш кенә ҡатын бала имеҙеп тора. Ҡойма буйындағы йыуан ҡарағасҡа арҡаларын терәп, ике ир сүкәйгән. Ситтән килгән ауырыуҙарҙы врачтар ошо йортта ҡабул итә.

Ихатала ағастан ағасҡа тартылған бер нисә оҙон епкә аҡ кер эленгән. Болдорҙа ултырған ҡатын, бәйләүенән туҡтамай ғына, ара-тирә керҙәргә күҙ һалып ала. Күрәһең, шул тирәлә уралыусы кәзәләрҙән һаҡлай торғандыр. Кәзә малы аҡ кер сәйнәргә һәүәҫ була ул.

— Апай, — тине Вәзир, — беҙ иптәшебеҙҙең хәлен белергә килгәйнек. Юламанов Ғабдулланы күрергә кәрәк ине.

— Уның хәле шәп хәҙер, — тине апай. — Дүртенсе палатала яңғыҙы ята. Тик әле инергә ярамай. Иртәнге аштан һуң йоҡо сәғәте. Төштән һуң үҙе сығыр.

Дуҫтарын күрергә атлығып килгән малайҙар өсөн был күңелле хәбәр түгел ине.

— Беҙ шым ғына инербеҙ, апай, аяҡ остарына ғына баҫып. Кертегеҙ инде, — тип ялбарҙы Яҡуп.

— Аяҡ остарына баҫып та ярамай, бармаҡ остарына баҫып та ярамай. Барығыҙ. Аҙаҡ килерһегеҙ.

— Беҙ бик алыҫтан килдек бит, апай. Бөркөтлө ауылынан.

— Бөркөтлөнән ни ҙә, Ҡарғалынан ни — барыбер ярамай.

Малайҙар урман ситенә барып, ҙур ҡайын күләгәһенә һуҙылып яттылар.

— Эштәр шәптән түгел. Көн үтә, — тине Айҙар.

— Юл уңманы былай булғас, — тип өҫтәне Яҡуп.

— Юл уңманы тип уфтанып ятһаҡ, уңмаҫ инде. Уңдырырға кәрәк уны, — тине Вәзир.

Юлсылар быш-быш һөйләшеп, ниндәйҙер кәңәш ҡороп алдылар.

Малайҙар йәнә больница эргәһенә әйләнеп килделәр. Болдорҙа шул уҡ ҡатын шул уҡ шәлен бәйләп ултыра ине.

— Ваҡыт бер ҙә үтмәй бит әле, апай, — тигән булды Вәзир, — берәй эшегеҙ бармы шунда? Тик йөрөгәнсе, эшләй торор инек.

— Эшләйем тигән кешегә эш бөтәме...

— Теләһә нимә ҡушығыҙ, беҙ өсәүләп тотонһаҡ...

— Иренмәһәгеҙ ни... анау ерҙәр кибеп ҡатып бөтәләр инде. Алымымды сығайым тип һаман ҡулым теймәй. Шуларҙы бынау аласыҡҡа ташыһағыҙ, бер ҙә ҡулығыҙ ҡалмаҫ. Рәхмәт алырһығыҙ. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара ул. Ҡарағыҙ уны, төшөрөп бысрата күрмәгеҙ!

— Беҙ иплэп кенә, апай...

Малайҙар шунда уҡ эшкә керешге. Әлеге апайға мөмкин тиклем ярарға тырышып, улар үтә һаҡ, үтә иплс тотондолар.

— Була бит балалар, — тип эсенән һоҡланып ултырҙы апай. — Минеке ҡушҡанды ла эшләмәй, ҡарыша.

Кер эленеп торған урында бер аҙҙан төйөнлө-төйөнлө аҡ ептәр генә тороп ҡалды.

— Бына рәхмәт үҙегеҙгә! Уңған балалар икәнһегеҙ, — тип маҡтаны апай.

— Рәхмәтте алдыҡ инде, апай, — тине Айҙар, — хәҙер шул рәхмәтегеҙ беҙҙе бәләнән дә ҡотҡарһын. Беҙгә иптәш янына инергә кәрәк.

— Ах, шаяндар, ах, хәйләкәрҙәр! Һеҙҙең менән ни эшләмәк кәрәк инде. Врач күреп ҡалһа, бөтәбеҙгә лә эләгәсәк.

— Беҙ эләгеүҙән ҡурҡмайбыҙ ҙа ул.

— Юҡ, юҡ, ярамай... Өсөгөҙҙө лә индерә алмайым.

— Һеҙ икебеҙҙе генә индерегеҙ. Бына был тышта көтөп торор. — Айҙар Вәзирҙең еңенән тартып ҡуйҙы.

— Ҡарағыҙ уны, тынығыҙ ҙа сығаһы булмаһын. — Ҡатын тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп алды. — Дүртенсе палата. Ингәс тә уң ҡулда икенсе ишек.

Айҙар менән Яҡуп, аяҡ остарына ғына баҫып, эскә инеп китте. Вәзир болдорҙа ултырып ҡалды.

— Кемгә бәйләйһегеҙ был шәлде? — тип һүҙ ҡушты Вәзир. Уға ҡатындың иғтибарын ситкә ебәрмәҫкә кәрәк ине.

— Кейәүҙәге ҡыҙым һорағайны. Үҙе быҙау ҡарай. Бер ҙә генә бушамай.

— Минең әсәйем тауыҡ фермаһында эшләй.

— Тауыҡтары һаламы һуң?

— Тәгәрәтеп кенә торалар. Йыйып өлгөрөп булмай. — Быныһын, әлбиттә, Вәзир арттырыбыраҡ ебәрҙе.

Ҡатын бик һүҙсән булып сыҡты. Әңгәмә ҡуйыр-ғандан-ҡуйыра барҙы. Вәзиргә шул кәрәк тә ине. Ҡатын үҙенең бөтә белгән һөнәрҙәрен берәм-берәм теҙеп китте. Ул шәл дә бәйләй, мейес тә һала, кейем дә тегә, ҡурай ҙа тарта, быйма ла баҫа, театрҙа ла уйнай икән. Үҫмер ваҡытында һабантуйҙарҙа малайҙар рәтендә хатта атта саптырған. Шундай сая ҡыҙ булған ул...

Иптәштәре килеп ингәндә, Ғабдулла, түшәмдәге се-бендәрҙе һанап, карауатында салҡан ята ине. Ул ҡапыл һиҫкәнеп тороп ултырҙы. Иҫән ҡулы менән күҙҙәрен ыуып алды. Тегеләре инделәр ҙә ишек төбөндә ҡатып ҡалдылар.

— Килдегеҙме ни? — тине Ғабдулла, башҡа һүҙ тап-мағас.

— Килдек. Терелдеңме инде?

— Терелдем.

— Ҡулың да һыҙламаймы?

— Хәҙер һыҙламай инде.

Малайҙар тәү тапҡыр бер-берененә ҡул биреп күрештеләр.

— Вәзир ниңә килмәне?

— Килде. Уны индермәнеләр, тышта ҡалды.

— Бына һиңә күстәнәс килтерҙек. Ҡағы Вәзирҙеке.

— Күстәнәс өсөн рәхмәт тә, тик тамаҡҡа аш бармай. Өйгә ҡайтҡы килә. Өләсәйем иҫәнме? Балыҡтар тереме?

— Бөтәһе лә һикерешеп тора. Һине ҡасан ҡайтаралар?

— Тағы ун көндән, тиҙәр. Бер аҙнанан балсығын ҡуптарасаҡтар!

— О-һо-һо!

— Салбар булһа, әллә ҡасан тәҙрәнән сығып ысҡыныр инем. Салбарҙы ғына бирмәйҙәр, — Ғабдулла тәҙрә эргәһенә килде. Был яҡ урманға ҡарай ине. — Эт тә күрәсәк түгел, — тип өҫтәне ул. — Бынау селтәрҙе ысҡындырып алаһың да...

— Кейем-һалым беҙҙә етерлек ул, — тине Айҙар. — Ана Яҡупта ике ҡат.

Башҡаса һүҙ артыҡ ине. Ғабдулла өҫтөндәге аҡ күлдәк-ыштанды һалдырып ташланылар. Уға салбар кейергә булыштылар. Салбар таман булды. Тик күлдәк кенә тарыраҡ ине. Гипстағы ҡул еңгә һыйманы. Малайҙар быға аптырап ҡалманылар. Буйлы зәңгәр күлдәктең еңен Яҡуп шатырлатып төптән үк йыртты ла алды.

— Ҡайтҡас, әсәйем тегеп ҡуйыр әле, — тине ул. Ғабдулланың өләсәһенә тип йыйған күстәнәстәрен өҙөлгән еңгә тултырып, ике баштан төйнәп ҡуйҙылар. Айҙар тәҙрәгә көпләнгән селтәрҙе һаҡ ҡына ысҡындырҙы. Һикерергә генә йыйынғанда, Ғабдулла иптәштәрен туҡтатты.

— Билдә бирмәй китеү ярамаҫ, — тине ул. Тумбочка тартмаһынан ҡәләм-ҡағыҙ алып, кескәй генә яҙыу яҙҙы.

«Ҡәҙерле доктор ағай!

Һеҙгә күп рәхмәттәр яуһын. Мин һауығып бөттөм инде. Хәҙер ауылға ҡайтып китәм. Иптәштәрем кейем килтергән. Балсығын ҡуптарырға бер аҙнанан үҙем килеп етермен. Ғәйепләп ҡалмағыҙ.

Ғабдулла Юламанов».

Тәҙрәнән башта Айҙар төштө. Шунан Ғабдулла сыҡты. Айҙар уны биленән ҡосаҡлап күтәреп үк алды. Иң һуңынан Яҡуп һикерҙе. Ул, һөрлөгөп китеп, тубығын ҡарағай тамырына бәрҙе. Күҙенән уттар күренде. Әммә ыһ та итмәне.

Урман араһына инеп, кеше күҙенән йәшеренгәс кенә, Айҙар, ҡош һайрауына оҡшатып, һыҙғырып алды.

Вәзирҙең зирәк ҡолағына был иң матур моң булып ишетелде. Шулай ҙа ул кинәт кенә тороп йүгермәне.

— Анау ҡыуаҡ артына барып ҡына киләйемсе, бик ҡыҫталдым, — тигән булды.

Был саҡ теге ҡатын уға үҙҙәре ҡуйған һуңғы спектаклдең эстәлеген һөйләп ултыра ине.

— Һөйләп кенә бөтөрәйем дә...

— Ул театрҙы беҙҙең ауылда ла ҡуйҙылар. Мин ҡараным уны.

— Ҡарағас, ниңә башта уҡ әйтмәнең? Мин бүтәнен һөйләр инем. Әләйһә, бына быныһын күргәнең бармы?..

Больница артында «ҡош» йәнә һайрап ҡуйҙы.

— Их, йәмле лә һуң ошо йәй айҙары! — тип һоҡланды ҡатын. — Өҙҙөрөп ҡоштары һайрап тора.

— Уф, эсем! — тип Вәзир бөгөлөп үк төштө.

— Бар, больница артына, ҡыуаҡ араһына йүгер, — тип кәңәш бирҙе ҡатын.

Вәзир, эсен тотоп, урман яғына йүгерҙе.

АЛДА — КИРӘМӘТ

Ҡайтҡан саҡта малайҙарға машина ла, ат та тура килмәне. Улар оҙон-оҙон юлды йәйәү ҡайттылар. Ләкин арыу-талыуҙың әҫәре лә юҡ ине.

Көн кисләүгә, дүрт юлсы Ҡылыс аръяғындағы ҡалҡыулыҡҡа килеп етте. Ҡояш был ваҡыт Кирәмәттең нәҡ түбәһендә ултыра ине. Бынан ҡарағанда ул ялҡын бөркөп торған янар тау төҫлө күренә. Матур ҙа, шомло ла. Малайҙар, алыҫ тауға һоҡланып, оҙаҡ ҡарап торҙолар. Айҙар, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡысҡырып йырлап ебәрҙе.

Алыҫтарҙан ғына, ай, күренә
Кирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы,
Ҡайҙарҙа ғына булмай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

Алда Кирәмәт. Бер нисә көндән дүрт терәүгә таянған «Өс таған» уның күленә йән индерер өсөн юлға сығыр. Ә юлға бер сыҡҡан кеше маҡсатына барып етмәй кире боролмай ул. «Өс таған» да кире боролмаҫ, ә бейек һәм бөйөк тауҙың түбәһенә күтәрелер.

Йәнә йылдар үтер. Был малайҙар егет булып етер. Шул саҡ улар Кирәмәттән дә бейегерәк түбәләргә күтәрелерҙәр. Ерҙе генә түгел, күкте лә биҙәрҙәр улар.

Һеҙ быға ышанаһығыҙмы? Мин ышанам.

1961

МАЛАЙҘАР

Беҙ инде илебеҙҙең сиктәренән алыҫта, Болгария ерҙәрендә, фашист ғәскәрҙәрен эҙәрләп, алға бара инек. Беҙҙең мотопехота часы ҡояш байыр алдынан кескәй генә ҡалаға килеп инде. Азатлыҡтың тәүге көнөн кисереүсе ҡала халҡы беҙҙе икмәк-тоҙ менән ҡаршы алды. Көҙ мәлендә ағастарҙан япраҡ ергә нисек ҡойолһа, ул көндө ҡала урамдарына кешеләр шулай һибелде. Тарма баҫыуына төшкән турғайҙар, кеше килгәндә һиҙеп, пыр-ылдап һауаға нисек күтәрелһә, беҙҙе ҡаршылаусы төркөмдәр өҫтөндә лә күккә сөйөлгән кәпәстәр шулай осоп торҙо. Ҙур-ҙур автомашиналарға ултырып барыусы совет һалдаттары өҫтөнә яуған сәскә ямғырын һис ни менән сағыштырырлыҡ түгел ине.

Ә малайҙар һуң, малайҙар! Ялан аяҡ малайҙар улар бөтә ерҙә лә бер төҫлө булалар. Уларҙың сәскә ырғытып та, кәпәс сөйөп тә торорға ваҡыттары юҡ. Улар иң алдан барыусы машина менән йәнәшә, ҡулдарын болғай-болғай йүгерәләр. Ҡаланы солғап алған шау-шыу һәм көлөү ауаздарынан, машиналарҙың геүләүҙәренән, ҡайҙалыр арттараҡ башланған йыр моңдарынан асығыраҡ булып, малайҙарҙың нескә тауыштары яңғырай. Ул тауыштар тотош геүләп торған һауаны, гүйә, нескә-нескә генә һөңгөләр булып, тишеп үтәләр. Малайҙар азатлыҡ килтереүсе армияны шулай сәләмләйҙәр:

— Добро дошли, братушки![1]

— Братушки! Братушки!

---

[1] Хуш килдегеҙ, туғандар!

Ҡала уртаһындағы майҙанға еткәс, колонна туҡтап ҡалды. Һалдаттар машиналарҙан һикерешеп төштөләр. Шунда уҡ алдағы машина эргәһенә бер төркөм малай килеп етте. Улар башта, һалдаттарҙың пилоткаларындағы йондоҙҙарға, иңдәрендәге автоматтарға, уларҙың саң баҫҡан йөҙҙәренә һынаулы ҡараш ташлап, шымып торҙолар. Ләкин был «өҫтән генә танышыу» ваҡыты оҙаҡҡа һуҙылманы. Ун йәштәр самаһындағы бер малай иптәштәренән айырылып сыҡты ла ошо беренсе машинанан төшкән боецтар эргәһенә килде. Малайҙың ҡолаҡтарын күмерлек булып еткән сәстәренә, уның ҡасандыр салбар балаҡтары тип аталған нәмәһенән һәленеп-һәленеп төшкән эреле-ваҡлы суҡтарына, себештәр сығып бөткән ҡара көрән аяҡтарына ҡарағанда, уның быға тиклем бал-май эсендә йәшәмәгәнлеге асыҡ ине. Ләкин ҡуйы ҡара ҡаштар аҫтында ике тере күмер булып янған күҙҙәре, эшкә лә, моғайын, туҡмашҡа ла күнеккән ҡарағусҡыл ҡытыршы ҡулдары уның үҙ дәрәжәһен һаҡлай алырлыҡ кеше булыуын күрһәтеп тора ине. Малай, берәүгә лә төбәп кенә ҡарамай, әйтә һалды:

— Миңә генерал кәрәк ине.

— Ниндәй генерал?

— Иң баш генерал!

Хуш килдегеҙ, туғандар! Боецтар башта ғәжәпләнеберәк ҡалдылар, унан һуң тыйыла алмай көлөшөргә тотондолар. Ләкин малай үҙенекен ҡабатланы:

— Миңә генерал кәрәк!

— Беҙ ни, туған, бында бөтәбеҙ ҙә генерал инде, — тине автоматчик Вершинин.

Малай, иптәштәренә боролоп, кемгәлер ҡул болғаны. Боецтар эргәһенә козырекһыҙ фуражка кейгән, мыҡты кәүҙәле, киң битле икенсе малай йүгереп килде.

— Былар генералдармы, Младен? — тип һораны ул киң битле малайҙан.

— Түгел. Генералдың салбар балағына ҡыҙыл таҫма тегелгән була уның. Иртәнсәк үткән һалдаттар араһында шундай генералды атайым үҙе күргән.

— Ә һин үҙең кем һуң? — тип һораны Вершинин тәү килгән малайҙан.

— Минме? Мин — Анастас. Бынығы — Младен. Ә тегеләре... — Ул ситтә торған иптәштәрен күрһәтте. — Ярай, уларҙы әйтеп тормайым инде. Уларҙың әле һеҙҙең менән танышшырлыҡ уҡ эш эшләгәндәре юҡ. Ә генерал ҡайҙа?

— Егеттәр, ә егеттәр, беҙҙең Ярмөхәмәтов ни менән генералға оҡшамаған һуң? — тине берәү. Ул бынан ай ярым самаһы элек, госпиталдән сығып, беҙҙең подразделениеға килгән боецтың фамилияһын телгә алды. Ярмөхәмәтов — әүәле башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән һәм кавалерияны үтә яратыуынан әле лә лампаслы салбар кейеп, мыйыҡ еткереп йөрөй торған үткер генә бер егет ине.

Шул арала бер нисә кеше бер юлы элекке кавалеристы саҡырырға тотондо.

Өсөнсө машина эргәһендә торған Ярмөхәмәтов, үҙенең фамилияһын ишеткәс, йүгереп үк килеп етте.

— Генерал кәрәк булып китте бит әле бына егеттәргә. Элек тә һирәк-һаяҡ «генерал» ҡушаматын ишеткән Ярмөхәмәтов эштең ниҙә икәнлеген тиҙ үк төшөнөп алды.

— Нимә булды? — тип һораны ул эре генә. Салбарына ҡыҙыл таҫма тегелгән элекке кавалеристы күргәс, малайҙарҙың йөҙҙәре асылып китте.

— Ошомо? — тине Анастас, иптәшенә боролоп. Младен баш ҡаҡты.

Анастас серле итеп яҡ-яҡҡа ҡарап ҡуйҙы һәм, ымлап, Ярмөхәмәтовты бер аҙ ситкәрәк алып китте. Ләкин малайҙың мөмкин тиклем серлерәк әйтергә тырышҡан һүҙҙәре бөтә кешегә лә ишетелеп торҙо.

— Другарь[1] генерал, — тине ул, — беҙ һеҙҙең килеүегеҙгә ҡайһы бер нәмәләр әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ләкин көпәкөндөҙ уларҙы һеҙгә килтерә алмайбыҙ. Үҙегеҙ беләһегеҙ — хәрби сер...

Тап шул ваҡытта ялға туҡтау өсөн билдәләнгән урындарға барырға команда булды. Беҙ яңынан машиналарға ултырыштыҡ, һәм подразделение үҙенә тәғәйенләнгән өйҙәргә китте.

Ә малайҙар шунда уҡ ҡайҙалыр юҡ булдылар. Уларҙы, нисектер, хәтергә алыусы ла табылманы.

---

[1] Иптәш, дуҫ

* * *

Беҙҙең подразделениены ҡала майҙанынан алыҫ түгел бер ҙур йортҡа урынлаштырҙылар. Сентябрь айында Болгарияла төндәр йылы була, шуның өсөн һуғышсылар асыҡ һауала ҡуныуҙы артығыраҡ күрҙеләр. Беҙ йоҡлар алдынан, ҡура уртаһына ултырып, һалдат сәйен эсергә керештек.

Ҡапыл эңер төштө. Тау яғына эңер шулай ҡапыл төшә шул. Арлы-бирле иткәнсе, Ярмөхәмәтов, ҡайҙандыр лампа табып, табын уртаһына ултыртып ҡуйҙы. Табын яҡтырып китте.

Ҡапыл урам ҡапҡаһы шығырлап асылды. Беҙ бөтәбеҙ ҙә әйләнеп ҡараныҡ. Унда ике ҡарасҡы күренде лә тағы юғалды. Ҡапҡа артында нимәгәлер бәрелгән тимер сыңлауы ишетелде. Һәм шул арала теге ике ҡарасҡы ҡураға килеп инде. Шәүләләр утҡа яҡынлаштылар. Беҙ был төнгө ҡунаҡтарҙы тиҙ үк танып алдыҡ. Ҡынһыҙ ҡылыс күтәреп алдан килеүсе Анастас ине. Уның артынан Младен эйәргән. Ул нимәлер тултырылған фуражкаһын ҡулына тотоп алған.

Малайҙар табын эргәһенә килеп туҡтанылар һәм күҙҙәре менән кемделер эҙләргә тотондолар. Арғы яҡтараҡ ултырған Ярмөхәмәтовты күреп алғас та, Анастас ҡулындағы ҡылысты уның алдына илтеп һалды. Ҡылыс эргәһенә Младен фуражкаһын килтереп ҡуйҙы. Ләкин уның фуражкаһын ҡалдырғыһы килмәне. Малай яңынан эйелде лә фуражканың бер ситенән тотоп һелкте. Унан автомат патрондары сытырлап ҡойолдо.

Һалдаттар, малайҙарҙың нимә әйтеүен көтөп, өнһөҙ ҡалдылар.

Эште еренә еткереп башҡарғанлығына ышанғас ҡына, Анастас һүҙен әйтте:

— Бына, иптәш генерал, ҡабул итеп алығыҙ.

— Ҡабул ит, генерал! — Боецтар пырхылдап көлөп ебәрҙеләр.

Ярмөхәмәтов юғалып ҡалманы.

— Көлөүҙе туҡтатығыҙ! — тип бойорҙо ул. Һәм малайҙарға ҡарап, йомшаҡ ҡына дауам итте. — Рәхмәт, егеттәр. Ә нисек итеп ҡулға төшөрҙөгөҙ һеҙ был нәмәләрҙе?

— Һеҙгә бүләк ул. Ике-өс көн төшөндә, төн уртаһында, бынан фашистар ҡастылар. Буталыш, ҡысҡырыш китте бер заман! Әй мәрәкә булды. Шул ваҡыт беҙ Младен менән икәүләп Стоян байҙар эргәһендә торған машинанан ошо ҡылысты сәлдерҙек. Теге машина фашист генералыныҡы ине. — Анастас ашыҡмай ғына дауам итте. — Үҙебеҙҙе лә саҡ-саҡ ҡына эләктермәнеләр. Арттан атып ҡалдылар. Ә беҙ яр аҫтына һикерҙек. Ана Младендың фуражкаһында пуля тишеге лә бар... Ә патрондар улар — элегерәк ҡулға төшкән нәмә. Һеҙгә кәрәк булыр әле.

Һүҙгә ҡапыл Младен ҡушылды:

— Бына ошо генералдың үҙ ҡылысы менән үҙенең башын сабып өҙөгөҙ. Һәләк яман ул! Һеҙ уны барыбер ҡыуып етәһегеҙ бит.

— Әлбиттә, етәбеҙ!

— Сабып өҙөгөҙ, йәме?

— Ярар.

«Генерал» малайҙарҙы үҙ эргәһенә ултыртып алды. Вершинин уларға сәй ҡойоп килтерҙе, алдарына шәкәр, икмәк, колбаса өйөп ҡуйҙы. Ләкин малайҙар башта дәрәжәне юғары тоттолар, ҡомһоҙланып һыйға ташланманылар. Вершининдың ҡыҫтауына ла «рәхмәт әйтәбеҙ» тип кенә яуап бирҙеләр.

Тик бер аҙҙан һуң ғына малайҙарҙың ҡыйыулығы арта төштө. Беҙ улар менән тиҙ үк дуҫлашып та алдыҡ. Оҙаҡ итеп сәй эстек. Ҡунаҡтар һүҙгә йомарт булып сыҡтылар. Улар үҙҙәре хаҡында ла күп кенә нәмә һөйләнеләр. Анастас менән Младен икеһе лә урамда аяҡ кейеме таҙартып көн итәләр икән. Анастастың ауырыу әсәһе бына бер йыл инде өйҙән сыға алмай, шуға күрә Стоян байҙарға кер йыуырға ла бара алмай. Ә Младендың бер атаһына һигеҙ йәнде туйҙырырға тура килә. Малайҙарҙың әлегә тиклем мәктәп юлына аяҡ баҫҡандары ла юҡ. Ләкин уларҙың һүҙҙәрендә бер генә лә һыҡтау ауазы ишетелмәне. Сөнки хәҙер бит уларға яңы тормош киләсәк.

Һүҙгә аҙ ҡатнаша торған Младен ҡапыл ғына белдереү яһаны:

— Һеҙ килгән шатлыҡтан, Болгария азат ителеү шатлығынан, беҙ Анастас менән өс көн буйы байрам итә-

сәкбеҙ. Аяҡ кейеме таҙартырға урамға сыҡмаясаҡбыҙ. Байрам итәсәкбеҙ.

Анастас уның һүҙен ҡеүәтләп ҡуйҙы:

— Эйе, беҙ шулай хәл иттек. Ҡулға щетка ла тотмаясаҡбыҙ!

Хушлашыр алдынан һалдаттар Младендың козырекһыҙ фуражкаһына шәкәр, сохари, колбаса, шоколад тултырҙылар.

Ләкин малайҙар тиҙ генә сығып китмәнеләр. Улар, нимәлер әйтергә теләп, бер-береһенә ҡарашып алдылар. Һәм Младен ҡапыл әйтеп һалды:

— Пилоткаға ҡуйыр өсөн һеҙгә нисәшәр йондоҙ бирҙеләр?

— Берәрҙе.

— Ә юғалһа?..

Һалдаттар малайҙарҙың тел төптәре ҡайҙа барғанын шунда уҡ һиҙеп алдылар һәм тоҡтарын аҡтарырға тотондолар. Шул арала йондоҙ ҡуйылған өр-яңы ике пилотка ла табылды. Ярмөхәмәтов пилоткаларҙы, бик тантаналы итеп, ҡунаҡтарҙың баштарына кейҙерҙе. Малайҙар сикһеҙ ҡыуаныуҙан бөтөнләй һүҙһеҙ ҡалдылар. Бер аҙҙан һуң инде Анастас нығ итеп башын эйҙе. Младен да тап шуны уҡ ҡабатланы.

— Ҙәү итеп рәхмәт әйтәбеҙ, другари! — тинеләр малайҙар һәм йүгереп сығып та киттеләр.

Беҙ байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙыҡ. Башлап Ярмөхәмәтов өндәште:

— Насар эшләнем мин, егеттәр. Ниндәй һәйбәт малайҙарҙы алданым. Генерал, имеш... Миңә хәҙер инде генерал булғансы хеҙмәт итергә тура киләсәк...

Берәү ҙә һүҙгә ҡушылманы.

Мин ҡояш менән бергә уяндым. Иптәштәрем әле йоҡлап ята ине. Ләкин мине бер нәмә ғәжәпкә ҡалдырҙы. Һәр боецтың аяҡ осонда һалып ҡуйған итектәре яңы сыҡҡан ҡояш нурында ялтырап тора ине. Улар шундай һәйбәт итеп таҙартылып, майланып ҡуйылғандар. Мин сыҙаманым, егеттәрҙе уяттым.

— Бына мөғжизә, — тине Вершинин.

— Мөғжизә түгел, — тине ҡапҡа төбөндә һаҡта тороусы һалдат. — Мин уларға үҙем рөхсәт иттем. Таң алдынан килгәйнеләр.

— Бына ниндәйҙәр бит улар, — тип ҡабатланы Ярмөхәмәтов. — Их егеттәр, егеттәр...

Беҙгә, нисектер, күңелле лә, моңһоу ҙа булып китте. Малайҙарҙы беҙ башҡаса күрә алманыҡ. Бер сәғәттән артабан киттек.

1953

АЙЫУ МАЖАРАҺЫ

Арҡыры аяҡ айыуҙың бик күп мажаралары тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр.

Умарталыҡҡа урлашырға килгәс, ул, бал ҡорттары сағыуҙан ҡасып барғанда, ҡоҙоҡҡа ла йығылып төшкән. Шул саҡта билен имгәтеп, әле лә арт һанын күтәрә алмай йонсой. Үҙе лә әшәүәтһеҙ инде.

Хәйләкәр төлкөнөң һүҙенә ышанып, ул, балыҡ тотмаҡсы булып, мәкегә ҡойроғон да тығып ултырған. Уның был кәсебе ни менән бөткәнен бөтә кеше белә. Төн уҙғансы, ҡойроҡ боҙға йәбешеп туңған. Таң атҡас, һыу алырға төшкән килендәр айыуҙы көйәнтәләр менән туҡмарға тотонғандар. Айыу ҡасып киткән, ә ҡойроғо өҙөлөп ҡалған. Шунан бирле ул сонтор ҡойроҡ менән йөрөп ята. Үҙе лә бер ҡатлы шул. Хәйләкәр төлкөгә ышанмаҫҡа кәрәк ине лә бит.

Ә быйыл йәй айыу, йөрөй торғас, саҡ-саҡ ҡына өс аяҡҡа тороп ҡалманы. Ағас аяҡ яһатып алырға тура килә ине шул үҙенә. Юғиһә бынау тиклем кәүҙәне өс аяҡ ҡына йөрөтә алыр инеме ни? Был мажара ла үҙенең ғәмһеҙлеге арҡаһында булды инде.

...Ағиҙелдең һеңлеһе тип йөрөтөлгән Ҡариҙел исемле йылғаны ишетеп тә, бәлки, күреп тә белеүселәр барҙыр. Урал итәгенең ҡаялы бейек тауҙары, ҡалын урмандары, сәскәле үҙәндәре буйлап ағып төшә лә ул Ҡариҙел, Ағиҙелгә килеп ҡушыла. Ағиҙел үҙенең һыуҙарын Камаға, Кама Волгаға илтеп ҡоя. Уйлап ҡараһаң, иҫең дә китерлек бит. Беҙҙең Ҡариҙелдең һыуы Каспий диңгеҙенә тиклем барып етә. Махачкала малайҙары, Каспийҙа һыу

ингәндә, Ҡариҙелде, моғайын, иҫтәренә лә төшөрмәйҙәр-ҙер әле. Ә бит улар сумыш-сумыш уйнаған һыуҙа Ҡари-ҙелдең дә тамсылары бар. Көйләп китһәң, хәбәр күп инде ул. Ҡариҙелдән кәмәгә ултыр ҙа биш диңгеҙҙең те-ләһәң ҡайһыһына ҡарай сыҡ та кит хәҙер. Хуш күрәһең икән, бөтә донъяны урап ҡайт. Юл асыҡ. Рәхим ит.

Бына ниндәй дан йылға бит беҙҙең Ҡариҙел! Шуға ла инде яҙ һайын Каспийҙың төрлө-төрлө балыҡтары беҙҙең һыуға ыуылдырыҡ сәсергә менәләр. Йәмле ерҙең ҡайҙа икәнен беләләр улар, йылтыр күҙҙәр! Шул балыҡ-тар араһында Ҡырпа исемле ғәләмәт ҙурҙары, кәмә буй-лыҡтары ла була. Ҡунаҡ булыш ҡына килгәнгә күрә лә, ул балыҡтарҙы беҙҙә тотмайҙар. Әҙәп һаҡлайҙар. Тик ҡу-наҡтар үҙҙәре генә ҡайһы ваҡыт әҙәпте боҙоп ташлайҙар. Анау Ҡырпа тигәне арала үтә ҡомһоҙ бер балыҡ инде.

Ә айыу шул Ҡырпаның ниндәйлеген әле быйыл йәй генә ныҡлап төшөндө. Был турала һөйләп үткәндә лә ярай.

Яр буйында баландар сәскә атҡан, тауҙар һәм туғай-ҙар хуш еҫ бөркөп торған, урмандарҙы яңғыратып ҡош-тар һайраған бер саҡ ине. Таңда сутылдаған һандуғас тауышына уянған ҡарт айыу, төш еткәнсе, кирелеп-һуҙылып, ҙур саған күләгәһендә ятты. Әллә ул үҙенең ялҡаулығын еңә алманы, әллә, үләндәр еҫенән иҫереп, йәй моңдарына таң ҡалып, былай ғына рәхәтләнеп ауна-ны. Айыуҙың күңелендә ни барын ҡайҙан белеп бөтө-рәһең инде.

Ҡояш түбә өҫтөнә күтәрелгәс, ул тағы бер тапҡыр кирелде лә урынынан торҙо. Йылтырап ятҡан Ҡариҙелде япраҡтар селтәре аша күреп алғас: «Битте-күҙҙе йыуып менергә кәрәк әле», — тигән уйға килде. Ул, лап-лоп ба-ҫып, ашыҡмай ғына яр ситенә төштө. Башта, эҫе ҡом өҫтөнә ултырып, бер талай тирә-яҡты күҙәтеп торҙо. Һыу өҫтө тып-тын. Һирәк-һаяҡ ваҡ балыҡтар ғына һи-керешеп уйнай. Яҡын-тирәлә генә айыуҙан ҡеүәтле йән эйәһе барлығы һиҙелмәй.

Һыу түбәнендә, бынан бер километр самаһы ерҙә, ҙур төҙөлөш бара. Унда туҡтауһыҙ машиналар шаулай, ҡырмыҫҡа иләүендәге кеүек, кешеләр ҡайнаша. Ләкин уларҙың айыуҙа эштәре юҡ. Айыу ҙа иртә яҙҙан бирле уларға күнегеп бөттө инде. Дөрөҫ, ул тәү мәлдәрҙә бер аҙ бошоноборaҡ йөрөнө йөрөүен, хатта башҡа берәй

тауға күсеп китергә лә елкенгеләп ҡуйҙы. Ләкин был ниәтенән тиҙ кире ҡайтты. Ни тиһәң дә, тыуған тау бит! Төҙөлөш барған яҡтағы шау-шыуға ул эйәләшеп үк китте. Шуға ла айыу әле лә ул яҡҡа бер генә боролоп ҡараны.

Ҡояшта ултыра торғас, айыу эҫеләнеп китте. Ул, һыуҙың ситенә генә килеп, тәпәйен тығып ҡараны. Бер аҙ эскәрәк инеп һыу эсте. Битен йыуҙы. Унан һуң ҡомайылға ултырып алды ла алғы тәпәйе менән һыу сәсрәтеп уйнарға кереште. Һуҡҡан һайын төрлө төҫтәге тамсылар уның күҙ алдында йымылдашып һикерештеләр. Был уйын айыуға бик оҡшаны. Ул бөтөнләй мауығып китте. Бара торғас, ике тәпәйе менән бер юлы һуғырға тотонҙо. Тамсылар уның һайын бейегерәк сәсрәнеләр. Айыу, үҙенең еүеш моронон күккә сөйөп, уларҙың йымылдашып төшкәнен ҡарап, рәхәт сикте.

Уйын иң ҡыҙған бер мәлдә бәләкәсерәк кәмә оҙонлоғо Ҡырпа балыҡ һыу ярып килеп сыҡты ла айыуҙың алғы уң тәпәйенән эләктереп алды. Билдәле, айыу, уйынға алданып, уның килгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Айыу ҡуҙғалғылағансы, Ҡырпа тәпәйҙе бөтөнләй үк йотоп ебәрҙе. Бына — бер заман алыш китте. Бына китте алыш. Ҡырпа айыуҙы һыу эсенә һөйрәй. Һөйрәй алмай. Айыу балыҡты ярға сығармаҡсы итә. Ләкин хәлдән килмәй. Башта ул бәләнән тауыш-тынһыҙ ғына ҡотолмаҡсы ине лә аҙаҡтан сыҙай алманы, үкерергә кереште. Тартыш ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Айыу үкерә, Ҡырпа үрле-ҡырлы һикерә. Тәпәйҙе бик ысҡындырыр ине лә бит, хәҙер ул үҙе ысҡынмай, тештәр ебәрмәй. Икеһенең дә хәл шәптән түгел ине. Шулай ҙа айыу, үкерә-үкерә булһа ла, Ҡырпаны бер аҙ ярға яҡынлаштырҙы. Ләкин балыҡ та тиҙ генә бирешергә теләмәне. Ай-һай, үҙе лә сая икән.

Әгәр төҙөлөштәге эшселәр айыу үкергәнде ишетмәһәләр, нимә менән бөтәр ине икән был алыш? Ҡайһыһы еңер ине икән быларҙың? Хатта әйтеүе лә ауыр.

Айыу менән Ҡырпа тартышҡан арала, ҙур тракторға ултырып, ҡомло яр буйлап кешеләр килеп етте. Кемдер берәү мылтыҡ та күтәреп алған. Кеше һәр нәмәнең хәйләһен уйлап таба бит. Улар, нисектер, рәтен табып, һуғыш суҡмарҙарының икеһен дә сынйырлап алдылар ҙа трактор менән ҡоро ергә һөйрәтеп сығарҙылар. Ҡыр-

паны, уҫал ниәт менән һуғыш башлағаны өсөн, шунда уҡ атып үлтерҙеләр һәм, һуңыраҡ, самосвалға һалып, балыҡ заводына ебәрҙеләр. Айыуҙы, сынйырлап, тракторға таҡтылар. Ул башта тулап ҡараны ла аҙаҡтан, аҡһаҡлап-аҡһаҡлап булһа ла, атлай бирҙе. «Эштең яманыраҡ бөтөүе лә мөмкин ине бит әле», — тип уйланы, ахыры. Башҡаса тыпырсынмаҫ булды.

Бер аҙнанан һуң, айыуҙың имгәнгән аяғы төҙәлә биргәс, уны Өфөгә зверинецҡа оҙаттылар. Шулай итеп, ул хәҙер ҡалала йәшәүсе булып китте. Уға «Балыҡсы» тигән яңы исем ҡуштылар. Зверинецҡа килгән малайҙар йыш ҡына:

— Сәпәкә ит әле, Балыҡсы! — тиҙәр уға. Ә ул теге ыҙғыштан һуң кәкрәйеп ҡалған тәпәйен күрһәтә лә башын ғына сайҡап ҡуя:

— Ниңә инде шул бер балыҡ башын сәйнәйһегеҙ, егеттәр? — ти, ахыры.

Ҡала Балыҡсыға оҡшаны булһа кәрәк. Күңеле уның һәр ваҡыт күтәренке күренә. Тик ҡояшлы ямғыр яуғанда һәм танауына балыҡ еҫе килеп бәрелгәндә генә, бер аҙ эсе бошоп китә. Уға ла күнегер әле. Айыу бит ул.

1954

ӘЛФИӘ ХИКӘЙӘЛӘРЕ

СЫЙЫРСЫҠ БАЛАҺЫ

Беҙҙең һырғауыл башындағы ояла быйыл да сыйырсыҡ бала сығарҙы. Бишәүҙәр. Инәләре ем алып ҡайтҡанда, һары ситле кескәй пыртманит төҫлө биш ауыҙ гел асылып тора. Дүртеһе улай тыйнаҡлы күренә. Ем алырға үҙ сираттары еткәнде сабыр ғына көтөп торалар. Ә бишенсеһе һәләк сыҙамһыҙ, һармаҡ бер нәмә. Инәһе күренгәс тә, тишектән ярты кәүҙәһен сығарып, сырылдарға тотона.

Нисә ҡарама, сыйырсыҡ ояһына дүрт күҙ төбәлгән була. Болдорҙа сәсенә ҡыҙыл таҫма таҡҡан ҡыҙ ултыра. Уның исеме — Әлфиә. Ике күҙ — ана шул ҡыҙҙыҡы. Ә теге икеһе — кәртә башында ара-тирә йоҡлағанға һалышып ултырған ала бесәй күҙҙәре. Әлфиә уйлағанын ҡысҡырып әйтә: «Их, анау ҡош ҡолап төшһөн ине! Мин уны өйгә алып инер ҙә ярма сүҡытыр инем...» Ә бесәй өндәшмәй. Шуға күрә уның ни уйлауын белеүе ҡыйын. Бәлки, ул былай, ғына, ҡыҙыҡ итеп кенә, ҡарай торғандыр.

Әлеге һармаҡ ҡошсоҡ торған һайын ҡомһоҙлана бара. Инәләре оҙағыраҡ ҡайтмай торһа, ауыҙын асып, хәҙер оянан килеп сыға. Муйынын һуҙып-һуҙып, инәһен саҡыра. Ул саҡырыу менән генә ҡайтамы ни инде, эше бөтмәгәс?

Теге сыҙамһыҙ нәмә бер саҡ оя алдындағы кескәй баҫҡысҡа уҡ килеп сыҡты. Әллә ҡағынырға, әллә талпынырға итте. Әммә ул тигәнсә барып сыҡманы. Аяғы тайып киттеме, яҙа баҫтымы — ҡош балаһы үләнгә йығылып төштө. Шуны ғына аңдып торған бесәй кәртәнән

һикерҙе. Ләкин Әлфиә бесәйҙән йылдамыраҡ булып сыҡты. Сыйырсыҡ балаһын ул эләктереп алды. Бесәй бары күҙҙәрен генә йылтыратып ҡалды. Шул арала инә сыйырсыҡ та ҡайтып етте. Сыр-сыр килеп, ул Әлфиәнең баш осонда әйләнергә кереште. Ҡанаттары менән уның иңбашына, сәстәренә ҡағылып үтте. Шуҡ булһа ла, бала бит, сит кешегә биргеһе килмәй, күрәһең. Әй инәлде сыйырсыҡ, әй иланы. Тик Әлфиә уның телен аңламаны. Ҡошсоҡто услап, өйгә йүгерҙе. Ә сыйырсыҡ байтаҡ ваҡыт ишек тирәһендә ары-бире һуғылып осоп йөрөнө лә, өмөтөн өҙөп, яңынан үҙ эшенә тотондо.

— Бына, әсәй, сыйырсыҡ балаһы тоттом, оянан ҡолап төштө, — тине Әлфиә. — Ярма бирсе тиҙерәк.

— Бар, хәҙер үк кәртә башына сығарып ҡуй үҙен, — тине әсәһе, — инәһе табып алыр.

— Кәртә башында бесәй ултыра, — тип ҡарышты Әлфиә.

— Ә һин бесәйҙе ҡыуып ебәр...

Әсәһе күпме әйтмәһен, Әлфиә ҡошсоҡто ҡулдан ысҡындырырға теләмәне.

— Был ҡошсоҡ һәләк кире ул, әсәһен һис тә тыңламай, ҡарыша. Моғайын, әсәһе уны яратмайҙыр әле, — тип ҡараны Әлфиә.

— Һин дә кире лә, үҙеңде яратабыҙ бит... Муйынын бер яҡҡа ҡыйып һалған ҡош балаһы ярма ла суҡыманы, һыу ҙа эсмәне. Әллә ауырыймы икән тип, Әлфиә уға дарыу ҙа ҡаптырып ҡараны, ҡошсоҡ уны ла ҡапманы. Бәләкәстәр дарыу эсергә яратмайҙар шул.

— Тиҙ үк сығарып ҡуй! — тине лә әсәһе, күнәктәр алып, шишмәгә һыуға китте.

Әлфиә «йә» тиһә лә әсәһен тыңларға ашыҡманы. Ул ҡошсоҡто өйҙә генә осорға өйрәтергә булды. Әле ишектән тәҙрә яғына, әле тәҙрәнән ишек яғына сөйөргә тотондо. Ә ҡош балаһы бер-ике ҡабат ҡанат елпене лә лып итеп иҙәнгә ултырҙы. Үҙ эше менән мауыҡҡан Әлфиә, асыҡ тәҙрәнән инеп, мөйөшкә боҫҡан ала бесәйҙе күрмәне лә. Бесәй бөтәһен дә күреп, самалап ултырҙы. Әлфиәнең ҡошсоҡто тәҙрә яғына сөйөүе булды, теге бахырың бесәй ауыҙына килеп тә эләкте. Ала бесәй тәҙрәнән һикереп тә ҡасты. Бар, тот һин уны...

Өйҙә ҡошсоҡ күренмәгәс, әсәһе уны-быны һорашып та торманы. «Ҡош балаһы инәһен тапҡандыр», — тип уйланы, күрәһең. Әлфиә лә һис нәмә өндәшмәне. Кискә тиклем күңелһеҙ йөрөнө, сыйырсыҡ ояһына ҡарағанда, ниңәлер күҙҙәренән йәш тәгәрәп төштө...

Төндә кескәй ҡыҙ шундай төш күрҙе. Ҡурҡыныс ҡара урманда ул аҙашып йөрөй, имеш. Тирә-яғында бүреләр олой, айыуҙар үкерә, әллә ниндәй йәмһеҙ ҡоштар ҡысҡыра, быҙау ҙурлығы ала бесәй, күҙҙәрен йылтыратып, уға ташланырға самалай. Әлфиә өшөп-туңып бөткән, өҙлөкһөҙ дер-дер ҡалтырай. Ни эшләргә белмәй торғанда, ағас ботағына оя ҡорған дәү ҡош ҡыҙҙы үҙ янына саҡырҙы.

— Мин усал ҡош түгел, мин — сыйырсыҡ, кил минең ояма, бында тыныс, йылы, — ти.

Әлфиә, үрмәләп, ҡош янына менә, ә ҡош уға тағы өндәшә:

— Минең биш балам бар ине, бөгөн шуларҙың береһен бер усал ҡыҙ урлап китте. Ә һин ҡурҡма. Мин бур түгел. Иртәгә, ҡояш сыҡҡас та, үҙеңде әсәйеңә илтеп бирермен. — Шулай ти ҙә ҡош уны үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ҡанат аҫтында, баштарын ҡырын һалып, дүрт ҡошсоҡ йоҡлап ята. Ҡыҙ ҙа шунда уҡ йылынып йоҡлап китә.

...Төндә уянған әсәһе был ваҡыт ҡыҙының өҫтөнән төшкән юрғанды һәйбәтләп яңынан япҡайны.

1960

ҠАЙЫН УРМАНЫНДА

Беҙҙең ауыл эргәһендә генә ҡайын урманы бар. Йәй көнө унда юҡ нәмә юҡ: ҡоштар һайрай, күбәләктәр оса, сәскәләр үҫә, бөшмәктәр бүртенә, еләктәр бешә.

Ҡояш күтәрелеп, үлән япраҡтарындағы ысыҡ кипкәс, Әлфиә ана шул урманға китте. Ул башына аҡ эшләпә кейгән. Шуға күрә сәсенә тағылған ҡыҙыл таҫмаһы күренмәй. Бәлки, уны бөгөн тағып та тормағандыр. Ҡулындағы кескәй кәрзинкәһендә нимә бар икән, тиһегеҙме? Әлегә бер нәмә лә юҡ. Урманға шулай буш баралар инде. Ҡайтҡанда, һеҙ уның кәрзинкәһенә күҙ һалығыҙ. Ниҙәр барын шунда күрерһегеҙ.

Урманға етер-етмәҫ үк, Әлфиәгә ҡыҙыл ҡанатлы бик матур күбәләк тап булды. Ул, сәскәнән сәскәгә ҡуныш, яй ғына осоп йөрөй. Ҡулың һуҙ ҙа тот та ал үҙен! Әлфиә күбәләккә үрелде. Инде тоттом тигәндә, теге тағы осоп китте. Ҡыҙ уны ҡыуырға тотондо. Шул саҡ күбәләк былай тине:

— Мин бөгөн иртән генә йәшәй башланым. Һин миңә теймә. Иркенләп бер уйнап ҡалайым. Үҙең уйнағанда шулай ҡыуыш йонсотһалар, рәхәт булырмы һуң? — Шул һүҙҙәрҙе әйтте лә күбәләк арыраҡ осоп китте. Әлфиә күбәләккә башҡаса ҡағылманы.

Урманда һәйбәт нәмә бер күбәләк кенәме ни? Ана ниндәй матур сәскәләр үҫә. Теләһәң — ҡыҙылын, теләһәң — ағын, теләһәң — зәңгәрен өҙ. Әлфиә сәскә йыйырға уйланы. Ул яңы ғына асылып сыҡҡан ҡыҙыл сәскәгә үрелде. Өҙҙөм генә тигәндә, сәскә илап ебәрҙе:

— Ай-ай! Аяғымды ауырттыраһың. Ниңә ул тиклем ҡаты тотонаһың? Ай! Ебәр! — Әлфиә сәскәне ебәргәс тә, теге, илауынан туҡтай алмай, һөйләнә бирҙе. — Мин бәләкәс бит әле. Яңы ғына бөрөнән сыҡтым. Ә һин һуғышаһың. Үҙеңдең аяғыңды шулай ҡыҫып тотһалар, рәхәт булыр инеме?

Әлфиә, сәскәне ҡалдырып, урман эсенә инеп китте. Ҙур ғына бер ағас төбөндә уға аҡ эшләпәле бер бәшмәк осраны. Арыраҡ һирәк үлән араһында бүтән эшләпәләр ҙә күренде. «Бәшмәк йомшаҡ бит, уның тәне ауыртмайҙыр», — тип уйланы Әлфиә. Кәрзинкә тултырып, ул бәшмәк йыйырға булды. Әлеге аҡ эшләпәгә үрелде. Тейертеймәҫ үк, бәшмәк сырылдарға тотондо:

— Эшләпәмде... эшләпәмде боҙаһың, тим! Үҙеңдең эшләпәңде боҙһалар, рәхәт булырмы һуң?

Әлфиә тиҙ үк ҡулын тартып алды. Бәшмәк һаман сырылдай бирҙе:

— Мин дә һинең кеүек ҡыҙ! Мин — бәшмәк ҡыҙы. Мин һинең эшләпәңде боҙмайым бит, һин дә кешенекенә теймә! — Асыуына сыҙаша алмай, шулай әрләшә торғас, бәшмәк торған еренән ергә ауҙы.

Әлфиә, аптырап, ҡайтырға борολдо. Ул кескәй генә аҡланға килеп сыҡты. Унда тәгәрәп-тәгәрәп еләктәр бешкән. Ҡыҙ инде уларҙы өҙөргә баҙнат итмәне. Күҙҙәрен

мөлдөрәтеп ҡарап тик торҙо. Иң ҙур ҡыҙыл еләк, башын яй ғына бороп, ҡыҙға үҙе өндәште:

— Нимәгә иҫең китте? Ниңә беҙҙе өҙмәйһең?

Әлфиә яуап ҡайтарманы. Теге еләк татлы һүҙҙәр теҙеп китте:

— Беҙ инде тамам бешеп өлгөрҙөк. Ғүмеребеҙ барыбер күп ҡалманы. Һин беҙҙе күп итеп йыйып кит. Өйҙә әсәйең беҙҙән ҡаҡ ҡойор, варенье ҡайнатыр, һалҡын ҡыш килгәс, һеҙ, күмәкләп табынға йыйылып, ҡаҡ, варенье менән сәй эсерһегеҙ. Шул саҡ урман аҡланын, беҙҙең менән бергә йәшәгән сәскәләрҙе, күбәләктәрҙе, бәлки, хәтергә төшөрөрһөгөҙ. Беҙ йәшәгән йәйҙе һағынып ҡуйырһығыҙ. Тартынма, өҙ беҙҙе. Беҙ шундай тәмлебеҙ, хуш еҫлебеҙ. Беҙ — ер менән ҡояш балалары.

Әлфиә башта еләктәрҙе шикләнеберәк өҙҙө. Ҡарышыусы булмағас, ул тиҙ үк ҡыйыуланып китте. Еләктәр кәрзинкәгә үҙҙәре лә һикереп менде085ләр, ахырыһы. Кәрзинкә һә тигәнсе тулды. Ҡыҙ йүгерә-йүгерә өйгә ҡайтты. Баяғы ҙур еләктең нимәләр әйткәнен әсәһенә һөйләп бирҙе. Әсәһе еләктәрҙең теләгенә ҡаршы килмәне. Уларҙан ҡаҡ ҡойҙо, варенье ҡайнатты.

Ысынлап та, ҡышын, сатлама һалҡын кистәрҙең береһендә, еләк вареньеһы менән сәй эскәндә, Әлфиәнең атаһы ошо һүҙҙәрҙе әйтте:

— Бөтә өйгә йәй еҫтәре таралды бит. Бер һағынмаһаң, бер һағынырһың шул еләкле, сәскәле йәй айҙарын...

1960

«ТЕГЕ ЯҠҠАМЫ, БЫЛ ЯҠҠАМЫ?»

Әлфиә ул саҡта бәләкәс ине әле. Әсәһе ҙур көҙгө алдындағы өҫтәлдән ҡыуып төшөргән өсөн, ул бик ныҡ үпкәләне.

— Һеҙ мине гел әрләп кенә тораһығыҙ, мин һеҙҙән китәм, — тине.

— Бар кит, — тинек беҙ.

— Китәм, — тине. Ботинкаларын алып кейҙе. Ләкин ботинкаһының бауҙарын бәйләй алманы. Бәйләй белмәй ине.

— Бәйләп бирегеҙ, — тине. Әсәһе ботинка бауҙарын бәйләне.

Әлфиә пальтоһын кейергә барҙы. Тик элгескә буйы етмәне.

— Пальтомды бирегеҙ, — тине. Ағаһы пальтоһын алып бирҙе. Өҫтөнә кейеп алғас, ишеккә ынтылды. Тотҡаға үрелде. Тағы буйы етмәне.

— Ишекте асығыҙ! — тине. Мин ишекте астым.

Әлфиә йүгереп урамға сыҡты ла ҡапыл туҡтап ҡалды. Ары ҡараны, бире ҡараны. Аҙаҡ килеп, ҡулын болғай-болғай, минән һораны:

— Те яҡҡамы, бы яҡҡамы?

— Белмәйем, — тинем мин.

Ишек төбөндә баҫып торҙо-торҙо ла ул кире өйгә инде. Күрәһең, ҡайһы яҡҡа китергә белмәгәндер. Белһә, моғайын, китеп барған булыр ине.

1963

ҠЫШ БАБАЙ БӘЛӘКӘЙ САҠТА

1

Ул ҡышты Әлфиә ятып сирләй ине. Талпыныш-талпыныш күбәләк ҡар яуғанды ла, өйөрөлөп-өйөрөлөп буран уйнағанды ла бары тәҙрә аша ғына күрҙе. Ҙур малайҙар өй артында ҡарҙан тау өйҙөләр. Балалар баҡсаһынан ҡайтҡас, бәләкәстәр, сыр-сыу килеп, шунда сана шыуҙы. Әлфиә быныӊ береһен дә күрмәне: уларҙыӊ өй тәҙрәләре урам яҡҡа ҡарай ине. Ә тегендә, ҡаланыӊ иӊ ҙәү майҙанында, балалар ҡыуанһын тип, Ҡыш бабай боҙҙан, былтырғынан да матурыраҡ итеп, бейек, яҡшы һарайҙар, селтәрле күперҙәр һалды. Әкиәттәге айыуҙар, төлкөләр, бүреләр, ҡуяндар, тейендәр, тағы әллә ниндәй йәнлектәр шул һарайҙарға торорға килде. Селтәрле күперҙәр аша үтеп, кешеләр майҙандағы тамашаларҙы ҡарап йөрөй. Тамашаларҙыӊ да тамашаһы — һарайҙар уртаһындағы бейек елка ине. Ер менән күктеӊ бөтә биҙәктәре, әйтерһеӊ дә, шунда ғына йыйылған инде! Тик Әлфиә генә майҙанға бара алманы. Ул ятып сирләй ине шул.

Шулай ҙа Ҡыш бабай Әлфиәне лә онотманы. Яӊы йыл етер алдынан, уныӊ тәҙрә быялаһына үлән ҡыяҡта-

ры, сәскә япраҡтары, бойҙай башаҡтары, тағы бүтән төрлө матур-матур биҙәктәр төшөп торҙо. Һәр иртә һайын ул биҙәктәр гел үҙгәрә барҙы.

— Бынау һүрәттәрҙе кем төшөрә, әсәй? — тип һораны Әлфиә.

— Һиңә бүләк итеп, Ҡыш бабай төшөрә, ҡыҙым, — тине әсәһе.

— Ә ниңә һуң ул гел япраҡтар менән сәскәләр генә төшөрә?

— Кешеләр йәйҙе һағынғанды белеп, шулай итә ул.

2

Иртәгә яңы йыл тигән көндө Әлфиә ятҡан бүлмәгә лә тәпәш буйлы йөнтәҫ кенә бер елка инеп баҫты. Уның ботаҡтарына әсә йылтырауыҡ уйынсыҡтар элде, төбөнә аҡ мамыҡ түшәне. Мамыҡ өҫтөнә ап-аҡ тунлы бәләкәс кенә Ҡыш бабайҙы баҫтырып ҡуйҙы. Елка, әлбиттә, ҡала майҙанындағы теге елка һымаҡ уҡ ҡупшы килеп сыҡманы. Шулай ҙа өйгә яңы йыл еҫе аңҡыны, йәм инде.

Байрам ул хатта сирлеләрҙең дә күңелен күтәрә. Әсәһе сыҡҡан арала, Әлфиә лә, урынынан тороп, шыршының сәнскеле ботаҡтарын һыйпаны, эленгән уйынсыҡтарҙы тотоп ҡараны. Ҡыш бабайҙың алдына теҙләнеп, быш-быш килеп ниҙер һөйләнеп алды.

Шунан һуң ул, арып, йәнә түшәгенә барып ауҙы. Елка төбөндәге Ҡыш бабайҙан күҙен алмай, бик оҙаҡ шымып ятты.

Әсәһе урап ингәс, ул тағы һорашырға тотондо:

— Ҡыш бабайҙың бәләкәй сағы булдымы икән, әсәй?

— Булғандыр инде...

— Бәләкәй саҡта ҡайҙа булған һуң ул?

— Әллә инде...

— Ниңә беҙгә гел Ҡыш бабайҙар ғына килә, Ҡыш малайҙар бер ҙә килмәй?

— Ҡыш малайҙар булмайҙыр ул...

— Була! Була! — Әлфиә тороп уҡ ултырҙы. — Кеше бер юлы ғына бабайға әйләнмәй ҙә...

Ысынлап та, Ҡыш бабайҙың бәләкәй сағы булғанмы икән? Был нәмә әсәнең уйына ла ингәне юҡ ине. Шуға күрә ул ҡыҙына асыҡ яуап бирә алманы.

Әлфиәнең атаһы алыҫ ҡалаға эш менән киткәйне. Төнгә ҡаршы унан ҡотлау телеграммаһы килде. Телеграмманы ҡат-ҡат ҡысҡырып уҡып сыҡтылар. Әле яңы йыл сәғәте һуғырға байтаҡ ваҡыт бар ине. Әсә, шәленә төрөнөп, аяҡтарын бөкләп, йомшаҡ диванға менеп ултырҙы ла бер аҙҙан ойоп та китте. Эштән бик арып ҡайта шул ул.

Әлфиәнең күҙҙәре йәнә Ҡыш бабайға төҡтәлды. Ул моғайын, өшөйҙөр әле. Эйе шул. Бит алмаларын, ана, һыуыҡ ҡыҙартҡан, һаҡал-мыйығына боҙ ҡатҡан, ҡаштарына бәҫ ҡунған. Бәләкәс ҡыҙҙың кескәй йөрәге леплеп тибә башланы. Ул һаҡ ҡына урынынан торҙо ла, Ҡыш бабайҙы алып, юрған аҫтына йәшерҙе.

— Абау, ҡалай өшөгәнһең! — тип бышылданы ул. — Йылынып ҡына йоҡла шунда. Тик тәүҙә шым ғына һөйләә миңә: Ҡыш бабайҙарҙың бәләкәй сағы булғанмы? Булған бит! Эйе бит! Һөйлә инде. Минең бик белгем килә.

Ҡыш бабай һөйләй белмәй шул. Әгәр ул телгә килһә, был әңгәмәне мин түгел, ул һөйләп бирер ине. Бына нәмәләр һөйләр ине ул:

3

...Борон-борон заманда беҙ бик күмәк шаян ҡар бөртөктәре инек. Юғарыла, күктә, әйләнеп-әйләнеп уйнап йөрөнөк тә бер төндә ергә яуа башланыҡ. Оҙаҡ яуҙыҡ, бөтә ер йөҙөн ҡаплап алдыҡ. Ел сығып, беҙҙән тауҙар өйҙө, һырынтылар яһаны. Беҙҙең өҫтә балалар шаулашып тау шыуҙы. Далалағы ағуналар, аҡ ҡуяндар, беҙҙе соҡоп, үҙҙәренә оя яһаны. Беҙ үҙебеҙ һалҡын булһаҡ та, өшөгәндәрҙе йылыта беләбеҙ.

Шулай ҙа олоғайҙым, ахырыһы, күберәк һөйләйем. Һүҙ һуҡмағым борғолана башланы... Эйе, элек беҙ ергә төшкән иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ҡар бөртөктәре инек. Бер көндө шулай урамда — бында ҡалала түгел, алыҫ ауыл урамында — дүрт бала ҡар бәрешеп уйнай ине. Шуны ла әйтәйем, кешеләр беҙҙең менән бәрешһә, беҙгә үтә ҡыйын була торғайны. Әлеге дүрт баланы мин һаман да хәтерләйем. Үҙемдән сығарып һәр береһенә исем дә

ҡуштым. Береһе — Яҡшы малай, береһе — Яман малай, береһе — Уңған ҡыҙ, береһе — Илаҡ ҡыҙ.

Яҡшы малай уйындан ҡапыл туҡтаны ла иптәштәренә былай тине:

— Әйҙәгеҙ, малайҙар, ҡарҙан кеше яһайбыҙ! — Ул ҡыҙҙарға ла «малайҙар» тип өндәшә торғайны.

— Ҡуй бушты, — тип ҡарышты Яман малай. — Кәрәге бар тағы! Ҡарҙан да кеше булһын, ти, имеш... — Ул, мыҫҡыллы көлөп, хатта ауыҙын ҡыйшайтты. Шул ҡыйшайыуҙан ауыҙы бөтөнләй төҙәлмәҫ булды.

Ә беҙҙең кеше булғыбыҙ бик килә ине. Ҡар көйө аяҡ аҫтында тапалғансы, кеше булып, аяҡ үрә баҫып йәшәүгә ни етә? Ҡарҙан булһаң да, һин кеше бит әле. Беҙ, шулай уйлап, ҡыуаныстан шығырлашып та ҡуйҙыҡ.

Ярай әле араларында Уңған ҡыҙ бар ине. Ул шунда уҡ ырғый-ырғый сәпәкәй итергә тотондо:

— Яһайбыҙ! Яһайбыҙ! — тине.

Илаҡ ҡыҙ ҙа уға ҡушылды. Ике ҡулын кеҫәһенә тығып, Яман малай бер үҙе ситтә нимәлер тибеп йөрөнө лә тиҙ үк китеп барҙы. Ҡалған өсөһө, беҙҙең күмәгебеҙҙе әүәләп, мине яһарға кереште. Тәүҙә кәүҙәмде йомарланылар. Бер аҙ маташҡас, Илаҡ ҡыҙ: «Ҡулым өшө-өнө-ө», — тип илап ҡайтып китте. Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ минең кәүҙәмә бик аҡыллы бер баш ултыртты, үткер күҙҙәр ҡуйҙы. Һиҙгер ҡолаҡтар тиште, ҙур ғына танау йәбештерҙе, ике эшлекле ҡул яһаны. Ҡыҫҡараҡ булһа ла, аяҡтарым да бар ине. Торғаны менән кеше булдым.

Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ эштәре эш булыуға һөйөндө, мин әҙәм рәтенә инеүемә шатландым. Ул ҡышты бик күңелле уҙҙырҙыҡ. Көндәр буйы бишәү бергә уйнаныҡ. Уйнаныҡ тип ни инде, улар уйнаны, мин ҡарап торҙом. Шулай ҙа күңелле ине.

Тик Яман малай ғына миңә тынғы бирмәне. Кеше күрмәгәндә, йә ҡулымды һындырып ташлай, йә ҡолағымды ҡуптарып ала, йә танауымды китеп төшөрә, йә кәүҙәмә таяҡ тығып китә. Ҡыҙғаныу ҙа, оят та юҡ үҙендә. Ҡарҙан яһалған булһам да, мин кеше бит әле. Кешене шулай ыҙаларға яраймы ни?

Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малай мине һәр саҡ бәләнән ҡотҡара торҙо. Һынған ҡул урынына яңыны яһанылар,

китек танау урынына тағы ла яҡшыраҡ танау ҡуйҙылар. Бөтөнләй ҡолаҡһыҙ ҙа тороп ҡалманым. Тик ике ҡолаҡ япрағым гел генә ике төрлө килеп сыҡты. Йә береһе оҙон, береһе ҡыҫҡа, йә береһе арҡыры, береһе буй булды. Һис кенә лә иш килмәнеләр. Уныһына мин артыҡ иғтибар ҙа итмәҫ инем. Тик баяғы Яман малай ғына, шул ҡолаҡтарымдан көлөп, эсемде бошора торған булды.

Нисек кенә булмаһын, рәхәт йәшәнем мин ул ҡышты. Теге Илаҡ ҡыҙҙың ерле юҡҡа сарбайлап илауына ла күнектем. Яман малайҙың аҫтыртын яуызлыҡтарын да сыҙамлыҡ менән кисерҙем. Ул яфалар мине сыныҡтырҙы хатта. Дуҫтар бар саҡта, дошман да ҡурҡыныс түгел икән.

Һәр шатлыҡтың бер аҙағы була. Өй түбәһенән беренсе тамсының тамыуы булды — йөрәгем жыу итеп китте. Был — яҙ хәбәре ине. Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, күңелем төшә барҙы. Йәшерен генә илаштырғылап та алдым. Бәлки, ҡояшҡа тура ҡарауҙан күҙем сағылып, йәштәрем шулай бәреп сыҡҡандыр. Нимә генә тимә, өҙлөкһөҙ эсем бошто, һурылып, тартылып киттем.

Көньяҡтан йылы елдәр иҫте. Ҡара ҡарғалар, сыр-сыу килеп, үҙ ояларына ҡайтты. Торған һайын минең тыным ҡыҫыла төштө. Көндәрем һанаулыға ҡалғанын тоя башланым. Бәхеткә ҡаршы, бер таңда ҡаты ҡырау төштө. Миңә хәл кереп китте. Тәнгә көс ингәс, башыма ла бик һәйбәт бер уй килде: «Китергә кәрәк, китергә...» — тинем. Ә ҡайҙа китергә икәнде миңә ел әйтте: «Мин ҡайһы яҡҡа иҫһәм, һин шул яҡҡа бар», — тине. Мин шунда уҡ юлға сыҡтым. Тәүге мәлдә атлауы ҡыйын булды. Ҡыш буйы тик тороп, быуындарым ҡатып киткән икән. Тиҙ үк яҙылдылар улар. Бара торғас, йылы елдәр артта уҡ тороп ҡалды. Мин боҙ тауҙары күгәреп ятҡан Ҡыш иленә килеп сыҡтым.

Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малай мин киткәнде белмәй ҡалды. Улар менән хушлашмауыма бик үкендем. Үҙҙәрен үтә һағындым. Икенсе ҡышты, уларҙы юллап, тағы был яҡтарға килеп сыҡтым, ләкин дуҫтарымды таба алманым. Анау саҡта, мин киткән таңдың иртәһендә, мине эҙләп, улар алыҫ яҡтарға ҡарай юл тотҡандар икән. Тик йылы ел артынан түгел, уға ҡаршы, бөтөнләй тиҫкәре

яҡҡа, китеп барғандар. Әле булһа мине эҙләп йөрөйҙәр, ти. Был турала миңә Ҡара ҡарға әйтте.

Шул замандан бирле, дуҫтарымды тапмаммы тип, һәр йыл бында киләм. Бына хәҙер ҡартайып та бөттөм. Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малайҙы әле булһа таба алғаным юҡ. Әммә уларға нык оҡшаған балаларҙы бик-бик күп осраттым. Улар менән таныштым, дуҫлаштым.

Яман малай менән Илаҡ ҡыҙҙы ла килгән һайын күрәм. Улар бер ҡайҙа китмәгән. Үҙҙәре һаман шул көйө тора: үҫмәгәндәр ҙә, үҙгәрмәгәндәр ҙә...

4

Был ваҡытта Әлфиә йоҡлай ине. Әкиәт тыңлағанда, шулай йоҡлайҙар инде ул.

1963

Хикәйәттәр, әкиәттәр

МЫЛТЫҠТАН АТМАҪҠА!

Тимербулатҡа арнала

Ағиҙел башланған яҡта Әүәләк тигән тауҙа булды был хәл. Тауҙың түбәһендә, киртләс-киртләс булып, эре-эре таштар өйөлгән, итәктәрен бейек урман ҡаплаған, урыны-урыны менән шырлыҡтар осрай. Ошо урманда ҡыҙыл бөрлөгән, тиһеңме, ҡара көртмәле, тиһеңме — яҫтыҡ ише, түшәлеп ята. Аҡландарында күбә саҡлы ҡырмыҫҡа иләүҙәре, үлән төптәрендә ауыҙҙарынан бал еҫе аңҡып торған иңкеш ояларын, бихисап һимеҙ һуҡыр сысҡан юлдары — былар бөтәһе лә ер биҙәге генә түгел, тамаҡ һыйы. Ошондай һыйлы, йомарт урынды кем төйәк иткән, тиһегеҙ? Ҡоралай? Юҡ, Бурһыҡ та түгел. Бүре, тимәксеһегеҙме? Ул да түгел. Тапманығыҙ. Улайһа үҙем әйтәм. Айыу. Исеме һороҡай. Ул исем олатаһынан — атаһына, атаһынан быға күскән. Айыуҙар исемгә ҡарата талымһыҙ улар. Төрлөһөнә төрлө исем эҙләп баш ватмайҙар. Ана рус айыуҙарына ғына ҡара, балаларының бөтәһе лә Мишутка, өлкәндәре Михаил Иванович та Настасья Петровна.

Ҡара көҙгә инһә, ошо һороҡайҙың маҙаһы китә бит. Аусылар мылтыҡ тоталар ҙа ауға сығалар. Нимә кәрәк уларға? Әлбиттә, һуҡыр сысҡан менән ала ҡарға түгел. Айыу кәрәк. Һороҡай өс балаһын эйәртә лә, бер ғәйепле ҡасҡын шикелле, тегеләрҙән ҡасып йөрөй. Йә шырлыҡҡа инеп йәшеренә, йә таштар араһына барып боҫа. Үҙ өңөндә торорға үҙе ҡурҡа. Тыуып-үҫкән урманында, төйәк иткән тауында йәшәй инде, бисара, бер килмешәк һымаҡ. Әрнерһеңме шуға, юҡмы?

Һороҡай тумырҡа туҡылдатҡан хәрефте таный, һайыҫҡан шыҡырлатҡан радионы тыңлай ине. Шуға күрә донъя хәлдәрен белеп-төшөнөп тора. Күптән түгел генә: «Быйыл — бөтә Ер шарында балаларҙы яҡлау йылы», — тип Берләшкән Милләттәр Ойошмаһынан хәбәр һалғайнылар. Быны ишеткәс, моҡот Һороҡай уйға ҡалды: «Ниңә быйыл ғына? — тип аптыраны. — Унан һуң балалар бөтөнләй булмаҫмы икән ни? Донъя бөтөрмө икән ни? Аҡылдары менән дан тотҡан кешеләр алдағы көн тураһында ниңә былай тар уйлай икән? Бер йыл, имеш... Бәғзе бөжәк тә оҙағыраҡ йәшәй». Ахмаҡ айыу башына тағы әллә нәмәләр килеп етте. Шулай ҙа уның быйылға ҡурҡыуы кәмене. Һунарсылар, уны атып, өс балаһын күрәләтә етем ҡалдырмаҫ ошондай көр, имен йылда. Сабыйҙарҙың үҙҙәренә ҡулдары былай ҙа күтәрелмәҫ.

Алдағы ҡышҡы өмөт менән ул бик һәйбәтләп өңөн һипләп ебәрҙе, иркен генә йоҡо бүлмәһе йүнәтте, өң ауыҙын ҡаплар өсөн сыбыҡ-сабыҡ йыйҙы, ҡайындан ҙур ғына туҙ ҡуптарып әҙерләп ҡуйҙы. Ҡырпаҡ ҡар төшөр алдынан ул тумырҡаны ҡунаҡҡа саҡырҙы. Тәүҙә уны ҡурылған ҡырмыҫҡа йоморҡаһы, балы һурылған кәрәҙ менән нығ итеп һыйланы, ҡунаҡ тамам хушлашып, суҡышын ҡанаты менән һөртөп алғас ҡына, хужа үҙенең үтенесен әйтте. Суҡышынан килгән эште тумырҡа һәр ваҡыт күңел биреп, ялындырмай эшләй.

Был юлы ла шулай булды. Һороҡай әйтеп торҙо, ул әлеге туҙға туҡылдатып яҙа барҙы. Һә тигәнсе ошондай иғлан килеп сыҡты: «Алда торған ун быуат — бөтә ер йөҙөндәге балаларҙы һаҡлау мең йыллығы буласаҡ. Баласаға ҡурҡытып, мылтыҡтан атмаҫҡа!»

Иғланды ул торлағы янындағы ҡарағайға йәбештерҙе. Ыҫмалаһы ышаныслы ине. Ошо эштәрҙе башҡарғас, балалары янына өңгә сумды айыу.

Тәүге ҡар күҙәнәгенең күренеүе булды, һунарсылар, эттәрен һаулатып, айыу биләмәһенә килеп тә инде. Бына улар, мылтыҡтарын тоҫҡап, өң ауыҙына яҡынлашты. Бына шарт та шорт ата башлаясаҡтар. Ярай, бәхеткә ҡаршы, аусылар ҙа хәреф таный икән.

— Нимә был? Күҙлекһеҙ күрмәйем, — тине иң өлкәне, туҙға яҙғанды шәйләп.

— Әмер, — тине иң кесеһе, иң үткер күҙлеһе.

— Ниндәй әмер тағы? — тип мығырланы уртансыһы. — Шул әмерҙән баш сыҡмай...

— Был бик мөһим әмер! —тине үткер күҙле.

— Уҡып ишеттер! — тип әмер бирҙе иң өлкәне.

Иң кесеһе ҡысҡырып уҡып бирҙе: «Алда торған ун быуат — бөтә ер йөҙөндәге балаларҙы һаҡлау мең йыллығы буласаҡ. Бала-саға ҡурҡытып, мылтыҡтан атмаҫҡа!»

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ау эттәре, өрөүҙән туҡтап, ҡыуаныстан ҡойроҡ болғарға кереште. Уларҙың да өйҙә көсөктәре бар ине.

Һунарсылар башта аптыранылар, шунан уйға ҡалдылар, үҙҙәренең ҡырын эштәрен аңлап, аҙаҡтан ныҡ ҡына оялдылар. Иң өлкән һунарсы кесеһе менән уртансыһына ла күп итеп ҡоро-һары йыйырға ҡушты. Тегеләр ҙур өйөм өйөп ташлағас, үҙе ут һалды. Оҙон-оҙон телле ялҡын һауаға ынтылды. Танауына төтөн еҫе килеп бәрелгәс: «Өңдән төтәҫләп сығаралар икән», — тип, һороҡайҙың ҡото осто. Юҡҡа шикләнде ул. Усаҡты тегеләр ситкә яҡҡайны.

— Мең йыл буйы әллә йәшәп була, әллә юҡ. Был ҡоралдың хәжәте ҡалманы, былай булғас, — тип көрһөндө иң йәше.

— Мең йыл буйы тутығып, эштән сығыр инде, — тип бошондо уртансыһы.

— Мең йыл буйы мылтыҡ һаҡлағансы, айыу балалары менән әҙәм балаларын һаҡлайыҡ, — тине иң өлкәне, шунда уҡ ҡулындағы мылтығын, яһауынан бушатып, утҡа ырғытты. Саҡ ҡына икеләнеберек торғас, уртансыһы ла ҡоралын усаҡҡа ташланы. Иң кесеһе, күптән түгел генә ҡулға төшкән мылтығын ҡыҙғанып, байтаҡ ҡуҙғалмай торҙо. Иң өлкәне уға асыулы ишара яһаны. Шул саҡ өсөнсө ҡорал да ялҡын эсенә килеп төштө.

Аусылар бер аҙ ҡулдарын йылыттылар ҙа, аяҡ остарына ғына баҫып, үҙ яйҙарына ыңғайланылар. Нәҡ ошо мәлдә өңдәге айыу балалары мышнай-мышнай йоҡлап китте.

* * *

Айыу балаларын да, әҙәм балаларын да дәһшәтле шартлауҙар татлы йоҡоларынан уятмаһын тигән теләк менән яҙҙым мин был әкиәтте.

1985

ЯЛҠАУ БАЛ ҠОРТО

Минең баҡсамда ҙур һыу мискәһе тора. Күршемдең бал ҡорттары шунда һыуға йөрөй. Умарталарына һыу ташырға тәғәйенләнгән эшселәр улар.

Төнәгөн бер бал ҡортоноң һары күбәләккә һөйләгән зарын ишеттем. Хәтере ныҡ ҡалған булыр нескә билдең: һөйләй ҙә бызылдап илай:

— Ишек төбөндәге һаҡсы ҡорт мине умартаға индермәй, бора ла ебәрә, бора ла ебәрә, — ти.

— Ниңә шулай итә ул? — тип һорай һары күбәләк.

— Итә инде... Үңәс тоҡсайың тулы түгел, былай яртыйорто йөрөтмә, бар тултырып килтер, ти. Шундай усал нәмә ул.

— Бүтәндәргә лә шулай бәйләнәме? — тип төпсөй күбәләк.

— Ю-уҡ. Улар бит арымай, шуның өсөн үңәс тоҡсайҙарын тултырып килтерә. Ә мин арыйым.

— Бүтәндәрҙең арымауын һин ҡайҙан беләһең? — ти һары күбәләк.

— Беләм инде. Улар мыжымайҙар ҙа, зарланмайҙар ҙа.

— И-һи, нескә билкәй, — ти ғәҙел күбәләк, — улар күңел биреп эшләй, шуға күрә арыһалар ҙа һуҡранмайҙар. Уңған эшен ыратыр, ялҡау үҙен һынатыр. Бынан ары эшеңде ырат, ул саҡ һине берәү ҙә ҡыйырһытмаç... — Шулай тине лә, һары ебәк ҡанаттарын елпеп, осоп китте аҡыллы бөжәк.

Ошонан һуң мискә тирәһендә зар һәм ошаҡ һүҙҙәре ишетелмәне. Ә эш гөжләп бара.

1991

МАҠТАНСЫҠ БОРСАҠ

Гөлнурҙың йәшен һораһаң, ул былай тип яуаплай:

— Былтыр дүртем тулғайны, быйыл бишем менән барам: барам-барам да, барып бөткәс, алтыға сығам.

Сығыр ҙа шул. Бик уңған, зирәк ҡыҙ ул.

Гөлнур менән икәүебеҙ быйыл борсаҡ ултырттыҡ. Беҙ уны, өлкәндәр кеүек, ҙур машиналар менән баçыуға сәсмәнек. Ә былай иттек. Тәүҙә көрәктәр менән икәүләп түтәл ҡаҙҙыҡ, ҡул тырмалары менән уны йоп-йомшаҡ

итеп тырматтыҡ, ашлама өсөн тиреҫ һиптек, һуңынан оҙон моронло биҙрәнән ямғыр яуҙырҙыҡ. Был эштәрҙе беҙ кистән эшләнек. Серәкәй талай тип торманыҡ.

Өйгә ингәс, аҡ тоҡсайҙағы борсаҡтарҙың иң эре, иң теремек унауын орлоҡҡа һайлап алдыҡ. Башта мин һананым, шунан Гөлнур үҙе иҫәпләне. Ике юлы ла бер килеп сыҡты. Теүәл унау.

Сынаяҡ аҫтына дымлы сепрәк йәйеп, борсаҡтарҙы шунда тәгәрәттек. «Әйҙә, төн сыҡҡансы иҙрәһендәр, ултырҡас, тиҙерәк морон төртөрҙәр», — тинек. Сынаяҡ аҫтын тәҙрә төбөнә ҡуйҙыҡ. Унда иңле. Таңда ай нуры төшә.

Иртән торғас, Гөлнур тәҙрә эргәһенә йүгереп килде лә, бармаҡ осо менән төртә-төртә борсаҡтарҙы бышылдап һанарға кереште:

— Бер, ике, өс, дүрт, биш... Ул ҡапыл илап ебәрҙе:

— Туғыҙ ине, унау ғына ҡалған! Эй, улай түгел! Унау ине, туғыҙ ғына ҡалған!

Һауытта, ысынлап та, бер борсаҡ етмәй ине. Беҙ ҡасҡынды тиҙ үк таптыҡ. Иҙәнгә тәгәрәп төшкән икән. Ҡаты иҙәнгә бәрелеүҙән, ахырыһы, ҡаҡ маңлайында ҙур оро бүртеп сыҡҡан. Гөлнур тегене кире урынына һалғас, сипылдау ишетелеп ҡалды. Ороһо ауыртыуҙан шулай сипылданы ул.

Ҡояш күтәрелеп ерҙе йылытҡас, борсаҡтарҙы түтәлгә ултырттыҡ. Мин, һуҡ бармағым менән тишеп, соҡор яһай барҙым, ә Гөлнур уларға берәм-берәм орлоҡтарҙы күмә килде. Бөтәһе лә рәхәтләнеп тупраҡҡа сумды. Тик анау ороло борсаҡ ҡына соҡоронан үрмәләп сыҡты.

— Юҡ, юҡ! — тип сипылданы. — Мин тамыр ҙа ебәрмәйем, ҡыяҡ та сығармайым. Мин үҙем генә булам. Үрсей икән, бүтәндәр үрсеһен!

Беҙ уға бүтәнсә ҡағылманыҡ. Нимә эшләр икән тип, ситтән генә күҙәтә башланыҡ. Бер әйләнде лә борсаҡ ҡорһағын ҡояшҡа ҡыҙҙырырға кереште.

— Их, үҙем! Ҡалай шәпмен! Ҡалай аҡыллымын, — тип шапырынды. Шапырыныуҙан ҡорһағы сатнап китте. Шулай ҙа тыйылманы. — Бер үҙемә бер ҡояш. Вәт! — тип һөрәнләне.

Һөрәне лә тынып өлгөрмәне, ҡайҙандыр ҡайын башынан осоп төшкән ала ҡарға маҡтансыҡты суҡыны ла йотто.

Нығытып йәй еткәс, туғыҙ орлоҡтан үрсеп, түтәл тулы борсаҡ өлгөрҙө. Ҡуҙаҡтары шундай күп. Бишен тултырған Гөлнур һанай-һанай ҙа һанап бөтөрә алмай. Әйҙәгеҙ, бергәләп һанайыҡ.

1992

ҠУНАҠ БЕСНӘК

Көн аяҙ. Ағастарҙы бәҫ һырыған. Улар ҡояш нурҙарында йым-йым итеп йымылдаша. Тәҙрәм форточкаһын асыуым булды, өйгә һалҡын һауа бәреп инде. Ҡояшлы булһа ла, көн һыуыҡ, күрәһең.

Шунда уҡ форточка рамына һары түшле ҡарабаш турғай килеп ҡунды. Беҙҙең яҡта уны беснәк тип йөрөтәләр. Ошо беснәк өйгә лә инмәй, кире осоп та китмәй, тик тора. Үҙе ҡалтырана. Өшөгәндер, моғайын. Саҡырмаһам, инмәҫ. Оялсан күренә. Һүҙ башлар өсөн мин уға:

— Һаумы, беснәк, — тинем, — хәлдәр нисек? Ул, башын юғары сөйөп, сәләмемде алды.

— Әйҙә, өйгә ин, түрҙән уҙ, — тип саҡырҙым.

— Си-пи, си-пи, — тип яуапланы ҡошсоҡ. Шунда уҡ өҫтәлдә торған ҡыҙыл телефон трубкаһына ҡунды.

— Шылтыратыр ереӊ булһа, шылтырат. Рөхсәт, — тинем. Ул башын сайҡаны:

— Си-пи, си-пи...

— Бер белгәнеӊ шул «си-пи» ҙә «си-пи». Бүтән һүҙеӊ юҡмы ни? — тип, усымды йәйҙем. Ул, осоп, минеӊ усыма күсте. Ысынлап өшөгән икән. Тәпәйҙәре һап-һалҡын. Муйыны боҙ кеүек. Суҡышын асып, балғалаҡ һабы тығып ҡараһам, шаҡ ҡаттым. Тамағы тулы шеш. Тынын саҡ-саҡ ала. Ярай әле, мәтрүшкәле сәйем әҙер ине. Бер сынаяҡҡа сәй ҡойҙом, сәй эргәһенә биҙәкле бал һауыты, туҫтаҡ тултырып сәк-сәк ҡуйҙым.

— Бал суҡы ла сәй уртла, — тинем. Әйткәнемде ҡошсоҡ аӊлауын аӊланы, әммә бутаны. Ҡараһам, тәүҙә сәй уртлап, һуӊынан бал ҡабып яфалана был. Балын суҡығанда, ауыҙындағы сәйе түгелә лә китә, түгелә лә китә.

— Иҫәр, тәүҙә бал суҡы, артынан сәй уртла, — тип өйрәттем. Ҡунағым хатаһын тиҙ үк төҙәтте. Оҙаҡ итеп баллап сәй эсте, хатта маӊлайына тир бәреп сыҡты. Тик сәк-сәгенә ҡағылманы. Тамағына әлегә аш үтмәйҙер, ахырыһы.

Эсеп туйғас, беснәк ҡанат елпеп алды ла:

— Сирем ҡасты, сирем ҡасты! Өнөм сыҡты! — тип ҡыуанды.

— Һиңә һалҡын тейгән. Бынан ары еңел кейенеп йөрөмә, йәме, — тип өгөт бирҙем.

— Юҡ! Мин туңманым. Минең туным ҡалын. Шарфым йомшаҡ. Кәпәсем йылы. Тамсы ла өшөмәйем. Мин бит әсәйемдән ҡасып боҙ суҡыным. Шунан сирләнем.

— Дөрөҫөн әйтеүең һәйбәт, — тип маҡтаным ҡунағымды. — Бынан ары боҙ суҡыма.

— Һис ҡасан, һис ҡасан... — тип вәғәҙә бирҙе ул. — Рәхмәт, олатай, мин осоп китәм инде.

— Сабыр ит бәләкәс кенә, тиреҢ ҡатһын.

— Тирем ҡатты, тирем ҡатты, — тип, йәнә телефонға һикерҙе.

— ТиреҢ ҡатһа ла ҡал. Бәлки, ҡунып китерһең. Ана тышта ниндәй һыуыҡ.

— Ҡалмайым. Әсәйем борсолор.

— Телефондан шылтыратайыҡ әсәйеңә.

— Беҙҙә хәҙер телефон юҡ шул. Кисә генә яңы ояға күстек.

— Ныҡышмайым. Һин тәрбиәле беснәк икәнһең.

— Иҫән бул, мин киттем! — тип, ҡошсоҡ форточкаға ҡунды.

— Туҡта! Туҡта әле! Әсәйеңә, атайыңа, туғандарыңа күстәнәс алып кит.

Мин сәскәле ҡағыҙға баллы сәк-сәк төрҙөм. Уны зәңгәр ебәк таҫма менән ҡупшы итеп бәйләнем. Төргәкте ҡунағыма һондом. Ул кескәй генә осло суҡышы менән эләктереп алды. Таҫыллы эләктерҙе.

Бер талай ул миңә текләп ҡарап торҙо. Тары ярмаһы саҡлы ғына ике күҙе тулы шатлыҡ ине.

Ҡошсоҡ осоп китте. Миңә бик ямандыу булып ҡалды.

1992

ҠАРЛУҒАС БАЛАҺЫ

Йыл ҡотло килде быйыл. Дүрт оя ҡошобоҙ булды. Имән башындағы ҡупшы өйөнә сыйырсыҡ ҡайтты. Мунса ҡыйығының аҫтына һоро турғай торлаҡ әтмәләне. Кәкре муйыл ботағына ҡыҙылтүш түңәрәк сәңгелдәк аҫты. Йортобоҙ кәрнизенә сәпәп, ҡарлуғас балсыҡтан

ҡыуыш ҡорҙо. Тәүге өсәүһе элек-электән эйәләшкәйне. Ҡарлуғас ошо яҙҙы ғына беҙҙә төйәкләнде.

Ҡоштарҙың төрлөһө төрлө көндө бала осорҙо. Инә ҡарлуғас был байрамды ун һигеҙенсе июнгә тәғәйенләгән икән. Көн аяҙ, тымыҡ. Ерҙең йәшеллеген, күктең зәңгәрлеген күреп туйғыһыҙ. Бер ергә ҡарап һоҡлан, бер күккә ҡарап ҡыуан. Миҙгелен белеп һайлаған зирәк зат. Нәҡ төш еткәндә, ул биш балаһын һауаға күтәрҙе. Уларҙы бер-бер артлы теҙеп, юғарыла ҙур түңәрәк яһап, әйләнеп сыҡты. Үҙе берсә, ярһып, балаларынан өҫкә атыла, берсә алға сыға, берсә артта ҡала. Ҡыуанысынан ниҙәр генә ҡылмай. Ҡошсоҡтары һуң, ҡошсоҡтары! И, талпыналар, и, ашҡыналар!

Икенсе ҡат әйләнгәндә иң арттағы балаһы бүтәндәрҙән ҡалыша башланы, өсөнсө тапҡырҙа, бөтөнләй ҡанаты талып, минең эргәмә ҡолап төштө. Инәһе «фи-исс, фи-исс» тип, быға ташланды, йәнә осоп китте, йәнә урап килде. Был балаһын күтәрә алмағас, өмөтөн өҙөп, тегеләрен ҡыуа китте. Төшкән ҡошсоҡто мин усыма алдым. Уның күҙҙәренә ҡараным. Күҙҙәре һүнеп бара ине. Мин уға тын өрҙөм, суҡышын асып, тел осомдан дым бирҙем. Ул йәнләнә төштө.

— Һиңә ни булды? — тип һораным мин ҡарлуғас телендә.

— Ҡанат төптәрем һыҙлай. Хәлем бөттө, — тип зарланды ул.

Бармаҡ остарым менән мин уның ике ҡанат төбөн ыуҙым, муйындарын һыйпаным, ирендәрем менән тәпәйҙәрен йылыттым, яңағын яңағыма ҡуйып торҙом. Уның күҙҙәренә нур инде.

— Ул тиклем һыҙланырға һин бала ғынаһың бит әле, — тинем. — Кем тейҙе һиңә, кем йәберләне?

— Үҙем ғәйепле. Ул саҡ әле тиремдәге мамыҡты ҡауырһын да ҡапламағайны. Аяҙ таңда бөтә оябыҙ, берберебеҙгә һыйынып, уҡмашып йоҡлағанда, мин, уянып, оя ситенә килдем. Ай нуры эсеп, һалҡын ысыҡҡа ҡойоноп, оҙаҡ торҙом. Нур менән ысыҡ! Ул бер сихыр икән. Рәхәтлектәрен белһәң ине, — тип теҙеп китте... — Бынан һуң мин иң матур, иң көслө, иң моңло ҡош буласаҡмын, тип уйланым. Мин бит, ысыҡҡа ҡойоноп, нур эстем.

Был йән эйәһе күҙ алдымда, әйтерһең, әҙәми затҡа әйләнде. Мин уны күкрәгемдең һул яғына ҡыҫтым. Рухымда күпме көс, тәнемдә күпме йылы бар, бөтәһен уға

бирергә тырыштым. Уның бәләкәс кенә сабый йөрәге минең оҙаҡ йылдар талпынып талсыҡҡан йөрәгем менән йәнәшә типте.

Ҡошсоҡҡа дарман ҡайтты. Ҡанаттары нығыны. Мин ебәргәс, ул, елкенеп, ҡайын ботағына ҡунды.

— Бар, ос инде. Туғандарыңды ҡыуып ет. Әсәйеңде ҡыуандыр, — тинем.

Ул һауаға атылды. Тиҙ үк күҙҙән юғалды. Күп тә үтмәне, тағы минең алдыма килеп ҡунды.

— Унда берәү ҙә юҡ. Мин һинең эргәңдә ҡалам... Ҡанат төптәрем тамсы ла һыҙламай хәҙер, — тине ул ҡарлуғас телендә.

Беҙ күҙгә-күҙ ҡарашып торғанда, баш өҫтөндә генә ҡарлуғас әсе итеп сыйылдап ебәрҙе. Әллә шатланыуы, әллә асыуланыуы шул булды. Бала ҡош үтә көр, үтә тантаналы тауыш менән «фи-и-сс» тип яуап ҡайтарҙы ла инәһе артынан һауаға ынтылды. Улар йәнәшә осоп китте. Осоп барған көйө инәһе ҡанаты менән балаһын өс тапҡыр һөйөп алды. Һанап торҙом.

Табыштылар, ҡауыштылар. Ҡалай һәйбәт килеп сыҡты. Ә мин боронғо йырҙың һүҙҙәрен хәтеремә төшөрҙөм:

Ҡарлуғаскай ҡара, муйыны ала –
Һауаларға ашып юғала…

Ашһын. Уның юлы шунда.

...Ә теге бәләкәс ҡошсоҡ барыбер иң матур, иң көслө, иң моңло ҡарлуғас буласаҡ. Сөнки ул аяҙ таңда ай нуры эсеп, ысыҡҡа ҡойонған бит...

1992

ҺАҠСЫ ҺАЙЫҪҠАН

«Борон-борон заманда — өйрәк өйрәтеүсе, тауыҡ таҡмаҡсы, һайыҫҡан һаҡсы булғанда...» тип башлай торғайнылар әкиәт һөйләүселәр. Тауыҡтың ҡыт-ҡыт итеп таҡмаҡлауы, өйрәктең баҡ-баҡ-баҡ тип өйрәтеүе әле самаға тура килә. Ә бына һайыҫҡан... Гел ҡайҙалыр нимәлер сәлдерергә генә торған һайыҫҡан да булған икән һаҡсы. Бының туҙға яҙмаған нәмә булыуын беҙ күреп тә, һынап та беләбеҙ. Шул арҡала беҙҙең яҡтарҙа һайыҫҡандың абруйы түбән. Теләһә ниндәй малай уға таш ырғытыуҙы

йәки рогатканан атыуҙы бер нәмәгә лә һанамай. Мин дә малай саҡта бер һайыҫҡанға рогатканан тоҫҡаным. Искәндәр Әсҡәте генә арҡыры төштө. «Хоҙай яратҡан йән эйәһе бит ул, юҡҡа һәләк итмә», — тине. Ҡылансыҡ оҙон ҡойроҡ та булған икән йән эйәһе, етмәһә, үҙен «Хоҙай яратҡан», имеш. Шулай ҙа дуҫымды тыңланым.

Би-и-ик күп йылдар уҙғас, әлеге һайыҫҡан менән тағы осраштыҡ. Уныһы былай булды.

Беҙҙең баҡсабыҙҙа өс сейә ағасы бар. Ике йыл рәттән улар ифрат күп емеш бирҙе. Хәйер, улар биреүен бирҙе лә, үҙебеҙ генә ала алманыҡ. Иренгә лә теймәне. Сейәләр ҡыҙара тора, һәр иртә таңда барҡылдаҡтар килеп ябырыла ла иң бешкәндәрен, иң һутлыларын һә тигәнсе сүпләп ҡаса. Нимә генә эшләп ҡараманым: «ҡарасҡы» ла ҡуйҙым, ботаҡтарына аллы-гөллө төрлө таҫмалар ҙа элдем, хатта бер тапҡыр, тегеләр килгәс, мылтыҡтан һауаға ла аттым. Файҙаһы булманы. Аҙна-ун көн эсендә ағастарҙа сейәләр һирәк-һаяҡ ҡына эленеп ҡалды. Улары ла иң аҫҡа, япраҡ ышығына боҫҡан. Ошо төҫлө оятһыҙ талауҙан шаңҡып торғанымда, ҡаршылағы ҡаҙыҡ башына һайыҫҡан килеп ҡунды. Эргәмдә зарымды һөйләр кеше булмағас, туп-тура уға өндәштем:

— Һин, һайыҫҡан, күп йәшәгән, күпте күргән зат. Зирәклегең дә бар, хәйләкәрлегең дә етерлек. Бөтөнләй тәҡәтем ҡалманы. Кәңәш ит, аҡыл бир.

Ҡошҡа үҙемдең бәләмде бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙем. Ул миңә һынап ҡарап торҙо ла:

— Танымайһыңмы ни? Мин һине шунда уҡ таныным, — тине.

— Таныған да кеүекмен, — тигән булдым.

— Ялғанлама. Иҫләмәйһең. Кеше хәтере ҡыҫҡа ул. Беҙ — ҡоштар ғына, яҡшыһын да, яманын да, бигерәк тә яҡшыһын, онотмайбыҙ. Ана тегендә, Димдең арғы яғында, һинең ауылың Келәш эргәһендә тау бар бит. Ошо тауҙа һин миңә рогатканан тоҫҡаның. Иптәшең тыйып ҡалды. Яуызлыҡтан түгел, иҫәрлектән ынтылдың. Бала ғына инең. Дуҫыңды тыңланың. Һәйбәт эшләнең. Яман булһаң, уға баш бирмәҫ инең. Рәхмәт һиңә. Унан һуң инде мин алтмыш ике тапҡыр бала сығарҙым.

Һайыҫҡан һүҙсән булып сыҡты. Барҡылдаҡтарҙың да ҡылығын аңлатып уҙҙы.

— Дөрөҫ, — тип дауам итте ул, — һайыҫҡандар араһында ла төрлөһө бар. Әммә барҡылдаҡтар улар тоҡом-

дары менән алдаҡсылар, уғрылар, талаусылар... Шуға күрә беҙ уларҙы дошман һанайбыҙ. Беҙҙән ҡоттары осоп ҡаса улар. Теге саҡ яман ниәтеңдән кире ҡайттың. Минең йәнемде ҡыйманың. Минән дә изгелек күт. Йәренгә осрашырбыҙ.

Үтә аҫыл ҡош икән дә баһа һайыҫҡан! Биҙәктәре һоҡланып туймаҫлыҡ. Ниндәй ҡупшы ҡанат ҡаға ул. Тулҡында йөҙгән кеүек төҫлө талпынып-талпынып оса.

Киткәндә ул:

— Хуш! — тине.

— Хуш! — тинем мин.

Быйыл да сейә илереп уңды. Ләкин бер бөртөгөнә лә суҡыш һуҙыусы булманы. Таныш һайыҫҡаным, яҡында ғына оя ҡороп, бала сығарҙы. Уның көр, матур тауышы көҙгә тиклем яңғырап торҙо.

Барҡылдаҡтарҙың был тирәлә өнө лә сыҡманы. Һаҡсым ышаныслы ине шул.

Бынан ары йылдың-йылына сейәгә тейенербеҙ инде. Һайыҫҡан ғына иҫән-һау булһын.

1992

ЯҢЫ ЙЫЛ ТЕЛӘКТӘРЕ

Тумалаҡ ҡына көсөк менән икәүебеҙ эскәмйәлә ултырабыҙ. Ҡаршыбыҙҙа ҡар өҫтөндә беснәктәр ем сүпләй.

Тегеләргә ҡарап, көсөк маҡтанырға керешә:

— Әү-әү-әү! Бөгөн минең йыл — эт йылы башлана. Әү-әү!

— Һин бит әле эт түгел, көсөк кенәһең, — тим мин.

— Булһын да, ти. Мин, Яңы йылда үҫә-үҫә, барыбер эт булып етәм. Миңә теләктәр теләгеҙ.

Көсөк дөрөҫ әйтә. Йыл — уныҡы.

Ә теләктәрҙе бөтәһенә лә үҙем әйтәм.

Ҡышҡы зәһәр һыуыҡта балалар ҙа, көсөктәр ҙә танауҙарын туңдырмаһындар.

Яҙын ҡар һыуҙарына итек ҡуңысынан сумып, көсөктәр ҙә, балалар ҙа сирләмәһендәр. Йәй килгәс, көсөктәр ҙә, балалар ҙа үлән өҫтөндә тәгәрләп уйнаһындар. Тауҙарҙа сәскә йыйһындар, аҡландарҙа еләк тирһендәр. Йәйҙең рәхәтен күрһендәр. Йыуа, балтырған, ҡаҡы ашаһындар. Тик самаһыҙ ашап, эстәрен ауырттырмаһындар.

Көҙ килер. Уңыштар мул булһын. Балаларҙың да, көсөктәрҙең дә тамағы бер ҡасан да асмаһын. Тик йылы яҡҡа осоп барыусы ҡоштарға балалар ҙа, көсөктәр ҙә рогатканан таш атмаһындар. Атһалар, ҡулдары ҡорор.

Йәренгә усҡа йылы башлана. Шуға тиклем балалар ҙа, көсөктәр ҙә һау-сәләмәт көйө тағы бер йәшкә ҙурайһын.

— Әү-әү-әү! — тип теләктәремде хупланы көсөк.

1992

АҠ САБАҠ

Һеҙ балыҡтарҙың телен аңлайһығыҙмы? Мин бер аҙ төшөнәм. Теге быяла ҡумтаға ҡойолған һыу эсендә йөҙөп йөрөгән туҙғаҡ ҡойроҡло, ялбыр ҡанатлы ҡупшы балыҡтарҙы әйтмәйем. Уларҙың эреһе лә, вағы ла бары бер генә һүҙ белә: «Мәм, мәм, мәм», — тип ауыҙҙарын аса ла яба. Ем һалһаң, эләктереп алып, тиҙ генә ситкә ҡаса. Рәхмәт тә әйтеп тормай. Шунан, моронон берәй мөйөшкә терәп, мөнтәнләргә керешә. Үҙҙәре ризыҡ табып ашамағас, уларҙың теште ре ҡамырға әйләнгән икән. Шуға күрә сәйнәй алмайҙар, тик мөнтәнләйҙәр генә. Былар менән һүҙ йәбешмәй минең.

Мин Димдәге балыҡтар менән әңгәмәләшергә яратам. Һөйләшеү күберәк Тирәк аҫты тигән урында була. Ошо тәңгәлдә Димгә сылтырауыҡ ҡына Назияз һыуы килеп ҡоя. Назияз тамағында төрлө-төрлө балыҡтар йыйыла. Һоман да, ҡушбаш та, түбәнауыҙ ҙа, йылтыр сабаҡ та, ҡарағанат та бар бында. Вағыраҡтары ситтә генә урала, ҡайһы берҙәре морондарын ярға ышҡып тора. Сығып килгән тештәре ҡысыталыр, күрәһең. Эрерәктәре эстәрәк йөҙә. Ә суртан менән һыла тәрән ерҙе байҡай. Мин яр башына килеп баҫам да:

— Шәпмеһегеҙ, балыҡтар! — тим.

— Сәп, сәп, сәп! — тип тәүҙә бәләкәстәр сәпелдәй. Улары әле «ш» өнөн әйтә белмәй, шуға күрә «шәп» урынына «сәп» килеп сыға.

Унан һуң өлкәнерәктәре:

— Шәпбеҙ, шәпбеҙ! — тип шаптырлап алалар. Иң ахырҙа, эре суртандар һыуҙан һикереп сығалар ҙа, шамбыр-шомбор килеп, сәләм ҡайтаралар:

— Һиңә шатбыҙ! Һиңә шатбыҙ! — тиҙәр.

Бер көндө шундай мәрәкә булды. Яр башына килеп ултырғас та кескәй генә радиоалғысымды ҡабыҙҙым. Унан ифрат моңло боронғо көй ағылды. Моң тәүҙә һауаға ашты, шунан, яй ғына түбән төшөп, һыу өҫтөнә таралды. Бер мәл ҡараһам, минең ҡаршыға көтөү-көтөү балыҡ йыйылып алған. Ҡойроҡтарын яй ғына болғап, ҡанаттарын саҡ ҡына ҡыймылдатып, музыка тыңлайҙар. Бер ҡарт суртан башын һыуҙан яртылаш сығарған. Ахырыһы, ҡолаҡҡа ҡатыраҡтыр. Өлкәндәр кеселәрҙе ҡыйырһытмай, уҫалдар йыуаштарға ташланмай. Моң кешеләрҙе генә түгел, балыҡтарҙы ла татыулаштыра икән. Ҡалай һәйбәт.

Икенсе килгәнемдә сәй ҡайнатырға ниәтләнем. Димдән һыу һоҫоп алам тигәндә, котелогыма бер аҡ сабаҡ һикерҙе лә керҙе.

— Һиңә ҡунаҡҡа барғым килә, — тине.

— Әйҙә, рәхим ит, киттек, — тинем мин. Ул ҡыуанысынан ике тапҡыр сумып сыҡты.

Котелогымды тотоп, мин өйгә йүгерҙем. Баҡсалағы ҙур ялғашҡа һалҡын һыу тултырып, балыҡты шунда ебәрҙем. Әй йөҙҙө, әй уйнаны был. Мин уға тәмле-тәмле емдәр һиптем. Радиоалғыстан бейеү көйө уйнаттым. Аҡ сабаҡ, борғаланып-борғаланып, бейергә тотондо. Балыҡтар тыпырлатып бейемәй, ойотоп ҡына бейей икән.

Бер көн уҙҙы. Ике көн уҙҙы. Ҡунағымдың хәрәкәттәре һүлпәнәйҙе. Тәнгә тартылды. Күҙҙәре төпкә батты. Бер саҡ ҡабырғаһына ята башланы. Ниндәй генә һыйҙар бирһәм дә ашамай.

— Һиңә тағы ниндәй хөрмәттәр күрһәтәйем икән? — тим.

— Күрһәтмә, — ти аҡ сабаҡ. — Үҙем хәстәрләп тапмаған аҙыҡ тамағыма аш булып бармай. Һин мине кире үҙ төйәгемә илтеп ҡуй. Үҙ көнөмдө үҙем күрәйем...

Мин уны тиҙ үк Димгә илтеп ебәрҙем. Айырылышыу яманһыу булды, әлбиттә. Ул кескәй генә башын һыуҙан һоноп, миңә өндәште:

— Һау бул, рәхмәт!

— Һау бул, аҡ сабаҡ! — тип мин ҡул болғаным.

1993

БАҠА МЕНӘН БӘРӘС

Томра көндә төш етеүгә болондағы бөтә йән эйәһе, әлһерәп, шымып ҡала. Әрәмәлә ҡоштар һайрамай, күлдә баҡалар баҡылдамай, ҡамышлыҡта серәкәйҙәр бызылдамай. Бөтәһе лә ял итә.

Ошондай бер мәлдә мин тымыҡ күл ярында ултыра инем. Эргәмә генә килеп, ап-аҡ бөҙрә Бәрәс һыу эсергә керешә. Ҙур томбойоҡ япрағында ҡырын ятҡан быжыр Баҡа, күҙҙәрен таҫрайтып, былай тип баҡылданы:

— Әй, тим, баҡ-баҡ, ниңә һин шундай ҙурһың?

— Мин ҙур түгелмен. Бәләкәсмен, — тип яуапланы теге. — Мин әле Бәрәс кенәмен. Минән ҙур һарыҡ, йәнә һыйыр, йәнә ат бар.

— Һин барыбер минән ҙурһың, — тип ныҡышты Баҡа. — Йә минең саҡлы ғына ҡалып бәләкәслән, йә күлемдән эсмә.

— Мин бәләкәсәйә алмайым, — тип мәәлдәне Бәрәс, — тик үҫә генә алам. Үҫкәс, һарыҡ булам. Һин үҙең ҙурай ҙа минең саҡлы бул.

— Быныһы ла аҡыл. Шәп аҡыл, — тип ҡыуанды зирәк Баҡа.

Шунда уҡ, өрөлөп, ҡорһағын ҡабартырға керешә был. Эй ҡабартты, эй ҡабартты, эй ҡабартты. Ҡабарта торғас, ҙур ғына кәбеҫтә күсәне саҡлы булды. Муйыны ғына һерәйеп ҡалды.

— Йә, нисек? Һине ҡыуып еттемме әле? — тип көсхәл менән баҡылданы Баҡа. Үҙенең күҙҙәре сығырға етешкән.

— Саҡ ҡына ҡалды. Хәҙер... хәҙер була, — тип дәртләндерҙе Бәрәс.

Баҡа, уғата сәмләнеп, бер көсәнде, ике көсәнде, өс көсәнде. Шуна-ан... Ша-арт итте лә шартланы.

Ул ҡаты шартлауҙы һеҙ ҙә ишеткәнһегеҙҙер әле, моғайын.

1994

БИЛСӘН

Билсән — ул сүп үләне. Һәләк сәнскеле. Бармағыңды тейҙерҙеңме, әсе итеп сағып ала. Ҡарты ла, йәше лә бер иш — ифрат уҫалдар.

Туҡта әле, һүҙҙе иң баштан башлайыҡ.

Былтыр беҙ Гөлнур менән баҡсабыҙҙа бер түтәл борсаҡ сәсеп, бик отҡайныҡ. Тәгәрәп унды. Борсаҡҡа тейендек кенә. Хәйер, был турала бөтә әҙәм белә. Яҙын, ташҡа баҫтырып сығарҙыҡ бит. Ә быйыл ниәтебеҙ үҙгәреп китте. Сәбәбе бар. Бер ҡышҡы кистә беҙ анау ҙур шалҡан үҫтергән бабай тураһындағы әкиәтте ҡысҡырып уҡыныҡ. Уҡыныҡ та шулай хәл иттек: быйыл яҙ борсаҡ еренә шалҡан ултыртабыҙ. Ғәләмәт ҙурҙарын тартып сығарырға көсөбөҙ етмәһә, һаҡалдарына еп бәйләп, тракторҙан һөйрәтербеҙ. Күршебеҙҙә генә тракторсы тора. Һүҙебеҙҙе йыҡмаҫ, тыңлар әле.

Ер йылынғас та, тупраҡты һәйбәтләп эшкәрттек. Туҡлыҡлы ашламалар һалдыҡ. Орлоҡтарҙы теремектәрен генә һайлап, түтәлгә төртөп сыҡтыҡ. Йыш төртмәнек. Шалҡандарға ҙур-ҙур үҫергә иркен булһын, тинек. Юғиһә, һыйышмауҙары ихтимал. Һыу һибеп, эште бөтөрҙөк. Хәҙер көтөргә генә ҡалды.

Аҙна уҙып китте. Орлоҡтар әле морон төртөргә ашыҡмай. Шунан һуң Гөлнур менән беҙ Урал яғындағы дуҫыбыҙға ҡунаҡҡа киттек. Унда байтаҡ йыбандыҡ. Инде шалҡаныбыҙ күкрәп үҫәлер, тип ҡайтһаҡ, үтә аяныс хәл күрҙек. Шалҡандар яңы ҡыяҡлана ғына башлаған, ә билсәндәр уларҙы шырт баҫып, илереп буйға киткән. Ҡуҡрайышып ултыралар. Ерҙең төп хужалары, тиерһең.

Берҙән-бер сара – утап ташлау. Шунда уҡ эшкә керештек. Гөлнурҙың тәүге сүп үләненә ҡағылыуы булды, ҡыҙҙың бармағын теге тешләп тә алды. Үҙе һөрәнләй:

– Ой! Ой! Муйынымды һындыраһыңсы! Теймә миңә!

Икенсеһенә мин тотондом. Уныһы ла сәрелдәне:

– Үлтерәһең бит! Мин дә үҫемлек! Йәшәйһем, үҫәһем килә...

Ҡайһыһына ҡағылма, шул уҡ ялбарыу:

– Йолҡма мине! Имгәтмә!

– Һәләк итмә!

Беҙ уйға ҡалдыҡ. Былар бит беҙҙе бик алама, яуыз зат итеп күрә. Тимәк, беҙ йән ҡыйыусылар булып сығабыҙ. Нимә ҡылырға? Билсәндәргә теймәһәң, улар шалҡандарҙы ҡыҫырыҡлап быуасаҡ, тупраҡтың һутын һурып, тегеләрҙең өлөшөн ашап, астан интектерәсәк. Ике аҡылды бергә ҡушып, беҙ шундай һөҙөмтәгә килдек. Әйҙә, билсәндәр ҙә йәшәһен! Тик былай иттек. Кәртә буйында айырым түтәл ҡаҙҙыҡ. Уны тырматтыҡ, ашла-

ныҡ. Шунан резинка бирсәткәләр кейеп алдыҡ. Билсәндәрҙе берәм-берәм төпләп, тамырҙарын имгәтмәй генә күсереп ултырттыҡ. Ике аҡыллы бергә ҡушҡас, әллә ниҙәр ҡыйратырға була икән.

Билсәндәр тәү мәлдә оторо шәбәйеп китте. Йәнәһе, улар кемдән кәм? Үҙҙәре бөтөн бер түтәл биләп, танау сөйөп, ауыҙ йырып ултыра. Тик был тамаша оҙаҡҡа барманы.

Көндәр уҙған һайын, тегеләрҙең ҡыяҡтары быжый, һабаҡтары һарғая, энәләре кәкрәйә барҙы. Бер саҡ былар, бөтөнләй хәлдән тайып, бөгөлөп төштө. Ни эш был? Гөлнур менән икәүебеҙ аптырап ҡалдыҡ. Ике аҡылды бергә ҡушып, йәнә уйға баттыҡ. Һәм ошондай бер серҙе астыҡ. Бүтәндәрҙе ҡыҫып, йәберләп, уларҙың аҙығын ашап һимергән әрәмтамаҡтарҙың эштәре ни өсөн мөшкөл, тиһегеҙме? Сөнки хәҙер улар үҙҙәре бер-берейен талай, туҡмай, имгәтә. Бер-береһенең ашын урлай. Шундай яуыздар. Гөлнур миңә ҡапыл ғына һорау бирә:

— Олатай, һин, кешеләрҙең яҡшылары ла, ямандары ла бар, тиһең, шул дөрөҫмө?

— Дөрөҫ, Гөлнур.

— Улайһа, ниңә яман кешеләрҙең бөтәһен дә бергә йыйып, алыҫ диңгеҙ эсендәге утрауға күсермәйҙәр? Йә иһә берәй бейек тау башына. Улар тегендә, беҙ бында йәшәр инек... Ана бит шалҡандар ҡалай рәхәткә сыҡты. Билсәндән арынғас.

— Алама заттарҙы, ҡый үләне иише, йолҡоп ҡына ташлап булмай шул, Гөлнур.

— Ниңә, олатай?

— Ҙур үҫкәс белерһең.

— Ярай, олатай, ҙур үҫермен.

Быйыл да бик мул уңыш көтәбеҙ. Көҙөн беҙгә шалҡан кимерергә килегеҙ, йәме. Үтә эреләрен трактор үҙе генә тартып сығара алмаһа, беҙ ҙә булышырбыҙ. Тракторға мин, миңә Гөлнур тотонор, Гөлнурға, бер-бер артлы теҙелешеп, һеҙ тотонорһоғоҙ. Күмәкләп тартҡас, шалҡан сыҙамаҫ. Тәгәрәп килеп сығыр.

1994

ИКЕ ҺАНДУҒАС

Һығылмалы муйыл ботағында бәләкәс кенә һоро ҡошсоҡ бәүелеп тора. Үҙе, башын әле уңға, әле һулға бороп, яҡ-яғына күҙ һала. «Минең ҡалай хәтәр таған атынғанымды күрәләрме икән күрше-тирәләр?» — тип уйлай.

Тап шул саҡ эргәләге ботаҡҡа ошондай уҡ һоро ҡошсоҡ пырылдап килеп ҡунды. Ҡыуаҡ хужаһы мыжыбыраҡ һорай һалды:

— Һин кем, ул тиклем пырылдап, минең ҡыуаҡҡа ҡунырға?

— Мин — Һандуғас. Зелпе ҡыуағында йәшәйем, — тип яуапланы ҡошсоҡ.

— Һөйләмә бушты. Һандуғас — ул мин, — тип раҫланы хужа.

— Йә, һайрап күрһәт, улайһа, — тине ситтән килгәне. Хужа ҡошсоҡ өҙҙөрөп һайрарға кереште. Шундай моңло, дәртле һайраны, теге шаҡ ҡатты. «Вәт һандуғас, исмаһам!» — тип һоҡланды.

— Йә, инде һин маташтырып ҡара, «һандуғасмын» тиһең бит.

Шулай тиеүе булды, күрше ботаҡтағы һороҡай һыҙҙырып һайрап та ебәрҙе. Ярһыу моңо бөтә әрәмәне хайран ҡалдырҙы. Хужа һандуғас мауығыуҙан тәүҙә муйынын һуҙҙы, йырға ҡушылмаҡсы итте, тик тыйылып ҡалды. Шунан күңеле тулды. Ике күҙенән яңаҡтарына йәш бөрсөктәре тәгәрәне. Йәште ул һул ҡанаты менән һөртөп алды. Ҡайһы саҡ ҡатыраҡ һөйләшһә лә, күңеле йомшарып китә ине уның.

— Һин — һандуғас, һин — ысын һандуғас! Бая тупаҫ һөйләшеп, хәтереңде ҡалдырһам, ғәфү ит, — тине ул.

— Уныһы ваҡ нәмә. Һин үҙең мине ғүмерлеккә арбаның. Азамат һандуғас — һин.

Шулай һөйләште улар. Һандуғасты һандуғас ҡына ихлас таный, баһалай, хөрмәтләй икән.

— Әйҙә, бер-беребеҙгә йөрөшөп һайрайыҡ, — тине беренсеһе.

— Әйҙә, мин бик тә ризамын, — тине икенсеһе. Бынан ары улар тап шулай иттеләр ҙә. Ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа күсеп, берәм-берәм дә, парлашып та һайранылар.

Күңеле киңгә әрәмә тармы ни?

2004

ТЫЛСЫМЛЫ КӨҘГӨ

Мөхәммәт менән Мәрйәм — игеҙәктәр. Биштәре тулыш, икеһе бергә алтыға сығып китте. Үҙҙәре хәҙер бик күпте белә. Тик ата-әсәһе, әле тегене, әле быны өйрәтеп, теңкәләренә тейә. Йәнәһе, ашағанда ауыҙыңды сәпелдәтергә, йыуынғанда иҙәнгә һыу сәсрәтергә ярамай. Кәнфитте күп ялаһаң, телең шешә, тешең ҡойола, имеш. Ятыр алдынан һәр кис аяҡ йыуырға ҡушалар. Ана, күрше малайы Сәлимйән ялан тәпәй йөрөй-йөрөй ҙә көпәкөндөҙ шул көйө ята ла йоҡлай. Унан бер ни ҙә булмай. Кисә ул сатан әтәстәрен баҫтырып тотам тигәндә, тегенең ҡойроғон йолҡоп алды. Быларҙы урам эте менән дә уйнатмайҙар. Тыялар.

Анау ярамай, бынау ярамай, тегене эшләмә, быны эшләмә. Былай булғас, артабан нисек йәшәмәк кәрәк?

Мөхәммәт менән Мәрйәм өҫтәл өҫтөндә торған кескәй генә түңәрәк көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты.

— Һин бындай ғына көҙгөмө? Әллә тылсымлымы? — тип һораны Мөхәммәт.

— Эйе, мин — тылсымлы көҙгө. Ни бойораһың?

— Күрәһеңдер, беҙҙе гел өйрәтеп, битәрләп кенә торалар.

— Күрәм.

— Күргәс, ҡотҡар беҙҙе был хәлдән.

— Бөгөн ошо көйө ятып йоҡлағыҙ ҙа, иртәнсәк бөтәһе лә һеҙ тигәнсә булыр.— Көҙгө хәйләкәр йылмайып ҡуйҙы.

Иртән торһалар!.. Мөхәммәт менән Мәрйәм — атай менән әсәйгә, тегеләр игеҙәк балаға әйләнгән.

— Асыҡтым! Тиҙерәк самауыр ҡуй! Мәрйәм-әсәй! Һиңә әйтәмсе! Әрсеп, картуф ҡыҙҙыр! — тип сәрелдәне әлекке әсәй.

— Мөхәммәт-атай! Бар йәһәт кенә малдарҙы эсереп көтөүгә ҡыу! Һөҙгәк ала үгеҙҙең муйынына ҡыңғырау таҡ. Юғиһә, уның көтөүҙән айырылып олаға торған ғәҙәте бар, — ти әлекке атай. Мөхәммәттең үлеп ҡурҡҡан хайуан заты — тап ана шул үгеҙ.

— Минең тәтәй күлдәгем ҡайҙа, Мәрйәм-әсәй? Шуны табып кейҙер миңә.

— Бөгөн кесаҙна, ҡыҙыу итеп мунса яҡ, Мөхәммәт-атай. Өр-яңы миндек бәйлә, — ти элекке атай.

Хәлдең мөшкөллөгөн һиҙеп, Мөхәммәт көҙгөгә ынтылды. Тылсымды кире алыуын һорамаҡсы ине. Ҡараһа!.. Хәлдәр үтә яман икән. Былар йоҡлағанда, шаян бесәй көҙгөнө иҙәнгә төшөрөп ҡыйратҡан. Ҡылыр һис әмәл юҡ. Тылсымлы көҙгө селпәрәмә килгән. Хәҙер инде бөтәһе лә ошолай алмашынған көйө ҡаласаҡ. Мөхәммәт менән Мәрйәм бынан ары үҫмәйәсәк тә, ҡартаймаясаҡ та...

* * *

Ярай әле, был ни бары Мөхәммәттең төшө генә булып сыҡты.

— Әсәй! — тип һөрәнләп уянды ул.

...Бынан һуң кем кемде өйрәтер икән? Шуны бик белгем килә.

2004

ЯПРАҠ МЕНӘН ҠЫРМЫҪҠА

Кисә бер сәйер хәл булды. Көн бөркөү ине. Япраҡ та һелкенмәй, үлән дә бәүелмәй. Мин ҡайын күләгәһендә ултырам. Эргәмдә генә кәкүк саҡыра. Шуны һанайым. Ун дүрткә еткәс, ҡапыл минең алдыма йәм-йәшел ҡайын япрағы килеп төштө. Үҙе һөйләнә. Мин үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең, ҡоштарҙың телен бер аҙ төшөнәм. Былай тине ул: «Уф! Ҡотолдом! Иреккә сыҡтым. Бүтәндәр араһында бәрелеп-һуғылып йәшәү бөттө. Үҙемә үҙем баш хәҙер. Ҡалай рәхәт... Остоҡай ғына тын алам да, күккә ашып, киләнәм». Япраҡ, һыртын ҡабартып, бер һикереп ҡуйҙы. Шунан бөтөнләйгә шымды.

Күп тә үтмәй, япраҡ эргәһенә оло башлы ҡыҙғылт ҡырмыҫҡа юрғалап килде. «Шәп эшләнең, әй. Мин һинең, тартышып, ботағыңдан ысҡынғаныңды ҡарап торҙом. Сая ла икәнһең үҙең! Шулай кәрәк. Мине лә иләүҙә йәшәү ялҡытты. Тегеһе тертә, быныһы этәрә. Маҙа бөттө. Һинең шикелле ҡасып киттем. Юл да, һуҡмаҡ та юҡ хәҙер миңә. Теләһәм ҡайҙа йөрөйөм. Иркенлек. Тамаша!»

Япраҡ өндәшмәне. Эҫе ҡояш аҫтында тыны ҡурылып, ул телдән яҙғайны инде. Иҫ итмәҫтән генә болот килеп сыҡты. Ямғыр һибәләй башланы. Япраҡ бөршәйҙе. Ҡырмыҫҡа уның аҫтына боҫто. «Был ышыҡта йәшәп була. Ышаныслы төйәк. Ямғырҙың тамсыһы ла үтмәй. Йәйен йәйләп, ҡышын да ошонда ҡаршыламын инде», — тип ҡыуанды оло баш. Болотто ел әйҙәп килтергән икән. Ул һауанан төштө лә ерҙән йүгереп уҙҙы. Юл ыңғайында әлеге япраҡты эләктереп алды ла, әйләндереп-әйләндереп, йырғанаҡҡа илтеп ташланы. Ағасынан айырылып, күккә ашам тигән ҡуҡыр япраҡ мәтегә килеп батты. Зирәк тоҡом балаһы ҡырмыҫҡа хәлде тиҙ аңлап алды. Ел-ямғырға ҡарамай, үҙ иләүенә сапты. «Ни күрһәм дә, үҙ иләүемдә күрермен...» — тигәнен ишетеп ҡалдым.

Ошо мәрәкәне кисә үҙем күҙәттем.

2004

Хикәйәләр

МУНСА ТАШЫ

Ҡаһшам алдынан иҫ китмәле әңгәмә ишеттем. Дөрө-
ҫөрәге, телмәр тыңланым. Мунса ташының телмәрен. Ҡаһшам ваҡытында изге сәғәттә таштар өнһөҙ генә тәсбих әйтер, имеш, тигәнде бала сағымда ишеткәнем бар ине. Әммә уларҙың ҡысҡырып телмәр һөйләүе лөғәткә һыймай кеүек. Һыймаһа, һыйҙыралар, күрәһең. «Гласность» осоро бит.

Көндөҙ мунсабыҙҙың инде бәлтерәп эҫе тотмаҫ ташын алмаштырырға ниәтләп, иҫкеләрен нигеҙ буйына сығарып өйҙөм. Өйгән саҡта бер йомроғағы тәгәрләп китте лә, алмашҡа әҙерләгән яңы һуйырташ өйөмө эргәһенә килеп туҡтаны. Тегене үҙ урынына алып һалайым тигәндә генә, артҡы ел ҡапҡанан күршем пәйҙә булды. Өйгә ҡунаҡ инһә, ҡулға ял, күңелгә йәм килә. Сәй эсә-эсә һүҙ ҡуйыртып, ҡояшты байыта яҙҙыҡ. Ғәҙәтенсә ул затына аты тура килмәүгә тәмләп зарланды. Йәнәһе, уның заты — түрә, ә ашы — өйрә. Һүҙен йөпләмәһәң, хәтере ҡала, йөпләргә кәрәк. Йөпләп торҙом. Ҡуҙғалыр алдынан күршем әйтә һалды:

— Минең заман килеүен килеп етте лә бит, йәшем үтеп китте.

Ҡунағым артынан ҡапҡаның келәһен эләктереүем булды, нимәлер сыйылдарға кереште. Сиңерткә тиһәм, моңо юҡ, сысҡан тиһәм, һоло юҡ. Абайлабыраҡ тыңлаһам... шаҡ ҡаттым. Тауыҡ йомортҡаһы ише таш яңы өйөм алдында телмәр тотоп ята:

— ...Бөтә нәмә хәҙер үҙенең төп асылын асты. Мин дә астым. Асылыма баҡһам, үҙәгемдә ҡом түгел, алтын бөртөктәр икән. Ана ишетәһегеҙме, ҡалай сыңлай? — Ул сайҡалып ҡуйҙы. Сыңлау ишетелмәне. Бөртөктәр тығыҙ

тултырылған, ахырыһы. Ул килерә биреп, дауам итте. — Мин мунса ташы түгел, йөҙөк ҡашы булырға яратылғанмын. Яңыса фекерләү заманы килгәс, минең кеүектәр хәҙер бындай йөҙөктө генә түгел, илдең, дәүләттең, державаның тажын биҙәйҙәр. Дөрөҫ биҙәйҙәр, хаҡлы биҙәйҙәр, килештереп биҙәйҙәр. Һоҡланып туймаҫлыҡ. Араларында үҙем генә юҡ. Вә ләкин мин һуҡранмайым. Ни өсөнмө? Сөнки мин ун йыл буйы — һайлау законына күсергәндә ике срок — өйөмдөң иң түбәһендә торҙом. Минән өҫтөн берәү ҙә булманы. Парҙың иң ҡуйыһы, иң нәғезе минең аша уҙҙы. Һыу ҡойһалар, аҫтағылар шыжбыж килде, шыңшыны. Ә мин ыжламаным да. Бары рәхәт сиктем. Минең тоҡомом бүтән, ҡаным — көрән — яҙыу ҡараһы төҫлө. Мин... мин хәҙер хөрмәтле ялдамын. Әммә тәрән аҡылымды, шишмәләй саф зиһенемде, ифрат ҡиммәтле тәжрибәмде, бөйөк талантымды, гәүһәр итеп, ғаләмгә сәсәсәкмен, уларҙы яңынан-яңы мунса таштарына, йөҙөк ҡаштарына, мәмләкәт таждарына бирәсәкмен. Заманы килде. Сәғәте һуҡты. Минуты шытты. Мин асылымды астым. Эсем тулы хазина. Эсем тулы даһилыҡ. Эсем тулы әҙәп. Мин! Мин... Мин!..

Тауыҡ йомортҡаһы дәүмәле йомро таш ҡапыл бүртә, көсәнеп күбенә башланы. Бына-бына шартлап ярыла тигәндә... ярылманы, сытыр-бытыр килеп сатнаны ла ыуалып төштө. Эсенән хазина ла, талант та, аҡыл да, әҙәп тә эркелмәне, борхолдап йәшкелт-ҡара ҡором ғына сыҡты. Шул саҡ яңы өйөмдәге иң ҙур һуйырташ телгә килде:

— Бынау ҡуҡыр бөтәбеҙ өсөн дә ғибрәтме, туғандар?..

Өйөм ҡыштырлап ҡуйҙы:

— Ғибрәт, ғибрәт...

1991

БӨЖӘК АПА

Сәйер инде кеше хәтере. Уҙғандарҙы эреле-ваҡлы үкенеүҙәр, ғүмер үткән һайын, асығыраҡ булып, әйләнеп ҡайта. Ҡайта ла, йөрәкте сәнсеү алып ҡуя.

Алтмыш йыл самаһы әүәл булды был хәл.

Уҡыуҙар башланып байтаҡ ваҡыт үткәс, беҙгә, Кеәш мәктәбенә, зоология уҡытыусыһы килде. Уҡытыусы тигәнебеҙ бәләкәс кенә, сибек кенә ҡыҙ булып сыҡты. Беҙҙән саҡ ҡына өлкәнерәк. Ул тәү тапҡыр класҡа килеп ингәс, баҫырғамы, баҫмаҫҡамы тип, аптырабыраҡ ҡалдыҡ. Шулай ҙа баҫҡан булдыҡ.

— Һаумыһығыҙ, балалар! Ултырығыҙ, — тине апабыҙ. Тауышы ҡуйы сыҡты. — Мин һеҙгә зоология уҡытасаҡмын. Исемем Гөлзифа. Зифа тип тә өндәшәләр. Улай әйтеүҙәрен оҡшатмайым. Буйым зифа булмағас, килешмәй. Миңә «Гөлзифа апа» тиерһегеҙ.

Иң артта ултырған ун ете йәшлек ғифрит — ҡалын тауышлы Тимербай аяғүрә баҫты.

— Мин Тимербай булам. Тимер тип йөрөтһәгеҙ ҙә, Бай тиһәгеҙ ҙә ярай. Буй-һыныма ҡалай ҙа килешеп тора. — Кәрәк-кәрәкмәгәндә һүҙ ҡыҫтырып, ул бөтә уҡытыусыларҙың да теңкәһенә тейә шулай.

— Ярай, аңлашылды. Һин ултыр, Бай. Уйын күп булмай. Эшкә күсәйек. Бөгөн бөжәктәр тураһында дәрес башлайбыҙ. Бөжәктәр донъяһы үҙе серле донъя ул...

Бөжәк тә бөжәк тип, ул байтаҡ һөйләне. Эреләрен дә, ваҡтарын да телгә алды. Һөйләмәһә лә, беләбеҙ инде. Әйтерһең, беҙ бөжәк күрмәгән. Йәй буйы ҡырҙа, ҡыш буйы өйҙә шулар араһында йәшәйбеҙ. Сер, имеш...

Тәнәфескә сыҡҡас, кәрлә Ишбулды бөтә класс алдында ошондай һорау ҡуйҙы:

— Иң-иң-иң ҙур бөжәкте нисек атайҙар? Йә, кемдең башы эшләй?

— Энә ҡарағы! — тип сәрелдәне бөтәһен дә белеүсән Фәриҙә.

— Ярғанат!

— Һин үҙең ярғанат.

— Ҡара иңкеш.

— Йо-оҡ, — тип һуҙҙы кәрлә. — Их һеҙ, томаналар. Иң ҙур бөжәкте әйтәйемме?

— Әйт! — тиештек беҙ.

— Иң ҙур бөжәк ул... Гөлзифа апа үҙе!

Беҙ шаҡ ҡаттыҡ. Ысынлап та, ул бит әллә ғәләмәт ҙур ҡырмыҫҡаға, әллә сиңерткәгә оҡшаған. Аяҡ-ҡулдары, бөжәк сираҡтары һымаҡ нескә, түп-түңәрәк ҙур таҫыр күҙҙәре тәгәрәп төшөргә тора, башындағы йәшел

береты күгәүен таҡыяһына оҡшаған, тар иренле ауыҙы ла, нисектер, аҫтараҡ һымаҡ. Тик алһыу томбойоҡ сәскәһенең таж япрағы төҫлө ҡолаҡтары ғына матур. Мин, беренсе партала ултырғас, бөтәһен дә шәйләп, һынап торҙом. Эсе тулы ағыу инде ул кәрлә Ишбулдының. Нимә килтереп сығарҙы бит.

Ошо сәғәттән уҡытыусыбыҙға «Бөжәк апа» тигән ҡушамат тағылды. Үҙе алдында әйтмәйбеҙ инде уны. Артында ғына рәхәт сигәбеҙ. Шулай ҙа бер көндө аҡыл яғы самалыраҡ Зәйтүнә: «Бөжәк апа, эсем бора, сығайым әле», — тип ысҡындырҙы. «Бөжәк» быға иғтибар итмәне. Килделе-киттеле Зәйтүнәнең теленә ни килмәҫ.

Эш ҡушаматта ғына түгел. Беҙ апаның үҙен тәүге мәлдән үк яратмаҫ булдыҡ, һанға һуҡманыҡ. Уға ҡарата этлек артынан этлек уйлап сығарҙыҡ. Төрлөсә кәйефен боҙҙоҡ, һүҙһеҙ-өнһөҙ ирештерҙек, аяуһыҙ йәберләнек.

Тәүге мәлдә еңелсә шаярыу ғына булды. Уҡытыусы бүлмәгә инер алдынан төлкө Хәйернас уның ултырғысын аҫтын-өҫкә түңкәреп ҡуйҙы. Гөлзифа апаның быға иҫе лә китмәне.

— Ҡайһығыҙҙыр иҙән менән түшәмде бутаған, ахырыһы, — тине лә ултырғысты кире баҫтырҙы.

Бынан ары яуызлыҡтың бүтән саралары табылды. Ул инер алдынан теге күҫәк Тимербай, сепрәк менән аҡбурҙы аяҡлы ҡара таҡтаның башына ҡуя. Апаның унда буйы етмәй. Аҡбур кәрәккәс, ул яҡ-яғына ҡарап, аптырап ҡала. Бер аҙ торғас, арабыҙҙа иң йыуаш ҡолға Ғилметдин, сығып, сепрәк менән аҡбурҙы алып, таҡта янғындағы кәштәгә ҡуя. Тәнәфес ваҡытында уҫал малайҙар, Ғилметдинде мейес артына һөйрәп индереп, дөмбәҫләп ала. Икенсе тапҡыр ҙа, өсөнсө тапҡыр ҙа шулай ҡабатлана. Тимербай үҙ эшен, Ғилметдин үҙ эшен ҡыла, мейес артында дөмбәҫләү үҙ ваҡытында башҡарыла килә.

Бер көндө мин класҡа ингәндә сепрәк тә, аҡбур ҙа үҙ урынында ине. Уҡытыусы килгәнсе шунда ҡалды. Шаярып туйҙылар, күрәһең, малайҙар. Был иртәлә дәресте «Бөжәк» күтәренке кәйеф менән башлап ебәрҙе. Класс тыныс ултыра. Аҡбур алып уҡытыусы ҡара таҡтаға яҙа башланы. Яҙыуы ифрат матур уның. Яҙғанының нимәһендер оҡшатманы, буғай, һөртәйем тип, сепрәккә

тотондо. Шул саҡ сепрәккә төрөлгән үле һоро сысҡан иҙәнгә килеп төштө.

Иҫәүән Зәйтүнә сәрелдәп ебәрҙе. Бөжәк апа, һис нәмә булмағандай, сысҡандың ҡойроғонан тотоп алды ла өҫтәл өҫтөнә һалды. Мин сирҡанып киттем. «Сысҡандарҙы, ҡомаҡтарҙы, йомрандарҙы алдараҡ үтәсәкбеҙ», — тине ул. Дәресте дауам итте.

Ике айҙан ашыу ваҡыт эсендә Гөлзифа апа беҙҙе бер тапҡыр ҙа әрләмәне, хатта иҫкәртеү ҙә яһаманы. Үпкәләүен дә, рәнйеүен дә белгертмәне. Уның битарафлығы малайҙарҙы уғата нығ сәмләндерҙе. Нимә генә уйлап сығарып, нисек кенә яфаламанылар уны?! Бер кисте ауыл йәштәре клубта концерт ҡуйҙы. Ваҡ балаларҙы индермәнеләр, беҙгә — алтынсы менән етенселәргә — рөхсәт булды.

Тәүҙә, урманда ҡасып, самогон ҡайнатыусы ике йүнһеҙ тураһында ирмәк күрһәттеләр. Улар, аппарат морононан беренсе тамсы тама башлағас уҡ, телдәрен сығарып, алмаш-тилмәш татып ҡарай. Татый торғас, иҫереп йығылалар. Былар хырылдашып йоҡлағанда, милиционер килеп сыға ла, нагандан һауаға атып ебәрә. Иҫеректәр һикереп аяҡ үрә баҫа. «Беҙ үлдек!» — тип яңынан ергә ҡолайҙар. «Шакир менән Мөнирҙе ҡаптырҙылар», — тип кемдер берәү Өсәтәс урамының атаҡлы самогонсыларын телгә алды.

Унан һуң яңғыҙ бейеү, күмәк йыр, гер күтәреү, шиғыр һөйләү, тағы әллә нимәләр булды.

Кисәне алып барыусы китапхана мөдире тынҡыш Шәмси бер сыҡҡанда үтә серле, тантаналы тауыш менән иғлан итте:

— Сәхнәлә беҙҙең яңы уҡытыусыбыҙ, зифаларҙың зифаһы Гөлзифа Йомабаева. Мандолинала яңғыҙ уйнай. Төрлө милли көйҙәр. Унан һуң — яңғыҙ йыр. Ария!

Быға тиклем ария тигән йырҙы ишеткән юҡ ине. Тыңлап ҡарайыҡ әле.

Зәңгәр күлдәк кейгән, иңенә һары ебәк шарф һалған, һул ҡулына мандолина тотҡан Бөжәк апа сәхнә уртаһындағы ултырғысҡа сығып ултырҙы. Ултырғас, ул, бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды. Бына ул тәүге ҡылды сиртте. Сиртте лә ҡалҡынып ҡуйҙы. Кәм башланы... Шундай өҙҙөрөп уйнай, ҡылдарҙы түгел, йөрәкте семе-

теп-семетеп ала. Семетеүе татлы, рәхәт. Кескәй генә, нескә генә бармаҡтар ҡағылыуҙан әллә ниндәй сихри моң сыға шул ҡылдарҙан. Ул моң тәүҙә бөтә бинаны солғап алды, унан кешеләрҙе арбап, ҡайҙалыр бүтән тарафтарға әйҙәп китте. Сихырланған әҙәмдәр, донъяларын онотоп, кескәй генә ҡыҙҙың иркенә буйһондо. Бөтәһе лә өнһөҙ-тынһыҙ ҡалды. Көйгә көй ялғанды. Күпме уйнағандыр, белмәйем. Ул туҡтағас та, беҙ байтаҡ айный алмай торҙоҡ. Һушына килгән берәү башлап ҡул сапты. Шунан бөтә клуб геү килде.

Йыр башларҙан элек Гөлзифа апа, сәхнә алдына килеп, былай тине:

— Мин ария башҡармайым. Опералағы яңғыҙ йыр ария тип атала. Мин боронғо йырҙы йырлайым. «Зөлхизә».

Әйтеп үтәйем, тыңҡыш Шәмси, үҙе лә аңламаған һүҙҙәрҙе һөйләп, әҙәм аптыратырға ярата. «Ария» тигән булып мәсхәрәгә ҡалды. Бик таман уға.

Гөлзифа апа саҡ ҡына артҡа сигенде. Был юлы беҙҙең алда инде ҡурай сираҡлы, сибек кәүҙәле, таҫыр күҙле «Бөжәк» түгел, зифа буйлы, сибәр йөҙлө аҫыл ҡыҙ — күҙҙәренән нур балҡыған бер зат баҫып тора ине. Ҡайһы берәүҙәрҙе пәрей алмаштыра, тиҙәр, шул арала быны фәрештәләр алмаштырып өлгөрҙө, ахырыһы. Йыры уның уйынына ҡарағанда ла тәьҫирлерәк, шауҡымлыраҡ булды. Был тиклем дә ягымлы, моңло, зарлы тауыштың, ошондай ғына йән эйәһенең күкрәгенән урғылып сығыуына хайран ҡалырһың.

Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай,
Йәш ғүмерем заяға, ай, үтә, тип, Зөлхизә.

Йырҙың был еренә еткәндә, минең тыным ҡыҫылды, күңелем мөлдөрәмә тулды. Арттараҡ кемдәрҙер мышҡылдарға, һыҡтарға кереште. Күңеле йомшағыраҡ апайҙар, бирешмәҫкә тырышып, тамаҡ ҡырғылап алды. Минең эргәлә ултырған Тимербай дер-дер ҡалтырана ине.

Сәпәкәй итә-итә, әллә нисә йыр йырлаттылар. Ҡарышманы йырсы, һораған һайын сыҡты, береһенән береһе матурыраҡ йырҙар йырланы. Үтә әҙәм йәнле минең Шәрифулла исемле ике туған ағайым, сыҙаманы, бөтә клубты бер итеп, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Етер инде, йәмәғәт! Баланы хәлдән тайҙырабыҙ бит. Сама кәрәк. Әҙәп кәрәк саҡ ҡына!

Шунда ғына кешеләр нәфселәрен тыйҙы.

Быңдай тамашаның, быңдай мөғжизәнең әлегәсә Кәләштә булғаны юҡ ине. Бынан һуң да булырмы, юҡмы әле? Күк ҡабағы бер генә тапҡыр асыла, тиҙәр бит.

Иртәгеһен зоология дәресе ине. Алдан һүҙ берләштергән шикелле, бөтәбеҙ ҙә тиерлек мәктәпкә иртәләп йыйылдыҡ. Шаулашманыҡ та, шаярманыҡ та. Урындарыбыҙға ултырып, шымып ҡалдыҡ. Кисәге тамаша тураһында ла һүҙ ҡуҙғатманыҡ. Һәр беребеҙ үҙен ғәйепле итеп хис ҡыла, үкенә, ғазаплана һымаҡ ине. Быға тиклем беҙ йәберләгән, беҙ кәмһеткән кеше алдында ғәйебебеҙ ҙур. Беҙ балалар инек әле. Был үкенесле кисерештәрҙең тәрән асылын үҙебеҙ ҙә аңлап еткермәгәнбеҙҙер. Ләкин күңелдәребеҙ урынында түгел, выжданыбыҙ борсоулы ине.

Киҙеү Тимербай таҡта сепрәген сылатып индерҙе, таҡталағы кисәгенән ҡалған яҙыуҙарҙы һөрттө. Сепрәкте лә, аҡбурҙы ла урынына ҡуйҙы.

Көтәбеҙ. Ҡыңғырау шылтыраны. Ишек асылды. Етеҙ атлап Гөлзифа апа килеп инде. Беҙ дәррәү аяғүрә баҫтыҡ. Ихлас күңелдән ҡылдыҡ был эште.

— Ултырығыҙ, балалар, — тине. Беҙ һаман баҫып ҡалдыҡ. — Ултырығыҙ, — тип ҡабатланы ул.

Ултырҙыҡ.

— Башҡаса беҙҙең дәрестәр булмаясаҡ. Мин һеҙҙең менән хушлашырға ғына килдем. Бөгөн үк, хәҙер үк китәм. Тышта ылау көтә. Хушығыҙ, бәхетле булығыҙ, егеттәр... ҡыҙҙар...

Уның ҙур, матур ҡара күҙҙәренән йәштәр бәреп сыҡты. Сыҡты ла оҙон керпектәре буйлап, битенә ағылды. Ул битен һөртмәне.

Парта ҡапҡастарын дөбөр-шатыр килтереп, ҡапыл бөтәбеҙ ҙә баҫтыҡ. Ҡыҙҙар илай башланы. Мин дә уларға ҡушылдым.

— Иламағыҙ. Хушығыҙ. Бөгөнгө иртәне, һеҙҙең бөгөнгө ҡылығығыҙҙы мин бик һағынырмын. Бөгөн һеҙ бөтәгеҙ ҙә шундай матурһығыҙ, аҡыллыһығыҙ, изгеһегеҙ.

Ул сығып китте. Беҙ баҫып ҡатып ҡалдыҡ.

1992

ТЫМАУ

Шәмсинур ҡоҙағый кис ятҡанда һин дә мин ине. Ауыҙ эсендә аҙашып йөрөгән доғаһын саҡ-саҡ ҡына ҡыймылдаған ирендәре аша тышҡа сығарып бөтөрөргә лә өлгөрмәне, йылы түшәктә һары май булып ирене лә ҡуйҙы.

Иртән торғас, ул бик моңло итеп өс тапҡыр сөскөрөп алды. Шунан һуң, самауырҙың һыуы бөткәнсе, тәмләп-тәмләп сәй эсте. Сәй эскәс, танау эсе ҡысытҡандай итте. Ул йәнә ике тапҡыр сөскөрөп ҡуйҙы. Үҙ-үҙенә сәләмәтлек тә теләп алды:

— Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа, таҙалыҡҡа-байлыҡҡа...

Был иртәнге сәғәттә шунан артыҡ ваҡиғалар булманы.

* * *

Баллыбанат ҡарсыҡтарға уймаҡ һорарға тип кенә ингән Шәмсинур ҡоҙағый, алда күрәсәктәре барын башына ла килтермәй, әйтә һалды ла баһа:

— Тымаулап торам, ахыры, Баллыбанат күрше... — тине ул, һүҙҙәрен ҡеүәтләгәндәй, нескә генә итеп йәнә сөскөрөп алды.

Баллыбанат был хәбәргә һис тә ҡойолоп төшмәне.

— Тымаулаһаң, киленеңдән ҡыҙыу итеп мунса яҡтыр, — тине, — ике миндек парлат. Йәнең ус төбөңә еткәнсе, шулар менән алмаш-тилмәш алып-биреп сабын. Мунсанан ҡайтҡас, ҡартыңдан ҡалған теге толобоңдо ябын да баллап мәтрүшкә сәй эс. Толоп яғаңдан гөжләп пар сығып торһон. Бөгөн генә донъя күргән кеше түгелһең дә инде. Үҙең дә беләһеңдер.

Әңгәмә ошоноң менән тамам да булыр ине, бәлки... Гонаһ шомлоғона, һүҙгә Баллыбанаттың килене Ғәйшә ҡушылды:

— Минең ҡәйнәм — консерватор ул. Йыһанға карап-тар осорған заманда мунса таштары, ҡайын миндектәр, мәтрүшкәләр иҫкерҙе инде, ҡоҙағый. Наҙанлыҡ был! Кешегә шундай кәңәштәр бирергә оялыр инең, ҡәйнәм, саҡ ҡына. Пенициллин, аспирин, амбулатория, доктор... Бына нәмә кәрәк уға!

Ысынлап та, новатор килененең һүҙҙәренән оялып, хурлығына сыҙай алмай, Баллыбанат икенсе бүлмәгә сығып китте. Киленгә ҡеүәт биргәндәй, ҡоҙағый тағы ла нескәрәк итеп сөскөрөп ебәрҙе.

— Ана, минең һүҙемде үҙең дә йөпләп тораһың, ҡоҙағый, — тине новатор килен. — Һине хәҙер үк медпунктҡа оҙатырға кәрәк.

Ғәйшә урамға күҙ ташланы. Унда буш санаға аяғүрә баҫҡан үсмер малай Ишмырҙа атын юрттырып үтеп бара ине. Килен тәҙрә ҡағып, Ишмырҙаны туҡтатты. Ишмырҙа йүгереп өйгә инде.

— Өс саҡрым арала атыңдың алтыны ҡойолоп ҡалмаҫ, Ишмырҙа, бына Шәмсинур ҡоҙағыйҙы Армаҡҡа медпунктҡа ғына илтеп килсе, һалмаһалар, алып уҡ ҡайт.

Ишмырҙа тыңламай булдыра алманы. Сөнки Ғәйшәнең ире Иштимер ағай — бригадир. Ә Ғәйшә — бригадир бисәһе.

* * *

Ҡоҙағыйҙың ике яғына аҡ халат кейгән йәш кенә ике ҡыҙ ултырып алған. Ҡарсыҡтың һул ҡултыҡ аҫтына градусник ҡуйғандар, ахырыһы. Уң ҡулы менән ул һул беләген баҫтырып тора. Шулай тотһам, тиҙерәк һауығырмын, тип уйлай ул.

Ҡыҙҙар алмаш-тилмәш һорашалар:

— Нисә йәштәһең?

— Алтмыш туғыҙҙа. Шөкөр, етмешкә лә аяҡ баҫабыҙ.

— Өйөгөҙҙә бөтәһе лә сәләмәттәрме?

— Шөкөр... Иҫәнбеҙ. Йорт-ер теүәл. Мал-тыуар ҙа иҫән генә ҡыш сығып килә. Курма булғас, сыға инде ул. Курманы һәйбәт бирҙеләр быйыл. Әйтер хәл юҡ, малдар көр ҡышлай. Бәрәстәр ҙә, туп кеүек, тупылдап торалар. Ала һарығыбыҙ быйыл өс бәрәс килтерҙе. Имен улай, бик имен...

Ҡара ҡыҙ саҡ ҡына йылмайып ҡуя:

— Өйөгөҙҙә бәләкәс балалар бармы? — тип һорай ул.

Шул тиклем ах итеп хәл-әхүәл һорашыуҙарына ҡоҙағый сиктән тыш ҡәнәғәт. «Ниндәй тәрбиәле, инсафлы, белдекле балалар...» — тип уйлай ул эсенән.

— Шөкөр, итәк тулы. Балаһыҙ өйҙә ҡот буламы ни ул!.. Ике улымдың һигеҙ балаһы бар. Былай шуғыраҡтар ҙа... Ир балалар бит. Шулай ҙа зарланыр хәлем юҡ, өләсәй, тип үлеп баралар. Юғиһә, ана күрше Миндиярҙың балалары өләсәләрен һис кенә лә һанға һуҡмайҙар.

— Бала саҡта ниндәй сирҙәр менән сирләнегеҙ, өләсәй?

— Телкәйҙәрең балдан-майҙан өҙөлмәһен, балаҡайым. Бала саҡтарыма тиклем һораша бит, рәхмәттәр яуғыры! Бала саҡта мин сирләшкә булманым. Бик теремек инем. Ете йәштә еп иләнем, туғыҙ йәштә киндер һуҡтым. Мине кейәүгә лә уйнап ҡына йөрөгән еремдән тотоп бирҙеләр. Һөйләмә инде ул замандарҙы...

Ишмырҙа өндәшмәйенсә бер ситтә ултырып тора. Тик ҡоҙағыйға үҙенең донъяла барлығын, тышта ат көтөп торғанын белдерер өсөн генә йүткергеләп ҡуя. Әммә ҡоҙағый быға иғтибар ҙа итмәй.

Һипкелле ҡыҙ Шәмсинур әбейҙең ҡултыҡ аҫтындағы градусникты алып ҡарай.

— Ниндәй мәкерле, аҫтыртын сир! — тип борсола. — Хатта температура ла бирмәй, 36,9. Ҡайһы ерегеҙ ауырта һуң?

— Быуындарым һыҙларға иткәндәй итеп тора.

Ҡара ҡыҙ танауын йыйырып ҡуя:

— Бындай сирҙе беҙ дауалай белмәйбеҙ шул, әбей. Һине район больницаһына ебәрергә тура килә.

— Башҡа сара юҡ, — тип йөпләй һипкелле ҡыҙ.

Шәмсинур ҡоҙағый бәхәсләшеп тормай:

— Һеҙ әйткәндән уҙып булмай инде. Һеҙ уҡымышлы кешеләр бит, — ти ул, — юл йөрөргә һәләк әүәҫмен былай үҙем. Әйҙә, Ишмырҙа, йөрөп, донъя күреп ҡайтайыҡ. Ҡышҡы сәхрә — үҙе бер тамаша ул. — Шулай тип әйтеп тә өлгөрҙө, ике алымға бүлеп, биш тапҡыр сөскөрөп тә алды. Башта өс тапҡыр сөскөрҙө. Унан тағы икене өҫтәне.

Ҡоҙағый тунын кейҙе, шәлен бөркәнде. Ишмырҙа, күн бейәләйҙәрен кейеп, шапылдатып, бер-беререһенә һуғып ҡуйҙы. Йәнәһе: «Беҙ теләһә ҡайҙа барырға әҙербеҙ», — тимәксе инде. Үҙе ҡыҙҙарға ҡарап алған була.

Ҡыҙҙар ҡоҙағыйға яҙыу яҙып тотторҙолар.

* * *

Армаҡтан сыҡҡас, юл икегә айырыла. Уңға киткән юл районға бара. Осло таҡтаға «12 км» тип яҙылған. Һулға һуҡтырғаны — ҡала юлы. Уныһына «15 км» тип яҙылған.

Ошо юл сатында Ишмырҙа ала бейәне шып туҡтатты.

— Ҡоҙағый, — тине ул, — өҫ-баш та арыу ғына, кеҫәлә ҡаласлыҡ аҡса ла бар. Әллә ҡаланың үҙенә үк елдерәбеҙме? Айырмаһы — ни бары өс километр. Ала бейә өсөн сүп кенә ул. Профессорҙың үҙенә туп-тура барып инербеҙ.

— Ҡаланың ни юлы ла таҡырыраҡтыр... Әҙәм йөрөмәгән ер түгел дә баһа.

Ала бейә һулға тартылды.

* * *

Врач ҡабул итә торған бүлмәнең ишек төбөндә, ҡултыҡ аҫтына градусник ҡыҫтырып, Шәмсинур ҡоҙағый һәм, ГТО значогын ялтыратып, ғәмһеҙ Ишмырҙа ултыра. Уның бер нәмәгә лә иҫе китмәй, йәнәһе. «Күрмәгәне ҡаламы?»

Сестра ҡыҙ ҡоҙағыйҙың йәшен, ҡайһы ере ауыртыуын, элек сирләгән сирҙәрен, өй эсендәгеләрҙең сәләмәтлеген һораша. Шәмсинур ҡоҙағый һәр һорауға бәйнә-бәйнә яуап бирә. Күрше-күләнде, нәҫел-ырыуҙы ла телгә алып үтә. Балалары тураһында һүҙ ҡуҙғалғас, ул бөтөнләй йәйелеп китә:

— Балалар таҙа улай. Бынау кесе ейәнем Әпҡәдир генә күҙен бүҫер менән ыҙаланды. Әллә сөннәткә ултыртыу килешмәне инде үҙенә. Сөннәтселәренең дә йүне китте был заманда. Ултыртмайыҡтамы әллә тигәйнек тә... Анау Хәсби ҡарсыҡ теңкәгә тейҙе. Үҙегеҙҙең һуң, ҡыҙым, йорт-ерегеҙ, мал-тыуарығыҙ именме? Ата-әсәйең тигеҙ ғүмер итәме? Үҙең ни әле башлы-күҙле булырға өлгөрмәгәнһеңдер? Бик матур булып буйға еткәнһең былай...

Сестра термометрҙы алып ҡарай:

— 37,4. Саҡ ҡына эҫегеҙ бар, әбей.

— Булыр шул. Әле юлда ел ҡағылғандай итте. Арҡам сымырлап ҡуйҙы.

Шәмсинур ҡоҙағыйҙы врач саҡыртты. Сестра ла уның менән инде. Ишмырҙа, яңғыҙ ҡалғас, өй эсенә тиҙ-тиҙ генә күҙ йөрөтөп сыҡты. Әммә урынынан ҡуҙғалманы. Шулай ҙа һары ҡалай һауытындағы тарағын һурып алып, сәсен тарап ҡуймай сыҙаманы.

Ҡоҙағый байтаҡ торҙо. Башта сестра сыҡты, унан ҡоҙағый күренде. Ҡарсыҡты ишеккә тиклем доктор үҙе оҙата килде. Доктор урыҫ икән, ләкин башҡортса ла арыу ғына һупалай. Ишек төбөндә баҫҡан көйө ул кәңәштәр бирә:

— Мунса бар?

— Бар, бар. Былтыр ғына һалдыҡ. Пары шартлап тора.

— Ҡайын миндек бар?

— Бар, бар. Майҙа уҡ әҙерләп ҡуйғанмын.

— Толоп бар?

— Бар, бар. Ҡартымдан бына тигән толоп тороп ҡалды.

— Мәтрүшкә бар?

— Бар, бар. Һораған бер кешегә лә биреп торам.

— Бал бар?

— Бар, бар. Төшөндөм. Минең Баллыбанат күрше кеүек зиһенле кеше икәнһең. Һай, малатсина! — Ҡоҙағый докторҙың арҡаһынан һөйөп ала. — Тымау төшһә-нитһә, үҙең дә миңә хәбәр иттер. Киленемдән мунса яҡтырғас та, малайка ебәртермен.

Ул Ишмырҙаға күрһәтә. Әммә Ишмырҙаның быға хәтере ҡала. Ниндәй малай булһын ти ул һеҙгә?

1993

АЛТЫН ШӘҮЛӘ

(Легенда)

Раузаға арнайым

Ғәжәп икән ул — төнгө сүл. Ҡом сүле. Ғәрәп сүле...

Тыҡта әле. Ашығып алға уҙмайыҡ. Төн хаҡында һүҙ һуңғараҡ булыр. Әле көндөҙ.

Мәшһүр Зәйнәп батша һарайҙарының харабаларын күреп ҡайтыу ниәте менән Дамасктан Пальмираға ҡарай юл тоттоҡ. Таң яңы яҡтырып килә. Дамаск, һарғылт монарға батып, тиҙ үк күҙҙән юғалды. Машинала дүртәүбеҙ. Шуларҙың береһе, әлбиттә, мин. Оҙаҡ барҙыҡ. Алда ла, артта ла, уңда ла, һулда ла — бушлыҡ. Күҙ күреме етмәҫ ошо бушлыҡта тере өн дә ишетелмәй, кейеклек-йәнлек хәрәкәте лә һиҙелмәй. Әйтерһең, йән эйәһе бөтөнләй юҡ бында. Тик миллион йылдар буйынса иләнгән көрән ҡом ғына тик ятмай. Үҙ яйы менән әкрен генә күсә бирә. Ҡайҙа аға, ҡайҙа күсә был теремек бөртөктәр? Ел ҡайҙа иҫһә, улар шунда күсә. Үҙ иректәре юҡ уларҙың...

* * *

Зәйнәп һарайҙарының емеректәре мине хайран ҡалдырҙы, зиһенемде алды, рухымды дер һелкетте. Бында Әҙәмдең ижад ҡеүәһе менән Ваҡыттың емереү ҡөҙрәте араһында меңәр йылдан ашыу алыш, Фанилыҡ менән Мәңгелек араһында өҙлөкһөҙ ҡыйралыш барған. Биналарҙың ҡатлы-ҡатлы нигеҙ таштарын быуаттар ҡомо йота барған, әммә йотоп бөтөрә алмаған, унда-һанда һерәйеп торған мәрмәр диуарҙарҙы быуаттар еле йә яртылаш киҫкән, йә төптән ҡырҡҡан, әммә бөтәһен дә бөтөнләй киҫеп, ҡырҡып бөтөрә алмаған. Төрлө тарафта ҡолап ятҡан Алпамыша ҡоласы етмәҫ гранит колонналар, заманалар табаны аҫтында тапалып, икегә, өскә һынған. Һынған, әммә онталмаған. Емереү һәм емерелеүҙең фажиғәле бөйөклөгөн күреп, йәнең дә, тәнең дә тетрәй. Әле юлда килгәндә хыялымда пәйҙә булған мөһабәт гүзәл һарайҙарҙы бына хәҙер төҙөк көйө өнөмдә күрһәм, ошо тиклем тетрәнмәҫ инем. Минең аяҡ аҫтымда, гүйә, тарих харабалары, үлемһеҙлеккә дәғүә иткән Матурлыҡ менән Камиллыҡтың ярсыҡтары таралып, аунап ята.

Нимә генә һөйләмәҫтәр ине улар, әгәр телгә килһәләр. Ниндәй генә серҙәр, яҙмыштар, фажиғәләр, ниндәй генә изгелектәр, яуызлыҡтар, ниндәй генә мөхәббәттәр, мәкерҙәр ятмайҙыр был емеректәр аҫтында. Харабалар өндәшмәй ул. Ә беҙ, кешеләр, таштар өсөн уйлай ҙа,

хәтерләй ҙә алмайбыҙ. Мөғжизәләр юҡ. Бәлки, бөтөнләй үк юҡ та түгелдер ул мөғжизә тигәндәре...

* * *

Декабрь көнө тиҙ кискә ауышты. Эңер төшөүгә, беҙ ҡайтыр яҡҡа юҫыҡ алдыҡ. Офоҡ ситенән ҡыҙғылт баҡыр ай тәгәрәп сыҡты. Күтәрелгән һайын ул ағара барҙы. Бер саҡ саф көмөшкә әйләнде. Ошо миҙгелдән алып сүл уянды. Ҡом аҫтынан ҡапыл бәреп сыҡҡан шикелле, төнгө тормош башланды. Ниндәйҙер ваҡ йәнлектәр сыйнай, йыртҡыстар олой, сиңерткәләр серелдәй, дала ҡоштары бер-береһенә тауыш бирә. Уттары тоҡанған машина алдына әленән-әле арыҡ сүл бүреләре, миңә таныш булмаған бүтән йәнлектәр килеп сыға. Шофер уларҙы янтайып үтергә саҡ өлгөрөп ҡала.

Туҡтап-туҡтап төндө тыңлайбыҙ, ай нурына ҡойонабыҙ. Беҙҙе алыҫтан әллә сикһеҙ киңлек, әллә төпһөҙ упҡын солғап алған. Хозур ҙа, шомло ла. Ә ҡом үҙ юлында. Аға бирә. Беҙ шул ағымды йырып барабыҙ.

Бер мәле нәҡ мин ултырған яҡта юлдан алыҫ түгел алтын һын килеп баҫты. Кеше һыны. Ул тап ай тәңгәлендә. Үҙенән балҡыш эркелә. Һындың ҡулында әллә яу ҡоралы, әллә саз. Ул ерҙән байтаҡ өҫтә тора. Биленә тиклем уны әллә ҡыҙыл ялҡын телдәре ялмаған, әллә ҡыҙыл мәк сәскәләре күмгән. Тәүҙә мин юғалыбыраҡ ҡалдым. Ләкин тиҙ үк аңыма килдем.

— Ниндәй гүзәл һәйкәл! — тип ҡысҡырҙым. Туҡтайыҡ. Төшөп ҡарайыҡ.

Юлдаштарым башта быға иғтибар итмәне һымаҡ. Моғайын, үҙ уйҙарына сумғандарҙыр.

— Зинһар, туҡтайыҡ! — тип ялбарҙым.

Туҡтап, машинанан төштөк.

— Ҡайҙа ул?

— Ана! Ана бит! Алтын һәйкәл! Биленәсә үҙен ялҡын ялмаған, — тим.

— Күрмәйем шул.

— Йоҡлап килеп, төш күргәнһеңдер.

Минең ике ватандашым шулай тине. Өсөнсө юлдашыбыҙ — беҙҙең хужабыҙ һәм шоферыбыҙ, ғәрәп

яҙыусыһы өндәшмәне. Шул арала һәйкәл минең өсөн дә юғалды.

— Кисерегеҙ. Сүлдәге мираж булғандыр. Ай яҡтыһында мин былай ҙа һаташыусанмын, — тип аҡландым. Аҡланһам да, күргәнем күңелемде ҡуҙғатты.

Хужабыҙ һүҙгә килде:

— Был мираж түгел. Сәйәхәтсе һәйкәл ул. Йөҙ йыл эсендә бер генә кешегә күренә, тиҙәр. Мин әле шуның хаҡында уйлап килә инем. Уйланым, әммә үҙен мин дә күрмәнем. Ә бына һеҙ күргәнһегеҙ.

* * *

— Был мираж түгел, — тине хужабыҙ.

Ә ни өсөн шулай икәнен хикәйәләп аңлатты. Мин ул риүәйәтте һүҙмә-һүҙ ҡабатлап, бәйән итәм.

* * *

Сибәрлеге, аҡылы, илаһи тәбиғәте менән Мысырҙан алып Әрмәнстанға саҡлы шөһрәте таралған Зәйнәп хакимәнең һарайҙары төҙөлөп бөткән саҡ икән. Береһенән-береһе аҫылыраҡ, зиннәтлерәк мәрмәр биналарҙың гәүһәр биҙәктәре, ҡояштың үҙе менән ярышып, нур сәсә. Һарайҙар тирәһендә һылыу пальмалар баштарын һауаларға сөйөп тора. Баҡсаларҙағы ағастар, ботаҡтарын ергә эйеп, йыл әйләнәһенә татлы емештәр өлгөртә. Түтәлдәрҙән розалар, йылдың миҙгеленә ҡарап, аҡ, ҡыҙыл, зәңгәр, һары сәскәләр ата. Ярҙары алтынға мансылған түңәрәк күлдәр көҙгөһөндә күктәр сағыла. Күлдәрҙә ал суҡышлы аҡҡоштар йөҙөп йөрөй.

Зәйнәп батшаның сибәрлеге менән аҡылы ғына түгел, уның байлығы менән йомартлығы хаҡындағы хәбәрҙәр Ҡыҙыл диңгеҙҙән алып Ҡара диңгеҙгәсә тарала. Шуға күрә мәшһүр Пальмираға ҡоро ерҙең һәм даръяларҙың һәр тарафынан ҡунаҡтар ағыла. Шаһтар, яу ҡайтарған батырҙар, шағирҙар, ғалимдар, сауҙагәрҙәр, дәрүиштәр өҙөлмәй унан. Хакимә, уларҙы дәрәжәләргә һәм заттарға айырмай, һәммәһен бер табынға ултырта. Хужа алдында бөтәһенең дә дәрәжәһе тигеҙ, юғары. Улар —

ҡунаҡ. Тик яусыларҙы ғына хуш күрмәй матурҙарҙың-матуры Зәйнәп батша. Ҡайҙан ғына килмәгән улар — Скифиянан тиһеңме, Һиндостандан тиһеңме, Ҡытайҙан тиһеңме?! Донъя тетрәткән хандар, илдәр яулаған ғәйрәтле шаһзадалар уның алдына килеп баш орған, теҙ сүккән. Тик берәү ҙә уның ҡулына түгел, хатта бармаҡ осона ҡағылыу бәхетенә ирешә алмаған. Сөнки гүзәлдәрҙең-гүзәле Зәйнәп хакимә үҙ ҡул аҫтындағы ырыуһыҙзатһыҙ берәүҙе йәшерен яратыу менән яратҡан. Был серен ул тулған айҙан башҡа берәүгә лә асмаған. Төнгө сәғәттәрҙә күкрәгенән бөркөлөп сыҡҡан өмөтһөҙ ғишыҡ уттарын ул «уф!» тип айға йүнәлткән. Ай серҙе ҡабул иткән. Көнгә сыҡҡас Зәйнәп батшаның төнгө ғазаптары тарала төшә, күңеле урынына ултыра бара, алсаҡлығы ҡайта.

Иң затлы, иң арҙаҡлы әҙәмдәр йыйылған ҙур мәжлестә ҡунаҡтарҙан берәү көтмәгәндә һорай һала:

— Тәңребеҙҙең һөйөклө ҡыҙы ай йөҙлө Зәйнәп, бер кәлимә һорауым бар. Рөхсәтме? — ти.

— Рөхсәтем бар, хәлиф, һора, — ти хакимә.

— Вәзирҙәрең һиңә тоғромо, падишаһ?

— Вәзирҙәремме... Тоғролор, тим...

Ошо мәл мәмләкәттең ун ике вәзире лә, һикереп, аяғүрә баҫа. Баш вәзир яуап бирә:

— Ай йөҙлө, ҡояш һынлы хакимәбеҙ, алдыңда торған ун икебеҙ ҙә һинең өсөн утҡа ла, һыуға ла ташланырға әҙербеҙ. Әмереңде генә бир.

Тап ошо көндәрҙә баш вәзирҙең аҫтыртын ҡылыҡтары тураһында хакимәгә ошаҡ килеп еткән булған.

— Рәхмәт, баш вәзир. Ышандым, — ти Зәйнәп батша. Ишара яһап, ултырырға ҡуша.

* * *

Ышаныуын ышана ла Зәйнәп батша... Шулай ҙа ҡала уртаһындағы майҙанда төн эсендә түңәрәк ҙур ике соҡор ҡаҙырға фарман бирелә. Уларҙың береһенә һыу, икенсеһенә усаҡ яндырыу өсөн утын тултырырға ҡушыла. Көн бите асылыуға фарман үтәлә. Үҙенең аҫыл һөйәкле ҡунаҡтарын, ун ике вәзирен, һарай хеҙмәтселәрен эйәртеп, хакимә майҙанға килә. Ул яҡынлашыу менән бер

соҡорҙа, гөлт итеп, ут тоҡана, икенсеһендә боҙло һыу сайҡала башлай. Был тамашаның мәғәнәһенә башта берәү ҙә төшөнмәй — хатта ғаҡыл эйәләре лә. Майҙан шымыш ҡала. Тик ҡайҙандыр яманһыу саз моңо ишетелә.

Ялҡын торған һайын бейеккә ынтыла, һыу торған һайын нығыраҡ тулҡынлана. Килеүселәр ут менән һыу араһында тәғәйенләнгән урында туҡтап ҡала.

— Бына, тоғро вәзирҙәрем, минең өсөн утҡа ла, һыуға ла ташланырға әҙер булған ярандарым, һынау сәғәте һуҡты. Ун икегеҙ бер юлы фиҙакәрлегегеҙҙе иҫбат итә алаһығыҙ. Тәүҙә ут, унан һыу һеҙгә.

Вәзирҙәр баштарын эйеп тик тора. Кешеләрҙең күңелен шом баҫа. «Изгеләрҙән-изге, мәрхәмәтле Зәйнәп батша шул тиклем аяуһыҙ язаны ни өсөн бирә икән?» — тип уйлайҙар.

— Көтәм! — тине хакимә.

Вәзирҙәрҙең күҙҙәре ҡуҙғалмаҡсы итә, тик табандары ерҙән ҡупмай. Юҡ, тупраҡ тотмай табандарын. Ҡурҡыу тота.

Тап ошо мәл, йөрәгендә мәңге уңалмаҫ яра йөрөтөүсе, тыумыштан бойоҡ йөҙлө бөйөк шағир Әбүбәкер, сазын сиртеп, ялҡын ҡаршыһына килеп баҫа. Шағир күренгәс тә, ни мөғжизә менәндер, батша-ҡыҙҙың башындағы тажы төшөп китә. Тажды ул тиҙ генә эйелеп ала, ләкин кире кейергә ашыҡмай.

Әбүбәкер сазын сиртеүҙән туҡтай ҙа, былай ти:

— Илебеҙҙең бөйөк хакимәһе! Матурлыҡтың бөйөк батшаһы Зәйнәп! Вәзирҙәреңә биргән әмереңде кире ал. Улар барыбер һинең өсөн түгел, үҙҙәре өсөн генә үләсәктәр. Был ҡуйҙарҙы ҡалдыр, падишаһбаныу. Бөтә мәмләкәттә һиңә йәнен бирергә хыялланған берҙән-бер кеше — мин ул, бисара шағир Әбүбәкер. Яуҙа бирер инем был йәнемде. Яу асманың. Рәхмәт һиңә, усаҡ яҡтың. Тәнемде яндырып, йәнемде һиңә тапшырам.

Ошо һүҙҙәрҙе әйтә лә Әбүбәкер ялҡын эсенә һикерә.

— Ах! — тип кенә өлгөрә Зәйнәп.

Шаңҡып ҡалған һаҡсылар шағирҙы ҡотҡарырға өлгөрмәй. Зөбәржәт тажын ҡулына тотҡан көйө, Зәйнәп батша һарайы яғына ынғайлай...

* * *

Икенсе көндө изге күңелле хакимә вәзирҙәренә ошондай һүҙҙәрҙе әйткән: «Мин һеҙҙе утҡа һалырға килтермәгәйнем. Ынтылып ҡараһағыҙ ҙа тыйыр инем. Һаҡсылар иҫкәртелгәйне. Улар ебәрмәҫ ине. Был юлы мин һеҙҙе, баш вәзир, һине лә ғәфү ҡылам. Әгәр бынан кире уйығыҙҙа булмағанды телегеҙ һөйләһә, яҙа тап ошондай булыр...», һәм был хәлифәттә шул көндән алып ялғанды һөйләү тамам бөтә. Вәзирҙәр алдашмаҕас, халыҡ та алдашыуҙан тыйыла.

* * *

Әбүбәкерҙең йәне ысынлап та, Зәйнәпкә күсә. Ул артабан ике йән менән ғүмер һөрә. Ҡуш йөрәкле кешеләр була бит. Ул да шуның ише. Ҡуш йәнле була.

Зәйнәп батша үтә маһир оҫтанан шағирҙың һәйкәлен ҡойҙора. Һары алтын һынды биленә тиклем ҡыҙыл алтын ялмаған була. Ҡулында көмөш саз. Һәйкәлде ул һарай алдына үҙ тәҙрәһе ҡаршыһына ҡуйҙыра. Айлы төндәрҙә, көмөш сазға нурҙар ҡағылып, үҙәк өҙгөс моңдар ярала. Ошондай саҡтарҙа хакимә, мөҡәддәс һынға бағып, сихри моңдарға әсирләнеп, күҙ йәштәрен тыя алмай, таңды ҡаршылай.

Хакимдар ҙа был донъяға мәңгегә килмәй. Ике йәнле Зәйнәп тә ер йөҙөнән китеп бара. Шул уҡ миҙгелдә һәйкәл дә юҡ була. Имештер, уға йәне әйләнеп ҡайта. Ул, ауырлығын юғалтып, алтын шәүләгә әйләнә. Шәүләне ай тартып ала.

* * *

Тулған айҙың мәрхәмәте менән йөҙ йылға бер генә күренеп ҡала икән шағир Әбүбәкерҙең шәүләһе. Ихтимал, ошо сәғәттә ҡайҙалыр даһи яралалыр...

* * *

Тирә-яҡта төнгө сүл. Ҡом сүле. Ғәрәп сүле. Түбәлә тумалаҡ ай. Беҙҙең эҙҙе күмеп, теремек бөртөктәр

йүгерә. Ҡайҙа күсә улар? Ел ҡайҙа иҫһә, шунда күсә. Дәрдмәндең шиғри юлдары хәтеремде борсой: «Иҫә елдәр, күсә ҡомдар, бөтә эҙ...» Үҙ иректәре юҡ ҡом бөртөктәренең. Әллә беҙҙең хәл дә шундаймы?..

1994

ЙӘЛӘЛЕТДИН АТАЙ

М. А. Зайцевҡа арнала

Минең бер дуҫым бар. Арҙаҡлы кеше. Ҙур кеше. Исеме Михаил. Фамилияһы Ҡуянов. Ҙур кешеләр ҙә ҡасандыр бәләкәй булғандар. Бала булғандар. Минең дуҫым да бала, етмәһә, детдом балаһы булған. Һуғыш уны тиҙ үк етем ҡалдырған. Ҡуяновтың тәбиғәтендә тәү ҡарауға бер-береһенән алыҫ ике сифат бар: тартыныусанлыҡ һәм тәүәккәллек. Ә, асылда, уның ҡыйыулығы — инсафлы, әҙәплеге — батыр. Тап шулай. Һүҙгә йомарт уҡ булмаған был кешенең һағынып һөйләгән нәмәһе — шул детдом хәлдәре — уның тамашалары, мажаралары, хикмәттәре. Алда бәйән ителәсәк әңгәмә уның ауыҙынан бәйнә-бәйнә сыҡҡан һүҙ.

— Көҙ башында беҙҙең кластың тәрбиәсеһе «ҡамыш сираҡ, еҙ суҡыш» Федора Тихоновнаны ҡайҙалыр бүтән ергә ебәрҙеләр. Аҙып, шаярып киткән сағыбыҙҙа беҙҙе ҡысҡырып тыңлата алмаһа, ул, ултырып, шым ғына илай ине. «Ниңә һеҙ, етемкәйҙәрем, шул тиклем аяуһыҙһығыҙ? Мин дә етем үҫтем, ә күңелем ҡатманы...» — тип зарын түгә. Ун өс-ун дүрт йәшлек малайҙарҙы, бигерәк тә детдом шайтандарын күҙ йәше менән еңеү мөмкин түгел. Бик теләһәң дә, булмаған эш. Сөнки йомшаҡ күңеллелек унда бәғерһеҙлеккә буйһона. Киреһенсә килеп сыҡмай. Беҙ Федора Тихоновна артынан, тел сығарып, танау тартып оҙатып ҡалдыҡ.

Аҙна ла уҙманы, беҙгә яңы тәрбиәсе килде. Тәрбиәсе түгел, картинкә, бер тамаша. Күргәс тә шаҡ ҡаттыҡ. Кәүҙәһе менән торғаны бәһлеүән. Ҡалын ҡара мыйығы, танау аҫтынан сығып, ярты битен ҡаплаған. Буденныйҙыҡынан да хәтәрерәк. Түбәһендә — арттан ике таҫмаһы аҫылынып төшкән матрос кәпәсе, өҫтөндә — еҙ төймә-

ләре емелдәп торған буҫтау бушлат. Түшендә бер миҙалы ла бар. Ҡара салбарының яман киң уң балағы ергә тейеп-тейеп ҡала. Шул балаҡ ситенән ҡара ботинка мороно ялтырап күренә. Һул балағы, бик бөхтә төрөлөп, ағас аяҡҡа ҡыҫтырылған. Әүәлерәк, яңы уҡытыусы йәки тәрбиәсе килһә, уны беҙҙең менән йә директор, йә бүтән берәү индереп, маҡтай-маҡтай таныштыра ине. Был юлы бүтәнсә булып сыҡты. Беҙҙең класс, көндөҙгө дәрестәр бөткәс, алға бирелгән һабаҡтарҙы әҙерләп ултыра ине. Шул саҡ ул яңғыҙы килеп керҙе. Тәүҙә беҙ, күҙебеҙ менән йоторҙай булып, быға ҡарап ҡаттыҡ. Шунан берәм-берәм аяғүрә баҫтыҡ. Ошондай ғифрит ҡаршында баҫмай сыҙап ҡара. Ул да өндәшмәй, беҙ ҙә шымдыҡ. Байтаҡ ваҡыт үтте.

— Ултырығыҙ, егеттәр, — тине ул, ҡалын тауышы дөңгөр-дөңгөр килеп сыҡты.

Ул әйткәс тә, ултырышырға тиҙ үк баҙнат итмәнек, «егеттәр» булһаҡ та.

— Ултырышығыҙ. Мин һеҙҙең яңы тәрбиәсегеҙ. Исемем Йәләлетдин. Фамилиям Ҡулыев. Йәләлетдин Ҡулыев булам. Һыңар аяҡҡа ҡалған матрос. Севастополдә мина өҙҙө. Йәшем ҡырҡта. Һеҙҙең бөтәгеҙгә лә атай булыр йәштәмен. Миңә «Йәләлетдин ағай» тиһәгеҙ ҙә, «атай» тиһәгеҙ ҙә була. Ҡабул итәм. Өлкән улым Вәлетдин яҙын Берлинды алды ла хәҙер шунда хеҙмәт итә. Ул һеҙҙән саҡ ҡына олораҡ.

Быға ла хайран ҡалдыҡ. «Их, Вәлетдин кеүек, бәхетең булып, фашистарҙы ҡырып, Берлинды алһаң ине», — тип көнләштем мин. Байтаҡ ҡына торғас, яңы тәрбиәсе өҫтәп ҡуйҙы:

— Яҡшы ҡылыҡтарығыҙ өсөн маҡтармын, яманы өсөн орошормон.

Быңаса беҙгә яҡшыһы өсөн дә, насары өсөн дә бер үк нәмә — әрләү эләгә ине. Сөнки йыш ҡына һәйбәт эшебеҙ ҙә аламалыҡ менән бөтә ине.

Ул тәҙрә эргәһендә торған артһыҙ ултырғысҡа уҙып ултырҙы.

— Мин ошонда шым ғына ултырып торам, һеҙ ашыҡмай-ҡабаланмай дәрестәрегеҙҙе әҙерләгеҙ. Эшегеҙҙе еренә еткереп башҡарһағыҙ, бер тәҡдимем буласаҡ. Әлегә әйтмәйем. Сер.

Беҙ эшкә керештек. «Ҡамыш сираҡ, еҙ суҡыш» булһа, шунда уҡ берәй ҡыҙыҡлы китапҡа йәбешер ине. Был тик ултыра бирә. Ара-тирә генә беҙгә күҙ ташлай. Һөҙөлөп күҙәтмәй, былай ғына ҡарап ала. Ашыҡмау ҡыйын булһа ла, түҙәбеҙ, сер бирмәйбеҙ.

Класс атаманы ҡылый Гарибальди — арабыҙҙа иң уҫалы. Ысын исеме Мөхтәр уның. Ул беҙҙе йоҙроҡ эсендә ҡыҫып тота. Эш бөткәнде аңлатып, беҙ ҡыймылдаша, шылыша башлағас та, ҡымшанмай ултыра. Этләшә, яуыз. Беҙҙең сыҙамлыҡты сынаҡтыра. Шул һөнәрҙе ярата ул. Үҙе башлы малай. Дәрестәрен һә тигәнсе әҙерләп ташлай.

Ҡылый Гарибальди, аяғүрә баҫып, утыҙ ике таҡыр баштан торған класты байҡап сыҡты.

— Әҙер, — тине ул. — Һеҙгә күрһәтергәме?

— Әҙер булғас, һәйбәт. Бөгөнгә былай ҙа ышанам.

— Алдашыу юҡ. Алдаҡсының ҡолағы ҡыҙара, — тип ҡырт киҫте Мөхтәр, йәнәһе, кинәйәләп.

— Флотта ла шулай. Ялғансының күмәкләп ҡолағын ыуалар, — тип ҡеүәтләне бәһлеүән. — Ярай. Былдай язаны ҡулланырға беҙгә тура килмәҫ... Ә бая әйткәнем шул. Көн сыуаҡ, йылы. Ана һауала һыҙылып-һыҙылып үрмәксе дебеттәре йөҙә. — Ул тәҙрәгә күҙ ташлап алды. — Киске ашҡа тиклем әле ваҡыт күп. Теләһәгеҙ, әйҙәгеҙ, урманға сығабыҙ. Ризамы?

Урманға түгел, әле беҙҙе урамға ла сығармайҙар. Өлкән класс уҡыусыһы ҡайҙалыр тәртип боҙған да, шуның бәләһе бөтәбеҙгә лә тейҙе. Тәрбиәсенең һүҙҙәренә беҙ тәүҙә ышанып та етмәнек. Беренсе булып йәшел тауышлы Айтимер һөрәнләне.

— Ур-ра, урман! Ур-ра! — Ул урманлы мари яғынан ине. Шунан бөтәһе лә гөж килде.

— Ярай әләйһә, нәмәләрегеҙҙе йыйыштырығыҙ ҙа, ҡуҙғалайыҡ.

Ул йылдарҙа ҡала тирәһендә имән ҡатыш йүкә урмандары, соҡорҙарҙа шырлыҡтар бар ине. Беҙгә яҡын ғына шундай урманға ыңғайланыҡ. Көн салт аяҙ. Һарғылт үлән өҫтөндә шыйыҡ нурҙар йымылдап уйнай. Елдең әҫәре лә юҡ. Күктә бая тәрбиәсе әйткән үрмәксе ептәре бәүелеп тора. Аҡһаҡ баһадир, ағас аяғын һелтәй һалып, һәлмәк кенә атлай. Беҙ уның бер алдына, бер уңына, бер һулына сығабыҙ. Уға һүҙ ҡушҡы, күңеленә

ятырлыҡ нимәләр әйтке килә. Тик нисек, кем тип өндәшергә?

Мин бындағы етемдәрҙең иң бәләкәсемен. Шулай ҙа һуғышҡа киткән атайымды бик яҡшы хәтерләйем. «Атай» һүҙе тел осонда ғына, ысҡынырға ғына тора. Ысҡыныр ҙа ине, Гарибальдиҙан уҙып, әйтергә батырлыҡ етмәй. Саҡ түҙәм.

Урман ситенә еткәс, матрос беҙгә былай тине:

— Бер-берегеҙгә күҙ-ҡолаҡ булығыҙ. — Ул Мөхтәргә айырым өндәште. — Исем-фамилияң кем әле һинең?

— Мөхтәр Ишбулдин-Гарибальди. Ҡушымтаһы китап исеменән күсте.

— Ә һин, Мөхтәр Ишбулдин-Гарибальди, бөтәһен дә ҡанат аҫтыңа ал. Ризамы шуға? Ярай.

— Ярай, риза, Йәләлетдин атай, алырмын, — тине теге ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына.

Сирҡансыҡ алынды! Китте шунан «Йәләлетдин атай». Кәрәкһә-кәрәкмәһә лә әйтергә тырышабыҙ: «Йәләлетдин атай», «Йәләлетдин атай». Әйтерһең, әле генә телебеҙ сыҡты. Урман буйында оҙаҡ булдыҡ. Йүгерештек, һикерештек, көрәштек, тәкмәс атып аунаныҡ, шап-шаҡыр, күҙ бәйләнеш уйнаныҡ, туйғансы туп типтек. Бейек ағас ботағына атланып, таған атындыҡ. Айтимер ҡыуаҡ араһынан кескәй генә ҡош ояһы табып сыҡты. Кеҫә тултырып имән сәтләүеге йыйҙыҡ. Шырлыҡҡа инеп, миләш тирҙек. Нимә теләһәк, шуны эшләнек. «Сеү!», «Ярамай!» тигән һүҙ ишетмәнек. Йәләлетдин атай, ауған имәнгә ултырып, беҙҙең рәхәткә сығыуыбыҙға ҡыуанып, гел йылмайып торҙо. Мин унан күҙемде лә алмайым. Шул матур көндә мин генә ҙур бәләгә тарыным. Ағас башынан һикергәндә, ҡоро ботаҡҡа эләгеп, күлдәк итәгем ярылды. Иларҙай булып, Йәләлетдин атайға килдем. Бындай зыян өсөн беҙҙә нығ әрләйҙәр. Ул минең таҡыр башымдан һыйпаны ла:

— Һин кем әле?

— Миша Ҡуянов, — тинем дә илап ебәрҙем.

— Ебеп төшмә, Миша Ҡуянов. Һин әле бер заман ир арыҫланы булырһың. Күлдәкте беҙ уны һинең менән, тегеп кенә түгел, хәҙер ҡойоп ҡуябыҙ.

Ул, матрос кәпәсен һалып, уның ҡайһы еренәндер ҡара епкә һапланған йыуан ғына энә килтереп сығарҙы, иҫән аяғын алға һондо. Йомшаҡ ҡына тауыш менән:

— Һал күлдәгеңде, — тине.

Ултырған ерендә йыртыҡты тегеп тә бирҙе.

— Ана, элеккенән дә ҡупшыраҡ килеп сыҡты. Ә һин балауыҙ һығаһың.

Ысынлап та, йөйө лә беленмәй бит.

Минең ҡазанан башҡа, бөтәһе лә һәйбәт булды. Йүгерә-һикерә уйнап ҡайттыҡ.

Иртәгеһен алама хәбәр ишеттек. Директор, имештер, башбаштаҡлыҡ күрһәтеп, беҙҙе урманға алып сыҡҡан өсөн, Йәләлетдин атайға шелтә биргән. Теге ыжламаған да. Сиңерткә хәтле генә директорға иҫе китте ти ошондай геройҙың. Сиртте-осорҙо булыр. Ятыр унан сиҡылдап.

Кис ятҡас, оҙаҡ йоҡлай алманыҡ. Бик кәрәкле эште тикшерҙек.

— Былай килешмәй, малайҙар, — тине Мөхтәр Гарибальди, — Йәләлетдин атайыбыҙ рядовой матрос булып йөрөй. Улай йөрөмәһен, уға ҙур звание бирергә кәрәк.

— Ә ниндәйҙе?

— Китаптанмы, әллә ысындымы?

— Түлке ысынды!

— Улайһа ни, генерал инде.

— Йүләр, генерал ҡоро ерҙә генә командовать итә ул.

— Ә ағас аяҡлыға ҙур звание яраймы икән? — Быны һәр саҡ икеләнеүсән Изя тигән малай әйтте.

— Уның берҙән-бер аяғы ике, хатта өс аяҡҡа торорлоҡ, ағасын да ҡушһаң... — тигән төҙәтмә индерҙе ҡушбаш Сабир.

Мөһөрҙө Мөхтәр һуғып ҡуйҙы:

— Уға адмирал тейешле. Ҡоро ғына адмирал түгел, ә адмирал Нахимов. Миҙалға төшкән Нахимов.

— Бер саҡ ул да Севастополдә ҡаты һуғышҡан. О-һ-о! — Шулай тип мин дә белемемде күрһәтеп алдым.

Был, әлбиттә, бик ҡаты, бик ҙур сер булырға тейеш. Уны беҙҙән башҡа берәү ҙә, хатта Йәләлетдин атай үҙе лә белмәйәсәк. Мөхтәр бәкеһенең ҡоросон үбеп, рыцарҙарса ант бирҙек. Серҙе сисҡән әҙәм ғүмерлек ҡыҙыл ҡолаҡҡа әйләнәсәк.

Тәүге көндә үк тактыр башлы утыҙ ике малайҙы әүрәтте лә ҡуйҙы Йәләлетдин атай. Өҫтәүенә, ошо ике-өс сәғәт эсендә байтағыбыҙҙың исемен, хатта фамилияһын отоп алды. Ҡайтыр юлда әле беребеҙҙе, әле икенсебеҙҙе исемләп атап, эргәһенә саҡырҙы, һүҙ ҡушты, һорашты, бәләкәйгә-ҙурға, көслөгә-көсһөҙгә айырманы.

Иртәгеһен дә ул төштән һуң керҙе. Был юлы матрос формаһында түгел, таушала төшкән һоро костюмда ине. Тиҙ генә танымай торҙоҡ, ләкин аптыраманыҡ. Көн дә байрам, көн дә туй булмай ҙа. Ағас аяғы ғына элекке ине. Шаҡылдатып баҫып, ул тәҙрә эргәһенә уҙҙы ла кисәге ултырғысҡа ултырҙы. Класс оҙаҡ баҫып ҡалды. «Адмирал атай» (эсемдән мин уны шулай ҙа атағым килде) йылмайып, ҡулы менән ишара яһаны. Ултырышып, дәрескә керештек.

— Бөгөн нимәнән бирҙеләр? — тине ул.

Атаман яуап ҡайтарҙы:

— Алгебранан, йәнә химиянан яҙма эш. Күп түгел.

— Ярай, алгебра хикмәтле фән ул. Эшләп бөткәс, староста әйтер.

Ашыҡмаһам да, һабағымды тиҙ бөтөрҙөм. Бүтәндәр ҙә шулай. Баш үҙенән-үҙе эшләй. Күңелдә шундай еңеллек, яҡтылыҡ. Рәхәт. Ауылдағы өләсәйем был хәлде: «Күкрәгеңдә һинең тәңре нуры балҡый», — тиер ине. Мин бит эшемде үҙем өсөн эшләмәнем, Йәләлетдин атай хаҡына башҡарҙым.

Эшебеҙ бөткәс, бер-бер артлы килеп, дәфтәрҙәребеҙҙе адмирал атайға күрһәттек. Ул берәүҙең дә дәфтәрен ҡулына алманы. Мөхтәрҙең генә асыҡ дәфтәр битенә һуҡ бармағы менән төртөп:

— Ҡара әле, Мөхтәр, ошо ерҙә хата юҡмы?

— Юҡ! — Күҙен ҡыйшайтып ҡарап алды Гарибальди. — Хата юҡ!

— Һин һәйбәтләберәк ҡара.

— Әй, бар икән дә. Аҙағына нөктә ҡуйылмаған.

— Һиңә айырыуса йыйнаҡ булырға кәрәк, Ишбулдин. Һиңә бүтәндәр эйәрә. Ә ҡалғаны бик яҡшы. Молодец! Ярай.

«Ярай» һүҙен яратып әйтә ул.

Миңә сират еткәс, ошондай иҫкәртеү яһаны:

— Эстәлеге яҡшы, формаһы шәп түгел, Миша Ҡуянов. Йәғни хәрефтәрең тигеҙ теҙелмәгән. Музыка яҙыуы һымаҡ. Тырышһаң, ҡойоп ҡуйырһың, һин булдыҡлы егет.

«Музыка яҙыуы» нимә икәнен мин үҫә биргәсерәк кенә аңланым. Нота була икән ул. Яҙыуым минең торабара төҙәлде.

Дәрестәр әҙерләүгә кире әйләнеп ҡайтмаҫ өсөн, шуныһын әйтеп бөтөрәйем. Артабан ул эштәребеҙгә һирәк күҙ һалды, ә уларҙы үҙ-ара тикшертте: һин — минекен, мин — һинекен. Әлбиттә, бер-берендең хаталарын сүпләү һәйбәт үк нәмә булмағандыр — әлегесә, өлкәндәрсә уйлағанда. Ләкин Йәләлетдин атай ҡушҡас, беҙ уны ғәмәлгә һананыҡ, иптәштәреңә ихлас ярҙам итеү тип аңланыҡ. Үсекләшмәнек тә.

— Бөгөн шәмбе. Һеҙгә кино күрһәтәсәктәр. «Салауат Юлаев»ты.

Беҙ шауларға, сәпәкәй итергә керештек.

— Туҡтағыҙ әле, әйтеп бөтөрмәнем. — Уның ҡалын, көр тауышы беҙҙе тиҙ баҫты. — Минең шундай ниәтем бар. Һәр йәкшәмбе һайын арағыҙҙан дүртәүегеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырмаҡсымын. Һыйым шыйыҡ, түрем иркен. Ҡатыным да риза, һеҙ шуға нисек ҡарайһығыҙ?

Нисек ҡарайыҡ инде? Беҙҙең ни беребеҙҙең дә һис ҡасан ҡунаҡта булғаныбыҙ юҡ. Нимә икән ул «һыйым шыйыҡ, түрем иркен»?

— Ярай, ҡаршы килеүсе юҡ?

«Детдом балалары» тигән исем уҫаллыҡ, саялыҡ төшөнсәһе йөрөтһә лә, эстән улар ҡыйыуһыҙ, оялсан балалар. Шуғалыр инде был хәбәргә лә аптырабыраҡ ҡалдыҡ.

— Ҡаршы булмаҡас, тәүге дүртәүҙе тәғәйенләп ҡуйығыҙ. Йәрәбә һалышмы унда... Иртәнге аштан һуң килеп алырмын, кире яҡҡа оҙатып ҡуйырмын.

Бына бер тамаша! Кемдәр генә бәхетенә эләгер был «ҡунаҡ»? Мин арала иң бәләкәсе, етмәһә, йыуашмын. Ҡасан етә әле миңә ул бәхетле сират? Иҫәпте шәп беләм — һигеҙенсе аҙнала ғына.

Адмирал Йәләлетдин атай кластан сығып китеү менән, ҡылый Гарибальди алға килеп баҫты:

— Әлегеһенә йәрәбә менән маташмайбыҙ. Быныһы — разведка. Команданы үҙем тәғәйенләйем. Дөрөҫмө?

— Дөрөҫ, — тине кемдер ишетелер-ишетелмәҫ кенә.

— Дөрөҫ шул! — тип раҫланы атаман. — Миша Ҡуян — бер. Ул буйға бәләкәй булһа ла, математиканы шәп белә. Урал Урманов — ике. Йыр йырларға тура килһә — моңо бар. Ҡунаҡ йыр-бейеүһеҙ булмай ул. Хәнйәр танау Хачим Пшимах — өс. Бөйөк черкес халҡының атаҡлы улы. Өлгәшеүе самалы булһа ла, бейеүе дәртле. Дүртенсеһен үҙегеҙ һайлағыҙ.

— Мөхтәр Ишбулдин-Гарибальди — генералисси-мус! — тип был юлы икеләнеүһеҙ ҡысҡырҙы Изя. Бер ыңғайҙан яңы ҡушамат та тыуҙы.

— Ҡаршылығым юҡ, — тине яңы «генералис-симус». — Ризамын. Хәҙер бөтәһен дә дөрөҫләп, ҡул күтәрәбеҙ.

Ҡул күтәрҙек. Эше лә бөттө.

Ул беҙҙе башта трамвай менән алып барҙы. Ниндәйҙер туҡталышта төштөк тә йәйәү киттек. Мөйөштәге яҙыуҙы уҡыйым: Чернышевский урамы. Ике ҡатлы бер бейек таш йорттоң ҡапҡаһына индек. Моғайын, Йәләлетдин ағайҙың «иркен түре» ошо бейек өйҙөң икенсе ҡатындалыр. Юҡ, булманы. Ары киттек. Иң төптәге тәпәш кирбес бинаға яҡынлаштыҡ.

— Минең һарайым ошо инде, — тине ул. — Элек бында бер бай һатыусының икмәк һалыу урыны, йәғни пекарняһы, булған. Хәҙер беҙ торабыҙ.

Тышҡы ишектән ингәс, ике баҫҡыс түбән төштөк. Адмирал атай шунда уҡ эскеһен асты ла тауыш бирҙе:

— Рөхсәтме, Ҡәлби-ну-ур?!

Эстән яғымлы тауыш яңғыраны:

— Рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар!

Була бит шундай тауыштар. Һүҙ һөйләүе лә йыр йырлаған шикелле.

Беҙ ифрат ҙур сәйер бүлмәгә килеп индек. Уҙырға ҡыймайыраҡ торғанда, Ҡәлбинур апайҙың тауышы дәрт бирҙе.

— Уҙығыҙ, уҙ, тартынмағыҙ, — тип йырланы ул.

Шунда ғына Мөхтәр Гарибальди, кәпәсен һалып, иҫәнләште:

— Һаумыһығыҙ, Ҡәлбинур апай!

Беҙ ҙә шулай иттек. Ул арала беҙҙең сама ике малай килеп ололарса ҡул һуҙҙы. Икеһе лә бер төҫлө. Күрештек.

— Игеҙәктәребеҙ, Йыһангир менән Зөфәр, — тип таныштырҙы әсәләре.

Стена буйындағы оҙон эскәмйәгә теҙелешеп ултырҙыҡ. Ирмәк йорт был. Кешегә һиҙҙермәй генә уны байҡап сығам. Ғәләмәт дәү бүлмәнең яртыһын тиерлек киң ауыҙлы тәпәш мейес алған. Уртала йыуан аяҡлы ҡалын өҫтәл. Арғы мөйөштә матур ҡорама юрған ябылған ҙур тимер карауат. Юрған өҫтөнә ҡабартылған әллә нисә аллы-гөллө мендәр ҡатлы-ҡатлы өйөлгән. Кәбәркәлә киң генә урындыҡ. Ул сепрәк балаҫ менән ҡапланған. Түр стенаның ике ерендә баштары ҡыҙыллы-зәңгәрле дебет менән сигелгән һөлгөләр эленеп тора. (Боголюбовкалағы ҡартнәйемдең дә ошондай таҫтамалдары бар, уны беҙҙә «рушник» тиҙәр.) Өс тәҙрә төбөндә лә яҫы балсыҡ сүлмәктәрҙә гөлдәр ҡыҙыл сәскә атып ултыра. Дүртенсеһендә эре билсәнгә оҡшаған сүп үләне һауыт биләп тора. Нимәгә кәрәк икән инде уныһы? (Ҡартнәйемдең дә ошондай гөлдәре бар. Билсәне генә юҡ.) Эленмәле кәштәгә байтаҡ ҡына китаптар теҙелгән. (Ошондай уҡ кәштәгә минең ҡартнәйемдең иконалары ҡуйылған. Ҡайһы саҡ шунда һуҡыр лампа ла яна. Гел яндырыр ине лә, кәрәсин ҡайҙан еткермәк кәрәк.)

«Мә, ҡоҙағый, һиңә хәҙергә бер төймә» тигәндәй, иҫ итмәҫтән Хачим телгә килә:

— Беҙҙә, Кавказда ла, ҡатын-ҡыҙ ҡул эшенә бик оҫта. — Күрәһең, минең ише, ул да үҙенекен уйлап ултырғандыр.

— Беҙҙә ундай оҫталыҡ юҡтыр ул. Кавказ — Кавказ инде. Юҡты бар итеп ҡулдан килгәнсә маташам шунда, кистәрен ағайыбыҙ кәрзинкә үргәндә.

— Мин һиңә әйтмәнем, буғай, Ҡәлбинур, улар бит мине ағай тип түгел, «Йәләлетдин атай» тип атанылар. Беҙҙең өс улыбыҙ бар ине, хәҙер утыҙ биш булды, — тип хәбәр һалды адмирал.

— Үтә һәй-бә-әт, — тип моң һуҙҙы ҡатыны.

Хачимдан ҡалмайым типме, Урал да маҡтанып алды:

— Минең өләсәйемдең үлемтек һандығы бар. Шунда сиккән һөлгө, ҡушъяулыҡ, ашъяулыҡ, быңдай яулыҡ, ҡашмау кеүек нәмәләр тулып ята ине. Үҙе иҫән булмаған, хәҙер бармы икән, белмәйем...

— Барҙыр, барҙыр, — тип йыуатты Ҡәлбинур апай. Мин, һүҙ әйтмәһәм дә, уйлап ултырҙым. Ә Гарибальди бөтөнләй өндәшмәне. Үҙе башлаған һүҙ булмаһа, кешенекенә эйәреп бармай ул.

Улай-былай һөйләшкән арала Йәләлетдин атай өҫтәлгә һары клеенка ашъяулыҡ йәйҙе, уның өҫтөнә кеше башына ҙур ғына икешәр телем икмәк, берәр тоҙло ҡыяр, йыйынтыбыҙға бер тустаҡта көнбағыш майы килтереп ҡуйҙы.

— Самауырым да ҡайнаны, картуфым да бешге! — тип һайраны Ҡәлбинур апай. — Картуфым һимеҙ, киҫер ҡараһы юҡ. Етмәһә, ана көнбағыш майына манырһығыҙ. Йә, ҡул сайығыҙ ҙа ултырығыҙ әләйһә.

Бер яҡҡа оҙон эскәмйәне, етмәгәненә ултырғыстар ҡуйып, өҫтәлде һырып алдыҡ. Апай киң ауыҙлы мейес эсенән, ухыуат менән эләктереп, ғәләмәт ҙур ҡара суйын һөйрәп сығарҙы. Унан эркелеп картуф еҫе килде. Суйын эсендәгене апай ҙур табаҡҡа ауҙарҙы. Быуланып торған картуф өйөмө беҙҙең алға килеп баҫты. Әйтерһең, ул быҫҡып торған янар тау.

— Етешегеҙ, — тип ҡыҫтаны хужа.

Беренсе булып картуфҡа Зөфәр ҡул һонто. Ни арала күреп, атаһы уның һонолған ҡулына саҡ ҡына һуғып алды:

— Бынан ары етемдәрҙән алда ризыҡҡа үреләһе булма. Йыһангир, ишетһен ҡолағың, һиңә лә фәһем был, — тине ул, асыуланмай ғына. — Үрел, Миша, һин беренсе үрел. Үрелегеҙ. Әрсеп тормаһағыҙ ҙа ярай. Таҙа йыуылған.

Икмәк, ҡыяр, картуф... Өҫтәүенә — май. Теләһәң күпме ман. Мандыҡ, ҡыҫтатманыҡ. Ашап туйғыһыҙ. Икмәк менән ҡыярын ҡалдырыуҙы килештермәнек, ә картуфтың төбөнә үк төшмәнек. Тәүҙә Мөхтәр туҡтаны. Дөрөҫ эшләне. Аҙағына тиклем ябырылманыҡ. Бүҫелгәнсе бер ашауҙан барыбер мәңге туҡ булып булмай. Намыҫ һаҡлау ҙа кәрәк.

— Бә-әй, нишләп туҡтанығыҙ? — тип һуҙҙы Ҡәлбинур апай. — Шөкөр, алай өҙөк үк тормайбыҙ. Ағайығыҙҙың... атайығыҙҙың ҡулы һөнәрле.

— Рәхмәт, апай, нығ хушландыҡ, — тине Гарибальди. Ҡалайыраҡ әйтә, «нығ хушландыҡ», ти. Донъя күргән шул. Колонияла бөтөнләй төҙәлеп, юҡҡа ғына беҙгә килмәгән ул.

Сәй эскәндә дүртәүебеҙгә сын сынаяҡ, үҙҙәренә таш ҡупылар ҡуйҙылар. Беҙ тегендә ҡалай көрөшкәләрҙән һал-

ҡын сәй генә эсәбеҙ. Ҡалай һәйбәт икән ул эҫе сәй! Ҡағыҙһыҙ кәнфит тә тешләп ебәрһәң, тел рәхәтләнеп китә.

— Сынаяҡтарымды ҡунаҡтар өсөн генә тотам, — тип аңлатты апай.

Һый-хөрмәттән һуң игеҙәктәр уйын ҡуптарҙылар. Иң мәрәкәһе «Кем һуҡты?» булды. Артҡа ҡуйылған ҡулына кем һуҡҡанды белә алмаған кеше отола. Отолған кеше шунда уҡ һөнәр күрһәтә. Отолмаған кеше ҡалманы. Һөнәрҙәр төрлө булды. Урал Урманов, һиҙгәнһегеҙҙер инде, «Һайт, ҡара юрға!»ны йырланы. Гарибальди әтәс булып ҡысҡырҙы, кәзә булып баҡырҙы. Колонияла алған һөнәрелер, күрәһең. Хачим «асса» тип, үҙе һыҙғырып, үҙе бейене. Йыһангир ҡыҙыҡ шиғыр уҡыны. Зөфәр һул ҡулының һуҡ бармағын һындырып, күҙ быуҙы. Мин, бүтән нәмә белмәгәс, күҙемде йомоп, ҡолағымды уйнаттым. Битем ябыҡ булғас, минең ҡолаҡтарым үҙҙәре бейеп тора. Мин уларҙы парлап та, яңғыҙ ҙа бейеттем. Йығылып көлдөләр. Бигерәк тә Ҡәлбинур апай менән Йәләлетдин атай йәш ҡойғансы хахылданылар. Танһыҡтары ҡанһын тип, оҙаҡ бейеттем.

Унан һуң Йыһангир үҙе төшөргән һүрәттәрҙе күрһәтте. Сос төшөрә икән. Изянан ҡайтып түгел. Китергә йыйынғас, Йәләлетдин атай беҙҙе соланға алып сыҡты. Унда эреле-ваҡлы матур кәрзинкәләр теҙелгән. Бер ерҙә шыптағай тал сыбыҡтары өйөлгән.

— Бына, егеттәр, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Раҫ ул. Кистәрен мин үрәм, шәмбе көн апайығыҙ уларҙы баҙарға сығара. Сыбыҡты Дим тамағынан улдарым ташый. Ярай. Был ауыр заманда иш янына ҡуш. Яҙға сыҡҡас, таллыҡҡа алып барып, һеҙҙе лә өйрәтермен. Һөнәрҙең ҙуры, бәләкәйе юҡ.

Миңә ҡыйын булып китте. Адмирал башы менән ошо кеше кәрзинкә үреп ултырһын инде. (Боголюбовкала уны көмрө Санька ғына эшләй.) Ә уның матур матрос формаһы салбары-ние менән өйҙә эленеп тора. Шунда уҡ иҙәндә бер пар ҡара ботинка ялтырай.

Түңәрәк йөҙлө, ҡуйы ҡара ҡашлы, һомғол кәүҙәле Ҡәлбинур апай һәр беребеҙҙе арҡабыҙҙан һөйөп оҙатты. «Әсә ҡулдары тигән нәмә ошо булалыр инде», — тип уйланым мин.

— Онотмағыҙ, бында һеҙҙең ике туғанығыҙ бар, — тип көйләп ҡалды. Йәләлетдин атай беҙҙе детдом ҡапҡаһына тиклем оҙатты ла, инмәй, китеп барҙы. Бүлмәгә килеп кергәс тә, малайҙар ябырылды.

— Нисек булды?

— Нимә эшләнегеҙ?

— Нимә ашаттылар?

Гарибальди яуапты ҡыҫҡа тотто:

— Барырһығыҙ, күрерһегеҙ, белерһегеҙ. — Үҙенең танау ҡанаттары һикерә. Кәйефе шәп саҡта шулай була.

Ике-өс көн үтте. Тәрбиәсебеҙҙең хәтәр ҡалын ҡара мыйығына иш килмәгән һоро костюмына ла күнектек. Ә бына һуғыш хәлдәре хаҡында, ул күрһәткән батырлыҡтар тураһында һорашырға баҙнатсылыҡ итмәйбеҙ. «Батырлыҡ өсөн» миҙалын бушҡа ғына бирмәйҙәр уны. Батырлыҡ күрһәткән өсөн бирәләр. Теңкәһенә теймәй торабыҙ. Яйы сығыр әле. Шулай ҙа анау кистә, дәрестәрҙе әҙерләп бөтөргәс, хәнйәр танау Хачим һорай һалды:

— Диңгеҙҙә үлгән моряктарҙы ҡайҙа күмәләр, Йәләлетдин атай?

— Ярҙа, ерҙә, — тине ул.

Бер данлыҡлы адмиралды нисек ерләүҙәре тураһында һөйләне. Пушка лафетына күпертеп сәскә өйгәндәр, сәскә өйөмөнә уның табутын ҡуйғандар, табут өҫтөнә бөтә ордендарын теҙгәндәр. Лафетҡа дүрт ҡара айғыр еккәндәр. Алда оркестр ҡайғы маршын уйнап бара, артта, автоматтарын күкрәктәренә ҡыҫып, матростар туп-туп баҫып килә. Диңгеҙҙәге һуғышсан караптар гөп-гөп салют бирә... Шулай хушлашҡандар диңгеҙ батыры менән.

Был турала ул матур итеп, дәртле итеп, хәсрәтле итеп һөйләне.

— Һеҙ ҙә диңгеҙ батыры инде. Һеҙ ҙә адмирал... адмирал ише... — тип тотлоға-тотлоға ыҫҡындыра яҙҙы Айтимер, ярай, тыйылып ҡалды. — Һеҙҙе лә, ҡартайып үлгәс, лафетҡа һалырҙар әле, сәскәләргә күмеп...

— Һуңғы юлды туп арбаларында ятып уҙыу теләһә кемгә эләкмәй ул. Ярай. Хәҙергә йәшәйек әле, улдарым.

Бөтәбеҙгә лә яманһыу булып китте.

— Бөгөн киске аштан һуң мин һеҙгә ҡурай тартып күрһәтермен. Теләүселәр булһа, бергәләп өйрәнербеҙ.

Ҡурай булманы. Директор бөтә детдомды йорт тирәһен йыйыштырырға сығарҙы. Комиссия тигән ниндәйҙер ҡурҡыныс бер нәмә килә икән. Бөтәһе лә ҡан ҡалтыраны. Ә ул килмәне лә ҡуйҙы. Килһә, күрер инек. Тағы бер аҙна уҙҙы. Ошо йәкшәмбелә лә йәрәбәләре сыҡҡан дүрт малай беҙҙең арттан ҡунаҡта булып ҡайтты. Улары маҡтанып туя алманы. Маҡтансыҡ булмаһалар ҙа.

Өсөнсө шәмбелә Йәләлетдин атай, тап анау тәү көндәге шикелле, кейенеп-яһанып килде. Түшендә — миҙалы. Беҙ илереп ҡыуандыҡ. Моғайын, берәй һәйбәт нәмә булыр. Уның менән бергә класҡа байрам эркелеп инде. Тик нишләптер йылмайыуы тоноҡ. Бүтән саҡта уның йылмайыуы ике мыйыҡ осонан, нур булып, һулҡылдап тама ине.

— Егеттәр, улдарым! — тине ул. Ҡалын тауышы ҡалтырабыраҡ ҡуйҙы. Беҙҙең кескәй йөрәктәребеҙ ниндәйҙер бәлә һиҙеп, жыу итеп китте. — Улдарым! — тип ҡабатланы. Тауышы урынына ултыра төштө. — Донъя беҙ уйлағанса ғына бармай. Миңә иртәгә иртән үк ауылға китергә кәрәк. Бөтөнләйгә. Бөтә өй эсебеҙ менән. Сәбәбе бик ҙур. Мин һеҙҙең менән хушлашырға килдем. Бергә йәшәргә насип булманы. Бөтәгеҙҙе лә ҡунаҡҡа саҡырған инем, күбегеҙҙе ымһындырып ҡалдырҙым. Ғәфү итегеҙ.

Шулай тип һөйләне Йәләлетдин атай. Мин сыҙай алманым, танау тарта башланым.

— Миша! Балалар! Моряктарса, ирҙәрсә, һыҡташмай ғына айырылышайыҡ. Моряктар иламай.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә, дөр килеп, парталар артынан сыҡтыҡ. Гулливерға ябырылған лилипуттар һымаҡ, уны һырып алдыҡ, бушлатына, салбарына, бескозырка таҫмаларына ҡағылып иркәләндек. Мин, ятып, уның ағас аяғын ҡосаҡланым. Ҡулы менән ул беребеҙгә лә ҡағылманы. Баҫып тик торҙо. Беҙҙе тыйманы ла, ҡыуманы ла.

— Ярай! Етте! — Тауышында тәү тапҡыр бойороҡ ишетелде. — Ҙур булып үҫегеҙ. Кеше булып үҫегеҙ. Йылан саҡҡанда ла иламаҫлыҡ сыҙам булығыҙ. Йыландар бар. Йыландар саға ул... Кире урындарығыҙға ултырығыҙ. Тәртип кәрәк!

Беҙ парталар артына барып баҫтыҡ.

— Бына шулай. Хәҙер бөтөнләйгә хушығыҙ. Оҙата сыҡмағыҙ. Мин киттем.

Ул, ҡапыл боролоп, сығып китте. Класс шомға сумды. Коридорҙа уның ағас аяғының туҡылдауы оҙаҡ ишетелде: туҡ, туҡ, туҡ...

Ғүмер буйы шул тауыш минең ҡолағымдан китмәне: туҡ... туҡ... туҡ...

* * *

Әңгәмәнең әле аҙағы бар. Утыҙ йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Мин ҡаланың бер районында совет рәйесе булып эшләй инем инде. Заводтарға, ойошмаларға йөрөүҙе үҙем өсөн бер ҡағиҙә итеп ҡуйҙым. Етәкселәргә әйтеп-нитеп тормайым, барам да керәм. Документ һораған ерҙә документ күрһәтәм. Бер көн төштән һуң районДың иң ситендәге фабрикаға киттем. Эшселәрҙән ялыуҙар бар ине. Әйләнмәле тимер ҡапҡа тышында көйө «Пропуски» тип яҙылған будканың кескәй генә тәҙрәһенә таныҡлығымды һуҙҙым. Таныҡлығымды йыйырсыҡлы ҙур ҡул алды. Оҙаҡ ҡайтарманы. Мин, аптырап, тәҙрәгә төбәлдем. Унан ҙур аҡ мыйыҡлы, киң маңлайлы, ап-аҡ сәсле баш һонолдо. Саҡ ҡына ҡарлыға төшкән тауыш гөрһөлдәп ишетелде:

— Миша! Миша Ҡуянов! Һинме?

— Мин! Мин, Йәләлетдин атай!

Сал баһадир, аҡһай-аҡһай, будкаһынан килеп сыҡты. Өңөнән сыҡҡан айыуы ни! Өҫтөндә иҫке, әммә таҙа, бөхтә матрос формаһы.

— Улым!

Ул мине ҡосаҡлап алды. Ә мин етем баланың ғүмерлек хыялына ирештем: һаҡаллы сабый булғас, ата күкрәгенә һыйындым.

— Атай, атай... — тинем.

Әлегә башҡа һүҙ ҙә табып булмай. Башыма бер уй килде лә һораным:

— Эшең ҡасан бөтә?

— Биштә. Унан һуң профсоюз йыйылышы. Шуға бит быңа ыҫпайланып килдем. — Ул мыҙалын һыйпап ҡуйҙы.

Ҡыҫҡаһы, бишкә тиклем мин үҙ эштәрем менән булдым да, унан һуң, завком председателенән рөхсәт һорап, Йәләлетдин атайҙы өйөмә алып киттем.

Машинаға ултырғас:

— Ҡара бушлатта бик күп йөрөнөм, ҡара машинаға ултырғаным юҡ ине әле, — тип көлдө ул, әллә ҡыуаныш, әллә хәйләләп.

Юлда барғанда ул минең ҡолаҡты һыйпап алды:

— Һаман да бейетәһеңме?

— Хәҙер һүлпән ҡыймылдайҙар, яңаҡтарҙы ит-май баҫты.

— Һине тәү күргәндә, был сабыйҙың һөйәктәре таралып төшмәһә ярар ине, тип ҡурҡҡайным. Хәҙер түл йыйғанһың... — Ул арҡамдан һөйөп ҡуйҙы.

— Бар шул. Йәйәү аҙ йөрөлә.

— Теге саҡта һине шулай һөйгөм килгәйне, тик, бүтәндәрҙән айырырға ярамаҫ, тип тыйылдым. Кеше алдында мин айырып һөйһәм, бүтәндәр аҙаҡтан ҡағыр ине. Көнсөллөк арҡаһында...

Өйҙә ул артыҡ ашыҡманы ла, йыбанманы ла. Яйлап ҡына сәй эстек. Хәмерҙән баш тартты: «Минең йәштәге кешегә килешә торған эш түгел», — тине. Хәлдәрен һораштым. Ҡәлбинур апай былтыр вафат булған икән. Бик ҡайғыра, буғай, һиҙҙермәҫкә генә тырыша. Моғайын, ул үҙ хәстәрен кешегә ауҙармай, үҙе генә күтәрә торған заттандыр. Беҙҙән һуң тыуған ҡыҙында тора икән. Өс малайы төрлөһө төрлө ерҙә донъя көтә, ти.

— Ни мохтажың бар, атай, әйт? Ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтермен. Ҙур булмаһам да, власть кешеһемен.

— Юҡ, улым, юҡ. Рәхмәт. Бер нужам да юҡ. Донъям имен. Бынау йәшемдә ситтән ярҙам көтөрлөк булғас, нимәгә үҫтерҙек һуң ул дүрт баланы? Шөкөр, балаларыбыҙ иманлы, итәғәтле. Улар иманһыҙ булһалар, һин түгел, Брежнев та ярҙам итә алмаҫ ине миңә.

— Йәләлетдин атай, мин дә бит сит түгел. Уландарыңдың береһе. Шулай булғас...

— Һиңә бер генә үтенесем бар. Йыназама кил. Ярай.

— Әле уға тиклем...

— Килә лә етә ул. Берәүҙе лә ситләтеп үтмәй. Ана Ҡәлбинур инәйең дүрт йәшкә кесе ине лә, китеп барҙы. Рухына фәрештә мөһөрө һуғылған дан бисә ине. Ҡайһы саҡ миңә: «Ҡатының аҡыллы инеме? Ҡатының сибәр инеме? Ҡатының уңған инеме?» — тип һорайҙар. Ә мин шулай яуап бирәм: «Минең ҡатыным Ҡәлбинур ине», — тим.

Минең күҙ алдыма түңәрәк йөҙлө, ҡуйы ҡара ҡашлы һылыу ҡатын килеп баҫа. Хатта мин уның моңло тауышын да ишетәм һымаҡ.

Ә һорар һорауым хәтеремде өйкәй, тел осомдан китмәй:

— Анау мәлдә, Йәләлетдин атай, ҡапыл ғына китеп барҙығыҙ. Ауылығыҙҙа бәлә-ҡаза булдымы әллә?

— Булманы. Мин бер ергә лә китмәнем. Утыҙ өсөнсө йыл инде һин күргән будканы ҡарауыллайым.

— Нисек инде?

— Шулай. Сәбәбен йәшерҙем. Ирекһеҙҙән, һеҙ сабыйҙарҙы алданым.

— Ни өсөн әйтмәнегеҙ?

— Белһәгеҙ, һеҙ, утыҙ ике башы боҙоҡ, утыҙ ике һуғыш суҡмары, донъя ҡыйратырһығыҙ, тип ҡурҡтым. Һеҙ бит миңә бик тиҙ эйәләшеп алдығыҙ. Мин дә һеҙгә...

Сыҙамлығым сигенә еткәнен ул да һиҙҙе, әлбиттә. Тамағын ҡырып ҡуйҙы:

— Әләйһә, һөйләйем. Мине һеҙгә РОНО ебәрҙе. Күрше йортта тороусы бик һәйбәт кеше эшләй ине унда. «Һин бала йәнлеһең, бар, эшлә шунда», — тине. «Белемем аҙ» тигәнгә, «аҡылың бар» тип майланы. Ҡулға ҡағыҙ тотторҙо. Директор ике аҙна һынау шарты менән алды. Миңә өҫтән аҫҡа ҡарай алмауына ул тәүҙә үк кәмһенде, ахырыһы. Шулай һиҙҙем. Хәтерләйһеңдер, ул сибек кенә бер кәрлә ине.

— Иҫләйем. «Сиңерткә» ҡушаматлы. Хәҙер ҙә иҫән.

— Ике аҙна уҙғас, ул саҡырып индерҙе. Ултырырға ҡушты. Мин ултырҙым, ул баҫты. Тигеҙләштек. «Ғәйепләштән булмаһын, матрос иптәш, һынау осоро үтте. Һеҙ беҙгә шыпа килешмәйһегеҙ, йәғни яраҡһыҙ булып сыҡтығыҙ. Ни өсөнмө? Төшөндөрәм. Һеҙ педагогиканы, тәрбиә эшен, детдомдың үҙенсәлектәрен, нескәлектәрен белмәйһегеҙ, детдом балаларының психологияһын, эйе, психологияһын бөтөнләй аңламайһығыҙ. Ләм-мим... Ниңә һеҙ уларҙы өйөгөҙгә йөрөтөп күңелдәрен аҙҙыраһығыҙ, сығырынан сығараһығыҙ, туған детдомдарынан биҙҙерәһегеҙ? Унда ниндәй айырым тәрбиә бирәһегеҙ тағы? Һеҙ урынлашҡан дөйөм тәртипте ҡаҡшатаһығыҙ. Был минең шәхси фекерем генә түгел, педсовет фекере! Эйе, анау тәүге көндә үк рөхсәтһеҙ-ниһеҙ ярты көн урманға китеп

олағыуығыззы нисек аңларға?! Мин бит уларзы урманға түгел, урамға сығыуҙан да тыйҙым. Ә һеҙ башбаштаҡлыҡ күрһәттегеҙ. Еще етмәһә, аңлатма яҙыуҙан баш тарттығыҙ. Әмеремде үтәмәнегеҙ. Но! (Ул һуҡ бармағын өсҡә сөйҙө.) Мәсьәләнең төп үҙәге был түгел. Үрҙә һаналған хаталарығыҙҙы выговор биреп тә төҙәтеп булыр ине. Мәсьәләнең төп үҙәге шунда – белемегеҙ түбән. Түбән генә түгел, юҡ. Белемегеҙ юҡ. Бынһын инде, биш выговорҙы бер юлы бирһәң дә, төҙәтеп булмай...» Әле килеп иң дөрөҫөн әйтте. Бөтә белемемде мин ауылда өс ҡышта алып бөтөргәйнем. Иҫеңдәлер, мин бит һеҙҙең дәфтәрҙәрҙе ҡулға тотманым тиерлек. Сөнки мин һеҙ белгәнде белмәй инем, әммә күҙҙәрегеҙгә ҡарап төҫмөрләнем: һеҙ мине бер тапҡыр ҙа алдаманығыҙ... Ә директор тағы шулай тине икән: «Ғариза яҙып тормағыҙ, былай ҙа бушатам. Ике аҙналыҡ эш хаҡы алып китегеҙ. Ғәйепләштән булмаһын, моряк иптәш».

Мин урынымдан торҙом, ул түбәндә тороп ҡалды.

– Ярай, – тинем тыныс ҡына. Ул миңә бармаҡтары тырпайған тауыҡ тәпәйе ҙурлығы ҡулын һуҙҙы. Күрмәмешкә һалыштым, алманым, ерәндем. Ошо ҡул бит минән утыҙ ике хәйләһеҙ йән эйәһен тартып алды.

Йәләлетдин Ҡулыевтың һөйләгәне минең өсөн ғәйепләү хөкөмө кеүек ишетелде. Кемгә, нимәгә был хөкөм? Моғайын, ахмаҡлыҡ менән бәғерһеҙлеккәлер.

– Нимә бөтөнләй таралып төштөң, Миша Ҡуянов – ир арыҫланы? Булмаһа, ҡолаҡтарыңды бер бейетеп ал.

– Юҡ, атай, булдыра алмайым, ғәфү ит. Бынан ары улар бер ваҡытта ла бейемәҫтер инде. Бөгөн мин, балалыҡтан сығып, ирҙәр ҡорона уҙҙым, аҡылғаултырҙым.

– Әйттең тағы. Үҙең хәҙер балалар атаһы. Аҡылың самалы булһа, ошондай урынға ҡуймаҫтар ине, ҡуйһалар ҙа, оҙаҡ тотмаҫтар ине.

– Мин бүтән аҡыл тураһында әйтәм. Һинеке кеүек сабыр аҡыл тураһында әйтәм.

Үҙ самаһын белеп, ҡунағым ҡуҙғалырға рөхсәт һораны. Мин уны фатирына илтеп ҡуйҙым. Машинаға ингәс, ул тағы шаяртып алды:

– Мин һине трамвайҙа елдергәйнем, һин дә бурыслы булып ҡалманың, ҡайтарҙың былай булғас.

Бүтәнсә ул өйөмә килмәне. Телефон аша саҡырғанда, ниндәйҙер сәбәптәре сығып торҙо. Эшемә ике-өс тапҡыр һуғылып китте. Унда ла көн аҙағында ғына килә лә алғы бүлмәлә көтөп ултыра. Секретарь инергә ҡушһа, әйтә икән:

— Ярай, ярай, минең йомошом юҡ. Йомошо барҙар инһен. Мин былай ғына, хәл белергә генә килдем. Бушағас, үҙе сығыр әле.

Күрешкәс тә, оҙаҡ тормай, китергә ашыға.

— Һағындым, бына үҙеңде күргәс, күңелем тынысланды. Маҙаңды күп алмайым. Бөгөн былай ҙа йонсоу күренәһең. Ҡайт, ял ит.

Мин һорамай сыҙай алмайым:

— Берәй төрлө хәстәр-мәшәҡәтең юҡмы, атай?

— Шөкөр, донъям теүәл, фатирыбыҙ иркен. Дүрт йәнгә ике бүлмә. Йылы һыуы ағып тора. Тамағым туҡ, өҫтөм бөтөн. Хеҙмәтем бара. Унда ла хөрмәт итәләр. Өҫтәүенә, телевизорыбыҙ бар.

— Ағас аяғың урынына, бәлки, протез эшләтәйектер?

— Эшләткәйнем, сыҙаманы. Бынығы, исмаһам, ғүмерлек. Нығ, ышаныслы баҫыла.

Әйткәндәй, бер нисә йыл әүәл Чернышевский урамындағы теге тәпәш йортҡа күҙ һалып киткәйнем. Унда кеше тормай ине. Ниндәйҙер склад яһағандар. Күңелдә шыҡһыҙ булып китте.

Һәр килгәндә мин уны шоферҙан ғына оҙаттырманым, үҙем илтеп ҡуйҙым, һиҙгән кеүек...

Август аҙаҡтары ине, буғай, һигеҙ тулыуға эшкә килһәм, алғы бүлмәлә Йәләлетдин атай ултыра. Ул баштанаяҡ матрос формаһында. Түшендә — наградалары. Эскә уҙҙыҡ. Күңелдә ниндәйҙер шик яралды.

— Сәй эсәбеҙме? Гөлнур хәҙер әҙерләп индерер, — тигән булдым.

— Юҡ. Эсеп кенә килдем. Һин ҡурҡма, бер нәмә лә булманы.

— Мин ҡурҡмайым да, — тинем. Үҙемдең йөрәк урынынан ҡупты.

— Төш юрай беләһеңме?

— Бик юрашҡаным юҡ та... Һөйлә. Бергәләп юрарбыҙ.

— Бер төш күрҙем. Ярай. Башы дан, тамаша ине. Имеш, ап-аҡ лафетҡа күпертеп аҡ сәскә өйгәндәр, сәскә өҫтөнә аҡ табут һалғандар, табут эсендә, матрос форма-

һы кейеп, мин ятам. Лафетҡа дүрт ап-аҡ ат егелгән. Юлдың ике яғында халыҡ яр кеүек. Бөтәһе лә шат, бөтәһе лә байрамса кейенгән. Тик ниңәлер музыка уйнамай. Нығытып ҡолаҡ һалам. Юҡ. Уйнамай. Табут артынан тик бер генә кеше бара. Ул — һин. Бәләкәй сағың. Күбәләк кеүек кенәһең. Һәммәһе ҡыуана, бер һин һыҡтай-һыҡтай илайһың. Үҙең ялан аяҡһың. Төштөң аҙағы шулай күңелһеҙ булды. Бына, эсем ҡырып, килеп сыҡтым. Ярай. Имен-аман икәнһең. Донъя бит ул. Ниҙәр генә булмай. — Ул көрһөнөп ҡуйҙы. — Аҡ аттар менән аҡ табут ул өндән төшкә килеп ингән нәмә. Ошо арала ғына бер китап уҡығайным. Унда яҙылған: ҡытайҙар мәрхүмде аҡ табутта, аҡ аттар егеп, ахирәткә оҙаталар. Сөнки кеше яҡты донъянан да шәберәк донъяға китә. Был ҙур шатлыҡ һанала. Ярай. Быныһы шулай. Ә ни өсөн һин яңғыҙың артта илап бараһың? Шуға бошоноп килдем.

— Ни тип юрайыҡ икән һуң? Төш ул бөтәһен дә тиҫкәре итеп күрһәтә, ти, бит.

— Нисек тиҫкәре?

— Әйтәйек, төшөңдә тиҙәккә батһаң, өнөңдә аҡса керә.

— Бында бит мәсьәлә тәрәнерәк, улым.

— Бында ла яп-ябай. Төшөңдә һин үлгәнһең, тимәк, әле оҙаҡ йәшәйәсәкһең. Төшөңдә мин илағанмын икән, тимәк, өнөмдә мине шатлыҡ көтә.

— Ҡара әле. Бик йәтеш юраның да баһа. Ярай. Тынысландым. Китәйем инде.

Мин уны алғы бүлмәгә оҙатып сыҡтым. Шоферға ҡунаҡты өйөнә илтеп ҡуйырға ҡуштым.

— Һин, Михаил, хафаланма. Эшеңде ҡара. Мин саҡ ҡына ултырып торам әле. — Ул йомшаҡ диванға арҡа һөйәп ултырҙы.

Ҡабул итеүҙе көткән кешеләр бар ине. Мин уларҙы саҡырып индерҙем. Ун минут үтмәгәндер, секретарь Гөлнур төҫө ҡасып, йүгереп инде.

— Тиҙерәк! Тиҙерәк!.. Йәләлетдин атайға әллә нимә булды...

Атылып сыҡтым. Башын тотоп, беләген һәрмәнем. Йәләлетдин атай йән биргәйне инде.

...Беҙҙең районда хәрби часть тора ине. Пушкалары ла бар. Командир менән һөйләшеп, беҙ мәңгелек ярына сығарылған рядовой матрос Йәләлетдин Ғилметдин улы Ҡулыевты хәрби ритуал буйынса ололап, һуңғы юлға оҙаттыҡ. Пушка лафетына күп итеп сәскәләр өйҙөк, сәскә өҫтөнә табутты ҡуйҙыҡ, табут өҫтөнә батырҙың бескозыркаһы менән наградаларын һалдыҡ. Лафетҡа пар ҡара ат ектек. Алдан оркестр уйнап барҙы, арттан һалдаттар, автоматтарын күкрәктәренә ҡыҫып, дөп-дөп баҫып оҙатты. Ул көндө ярты фабрика эшләмәне. Йыназала булды. Мәрхүмде тупраҡҡа тапшырғанда, автоматтарҙан салют бирҙеләр.

Балалары, ейән-ейәнсәрҙәре генә түгел, күп кешеләр бөгөлөп иланы. Мин оҙаҡ тыйыла алмай үкһенем. Әлек түгелмәй ҡалған күҙ йәштәремде лә түктем. «Йылан саҡһа ла илама», — тигәйне лә бит. Был әрнеү йылан сағыу ише генәме ни?..

* * *

Михаил Ҡуяновтың һөйләгәндәрен ҡағыҙға төшөрөүемдең төп сәбәбе — Йәләлетдин Ҡулыевтың ауыҙынан сыҡҡан бер кәлимә һүҙ булды: «Бынан ары етемдәрҙән алда ризыҡҡа үреләһе булма!» Үҙемдән йәнә шуны өҫтәр инем:

— Етемдәр ризығына бер ваҡытта ла ҡул һуҙаһы булма...

1994

МОСОЛМАНДАР УЯНДЫ

Мәсет ҡарттары, йома намаҙынан сығып, Туҡай урамы буйлап өҫкә ыңғайланы. Дүртәүҙәр. Аҙымдары һәлмәк. Йөҙҙәрендә иман нуры. Берәүһе ҡара ебәк суҡлы ҡыҙыл фәс кейгән. Төрөктәр был, тимәгеҙ тағы. Ул — үҙебеҙҙең мөһабәт кәүҙәле, ғәләмәт ҙур башлы Атбаҙаров. Теге «Совет» тип аталған «алама» осорҙа ул Горкомда ялҡынлы агитатор ине. Коммунистар партияһының пар ҡанаты уҡ булмаһа ла, һис шикһеҙ, уның ҡойроғон-

дағы бер ҡауырһын тип иҫәпләй ине үҙен. Икенсеһе Меҫкен бүректән. Уны ла беләбеҙ. Ғүмер буйы «һаттым — алдым» контораһының «Алдым — һаттым» бүлегендә иҫәп-хисапсы булды. Ике тапҡыр ултырып та сыҡты. Исемен онотҡанмын. Өҫөнсөһөнөң башында кепка. Ни өсөндөр козерегын артҡа ҡаратып кейгән. Ә-ә... Моғайын, намаҙ ваҡытында, сәждәгә китеп, маңлайын иҙәнгә орғанда, козырегы ҡамасаулағандыр ҙа, шуға артҡа бороп ҡуйғандыр. Унан онотҡанмын. Тәңре хаҡында өҙлөкһөҙ уйлағанда козырек ҡайғыһыма ни бәндәлә? Бер башҡа ике ғәм нисек һыйһын? Бынһы заманында Есенин шиғырҙарын уҡып та, уҡымай ҙа иҫереп йөрөгән артист, йәғни танылмаған актер ине. Ысын фамилияһын белмәйем. Ҡушаматы — Амур Аму-дарьинский. Кескәй генә буйлы дүртенсеһе ҙур ситле тәрән ҡара эшләпәгә муйынына тиклем сумған. Бынһы — Директор. Магазин директоры, музей директоры, ашхана директоры, ял йорто директоры, мунса директоры, кинотеатр директоры. Шунан төшмәне лә, менмәне лә. Ҡыҫҡаһы — артыҡ та түгел, кәм дә түгел — Ди-и-рек-тор. Ҡала күләмендәге һәр йыйылышта ул телмәр тота, уяулыҡҡа, синфи аяуһыҙлыҡҡа саҡыра ине. Уның үҙ исемен — Ишмулла Ишморатов тигән матур исемен әйтеүсе лә булмағандыр. «Иптәш директор» тиһәләр, бөтәһенә лә аңлашыла.

— Бик мәслихәт хәл булды бит әле, йәмәғәт. Милләтебеҙ өсөн, бөтә төрки халыҡтары өсөн, бөтә донъя мосолмандары өсөн ҙур изге яңылыҡ хасил ҡылынды, — тине көр тауышлы Ҡыҙыл фәс, үтә мәғәнәле итеп.

— Эйе шул, — тип йөпләне Меҫкен бүрек. — Иллә дөрөҫ әйттең дә.

— Нимәне дөрөҫ әйттем?

— Әйтеп бөтөргәс, белербеҙ әле нимә икәнен.

Ҡыҙыл фәс тамаҡ ҡырҙы:

— Быға тиклем саф мосолмандар «Русская горькая», «Столичная», «Пшеничная», «Сибирская», «Зубровка» кеүек урыҫ араҡылары эсеп, аҙып-туҙып, имандан яҙып, кафырға әйләнеп, «Шумел камыш»ты мөңрәй башлай ине.

— Знамы шулай ине, ҡәһәрең, иманһыҙҙар... — тип ҡеүәтләне артист. Әммә был йәһәттән намыҫына ул ныҡ

ҡына көс килтерҙе. Сөнки уның өсөн араҡының кафырымосолманы булманы, юҡ һәм булмаясаҡ. Артҡа әйләнгән козырегы оялыуынан ҡуҙғалып ҡуйҙы.

Һүҙгә йәнә Меҫкен бүрек ҡушылды:

— Иллә ғаҡыл эйәһең дә инде, Атбаҙаров әфәнде.

— Ана шул «Әфәнде» хаҡында әйтәм дә. Ниһайәт, мосолмандар, уянып, урыҫ хәмеренән айнып, үҙҙәренең «Әфәнде» тигән араҡыһын сығара башланы.

— Афари-и-ин! — тип һуҙҙы Меҫкен бүрек.

Әлегә тиклем өндәшмәй килгән Тәрән эшләпә ваҡиғаға белгестәрсә баһа бирҙе:

— Ысынлап та, аҡһаҡалдар, беҙҙең тормошта милли-синфи һәм дини-синфи тойғоларҙың иң нескә ҡылдарын сиртә торған ғибрәтле аҫыл күренеш был. Аҡылға һыймаҫлыҡ. Вә ләкин һыйҙырырға кәрәк. Үҙебеҙҙең «Әфәнде»беҙ бар! Мин уны татып ҡараным. Ҙур ғына бер рюмка эскәс, сыразы доға уҡыһы килә, икенсеһенән мөнәжәт әйтә башлайһың.

— Минме? Минеңме? Өсөнсөһөнән һуң анау манараға менеп, — Меҫкен бүрек башы менән, мәсеткә ымланы, — аҙан әйткем килә. Дүртенсеһенән — телдә тәкбир яралды.

— Ә урыҫтың харам хәмерен эсһәң, тәүҙә, ата-инәһен баплап һүгенге, унан ыҙғышҡы, аҙаҡтан һуғышҡы килә торғайны. Тфү! — тип төкөрөндө артист.

Ҡыҙыл фәс үҙенең тәрән фекерен алға йүнәлтте:

— Милләтте тамам раҫлау өсөн «Әфәнде» эргәһендә «Ханым» да булыу зарур.

— Күркәм килеп сығыр ине, — тип хупланы танылмаған артист. — «Әй, һатыусы, — тиер инек, — Ярты «Ханым»ды бир әле! — Йыр ише яңғырай бит.

— Был ғына аҙ, — тине әүәлге партия өгөтсөһө, йәғни хәҙерге Ҡыҙыл фәс. — Хоҙайҙың рәхмәте менән беҙҙең дә дворяндарыбыҙ тарих баҙынан ҡалҡып сыҡты. Мырҙаларыбыҙҙы, тархандарыбыҙҙы, бейҙәребеҙҙе әйтәм. Ниңә, «Мырҙа», «Тархан», «Кантон» исемле араҡылар булһа, йәм өҫтөнә йәм өҫтәмәҫ инеме ни? Өҫтәр ине. Милли абруйҙы арттырмаҫ инеме?

— Өҫтәр ине!

— Арттырыр ине!

— Афарин!

Тәрән эшләпә аҫтындағы «Директор» ҙа юҡка ғына төрлө ҡырлы булмаған икән. Уның башына ла бик матур уй килде:

— Ҡарттар, — тине ул күҙлек аҫтынан ҡырын ҡарап, — ниңә һуң әле беҙ, гел көн тураһында ғына уйлап, динде иҫтән сығарабыҙ? Һеҙ әйткән светский исемдәр менән бөтә йөрәктән ризамын. Хуп күрәм. Но дин әһелдәрен дә онотмайыҡ әле, йәмәғәт. Әйтәйек, шундай исемдәр: «Мөтәүәлли», «Мәзин», «Хәҙрәт», «Ишан», «Хажи», «Имам», «Мөф...»

— Постой! Туҡта! — Ҡырт киҫте Ҡыҙыл фәс. — «Мөфти» тимәксеһеңме? Беренсенән, улар икәү хәҙер. «Ҡайһыһы икән?» — тип халыҡ баш ватыр. Халыҡтың башы былай ҙа тамам буталған. Икенсенән, мин икеләнәм. Сөнки урыҫта ундай миҫалдар юҡ. Мәҫәлән, «Отец дьякон», «Попадья» йәки «Благочинный» тигән шешәләр күргәнегеҙ бармы? Юҡ шул. «Распутин» иҫәпкә инмәй. Ул аҙған-туҙған зат.

Ҡыҙыл фәс Директор тәҡдименә эсенән риза ине лә, берҙе уйлап икенсене һөйләй торған әүәлге ғәҙәте өҫтөн сыҡты. Әгәр был мөфти хәҙрәттәрҙең берәйһенә оҡшамаһа, шелтәне көт тә тор.

Меҫкен бүреккә «Мөтәүәлли» айырыуса оҡшағайны. Ни тиһәң дә, түбән ҡатлам вәкиле. Тик бына Ҡыҙыл фәс икеләнә. «Хәҙрәт» тә иренде көйҙөрмәҫ ине.

— Шулай ҙа өҙөп үк ҡуймайыҡ әле, — тине артист. — Төптәнерәк уйлашайыҡ. Шундай изге исемдәрҙе шешә мисәтендә күреүҙән алла бәндәләренең дәрте артыр, иманы ныҒыр, милли аңдары ҡанатланыр ине. Әле бер «Әфәнде» генә лә рухыбыҙға күпме кәр бирҙе.

— Уйлашайыҡ.

— Ҡат-ҡат кәңәшләшәйек.

— Фекерҙәребеҙҙе бер тиҫбегә теҙәйек.

Фекерҙәрен тиҫбегә теҙә-теҙә, мәсет ҡарттары, Аҡ йортто уҙып, Карл Маркс урамына бороллдо.

Ҡыҙыл фәс, урам мөйөшөндәге «Карл Маркс» тигән яҙыуҙы күргәс, тамаҡ ҡырып, былай тине:

— Бәндәләргә хас бер нәмә лә минең өсөн харам түгел. Кем әйткән шулай тип?

— Нух пәйғәмбәр, — тип ярып һалды артист.

Директор шунда уҡ төҙәтмә индерҙе:

— Наҙан! Шуны ла белмәйһең. Мөхәммәтғәлиәссәләм үҙе шулай тип инанған.

Белмәгәне юҡ икән бының.

1994

ИҪТӘЛЕК КЕНӘ...

Медицина рабфагында улар ике йыл бергә бер группала уҡыйылар. Керәшен ҡыҙы ҡыйыу Тамара Егорова Баҡалынан, башҡорт малайы йыуаш Рәхимйән Тойғонов Белорет яғынан ине. Ошо ваҡыт эсендә зифа, сибәр Тамара сибек Рәхимйәнгә бер тапҡыр ҙа текләп ҡараманы. Ғөмүмән, ул һарылырға торған саяраҡ үҫмерҙәрҙе лә, иғтибар күрһәтеп, кинәндермәне. Йәнәшә группала уҡыған «танса бейеүҙә» дан тотҡан ҡупшы Сәлимгә лә иҫе китмәне, хатта: «Ҡуй, Сәлим, бәйләнмә миңә, минең егетем бар», — тип, ҡырт киҫте. Рәхимйәнгә ҡайҙан тейһен инде ул иғтибар тигән нәмә? Ҡарар күҙгә бер мөғжизә булырҙай уның йымылдап торған алтын бөҙрәләрен дә шәйләмәне шикелле. Урыҫтарҙың сиркәүендә стенаға төшөрөлгән фәрештәләрҙең баштары торғаны менән ана шундай. Керәшен заты быны аңларға тейеш тә. Уларҙа ла сиркәү барҙыр бит...

Рәхимйән иһә оҙон ике ҡыш буйы матурҙарҙың матуры Тамаранан бер генә минутҡа ла күҙен ала алманы. Юҡ, ҡарашы менән йоторҙай булып һөмһөҙләнмәне ул. Сабырлыҡ, тыйнаҡлылыҡ күрһәтте. Шулай ҙа ҡыҙыҡайҙың һәр хәрәкәтен, һәр һулышын, тауышының һәр яңғырашын күрҙе, тойҙо, ишетте. Хатта оҙон, тығыҙ толомоноң һәр үремен хәтеренә һеңдерҙе.

Тулыр-тулмаҫ алтынсы класты ғына тамамлап килгән малайҙың «ғилем хазиналары» үтә самалы ине. Отҡорлоғо, тырышлығы арҡаһында ул ике сирек эсендә иптәштәрен ҡыуып етте. Тау балаһының йәшерен сәме лә бар икән. Былай ҡарағанда оялсан Рәхимйән ҡара таҡта ҡаршыһына килеп баҫһа, йәки уҡытыусы урында биргән һорауға яуап ҡайтара башлаһа, батырлана ла китә. Та-

уышы күр сыға, фекере асыҡ яңғырай. Үҙешмәкәр конкурстарҙа, сәхнә уртаһына баҫып, ҡурайын тартып ебәрһә, бер баһадирға әйләнә лә ҡуя. Ҡыу ҡурайҙан эркелеп сыҡҡан моңдар бөтә залды ялмап ала, күңелдәрҙе елкендерә, йөрәктәрҙе әсир ҡыла. Һабаҡтағы уңыштары өсөн Тойғоновто уҡытыусылары маҡтап телгә ала башланы, ҡурайҙағы һәм йырҙағы маһирлығы тиҫтерҙәрен генә түгел, өлкәндәрҙе лә хайран ҡалдырҙы. Хатта бер шәриҡтәше: «Һөлдә өйрәнеп, әрәм булып йөрөмә бында, малай, артислыҡҡа уҡырға кит, — тине, — һинең талант миндә булһамы?..» Был хуплауҙарҙы тик берәү генә, әйтерһең, күрмәне лә, ишетмәне лә, һиҙмәне лә. Ул керәшен ҡыҙы Тамара ине.

1939 йылдың яҙы етте. Уҡыуҙар тамамланды. Танытмалар бирелде. Бөтөнләйгә айырылышыу кисәһе алдынан, ательенан фотограф саҡырып, рабфак ихатаһында йыуан имән эргәһендә шау-шыу килеп, бөтә кластары менән фотоға төштөләр. Шатлыҡтары эстәренә һыймаҫ 26 тиҫтере араһында берҙән-бер бойоҡ кеше Рәхимйән ине. Ун етеһе тулып килгән егет ун алтыһын уҙған һылыуҙы, уның сихырлы күҙ ҡарашын, ҡарлуғас ҡанаттары һымаҡ ҡыйылып төшкән ҡаштарын, улар аҫтындағы оҙон керпектәрҙе башҡаса күрерме? Уның яғымлы тауышын башҡаса ишетерме? Әгәр күрмәһә, ишетмәһә, нисек йәшәр ул?

Эргәлә генә иптәштәре йә парлап-парлап, йә кескәй-кескәй төркөмдәргә бүленеп әле булһа һүрәткә төшәләр. Тойғоновто ла саҡырҙылар. Бер төркөмгә лә ҡушылманы. Уның үҙ уйы бар ине. Тәүәккәллеге етеп, ул иң яратҡан уҡытыусыһына үтенесен әйтте:

— Үҙем һораһам, риза булмаҫ тип ҡурҡам, Мәрйәм Ибраһимовна, Тамараға әйтегеҙ әле, минең менән икәү генә һүрәткә төшһөн. — Шулай тине лә ситкә шылды. Мәрйәм Ибраһимовна арыраҡ торған Тамараны саҡырып алды. Теге тиҙ үк риза булды, ахырыһы, имән эргәһенә барып та баҫты. Рәхимйән, әлбиттә, көттөрмәне. Ҡыҙыҡай йәнәшәһенә килеп торҙо. Тамара күҙ ҡырыйы менән генә Рәхимйәнгә һынаулы ҡараш ташланы. Егет уның яурынынан ғына ине. Үтә лә алсаҡ тауыш менән:

— Әйҙә, Рәхимйән, ошо имәндең икебеҙ ике яғына һөйәлеп төшәйек. Ҡыҙыҡ килеп сығыр, — тине ҡыҙы-

ҡай. Фотограф уларҙы шулай төшөрҙө лә. Иртәнсәк рәсемде килтереп тә бирҙе. Ҡыҙ оҙон толомон һул яурыны аша алға сығарып ҡуйған. Егет ҙур козыреклы кепкаһын ҡупшы итеп ҡырынырaҡ һалған, уң сикәһендә бер услам бөҙрәһе күпереп тора. Буйға тиһәң, икәүһе бер сама килеп сыҡҡан. Быныһы бер ғәжәп ине...

Дөйөм ятаҡтағы бүлмәһенә ҡайтҡас, Рәхимйән ҡалын ғына ҡатырғаны ҡайсы менән оҙонса итеп ҡиҫте лә, уртаға бөкләне. Шунда карточканы тығып ҡараны. Таптаман итеп һыйҙы. Ҡатырғаның ике ситен энә менән тегеп, кеҫә һымаҡ бер нәмә килтереп сығарҙы. Ҡыҙ менән егеттең һындары ошонда инеп, төйәк тапты. Бая ҡайтышлай коридорҙа осраған теге «танса бейеүсе» Сәлим мыҫҡыллап көлмәксе итте:

— Кәләштең хәтәрен йәрәштеңсе, ир арыҫланы,— тип тәкәббер ҡараш менән Рәхимйәнде баштан-аяҡ ҡапшап сыҡты. — Ышҡына торғас, имәнде саҡ ҡолатманың бит, Алпамыша...

— Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә. Был йәһәттән ҡыҙҙар ифрат һиҙгер була ул,— тип төшөндөрҙө «ир арыҫланы». — Кемдең кемлеген тиҙ таныйҙар улар.

Сәлим ғәмһеҙ һыҙғыра-һыҙғыра китеп барҙы. Әммә ул әйткән бер һүҙ егеттең күңеленә һеңеп ҡалды: «Кәләш». «Их, кәләшең ошо булһа икән...» — тип уйланы. Үҙ уйынан үҙе оялып китте.

Рабфактан һуң Тойғонов, ике туған ағаһына эйәреп, Алыҫ Көнсығышҡа барып сыҡты. Хәрби мәктәпкә уҡырға инде. Ҡапыл буйға үҫеп китте, яурындары түңәрәкләнде, аҙымдары киңәйҙе. Тәүге мәлдәрҙә стройҙың иң артында йөрөгән курсант унның уртаһына, хатта алғараҡ та күсте. Тыуған ерҙәрен, ата-әсәләрен һағынған йәш курсанттар бушыраҡ араларҙа өйҙән алып килгән фотоларҙы бер-берегенә күрһәтәләр. Яйы сығып, Рәхимйән дә түш кеҫәһендә ҡатырға эсендә йөрөгән һүрәтте иптәштәренә күрһәтте.

Егеттәрҙең иҫе китте:

— Бындай ҙа сибәрҙәр була икән әй!

— Кемең был?

— Апайыңмы ни? Оҡшап та ҡуйған.

Егет тәүҙә ҡып-ҡыҙыл булды, унан һуң сәс төптәрендә тир бәреп сыҡты. Ул тәү тапҡыр алдашты:

— Апайым түгел, йөрөгән ҡыҙым.

— Ошо зат һинең менән йөрөймө? — тип ихлас аптыраны берәүһе. Тимәк, ул барышня, һин кавалер булып сығаһың.

— Йөрөй шул. Кавалер шул.

Икенсе берәү «кавалер»ҙы яҡланы:

— Ниңә, беҙҙең Тойғонов ҡыҙ ҡарамаҫлыҡ егетме ни?

— Ҡарарлыҡ та... Тик бындайы уҡ, тим...

— Бындайы һиңә генә ҡарарға тейеш булып сыға инде. Тот ҡапсығыңды. Танауың ана ҡалай йәмшек. Аҫты ла кибеп етмәгән — быныһына Баламут фамилиялы украин егете шундай аңлатма бирҙе.

Һүҙгә аҙаҡ килеп старшина ҡушылды:

— Любви сопля не помеха,— тип белдерҙе ул.

Бөтәһе лә, әйтерһең, команда буйынса — ҡул һырттары менән танау аҫтарын һыпырып алды, унан дәррәү көлөп ебәрҙеләр.

Ошондай ғәзиз нәмәне көлкөгә әйләндереүҙәре Тойғоновҡа оҡшаманы. Бынан ары үҙе ҡарап туймаҫ рәсемде кешегә күрһәтмәҫкә булды.

Шулай ҙа сит кешеләрҙән бөтөнләй йәшерә алманы. 1944 йылдың авгусында Молдавия ерендә барған һуғыштарҙа лейтенант Тойғоновтоң һул яурынына мина ярсығы тейҙе. Санинструктор яраны бәйләгәнсе байтаҡ ҡан ағып өлгөрҙө. Гимнастеркаһы лысма булды. Медсанбатҡа килтергәс кенә Рәхимйән карточка тураһында хәтерләне. Иҫән ҡулы менән уны ҡатырға эсенән һурып алды. Һүрәттең түбәнге өлөшө тоташ ҡанға буялғайны. Иң ҡәҙерле хазинаһынан яугир бик оҙаҡ күҙен ала алмай шымып ҡалды: «Бына, Тамара, икәүләп ҡанға баттыҡ...» — тип уйланы. Уның хәрәкәттәрен артҡа килеп баҫҡан шәфҡәт туташы ирекһеҙҙән күҙәтеп торҙо.

— О! Ниндәй һылыу!

Лейтенант һиҫкәнеп китте.

— Кемегеҙ ул? — тип ҡыҙыҡһынды ҡыҙыҡай.

Рәхимйән икенсе һәм һуңғы тапҡыр алдашты:

— Йәрәшкән кәләшем. Исеме Тамара. — Исемен әйткәһе бик килгәйне.

— Бында бигерәк йәшһегеҙ бит...

— Беҙҙә — башҡортта шулай иртә йәрәштерәләр, хатта сәңгелдәктә саҡта уҡ.

— Ирмәк икән... Үҫеп еткәс, әгәр ул бүтәнгә күҙ һалһа?

— Йәрәшелгәс, һалмай инде. Армияға алынһа ла, һуғышҡа китһә лә кейәүе, барыбер көтә.

— Әгәр һинең күңелең бүтәнгә төшһә?

— Йәрәшелгәс, төшмәй инде. Егет һүҙе бер булыр.

Рәхимйән үҙенең хыялына үҙе ышаныш ҡайтарҙы был яуаптарҙы. Шунан ләззәт тапты. Хатта уңайһыҙланманы ла.

— Хатлашаһығыҙмы һуң? — һаман төпсөндө теге.

— Юҡ. Беҙ аймылышыбыраҡ торабыҙ. Һуғыш бит. Ул — хәрби врач. Табышырбыҙ әле. «Хәрби врач»ты белеп әйтте. Лейтенант был хаҡта хәбәрҙар ине. Медицина институтында Тамаралар курсын дүрт йылдан уҡ сығарып, төрлө фронттарға ебәрҙеләр.

Ә ысын кәләштәрҙән уңманы Тойғонов. Һуғыш тамамланғас, кадровый подполковникты Үзбәкстанға ебәрҙеләр. Ике тапҡыр өйләнеп ҡараны. Беренсеһе тиҙ арала уҡ уның күңеленә ятмаҫ булды, икенсеһенә ир үҙе иш килмәне. Шулай тип үҙ-үҙенә аңлатырға, аҡланыу табырға тырышты ул. Быңдай саҡтарҙа кешеләр сәбәптәрҙе төптө яҙа ерҙән эҙләүсән була. Ысын сәбәбе, моғайын, яртыһы ҡуйы ҡыҙыл ҡанға буялыш кипкән шул фотография булғандыр. Икенсе бисәһенән бер ҡыҙҙары тыуҙы. Әсә уны атаһына ҡалдырып китте. Быны улар килешеп эшләне. Алты йәшлек бала үҙе лә риза булды быға. Ҡалған ғүмере ошо ҡыҙы менән уҙҙы.

Донъялар бутала башлағас, отставкалағы полковник 1989 йылда, ҡыҙын, кейәүен, ике ейәнен тейәп, тыуған яғына ҡайтты.

...Тышта XX быуаттың һуңғы көҙө. Көн аяҙ, һил. Тәҙрә ҡаршыһындағы ҡарт имәндең япраҡтары, әйләнепәйләнеп, талғын ғына ергә төшә. Сәйер бит: имән иң ҡаты, иң ныҡлы ағас, оҙон ғүмерле ағас, үҙе иһә яҙын һуңлап япраҡ яра, көҙөн башлап япраҡ ҡоя. Тәбиғәттең ниндәй законы менән йәшәй икән ул? Ҡайһы саҡ мин быны кеше тормошо менән сағыштырырға тырышып ҡарайым. Һис кенә лә сама самаға килеп сыҡмай. Оҙон ғүмерле мөһәбәт әҙәми заттарға көс-кеүәт тә, аҡылзиһен дә иртә килә. Киткәндә, һуңыраҡ китә.

Йылдың был миҙгелендә «Йәшел аҡлан» санаторийында күберәк һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары ял итә.

Ана шуларҙың береһе, тәҙрә эргәһенә баҫып, япраҡ яуғанын күҙәтә. Бөхтә итеп йыйыштырылған бүлмәлә ул яңғыҙы. Ап-аҡ салфетка йәйелгән тумбочкала ялтырауыҡлы тар баҡыр рамкаға ҡуйылған кескәй генә фотокарточка тора. Унда ҙур имәндең ике яғына ике үҫмер баҫҡан. Береһе оҙон толомон яурын аша алға сығарып һалған. Икенсеһе кепкаһын ҡырынырaҡ кейеп ебәргән. Икеһе лә теҙҙән ҡанға батҡандар.

Һаҡ ҡына ишек ҡаҡтылар. Тәҙрә эргәһендәге сал баһадир тауышын күтәрмәй генә:

— Рәхим итегеҙ... — тине.

Бүлмәгә төҙ, ыҡсым кәүҙәле, шаҡтай оло йәштәге ҡатын килеп инде. Йәш сағында сибәр булғандыр, ахырыһы. Әле лә ныҡ төҫ ташламаған. Матур ҡатындар ҡартлыҡҡа тиҙ бирешмәй шул.

— Ғәфү итегеҙ, зинһар,— тине, «зинһар» һүҙенә йомшаҡ ҡына баҫым яһап.

— Рәхим итегеҙ...

Ҡатын уҙмай ғына баһадирға төбәп ҡарап торҙо ла, уңайһыҙланғандай, ишек яғына башын борҙо. Шулай ҙа ҡуҙғалманы, һүҙен дауам итте.

— Мин бында бөгөн генә килдем. Ҡабул итеү бүлмәһендә ултырғанда, теркәү кенәгәһенә күҙем төштө. Минән ике-өс кешегә генә өҫтәрәк Тойғонов Рәхимйән тигән исемде күрҙем. Хаталандым, ахырыһы. Ғәфү итегеҙ.

— Түрҙән уҙып ултырығыҙ, ханым, — хужа урын күрһәтте. — Был мәсьәләне тиҙ үк асыҡларбыҙ, — тине. Ул үтә тыныс ине, гүйә, ошо мәсьәләгә аныҡлыҡ индереүҙе күптән көткән, шуға күптән әҙерләнгән, тиерһең.

Ҡунаҡ уҙып ултырғас, ул тумбочка өҫтөндәге һүрәтте алып уға һуҙҙы. Ҡатын ике ҡулына тотоп, һүрәткә оҙаҡ текәлеп торҙо. Бер талай, хатта тын да алмай, тынып ҡалды. Әллә былай ғына уйға талды, әллә бөгөнгө донъянан бөтөнләйгә ваз кисте. Алты минут эсендә алтмыш йыллыҡ ғүмер уҙҙы булыр уның күҙ алдынан.

Тойғонов баҫҡан ерендә ҡымшанманы ла. Ниһайәт, ҡатын телгә килде.

— Һуғыштан һуң мин бит һине эҙләнем, Рәхимйән, күп эҙләнем.

— Хәл белеү өсөнмө ни?

— Юҡ, Рәхимйән, уның өсөн генә түгел, — тине Тамара, — һағындым мин һине. Хатта улай ғына ла түгел...

— Бергә саҡта мине шәйләмәнең дә...

— Шәйләнем. Яраттым. Буйға бәләкәйлегеңә уңайһыҙланышмы, кешенән оялышмы, тойғоларымды белдермәнем. Балалыҡ йүләрлеге инде. Һин ана ниндәй бәһлеүән икәнһең. Карточка төшкәндә, имәндең ике яғына баҫайыҡ, тинем мин. Хәтерләйһеңме?

— Хәтерләмәгән ҡайҙа?

— Хәйлә ине был. Ағастың икенсе яғына баҫҡас, мин саҡ ҡына сүгә төштөм. Бына бит икәү бер сама килеп сыҡҡанбыҙ. Карточка бит ул ғүмерлек иҫтәлек, тиң күренәйек тип уйланым.

— Ә мин яҡын төшөргә ғәрләндең, тип ғазапландым аҙаҡтан. Тәүҙә инде, һин ризалашҡас, түбәм күккә тейгәйне... Беҙ бит бер-беребеҙ тураһында һис нәмә белмәйбеҙ, Тамара.

— Бөгөнгә белмәй торайыҡ. Беҙ бөгөн генә, әле генә медрабфакты тамамланыҡ. Ҡалған бөтәһе лә алда...

— Шулай ҙа, Тамара?

— Шулай ҙамы? Шулай ҙа, Рәхимйән, зарланмай йәшәнем, зарланмай ҡартайҙым, зарланмай китеп барасаҡмын.

— Тап минеңсә икән...

Тойғонов, уҡталып, мөйөштә торған тәпәшәк пуфикты ҡунағы эргәһенә килтереп ҡуйҙы. Үҙе яйлап ҡына шуға ултырҙы. Тамара менән типә-тиң килеп сыҡтылар.

— Әй, оҫта! Тағы бер тапҡыр төшөрөп ҡал беҙҙе!!! — тип хыялына килгән фотографҡа әмер бирҙе полковник.

— Күп итеп төшөр, оҫта, бөтәбеҙгә лә етерлек булһын. Юғиһә, теге саҡ миңә бирмәгәйнең, — тип иҫкәртте хәрби врач.

Фотограф оҙаҡ «төшөрҙө». Бер арала Тамара Рәхимйәндең ныҡ һирәгәйгән бөҙрәһен һаҡ ҡына һыйпап алды.

— Алтын тумалағым минең... — тип бышылданы ул. Ике бите буйлап, бер-беренән ҡыуыш, йәш бөрсөктәре тәгәрәне.

Сабыйҙарҙың ғына күҙ йәштәре шулай бөрсөк-бөрсөк булып атылып сыға...

2003

ЛЮБОВЬ УДАВА

Удав *(кролику)*. Ты такой красивый, ласковый, жирненький. Я тебя очень люблю. У тебя замечательное будущее.

Кролик *(растроганно)*. Правда?! Как интересно...

Удав. Сущая правда! — и вмиг проглотил свою возлюбленную.

* * *

— Ты такая богатая, красивая, лакомая, — объяснился в любви к Башкирии один Магнат-Удав. — У тебя замечательное будущее. Я тебя обожаю. Ты станешь моей, только моей, больше ничьей. — Перед его ласковым взором будто явился беленький, пушистый кролик. Открыв свою безразмерную пасть, бросился он на свою жертву.

А тот оказался вовсе не зайчонком, а могучим разъяренным львом. Моргнуть глазом не успел Магнат-Удав — от него остались одни потроха.

2003

СЕРДОБОЛЬНЫЙ ТАШБУЛАТ

Четырехлетний Ташбулат закапризничал и заплакал. Бабушка решила припугнуть его:

— Не реви, вот придет Букай[1] и отнимет все твои игрушки.

— Московский Букай что ли? — перестав плакать, осведомился малыш.

— Он самый, — подтвердила бабушка.

— Кем вздумала пугать, тоже нашла мне страшилище, — через молочные зубы сплюнул малыш. — Не Букай, а букашка.

— Так не говори. Ему не по чину это.

---

[1] *Букай* — страшилище, чем пугают детей.

— Говорю и буду говорить!.. — Вдруг Ташбулат задумался и спросил. — Что там у него, в Москве, на работе, растрата вышла, что ли? Говорят, притом большая.

— Наверное, так.

— Пусть тогда забирает мои игрушки, — скалился четырехлетний филантроп. — Как-никак землячок. Если еще братия Веремеенко поможет. Так гляди, и кара минует.

— Ты по пустякам заревел, вот по ком нужно плакать, — сказала старая, сменив гнев на милость. И обрадованно добавила. — Из тебя, внучок, настоящий правозащитник выйдет, не чета там каким-то коволевым, новодворски...

2003

РАЗГОВОР ТЕЛЕЖУРНАЛИСТОВ

Провинциал. И лгу, и подачки беру, но никак не могу в люди выбиться.

Столичный. Ты, наверное, это делаешь по мелочи.

Провинциал. Да. И так боязно.

Столичный. Деревня! Ты по-крупному бери, покрупному. Будешь богат и знаменит. Тогда ничего не страшно. Я тоже начал, как ты. Не трусь! Не позорь нашу профессию!

Провинциал. Все-таки когда-нибудь...

Столичный. Этого «когда-нибудь» уже никогда не будет, коль в стране прочно утвердились коррупция и мафия. Лишь надобно бдительно стоять у них на карауле. Наступает для нас предвыборная золотая лихорадка. Только не зевай. Только не оплошай. Усек?

Провинциал. Усек! — В глазах его вспыхнул яркий огонь большой надежды. Однако он решил уточнить. — За кого же ратовать?

Столичный. Бестолочь! За того, кто в данный момент больше платит. Усек?

Провинциал. Усек!!! — В глазах у него уже вовсю пылал ослепительный огонь огромной надежды. Совсем недалеко впереди засверкали золотые горы.

2003

ӘБҮБӘКЕР

Берәүҙәр уны төптө алйотҡа һанай, икенселәр «алла бәндәһе» ти. Әммә рәнйетергә, кәмһетергә баҙнат итмәйҙәр. Мин үҙем уға аныҡ ҡына баһа бирә алмайым, тик йыш ҡына хайран ҡалам. 1950 йылдың йәйен мин ғаиләм менән сихри Өргөн күле буйындағы ауылда уҙғарҙым. Ул төбәктең теге саҡтағы хозурлығы һүҙ менән генә аңлатырлыҡ түгел ине. Заманында, ҡулыма ҡәләм алып, ошо яҡтың илаһи матурлығын, шул матурлыҡтың тылсымлы ҡеүәтен тасуир итергә тырышып ҡараным. Һәләтем етмәне. Кире һүрелдем. Ул мөһабәт тамашаны тик күрергә, тыңларға, тойорға ғына мөмкин.

Килеүебеҙгә бер-ике көн уҙғандырмы, үҙебеҙ йәшәгән өйҙән сығып, күл яғына йүнәлдем. Урам тын. Кеше заты күренмәй. Халыҡтың күбеһе бала-сағаһы менән урман яғында бесән эшләй. Төҙөк кенә йорттоң ҡапҡа төбөндә терәүҙәре ергә ҡағылған эскәмйәлә ултырған кешегә тап булдым. Сәйерерәк тойолдо был әҙәм. Бер ҡараһаң, ул 15—16 йәшлек үҫмергә оҡшаған, бер ҡараһаң, 25-тәр тирәһендәге ир затына тартым. Иң тәүҙә уның арыҡлығы күҙгә ташланды. Туҡталмай ғына сәләм бирҙем:

— Һаумыһығыҙ!

— Һаубыҙ әле, — тине, башын саҡ ҡына миңә табан бора биреп, — аяҡтарың талһа, ултыра һалып кит, абзый, — ул бер яҡҡа шыла төштө. Эскәмйәнең бушаған өлөшөн ус төбө менән һыпырып алды.

Аяҡтарым талмаһа ла, саҡырыусының һүҙен кире ҡаҡманым.

— Ашығыс сәфәрем юҡ,— тинем.

— Ишеткәнһеңдер, моғайын. Мин Әбүбәкер булам.

— Беләм, — тинем, ысынын әйттем. Минең хужабикәм Көбрә инәй ниндәй уңай менәндер уны телгә алғайны.

— Был минең өйөм түгел, — ул башы менән ишара яһаны, — комбайнсы Ғайсаныҡы. Минеке күлдең анау ерендә, ярҙың итәк осонда ғына ултыра.

Мин, йәнәһе, һиҙҙермәй генә тегене баштан-аяҡ күҙем менән ҡапшап сыҡтым. Өҫ-башы таҙа ғына. Кепкаһының козырегы бер аҙ ҡалтая төшкән.

— Был шау ялан аяҡ йөрөй икән тип уйлама тағы. Көндәр ҡоро саҡта ғына шулай йөрөйөм мин. Итек табаны туҙа, аяҡ табаны йөрөгән һайын нығый ғына. Бысраҡта ла, һалҡында ла өҫтөрәргә кирза итегем бар. Кепканы айыусы Яппар һыйлағайны. Мөгөҙө элек үк шундай кәкре ине.

Тәү тапҡыр ул миңә күтәрелеп ҡараны ла һорай һалды:

— Төнөн нисек йоҡланың?

— Былай һәйбәт.

— Юғиһә, яңы ерҙә йоҡо төрләнеүсән була. Илтабандағы апайымдарға барһам төн буйы йөрөп сығам. Йоҡо алмай.

— Һин дә һораманың, мин дә әйтмәнем. Үҙем менән таныштырманым бит әле.

— Беләбеҙ Төнәге Вәзир тигән малай мәктәп дәреслегенә төшөрөлгән һүрәтеңде кешеләргә күрһәтеп йөрөнө. Унда һине табаҡ бит, ябалаҡ баш итеп яһағандар. Ирендәрең дә, быйма олтаны ише, яман ҡалын. Былай үҙең хатта әҙәмсә икәнһең.

— Нимә эшләп яңғыҙың сит ҡапҡа төбөндә ултыраһың?

— Күл эргәһендә бигерәк аулаҡ. Эс боша. Һыуҙағы балыҡтар менән һөйләшеп булмай бит инде. Бында, исмаһам, һирәк-мирәк булһа ла, кеше уҙа.

Тап ошо ваҡыт ҡаршылағы ихатала, нескә сағыу тауыш сығарып, тауыҡ ҡытҡылдарға кереште.

— Әлифә ҡарсыҡтың себеш тауығы йомортҡа һалып төштө. Ҡалай маҡтанып хәбәр тарата, әйтерһең, йоҙроҡ дәүмәле алтын тапҡан. Йомортҡаһы унаң әстрхан сәтләүегенән ашмаған. Төнәге Әлифә инәй тәүге йомортҡаһын миңә һыйланы, «Хәйер итеп түгел, һөйөнсө итеп бирәм», — тине. Мин үҙем саҙаҡа алмайым. Мулла түгелменсе. Ғәрип-ғөрәбә лә түгелмен. Хәйер алып ҡына йәшәп булмай. Беҙ олатайым менән дуға бөгөп, сана яһап мал табабыҙ. Ҡайын туҙынан төрлө һауыт-һаба әтмәләйбеҙ. Йәнә балыҡ тотабыҙ. Һөнәрһеҙ түгелбеҙ былай. Тик армияға ғына эләгеп булманы.

— Нишләп улай?

— Төнәге, үҙемдең тиҫтерҙәремә эйәреп, Учалыға һалдатҡа ҡаралырға барғайным. Саҡырылмай килһәм дә,

сисендереп ҡаранылар, ауыҙыма тимер ҡалаҡ һабы тығып, телемде ҡапшанылар. Арҡама, күкрәгемә түңәрәк башлы торба терәп, тынымды тикшерҙеләр. Үлсәүгә баҫтырып, ауырлығымды үлсәнеләр. «Йәшең дә еткән, буйһының да килешкән, тик үтә сибекһең, ауырлығың етешмәй. Ауыр мылтыҡ яурыныңды баҫыр», — тип алмай ҡайтарҙылар. Йәнә төнәге...

Мин ирекһеҙҙән уның һүҙен бүлдерҙем.

— Нишләп ул бөтә нәмәгә «төнәге» лә «төнәге» тиһең?

— «Төнәге» ул — үткән ғүмер. Бер көн әүәлме, бер йыл әүәлме — барыбер төнәге. Үткән дә киткән.

Утын арбаһына ала ат еккән бер әҙәм беҙ әңгәмәләшкән арала, кардон яғынан сығып, арғы урамға уҙҙы. Ул үрәсәгә аяҡтарын һәлендереп ултырған. Башы бер эйелә, бер ҡалҡына. Бушаҡ дилбегәһен ҡулына урап тотҡан. Аты ҡабаланмай ҙа, үшәнләмәй ҙә бер көй атлай бирә.

— Урман ҡараусы Фәсхетдин был, — тип хәбәр һалды, — кардондағы эшнәһе Ягурҙан ҡайтып килә. Ярайһы бәлтерәгән Йөҙөмбикәһенә элəгә икән бөгөн.

— Башҡорттоң йүнһеҙе саҡ ҡына эсеп алһа, бисә туҡмай. Ниңә туҡмағанын үҙе лә белмәй, — тигән булдым. Йәнәһе, тәрән һығымта яһаным.

— Юҡ, Фәсхетдин йүнһеҙ түгел. Ғәҙел әҙәм. Ысын урмансы. Ниңә туҡмағанын да яҡшы белә. Сәбәбе бар.

Тегенең тел төбөндәген асыҡларға тырышып, мин ныҡышҡан булдым:

— Әҙәм рәнйетеү өсөн күп кәрәкмәй, имеш-мимеш буш ғәйбәт етә.

— Ғәйбәт йөрөтөү булыр тип һөйләмәҫкә ине лә, һиңә әйтмәй булмай... Төнәге... Өсөнсө йыл да... Бығаса остоҡ та яманаты сыҡмаған Йөҙөмбикә мәсхәрәгә ҡалды. Анау куних Алтынов... Уның фамилияһы ғына Алтынов. Үҙе өс тин баҡырға ла торорлоҡ бәндә түгел. Арғы тау яғындағы кәбән артында ҡуян Сәлим Йөҙөмбикә менән Алтыновтың өҫтәренә барып сыҡҡан, имеш. (Көртмәле ваҡыты ине.) Ул Сәлимдең ҡушаматы — алап ауыҙ. Алап ауыҙҙан таралды ана шул ҡулһыҙ-аяҡһыҙ хәбәр. Йөҙөмбикә иренән танмаған: «Аҙғынлыҡтан да, яратыуҙан да түгел был ҡылған ҡылығым, тик бары бөтән ирҙе һынамаҡтан булды», — тип әйткән. Хәҙер

икенсе йыл инде ире нык ҡына эсеп алһа, ҡатынын «һынамаҡлай». Ҡатыны һынатмай. Илгә сығып, һөрән һалмай.

— Йыш туҡмаймы?

— Ю-ю-юҡ.. Йыш түгел. Эсһә лә, йылына өс-дүрт тапҡыр ғына эсәлер. Айыҡ саҡта бисәһен маҡтап туя алмай. «Һин алтыным», «һин көмөшөм», «һин ҡарлуғасым», «һин һандуғасым», «һин бешкән алмам» тип һайрай. Ярамһаҡланып әйтмәй, ихлас әйтә. Кешеләр шулай һөйләй. Алмаһы бешеүен бешкән дә, саҡ ҡына ҡорт тишкән. Быныһын мин әйтәм.

— Йөҙөмбикә тиһеңме әле, ул һуң туҡмалыуға нисек түҙә?

— Түҙә инде. Бер рәхәттең бер ҡыйыны була ул. Рәхәтен күргәс, ҡыйынына сыҙамай ни сара? Сыҙай инде. Ирәмәл ҡоралайы ише үҙе, шундай һомғол... «Ирем ҡулы тейгән ерем тамуҡта янмаҫ, — тип әйтә, ти. — Ҡулым һынһа, еңемә йәшерәм, башым тишелһә, яулығым менән ҡаплайым», — тип әйтә, ти. Мин уларҙың икеһен дә йәлләйем. Бер рәхәт арҡаһында күпме ыҙа сигәләр...

Был кеше мине торған һайын үҙенә ылыҡтыра, күңелде арбай. Кем ул? Хоҙайҙың үҙе менән туранан-тура аңлашыусы илаһи затмы, әллә бөтә күргәнен, ишеткәнен тейәп йөрөгән ошаҡ ҡапсығымы? Теләгәндә сәсә, теләмәгәндә ҡуҙғатмай.

Башын ситкә бороборaҡ, ул шымып ҡалды. Ултырабыҙ. Мин уның «балыҡ тотабыҙ» тигән һүҙен иҫкә төшөрҙөм. Үҙем дә был эшкә ифрат һәүәҫмен. Әммә күл эсенә инер өсөн кәмә лә, иптәш тә кәрәк. Күл ситенән бында ваҡ бала-саға ғына балыҡ ҡармаҡлай.

— Балыҡҡа йыш йөрөйһөңмө?

— Һил көндө төшәм. Тулҡын ҡупһа, шөрләйем. Мин бит йөҙә белмәйем. Йөҙөп ҡарағаным да юҡ. Тән тартмай. Күл эйәһе минең кеүектәрҙе аңдып ҡына тора икән. Ҡапты йотто булыр. Кем ул «минең кеүектәр»? — уныһын аңлатманы.

Ул тағы бер талай шымып торҙо ла, ҡапыл миңә боролоп, тәү тапҡыр күҙҙәремә тура ҡараны:

— Дуҫ бар, дошман бар, һөйләшкән һүҙ ике арала ғына ҡалһын. Һиңә сер һыялыр, моғайын. Шундай кешегә оҡшағанһың. Һинең менән дуҫ та булып булыр ине.

— Ниңә, булайыҡ.

— Үтә ҡапыл әйтеп һалдың. Бындай һүҙҙе уйлап һөйләү тейешле. Уйлап әйттеңме? Ихласмы?

— Ихлас. Ир һүҙе.

Күрәһең, ул үҙенең «иҫәүән» тигән мөһөрөнә ышанған йәки күнеккән. Шуға күрә үҙенә ҡарата етди мөнәсәбәтте шикләнеп ҡабул итә булыр. Бүтәндәр уны йә шаярта, йә һанға һуҡмай. Йәнәһе, диуана нимә күрмәҫ тә, нимә һөйләмәҫ.

Ваҡ-ваҡ баҫып, күбәләктәй генә кәүҙәле бер йәш ҡатын беҙҙең эргәнән уҙып китте. Аҡ яулығын артҡа тартып бәйләгән. Балитәкле алһыу күлдәгенең салғый осо резина калушы ҡунысына тейә яҙып, тейә яҙып ҡала.

— Һинән оялып ҡына өндәшмәй үтте ул, үҙе былай алсаҡ ҡатын,— тип төшөндөрҙө Әбүбәкер. — Мине үҙ күрә. Исеме уның Ғәшиә. Зәңгәр күлдәк уның үҙенеке түгел, әхирәте Шәмсинурҙыҡы. Учалыға барып ҡайтҡансы ғына алып торғандыр. Әле шунан ҡайтып килә. Атаһыҙ тыуған балаһы өсөн аҡсаға барғандыр. Бөгөн — көнө шул. «Атаһыҙ» тип ни, атаһы бар ҙа, теге нәмәкәй ата ҡаҙ булып сыҡты. Ауылдың арғы осонда ике өйҙә тағы ике балаһы бар. Алды ла айырҙы, алды ла айырҙы кәләште. «Мин ҡан ҡойған фронтовик. Имею право!» — ти. Ҡан ҡойған, ә тәнендә яраның эҙе лә юҡ. Мөхөтдин исемле шул берәҙәк хәҙер Белорет яғында йөрөй. Мәрйә бисәгә йортҡа кергән, ти. Оҙаҡ тотмаҫ мәрйәһе, тиҙ ҡыуып сығарыр ул аҙғынды. Әйтерһең, бер ул ғына һуғышҡан. «Имею право...»

Үҙе һөйләй, үҙе уң аяғының баш бармағы менән ер соҡой. Уйы кинәт нимәгәлер башҡаға күсте, ахырыһы. Ул яй ғына урынынан торҙо.

— Ғәйепкә алма, дуҫ, мин китәм инде. Олатайым урмандан ҡайтыуға аш бешереп ҡуйырға кәрәк. Беҙ уның менән икәү генә донъя көтәбеҙ. Атайым һуғыштан ҡайтманы. Инәйем төнәге йылды, яңы иренә эйәреп, Ташкент яғына сығып китте. Етеп килгән һылыуымды ла үҙе менән алды. Инәйемдән былай һылыуымды һағынам,

йәлләйем. Инәйемдең эргәһендә ире бар, ә һылыуымдың берҙән-бер ағаһы ана ҡайҙа тороп ҡалды...

Ул үҙ юлына китте, мин ҡайтыр яҡҡа ыңғайланым. Күл яғына ла, тау яғына ла нишләптер аяғым тартманы.

Иртә уяндым. Тауыш-тынһыҙ ғына көтөү китте. Көтөү ҡайтҡан саҡта ғына ул, ауыл осона инеү менән, һарыҡтар мәэлдәргә, һыйырҙар мөңрәргә керешә. Йәнәһе: «Ишетегеҙ, күрегеҙ — беҙ ҡайттыҡ». Тик алдан килеүсе кәзәләр генә, дәрәжә һаҡлап, тыныс атлай. Хайуандарҙың холоҡтары Келәштә лә, Өргөндә лә бер ул.

Йыуынырға тип күтәрмәгә сыҡтым. Өҫкө баҫҡыс ситендә өҫтө дегәнәк япрағы менән ябылған туҙ туҫтаҡ күҙгә салынды. Шул арала, көтөүен ҡыуып, Көбрә инәй ҡапҡанан инде. «Ана, бая һинең дуҫың Әбүбәкер урман күстәнәсе килтерҙе, — тип, әлеге туҫтаҡҡа ымланы, — «Дуҫтың үҙ ҡулына тапшыр, әле генә тиреп төштөм», — тине, һауытты алып миңә һондо. — Бына, тапшырҙым, — тине. Һауыттың өҫтөн астым. Унда һайлап ҡына йыйылған ҡып-ҡыҙыл тау еләге сүмәкәй өйөлгәйне.

Ул көндө лә, иртәгеһен дә урманға сығып йөрөнөм, күл буйлап уҙҙым, Бирге тау яғына һуғылдым. Әммә Әбүбәкерҙе осрата алманым. Кешенән һорашыу нишләптер уйға килмәне. Өсөнсө көндө төштән һуң үҙе пәйҙә булды. Иҫәнләшеп-нитеп тормай ғына тура ғәмәлгә күсте:

— Дуҫ, ел баҫылды, балыҡҡа төшһәк тә була, — тине, — кәмәне, ҡармаҡтарҙы төнәге үк әҙерләп ҡуйғанмын.

Был хәбәрҙе мин күптән көткәйнем.

— Күстәнәсең өсөн рәхмәт, дуҫ, — тинем, — рәхәтләнеп ашаныҡ.

— Аҡса емеше түгел, баҡса емеше. Эйел дә өҙ.

— Рауза! — тип ҡысҡырҙым өйҙәге ҡатыныма, — Әбүбәкерҙең буш туҫтағын сығарсы, — тинем. Яуап булманы. Ишетмәне, ахырыһы.

— Ҡуй, дуҫ, үҙем яһаған сеүәтә ул, хәтирәгә ҡалһын. Еләген ашаның, бөттө, онотолдо. Ә сеүәтәне ашап булмай. Тора ул шунда.

54 йыл алға уҙып әйтәм. Әбүбәкерҙең ошо туҙ сеүәтәһе, ғаиләбеҙ ҡомартҡыһы булып, һаман үҙ урынында тора.

...Бына беҙ улаҡ ише генә кәмәлә күл уртаһында ултырабыҙ. Һыу өҫтө тып-тын. Шулай ҙа, саҡ ҡына

ҡыймылдар хәл юҡ, «карабыбыҙ» ҡырынайырға ғына тора. Был хәл, күрәм, иптәшемә борсоу һала. Ләкин һиҙҙермәй. Мин һағыраҡ ҡуҙғалырға тырышам. Әбүбәкерҙең ҡалҡыуысы әленән-әле батып ҡалҡа. Минеке ойоп тик тора. Сирткән һайын, ул йә эре генә алабуға, йә сабаҡ һөйрәп сығара. Ҡунағым ҡото был... — ти ул үҙүҙенә. — Анау йәмшек танау Ғаяз менән бер төшкәйнек, балыҡ әллә ҡайҙа ҡасып-боҫоп бөттө. Махмурҙан һуң ине теге нәмә. Балыҡтар шуның еҫенә сыҙаманы булыр. Мин үҙем дә саҡ түҙеп ултырҙым. Һүҙ тыңлап ҡына эйәрткәйнем инде.

Миңә бәләкәс кенә сабаҡ эләкһә, Әбүбәкер ихлас ҡыуана. «Ана ниндәй тосто эләктерҙең, — ти. — Бер эйәләшеп алһалар, һауыш ҡына торорһоң әле».

Әйтергә кәрәк, тәүге көндә лә, унан һуң да, балыҡ көтөүе миңә ябырылманы. Ҡотом да, һолом да самалыраҡ, ахырыһы. Өҫтәүенә, кәмәне сайҡалдырмайым тип, бөршәйеп ултырам. Был хаҡта Әбүбәкер иҫкәрткеләп тора.

Ҡояш ныҡ түбәнәйгәс, бер талай балыҡ бөтөнләй сиртеүҙән туҡтаны. Минең юлдашым күл ситендәге тәпәш өйгә күрһәтте: «Ана, анау бер тәҙрәһе былай ҡараған беҙҙең йорт. Бик иҫкерҙе. Быйыл һиплəргә ҡул теймәне. Йәренгә һүтеп һалырға тура килер». Тирә-яҡта йәнә балыҡ уйнай башланы. Беҙ ҡармаҡтарыбыҙға тотондоҡ. Мин тағы кинәтерәк ҡуҙғалдым шикелле. Кәмәбеҙ ныҡ ҡына сайҡалып алды. Үҙем дә ҡурҡып киттем. «Дуҫ, — тине Әбүбәкер, тыныс ҡына, — май баҫҡан арт һаныңды самалабыраҡ, үлсәберәк ҡуҙғат, Ғайса йорто янындағы эскәмйәлә ултырмайһыңсы, йәнең дә, тәнең дә тәрән һыу өҫтөндә. Әҙәм һыуға батһа, тәнен һөйрәп сығаралар, йәне тегендә тороп ҡала, сыҡмай. Йәне һыуға батҡан әҙәм ожмахҡа инмәй, ти».

Бына ошондай дәлилдәр менән аңлатты ул беҙгә ниндәй ҡурҡыныс, ниндәй һәләкәт янауын.

Эңер алдынан ғына ярға сыҡтыҡ. Тотҡан балығыбыҙҙы Әбүбәкер, эреһе-вағы менән аралаштырып, ике тигеҙ өйөмгә бүлде:

— Күңелеңә оҡшағанын ал, дуҫ, — тине.

Мин ҡаршы төштөм:

— Былай ғәҙел килеп сыҡмай, дуҫ. Мин ни бары ыбыр-сыбыр менән алдым, һин һыҙырып һалдың. — Мин был һүҙҙәрҙе ихлас әйттем, әммә асылда уңайһыҙлыҡ та һиҙҙем.

— Ә нисек ғәҙел килеп сыға?

— Миңә әҙерәк, үҙеңә күберәк ҡуй.

— Һин күберәк тотһаң, шулай итер инеңме ни, дуҫ? Юҡ инде, дуҫ, һин мине гонаһҡа ҡотортма. Тиң дуҫтарҙың табышы ла, ҡазаһы ла тигеҙ бүленергә тейешле.

Бына ниндәй һабаҡ бирҙе миңә «иҫәр» Әбүбәкер. Оялыуҙан сәс төптәренән тир бәреп сыҡты. Мин дә, әлбиттә, тигеҙ бүлер инем. Эш ундамы ни? Был хәлдән тиҙерәк ҡотолоу өсөн бер өйөмдө тиҙ генә һауытыма күсерҙем.

Яр буйлап ҡайтыш киләбеҙ. Беребеҙ ҙә өндәшмәй. Һүҙгә лә килешмәнек, тик һүҙһеҙ ҡалдыҡ. Байтаҡ атлағас, Әбүбәкер башлап өндәште:

— Дуҫ, — тине, — «һимеҙ арт һан» тураһында ла, һинең табыш бүлеү бизмәнең хаҡында ла хәбәрҙе, ситкә сығармайыҡ. Был донъяла дуҫ бар, дошман бар...

Бынан һуң күп тапҡырҙар балыҡҡа төштөк. Ҡотло көнө лә, ҡотһоҙо ла булды. Әммә татыулығыбыҙға туҙан да ҡунманы. Мине сәйергә ҡалдырып, бер ваҡыт был бөтөнләй күҙҙән юғалды. Һуңыраҡ шуны белдем — уның ер менән күк араһында талпынып торған йәне ҙур һынауға дусар булған. Егеттең яланғас йөрәген аяуһыҙ мөхәббәт ҡошо суҡый башлаған. Колхоз идараһында хисапсы булып ауылда бер сибәр Мәрйәм эшләй. Әбүбәкер иртәнсәк Мәрйәм менән бер ваҡытта идараға килә лә көн буйы ҡыҙға ҡарап тик ултыра икән. Күҙенә лә кереп бармай, эргәһенә лә ылыҡмай, бер мөйөштә ултыра бирә. Тәүҙәрәк унан рәйес Ярмөхәмәт тә, бүтәндәр ҙә: «Ни йомош, Әбүбәкер?» — тиһәләр: «Йомошом һиндә түгел. Уны үҙем генә беләм», — тип яуаплай. Берәү ҙә уны ҡыумай, ҡыйырһытмай. Әйҙә, ултыра бирһен «алла бәндәһе». Шулай ҙа теге ара-тирә моңһоу ҡараш ташлаһа, Мәрйәмдең күңеленә борсоу, хатта шом һала. Диуананың дәртен ҡуҙғатҡан өсөн, ҡыҙыҡай үҙен нисектер ғәйепле һанай башлай, бер саҡ килеп уның ғазапланыуынан, рәнйеүенән ҡурҡа. Аулағыраҡ ҡалған бер арала Мәрйәм былай ти икән:

— Һин бик һәйбәт егетһең, Әбүбәкер. Тик минең вәғәҙәләшкән кешем бар. Вәғәҙә боҙоу ҙур яҙыҡ бит.

Әбүбәкер өндәшмәй, кискә тиклем ултыра бирә. Был һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң ул ғәйеп булып тора. Миңә лә килмәй, күл өҫтөндә лә күренмәй. Көбрә инәй генә Бирге тау яғында быҙау эҙләп йөрөгәндә бер тапҡыр уны осратҡан. Башын эйеп, тау битләүендә таш өҫтөндә ултыра икән.

Иртә таңдан тәҙрә ҡағып, Әбүбәкер мине тышҡа саҡырҙы. Ҡураға сыҡтым. Өҫтөндә бының ҡалын ғына һырма, аяғында кирза итек, башында таушала төшкән фетр эшләпә. Осрашҡанда һаулыҡ һорашып тора торған ғәҙәте юҡ уның. Күрә бит: кеше имен-аман, ниңә уны төпсөнөп маташырға. Был юлы ла ул туп-тура кәрәкле һүҙен башланы:

— Дуҫ, — тине ул моңһоу ғына итеп, — һинең менән миңә айырылышып торорға тура килер.

Бының өҫ-башына ҡарап, ғәжәпкә ҡалдым. Иртә салт аяҙ, йылы.

— Ҡайҙа китәһең?

— Алыҫ йәйләүгә. Персидәтел үҙе инәлеп һораны. «Унда йыш йөрөргә үҙемдең ваҡыт етмәй. Һинән дә ышаныслыраҡ кешем юҡ», — ти. — Минең өсөн һауынсыларға, көтөүселәргә күҙ-ҡолаҡ булырһың, аттарҙы ҡарарһың, уңған кешегә эш бөтмәй ул», — ти. Ил башының һүҙен нисек йығаһың инде. Яҡшы заттың һүҙен йыҡҡансы, менгән атым абынып ҡолаһын.

— Китеп һәйбәт эшләйһең, — тим. — Ил белгәнде мин дә беләм, Әбүбәкер дуҫ. Мәрйәмдән дә һыуына төшөрһөң, ихтимал. Был һүҙҙәрҙе мин дуҫың булған өсөн генә әйтәм.

— Уныһы инде, дуҫ, минең үҙ иркемдә түгел, йөрәгем иркендә. Мәрйәм хаҡында, тим...

— Мәрйәмдең бит йәрәшкән егете бар.

— Булһа ни... уның маңлайына бит «мин Жәүиттеке» тип яҙылмаған. Яҙылһа ла, уны сыйып ташлап, «мин Әбүбәкерҙеке» тип яҙҙырасаҡбыҙ.

Ул беренсе хат ҡуш ҡулын миңә һондо:

— Ҡул ҡыҫышып хушлашайыҡ әле, дуҫ. Йәнә күрешергә насип булһын. Мин һине яраттым, яратмаһам, дуҫ та күрмәҫ инем. Һинән башҡа минең хатта әшнәм дә юҡ.

— Мин дә һине яраттым, Әбүбәкер, — бөтә йәнем-тәнемдә шом ҡатыш һағыш биләп алды. Үҙем дә һиҙмәҫтән, уҡталып, уны ҡосағыма ҡыҫтым.

— Ҡуй, дуҫ, быныһы ирҙәрсә килеп сыҡмай, — тине лә ҡосағымдан ысҡынды.

Бер талай тик кенә баҫып торҙоҡ. Юлына ҡуҙғалыр алдынан ул былай тине:

— Һин миңә хат яҙма. Үҙем уҡый белмәйем, кешенән уҡытып сер асыу ярамаҫ. Дуҫ бар, дошман бар...

Оло итектәре менән дөп-дөп баҫып, ҡапҡаға ыңғайланы. Әйләнеп тә ҡарамай, урамға сығып юғалды. Аҙымдары киң, һәлмәк ине.

Колхоз рәйесе Ярмөхәмәт игелекле кеше. Күрәһең, Әбүбәкерҙе ғишыҡ утынан, ә Мәрйәмде уңайһыҙ хәлдән ҡотҡарыу өсөн ошо ҡылыҡты ҡылғандыр.

Бер йылдан һуң тағы Өргөнгә килдек. Көбрә инәй беҙҙе был юлы ла ихлас ҡаршыланы, ҡыуанып ҡабул итте. Хужабикәбеҙгә күңел өсөн генә булһа ла ваҡ-төйәк бүләктәр, ҡала күстәнәстәре, Әбүбәкергә бер пар һары ботинка, ваҡ буйлы зәңгәр салбар, көрән сатин күлдәк килтерҙем. Бүләктәремде тиҙерәк тапшырайым тип, Әбүбәкер тураһында һораштым. Көбрә инәй, эсенән ут бөркөгәндәй, тәрән көрһөнөп ҡуйҙы.

— Әбүбәкеребеҙ юҡ инде. Әле март аҙағында уҡ янып үлде.

Ул ошо фажиғәне һөйләне.

Комбайнсы Ғайсаның ҡапҡа төбөндә ултырырға ярата ине, бисараң. Шунда килеп ултырыуы була, өй эсендә ялҡын күтәрелә. Диуана тиһәң дә, һиҙгер йән ине. Эстә ут сыҡҡанын тиҙ үк шәйләй. Ишеккә йүгереп килә. Ишектә йоҙаҡ. Ғайсаның ҡатыны, балаларын өҫтән бикләп, ҡайҙалыр киткән. Был кире урам яҡҡа ташлана. Тап шул мәл, түр тәҙрәнең өҫкө өлгөһөн ҡыйратып, ҡаҙ осоп сыға. Уның артынан уҡ ялҡын ҡатыш төтөн бөркөлә. Сарбайлап илаған бала тауышы ишетелә. Әбүбәкер тәҙрә рамын емереп, эскә бәреп инә. Сәңгелдәктәге баланы алып тышҡа, ҡар өҫтөнә ташлай. Ғайсаның алты йәшлек өлкән улы карауат аҫтына инеп ҡасҡан була. Быуылып йүтәлләгәнен ишетеп, уныһын да таба, тәҙрәнән тышҡа ырғыта. Ул арала Әбүбәкерҙең үҙен, башынан аяғына тиклем, ялҡын ялмай. Көс-хәл менән ба-

хырың тышҡа ташлана. Әммә нығ янып өлгөрә. Янғын һүндерергә йыйылған халыҡ уны ҡарҙа аунатып ҡарай. Һуң булып сыға. Ҡыу ҡурай кеүек кенә кәүҙәгә күп кәрәкме ни? Үтәнән-үтә янып сыҡҡан. Больницаға илткән булдылар. Таңғаса ла сыҙамаған, йән биргән. Йыназаһына бөтә ауыл йыйылды. Үкереп иламаһалар ҙа, күптәр уны һыҡтап оҙатты. Шулай итеп, Әбүбәкерһеҙ тороп ҡалдыҡ. Доньябыҙҙың бер сите кителде, бер биҙәге юйылды, моңо тоноҡланды...

* * *

— Әбүбәкергә тәғәйенләнгән бүләктәрҙе нимә эшләтәбеҙ инде? — тип һораным Көбрә инәйҙән. Ул бик һәйбәт кәңәш бирҙе:

— Олатаһына илтеп тапшыр.

Иртәгеһен үк башҡарҙым был эште. Инде нығ йонсоған ҡарт, артыҡ хистәргә бирелмәй генә.

— Игелекле кеше икәнһең, рәхмәт, балаҡай, — тине.

* * *

Янғындың сығыуы шунан булған. Ғайсаның алты йәшлек улы элегерәк өлкән малайҙарҙың ырҙын артында һалам яғып, күлдә йомортҡа бешергәнен күргән икән. Шул бала өйҙәрендә йомортҡа өҫтөндә ултырған ҡаҙҙың оянан төшкәнен аңдып торған да ундағы һаламға ут төрткән. Йәнәһе, йомортҡа бешерә.

Ғайса өйөнөң урам яғы ғына янып өлгөргән, эскеһен һүндергәндәр. Әбүбәкер генә иһә бөтөнләй янды. Һыуҙан ҡурҡа ине, утта үртәлде. Йәне ожмахталыр инде...

15 июль 2004 йыл

АҢЛАТМАЛАР

МОСТАЙ КӘРИМ: БАЛАЛАРҒА — ИХЛАСЛЫҠ, ХӘҠИҠӘТ, ТОҒРОЛОҠ

Мостай Кәримдең һайланма «Әҫәрҙәр»енең дүртенсе томына уның өс һуңғы пьесалары — «Диктаторға ат бирегеҙ!», «Йәйәүле Мәхмүт» һәм «Киске табын» ингән. Шунда уҡ — матбуғатта һирәк күренгән өлкәндәр өсөн хикәйәләр.

Томдың күпселек өлөшөн балалар өсөн ижад ителгән әҫәрҙәр тәшкил итә: авторҙың 20 йәшендә ҡурсаҡ театры өсөн яҙылған «Әтәстең башынан үткәндәре» пьесаһы, «Беҙҙең өйҙөң йәме» һәм «Өс таған» повестары, шулай уҡ кескәйҙәргә, дөрөҫөрәге, тыңлаусыларға — ҙур булмаған әкиәттәр һәм хикәйәттәр.

1

1940 йыл. Өфө гәзиттәре менән әүҙем хеҙмәттәшлек иткән йәш шағир, студент Мостай Кәрим, республика матбуғатында ҡыйыу мәҡәлә менән сығыш яһай. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе: «Изге яҙмаларҙа яҙылғанса, ул ерҙә лә, күктә лә күренмәй. Ул ҡараңғы баҙға ябылған. Әммә ошо факт уның был яҡты донъяла барлығы тураһында һөйләй... 1934 йылда Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры барлыҡҡа килде. Уның һөйөнөсөнә ҡарағанда, көйөнөсө күберәк булды. Сөнки уны тиҙ оноттолар. Театрҙы ойоштороусылар: «Беҙ һиңә икмәк әүәләп бирҙек, арта-

бан үҙеңә тир түгергә тура киләсәк...», — тип дәғүә белдерҙе. Ләкин «әүәләнгән икмәк»те ай күрҙе, ҡояш алды...»

Мостай Кәрим, ысын совет журналисы булараҡ, быны менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул һүҙ менән генә түгел, ә эш менән дә ярҙам күрһәтергә — ҡурсаҡ театры өсөн пьеса яҙырға ниәтләнә. Яҙыусының, әлбиттә, ошоға тиклем драматургия өлкәһендә ап-аруҡ тәжрибәһе була. Әүәл биш йыл элек ул үҙенең ҡорҙаш-ауылдашы менән берлектә пьеса яҙа. Уны «Бесән мәле» тип атайҙар. Пьесала автор-ауылдашының бер туған ағаһының колхозда тырышып эшләүе, ә еңгәһенең ошо ҡыҙыу эш мәлендә өйҙә ҡаҡланып ултырыуы, йәнә арып-талып эштән ҡайтҡан ирен төрлө насар һүҙҙәр менән битәрләүе хаҡында һүҙ бара.

Ике егет пьесаны клуб сәхнәһендә ҡуйырға, еңгәй булған кешене фаш итергә ҡарар итә. Нәҡ ошо мәлдәрҙә Өфөлә колхоз тормошон яҡтыртҡан ҡыҫҡа пьесаларға ҡарата конкурс иғлан ителә тигән хәбәр тарала. Йәш авторҙар баш ҡалаға юллана. Әҫәрҙең ҡульяҙмаһын Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһына тапшыралар. Һуңынан Мостай Кәрим хәтерләүенсә, уны уҡырға Әкрәм Вәли үҙенә ала. Һәм, күп тә үтмәй, «Октябрь» журналының хроника бүлегендә шундай мәғлүмәт бирелә: «М. Кәрим һәм М. Хәкимовтың пьесаһы баҫылып сығыуға юл ҡуйылмай». Авторҙарҙың шатлығының игесиге булмай: уларҙың фамилиялары ни тиһәң дә ташҡа баҫылған.

Бер аҙ өлкәнәйә төшкәс Мостай Кәрим эшкә ныҡлап тотона. Оҙаҡламай уның ҡурсаҡ театры өсөн яҙылған «Әтәстең башынан үткәндәре» шиғри пьесаһы «Йәш төҙөүсе» гәзитендә баҫылып сыға. Театр пьесаны йылы ҡабул итә. Әммә һуғыш уты тоҡаныу менән, ҡурсаҡ театры репертуарында ҙур үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. «Әтәстәр һәм айыуҙар» урынына сәхнә түренә башҡа геройҙар ағыла.

Ошо турала һуңынан Мостай Кәрим үҙенең бер әңгәмәһендә: «Быны ысын драматургия тип атап булмай», — тигән һүҙ ысҡындыра. Ысынында «Әтәстең башынан

үткәндәре», Мостай Кәримдең сәхнәгә сыҡҡан тәүге әҫәре булараҡ ҡына ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Яуыз хужабикәһенә ҡаршы дау күтәргән батыр әтәс тарихы, әлбиттә, быныӊ менән генә туҡталып ҡалмай.

Үткән быуаттың һикһәненсе йылдарында «Лошариктар»ҙың авторы, танылған шағир һәм тәржемәсе Генрих Сапгир Мостай Кәрим пьесаһының русса вариантын сәхнәләштерә. Әлбиттә, әҫәрҙең сюжеты бер аҙ үҙгәртелә, хәл-ваҡиғалар йәнләнә төшә. Пьеса рус теле аша башҡа халыҡтарға тарала. Ул ваҡытта Советтар Союзында нисә ҡурсаҡ театры булғандыр, әйтеүе ҡыйын. Шуныһы: «Петушиная мельница» (яңы вариант) төрлө телдәрҙә байтаҡ театрҙарҙа уйнала. Ул хәҙер ҙә һирәкләп сәхнә түрҙәренә күтәрелә.

2008 йылда Башҡорт ҡурсаҡ театры пьесаның өсөнсө версияһын сәхнәләштерә. «Бәпембәләр ҡайҙа оса?» (Илгиз Кәримов инсценировкаһы). Тимәк, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры Мостай Кәрим менән эшләүҙән тәм һәм йәм тапҡан тигән һүҙ. Яҙыусының «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Үлмәҫбай», «Ташлама утты, Прометей!» һәм «Диктаторға ат бирегеҙ!» (режиссеры В. Штейн) әҫәрҙәре лә тамашасылар тарафынан йылы ҡабул ителә.

Һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа Мостай Кәримдең ғаиләһе матди яҡтан ҙур мохтажлыҡ кисерә. Ләкин яҙыусы баҙап ҡалмай. Ул, сирле булыуына ҡарамаҫтан, ныҡлап эшкә тотона: мәҡәләләр яҙа, тәржемә менән шөғөлләнә, командировкаларға юллана. Дөйөм алғанда, ул осорҙа күпселек башҡорт яҙыусылары ла ошондай уҡ хәлгә тарыйҙар.

Мостай Кәрим ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан (ул был мәлдәрҙә өс операция кисерә), көндәлек мәшәҡәттәрҙән арынырға форсат таба. Яҙыусы ижад итеүҙән туҡталып ҡалмай: шиғырҙар, «Туй дауам итә» драмаһын ижад итә. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа яҙылған «Беҙҙең өйҙөң йәме» повесы уның төп ҡаҙанышына әүерелә. Автор һуңғараҡ был әҙәрҙең ике иҫтәлек нигеҙендә тыуғанын иҫкә алып үтә. Уларҙың тәүгеһе фронттағы хәл-ваҡиғаларға бәйле. Яҙыусы төнгө алыштан һуң бер

башҡорт һалдатының нейтраль полосанан алты йәшлек ҡыҙы һәм яңы тыуған сабыйы булған яралы йәш ҡатынды ҡотҡарыш ҡалыуына шаһит була. Улар эңер мәлендә үк фашистарҙан партизандар яғына ынғайлай, ләкин немецтар уларға ут асырға өлгөрә. Һалдат ҡотҡарған кешеләрен госпиталгә илтә. Ҡатын йән бирә. Һуңынан һалдат ауылдағы ҡатынына хат яҙа. Днепропетровск ҡалаһына килеп, етем ҡалған ҡыҙсыҡты өйгә алып ҡайтыуын белдерә.

Мостай Кәрим был кешеләр хаҡында башҡаса бер нәмә белә алмай, әммә уларҙың аяныслы яҙмышы яҙыусыға оҙаҡ тынғылыҡ бирмәй.

Икенсе хәл-ваҡиғалар Шафран шифаханаһына барып тоташа. Мостай Кәрим унда 1946 йылда дауалана. Ул урындағы баҙарҙа ете йәштәрҙәге күрше ауыл малайы менән таныша. Был малай шул тирәлә тамаҡ туйҙырып йөрөгән була.

Һуңыраҡ Мостай Кәрим балалар яҙыусыһы һәм тәнҡитсе Сергей Баруздинға яҙған хатында ошо малайҙы телгә алып үтә. «Малай телгә әүәҫ. Ул яҡын туғандары, үҙе, тереләр һәм үлеләр хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләй. Баланың һөйләү манераһы, тауышы, ым-ишара хәрәкәттәре минең күңелемә уйылып ҡалды. Ул «Беҙҙең өйҙөң йәме»нең төп геройына әүерелде. Ҡорһағы ас, яланғас, зәңгәр күлдәк тураһында хыялланған сабый бала бөтә нәмә тураһында шул тиклем тәфсилләп һөйләй... Баҙарҙан беҙ уға зәңгәр күлдәк һатып алып бирҙек. Айырылыштыҡ, башҡаса күрешә алманыҡ».

Шулай итеп, баҙарҙа йөрөгән малай һәм алыҫтағы ҡыҙыҡай образы автор күңелендә берләшә. Оксана — сюжетты, ә Йәмил хикәйәләү тонын барлыҡҡа килтерә.

1951 йылда «Беҙҙең өйҙөң йәме» повесы айырым китап булып баҫылып сыға. Дөйөм тиражы — 4000 дана. Китаптың тышы бигүк күҙгә ташланмай. Ҡағыҙы насар, һүрәттәре сағыу түгел. Әммә йәш уҡыусы китаптың төҫһөҙ булыуына артыҡ иғтибар итмәй. Уның күңеленә башҡорт малайы Йәмилдең, украин ҡыҙы Оксананың тарихы хуш килә.

Тәүге ҡульяҙмала повесть «Беҙ байраҡтар йөрөтәрбеҙ» тип аталған. Ҡульяҙма таҙа аҡ ҡағыҙға күсереп

яҙылған. Был эш яҙыусының ҡатыны Рауза Кәримова тарафынан башҡарылған. Әҫәрҙең бер нәмәһе лә үҙгәртелмәгән. Тик һуңынан ғына ул «Беҙҙең өйҙөң йәме» тип исемләнә.

Мәскәүҙә «Детская литература» нәшриәтендә повесть ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Авторҙан уның ҡулъяҙмаһын ебәреүҙе һорайҙар. СССР халыҡтарының милли әҙәбиәт бүлеге мөхәррире башҡорт телен һәйбәт үҙләштергән Ғәлиә Рахман ҡыҙы Кәримова ҡулъяҙма өҫтөндә етди эшләй. Ул әҫәргә ҡарата уй-фекерҙәрен авторға түбәндәгесә хат юлдары аша белдерә (1950 йыл, 28 сентябрь): «Миндә шик тыуҙырған әйберҙәр бар. Әлбиттә, мин уларҙы бер кемгә лә көсләп тағырға йыйынмайым... Ҡыҙыҡайҙың (Оксананың) әсә телен онотоуы һәм Петроның тыуған яғын ҡалдырып, сит тарафтарҙа ҡалыуы бигүк ышандырмай». Был иҫкәрмәләр, әлбиттә, яҙыусы тарафынан йылы ҡабул ителә.

Шуны ла билдәләп үтеү мотлаҡ — был мәлдәрҙә Мостай Кәрим ысын шағир булып өлгөрә, ә прозаға тәүләп тотона.

Повестың яңы версияһы яҙыла. Әйткәндәй, ижадсылар үҙҙәренең әҫәрендәге һуңғы фразаларға айырыуса иғтибар йүнәлтә. Шуға күрә повестың беренсе һәм икенсе вариантындағы һуңғы һөйләмдәрен сағыштырып ҡарайыҡ. Тәүгеһе: «Ана улар Петро ағай менән икәү, тыҡрыҡтан сығып, беҙгә табан киләләр. Петро ағай һеңлемде етәкләп алған. Оксананың сәсендә ҡыҙыл таҫманың елберләгәне алыҫтан уҡ күренеп тора. Ә тегендә, түбән остағы клуб башында, ҡыҙыл флаг ярһып-ярһып талпына. Беҙ үҫкәс, Оксана менән икебеҙ ҙә ошондай ҙур флагтарҙы алып китербеҙ әле». Икенсеһе: «Мин һаман да урман өҫтөнә һибелеп ҡалған төтөнгә ҡарайым. Был — Оксананы алып киткән паровоз төтөнө... Алыҫта паровоз ҡысҡыра. Минең баш осомда аяҙ күк — һеңлем Оксананың күҙҙәре төҫлө, асыҡ зәңгәр күк йөҙө. Оксана... һеңлем, беҙҙең өйҙөң йәме инең бит һин...» Әйткәндәй, икенсе вариант ныҡ тойғолар менән һуғарылған.

Яҙыусы «рухи күтәренкелек» мәлен бик тиҙ кисерә. Ул балалар әҙәбиәтенә икенсе күҙлектән сығып ҡарай. Уны әҙәбиәттә балаларҙың ҡайғыһын, әсе яҙмышын һү-

рәтләгән әҫәрҙәрҙең юҡҡа сыға барыуы ныҡыраҡ борсой. Яҙыусы уйлауынса, йәш уҡыусыла иң тәүҙә башҡаларҙы йәлләү һәм уларҙың ҡайғыһын уртаҡлаша белеү тойғоларын тәрбиәләү өсөн улар хәсрәте тураһында бик һаҡ яҙырға кәрәк.

Мөхәррир Ғәлиә Кәримова «Беҙҙең өйҙөң йәме»нә һәйбәт тәржемәсене йәлеп итә. Ул — күренекле балалар яҙыусыһы, «Тылсымлы һүҙ», «Васек Трубачев һәм уның дуҫтары» повестарының авторы Валентина Осеева.

«Беҙҙең өйҙөң йәме», шулай итеп, барлыҡ илдәргә тарала.

3

1950 йылдың йәйендә Мостай Кәрим ғаиләһе менән Учалы районының Өргөн ауылына юл тота. Ул, уйсанланып ҡарағай урмандарын гиҙә, тауға күтәрелә, сәғәттәр буйы күл уртаһында балыҡ ҡармаҡлап ултыра. Һаулығы ла яҡшыра бара. Шул йылдарҙа йәй айы бик эҫе, ҡоро килә. Мостай Кәрим хафалана. Кешеләргә афәт килгәндә, үҙен эшһеҙ кеше кеүек итеп хис итә. Ул мәлдәрҙә әҙип «Беҙҙең өйҙөң йәме»нең аҙағына килеп етә. Күңелендә яңы әҫәр — «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы тыуа. Ә геройҙарҙы алыҫтан эҙләргә түгел — улар янда ғына йөрөй. Мәҫәлән, тиктормаҫ, шаян күрше малайы Вәзир. Уның үҙенә күрә йыры бар.

> *Хорошо, хорошо, замечательная,*
> *Сознательный булыу кәрәк обязательная...*

«Был шуҡ малай минең күңелемә шул тиклем ояланы — мин уның тураһында повесть яҙҙым», — тип хәтерләй һуңыраҡ Мостай Кәрим.

Әйткәндәй, автор икенсе повесты ни бары ун йылдан һуң ижад итә. Был ике әҫәрҙе тиңдәш ауыл малайҙары тураһындағы дилогия тип атарға мөмкин. Уйлап ҡарағыҙ: «Беҙҙең өйҙөң йәме»н бәйән итеүсе Йәмилгә 1945 йылда ете йәш була, ә «Өс таған» геройҙарына 1950 йылда ун ике йәш, тимәк, улар — тиҫтерҙәр.

«Өс таған»да ваҡиғалар Бөркөтлө ауылында бара. Әҫәрҙең төп геройҙары — малайҙар изге эш атҡарырға — донъяла иң матур төбәктәрҙең береһе — Бөркөтлөнө һәләкәттән ҡурсаларға ниәтләнә. Улар — зиһенле, саф күңелле, матур уй-хыялдар менән янып йәшәйҙәр. Күңелендә — уйын түгел, ә бөйөк эштәр — тәбиғәтте һәләкәттән ҡотҡарыу, яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш...

4

Шуныһы ҡыҙыҡ: үҙен, иң тәүҙә шағир тип иҫәпләгән Мостай Кәрим («Сәйет хаҡында хикәйәт» (1947) поэмаһын һәм тағы бер нисә шиғырҙарын иҫәпкә алмағанда), балалар өсөн шиғри әҫәрҙәр бөтөнләй яҙмаған тиерлек. Ә шулай ҙа һирәкләп хикәйәләр, әкиәттәр ижад иткән. Мәҫәлән, уның 1965 йылда кескәй Әлфиәнең мажаралары тураһында ҙур булмаған «Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» исемле хикәйә-әкиәттәр китабы донъя күрә. Унда Әлфиә исемле ҡыҙыҡай берсә өйҙәгеләргә үпкәләп, алыҫ тарафтарға сығып китергә йыйына, ләкин ҡайҙа барырға белмәй, икеләнеп ҡала. Йә булмаһа уны ҡайынлыҡта үҫкән ер еләге нисек итеп ҡыҙарып бешкән еләктәрҙе тырызға тултырырға өйрәтә. Берсә Ҡыш бабай үҙенең бала саҡтағы мажараларын бәйән итә...

Һуңғы йылдарҙа Мостай Кәримдең кескәйҙәр өсөн яҙылған ҡыҫҡа әкиәттәре, хикәйәттәре «Аҡбуҙат» журналында баҫылып сыға. Әҫәрҙәрҙә хәл-ваҡиғалар шағирҙың тыуған төйәгендә — Дим йылғаһы буйында, Келәш ауылы тирәһендә, Ключарево дача ҡаласығында бара. Персонаждары ла — тәрбиәле бәләкәй турғай, һайыҫҡан, Наҙыяҙ йылғаһының Димгә ҡойған ерендә йәшәгән аҡ сабаҡ һәм башҡалар.

Әҫәрҙәр мауыҡтырғыс, уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә. Автор, күрәһең, был уларҙы кескәйҙәргә ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәре ҡысҡырып уҡып, үҙ балаларына әҫәрҙең айышына төшөнөргә ярҙам итәсәген күҙ уңында тотҡан. Быны яҙыусы үҙе лә раҫлай: «Ысынында иһә мин хәйләкәр эш итәм: кескәйҙәр өсөн яҙһам да, олатай һәм өләсәйҙәргә иҫәп тотам. Балалар ихлас булыуҙы ярата.

Улар алдында ярамһаҡланырға ярамай. Ихласлыҡ — хәҡиҡәткә, үҙ-үҙеңә тоғро булып ҡалыу тигән һүҙ».

Ғөмүмән, кескәй жанр Мостай Кәримгә бигүк хас түгел. Яҙыусы үҙенең оҙайлы ижад ғүмерендә (71 йыл, балалар өсөн хикәйәләрҙе иҫәпкә алмағанда) өлкәндәр өсөн ни бары тиҫтәгә яҡын хикәйә яҙған. «Йәләлетдин атай» һәм «Әбүбәкер» — шуларҙың иң сағыу үрнәктәре.

Төҙөүселәр

ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

Беҙҙең өйҙөң йәме. Повесть — 51 — **«**Мостай Кәрим. Беҙҙең өйҙөң йәме. Повесть. Өфө, Башгосиздат — 1951». Мөхәррире Ә. Харисов.

Өс таған (урта йәштәге мәктәп балалары өсөн повесть) — 62 — «Мостай Кәрим (урта йәштәге мәктәп балалары өсөн повесть). Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1962». Мөхәррире М. Игебаева.

Теге яҡҡамы, был яҡҡамы? — 65 — «Мостай Кәрим. Теге яҡҡамы, был яҡҡамы? — Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1965». Мөхәррире Х. Бикҡолов.

Һайланма әҫәрҙәр. Т. 2. Пьесалар. Повестар — 66 — «Мостай Кәрим. Һайланма әҫәрҙәр. Т. 2. Пьесалар. Повестар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1966». Мөхәррире М. Игебаева.

Әҫәрҙәр. Биш томда. 2-се том. — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. Биш томда. 2-се том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1971». Мөхәррире М. Игебаева.

Әҫәрҙәр. Биш томда. 4-се том. — 72 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. Биш томда. 4-се том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1972». Мөхәррире М. Игебаева.

Әҫәрҙәр — 87 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. II том. Пьесалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте — 1987». Мөхәррире М. Игебаева.

Әҫәрҙәр — 96 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. II том. Пьесалар. Өфө, «Китап» — 1996. Мөхәррире М. Игебаева.

Әҫәрҙәр — 97 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. II том. Пьесалар, повестар, хикәйәләр. Өфө, Башҡортостан «Китап» нәшриәте — 1997». Мөхәррире С. Шәрипов.

Әҫәрҙәр — 98 — «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. IV том. Повестар, хикәйәләр, хәтирәләр. Өфө, Башҡортостан «Китап» нәшриәте — 1998». Мөхәррире Ф. Ноғоманова.

Беҙҙең өйҙөң йәме. — «Мостай Кәрим. Беҙҙең өйҙөң йәме. Повестар, хикәйәләр. Өфө, Китап — 2003». Мөхәррире А. Дилмөхәмәтова.

Радость нашего дома. — 2011. — «Мустай Карим. Радость нашего дома. Повести и рассказы. — Уфа: Инеш, 2011». Ответственный за выпуск А. Фенин.

БАДТ — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры.

ВАҠЫТЛЫ МАТБУҒАТТА:

«Ағиҙел» — (1949 йылға тиклем — «Октябрь», 1960 йылға тиклем «Әҙәби Башҡортостан») — Башҡортостан Яҙыусылар союзының айлыҡ журналы.

«Аҡбуҙат» — республика балалар журналы.

«Башҡортостан ҡыҙы» — республика ҡатын-ҡыҙҙар һәм ғаилә өсөн айлыҡ журнал.

«Вечерняя Уфа» — республиканская общественно-политическая газета.

«Дружба народов» — российский ежемесячный литературно-художественный и общественно-политический журнал.

«Истоки» — республиканский информационно-публицистический еженедельник.

«Йәш төҙөүсе» — (1959 йылдан алып «Башҡортостан пионеры», 1991 йылдан — «Йәншишмә») — республика балалар һәм үҫмерҙәр газетаһы.

«Нева» — российский ежемесячный литературный журнал.

«Пионер» — (1991 йылдан — «Аманат») — республика балалар һәм үҫмерҙәр журналы.

«Республика Башкортостан» — республиканская общественно-политическая газета.

«Һәнәк» — республика айлыҡ сатира һәм юмор журналы.

ДРАМАЛАР

Диктаторға ат бирегеҙ!

«Ағиҙел», 1980, № 4. «Әҫәрҙәр» — 96.

Премьера — БАДТ (1981, 17 ноябрь).

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Шамил Рәхмәтуллин (Диктатор), БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Роза Кәримова (Би-маза).

Режиссеры Л. Вәлиев, рәссамы Т. Еникеев, композиторы Р. Ғәзизов.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры (1981). Режиссерҙары В. Штейн, П. Мельниченко; рәссамы М. Грибанова, музыкаль яҡтан биҙәүсе А. Березовский.

Рецензиялар: В. Жидков. Положительный герой — смех. — «Вечерняя Уфа», 1981, 21 ноября. Р. Киреев. Смех сквозь линзу. — «Ленинец», 1981, 21 ноября. Ғ. Аллаяров. Фәһемле спектакль. — «Совет Башҡортостаны», 1981, 22 ноябрь. Г. Агишева. Безумие без маски. — «Ленинец», 1981, 26 октября. М. Гайнуллин. Диктатор. Үзе һәм башкалар. — «Кызыл таң», 1981, 31 декабрь.

Йәйәүле Мәхмүт

«9.01.80. — 20.03.1981». «Ағиҙел», 1982, № 2. «Әҫәрҙәр» — 97. «Нева», 1982, № 1 («Пеший Махмут», И. Кәримов тәржемәһе).

«Көндәлектәр»ҙәге яҙыу*: «Йәйәүле кеше» тигән әҫәр яҙырға ине. Беренсе эпизод. Көҙ. Ҡойоп ямғыр яуа. Юл бысраҡ. Йәйәүле кешене еңел машинаға ултырған әҙәмдәр ҡыуып етә, бер аҙҙан машина буксовать итә. Йәйәүле баһадир машинаны этәреп соҡорҙан сығара. Машинала һөйләшеү китә. «Урын бар бит, әйҙә, уны ултыртып алайыҡ», – ти берәүһе. Икенсеһе ҡаршы төшә: «Итектәре теҙенә тиклем батҡаҡҡа батҡан. Бөтөн машинаны бысратасаҡ», – ти. Тиҙ үк ҡуҙғалып китәләр. Йәйәүле кеше, тегеләргә изгелеге тейгәнгә ихлас күңелдән ҡыуанып, ҡул болғап ҡала: «Юлығыҙ уңһын, хәйерле булһын!» – 5 июль, 1977 йыл».*

Премьера — БАДТ (1983, 1 февраль).

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Гөлли Мөбәрәкова (Мәҙинә), БАССР-ҙың атҡаҙанған артистары Олег Ханов (Мәхмүт Юлбирҙин), Заһир Вәлитов

(Инсаф Мисбахов), БАССР-зың атҡазанған артисткаһы Таңсулпан Бабичева (Зәмзәгөл).

Режиссеры Р. Исрафилов, рәссамы Т. Еникеев, композиторы Р. Хәсәнов.

Рецензиялар: Д. Байтерякова. Быть человеком. — «Театральная жизнь», 1982, № 18. Р. Тойғонов. «Йәйәүле Мәхмүт» атлай сәхнәгә. — «Совет Башҡортостаны», 1983, 26 ғинуар. М. Мөлеков. Жәяүле Мәхмүт. — «Кызыл таң», 1983, 9 февраль. З. Нургалин. Возвышение человека. — «Советская Башкирия», 1983, 24 февраля. Г. Шафиков. Языком метафоры. — «Вечерняя Уфа», 1983, 24 февраля. А. Андреева. Бессмертный образ совести. — «Истоки», 2006, 27 декабря.

Киске табын

«28.02.1992». «Ағиҙел», 1993, № 11. «Әҫәрҙәр» — 97. «Көндәлектәр»ҙәге яҙыуҙар: «Сәйер төш күрҙем. Әле мин һыҙғылап ятҡан «Киске табын»ды ниндәйҙер бәләкәй театр сәхнәгә ҡуйған, имеш. Рауза ла уйнай. Беренсе акт аҙағына залда берәү ҙә ҡалманы, таралып бөттө. Ә сәхнәлә шаулайҙар, көлөшәләр. Сәхнәгә менеп, залға ҡараным. Баҡһам, шаршауҙы асырға онотоп уйнайҙар икән. Тамашасылар тамашаны күрмәгәндәр икән. Яҙылып бөтмәгән пьесаға алдан үк алама хөкөм сығыуымы был. — 26.01.91. Переделкино».

* * *

«Киске табын»дың премьераһы булды. Элекке көндө тапшырыу спектаклен ҡараным. Спектаклде бөтөнләй ҡабул итмәнем. Тәүлек буйы эсем бошоп йөрөнөм. Премьераны күргәндән һуң тыныслана төштөм. Тамашасылар һәйбәт ҡабул итте. Оҙаҡ алҡышланылар. Йәш режиссер Азат Нәҙерғолов талантлы егет. Яңы ғына уҡыуын бөтөрөп ҡайтҡан. Шуға күрә фекерҙе үтә ҡәтғи йөрөтә. Театрҙың шартлы нәмә икәнен миңә нығытып төшөндөрә. «Яҙыусы халҡы сәйер, сәнғәттең үҙенсәлеген аңламай», — ти. Аңламаусыларға, әлбиттә, мине лә индерә. Яҡшылап аңлашҡандан һуң, ул үҙе лә ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлап ҡуя. Төҙәтәһе ерҙәрен төҙәтергә вәғәҙә итә, театр сәнғәтендә минең дә нимәлер аңлауыма, аңлай алыуыма аптырап та ҡуя. — 14.01.94.»

* * *

«Киске табын»дың икенсе спектаклен ҡараным. Нәбиуллин менән Ирсаева уйнаны. Һәйбәт. Алпамышты йәш егет Хәкимов башҡарҙы. Был юлы кимәл юғарыраҡ булды. Партер тулы ине. Спектаклдәр опера театрында бара. Драма театры янғындан һуң ремонтта. — 15.01.94.»

Премьера (БАДТ, 1994, 13 ғинуар).

Төп ролдәрҙә: РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Заһир Вәлитов (Артыҡов), РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Нурия Ирсаева, БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Илһөйәр Ғизетдинова (Йәннәт-Жаннет), артист Ғаяз Алтыншин (Алпамыша).

Режиссеры А. Нәҙерғолов, композиторы И. Хәлилов, рәссамы Т. Еникеев.

Рецензиялар: Т. Килмөхәмәтов. Хупларғамы? Ғәйепләргәме? — Уйланырға!.. — «Совет Башҡортостаны», 1994, 18 февраль; Г. Иксанова. Долгий путь к себе (о спектакле Мустая Карима «Вечернее застолье») — «Истоки», 2003, 2 июля; А. Докучаева. Очищение любовью. — «Республика Башкортостан», 2003, 3 июля;

Премьера (Өфө дәүләт татар «Нур» театры, 2003 йыл, июль). Режиссеры Ә. Сафиуллин, рәссамы Д. Хильченко, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе Н. Дауытов, хореограф Р. Мөхәмәтшина.

Төп ролдәрҙә: Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисткаһы С. Сираева (Ҡорбанбикә), С. Нурисламов (Әхмәтша), З. Әсәҙуллина (Йәннәт-Жаннет), артист И. Шәмсетдинов (Алпамыша), Р. Зарипова (Зәрзәриә).

БАЛАЛАР ӨСӨН ЯҘЫЛҒАН ӘҪӘРҘӘР

Әтәстең башынан үткәндәре

«Йәш төҙөүсе», 1940, 13, 17 июль. «Әҫәрҙәр» — 71.

Ҡурсаҡ театрҙары өсөн яҙылған пьеса. Автор был әҫәрен егерме йәшендә ижад иткән.

Премьера (Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры, 1940. Режиссеры Н. Мусина, художнигы О. Штейнкопф, композиторы Х. Ибрагимов).

Һуғыштан һуң Сәйфи Ҡудаштың әҫәрҙең яңы вариантына ҡарата яҙылған рекомендацияһы: *«Әкиәт темаһы-*

на яҙылған был пьесаның нигеҙенә – берләшеп, туғанлашып ҡыйынлыҡты, ҡаршылыҡты еңеү һәм үҙ иптәштәрен ҡотҡарыу өсөн ныҡышмалы рәүештә көрәшеү идеяһы һалынған.

Әҫәр уҡыр өсөн дә, ҡурсаҡ театры сәхнәһендә ҡарар өсөн дә бик күңелле һәм балалар күңелен шөғөлләндергес итеп яҙылған. Балалар һәм ҡурсаҡ театрҙары бындай әҫәрҙәргә бик мохтаж икәнлекте иғтибарға алып, быны мотлаҡтан баҫтырып сығарырға кәрәк. 7.08.1946 йыл».

1980 йылдарҙа (рус телендә — тәрж. Генрих Сапгир) бөтә ил ҡурсаҡ театрҙарында танылыу яулай.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры (1980, «Әтәс тирмәне» исемендә сәхнәләштерелә. Режиссеры П. Мельниченко, художнигы О. Воронцова, композиторы Ш. Ҡолбарисов).

Шул уҡ театрҙа (2010, «Бәпембәләр ҡайҙа оса?» И. Кәримов версияһы). Режиссеры һәм рәссамы Н. Байбурин.

Беҙҙең өйҙөң йәме

«1947 — 1949». «Беҙҙең өйҙөң йәме» — 1951.

Тәүге баҫмала әҫәр ун биш бүлексәнән тора. Ул «Һөйләйемме һеҙгә?» тип исемләнгән бүлексә менән башлана:

«Элек беҙҙең өйөбөҙ бәрәү генә ине. Хәҙер икәү. Әле ошо яҙҙы ғына яңыһын бөтөрөп керҙек. Иң ҡыҙығы өйҙө һалған саҡта ине ул. Бөтә ерҙә бүрәнәләр, таҡталар ята; шуларҙың береһенән икенсеһенә һикереп, теләһәң күпме уйна. Тик аяҡҡа шырпы ҡаҙалыуҙан ғына һаҡ булырға кәрәк. Уныһы ла онотолоп китә шул, бер уйнай башлағас. Яҙ буйына беҙҙең урам балалары рәхәтләнде генә. Яратам мин йорт һалғанды. Ҡайһы саҡта мин үҙем дә таш һарайҙар ҡороп ебәрәм. Тик ысынды түгел шул.

Беҙҙең өйөбөҙ икәү тигәйнем бит. Ошо ике өйҙә нисә кеше торалыр тип уйлайһығыҙ? Беҙгә килеп йөрөмәгәс, белмәйһегеҙҙер шул. Улай булғас, үҙем генә әйтәйем инде. Ошо ике өйҙә беҙ биш кеше торабыҙ. Иң олоһо, билдәле, атай. Уның ауыҙ ситтәренән аҫылынып төшкән ҡара мыйығы бар. Атайым бер ҙә юҡҡа ла шул мыйығын һыйпап ала. Әсәйем әйтә: «Атайың ул мыйығын һуғыштан алып ҡайтты», – ти. О, минең атайыммы, һуғышта гел еңеп кенә йөрөгән ул. Миҙал менән тулы ине уның күкрәге фронттан ҡайтҡанда. Хәҙер инде миҙалдар әсәйемдең яңы

өйҙәге анау аҡ ҡалайлы ҙур һандығында. Фронттан ҡайтҡас та атайым мыйығын борғолап өйҙә генә ултырмай. Ул йәйен дә, ҡышын да бригаданың аттарын ҡарай. Мин үҙем дә бөтә аттарҙың исемдәрен, ҡылыҡтарын белеп бөтөрҙөм инде. О-о-о, беҙҙең аттармы...

Иң олобоҙ атайым тигәйнем бит. Унан әсәйем инде. Уның уң битендә миңе бар. Әсәйемдең миҙалы бераү генә. Былтыр районда биреп ҡайтарҙылар. Әсәйем бер ҙә тик тормай. Мин уның йоҡлағаа ятҡанын да, йоҡонан торғанын да күргәнем юҡ. Ул йәй буйына баҫыуҙан ҡайтмай. Звено башлығы булғас, эше күптер инде. Уның звеноһында бик уңған ҡыҙҙар эшләй икән. Әсәйем шулай ти. Ул ҡыҙҙарҙың мин бөтәһен дә беләм. Шаяндар ҙа, йырсылар ҙа улар. Күрше Мансур бабай әйтә миңә: «Әсәйеңдең звеноһы быйыл да шәпкә сыҡмаҡсы бит әле», – ти. Мансур бабай бушты һөйләй торған кеше түгел ул.

Өсөнсөһө Петро ағай. Ул бары былтыр ғына беҙгә ҡайтты. Ул элек ҡайҙа булған тиһегеҙме? Уныһын мин үҙем дә аҙаҡтаныраҡ ҡына белдем әле. Ваҡыты еткәс, һеҙ ҙә белерһегеҙ. Петро ағай йыуан Ғәби ағайым менән тимерлектә эшләй. Ул, минең баш дәүмәле сукеште күтәреп, ҡыҙған тимергә килтереп һуҡһамы, – тимерең коймаҡ ҡалынлығы ғына ҡалыр.

Дүртенсеһе менән бишенсеһе – беҙ икебеҙ: мин дә Оксана. Мин тығыҙ менән барам, ә Оксананың яңы һигеҙе тулып килә. Оксана ҡыҙ булһа ла минең саҡлы. Әллә ниңә шәп үҫеп булмай шул. Әсәйем әйтә: «Йәмил, әллә һин бик күп һөйләгәнгә үҫмәйһең инде», – ти. Гел һөйләшеп кенә лә тормайым тороуын, әллә күпме ваҡыттар өндәшмәй ҙә йөрөгәнем бар. Ахыры, үҫеү һөйләшмәүгә ҡарап ҡына шәбәймәйҙер. Ә Тимертауҙағы өләсәйем, килгән һайын, гел бер һүҙҙе әйтеп, алмашлап икебеҙҙең арҡабыҙҙан һөйә: «Беҙҙең Йәмил, тау имәне кеүек, әкренләп үҫһә лә, төптән ныҡ, – ти. – Ә Оксанабыҙ инде, ҡайын кеүек, буйға тартты». Өләсәй белеп әйтә инде ул. Беҙ Оксана менән икебеҙ өләсәйҙең камзул кеҫәләренә ҡулдарыбыҙҙы тығып алабыҙ. Унда һәр ваҡыт шәкәр киҫәктәре, йә бүтән берәй тәмле нәмә була. Өләсәй: «И, зирәктәр», – тип әкрен генә көлә.

Беҙҙең өйҙә бәләкәстәр – Оксана менән мин, тигәйнем бит. Бәләкәстәр булһаҡ та, беҙгә лә арыу ғына өлөш төшә.

Уларҙың һәр ҡайһының ике ҡулына бер эш: атайым аттар янында, әсәйем баҫыуҙа, Петро ағай тимерлектә. Ә бына Оксана менән беҙҙең эште тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Өй ҡарайбыҙ, быҙау ҡыуабыҙ, ҡаҙҙар һаҡлайбыҙ, тауыҡ себештәрен ашатабыҙ, картуф баҡсаһын утайбыҙ. Әсәй эргәһенә баҫыуға ла, атайҙың аттары янына ла, Петро ағайҙың тимерлегенә лә йүгереп барып ҡайтабыҙ. Һәр ҡайһының бит һалҡын айран эскеһе килә эҫелә. «Әллә һеҙ дүртәүме? – тип һорай бер көн бригадир Баҙамша бабай, – әле генә арыш баҫыуында күргәйнем үҙҙәрен, ни арала тимерлеккә лә килеп еткәндәр». Беҙ йүгергәндә шау ғына етәкләшеп йүгерәбеҙ. Беребеҙ абынып китһә, икебеҙ ҙә ҡолап төшәбеҙ. Билдәле, йышыраҡ мин абынам инде. Йығылғас, ҡайһы саҡта көләбеҙ. Илашып алған саҡ та була. Торабыҙ ҙа тағы етәкләшеп китәбеҙ.

Эш тураһында ғына һөйләгәс, шау эшләп кенә тора-ларҙыр инде былар, тип уйлай күрмәгеҙ тағы. Эштән башҡа, күпме уйын уйнайбыҙ беҙ. Беҙҙең оста балалар – донъя. Бер йыйылып алһаҡ, бөтә урамды дер һелкетәбеҙ. Минең иң яратҡан уйыным – сәпәмә туп уйыны. «Түйғансы уйнап ҡалһындар балалар, – ти атайым, – тиҙҙән бит улар яңынан һабаҡҡа китәсәктәр». Беҙ быйыл Оксана менән икебеҙ ҙә икенсе класҡа барабыҙ. Көн дә һанап ҡына торабыҙ – тағы алты кис ҡунғас та, беренсе сентябрь була. Китап-дәфтәрҙәребеҙҙе беҙ әллә ҡасан уҡ әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ҙурҙарҙың беҙгә ниндәй бүләктәр алғанын да белдек инде. Мәктәпкә кейеп барғанда, нимә икәнен үҙегеҙ ҙә күреррһегеҙ әле.

Беҙ бына шулай бишәүләшеп йәшәйбеҙ. Һеҙ, моғайын, беҙҙе элек-электән үк шулай бишәүләшеп йәшәгәндәр тип уйлайһығыҙҙыр әле. Улай түгел шул. Беҙ башта икәү генә инек, унан өсәү булдыҡ, унан дүртәү, ә иң һуңынан бишәү булдыҡ. Ошо турала һөйләйемме һеҙгә?»

Аҙағы («Атай һөйләй»): *«Ҡояш алыҫ тау артына төшөп бара. Һай соҡор буйында аттар йәш ҡурпы ашап йөрөй. Уларҙың күләгәләре оҙон булып ергә төшә. Яңғыҙ имән төбөндә алма-сыбар ат баҫып тора. Уның исеме Атака. Ул ат та, атайҙар кеүек үк, фронтта йөрөп ҡайтҡан. Атаканың янбашына һуғышта пуля тейгән. Ул юртҡанда әле лә саҡ ҡына аҡһап китә. Атака тирәһенә тай-тулаҡ йыйылған. Ул аҡрын ғына башын ҡағып ала, ә*

тегеләре койроктарын да кыймылдатмай тик торалар. Бәләкәс аттарға Атака һуғышта булған хәлдәрҙе, үҙенең күргәндәрен һөйләй, ахыры. Нимә һөйләй икән ул акһак алма-сыбар ат?»

Атай кояшка каршы таш өҫтөндә ултырып тора. Кояштың кыҙыл нурҙары битенә төшә. Атайҙың йөҙө ялкын бөркөп торған һымак күренә миңә. Уның оҙон мыйыктары дөрләп янып китмәһә ярар ине тип шикләнеп тә куям. Үҙем үлән өҫтөн кырын ятып, атайҙың һүҙҙәрен тыңлайым. Ул ашыкмай ғына, тамағын кыра-кыра һөйләп алып китә:

«...Беҙҙең илебеҙҙә Украина тигән як бар. Унда ла беҙҙең туғандарыбыҙ йәшәй. Оксана менән һинең кеүек бәхетле, шат балалар үҫә. Фашистар иң башта ана шул ерҙәрҙе яндырҙылар, ундағы ауылдарҙы, калаларҙы емерҙеләр, ата-әсәләрҙе балаһыҙ, бала-сағаларҙы ата-әсәһеҙ етем калдырҙылар. Шуға бөтә ил халкының асыуы килде. Беҙҙең илдең барлык кешеләре берҙәм булып, фашистарға каршы һуғышырға тотондолар. Һуғыштылар ҙа, еңделәр ҙә.

Бына был хәл шул Украина ерендә булды.

Беҙ оборона һыҙығының иң алдынғы окоптарында ултыра инек. Көн буйы туктауһыҙ ябалак кар яуҙы. Кискә тиклем тип әйтерлек немецтар ҙа, беҙ ҙә тыныслык боҙманык. Төшкө аш килтерҙеләр. Фронттың киске ашы ла кис ашала инде ул. Һалдаттар котелоктарын тотоп, траншея буйлап йүгерештеләр. Икебеҙ өсөн дә аш алырға киткән күршем Николай бөтә кешенән һуң килде. Николай беҙҙән дә ары, Себер яғының кешеһе. Ул һәр бер нәмә тураһында үҙенең һүҙен әйтеп калырға ярата. Бик һүҙсән әҙәм. Ә һуғыш башланып китһә, ауыҙ асып өндәшәсәк түгел. Һөйләшкән кешене лә яратмай. «Һуғыш – һуған баҙары түгел ул, теште кыҫырға кәрәк һуғышта, – ти».

– Нишләп, Николай якташ, бик оҙак, әллә бутканы үҙең бешереп торҙоңмо? – тип һораным мин.

– Повар менән һүҙгә килешеп алдым әле: буткаһының быуы ла сыкмай бит. Һалдат буткаһы шундай була тиме?

Беҙ, итек кунысларыбыҙҙан кургаш кашыктарыбыҙҙы алып, бутканан ауыҙ итергә лә өлгөрмәнек, окоптарҙан бер-бер артлы өс мина ярылды. Тағы өс, тағы, тағы... Ни ғәжәп был? Ниңә немец ике аралағы буш ергә ата?

Николай шинель итәге менән котелокты капланы. Мина якынырак төшһә, бутҡаға балсыҡ койолоуы бар бит. Һалдат бутҡаның ҡәҙерен белә ул.

Бер аҙҙан тирә-як йәнә тынып ҡалды. Ләкин беҙ бутҡаға ҡашыҡ та тыҡманыҡ. Баштарыбыҙҙы окоптан сығарып, дошман яғын күҙәтә башланыҡ, ҡар яуған саҡта бер-бер төрлө эш ҡылырға уйламағайы ҡәһәрең», – тип уйланым мин. Байтаҡ ваҡыт уҙҙы, ләкин дошман яғында шылт иткән тауыш та булманы. Ҡар томалаған тигеҙ ялан әүәлгесә йәнһеҙ һәм серле ине. Күҙ бәйләнә башланы. Мин тәмәке төрөргә окоп төбөнә ултырҙым. Николай ҡапыл минең иңбашҡа төрттө.

Ҡара әле, ҡара, анау ҡараҫҡыл тапты, – ул бармағы менән бушлыҡҡа төртөп күрһәтте, – ҡыймылдай түгелме һуң?

Мин ап-аҡ яланға күҙ ташланым. Ысынлап та, дошман менән беҙҙең араларғы ҡалҡыулыҡтың һул яғында ниндәйҙер ҡараҫҡы күренә, берсә юғалып ҡала. Бер аҙҙан һуң ҡараҫҡы ҙурая төштө. Беҙгә табан килә бит был нәмә. Башта беҙ уны бесәй йәки эттер тип уйланыҡ (бесәйҙәрҙең һәм эттәрҙең немецтарҙан ҡасып, беҙҙең яҡҡа сыҡҡан сағы йыш була торғайны). Бара торғас, уны кешегә оҡшата башланыҡ. Бәләкәй генә кеше булырға тейеш был. Бер-бер хәл булһа тип, Николай граната алды. Ләкин бер төрлө лә хәл булманы. Беҙҙең окоп янына бәләкәс кенә ҡыҙ бала килеп баҫты. Уның өҫтөндә туҙып бөткән бишмәт, башына ҡара сепрәк уралған. Бала – ҡурҡыуҙанмы, әллә өшөүҙәнме – өҙлөкһөҙ ҡалтырана. Ул иламай, миңә ҡарап тик тора. Мин ҡыҙҙы күтәреп окопҡа төшөрҙөм. Ҡайышымды систем, шинелдең ҡаптырмаларын ысҡындырҙым һәм ҡалтыранып торған баланы йылы ҡуйыныма һалдым.

Был ҡыҙҙың килеүен күҙәтеп тороусы башҡа һуғышсылар ҙа беҙҙең окоп тирәһенә йыйылдылар. Балаға төрлө һорауҙар бирә башланылар.

– Исемең нисек, ҡыҙым?

– Әсәйең ҡайҙа?

Тик был ваҡыт теге яҡтан килгән кескәй ҡунаҡ минең ҡуйынымда мыш-мыш килеп, йылынып, йоҡлай ине.

Бала тиҙ генә уянманы. Ләкин уның йоҡоһо тыныс түгел ине. Ул йыш ҡына йә һиҫкәнеп дерт итеп китә, йә ыңғырашып ҡуя. Ярты төн ауышҡас, ҡыҙ уянып китте.

Мин шунда уҡ кеҫәмдән шәкәр киҫәге алып, уның ауыҙына ҡаптырҙым. Ул бер нимә лә өндәшмәне. Беҙ кеҫә фонары менән баланың йөҙөн яҡтырттыҡ. Уның күҙҙәре ҙур асылған, ләкин йөҙөндә ҡурҡыу эҙе юҡ ине.

– Исемең нисек һинең, ҡыҙым?

– Онотманым. Оксана.

– Минең ҡыҙым булаһыңмы? – тип һораным мин.

– Мин һинең ҡыҙың инде. Фашисты үлтер, атай. Фашист алама…

Мин уны күкрәгемә ҡыҫтым. Асыу ҙа, ҡайғы ла, ярһыу ҙа тоҡанды минең эсемдә. Ошо баланы күтәреп, фронт буйлап ҡысҡырып уҙғым килде минең: «Тиҙерәк ҡотҡарайыҡ балаларҙы, тиҙерәк, иптәштәр!»

Николай окопта ҡалды. Мин, Оксананы күтәреп, штабҡа киттем. Штабта баланан шуны белдек: Оксананың әсәһе, кескәй ҡыҙын күтәреп, ҙурыраҡын етәкләп, беҙҙең яҡҡа сығып йүгергән. Немецтар башта һиҙмәй ҡалғандар. Былар ярты юлға еткәс, фашистар миномёттан ата башлағандар. Әсәгә мина ярсығы тейгән, ҡул балаһын ҡосаҡлап, ул үлеп ҡалған. Ә Оксана йүгереүҙән туҡтамай, беҙҙең окоп янына килеп еткән.

Оксананы штаб йортонда йоҡларға һалдыҡ. Ул шунда уҡ күҙҙәрен йомдо.

Әсә менән баланың кәүҙәһен табып ҡайтырға командир приказ бирҙе.

Беҙ ике иптәш менән таң алдынан уларҙың мәйетен табып алып ҡайттыҡ. Оксанаға күрһәтмәй генә, бер тау битендә ерләп ҡуйҙыҡ.

Оксананы мин үҙемдең ҡыҙым итәм, тинем командирға. Ул ҡаршы килмәне…

Иртә менән, машинаға ултырып, мин Оксананы тылдағы яҡын ҡалаға, етем балалар йортона илтеп ҡуйҙым.

Фронтҡа кире ҡайтҡас, Оксананың тәрбиәселәре менән хат яҙышып торҙом, ошоларҙың бөтәһен дә әйтеп, әсәйеңә хат яҙҙым. Ул беҙҙең ҡыҙыбыҙ булыуға бик шатланды. Тик шул яҙҙы ғына Оксананы барып ала алманы. Юлдар бик мәшәҡәтле ине әле ул замандарҙа.

Икенсе ҡышты инде беҙ алыҫ киттек, дошманды үҙ ерендә туҡмай башланыҡ. Шул осорҙа әсәйең һинең туғаныңды алыҫ ҡаланан барып алды. Һин быныһын үҙең дә беләһең.

Петро ағайың тураһында һин уның үҙенән һөйләт. Мин бары шуны ғына әйтәм: ул, һуғыш башланғас та, фронтҡа киткән. Дошманды еңгәс, тыуған ауылына ҡайтҡан. Ләкин уның өйө яндырылған, ҡатыны менән балалары хәбәрһеҙ юйылған булған. Шул тирәләге бөтә ҡалаларҙы, ауылдарҙы йөрөп сыҡҡан ул. Бер ҡалалағы балалар йортонда уның ҙур ҡыҙы Оксана Куценконың Батыршина булып, Башҡортостанға киткәнен әйткәндәр. Бына шунан һуң инде Петро ағайың беҙгә килеп сыҡты. Әсәйең менән икәүләп бик үтенеп һорағас, ул беҙҙең туғаныбыҙ булып йәшәргә бөтөнләйгә бында ҡалды. Бына һиңә, улым, бер әкиәт.

Был ысын әкиәт, атай!

Атай аҡрын ғына мыйығын һыйпап ала.

Мин хәҙер уны тағы ла нығыраҡ яратам – туғаным булғаны өсөн дә, шул тиклем аҙаптар күргәне өсөн дә, яратам мин Оксананы. Мин, уны һағынып, ауыл яғына ҡарайым.

Ана улар Петро ағай менән икәү, тыҡрыҡтан сығып беҙгә табан киләләр. Петро ағай һеңлемде етәкләп алған. Оксананың сәсендәге ҡыҙыл таҫманың елберләгәне алыҫтан уҡ күренеп тора. Ә тегендә, түбән остағы клуб башында, ҡыҙыл флаг ярһып-ярһып талпына. Беҙ үҫкәс, Оксана менән икебеҙ ҙә ошондай ҙур флагтарҙы күтәреп алып китербеҙ әле».

Икенсе баҫмаға (1953) төҙәтмәләр индерелгән: тәүге китаптағы «Һөйләйемме һеҙгә», «Атай һөйләй» бүлексәләре төшөрөп ҡалдырылған, яңы бүлектәр өҫтәлгән.

Рус телендә бер нисә тапҡыр баҫылған. Дөйөм тиражы — ярты миллион ярым экземпляр (Москва, «Детгиз», 1952, 1953, 1954, 1965; Уфа (2004); украин (1953), ҡытай (1953), татар (1954), сыуаш (1954), ҡаҙаҡ (1955), уйғыр (1955), грузин (1955), үзбәк (1956), латыш (1961), төрөкмән (1961, 1990), ҡырғыҙ (1958), молдован (1962) һәм башҡа телдәрҙә донъя күргән.

Рецензиялар: Г. Бассалыго. Радость нашего дома. — «Октябрь», 1952, № 12; Г. Гулия. Повесть для детей. — «Литературная газета», 1952, 11 декабря; Б. Петров. Дружба маленьких. — «Учительская газета», 1953, 15 апреля; Е. Городецкая. Книга, воспитывающая чувства интернационализма — «Семья и школа», 1953, № 4.

Өс таған

«Пионер», 1961, № 8, 9, 10, 11; 1962, № 1, 3, 4, 6, 7. «Өс таған» — 62.

Рус (1964, 1978), литва (1964), ҡаҙаҡ (1965), татар (1966), грузин (1966), тажик (1966), молдован (1967) һ. б. телдәрҙә донъя күргән.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры (1985, режиссеры Р. Хәлилов, рәссамы Н. Байбурин, композиторы А. Березовский).

Рецензиялар: Н. Панфилов. Уроки нравственности: М. Карим. «Таганок». — «Учитель Башкортостана», 2004, № 10.

Малайҙар

«Пионер», 1953, № 10. «Әҫәрҙәр» — 72.

Айыу мажараһы

«Пионер», 1954, № 11. Әҫәрҙәр — 72.

ӘЛФИӘ ХИКӘЙӘЛӘРЕ

Сыйырсыҡ балаһы

«21.06.60». «Пионер, «1960, № 9. «Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» — 65. «Радость нашего дома» — 2011.

Ҡайын урманында

«22.06.60». «Пионер», 1960, № 9. «Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» — 65. «Радость нашего дома» — 2011.

«Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?»

«Пионер», 1964, № 1. «Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» — 65. «Радость нашего дома» — 2011.

Ҡыш бабай бәләкәй саҡта

«Пионер», 1964, № 1. «Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» — 65. «Радость нашего дома» — 2011.

ХИКӘЙӘТТӘР, ӘКИӘТТӘР

Мылтыҡтан атмаҫҡа

«Пионер», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

Журналдағы яҙыу: «Айыу балаларын да, әҙәм балаларын да дәһшәтле шартлауҙар татлы йоҡоларынан уятмаһын тигән теләк менән яҙҙым мин был әкиәтте — М. К. 18. III — 85».

Әҫәр шағирҙың ейәне Тимербулатҡа арналған.

Ялҡау бал ҡорто

«6.09.91. Йоматау». «Беҙҙең өйҙөң йәме» — 2003. «Радость нашего дома» — 2011.

Маҡтансыҡ борсаҡ

«30.01.92. Переделкино». «Аҡбуҙат», 1992, № 7. «Беҙҙең өйҙөң йәме» — 2003. «Радость нашего дома» — 2011.

Ҡунаҡ беснәк

«29.02.92. Переделкино». «Аҡбуҙат», 1992, № 9. «Әҫәрҙәр» — 98. «Радость нашего дома» — 2011.

«Көндәлектәр»ҙәге яҙыу: «Ҡунаҡ беснәк» тигән әкиәт яҙғайным. Шуны «Аҡбуҙат»ҡа ебәрҙем. Бәләкәс балалар өсөн яҙыуҙан айырыуса йәм табам. Уны балаларына уҡыған кешеләр үҙҙәре лә минең яҙғанға ҡағыла бит әле. Остоҡ ҡына изгелек эшләгән кеүек һиҙҙем үҙемде. — 1.03.92».

Ҡарлуғас балаһы

«23.07.92. Йоматау». «Аҡбуҙат», 1992, № 12. «Беҙҙең өйҙөң йәме» — 2003. «Радость нашего дома» — 2011.

Һаҡсы һайыҫҡан

«2.10.92. Йоматау». «Аҡбуҙат», 1993, № 2003. «Әҫәрҙәр — 98». «Радость нашего дома» — 2011.

Яңы йыл теләктәре

«Әҫәрҙәр — 98». «Радость нашего дома» — 2011.

Аҡ сабаҡ

«10.03.93. Переделкино». «Аҡбуҙат», 1993, № 6. «Әҫәрҙәр» — 98. «Радость нашего дома» — 2011.

Баҡа менән бәрәс

«22.03.94. «Аҡбуҙат», 1994, № 7. «Әҫәрҙәр — 98». «Радость нашего дома» — 2011.

Билсән

«Аҡбуҙат», 1994, № 7. «Беҙҙең өйҙөң йәме» — 2003. «Радость нашего дома» — 2011.

Ике һандуғас

«Аҡбуҙат», 1994, № 10. «Әҫәрҙәр» — 98. «Радость нашего дома» — 2011.

Тылсымлы көҙгө

«12.02.04». «Аҡбуҙат», 2004, № 4.

Япраҡ менән ҡырмыҫҡа

«Аҡбуҙат», 2004, № 10». Әҫәрҙәр» — 98. «Радость нашего дома» — 2011.

ХИКӘЙӘЛӘР

Мунса ташы

«9.10.91. Йоматау». «Һәнәк», 1992, № 7. «Әҫәрҙәр» — 98.

Бөжәк апа

«5.03.92. Переделкино». «Әҫәрҙәр» — 97.

Тымау

«Әҫәрҙәр» — 98.

Алтын шәүлә (легенда)

«29.01.94. Переделкино». «Әҫәрҙәр» — 98. «Көндәлектәр»ҙәге яҙыу: «Алтын шәүлә» тигән легенда яҙҙым. Мусаға уҡыным. Оҡшаны буғай — 30.01.94».

Йәләлетдин атай

«16.02.94. Переделкино». «Ағиҙел», 1994, № 10. «Әҫәрҙәр» — 98.

«Көндәлектәр»ҙәге яҙыу: «Йәләлетдин атай» тигән ҙур ғына хикәйәне яҙып бөтөрҙөм. Теләп яҙҙым, яратып яҙҙым, хатта илһамланып яҙҙым. Күҙ алдымда гел Михаил Алексеевич Зайцев торҙо. Мин уның бала сағын тасуирларға тырыштым. Детдомдағы үҙҙәренең тәрбиәсеһе тураһында бынан 10 йыл әүәлерәк һөйләгәйне — 18.02.94».

М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры — 2007, 23—24 ноябрь. И. Кәримов инсценировкаһы. Режиссеры И. Муллабаев, музыкаль яҡтан биҙәүсеһе У. Иҙелбаев, рәссамы Т. Еникеев.

Төп ролдәрҙә: БР-ҙың атҡаҙанған артисы Мәғәфүр Усманов (Йәләлетдин), Ф. Бикбаев (Миша Ҡуянов), Р. Абдуллин (Урал Урманов), БР-ҙың атҡаҙанған артистары И. Йәһүҙин (Балалар йорто директоры),

Мосолмандар уянды

«5.08.94». «Һәнәк», 1996, № 11. «Әҫәрҙәр» — 98.

Иҫтәлек кенә

«7.08.03». «Башҡортостан ҡыҙы», 2003, № 10. «Республика Башкортостан», 2005, 29 октября.

Любовь удава

«Истоки»ҙа баҫылған (2003, 3 сентябрь). Авторҙың исем-шәрифе күрһәтелмәгән.

Сердобольный Ташбулат

Шағир архивынан.

Разговор тележурналистов

Шағир архивынан.

Әбүбәкер

«15 июль, 2004 йыл». «Башҡортостан ҡыҙы», 2004, № 10. «Республика Башкортостан», 2005, 20 августа. «Дружба народов», 2005, № 12.

«Көндәлектәр»ҙәге яҙыу: «1950 йылдың йәйе ине. Өргөн ауылының иҫәре Әбүбәкер менән күл уртаһында кәмәлә балыҡ ҡармаҡлап ултырабыҙ. Ҡытлыҡ йыл. Тамаҡ

яғы самалы. Әбүбәкер иһә ялан тәпәй генә йөрөй. Аяҡ кейеме юҡ. Уға 20 йәш. Мин әйтәм:

— Әбүбәкер, беләһеңме, нимә ул коммунизм?

— Шуны белмәгәс...

— Коммунизм булғас, нимә эшләйәсәкһең?

— Ашайым да йоҡлайым. Хатта балыҡ ҡармаҡлап та йонсомаясаҡмын.

Мин хәҙер Әбүбәкер коммунизмында йәшәйем: ашайым, йоҡлайым, эшләгән эшем юҡ тиерлек. — 21.04.2001».

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Драмалар

Диктаторға ат бирегеҙ! . . . 9
Йәйәүле Мәхмүт . . . 65
Киске табын . . . 114

Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр

Әтәстең башынан үткәндәре *(пьеса)* . . . 159
Беҙҙең өйҙөң йәме *(повесть)* . . . 172
Өс таған *(повесть)* . . . 245
Малайҙар . . . 326
Айыу мажараһы . . . 332

Әлфиә хикәйәләре

Сыйырсыҡ балаһы . . . 336
Ҡайын урманында . . . 338
«Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?» . . . 340
Ҡыш бабай бәләкәй саҡта . . . 341

Хикәйәттәр, әкиәттәр

Мылтыҡтан атмаҫҡа! . . . 347
Ялҡау бал ҡорто . . . 350
Маҡтансыҡ борсаҡ . . . 350
Ҡунаҡ беснәк . . . 352
Ҡарлуғас балаһы . . . 353
Һаҡсы һайыҫҡан . . . 355
Яңы йыл теләктәре . . . 357
Аҡ сабаҡ . . . 358
Баҡа менән бәрәс . . . 360
Билсән . . . 360
Ике һандуғас . . . 363
Тылсымлы күҙгө . . . 364
Япраҡ менән ҡырмыҫҡа . . . 365

Хикәйәләр

Мунса ташы . . . 369
Бөжәк апа . . . 370
Тымау . . . 376
Алтын шәүлә *(легенда)* . . . 380
Йәләлетдин атай . . . 387
Мосолмандар уянды . . . 406
Иҫтәлек кенә... . . . 410
Любовь удава . . . 417
Сердобольный Ташбулат . . . 417
Разговор тележурналистов . . . 418
Әбүбәкер . . . 419

Аңлатмалар

Мостай Кәрим: балаларға — ихласлыҡ, хәҡиҡәт, тоғролоҡ . . . 430
Ҡыҫҡартыуҙар . . . 438
Ваҡытлы матбуғатта . . . 439
Драмалар . . . 440
Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр . . . 442
Әлфиә хикәйәләре . . . 450
Хикәйәттәр, әкиәттәр . . . 451
Хикәйәләр . . . 452

Литературно-художественное издание

КАРИМОВ Мустафа Сафич
(Мустай Карим)

СОЧИНЕНИЯ

IV том

Драмы, повести, рассказы, сказки

(на башкирском языке)

Әҙәби-нәфис баҫма

КӘРИМОВ Мостафа Сафа улы

ӘҪӘРҘӘР

IV том

Драмалар, повестар, хикәйәләр, әкиәттәр

Мөхәррирҙәре *З. Ш. Ҡарабаева, Э. М. Нигмәтуллина*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *А. Р. Искужина,*
Л. Ф. Саниева, М. Р. Шәрипова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.10.13. Форматы 84x108 $^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 23,94. Шартлы буяу отт. 23,94. Иҫәп-баҫма таб. 17,26. Тиражы 2000 дана. Заказ 131693.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы. 450001, Өфө. Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының
«Белая река» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Салауат Юлаев проспекты, 55.